БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
СОЦИАЛЬ-ГУМАНИТАР ФӘНДӘР ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР БҮЛЕГЕ

Ә. Х. Хәбиров

БЫУАТТАР ҠАУЫШҠАНДА

2 ТОМ

Өфө
Гилем
2018

УДК 82
ББК 83.3(2Рәс.Баш)
Х11

Баҫма БР ФА ғилми тикшеренеүҙәрҙе яҡлау Фонды булышлығы менән тормошҡа ашырыла

Рецензенттар:
М. Х. Нәҙерғолов, филология фәндәре докторы
Г. Н. Ҡасҡынова, филология фәндәре кандидаты

Хәбиров, Ә. Х.

Х11 Быуаттар ҡауышҡанда. 2 томда. 2-се том : әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, йыллыҡ күҙәтеүҙәр, ижади портреттар. – Өфө : Башҡ. энцикл., 2018. – 520 бит.

ISBN 978-5-88185-402-7
ISBN 978-5-88185-404-1 (т. 2)

Әҙәбиәт белгесе һәм тәнҡитсе, Назар Нәжми һәм Фәтих Кәрим исемендәге премиялар лауреаты Әнғәм Хәбировтың «Быуаттар ҡауышҡанда» тип аталған хеҙмәтенең 2-се томына уның яңы быуаттың тәүге ун биш йылында яҙылған һәм төрлө баҫмаларҙа донъя күргән әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, шиғриәтебеҙҙең торошон һәм үҫешен яҡтыртҡан күҙәтеүҙәре, айырым шағирҙарҙың ижадын күҙаллауға бағышланған әҙәби портреттары тупланды. Автор был томды ла республикабыҙ мәктәптәрендә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыусы коллегаларына адреслай.

УДК 82
ББК 83.3(2Рәс.Баш)

ISBN 978-5-88185-402-7
ISBN 978-5-88185-404-1 (т. 2)

© Хәбиров Ә. Х., 2018
© «Башҡорт энциклопедияһы», 2018

НАЗАР НӘЖМИ ИЖАДЫН ФӘННИ НИГЕҘҘӘ ӨЙРӘНЕҮ МӘСЬӘЛӘҺЕНӘ ҠАРАТА

Яу яланында ятып ҡалған замандашы, ҡәләмдәше, фекерҙәше, дуҫы Мәлих Харис иҫтәлегенә арнап яҙған «Йыр тураһында баллада» (1962) тигән әҫәрен Назар Нәжми бындай юлдар менән тамамлағайны:

Ята шағир үлән өҫтөндә,
Үләндәрҙе һыйпап иҫә ел.
Эй ғүмерҙең һуңғы сәғәте!..
Оса ваҡыт,
оса йыр,
оса Ер.

Ошо юлдар ҡағыҙ битенә яткандан һуң утыҙ ете йыл үткәс, «Йыр тураһында баллада»ның авторы ла, уның геройы шикелле, Ваҡыт ҡарамағына күсте. Беҙгә инә, ерҙәгелергә, шағирҙың бай ижад мираҫы ҡалды. Уны барлау, ниндәйҙер бер тәртипкә һалыу һәм ентекләп өйрәнеү – әҙәбиәт йәмғәтселегенең мөкәддәс бурысы.

Хәбибназар Нәжметдиновтың шиғырҙары, хикәйәләре, очерктары, әҙәбиәт мәсьәләләре хаҡындағы кәңәштәре, йәшлек романтикаһы менән һуғарылған публицистик сығыштары республика матбуғатында (гәзит-журнал биттәрендә, радио тапшырыуҙарында, әҙәби альманахтарҙа) һүғышҡа тиклем үк күренә башланы. Мәңге һаҡланыр өсөн хәҙер инде тарих битенә инеп киткән «Назар Нәжми» псевдонимы ла уға Сәләх Кулибай фатихаһы менән ошо осорҙа тағылды.

Ләкин ижадсының артабанғы юлы һис тә Нева проспектына оҡшап торманы. «Тамсылар» тип аталған тәүге йыйынтығы донъя күргәндә уның утыҙ икеһе тулып уҙғайны инде. Һуңыраҡ, 1971 йылда, Фәүзиә Рәхимғоловаға арналған бер мәкәләһендә, яҙмышының асылына шағир үҙе лә күпмелер асыҡлыҡ индерҙе һымаҡ. «Беҙ бит әҙәбиәткә, – тип яҙҙы ул ошо мәкәләһендә, – оҙаҡ, бик оҙаҡ һәрмәнеп-һәрмәнеп кидлек. Беҙгә ялт итеп кабынырға һәм ялт итеп янып торорға мөмкин булманы. Белмәйем, тәбиғәттең биргәнеме әллә заманмы шундай итте. Барҙыр

инде, икеһе лә барҙыр». (Н. Нәжми. Кем уйлаған... Өфө, 1983, 165–166 биттәр).

Ленинград тәнҡитсеһе Дм. Хренков был йәһәттән бик хаҡлы ине. «Назар Нәжми, – тип яҙҙы ул бынан ҡырҡ йыл самаһы элегерәк, – Мостай Кәримдең ҡорҙашы. Уларҙың биографиялары бер төрлө тиерлек, ә бына ижади яҙмыштары төрлөсәрәк булды. Мостай Кәримдең һәләте ҡапыл ғына асылды. Бырау нефть ҡатламына барып еткәс, ер аҫты тәрәнлегенән атылып сыҡҡан нефть һымағыраҡ. Назарҙыҡы иһә озаҡҡа һуҙылған яҙға оҡшап торҙо. Ул, ҡалын боҙ ҡабығы аҫтында аҡрынлап йыйылып, бөтә киңлегенә һәм көсөнә йәйелеп китер сәғәтен көтөп ятҡан ҡар һыуын хәтерләтте». (Дм. Хренков. Мустай Карим. Литературный портрет. «Сов. Россия», 1969, 83 бит).

Әйтергә кәрәк, «Тамсылар» Н. Нәжмиҙең ижадына ғына түгел, уның тураһындағы тәнҡиткә лә нигеҙ ташын һалыусы китап булды. Типография буяуы еҫенән арынырға өлгөргәндерме-юҡтырмы, уның хаҡында республикала абруй ҡаҙанған «Красная Башкирия» һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзиттәрендә бер-бер артлы тиерлек зур күләмле ике мәҡәлә баҫылып сыҡты. Уларҙың рус телендәгеһен – Ғәйнан Әмири, башҡортсаһын – Сәләх Кулибай яҙғайны. Шағирҙың өлкән ҡәләмдәштәре китапҡа үҙҙәренсә ғәҙел баһа бирергә тырышҡандар. Һуңыраҡ был китапҡа профессиональ тәнҡитселәр ҙә әйләнеп ҡайтҡыланылар.

«Тамсылар», ысынлап та, ҡалын боҙ аҫтында үҙ сәғәтен көтөп ятҡан ҡар һыуын хәтерләтте. Тап ошо мәлдә шағирҙың ижад биографияһында тағы бер ҡыҙыҡлы хәл булды: тәүге китабы нәшер итергә әҙерләнеп ятҡанда, Назар Нәжми, ең һыҙғанып, сәхнә әҫәрҙәре яҙырға тотона. Шағирҙың драматургияһын «Яҙғы йыр» тигән пьеса асып ебәрҙе. Был пьеса буйынса Башҡорт дәүләт академия драма театрында ҡуйылған спектаклдең премьераһы 1951 йылдың апрелендә уҙҙы. «Тамсылар» һымаҡ, «Яҙғы йыр» ҙа (пьеса ла, спектакль дә) Өфө тамашасылары һәм әҙәбиәт йәмәғәтселеге арыһында шаҡтай ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Нәжибәк Хафизов, Кирәй Мәргән, Әнүәр Бикҡәнтәвтең «Кызыл таң», «Ҡыҙыл Башҡортостан», «Красная Башкирия» гәзиттәрендә донъя күргән мәҡәләрендә Н. Нәжмиҙең драматургия өлкәһендә яһаған тәүге аҙымы ярайһы ғына уңышлы һәм өмөтлө күренә, тип билдәләнде. Спектаклде Башҡорт дәүләт академия драма театрының ошо йылдың йәйендә Ташкентта үткән гастрольдәре репертуарына индереүҙәре лә юҡтан ғына булмағандыр, күрәһең. Һәр ваҡыттағыса, пьесаның да, спектакльдең дә етешһеҙлектәре лә табылмай ҡалманы, әлбиттә.

Илленсе йылдар башында, Назар Нәжми, шиғриәтте ташлап, башкөллө драматургия юлын һайларға йыйына, ахырыһы, тип тә уйлап ҡуйырға мөмкин ине. Сөнки «Яҙғы йыр» тирәһендә йәйелгән ҡыҙыу бәхәстәр һүрелергә лә өлөгөрмәне, шул уҡ театрҙа шағирҙың «Хуш, Хәйруш!» һәм «Саҡырылмаған ҡунаҡ» тигән пьесалары сәхнәләштерелде. «Хуш, Хәйруш!» нисектәр тыныс ҡына, артыҡ һүҙ ҡуйыртмайынса ғына үтеп китте. Ә бына «Саҡырылмаған ҡунаҡ» ҡәләмдәштәренең генә түгел, шул осорҙағы хакимиәт башлыҡтарының да ҡаты тәнҡитенә эләкте, хатта сәхнәнән төшөрөлдө. Бигерәк тә Шакир Насыров менән Ибраһим Абдуллиндың «Кызыл таң» һәм «Советская Башкирия» гәзиттәрендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләләре үҙҙәренең үткерлеге һәм тура һүҙлелеге менән айырылып тора ине.

Бәхеткә күрә, Н. Нәжми шиғриәткә хыянат итмәне. Дөрөҫ, сәхнә әҫәрҙәре яҙыуҙан да туҡтаманы. Шул уҡ йылдарҙа ул «Егет егетлеген итә», «Гармунсы дуҫ» тигән пьесаларын донъяға сығарҙы. Тәнҡит һүҙенә лә ҡолаҡ һалды. Ҡайһы бер пьесаларын ҡайтанан эшләне, ә ҡайһы береһенән бөтөнләй баш кисте. Ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем шағир әҙәбиәттең ошондай ауыр ике йөгөн берҙәй тартты. Быға ул үҙе лә күпмелер асыҡлыҡ индерҙе. 1966 йылда донъя күргән пьесалар йыйынтығын автор бындай һүҙҙәр менән асып ебәргәйне: «Мин шиғыр яҙыусы. Үҙемдең көсөмдө, һәр хәлдә, шиғырҙа күберәк тоям, шулай ҙа киләсәктә драма әҫәре яҙып ҡарарға һәм әйтәһе һүҙҙәремде әйтергә иҫәп юҡ түгел». (Н. Нәжми. Пьесалар. Өфө, 1966, 3 бит).

Ғәмәлдә, ул шулай килеп сыҡты ла. Етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа Нәжми-драматург икенсе һулышын алғандай булды: уның «Күршеләргә ҡунаҡ килгән», «Ҡыңғыраулы дуға», «Әтәмбәй» тигән пьесалары – быға асыҡ дәлил. Был мәҡәләнең авторына адресланған бер хатында, шағир, яҙып бөтөлгән, ләкин әлегә кеше күҙенә күрһәтелмәгән сәхнә әҫәре барлығы хакында ла һүҙ тишеп ҡуйғайны. Хаҡ булғандыр: «Атай йорто» исемле китапҡа яҙған баш һүҙендә Хәким Ғиләжев та уны ундан артыҡ драма авторы, тип, юҡҡа ғына әйтмәгәндер.

Ғәжәип хәл: исеме әҙәбиәт майҙанында яңыраҡ ҡына ҡаҙаныш яулай башлаған шағирҙың «Лирика» тип аталған икенсе йыйынтығы Мәскәүҙә сыға. Хәйер, быныҡ үҙ сәбәптәре бар. 1951 йылдың мартында Н. Нәжми йәш яҙыусыларҙың Мәскәүҙә үткәрелгән II Бөтә Союз ҡәңәшмәһендә ҡатнаша. Уның ижады Сергей Смирнов етәкселек иткән семинарҙа тикшерелә. Шунда Н. Нәжми үҙенең тәүге тәржемәселәрен (С. Северцев, Н. Глазков, В. Журавлёв, В. Гончаров,

Л. Шкавро, Н. Павлович, С. Наровчатов) дә таба. Елена Николаевская, Ирина Снегова һәм Константин Ваншенкиндар иһә шағирҙың гүмерлек ижадташтарына әүерлеп китә. «Лирика» ла башлыса уларҙың хәстәрлеге арҡаһында донъя күргәндер, моғайын. «Тамсылар» шикелле, был йыйынтыҡ та әҙәбиәтселәр иғтибарынан ситтә ҡалманы. Улай ғына ла түгел, М. Ғафуров һәм Ғ. Рамазанов үҙҙәренең ҡараштары менән республика матбуғаты биттәрендә уртаҡлашһалар, М. Максимов атлы шағир «Литературная газета»ла сығыш яһаны. Шулай итеп, сәғәтен оҙайлы көтөп ятҡан «ҡар һыуы» ил күләменә юл яра башлай. Төрлө йылдарҙа Мәскәүҙә һәм Өфөлә рус телендә баҫылып сыҡҡан «Мои звёзды», «Открывающий ворота», «Осенние тропы», «Берёзы», «Вслушиваясь в тишину», «Спасибо этому дому», «Всегда под звёздами», «Дыхание», «Сосед по огню» тигән китаптар иһә был ағымды уғата ла ҡеүәтләп, Н. Нәжми ижадын күп милләтле уҡыусының уртаҡ хазинаһына әйләндерҙе.

Юл ыңғайында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк. Рус телендә сыҡҡан китаптарға үҙ ваҡытында һәм төрлө баҫмаларҙа тейешле баһа бирелә барҙы. Бында ҡайһы бер авторҙарҙың исемдәрен дә атап китергә мөмкин. Ә. Хәкимов, Р. Хакимов, В. Баранов, Һ. Сәйетов, И. Сотников, Х. Зинатуллина, В. Смирнов, А. Филиппов, Р. Мостафин кеүек әҙәбиәтселәр, мәҫәлән, республика матбуғатында, шулай уҡ Свердловский ҡалаһында нәшер ителеп килгән «Урал» журналында Н. Нәжми шиғриәтенең тематикаһын һәм уның айырым үҙенсәлектәрен асыҡларға тырыштылар. Үҙәк матбуғат («Знамя», «Наш современник» журналдары, «Литературная газета», «Советская Россия», «Литературная Россия» гәзиттәре) биттәрендә баҫылып сыҡҡан А. Глезер, Л. Аннинский, Е. Друц, И. Ростовцева, И. Денисова, И. Левшин һәм башҡаларҙың мәҡәләләрендә иһә Н. Нәжми ижадына Бөтә Союз һәм Бөтә Рәсәй әҙәбиәте алдында торған талаптар юғарылығынан ҡараш ташланды.

Назар Нәжми ижады туғандаш Татарстанда ла ҡыҙыҡһыныу уятты. 1962 йылда уҡ әле Ҡазанда уның «Сәю сүзләре» тигән йыйынтығы баҫылып сыға. Был йыйынтыҡҡа Г. Миңнуллин менән Г. Хужиевтың Өфө һәм Ҡазан матбуғатында донъя күргән мәҡәләләрендә ыңғай баһа бирелә. Теүәл ун йылдан һуң «Ут күрше» тип аталған икенсе йыйынтыҡ иһә татарҙың атаҡлы шағиры Сибәғәт Хәким яҙған «Бәхетле шагыйрләр» исемле баш һүҙ менән баҫылып сыға. «Сиңа барам» (1988) тигән өсөнсө йыйынтыҡ та иғтибарҙы йәлеп итерлек. Элеккеләренән айырмалы булараҡ, быныһына Н. Нәжмиҙең шиғырҙары ғына түгел, ҡайһы бер

поэмалары ла индерелгән. Гәрәй Рәхимдең «Моңнар шағыйре» тигән баш һүҙе лә йәм өҫтөнә йәм өҫтәгән. Шул да мәғлүм булһын: был китапарҙан тыш, Н. Нәжмиҙең шиғырҙары туғандаш республиканың гәзит-журналдарында ла йыш ҡына күренгеләп торҙо.

Әлбиттә, башҡорт шағиры Назар Нәжмиҙең китаптары күбеһенсә уның туған республикаһында – башкорт телендә сыҡты. Уларҙың яҙмыштары төрлөсәрәк булды. «Тулҡындар» тип аталған өсөнсө йыйынтыҡ, мәҫәлән, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына үтеп китте. Ә бына «Көтөлмәгән ямғыр» (1960), «Ер һәм йыр» (1962), «Шиғырҙар һәм поэмалар» (1964), «Көҙгө һуҡмаҡтар» (1967) тип аталғандары эҙһеҙ юғалманы. Улай ғына ла түгел, был йыйынтыҡтар профессиональ тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре «орбитаһына» инеп киттеләр. Әйтәйек, «Көтөлмәгән ямғыр»ҙы Ғ. Хөсәйенов ысын йөрәктән шатланып, хуплап ҡаршылаһа, «Ер һәм йыр» К. Әхмәтйәновтың күңеленә хуш килде. «Шиғырҙар һәм поэмалар» тураһында һөйләп тә тораһы юк: Мостай Кәрим яҙған «Шағир – юлда» тигән баш һүҙ уның яҙмышын алдан уҡ хәл итеп ҡуйҙы. Тап ошо осорҙа Назар Нәжми хаҡындағы фәндең нигеҙ таштары һалына башлай ҙа инде.

1968 йылда шағир үҙенең тәүге юбилейын – 50 йәшен билдәләй. Юбилей айҡанлы уны Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән наградлайҙар. Республиканың гәзит-журналдарында юбилярға арналған мәҡәләләр баҫыла. Шулар араһында Ғ. Рамазановтың «Ағиҙел»дә донъя күргән «Шиғриәт ҡапҡаларын асыусы» тигәне айырылып торҙо: ул шағирҙың тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан кескенә очеркка тартым ине. Үкенескә күрә, байрам тантанаһына ҡором яғыусылар ҙа табылманы түгел. Юбилейға бағышлап сығарылған бай йөкмәткеле һәм күләмле «Һайланма әҫәрҙәр» китабының «Ҡурҡам!», «Бөрө! Бөрө!» тигән шиғырҙар баҫылған биттәрен ҡырҡып алып, улар урынына тупаҫ итеп яңыларын йәбештереп ҡуйҙылар. Китаптаң эстетик йөҙөн мәсхәрәләү – бер хәл, шағир йөрәгенә һалынған яра нимәгә бәрәбәр булды икән?

Бәхеткә күрә, артабанғы осор – бигерәк тә илле менән алтмыш арауығы – Н. Нәжми өсөн иң ырыҫлы, иң бәрәкәтле йылдар булғандыр, моғайын. Был осорҙа Өфө, Мәскәү, Ҡазан ҡалаларында шағирҙың ун бер китабы баҫылып сыға. Уларҙан тыш, Өфөлә «Һайланма әҫәрҙәр»енең өс томлығы нәшер ителә. «Ҡарҙар яуа» (1971) йыйынтығы өсөн Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ була. Ниһайәт, 1974 йылда Ким Әхмәтйәновтың «Назар Нәжми – шиғыр оҫтаһы» тигән монографияһы донъя күрә.

Н. Нәжмиҙең илленe менән алтмышы араһында ирешкән бөтә ошо ҡаҙаныштарына 1978 йылда үткәрелгән юбилей саралары үҙенсә бер йомғаҡ яһап ҡуйҙы, тиһәк, һис тә хата булмаҫ. Ул ифрат ойошҡан төҫтә һәм юғары кимәлдә билдәләнә. Әүәлгесә – хөкүмәт наградаһы, был юлы – оторо ла дәрәжәлерәге. Әүәлгесә – гәзит-журнал биттәрендәге бихисап мәҡәләләр.

Әйткәндәй, Н. Нәжми ижадына арналған мәҡәләләр юбилейға тиклемге йылдаҙа ла байтаҡ яҙылды һәм баҫылып торҙо. Шулар араһында башҡорт һәм татар телендәгеләрҙән Ғ. Дәүләтов, С. Ҡудаш, Й. Солтанов, С. Сафуанов, Н. Мостафа, К. Кинйәбулатова, Ф. Мырҙаҡаев, М. Ғәйнуллин сығыштарын атап үтергә мөмкин. Юбилей осоронда иһә айырыуса Ғ. Хөсәйенов һәм К. Әхмәтйәнов әүҙемлек күрһәтте. Шуныһы мөһим, Ғ. Хөсәйенов менән К. Әхмәтйәнов мәҡәләләре лә, юбилей осоронда донъя күргән Ғәйнан Әмири, Суфиян Поварисов, Сибәғәт Хәким, Фәүзиә Рәхимғолова мәҡәләләре лә көрө маҡтауға түгел, ә шағир ижадының ниндәй ҙә булһа бирәй һыҙатын асыуға ҡоролғайны. Башҡорт дәүләт академия драма театрында «Ҡыңғыраулы дуға» пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдең февраль аҙағында үткән премьераһы юбилей тантанаһын тағы ла ҡеүәтләп ебәрҙе.

Н. Нәжмиҙең артабанғы тормошо һәм ижады һикһәненсе йылдарға ҡарай. Йәше олоғайып барһа ла, шағир был осорҙа ла ифрат егәрлекле эшләй. «Ғүмерлек йыр», «Аҡым», «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан» тигән поэмаларын тамамлай; «Тарафтар» (1980), «Кем уйлаған...» (1983), «Яҡты күҙҙә» (1984), «Аҡай йорто» (1988) тигән китаптарын сығара. (Был исемлеккә рус һәм татар телдәрендә сыҡҡандары индерелмәне, сөнки улар өҫтә һаналып киткәйнеләр инде). 1980 йылда шағирға «Әтәмбәй» тигән комедия буйынса ҡуйылған спектаклдең премьераһын күрергә насип була. 1982 йылдың аҙағында тағы бер ҡыуаныслы хәл: «Приглашение другу», «Дыхание», «Стороны» тигән китаптары өсөн уға РСФСР-ҙың М. Горький исемендәге Дәүләт премияһы бирелә. Ниһайәт, 1988 йылдың февралендә – сираттағы юбилей: республика йәмәғәтселеге шағирҙың 70 йәшен билдәләй.

Н. Нәжмиҙең туҡһанынсы йылдарҙағы ижады ла ярайһы ғына емешле булды. Ул тулы ҡанлы тормош менән йәшәне һәм ижад итте: бик күп шиғырҙар, әҙәби тәнҡит һәм публицистик мәҡәләләр, иҫтәлектәр яҙҙы, проза менән шөғөлләнергә лә ваҡыт тапты. Шағирҙың бөтә ошо ижади эшмәкәрлеге «Яҡынайыу» (1994), «Аҡ шишмә» (1997), «Күңел сәхифәләре» (1999) тигән китаптарына һыйҙы. Был осорҙа ул үҙенең ике

ҙур юбилейнын да – етмеш биш һәм һикһән йәшен – билдәләне. Етмеш бише тулыр алдынан уға күптән көтөлгән маҡтаулы исем бирелде һәм ул указлы халыҡ шағирына әйләнде. Ҡызғанысҡа ҡаршы, туҡһанынсы йылдар шағир тормошонда һәм ижадында һуңғы ун йыллыҡ булды.

Назар Нәжми хаҡындағы тәнҡит материалдарын барлағанда, шул күҙгә ташлана: шағирҙың етмеш, етмеш биш, һикһән йәшен билдәләгән осорҙа, профессиональ тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре менән бер ҡатарҙан, уның ҡәләмдәштәре, артистар, композиторҙар, музыка белгестәре үҙҙәренең тос һүҙҙәрен әйтә. Бында айырыуса Хәким Ғиләжев сығыштарын күрһәтеп үтергә кәрәк. Рим Хәсәнов, Рәшит Солтангәрәев, Марат Кәримов, Риф Мифтахов, Ноғман Мусин, Кәтибә Кинйәбулатова, Яныбай Хамматов, Фәридә Ҡудашева, Ибраһим Абдуллин, Шамил Кульбарисов, Әнгәм Атнабаев, Ғәзим Шафиков, Хәсән Назарҙың төрлө йылдарҙа донъя күргән мәҡәләләрендә Н. Нәжмиҙең ижады ғына түгел, уның кешелек сифаттары ла иғтибар үҙәгендә тора. Әгәр ошо мәҡәләләрҙе бер тынала уҡып сығһаң, беҙҙең алға шағирҙың буяуҙарға шаҡтай бай портреты килеп баҫыр ине.

Назар Нәжми хаҡында мәҡәләләр, ысынлап та, күп. Уларҙы үҙебеҙҙең матбуғатта ғына түгел, үҙәк матбуғатта ла, күрше-тирә матбуғатында ла күпләп табырға мөмкин. Характерҙары, тәғәйенләнештәре яғынан был мәҡәләләр – төрлө. Күберәге – шағирҙың теге йәки был китабына, йәиһә уның пьесаһы буйынса яңы ғына ҡуйылған спектаклгә бирелгән баһа. Арала очеркка тартымдары ла осрай. Ижади портретҡа һыҙаттар һымағыраҡ итеп яҙылғандары ла бар. Шағир ижадындағы берәй мәсьәләне дөйәмләштереберәк яҡтырҡандары ла күҙгә салына. Айырым поэмаларын тикшереүгә бағышланғандары ла етерлек. Н. Нәжми хәҙер – гәзит-журнал биттәрендә генә түгел, ғилми йыйынтыҡтарҙа ла, монографияларҙа, башҡорт әҙәбиәте тарихын күҙаллаған ҡалын-ҡалын китаптарҙа ла даими телгә алыныусы исем. Ләкин был, шағир тураһында әйтеләһе – әйтелгән, булғаны менән ҡәнәғәтләнергә мөмкин, тигән һүҙ түгел. Беҙҙең әҙәбиәт ғилемендә Назар Нәжми башлана ғына әле. Уның тураһында әйтеләһе һүҙҙәр – алда. Киләсәк быуын әҙәбиәтселәренең был уникаль күренешкә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырына шик-шөбһә юҡ.

Шағирҙың яҡты иҫтәлеге алдында торған бурыстарҙың иң тәүгеһе – уның тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан очерк китабы яҙыу. Бынан ҡырҡ-илле йылдар самаһы элек беҙҙең әҙәбиәт ғилеменә Ғ. Хөсәйенов башланғысында индерелгән был жанр һуңғы ваҡытта, нишләптер,

юғалып ҡалды, шикелле. Юғиһә, ғалимдың Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Дауыт Юлтый, Мостай Кәримдең тормошон һәм ижадын тикшереүгә арналған монографиялары әле лә үҙҙәренең ҡиммәтен юғалтмаған. Уларға башҡа ғалимдарыбыҙ тарафынан яҙылған Али Карнай, Мәжит Ғафури, Һәҙиә Дәүләтшина, Әнүәр Бикчәнтәев, Зәйнәб Биишева, Ғ. Сәләм, Шәйехзада Бабич, Имай Насыри, Ғәйнан Хәйри, Баязит Бикбай тураһындағылары килеп өҫтәлде. Минең уйымса, Назар Нәжми тураһындағы ошондай китапты яҙыр өсөн Ғ. Хөсәйеновтың «Шиғри тамсылар» тигән күләмле мәҡәләһе, йәиһә М. Хәмидуллинаның күп томлы «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»на индерелгән очеркы нигеҙ булып тора алырҙар ине. Дәрт итеп, был изге эшкә тотоноусы ғына кәрәк.

Күп көс һалыуҙы талап иткән һәм шунлыҡтан алыҫтараҡ ятҡан икенсе бурыс – Н. Нәжми әҫәрҙәренең академик баҫмаһын әҙерләү һәм нәшер итеү. Был – бик ҡатмарлы, мәшәҡәтле эш һәм уны шағирҙың архивына инмәй башҡарып сығыу мөмкин түгел. Фекермде раҫлау өсөн бер генә миҫал. 1994 йылда сыҡҡан «Яҡынайыу» исемле китабын автор «Мин үҙемә һәйкәл ҡуя алманым...» тигән шиғыр менән асып ебәргән. Ун алты ғына юлдан торған был әҫәр ифрат көслө яңғырай. Ул Пушкиндың «Һәйкәл»е менән полемика рәүешендәрәк яҙылған. Шиғыр аҫтына ҡуйылған йылдарға ҡарағанда, автор әҫәр өстөндә бик өҙаҡ эшләгән. Тимәк, уның варианттары булырға тейеш. Уларҙы табып, диҡҡәт менән тикшереү, бер-береһе менән сағыштырыу, шағирҙың ижад процесын уҡыусыға күрһәтеү – академик баҫманы әҙерләүселәрҙең намыҫ эше. Ҡабатлап әйтеүем: был – тик бер генә миҫал, ә ундай миҫалдар Н. Нәжмиҙең шиғриәтендә лә, драматургияһында ла күп булырға оҡшап тора.

Шағирҙың тормош һәм ижад юлы хаҡындағы китабын яҙған һәм уның әҫәрҙәренең академик баҫмаһын әҙерләгән осорҙа хәл ителәһе мәсьәләләр ҙә байтаҡ ҡына. Бында шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә иҫәп.

Өҫтә телгә алынған «Шиғри тамсылар» тигән мәҡәләһендә Ғайса Хөсәйенов, Н. Нәжми лирикаһына байҡау яһап, иғтибарға лайыҡлы төплө фекерҙәре менән уртаҡлашҡайны. Ләкин етмешенсе йылдар ахырында яҙылған был мәҡәләнән һуң, Н. Нәжми бик күп яңы шиғирҙар ижад итте һәм улар шағирҙың «Яҡты күҙҙә», «Атай йорто», «Яҡына – йыу», «Ак шишмә» исемле йыйынтыҡтарына инеп китте. Тимәк, хәҙер, үҙенән-үҙе, Н. Нәжми лирикаһына, уның вафатына тиклемге һуңғы егерме йылда ижад иткән шиғырҙарын да индереп, тулыраҡ һәм киңерәк

ҡараш ташлау кәрәклеге килеп тыуа. Минең уйымса, «Н. Нәжмиҙең мөхәббәт лирикаһы», «Н. Нәжмиҙең гражданлыҡ лирикаһы», «Н. Нәжмиҙең фәлсәфәүи лирикаһы», «Н. Нәжмиҙең пейзаж лирикаһы» тигән темалар әҙәбиәт белгестәренең иғтибарын йәлеп итә алыр ине. Өҫтәп шуны ла әйтке килә: Н. Нәжми лирикаһы халыҡ тел ижады менән тығыҙ бәйләнгән. Был – беренсенән. Икенсенән, унда шағир һәм шиғриәт темаһы ифрат ҙур урын алып тора. Өсөнсөнән, шағир әсә һәм ҡатын-ҡыҙ образына бик иғтибарлы булды. Дүртенсенән, Бөйөк Ватан һуғышы яугиры Н. Нәжмигә ошо һуғыш ҡалдырған яралар ғүмер буйы тынғылыҡ бирмәне. Ниһайәт, Назар Нәжми ҡәләмдәштәренә бағышлап яҙылған мини-портреттар галереяһына нигеҙ һалыусы булараҡ та хәтергә һеңеп ҡалды. Бөтә ошо темалар әҙәбиәт ғилемендә ентекләберәк тикшереүҙе көтә.

Талантлы ғалимыбыҙ Ким Әхмәтйәнов Назар Нәжмиҙе шиғыр оҫтаһы, тип атаны. Шул уҡ ваҡытта ул – поэма жанры оҫтаһы ла ине, тип өҫтәргә мөмкин. Был фекер Ғайса Хөсәйенов мәҡәләләрендә лә яңғырап китә. Уҡыусыға билдәле (шағирҙың архивында баҫылмай ятҡандары ла юҡ микән, тимәксемен) ун биш поэманың авторы, ысынлап та, үҙ һөнәрен яратып, уға бөтә көсөн һәм күңелен һалып эшләүсе оҫтаны хәтерләтә.

«Ҡайындар», «Капҡалар», «Йыр тураһында баллада» тигән поэмалар хаҡында үҙ ваҡытында һүҙ күп булды. Махсус рәүештә тикшерелмәһәләр ҙә, башҡорт, рус, татар телдәрендә донъя күргән мәҡәләләрҙә был әҫәрҙәр йыш иҫкә алынды. «Йоҡлаған бала янында», «Дуҫ тураһында ун бер йыр», «Шағир һәм шаһ», «Күлдәк», «Урал» тигәндәре лә кәм-хур булманы. Ә бына «Иблес», «Ғүмерлек йыр», «АҒым», «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан» тигәндәре әҙәбиәт ғилеме орбитаһына яйлабыраҡ инәләр. Шөкөр, хәҙер улар хаҡында ла әҙәби тәнҡиттә әҙме-күпме һүҙ әйтелде.

Ғөмүмән алғанда, Назар Нәжми поэмалалары – әҙәбиәт белгестәре өсөн иҫ киткес ҙур һәм үҙаллы тема. Әйтәйек, «Әсә», «Ҡайындар», «Йыр тураһында баллада», «Дуҫ тураһында ун бер йыр», «Күлдәк», «Ғүмерлек йыр», «АҒым», «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан» поэмаларында һуғыш нисек кәүҙәләндерелгән? «Капҡалар», «Йоҡлаған бала янында», «Ғүмерлек йыр», «АҒым», «Тере ҡан» поэмаларының сюжет-композиция структураһы ниҙән ғибәрәт? «Ҡайындар», «Дуҫ тураһында ун бер йыр», «Күлдәк» поэмаларында халыҡ ижады традициялары ниндәй кимәлдә сағылыш тапҡан? «Шағир һәм шаһ», «Иблес»,

«Урал» поэмаларының идея-эстетик концепцияһын нисек аңларға? «Бер туғандар», «Ике Зөләйха», «Тере ҡан» поэмаларында әхлаҡ проблемалары нисек хәл ителгән? Н. Нәжми поэмаларында лирик герой ниндәй урын биләп тора һәм ул әҫәрҙә ниндәй роль уйнай? Лирик герой менән автор тауышы араһында ниндәй нисбәтлек? Поэмаларҙың теле һәм стиле махсус тикшереүҙе талап итә, тиһәк, һис бер арттырыу булмаҫ. Уларҙаң һәр ҡайһыһы ябай халыҡ теле менән яҙылған, халыҡ телен байытырҙай ҡанатлы һүҙҙәрҙән һәм һүҙбәйләнештәрҙән үрелгән. Унда бер ниндәй ҙә ҡылансыҡланыу ҙа, тәкәбберлек тә юҡ. Бары тик кеше күңеленә үтеп инеү теләге генә бар.

Н. Нәжмиҙең лирикаһы һәм лиро-эпик әҫәрҙәре тирәһәндә һүҙ барғанда, уның шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы ла оноторға ярамаҫ. Ҡәләмдәштәре, композиторҙар, музыка белгестәре, тәнҡиселәр билдәләүенсә, Н. Нәжми – моңдар шағиры. Уның йыр жанрына бәйле бәхәстәрҙә ихлас ҡатнашыуы ла юҡтан ғына булмағандыр. Был жанрҙы шағир үҙенең әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә лә һәр ваҡыт яҡлап сыға. Уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙың күп булыуы ла, бәлки, шунан киләлер. Йыр авторҙары араһында исемдәре киң билдәле профессиональ композитортар ҙа (З. Исмәғилев, М. Вәлиев, Х. Әхмәтов, Ш. Кульбарисов, Н. Сабитов, Р. Хәсәнов һ.б.), үҙәшмәкәрҙәре лә бар. Ҡайһы бер шиғыр тексына хатта өсәр көй яҙылған. Ләкин был йырҙар әлегә тиклем бер урынға тупланмаған, әҙәбиәт һәм музыка белгестәре күҙлегенән сығып тикшерелмәгән. Тимәк, был тема ла үҙенең тикшереүселәрен көтә.

Н. Нәжмигә арналған ҡайһы бер мәҡәләләрҙә уның эстетик ҡараштары хаҡында һүҙ ҡуҙғатып ҡуйыла. Был һис тә ғәжәп түгел. Шағирҙың эстетик ҡараштары, ысынлап та, тәрән һәм күп яҡлы. Тик ул әлегә тиклем ныҡлап өйрәнелмәгән. Эстетика мәсьәләләре беҙҙең әҙәбиәт ғилемедә лә иғтибарҙан ситтәрәк ҡалып килгән өлкәләрҙең береһе һымаҡ. Хәйер, ул башҡа әҙәбиәттәрҙә лә әллә ни алға китмәгән, шикелле. Теге йәки был шағирҙың, йәиһә яҙыусының эстетикаһы тураһында һүҙ сыҡһа, гәҙәттә, дөйөм фразалар менән генә сикләнеүсәндәр.

Эстетик ҡараш, эстетик зауыҡ, эстетик идеал, эстетик хозурланыу – күктән төшкән бүләк түгел. Кеше күңеленә, психологияһына хас был сифаттар һәр кемдә үҙенсә ярала һәм үҫә. Н. Нәжми эстетикаһының тамырҙарын халыҡ ижады стихияһында, халыҡ педагогикаһы өлгөләрендә эҙләү – маҡсатҡа ярашлыраҡтыр. Шағирҙың «Кем уйлаған...» исемле автобиографик яҙмалары шулай ҡуша. Был яҙмаларҙы диҡҡәт менән уҡыған саҡта, буласаҡ шағирға

тәбиғәттән (тыумыштан) бирелгән сифаттарҙы ла күрмәй мөмкин түгел. Әйтәйек, ни өсөн ул сүбектәре тырпайып торғанды түгел, ә матур, ыҫпай итеп үрелгән сабатаны хуп күрә? Йәиһә, ни өсөн үҫмер малайҙың күҙе теләһә ниндәй санаға түгел, ә фәҡәт имән ағасынан киң табанлы итеп яһалғанына төшә?

Эстетик ҡараштар ҡатып ҡалған күренеш түгел. Тормош тәжрибәһе йоғонтоһонда улар үҙгәреп тә китергә мөмкин. Ошо йәһәттән Мостай Кәримдең үрҙә телгә алынған «Шағир – юлда» тигән мәҡәләһен яңынан иҫкә төшөрөү бик урынлы булыр. Минеште ауылының баҫыу ҡапҡаһын, Берлиндың Бранденбург ҡапҡаһын ҡайырып асҡан, хәҙер инде шиғриәттең тылсымлы ҡапҡаһын асыусы ир-егет Назар Нәжми тураһында мәҡәләнең авторы бына нимә яҙа:

«Бынан бер нисә йыл элек беҙ Назар Нәжми менән Кремль һарайында әүәл заман батшалар торған зиннәтле биналарҙың ишектәрен бер-бер артлы асып ҡарап йөрөнөк. Шағирҙы ундағы йыһаздар һәм биҙәктәр, аҫыл таштар һәм алтындар шаҡ ҡатырманы; ҡыҙыҡһындырҙы, ләкин шаҡ ҡатырманы. Уны башҡа тойғолар елкендерҙе. Был – беҙҙең Тыуған илебеҙ, заманыбыҙ, халҡыбыҙ менән ғорурланыу тойғолары ине.

– Сабата кейеп үҫкән аяҡтарыбыҙ ошо биҙәкле изәндәргә баҫып йөрөүгә, йәнәһе, беҙ маһайырға тейешбеҙҙер инде, – тине Назар. – Эш бит унда ғына түгел. Бөйөк замана беҙҙең халҡыбыҙҙың эйелгән башын юғары күтәртте, халыҡты халыҡ, кешене кеше итте. Ысынын ғына әйткәндә, мин бында тамаша ҡылып йөрөмәйем, үҙемдең байлығымды ҡарап, барлап йөрөйөм. Сөнки ошо аҫыл таш бөртөктәрендә, ошо ынйыларҙа минең олатайымдың да тир тамсылары бар. Моғайын, барҙыр».

Тимәк, сабый баланан ир–егеткә әйләнгәс, матурлыҡ менән гүзәллек тә башҡасараҡ ҡабул ителә башлаған. Бындай миҫалдарҙы шағир тормошонан һәм ижадынан күпләп килтерергә мәмкин. Н. Нәжмиҙең шиғырҙарында ла, поэмаларында ла, сәхнә әҫәрҙәрендә лә, публицистик сығыштарында ла, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә лә, мемуарҙарында ла уның эстетик ҡараштары ярылып ята. Уларҙы бөртөкләп йыйып, эстетика закондары һәм категориялары юғарылығынан ентекләп тикшерергә генә кәрәк. Әлбиттә, Белинский, Чернышевский, Добролюбов, Герцен, Плеханов һәм совет заманындағы ғалимдарҙың эстетика өлкәһендәге хеҙмәттәре онотолоп барған бер заманда был бурысты үтәп сығыу еңелдән булмаҫ. Әммә ҡулдан килмәҫлек тә түгел.

Был уйланыуҙарҙың тәүге яртыһында Н. Нәжмиҙең драматургияһы телгә алынғайны инде. Уға яңынан тукталып, бер нисә һүҙ әйтеп үтергә кәрәктер. Н. Нәжми пьесалары буйынса ҡуйылған бер генә спектакль дә тәнҡитселәр иғтибарынан ситтә ҡалманы. Ҡайһы берҙәренә хатта икешәр, өсәр рецензия яҙып баҫтырылды. Ә бына шағирҙың бөтә драматургияһына яһалған күҙәтеүҙе, йәиһә аналитик мәҡәләне бер ҙә хәтерләмәйем.

Ким Әхмәтйәнов Н. Нәжмиҙе башҡорт драматургияһына романтик пафослы, лирик интонациялы пьесалар алып килеүсе авторҙарҙың береһе, тип атаны. Ғайса Хөсәйенов иһә «Назар Нәжми – танылған драматург... Драма әҫәрҙәре лә, поэзияһына хас булғанса, тойғолар байлығы, зирәк күҙәтеүсәнлек, драматизм, комизм кеүек сифаттар менән характерлана. Тәбиғи, улар сәхнә ҡанундарына буйһондоролоп, тормоштағыса асыҡ күргәҙмәлелек, конкрет лирик-драматик, урынында комик ситуациалар, характерҙар көрәше төҫөн алалар», тип билдәләне. Ҡарап тороуға, ябай ғына һүҙҙәр теҙмәһе, шикелле. Ләкин төптәнерәк уйлай башлаһаң, ике ғалим да Н. Нәжми драматургияһының бик мөһим үҙенсәлеген тотоп алған бит. Хәҙерге быуын әҙәбиәт белгестәренә, бигерәк тә драматургия менән ҡыҙыҡһыныусыларға, ошо йүнәлештә арымай-талмай эшләйһе генә ҡала.

Һуғышҡа тиклем үк әле Н. Нәжми публицистика һәм әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнә башлай. Дөрөҫ, ул саҡтағы мәҡәләләре өйрәнсектән ары китәлмәй. Уның был өлкәләге һәләте һуғыштан һуңғы йылдарҙа, айырыуса төрлө редакциялҙа һәм Яҙыусылар союзында эшләгәндә бөтә ҡеүәтенә асыла. Әҙәбиәттең был төрөнә шағир ғүмеренең һуңғы көндәренә ҡәҙәр тоғролоҡ һаҡлай. Тулҡынсы йылдарҙа уны хатта яңы жанр формалары («үҙгәртеп ҡороу» проработарына, ғалимдарға, генералдарға, сәйәсмәндәргә адресланған асыҡ хаттар) менән дә байыҡтыра. Публицистик аһаң шағирҙың был йылдарҙа ижад иткән байтаҡ ҡына шиғырҙарына ла хас.

Шулай ҙа, публицистикаға ҡарағанда, Н. Нәжми әҙәби тәнҡит өлкәһендә әүҙемерәк эшләне һымаҡ. Ҡырҡынсы йылдарҙың ахырында – илленсе йылдарҙың башында ул йәштәр ижадына күҙәтеүҙәр яһаны. Ул саҡта был биҡ мөһим, бик кәрәкле эш ине. Шағир үҙенән өлкәнерәк ҡәләмдәштәренә лә иғтибарлы булды, ҡорҙаштарын да онотманы, күңеленә ятҡан йәштәрҙе лә ситкә типмәне. Уның М. Сөндөклө, Ҡ. Даян, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Ғ. Сәләм, М. Харис, Т. Арслан, И. Абдуллин, К. Кинйәбулатова, Ф. Рәхимғолова, Ғ. Әхмәтшин, Х. Ғиләжев, Ш. Биккол, Ә. Атнабаев, М. Кәримов хаҡындағы мәҡәләләре әле лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ. Съездарҙа, төрлө йыйылыштарҙа, кәңәшмәлрҙә әҙәбиәт

мәсьәләләренә ҡағылышлы сығыштары ла иғтибарҙы йәлеп итерлек. «Литературная газета», «Литературная Россия» гәзиттәре, «Вопросы литературы» журналы биттәрендә лә күренгеләп торҙо ул. Н. Нәжмиҙең әҙәби тәнҡит мәҡәләләренә хас төп һыҙат – талапсанлыҡ менән ижадсы шәхесенә ихтирамлылыҡтың бергә үрелеп барыуында, минеңсә. Йыйып ҡына әйткәндә, шағирҙың публицистикаһы ла, әҙәби тәнҡит өлкәһендәге эшмәкәрлеге лә тикшереүселәр өсөн үҙе бер мауыҡтырғыс тема.

Н. Нәжми мемуарсы булараҡ та билдәле. Мәлих Харис, Баязит Бикбай, Нариман Сабитовҡа бағышланған «Дуҫ тураһында бер нисә һүҙ», «Бөтәһе лә беҙгә ҡалды», «Уттар, минуттар» тигән хәтирәләре уның был жанрҙа яһаған тәүге аҙымдары булды. Артабанғы иҫтәлектәрендә шағир Тимер Арслан, Ҡадир Даян, Сәләх Кулибай, Ғәйнан Әмири, Ғ. Сәләм, Сәғит Агиш, Сәйфи Ҡудаш, Ғилемдар Рамазанов, Динис Исламов, Нәжибәк Хафизов, Шәриф Биҡҡол һәм башҡаларҙың тере образын тыуҙырҙы. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә көрәк: Нәжми мемуарсы һәр ижадсыға ғәҙел баһа бирергә, уның әҙәбиәттә, сәнғәттә тотҡан урынын дөрөҫ билдәләргә тырышты. Мемуар жанрында эшләүсе яҙыусылар алдында торған яуаплылыҡ тураһында ла онотманы ул.

Ниһайәт, Назар Нәжми ижадын өйрәнеүселәр алдында торған тағы бер мауыҡтырғыс тема: уның рус поэзияһы менән бәйләнеше. Һүҙ бында рус шағирҙарын башҡортсаға тәржемә итеү хаҡында ғына бармай – мәсьәлә киңерәк ҡуйылырға тейеш. Әйтәйек, Н. Нәжмиҙең Пушкин, Грибоедов, Лермонтов, Фет әҫәрҙәренә мөнәсәбәте. Ни өсөн Ахматова менән Блок, Маяковский менән Твардовский башҡорт шағирының иғтибарын йәлеп иткәндәр? Есенин менән Нәжми шиғриәтендә ниндәй уртаҡлыҡ табырға мөмкин? Ни өсөн Смеляков менән бәхәскә инә, ә Ваншенкин менән яҡындан аралаша? Бында ҡуйылған һәм ҡуйылмаған һорауҙарҙың бөтәһенә лә яуапты шағирҙың лирик һәм лиро-эпик әҫәрҙрендә табырға мөмкин.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми ижадын фәнни нигеҙҙә өйрәнеү һәм тикшереү мәсьәләләренә ҡағылған был уйланыуҙарҙы уның 1971 йылда Ким Әхмәтйәновҡа биргән интервьюһындағы тәрән мәғәнәле ҡанатлы һүҙҙәре менән тамамламаҡсымын. Тәнҡитсенең иң һуңғы һорауына яуап ҡайтарып, шағир былай тигәйне: «Ысын шиғриәт – ул ғүмер буйына асыла барған сер». Минең уйымса, Н. Нәжмиҙең бөтә ижады ғүмер буйына асыласаҡ бай сығанаҡ булып ҡалыр. Уны өйрәнәһе лә өйрәнәһә әле.

2008, ғинуар

ҮҘЕНӘ ТОҒРО ШАҒИР

«Быуаттан быуатҡа күскәндә» тигән мәҡәләмдә Марат Кәримов тураһында һүҙ сыҡҡас, халыҡ телендә ул күптән инде – халыҡ шағиры, халыҡ телендәгене рәсмиләштерергә лә ваҡыт етмәне икән, тигәнерәк уйҙарым менән уртаҡлашҡайным. Уйҙарым фәрештәнең «Амин!» тигән сағына тура килде инде әллә, оҙаҡ та үтмәне, хатта шул уҡ йылда, Марат Кәримовҡа, ниһайәт, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. БыныҢ менән шағирҙың яҙмышын хәл итешеүҙә мин дә ҡатнаштым, тип, тыйнаҡһыҙлыҡ күрһәтергә йыйынмайым. Һүҙ бары тик мәҡәлә авторы белдергән фекерҙең рәсми ойошмаларҙа ултырған түрәләрҙең ҡарашына тап килеүе хаҡында ғына барырға мөмкин.

Әҙәбиәткә илле йылдан ашыу тоғро хеҙмәт итеү осоронда Марат Кәримов, күп кенә ҡәләмдәштәренән айырмалы рәүештә, үҙе тураһында яҙылған ғәзит-журнал мәҡәләләренә ҡытлыҡ кисермәне. Бер өҙлөкһөҙ тәнҡитселәр ауыҙынан төшмәне, тимәһәм дә, уныҢ ижадына, алды-артлы сығып торған шиғри йыйынтыҡтарына тейешле баһа ваҡытында бирелә барҙы.

Һүҙ сәнғәте тип аталған серле һарайҙың тупһаһын ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына атлап ингән йәш шағирҙы иң башта мәшһүр Мостай Кәрим күреп шатланды. Шатланды, ләкин башынан һыйпаманы: аҙашыныҢ «Бөрөләр» тигән тәүге китабы айҡанлы Балтиҡ буйынан – Рига ярҙары тип йөрөтөлгән ерҙән яҙып һалған хатында ул «башҡорт поэзияһына һиҙгер йөрәкле, күтәренке күңелле, үткер күҙле яңы бер шағир килә», тип белдерһә лә, йыйынтыҡтағы ҡайһы бер шиғырҙарға хас етешһеҙлектәргә һис тә күҙ йомманы. (Йәйәләр эсендә генә булһа ла, шуны ла хәтергә төшөрөп китеү урынлы булыр: Марат Кәримовтың 56 битлек был китабы 1956 йылда баҫылып сыҡҡайны, ә Мостай Кәримдең хаты 1956 йылдың декабрь – 1957 йылдың ғинуар айҙары менән даталанған).

Артабан Марат Кәримовтың ижад яҙмышы профессиональ тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре ҡарамағына күсте. Улар араһында йәш шағир тураһындағы тәүге һүҙҙе билдәле тәнҡитсе һәм ғалим М. Ғәйнуллин ҡатты. Уның һүҙен танылған тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре Н. Зарипов, Ә. Хәкимов, С. Сафуанов, Ғ. Хөсәйенов, Р. Бик-

баев, Р. Әмировтар ҡеүәтләне.Атаҡлы Назар Нәжми ҙә үҙенең ҡәләмдәш туғанына битараф ҡалманы. Тәнҡитселәр һәм ғалимдар араһында М. Кәримов шәхесенә хатта ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтыусылар ҙа булды. Шулай ҙа шағир тураһындағы төп һүҙҙе башҡорт әҙәбиәтенең алты томлылығында Ғайса Хөсәйенов әйтте, тиһәк, һис тә хата булмаҫ.

Бында исемдәре аталған һәм аталмаған авторҙарҙың төрлө йылдарҙа яҙылған һәм төрлө баҫмаларҙа донъя күргән мәҡәләләрен күҙ уңынан үткәреп, уларҙы яңы факттар һәм яңы фекерҙәр менән байытһаң , халыҡ шағиры Марат Кәримов тураһында бынамын тигән китап барлыҡҡа килер ине. Ләкин...

... Бынан ун – ун биш йылдар самаһы элек мин Марат Кәримовтың замандашы һәм ҡәләмдәше, күренекле шағир Абдулхаҡ Игебаевтың ижады менән етди генә шөғөлләнеп алдым. Байтаҡ ҡына материал тупланғайны. Күләмле генә мәҡәлә лә яҙылды. Ул «Йәнле шишмәләр» тигән йыйынтығыма инеп китте. «Ағиҙел» журналында ла донъя күрҙе. Шул мәлдә башҡа ҡыҙыҡлы ғына бер уй килде. Әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә ирешкән уңыштарҙы билдәләү өсөн республикала төрлө маҡтаулы исемдәр булдырылған. Шулар араһында, халыҡ шағиры һәм халыҡ яҙыусыһынан ҡала, Салауат Юлаев исемендәге премия ҙур урын алып тора. Ул исемде яулаған лауреаттар байтаҡ ҡына булып киткән. Ниңә ошо премия хөрмәтенә «Китап» нәшриәтендә махсус бер серия асып ебәрмәҫкә һәм лауреаттарҙың һәр ҡайһыһы тураһында дүрт – биш табаҡлыҡ ҡына булһа ла очерк китаптары яҙып баҫтырмаҫҡа?

Уйым менән нәшриәттә уртаҡлаштым. Абдулхаҡ Игебаевҡа бағышланғанын үҙем яҙырға әҙерлегемде лә белдерҙем. Рәссам булмаһам да, уйланылған серияның хатта эскиз-макетын да эшләп бирҙем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был тәҡдим хуплау тапманы. Эскиз да шунда юғалды, буғай. Әгәр ошо хыял тормошҡа ашҡан булһа, бөгөн Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттарының тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан бәләкәй форматлы байтаҡ китап донъяға килгән булыр ине. Ә бындай китаптарға тәү сиратта мәктәп уҡытыусылары мохтаҙлыҡ кисерә.

Әле бына Рауил Бикбаевтың «Йөрәктә ҡалған эҙҙәр» («Ағиҙел», 2000 йыл, 1-се һан), Гөлләрә Назарованың «Тауҙарға талпыныусы шағир» («Ағиҙел», 2003 йыл, 6-сы һан), Рәшит Сабиттың «Шиғыр күрке – һүҙҙәр балҡышында» («Ағиҙел», 2005 йыл, 1-се һан) тип аталған һәм Марат Кәримов ижадына арналған мәҡәләләрҙе ҡайтанан уҡып ултырам да, башҡа тағы уй килә. Беҙҙең бит хапыҡ шағирҙарыбыҙҙың да

һаны ундан ашҡан. Ләкин уларҙың тик дүртеһе – М. Ғафури, С. Ҡудаш, Р. Ниғмәти, М. Кәрим – хаҡында ғына монографиялар бар. Был монографияларҙың да хәҙер мәктәп китапханаларында һаҡланыуы-һаҡланмауы ҙур һорау аҫтында. Тимәк, уларҙы яңынан нәшер итеү сараһын күрергә кәрәк. Ҡалған халыҡ шағирҙарының (Н. Нәжми, Ә. Атнабаев, М. Кәримов, Р. Ғарипов, А. Филиппов, Р. Бикбаев, Т. Йосопов) һәм халыҡ яҙыусыларының (З. Бейешева, Ә. Хәкимов, Н. Мусин) ижадтарын тикшереүгә арналған китаптар яҙырға ла ваҡыттыр инде.

Әгәр ошо хыялдарҙың береһе тормошҡа ашып, Марат Кәримов тураһында очерк китабы яҙылһа, унда, моғайын, шағирҙың XXI быуат башындағы ижадын яҡтыртҡан бүлек тә булыр ине. Сөнки ул яңы быуатта ла әүәлгесә әүҙем һәм егәрле эшләй: республикала нәшер ителгән башҡа баҫмаларҙы иҫәпкә алмайынса, тик «Ағиҙел» биттәрендә генә лә ете йыл эсендә биш тапҡыр сығыш яһаны һәм етмешләп шиғыр баҫтырҙы.

Әүҙем һәм егәрле эшләй, тинем дә, тағы уйға ҡалдым. Әҙәби ижад, бигерәк тә шиғриәт хаҡында һүҙ барғанда был төшөнсәләр урынһыҙыраҡ ҡулланылмай микән? Әүҙемдең яҡынса антонимы – һүлпәнлек; егәрленеке – ялҡаулыҡ (бынығы ла – яҡынса, әлбиттә!). Быйыл мин 2001–2007 йылдарҙа «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән шиғырҙарҙың һәм уларҙың авторҙарының картотекаһын төҙөнөм. Бәләкәй генә булһа ла, үҙенә күрә бер антология барлыҡҡа килде. Шул антология-картотекаға күҙ ташлаһаң, быуат башындағы шиғриәтебеҙ ус төбөндәге кеүек ялтырап ята. Буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, бер нисә факт та килтерергә мөмкин.

Әйтәйек, «Ағиҙел»дең ете йыл дауамында нәшер ителгән һикһән дүрт баҫмаһында шиғри әҫәрҙәр менән сығыш яһаған авторҙарҙың һаны йөҙҙән артып китте. Шуларҙың ҡырҡ икеһе берәр тапҡыр, ун алтыһы – икешәр, ун етеһе – өсәр тапҡыр баҫылды. Күренекһенсә, ошо дәүерҙә журналда дүртәр, бишәр, алтышар тапҡыр «ҡунаҡта» булыусыларҙың һаны әллә ни күп түгел – утыҙлап ҡына. Ә ете йылдың бер генә йылында ла журнал менән араны өҙмәүселәр – икәү генә: улар – Тимер Йосопов менән Нәжибә Әминевалар.

Әҙәби тәнҡит мәҡәләһе өсөн мәҙәгәрәк тойолған был «статистика»нан сығып, һирәк яҙышыусыларҙы һис кенә лә әүҙемһеҙлектә, егәрһеҙлектә, һүлпәнлектә, булдыҡһыҙлыҡта ғәйепләргә йыйынмайым. Ҡайһы берәүҙәрҙең матбуғат биттәрендә оноҡҡанда бер күренеп ҡалыуҙары, бәлки, файҙаға ғыналыр. Шиғыр һирәк-мирәк тыуа икән,

тимәк, тәбиғәттең һүҙ менән генә аңлатып бирә алмай торған «илаһи мәле» лә ундайларҙа һирәгерәк ҡунаҡ булалыр. Ә илһамһыҙ, көсәнеп яҙған шиғырҙан кемгә һәм ниндәй файҙа? Ижад шишмәң урғылып торһа ғына шиғыр тыуа бит. Һәм ул хужаһынан: «Минең өсөн һиңә күпме түләрҙәр икән?», тип һорап тормай – ағыла ла ағыла. Бәхәсһеҙ, ундай шиғырҙы һирәк тейә торған ял сәғәттәрендә ләззәтләнеп уҡып ултырыу – үҙе бер ғүмер.

Һүҙемде туранан – тура Марат Кәримов ижадына күсерер алдынан, лирик сигенеүгә тартым тағы бер иҫкәрмә яһамай булмаҫтыр. Үрҙә, һандарға таянып, ҡайһы бер фактттар килтергән өсөн, был мәҡәләнең авторы шағирҙар араһында социалистик ярыш ойоштороруға йыйынмай микән, тигәнерәк уй тыуып ҡуймаһын. Юҡ, әлбиттә. Ундай фекерҙең башыма ла инеп сыҡҡаны юҡ. Хәйер, ярыш сәме ижадсылар өсөн дә бөтөнләй үк ят нәмә түгелдер ҙә инде. Бер-береңдән уҙырырға, яңы образдар тыуҙырырға, уларҙы тормошҡа ашырыр өсөн таушалмаған һүрәтләү саралары ҡулланырға, хәтергә һеңеп ҡалырҙай деталдәр табырға тырышыу – ғәрлекме ни?

Дөрөҫөн генә әйткәндә, был сифаттар шағирҙарға ғына түгел, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә эшләүҫе бөтә ижадсыларға ла (шул иҫәптән тәнҡитселәргә лә) хас булырға тейештер ул. Марат Кәримов та уларҙан азат түгелдер, моғайын. Юғиһә, башҡорт шиғриәтендә тупланған бай тәжрибәне уғата ла үҫтереү һәм байыҡтырыу өҫтөндә арымай-талмай эшләү дәүеренә ул, тәү ҡарамаҡҡа, иҫкергәндәй, тапалғандай тойолған темаға ла яңыса ҡараш ташлап, уға йән өрөп, күҙеңдең яуын алырлыҡ итеп балҡытып ебәрелер инеме ни? Быны мин М. Кәримовтың шиғриәттә сәмләнеп эшләү һөҙөмтәһелер, тип уйлайым.

Марат Кәримов элек-электән йор һүҙле, юморға һәм сатираға әүәҫ шағир булараҡ билдәле. Ҡайһы берҙә: «Был сифаттар уға тыумыштан килгән микән, әллә “Һәнәк” журналында оҙайлы эшләгән йылдарҙың бер шауҡымымы?», тип тә уйлап ҡуйырһың. Булыр, икеһе лә булыр: сатирик журналға юлды тыумыштан тапҡыр һүҙлелеге ярыуы ла ихтимал; журналдың да уға ыңғай йоғонто яһауы, тәбиғәттән бирелгән талантын артабан да үҫтерергә һәм тормошҡа ашырырға булышлыҡ итеүе мөмкин.

Ҡулына ҡорал тотоп, яу яланында ҡанын ҡойған быуын вәкиле булмаһа ла, Марат Кәримов ярайһы ғына ҡатмарлы тормош һәм ижад юлы үткән әҙип. Шуға күрә һуғыш осоронда һәм унан һуңғы йылдарҙа ил иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы башынан кисереп, йөрәге аша

үткәргән, заманында ғәҙелдәрҙән ғәҙел, изгеләрҙән изге һаналған сәйәси һәм әҙәби мәктәп һынауҙары аша үткән шағирҙың лирикаһы форма йәһәтенән дә, йөкмәткеһе менән дә ифрат бай һәм күп яҡлы икән, һис тә ғәжәпләнәһе юҡ.

Шиғриәт хаҡында һүҙ сыҡҡанда, иң тәүҙә уның тема һәм жанрҙар төрлөләгенә иғтибар итергә күнеккәнбеҙ. Мөхәббәт лирикаһымы ул? Пейзаж лирикаһымы? Фәлсәфәүи лирикамы әллә гражданлыҡ лирикаһымы? Ҡасандыр, бигерәк тә Пушкин менән Лермонтовты өйрәнгәндә, сәйәси лирика, патриотик лирика тигән төшөнсәләр ҙә йыш ҡына ҡолаҡҡа салына торғайны. Сәйәси лирика Европа илдәренең шиғриәтен дә урап уҙмаған. Ул айырыуса ундағы дәүләттәрҙең нигеҙен дер һелкеткән ихтилалдар заманында сәскә атҡан, тиҙәр. Әммә, шиғриәттә тема һәм жанрҙар төрлөләгә йәшәргә хаҡлы булһа ла, ул бик шартлы рәүештәләр. Сөнки, алтын – саф, тиһәләр ҙә, ул барыбер ҙә тулайым саф түгел бит. Шуның һымаҡ, шиғриәттәге төрлөлөктө лә саф килеш кенә күҙаллауы ҡыйын. Быға Марат Кәримов шиғриәте миҫалында ла ышанырға мөмкин.

Быуаттар ҡауышҡанда донъя күргән «Кителгән һәйкәл» һәм «Ни булды беҙгә, ни булды?» тигән шиғырҙарҙы, мәҫәлән, ҡайһы жанр төрөнә индерер инегеҙ? Формалары йәһәтенән улар үтә ғәҙәти: икеһе лә дүртәр юллы строфа менән яҙылған. Хатта строфаларҙың һаны ла тап килгән: һәр ҡайһыһында – өстешәр. Юлдарҙағы ижектәр ҙә бер төрлө аралашҡан: «8 – 7 – 8 – 7». Рифмаларҙың теүәллеге хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ – Марат Кәримовтың үҙенә баҡый шиғыр техникаһына бик иғтибарлы булғанлығы һәм шуның һөҙөмтәһендә был өлкәлә шаҡтай зур уңыштар ҡазанғанлығы бер кем өсөн дә сер түгелдер. «Кителгән һәйкәл»дә, әйтәйек, икенсе һәм дүртенсе юлдар рифмалашҡан. Был юлдарҙағы һуңғы һүҙҙәр эске яңғыраштары менән генә түгел, күп осраҡта ундағы һуңғы ижектәрҙең йә ауаздашлығы, йәиһә бөтөнләй тап килеүе менән дә айырылып тора: «һүҙҙәре – элгәре», «арбаған – арбанан», «алдарға – аңларға», «һаҡлайһың – яҡлайһың», «сайҡала – ни ҡала» һ.б. «Ни булды беҙгә, ни булды?»ла ла шундай уҡ теүәллек: «алҡыштарҙан – балҡыштарҙан», «ташыу – яҡынлашыу», «хәҙер – әҙер», «танымаҫлыҡ – ҡабынмаҫлыҡ». Ҡайһы бер строфаларҙа ижектәр генә түгел, һүҙҙәр ҙә рифмалаша: «түгел – түгел», «ине – ине», «бара – бара».

Хәҙер был шиғырҙарҙың йөкмәткеһенә иғтибар итәйек. «Кителгән һәйкәл»дең лирик геройы беҙҙең бөгөнгө ысынбарлығыбыҙ хаҡында уйланғанда «хәҙрәти» Пушкиндың «Кавказ тотҡоно» тигән поэмаһы

һәм «Һәйкәл» тигән шиғыры араһында нисәмә йылдар буйы йәшәп килгән, ләкин бығаса ябай уҡыусы күҙенә бигүк бәрелеп тормаған идея ҡаршылығын һиҙеп ҡала. Баҡһаң, «Һәйкәл» шиғыры тунгустарға, ҡалмыҡтарға, Рәсәйҙә тереклек иткән башҡа халыҡтарға ихтирам тойғоһо менән һуғарылған булһа, «Кавказ тоғконо» поэмаһында иһә бөйөк Пушкин Кавказ халыҡтарын ҡоллоҡҡа төшөрөүҙе яҡлаған икән дә баһа. Атаҡлы шағир ижадындағы был ҡаршылыҡҡа күҙе асылған лирик геройҙың ғәйрәте ҡайта һәм мәктәп йылдарынан бирле уның күңелендә яралған һәйкәлдең бер ташы кителеп төшкәндәй була.

Ләкин М. Кәримовтың «Кителгән һәйкәл»дә әйтергә теләгәне, минеңсә, Пушкин әҫәрҙәрендәге «ҡаршылыҡ»ты («Кавказ тоғконо»н яҙғанда уның авторына ни бары 21 йәш тирәһе булғанлығын , өҫтәүенә был поэманы ул көнъяҡта һөргөндә ятҡан саҡта ижад иткәнлеген, тағы килеп «Смирись, Кавказ: идёт Ермолов!» тигән юлдың поэма эсендә түгел, ә бары тик уға һуңынан өҫтәлгән эпилогта ғына урынлашыуын иҫкә алғанда, әле һүҙ барған ҡаршылыҡ, бәлки, Пушкин ғәйебе менән дә барлыҡҡа килмәгәндер һәм шуға күрә бөтөнләй үк ғәфү ителмәҫлек тә түгелдер?) фашлауҙан да бигерәк, шул заманда ҡайһы бер күренештәр, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙең көндәрҙә лә үҙҙәрен һиҙҙереп ҡуйғылай, тигән фекерҙәр. Юл ыңғайында хәтерегеҙгә төшөрөп үтәйем: үҙ ваҡытында ошоға тартым мотив Назар Нәжмиҙең «Мискә» (1994) тигән шиғырында ла яңғырап киткәйне. М. Кәримовтың «Кителгән һәйкәл»енә килгәндә иһә, йөкмәткеһе йәһәтенән ул бик үткер, художество эшләнеше яғынан теүәл, ыҡсым әҫәр. «Түбән бейеклек» тигән оксиморон, юмор һәм ирония аңҡып торған «Шул арбауҙар инде төшөп ҡалды минең арбанан» кеүек юлдар шиғырҙың төбөндә ятҡан кинәйәле фекерҙе уғата ла көсәйтеп ебәрә. Был әҫәрҙә М. Кәримовтың эстетик ҡараштары ла сағылып китә. «Ирек һәм азатлыҡ – шағир өсөн һүҙ башы» тигән девизды алға һөрә ул Пушкиндың «Кавказ тоғконо» исемле поэмаһы хаҡында уйланғанда.

«Кителгән һәйкәл»дә Марат Кәримовтың быуат башындағы ижадында «Кавказ темаһы»н асып ебәреүсе әҫәр, тип тә атарға мөмкин. Сөнки был әҫәрҙең төбөндә ятҡан кинәйәле фекер уның артабанғы «Блокпоста», «Оҙатыу», «Госпиталдә», «Хәрби сводка» тигән шиғырҙарында бер ниндәй ым-ишараһыҙ, туранан-тура ярып һалынған. «Блокпоста» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, икегә бүленгән ябай кешеләр бер-береһен атып үлтерәләр, «ер ҡанға бата», ә шул ваҡытта «кемдәрҙер аҡыл һата». Яңғырашы буйынса шиғырҙа бер аҙ ирония сатҡылары

һиҙелеп ҡалһа ла, йөкмәткеһе йәһәтенән ул шаян-көлкөнән бик алыҫ тора. «Гильза сәсрәй, пуля бейей» кеүек метафораларҙы, тауышҡа оҡшаған өндәрҙе ҡабатлау аша автор блокпостағы драматик хәлдәрҙе йәнле итеп күҙ алдына килтереп баҫтыра.

«Хәрби сводка» тигән шиғырҙа иһә ирония сатҡылары һиҙелеп кенә ҡалмай, ә күҙгә бәрелеп тора. Бәрелештәр ваҡытында ике яҡта ла ҡорбан булыусылар һанының бик примитив ысул менән иҫәпләнеүенә ишара яһала унда. «Туҡ сырайлы генералдар»ға ла «өлөш» сыҡҡан бында. Ошондай сетерекле теманы яҡтыртҡанда авторҙың ифрат оҫта дипломат икәнлеге лә сағылып китә.

Ә бына «Оҙатыу», «Госпиталдә» тигән шиғырҙарҙа юморға ла, иронияға ла урын ҡалмаған – уларҙы үпкә тойғоһо һәм әсе күҙ йәше алмаштырған. «Оҙатыу»ҙың исеменә үк тәрән мәғәнә төрөлгән: оҙатыу, хушлашыу күренеше кешелә һәр сак шом уята, йөрәкте һыҙлата. Әлеге конкрет осраҡта иһә һүҙ йәш һалдатты башта Кавказға оҙатыу, унан һуң «ҡурғашлы табутта» әйләнеп ҡайтҡан һөләктәй егетте, «зар илап», ҡәбергә оҙатыу хаҡында бара.

«Госпиталдә» тигән шиғырҙа ла шундай үк аяныслы хәл һүрәтләнгән. Ҙур начальник, яраланып госпиталгә эләккән һуғышсыларға орден, миҙал таратып йөрөй, рухландырып, һалдаттарҙың арҡаларынан да ҡағып ала. Арала берәүһе миҙалды ҡабул итәлмәй, сөнки уның ҡулдары юҡ – яу яланында өҙөлөп ҡалған. Бөтә фажиғә һәм әрнеш тә бына ошонда. Үҙенән-үҙе: «Ул орден, миҙалдың ни хәжәте?» тигән һорау тыуа; кемдәрҙеңдер иҡтисади-сәйәси мәнфәғәттәрен ҡурсалау ниәтенән, кемдәрҙеңдер саманан тыш көсәйеп киткән нәпселәрен ҡәнәғәтләндереү өсөн башлап ебәрелгән һуғыш һәм оҙаҡҡа һуҙылған ҡан ҡойош уҡыусыны уйға һалмай ҡалмай, әлбиттә.

Йөкмәткеләре буйынса Марат Кәримовтың Кавказ шәлкеменә ингән шиғырҙары бигүк ҡыуаныслы булмаһа ла, эшләнештәре яғынан улар юғары кимәлдә. Был юғарылыҡтың бер сере шағирҙың тел байлығында булһа, икенсеһе – шул байлыҡтан оҫта файҙаланыуҙа. Дүртәр юллы дүрт строфанан торған «Оҙатыу» шиғырында, әйтәйек, 1, 2, 4-се юлдарҙағы һуңғы һүҙҙәрҙең яңғыраштары буйынса ауаздаш булыуҙары, уларҙа хатта ижектәр һанының да тап килеүе, тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең билдәле бер тәртиптә аралашыуы быға асыҡ бер миҫал. «Госпиталдә» тигән шиғыр ҙа «Оҙатыу»ҙан ҡайтыш түгел: күләме менән дә, рифмаларҙың теүәллеге йәһәтенән дә. Кәрәкмәгәндәй тойолған бер генә һүҙ ҙә тапмаҫһың был шиғырҙа. «Хәрби сводка»ла

строфалар һаны күберәк, әммә һәр строфаның 2-се, 4-се юлдарындағы һуңғы ижектәр шул тиклем теүәл рифмалашҡан, улар бер-береһенән айырып алғыһыҙ.

М. Кәримовтың егерменсе быуат аҙағындағы ижадын күҙ уңында тотоп, Ғ. Хөсәйенов былай тип яҙғайны: «Шағир кешене замандың баҙар мөнәсәбәттәре, киреҙә боролоу күренештәре, дәүерҙең төрлө алыпһатарҙары, йәнҡыярҙары, ҡырағайлыҡтар аптырата, күңеленә оло шом, хәүеф һала» (Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6-сы том, 1996, 407 бит).

Шағир күңелендә хәүеф-хафа, шик-шом уята торған сәбәптәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас та үҙҙәрен һиҙҙереп кенә тора. Һуңғы йылдарҙа ижад ителгән «Ни булды беҙгә, ни булды?», «Ҡазанда – һабантуй», «Эх, донъяһы!..», «Эмигрант», «Туҡай кәрәк», «Күңелдәрем тыныс түгел», «Кемдең урыны ҡайҙа?», «Милләтебеҙ», «Алдан әле», «Бар ине» тигән шиғырҙар – тап ана шул сәбәптәрҙең асыҡ бер кәүҙәләнеше.

«Ҡазанда – һабантуй» исемле шиғырҙың нигеҙендә реаль факт ята. Ул фактты радионан ишетеп, йәиһә телевизорҙан күреп белмәгән уҡыусы әҫәрҙе биҙүк аңлап та бөтмәҫкә мөмкин. Ә бына шағир ошо факттан бик оҫта файҙаланған. Ҡатыҡ һалған һауыттан биш тинлек бер баҡырҙы «һә» тигәнсе эләктергән ил башлығын хуплап, аяҡ тибеп ҡул сапҡан тамашасыны күҙәтеп ултырғанда, ул бына ниндәй уйҙар кисерә:

– Баҡыр тинде, һай, тиҙ тапты!
Шулай ҙа ул шулайын,
Белә микән һуң ул ситкә
Күпме алтын шыуғанын?

Шулай итеп, бәләкәй генә бер деталь ярҙамында һис көтмәгән ерҙән тәрән йөкмәткеле ҙур һөҙөмтә яһап ҡуйылған.

«Эх, донъяһы!..» тигән шиғырҙа бөгөнгө донъябыҙ һәм беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡ ҡоҙғон ояһына тиңләнгән.

Йәнебеҙҙе суҡый ул,
Беҙгә ясин уҡый ул.
Һеҙ бит беҙҙең өсөн генә,
Тип туҡтауһыҙ туҡый ул, –

тигән юлдар һәм уларға төрөлгән фекер менән килешмәй сара юҡ. Стиле буйынса шиғыр юморға тартым тойолһа ла, уның төбөндә әсе хәҡиҡәт ята. Әҫәрҙең йәйәләр эсендәге «Күңелһеҙ минуттарҙа» тигән өҫтәмә атамаһы ла юҡтан ғына хасил булмағандыр.

М. Кәримов стиленә хас юмор алымы уның «Эмигрант» исемле шиғырында ла һиҙелеп тора. Әйтергә кәрәк, юмор аша әҫәрҙә ярайһы ғына етди мәсьәлә күтәрелгән. Һәм ул мәсьәлә әлеге лә баяғы шул «үҙгәртеп ҡороу» сиренең һөҙөмтәһе булараҡ алға килеп баҫҡан. Ил тарҡалғас, лирик герой һәм уға тиңдәр – эмигрантҡа, ә олигархтар – ерле халыҡҡа әйләнгән, йәнәһе:

Илдән илгә күстем дә ул,
Ерем ҡалды шул килеш.
Баҡһаң, ошо үҙ еремдә
Мин дә эмигрант, имеш.

Ерле халыҡ тигәндәре
Олигархтар икән,
Улар иһә ергә һыймай,
Киң донъялар тар икән.

«Туҡай кәрәк» тигән шиғыр ҙа бик фәһемле. Унда Туҡайҙы һатҡан Бесән баҙары беҙҙең көндәр менән сағыштырылған: «Күр, илебеҙ оҡшап ҡалған ҙур бер Бесән баҙарына». Әҫәр бындай юлдар менән тамамлана:

Етемлекте үҙе еңгән
Туҡай рухлы ирҙәр һирәк.
Беҙҙе үргә әйҙәр өсөн
Туҡай кәрәк! Туҡай кәрәк!

Алтышар юллы өс строфанан торған «Күңелдәрем тыныс түгел» тигән шиғырҙың лирик геройы иһә үҙенең эске халәте менән уртаҡлаша. Буш вәғәҙәләр, илде баҫҡан ас дейеүҙәр уның күңелен тыныслыҙландыра. Төҙөлөшө йәһәтенән дә әҫәр бик үҙенсәлекле. Строфаларҙың өсөһө лә «Ah, күңелем тыныс түгел» тигән юл менән башлана, икеһе «Шунһыҙ күңелем тыныс түгел», өсөнсөһө «Шуға күңелем тыныс түгел» тигән юл менән тамамлана.

«Кемдең урыны ҡайҙа?» тигән шиғырҙа ла беҙҙең заманға хас көнүҙәк мәсьәлә яҡтыртылған: төрмәлә ултыраһы урынға, ҡараҡтар ҙа, бандиттар ҙа – үрҙә, түрҙә, «улар өҫтөн закондан». Шиғырҙың төп мәғәнәһе уның һуңғы юлында асыҡланған:

Тормошобоҙ «бар» һәм «юҡ»тың
Араһында тирбәлә.
Уйлап ҡуям: улар түгел,
Беҙ икән дә төрмәлә.

Заман еле, заман темаһы «Милләтебеҙ» тигән шиғырҙы ла урап уҙмаған. Бында улар, бәлки, көслөрәк иҫеп, көслөрәк яңғырай ҙа торғандыр әле:

Ил арбаһы тәгәрмәсһеҙ,
Күсерме эскән һатып?
Әй, һөйрәйбеҙ шул арбаны,
Ҡара тирҙәргә батып.

«Милләтебеҙ» шиғырына ойотҡоно Туҡайҙың «Беҙ һуғышта арыҫландан көслөбөҙ / Беҙ тыныста аттан артыҡ эшләйбеҙ» тигән юлдары һалған: татар классигының ошо һүҙҙәрен башҡорт халыҡ шағиры үҙ әҫәренә эпиграф итеп алған. Хәйер, эш эпиграфта ғына ла түгел. Эске аһәңе менән «Милләтебеҙ» үрҙә тикшерелгән «Туҡай кәрәк»тең дауамы шикеллерәк ҡабул ителә: ике шиғыр араһындағы фекер уртаҡлығын һиҙмәү мөмкин түгел. Туҡай мираҫынан оҫта файҙаланып, «Милләтебеҙ»ҙең авторы ике халыҡтың да зыялыларын уйға ҡалдырырлыҡ һөҙөмтәгә килгән:

Арыҫланлыҡ онотолған,
Ат эше – беҙҙең ғәмәл.
Йөк тартырға егелгәнбеҙ,
Ҡотолорға юҡ әмәл.

Ҡайҙа тимер тәртәләрҙе
Емерерлек йылғыр саҡ?
Боролорға ла ирек бирмәй
Тәртә, ҡамыт, ыңғырсаҡ.

«Алдан әле» тигән шиғырға һыйған фекер бәләкәйерәк бер поэманы тәшкил итерлек. Лирик герой донъяға килгәнсе үк әле уны һәм уның замандаштарын ҡара алабута ашы, киндер күлдәк-ыштан көтөп торған. Улар быуыны һыйыр егеп, баҫыуҙа һабан һөргән, ҡара тирҙәр түгеп, ҙурҙар менән бер ҡатарҙан эшләгән; тыштан властарҙы маҡтап, эстән һүккәндәр. Ләкин барыһына түҙгәндәр. Хәҙер килеп, оҙон ҡулдар ил байлығын кеҫәһенә һалғандар, ә теге түҙем быуын йәнә ярыҡ ялғаш янында ҡалған. Һәм ошонда лирик герой, ниһайәт, үҙенең характерын күрһәтә:

Етте, етте, артып китте
Беҙ күргән яҙғандары.
Килер быуындарғалыр ул
Һынауҙарҙың калғандары

Шиғырҙың исеменә йәшерелгән мәғәнә уның һуңғы строфаһында асыҡлана:

Мин ышанам: беҙгә тигән
Матур көндәр алда әле.
...Й, бер ҡатлы, гел алдандың,
Тағы бер ҡат алдан әле.

Ҡарап тороуға, М. Кәримовтың лирик геройы ярайһы ғына тура һүҙле булһа ла, ул юҡҡа-барға лаф ороп ғауға күтәреүсе лә, буш һүҙ һөйләп ваҡыт әрәм итеүсе лә түгел. Һуңғы ваҡытта атлаған һайын тиерлек үҙгәреп торған донъя хәлдәрен йөрәге аша үткәргәндә, башта ул мотлаҡ был хәл-әхүәлдәрҙең асылына төшөнөргә һәм шунан һуң ғына уларға тәғәйен баһаһын бирергә тырыша. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, өмөтө ҡаҡшап, күңеле ҡайтҡан саҡтары ла, аптырау арбаһына ултырған мәлдәре лә булғылай уның. Ошо йәһәттән, «Бар ине» тигән шиғыр бик ғибрәтле тойола. Уны илебеҙ тарихынан алынған айырым биттәргә тиңләргә мөмкин. Үҙ халҡы йүнле-башлы икмәккә лә туймаған саҡта, мәҫәлән, ул ил әллә ҡайҙағы илдәрҙең тамағын туйҙырған. Ара-тирә ул ил «тыңламаған күршеләрен ҡыйнаған» икән. Шул уҡ илдең ҡайһы бер «етәкселәре нәпсеһен тыймаған». «Шул хәлдә лә» ул ил «тормош йөгөн тарталған». Ләкин ошо илде тарҡатҡандан һуң бағланған яҡты өмөттәр һис кенә лә аҡланмаған:

Өр-яңы ил төҙөйбеҙ, тип
Ҡабынған саҡ бар ине,
Эш сыҡмағас, элеккеһен
Һағынған саҡ бар ине, –

тиергә мәжбүр лирик герой. Шиғырҙың елеге һуңғы строфалалыр:

Бар ине, тип яҙған саҡта
Эсем тулы зар ине.
Зарһыҙ «бар»ҙың булаһына
Өмөттәрем бар ине ...

Шиғырҙың атамаһына тәрән фекер төрөлгәнлеге һәм уның күп мәғәнә аңлатҡанлығы тураһында һүҙ ҡуйыртып тороуҙың хәжәте юҡтыр бында. Ысынлап та, бер ғүмер арауығында ғына ла беҙ тормоштоң ыңғай ҙа, тиҫкәре лә яҡтарына әҙ шаһит булманыҡ. Шул ыңғай һәм тиҫкәре күренештәр хаҡында шағирҙың, үрҙә әйтелгәнсә, уҡыусыға дөрөҫтө һөйләргә тырышыуы уның үҙ намыҫына тоғролоҡ һаҡлауҙан киләлер. Яһалма рәүештә түгел, ә фәкәт йөрәге ҡушҡанса ғына.

Өҫтәрәк, М. Кәримов шиғриәтендә жанрҙар төрлөлөгө, темалар байлығы хаҡында һүҙ сыҡҡанда, «Ни булды беҙгә, ни булды? » тигән әҫәр телгә алынғайны инде. Дүртәр юллы ете строфанан торған был традицион шиғыр – заманалар үҙгәреү менән рухи донъябыҙҙың һиҙелеп ярлылана барыуы, һүҙҙең, хатта шиғырҙың да ҡәҙере китә башлауы тураһында:

Ғәжәпме ни! Шиғыр бит ул –
Ярҙарға һыймай ташыу,
Күктәргә ашыу, Алланың
Үҙенә яҡынлашыу, –

тигән юлдарҙа йәнә шағирҙың эстетик ҡараштары сағылып киткәндәй була. Элек халыҡ шиғри һүҙҙәргә алҡышлаһа, хәҙер иһә бәндә тиндәр, һумдар өсөн йәнен бирергә әҙер, ти ул. Шиғриәт Аллаға тиңләнә икән, тимәк, уның кешегә яһаған йоғонтоһо һәм көсө тиндәр-һумдар менән генә баһалана алмай.

Тик, ошонда, бигүк аңлашылып бөтмәгән, бер аҙ ҡаршылыҡлы фекер уята торған хәл килеп тыуғандай була. Совет хөкүмәте

ҡыйратылғанға шатланып, мәсеттәр, сиркәүҙәр төҙөлгәнгә ҡыуанып, иманыбыҙға кире ҡайтабыҙ, тип, һөрән һалдыҡ-һалдыҡ та, хәҙер инә:

Алланан кире китәбеҙ,
Көн шуға ҡалып бара.
Алланан кире киткән юл
Иблескә алып бара ... –

тип, көрһөнөп ҡуябыҙ түгелме һуң? Тимәк, мәсеттәр һәм сиркәүҙәр төҙөп кенә күңелдәрҙе таҙартып, рухыбыҙҙы байытып булмай? Иблеслектән ҡотолоу өсөн, бәлки, башҡа саралар эҙләргә һәм табырға кәрәктер?

Һүҙ бында «Ни булды беҙгә, ни булды?»ла үткәрелгән идеяны инҡар итеү хаҡында бармай, әлбиттә. Киреһенсә, шиғриәттең бәҫен һәм әһәмиәтен күтәреүгә, уны һәр төрлө нахаҡтан, тупаҫлыҡтан, бысраҡлыҡтан ҡурсалауға һәм яҡлауға йүнәлтелгән был идея бары тик хуплауға ғына лайыҡлы. Шиғырҙы, шиғриәтте Аллаға тиңләүҙең дә әллә ни зыяны юҡтыр. Был сағыштырыуҙы автор тарафынан уңышлы һәм урынлы файҙаланылған бер әҙәби алым, тип кенә баһаларға мөмкин.

Үҙенең Октябрь революцияһына тиклем үк әле яҙылған поэмаларында рустың билдәле шағиры Владимир Маяковский Алланың әҙәми зат ҡиәфәтенә индерелгән һынын да кәүҙәләндергән, юғиһә. Ләкин бик тәрәндә ятҡан, төрлө кешелә төрлө ҡараштар тыуҙырған, төрлө уй-фекерҙәр уятҡан, бынан күп быуаттар элегерәк төрлө илдәрҙә йәшәгән төрлө халыҡтарҙы хатта үҙ-ара ҡан ҡойоуға тиклем илтеп еткергән илаһи йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ашҡына-ашҡына тергеҙгән саҡта, уларға, һис шикһеҙ, ихтирам күрһәтеү менән бер ҡатарҙан, ҙур һаҡлыҡ менән дә ҡарау хәйерлерәк түгел микән? Артыҡ мауығып китеп, бер-беребеҙҙе «бәҙрәфтә еүешләтеүгә» барып етмәйек, тиеүем.

Һуңғы ваҡытта шағирҙар, тәнҡитселәр, публицистар лексиконында «Заман башҡа – заң башҡа» тигән һүҙбәйләнеш күҙгә йышыраҡ салынғылай башланы. Афоризмдырмы ул, фразеологик берәмектерме, әллә бер юлы ике ролде лә үтәй торғандырмы – уныһын тел белгестәренә ҡалдырыйыҡ. Әлеге осраҡта инә ошо һөйләм М. Кәримовтың «Шағир һәм палач» тигән шиғырын төптәнерәк аңларға ярҙам итә һымаҡ. Шәйехзада Бабичтың фажиғәле үлеменә ҡағылышлы конкрет материалға таянып яҙылған был шиғыр бик тәрән һәм көслө дөйөмләштереүгә эйә:

палач, ҡыҙылмы ул, аҡмы – барыбер палач. Автор бында ла үҙ стиленә тоғро ҡалған. Мыҫҡыл ҡатыш көлөмһөрәп, бына нимә ти ул:

Хәҙер атта һөйрәтеү юҡ,
Ысулдары бар алмашҡа.
Ни тиһәң дә, прогресс бит,
Заман башҡа, яза башҡа.

Бер аҙ һуңырыҡ ижад ителгән «Татыуҙар ҡәберлеге» тигән шиғыр нимәһе менәндер «Шағир һәм палач»ҡа ауаздаш һымаҡ. Йөкмәткеһе менән – уйландырырлыҡ. Туранан-тура әйтелмәһә лә, ил күләмендә XX быуат башына хас булған хәл-ваҡиғалар хәҙерге көн менән сағыштырыла унда:

Яуҙар беҙҙең ауылды ла
Ҡанға батырып үткән,
Ҡыҙылдар ҙа шәһит киткән,
Аҡтар ҙа шәһит киткән.
Корбандарҙы бер үк ергә
Бер ләхеткә күмгәндәр.
Дошманлыҡтың ни икәнен
Беләме ни үлгәндәр!
. . . . . .
Әгәр уйлаһаң үткәнде,
Уйлаһаң хәҙергене,
Тотош Ер шары үҙе лә
Татыулыҡ ҡәберлеге.

Шиғырҙың темаһы ла, идеяһы ла уның һуңғы дүрт юлына төрөлгән:

Һорауым бар, яуабым юҡ:
Йәшәү терәге ҡайҙа?
Аҫты өҫкә әйләндерер
Заман төрәне ҡайҙа?..

Әйтергә кәрәк, М. Кәримов «үҙгәртеп ҡороу» осорона хас киҫкен факттарҙы, көсөргәнешле хәл-ваҡиғаларҙы шиғри юлдарға һалыу

менән генә сикләнмәй, бәлки уларға ҡарата үҙенең шәхси мөнәсәбәтен белдерә, шул хаҡта уҡыусы менән дә уртаҡлаша. «Дуэлянт» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул, батша Рәсәйе заманында армияла хөкөм һөргән тәртиптән оҫта файҙаланып, иҫ киткес тәрән фекер әйткән. Шиғырҙың уртаһындағы:

Маяҡһыҙ ил, аяҡһыҙ ил,
Иманһыҙ ил ҡайҙа бара?
Ирекһеҙҙән иҫкә төшә,
Офицерҙар, һеҙҙең сара, –

тигән юлдарҙан ғына түгел, бөтә шиғырҙан гражданлыҡ пафосы аңҡып тора. Һуңғы дүрт юлда лирик геройҙың, офицерҙар шәйенә инеп, беҙҙең замандың намыҫһыҙҙары менән дуэлға сығырға әҙер булыуы хайран ҡалырлыҡ:

Честь имею! Намыҫлымын!
Килмәй башҡа зарланаһы.
Мин – дуэлянт! Барьерға баҫ,
Намыҫһыҙҙар заманаһы!

Гражданлыҡ пафосы быуат башында яҙылған «Беҙ – бер бөтөн» тигән шиғырҙа ла көслө яңғырай. Шиғырҙың нигеҙендә «Айырылғанды – айыу, бүленгәнде – бүре ашар» тигән халыҡ мәҡәле ята. Әҫәр, илде «үҙгәртеп ҡора башлағас», «билдәлелек» тигән уйҙырманың һөҙөмтәһе булараҡ, төрлө милләт халыҡтары араһында килеп сыҡҡан ығы-зығыларҙың асыҡ бер сағылышы булып ҡабул ителергә хаҡлы. Ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, йөкмәткеһе менән уйға һалырлыҡ. Әйтәйек, «Төрлө милләт – тигеҙ хөрмәт, тигеҙлектә булмай өҫтөн», тигән фекер үҙе генә лә ни тора! Шиғырҙың авторы берҙәмлекте, бергәлекте яҡлап сыға, халыҡтарҙы айырылмаҫҡа, бүленмәҫкә саҡыра.

М. Кәримов шиғриәтендә беҙҙең заманға хас глобаль проблемаларға ла урын юҡ түгел. Шағирҙы бигерәк тә кешенең тәбиғәткә ҡарата бәғерһеҙлеге, йыш ҡына уның менән һаҡһыҙ, хатта тупаҫ мөғәмәлә итеүе борсый. Тәү ҡарамаҡҡа шиғриәттән алыҫ торған тема һымаҡ тойолһа ла, шағир уны поэтикләштереү өсөн тейешле сараларын таба. «Нисек ҡалаһы» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул, күрер күҙгә бигүк бәрелеп тормаған йәнәшәлек аша, ғәйәт төптәрәк ятҡан мәсьәләне

күтәрә – кеше һәм уны сорнап алған мөхит темаһы һиҙмәҫтән кеше һәм власть темаһына күсә. Тәбиғәт балаһы булғанлығын онотоп, үҙен уның батшаһы итеп тоя башлаған кешегә көтөлмәгән бәлә-ҡазалар ябырыла башлай:

Йә, әйтегеҙ, батшаларҙан
Кем һуң күргән игелек?
Күпме йәшәп була шулай
Иҙелеп тә тибелеп?

Хатта сабыр тәбиғәттең
Түҙемлеге ҡаҡшаны,
Тәхетенән төшөрмәксе
Самозванец батшаны.

Цунами, торнадо, ер тетрәүҙәр, вулкандарҙың йәнләнеүе, ағыулы ямғыр яуыу кеүек катаклизмдарҙы һанап үтә лә, һуңғы строфала шағир төп һүҙен әйтә:

Тәбиғәттең бына шулай
Үҙен һаҡлау сараһы.
Беҙгә нисек батша түгел,
Бала булып ҡалаһы?

Үрҙә Марат Кәримовтың эстетик ҡараштарына бәйле һүҙ сығып ҡуйғайны. Шуға бер аҙ туҡталып китеүҙе урынлы һанайым. Әлбиттә, әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәренең (шағирмы ул, прозаикмы, драматургмы, тәнҡитсеме, әҙәбиәт ғилеме белгесеме, артисмы, композитормы, рәссаммы, режисёрмы) эстетик зауыҡтары тураһында төплө һәм тәрән фекер йөрөтөү өсөн уларҙың бөтә ижады менән яҡшы таныш булыу мотлаҡ. Был талаптан М. Кәримов та ситтә ҡалалмай. Илле йылдан ашыу шиғриәт өлкәһендә ярайһы уҡ әүҙем һәм уңышлы эшләп килгән шәхестең эстетик ҡараштары бай һәм фәһемлелер, тип уйлайым. Һәм ул махсус тикшереүҙе көтә. Бында иһә, артыҡ төпкә төшмәйенсә, уның Яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас ижад ителгән «Шағир аэродромы», «Шиғырсылар», «Минең һүҙҙәр», «Һуңғы нөктә», «Илһам ҡошо менән һөйләшеү» тигән шиғырҙары хаҡында бер нисә генә һүҙ әйтеп үтергә иҫәп.

«Шағир аэродромы» – ифрат оригиналь шиғыр: Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең күркәм ижады уның тыуған ауылы Миңештенең символик образын мәңгеләштереүгә килтергән. Ләкин эш тышҡы биҙәктә генә – Миңештене аэродромға тиңләүҙә генә түгел. Фекер төптәрәк ята:

Назар Нәжми киң донъяға
Осмағанмы ошонан?
Уның ұлмәҫ йырҙарына
Һеҙҙең моңдар ҡушылған.
Ул бит осҡан ошонан.

Шағир шағир булamы ни,
Йыры ерҙә тыумаһа?
Рухы киреҫкайтмаҫ ине,
Ҡуныр урын булмаһа.
Йыры бында тыумаһа,

тип раҫлап, автор, тыуған ере талантлы шағирға илһам бирep, ҡанат ҡуйһа, исеме бөтә илгә таралған шағир иһә, үҙ сиратында, тыуған еренә дан өҫтәй, тигән идеяны алға һөрә һәм уның менән еңешкән берәүҙе ошо идеяға күндерә.

М. Кәримовтың эстетик талаптары уның «Шиғырсылар» тигән әҫәрендә бик асыҡ сағылған:

Йыйын юҡ-бар яҙыусыға
Рифма табылып тора.
Шиғырсыға шағир тигән
Исем тағылып тора.

Автор, шағир менән шиғырсы араһында ҙур айырма ятҡанлығына ишара яһап ҡына ҡалмай, уға хатта төртөп күрһәтә. Һәм, рифмалар табылып торһа ла, шиғри юлдар әтмәләгән һәр кем шағир була алмай, тигән фекерҙе ҡеүәтләй. Юл ыңғайында шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә мөмкин: әҙәбиәткә һәм сәнғәткә булған юғары талапсанлыҡ М. Кәримовтың элегерәк яҙылған шиғырҙарында ла һәр ваҡыт һиҙелеп торҙо. Был талапсанлыҡ йыш ҡына юмор ҡалыбына һалып бирелеүсән булды.

Марат Кәримов эстетикаһында һүҙҙең көсөн – ҡеүәтен баһалауға, уның бәҫен һаҡлауға, ҡәҙерен белеүгә зур әһәмиәт бирелә. Ошо йәһәттән уның строфаларға бүленмәгән «Минең һүҙҙәр» тигән ун алты юллыҡ шиғыры бик үҙенсәлекле. Автор ҡарашынса, әгәр күрә һәм тоя белһәң, һүҙҙең ҡеүәте беҙҙе уратып алған бөтә мөхиткә таралған. Уны дауылдарҙа ла, бурандарҙа ла, урмандарҙа ла, Иҙел тауышында ла, ғашиҡтар күңелендә лә, һандуғаслы таңдарҙа ла һиҙемләргә мөмкин:

Шул һибелгән һүҙҙе йыйып алаһы бар,
Йыйып алып, шиғри көйгә һалаһы бар.
Берәйһенә кәрәге лә тейеүе бар,
Был шағирға рәхмәт инде, тиеүе бар ...

Йөкмәткеһе менән «Һуңғы нөктә» тигән шиғыр ҙа бик тормошсан яңғырай. Уның лирик геройы дуҫтар һәм дошмандар хаҡында фекер йөрөтә. Дошман, һин үлгәс тә, дошман булып ҡала – йылан шикелле һинең исемеңде сағыуын дауам итә. Лирик герой иһә, ерҙән киткәс, уның өсөн һуңғы һүҙҙе барыбер дуҫтары әйтеренә, һуңғы нөктәне лә улар ҡуйырына өмөтләнә.

Башҡортса ла, татарса ла бер төрлө яңғырап, бер төрлө яҙыла торған бик матур бер һүҙ бар. Ул – илһам. Рус телендә лә йәмһеҙ түгел был һүҙ. Ни өсөн шулай? Сөнки уның йөкмәткеһе матур. Өс телдә лә ул башлыса шиғри әҫәрҙәрҙә йышыраҡ ҡулланыла. Шул уҡ ваҡытта ул үҙе лә шиғри әҫәрҙәр ижад иткәндә алыштырғыһыҙ ярҙамсы булып тора. Бына ошо һүҙгә тағы берәүҙе өҫтәп, М. Кәримов «илһам ҡошо» тигән үҙенсәлекле генә символик образ тыуҙырған. Хәтерләмәйем, быға тиклем шиғриәттә был образ булғандырмы, юҡмы – һүҙ көрәштерә алмайым. Һәр хәлдә, «илһам шишмәһе», «илһам сығанағы» һәм шуның кеүек башҡа һүҙ бәйләнештәренә – иш янына ҡуш ул. «Илһам ҡошо менән һөйләшеү» тигән шиғырҙа иһә был образ йәнле кешегә әйләнгән һәм шағир уның менән диалог ҡороп ебәргән. Илһам ҡошоноң шағир хәтеренә төшөргән бына был һүҙҙәрендә шаянлыҡ та, етдилек тә бергә ҡушылған:

– Календарҙа ҡыҙыл көндәр
«Ял ит!» тиеп тора ҡотлап.
Уларҙы ла отпускыға
Плюслатып ҡуйыу мотлаҡ.

Шағир Илһам ҡошоноң отпускыла булыуы менән килешә килешеүен, әммә ул бөтөнләй юҡ була күрмәһен, тигәнерәк хәүефен дә йәшермәй. М. Кәримовтың күп кенә шиғырҙарына хас булғанса, бынығы ла юмор сатҡыларынан мәхрүм түгел

– Илһам ҡошом, берүк, мине
Ике ҡулһыҙ итә күрмә.
Күпме кәрәк – ял ит, әммә
Пенсияға китә күрмә!..

Әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәренең эстетик ҡараштары уларҙың ҡәләмдәштәренә, сәхнәләштәренә булған мөнәсәбәттәрендә лә сағылыш табыусан. Ә ул мөнәсәбәттәр иһә төрлөсә белдерелергә мөмкин: теге йәки был айҡанлы яҙылған мәҡәләләрҙә, берәй ваҡиға уңайы менән телдән әйтелгән сығыштарҙа, шиғри йәки башҡа төр әҫәрҙәрҙә, һ.б., һ.б. Ошо йәһәттән М. Кәримовтың «Әнғәм Атнабаев үлгәс...», «Мостай Кәримгә һикһән йәш тулғас яҙылған шиғыр», «Төш» исемле әҫәрҙәре иғтибарға лайыҡлы.

«Әнғәм Атнабаев үлгәс ...» – күләме яғынан бәләкәй генә шиғыр: дүртәр юллы өс строфа һәм биш юллы бер строфанан тора. Йәмғеһе – ун ете юл. Ә шул ун ете юлға тәрән фекер төрөлгән, хатта фәлсәфәүи фекер, тип әйтер инем. Һүҙ унда бер Атнабаев хаҡында ғына түгел, йәшәү менән үлем арауығының асылы тураһында бара. Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән һүҙҙәр ярҙамында шиғырҙа Әнғәм Атнабаевтың үлемһеҙ образы тыуҙырылған.

Өҫтә исемдәре аталған өс шиғырҙың икеһе Мостай Кәримгә арналған. Тәүгеһе – шағир иҫән сағында, һикһән йәшлек ҙур юбилейын билдәләгәндә, икенсеһе, ҡыҙғанысҡа күрә, уның вафатынан һуң яҙылған. Тәүгеһендә авторҙың тыйнаҡлығы, итәғәтлеге, инсафлығы күҙгә бәрелеп тора:

Риза булһа, мин әҙермен
Шуға һүҙ бирешергә:
Уның һикһән йәшен генә
Урталай бүлешергә.

Әлбиттә, шаяртып әйтелгән был һүҙҙәрҙә кесе Кәримовтың олоһона ҡарата булған ихтирамын шәйләмәй мөмкин түгел. Шуныһы мөһим:

бында бер ниндәй ҙә ярамһаҡланыу ҙа, юҡты – бушҡа, бушты – юҡҡа ауҙарырға тырышыу ҙа юҡ, бары тик бер фамилияны йөрөткән атаҡлы ике шағир араһындағы мөнәсәбәт кенә бар. «Төш» тигән шиғырҙа был мөнәсәбәт уғата ла асығыраҡ итеп күрһәтелгән: гүр эйәһенә әйләнгән Мостай Кәримдең һыны гел аҡ буяуҙар менән генә һүрәтләнгән. Әгәр Марат Кәримов, әҙәбиәтебеҙҙең юғары баҫҡысында урын алған М. Кәрим, Н. Нәжми, Ә. Атнабаев кеүек ҡәләм оҫталарына мөрәжәғәт итеп, уларҙың ижадында ауаздашлыҡ таба икән, был уның эстетик зауығын аныҡлап һәм эстетик кимәлен күрһәтеп тороусы фактор түгелме ни?

Шикһеҙ, эстетика – бик ҡатмарлы күренеш. Ул – беҙҙең бөтә булмышыбыҙҙа. Уға философияның бер тармағы, тип ҡараусылар ҙа булманы түгел; үҙаллы ғилем, тип раҫлаусылар ҙа табылып торҙо. Философиялағы кеүек, уның һәр өлкәлә лә осрай торған һәм ҡапма-ҡаршылыҡҡа нигеҙләнгән үҙ билдәләнештәре лә атап күрһәтелгеләне. Әйтәйек, гүзәллек һәм шыҡһыҙлыҡ; юғарылыҡ һәм түбәнлек; трагиклыҡ һәм комиклыҡ; бөтөнлөк һәм бүлгеләнгәнлек һ.б. Ҡайһы берҙә уға әхлаҡ ҡағиҙәләре лә ялғанып киткеләне. Шуға күрә, донъяла абсолют нәмә юҡлығын һәм бөтә нәмәнең дә тик сағыштырмаса ғына икәнлеген иҫтә тотоп, эстетика һәм философия категориялары тураһында ла өҙөп кенә, ҡырт киҫеп кенә фекер йөрөтөү мөмкин түгелдер. Быға М. Кәримов шиғриәте миҫалында ла ышанырға була.

«Ваҡланыу һәм наҡланыу» тигән шиғырҙың лирик геройы әҙәми затты ваҡланыуҙан, маҡтаныуҙан, кеше ҡайғыһына шатланыуҙан, башҡаларҙан бары тик мутлыҡ эҙләүҙән, аш менән атҡанға таш менән атыуҙан, ваҡ дан артынан ҡыуыуҙан наҡ булырға саҡыра. Ҡарағыҙ инде: егерме юллыҡ шиғырға күпме аҡыл һыйған! «Математик йыры» тип аталған шаян шиғырҙың да төбөндә тормош хәҡиҡәте ята:

Минус ир ... Минус ҡатын ...
Һорама тормош шартын.
Әле алдын күрһәтә ул,
Әле күрһәтә артын.

Йә булмаһа, «Ғүмерҙе мин һөйләм итеп күрәм ...» һәм «Ҡаҙҙарым» тигән шиғырҙарҙы алып ҡарайыҡ. Улар ҙа бит рифмаларға һалынған ҡоро һүҙҙәр теҙмәһе түгел: һәр ҡайһыһы – үҙе бер фәлсәфә, аҡыл төргәге. Дөрөҫ, йөкмәткеләре һәм формалары менән шиғырҙарҙың икеһе лә әллә ни ҙур ҡыҙыҡһыныу уятырҙай түгелдәр һымаҡ. Ләкин, ҡат-ҡат уҡып,

уйланып ултырһаң, уларҙың былай ғына ябай булып күренгәнлегенә төшөнә башлайһың.

«Ғүмерҙе мин һөйләм итеп күрәм ...»дең лирик геройы уйынса, мәҫәлән, һәр кемдең ғүмере (һәм уның менән килешмәй мөмкин түгел) – бер һөйләм. Шуға күрә, һәр кемдең йәшәү рәүешенә ҡарап, уның аҙағына ла төрлө тыныш билдәһе ҡуйыла. Әйтәйек, тыныс ҡына, артыҡ бошонмай, армай-талмай, янмай-көймәй генә йәшәгәндәрҙең ғүмер аҙағына ябай ғына нөктә ҡуйыла. «Һин кешеме?» тигән һынауҙы үтәлмәгән ғүмер ахырына һорау билдәһе ярашлылыр, тип вәғәз итә лирик герой. Ә бына ул үҙе донъя шаулатып йәшәгән. Яҙмыш уны йәлләп тормаған – хатта ергә аунатып типкеләгән. Ләкин ул бирешмәгән, шашҡан, ергә һыймай күктәргә ашҡан. Уның ошо йәшәү рәүеше күптәргә хуп килмәгән. Әммә, күптәргә хуп килмәһә лә, лирик герой, ахыр сиктә, ғүмеренең аҙағына һимеҙ өндәш билдәһе ҡуйылырына шиген белдермәй.

«Ҡаҙҙарым» да «Ғүмерҙе мин һөйләм итеп күрәм...»гә бирешерлек түгел. Йөкмәткеһе буйынса ла, төҙөлөшө йәһәтенән дә, фекер тәрәнлеге яғынан да. Уларҙың хатта күләмдәре лә бер үк. Был әҫәрендә шағир ҡыр ҡаҙҙарын – шатлыҡтарым, йорт ҡаҙҙарын – һағыштарым, тип атаған. Уларҙың икеһе лә шағир күңеленә инеп урынлашҡан. Тик, «ҡыр ҡаҙҙары, бейеклектәр ҡоса-ҡоса ҡанаттарын ҡаккан һайын, йыһандарҙа йырҙар» оса, йорт ҡаҙҙары иһә «ергә бәйләп ҡуйған яҙмыштарға күнгән ...». Һәм ошо сағыштырыуҙан кешенең Ерҙә йәшәү фәлсәфәһе тыуған. Лирик герой уны былай тип белдергән:

Әле һағыш, әле шатлыҡ,
Әле изән, әле түшәм.
Әле күккә күтәреләм,
Әле кире ергә төшәм.

Ә «Маймыл йылын ҡаршылағанда» тигән шиғыр «Ҡаҙҙарым»дан нимәһе менән кәм? Дүртәр юллы ете строфанан торған был шиғырҙа шаярҙып ҡына, майлап-яйлап, тоҙлап-бороslап ҡына ифрат тәрән фекер әйтелгән дәбаһа: хайуан исемдәре менән аталған йылдар бар, ә кеше йылы ҡайҙа һуң?

Беҙгә тигән шул йыл килһә,
Иркенләп тын алыр инек,

Исмаһам, бер кешеләрсә
Рәхәт йәшәп ҡалыр инек, –

тигән уфтаныу ҡатыш өмөттәре менән уртаҡлаша лирик герой.

Ижад практикаһында, билдәле булыуынса, шағир хыялында яралған образды һүрәтләүгә ҡарағанда, аныҡ шәхестең әҙәби һынын кәүҙәләндереү күпкә ауырыраҡ та, ҡатмарлыраҡ та, яуаплыраҡ та. Сөнки ундай шәхестең художестволы образын тыуҙырғанда ижадсының мөмкинлектәре һиҙелерлек сикләнгән – ул уңға ла, һулға ла тайпыла алмай. Ләкин, шул уҡ ваҡытта, был образ уҡыусының иғтибарын йәлеп итерлек, уның эстетик талаптарына яуап бирерлек булырға тейеш. М. Кәримов ошо ярайһы ғына ҡатмарлы бурысты уңышлы хәл итә, минеңсә. Юғарыла уның Н. Нәжми, Ә. Атнабаев, М. Кәрим тураһындағы шығырҙарына бер аҙ туҡталғайныҡ инде. Уларға «Брест батыры» һәм «Батырҙар ҡайтырҙар» тигәндәрен дә өҫтәргә мөмкин.

«Брест батыры»ның ҡҙәгендә – Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы Ришат Сәлих улы Исмәғилевтың юйылмаҫ һыны. Шығырҙың нигеҙ ташы – «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигән мәҡәл менән бәхәс. Автор раҫлауынса, уның геройы яҙмыш ҡолона әйләнмәгән, киреһенсә – яҙмышына үҙе хужа булған. Шығырҙа, хәтерҙә ҡалырлыҡ һыҙаттар ярҙамында, Брест батырының йәнле портреты тасуирланған. Минең быуын был шәхесте яугир ғена түгел, бәлки бөтә ғүмерен халыҡ мәғарифынә арнаған атаҡлы педагог итеп тә белә. Ә бөгөнгө быуын нисек икән? Хәҙер уларға ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе, Пушкиндың «Евгений Онегин»ын уҡығандағы шикелле, белешмәләргә таянып өйрәнергә ҡалмаҫмы?

Йөҙ ҙә ун ике юлдан торған «Батырҙар ҡайтырҙар»ҙың жанры тәғәйен генә билдәләнмәгән. Ғәҙәти лирик шығыр, тиер инең, күләме бик ҙур. Лирик поэмаға ла етеңкерәмәй. Бәлки, балладаға яҡыныраҡтыр? Әҫәрҙә һүҙ тарихи өс шәхес хаҡында бара. Рогервикта йәнен биргән Юлайҙың күҙен уның улы Салауат япҡан, доға ҡылған. Салауаттың күҙҙәрен уның яуҙашы Ҡәнзәфәр йомған. Ошонда беҙ Марат Кәримов яһаған тағы бер асышҡа тап булабыҙ. «Ни булды беҙгә, ни булды?» тигән шығырҙа Аллаға һылтанылһа, был юлы иһә Әжәл тере кеше шәйеһә индерелгән. Әжәлде телгә килтереп, автор унан былай тип әйттерә:

– Һинме ни әле был
Иң һуңғы бунтовщик?

Сираттағы строфала ул түбәндәгесә фараз итә:

Иң һуңғы бунтовщик
Кинәттән тынғандыр.
Ә уның күҙҙәрен
Кем генә йомғандыр?

Өс батырҙың һуңғы һулыштарын йәнле итеп һүрәтләү өсөн дүртәр юлдан торған ун алты строфа киткән. Ҡалған ун ике строфала уларҙың бөгөнгө көндәге яҙмышы хаҡында уй-фекер йөрөтөлә, шағир Ҡәнзәфәрҙең әле булһа беҙгә әйләнеп ҡайтмауына борсола:

Ә һинең исемең
Ҡайҙа һуң, Ҡәнзәфәр?
Хәтерҙән сыҡҡаныңмы,
Һин шулай уҡмы ни?
Хәҙерге быуынға
Кәрәгең юҡмы ни?

Шағирҙың әйтергә теләгәне һуңғы строфала бер төйөнгә төйнәлгән:

Үҙ халҡын ҡурсалап
Гел бергә, гел йәшәр
Юлаев Салауат,
Усаев Ҡәнзәфәр!

Һәм уның менән килешмәй булмай. Бөйөк рус халҡы үҙенең Минин һәм Пожарский, Разин һәм Болотников, Ермак һәм Сусанин кеүек данлыҡлы улдарын онотмай бит, ниңә әле беҙ үҙебеҙҙең арҙаҡлыларыбыҙҙы белмәмешкә-күрмәмешкә һалышырға тейешбеҙ? Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтке килә: Мостай Кәримдең «Салауат» тигән трагедияһында, Факиһа Туғыҙбаеваның «Сәләмемде еткер, Аҡсарлаҡ!» тигән һағышнамәһендә яҡтыртылған тема Марат Кәримовтың «Батырҙар ҡайтырҙар»ында көтмәгән-нитмәгән ерҙән яңы боролош һәм яңы һулыш алған да ҡуйған.

М. Кәримовтың быуат башындағы ижады хаҡында һүҙ барғанда, уның мөхәббәт лирикаһына ла ҡағылып китеү яҙыҡ булмаҫ. Сөнки ул был темаға ҡат-ҡат әйләнеп ҡайта ғына түгел, унан бөтөнләй айырылмай, тип

әйтерлек. Шуны билдәләп үтеү ҙә етә: «Ағизел»дең биш һанында донъя күргән алтмыштан артыҡ шиғырҙың ун бишләбе мөхәббәт темаһына арналған. Шиғыр яратыусыларҙың хәлен әҙ генә булһа ла еңеләйтеү өсөн, бында уларҙы һанап та китергә була: «Беләһеңме?», «Һағынам», «Белмәгәнмен», «Оҙата барам әле», «Үтә, тиҙәр», «Ҡояш яҙға ҡараны», «Ғашиҡтар яҙмышы», «Ниагара», «Ҡарама һин миңә, ҡарама ...», «Шул етә», «Иҫәрлек», «Яңғыҙлыҡ», «Ихтимал», «Ни хәлдәр итәм инде».

Һөйөү тураһында шул тиклем күп яҙғас, был шиғырҙарҙың авторы донжуанлыҡты яҡлаусы түгел микән, тигәнерәк шик тыуып ҡуя күрмәһен. Юҡ, әлбиттә. Ул һис тә ундай заттҡа оҡшамаған. Киреһенсә, уның өсөн һөйөү һәм һөйөлөү – хайуандар донъяһында аҙашып йөрөгән елғыуарҙар морале түгел (әгәр уны мораль тип атап булһа әле!), ә уларҙан ғәйәт өҫтөн тороусы (хатта сағыштыра алмаҫлыҡ!) хистәр нескәлеге, күңел сафлығы, ҡараштар берлеге, аҡылдар ярашлығы, зауыҡтар таплығы.

«Белмәгәнмен...» тигән бәләкәй генә шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, ни өсөн һөйгәне бар ерҙә донъяның башҡасараҡ булыуын, ҡояштың да яҡтыраҡ яныуын, эскән һыуҙарҙың да татлыраҡ тойолоуын, ул йылмайғанда тормоштоң уғата ла йәмләнеп китеүен, ҡара төндөң хатта сыуаҡ көнгә әйләнгәндәй тойолоуын аңларға, һөйгәне атлап уҙған ерҙә гөлдәр шытыуының серенә төшөнөргә тырыша. Ул серҙе лирик геройҙың ҡолағына елдәр бышылдай. Сихри көс булып тойолған был серҙең сәбәбе ябай ғына икән: лирик герой һөйгәнен бик ныҡ яратҡан өсөн ул шулай сихри көскә эйә булып күренгән.

М. Кәримовтың бәғзе шиғырҙарында ҡылдан да нескә һөйөү хисе әкренләп кенә тәрән фекергә әйләнеп ҡуйыусан. Интим тойғоларҙы сағылдырған «Беләһеңме?» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, башта:

Яңы йылды ҡаршыларға
Саҡырам, киләһеңме? –

тип өндәшә лә, һуңынан:

Аҡ бәхеттәр ҡаршыларға
Саҡырам, киләһеңме, –

тип тамамлай. «Беләһеңме?» кеүек, «Һағынам» да – үтә лирик шиғыр. Уның геройы, тәьҫирләнеп китеп, үҙенең тәүге мөхәббәтенә бәйле

хистәре менән уртаҡлаша, хәтерендә һаҡланған осҡон, усаҡ һымаҡ, тоҡанып китерҙәй тойола уға.

Һөйөү һәм һөйөлөүгә шағир кеше психологияһындағы һәм уның бөтә булмышындағы иң көслө, иң үҙгәлекле сифат итеп ҡарай, уны юғары кимәлле, таҙа килеш күрге килә. Ошо йәһәттән «Үтә, тиҙәр» һәм «Ниагара» тигән шиғырҙар характерлы. «Үтә, тиҙәр»ҙең төп идеяһы – барыһы ла үтә, тиһәләр ҙә, һөйөү тойғоһоноң, мөхәббәт шауҡымының мәңгелек күренеш икәнлеген яҡлау, был уй-тойғоларҙан һәм хистәрҙән хатта пәйғәмбәрҙәрҙең дә азат булмағанлығын кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫлау. «Ниагара»ла иһә хистәрҙең үҙенсәлекле бер хәрәкәте һүрәтләнгән. Йәшлектә ул Ниагара шарлауығына тиң булған. Тора-бара, һайыҡҡан, арта-бан иһә, бөтөнләй тынып ҡалған. Хәҙер инде Ниагара лирик геройҙың ҡолағында ғына шаулағандай. Ваҡыт үткән һайын, ул шаулау ҙа тына бара.

Тәү ҡарамаҡҡа, был ике шиғыр араһында ниндәйҙер ҡаршылыҡ та бар һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта бында бөтәһе лә тәбиғи, тормошсан. Был фекерҙе «Шул етә» тигән шиғыр ҙа ҡеүәтләгәндәй. Унда һүҙ йылдар үтеү менән ике аралағы һөйөү хистәренең бер аҙ үҙгәреүе хаҡында бара. Башта лирик герой, «Хәҙер инде күңелем штатында ундай вазифа юҡ – ҡыҫҡарҙы», ти ҙә, һуңынан былай тип төҙәтеп ҡуя:

Юҡ, был түгел һинән һыуыныу ҙа,
Беребеҙҙең беребеҙ туйыу ҙа.
Миндә – һин бар хәҙер, һиндә – мин бар,
Миңә етә шуны тойоу ҙа.

Шулай итеп, шағир ике аралағы бик нескә тойғоларға ҡағылған һәм уны шундай уҡ нескә итеп һүрәтләп биреүгә ирешкән.

Әлбиттә, юғары хистәрҙе юғары зауыҡ менән тасуирлау өсөн юғары оҫталыҡ кәрәк. Халыҡ шағиры тигән дәрәжәле исемде йөрөткән әҙиптә был маһирлыҡ етерлек. Уны өҫтә тикшерелгән бөтә шиғырҙарҙа ла күрергә була. Ә бына «Ҡарама һин миңә, ҡарама...» тигәнен мөхәббәт лирикаһының өлгөһө, тиер инем. Күләме яғынан ул зур ҙа түгел – ни бары ун һигеҙ юл. Ләкин лирик геройҙың уй-хистәре, эске халәте шул тиклем нескә итеп күрһәтелгән, урынһыҙға ҡулланылған бер генә һүҙ ҙә тапмаҫһың унда. Бәләкәй генә шиғырҙа лирик геройҙың бөтә тормош юлы, уның мөхәббәт күгендә кисергән уй-тойғолары ышандырырлыҡ итеп асып бирелгән.

Марат Кәримовтың тәбиғәтенә хас сифат – шаянлыҡ – уның мөхәббәт темаһына яҙылған шиғырҙарында ла үҙен һиҙҙермәй ҡалмай. Ләкин ул – тупаҫ шаярыу түгел, ә үҙ-үҙенән еңелсә көлөү. Әйтәйек, «Ихтимал» тигән шиғырҙың лирик геройы, төймәһеҙ зәңгәр күлдәк кейгән йәш ҡыҙҙы осратҡас, «Ирендәрем иренеңә тейеүе бик ихтимал», тип, хыялланып ала икән, уның ни ғәйебе бар?

Йәиһә, «Иҫәрлек» тигән шиғырға иғтибар итәйек. Тәүге йәренең иҫәнме-юҡмы икәнлеген белергә теләгән лирик герой таң алдынан иҫкән елдәргә мөрәжәғәт иткәс, уларҙан шундай яуап ала:

– Нисек хәтерләйһе иттең,
Ҡайҙа булдың әлгәре?
Биш намаҙын ҡалдырмаған
Ул ҡарсыҡ иҫән, – тиҙәр, –
Һиңә иһә ул һаман ҡыҙ,
Әй иҫәр, иҫәр! – тиҙәр.

Ниһайәт, тағы бер шиғыр – был мәкәләләә файҙаланыласаҡ һуңғы шиғыр. Ул «Ни хәлдәр итәм инде» тип атала. Төҙөлөшө-йөкмәткеһе йәһәтенән «Шул етә» менән «Иҫәрлек»кә яҡын тора. Ғүмере үтеп барған лирик герой, йәш саҡтарын иҫкә төшөрөп, аптырауға ҡалғанын белдерә:

Аҫыл заттар эргәһенән
Тып-тыныс үтәм инде.
Әллә ҡыҙҙар үҙгәргәндәр,
Әллә мин бүтән инде?
Ни хәлдәр итәм инде ...

Барҙыр инде, барҙыр, икеһе лә барҙыр: ҡыҙҙар ҙа үҙгәргәндер, лирик герой ҙа шул килеш кенә ҡалмағандыр. Ә бына шағир Марат Кәримов үҙе булып, «поэзия короле» булып ҡалыуын дауам итә. Әгәр алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа ул, шиғырҙарын уҡып, клуб түшәмдәрен күтәрерҙәй алҡыштар яулаған булһа, хәҙер иһә «Ағиҙел» биттәрендә үҙ уҡыусыһын табып, уны тирә-йүнебеҙҙә барған хәл-ваҡиғалар тураһында тәрәнтенерәк уйландырырға тырыша. Ошо йүнәлештә уға яңы уңыштар, яңы асыштар юлдаш булһын.

2008, июнь

«БЕҘ БИТ ӘЛЕ ҺАЛДАТ УЛДАРЫ…»

2007 йылғы октябрь һанында «Ағизел» журналы, Әхмәзин Әфтәхтең 60 йәшен билдәләп, уҡыусы иғтибарына «Аҙымдарым хәҙер олпатланды...» тигән шиғырҙар шәлкемен тәҡдим иткәйне. Ижадын һәм тормош юлын яҡтыртҡан әҙер мәҡәлә булмағанғалыр инде, авторҙы юбилейы менән ихлас ҡотлап, уның тураһында кескенә белешмә лә бирелгәйне. Шәлкемгә атама «Ҡылыс һелтәп сабыр саҡтар үтте...» тигән шиғырҙан алынған. Унда бындай юлдар бар:

Аҙымдарым хәҙер олпатланды,
Мин үҙем дә үҙем түгелмен.
Йондоҙҙарға әйҙәр ярһыу хистәр
Үткән юлдарыма түгелде.

Дүртәр юллы өс кенә строфанан торған был шиғырҙың лирик геройы менән автор араһында, айырмаға ҡарағанда, оҡшалыҡ күберәк һымаҡ. Шиғырҙы диҡҡәт менән уҡып сыҡҡас, беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа, ҡылыс һелтәп сапҡан балалыҡ йылдары күптән артта ҡалған, хәҙер инде аҙымдары олпатланған, иңен заман йөктәре баҫҡан ир-ат һыны пәйҙә була. Йәшлектәге ярһыу хистәре лә ҡайҙалыр юғалған төҫлө уға. Кеше көлдөрмәйем, тип, ашыҡмайса ғына йәшәп ятһа ла, ваҡыттың барыбер үҙенекен иткәнлеген дә яҡшы аңлай лирик герой, сөнки ваҡыт тигәнең елдереп ағып ҡына тора, әйтерһең дә, бәндәне һуңғы бәйгеһенә саҡыра.

Бына ошондай яманһыуыраҡ та, бошонҡораҡ та, һағышлыраҡ та уй-хистәр кисереп йәшәп яталар лирик герой менән автор. Күрәһең, йәше олоғайланғанын һиҙә башлағас, бөтә кеше лә берҙәй кисерә торған уртаҡ хистәрҙер былар. Тик ижад ҡаҙанында ҡайнаусыларҙа, айырыуса – шағирҙарҙа, ул көслөрәк тә, тәрәнерәк тә, нескәрәк тә булалыр. Шулай тимәҫ инем, иллеһе менән алтмышы араһында Тимер Йосопов та «Ауырая аҙымдар...» тип уфтанып ҡуйғайны бит. Туҡһанынсы йылдар башында баҫылып сыҡҡан бер китабын хатта ошо исем менән атағайны ул.

Был сағыштырыу – һүҙ эйәрә һүҙ сыҡҡандан ғына. Һүҙгә һүҙ эйәртә башлаһаң, Ә. Әфтәхтең «Мин үҙем дә үҙем түгелмен» тигән

юлы менән Н. Нәжмиҙең «Бер туғандар» поэмаһындағы «Мин бит хәҙер түгел мин генә» тигән юлы араһында ла ниндәйҙер фекер уртаклығы барлығын шәйләргә булыр ине, мәгәр. Ләкин оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар эҙләү – әлегә төп маҡсат түгел. Бында иһә күҙгә бәрелеберәк торғандарына ғына иғтибар ителде. Төп маҡсат – Ә. Әфтәхтең һуңғы йылдарҙағы шиғриәтен күҙ уңынан уҙғарып, уның хаҡында редакция биргән белешмәне әҙ генә булһа ла киңәйтергә тырышыу.

Әхмәҙин Әфтәх – һуғыштан һуң тыуып үҫкән, әҙәбиәткә алтмышынсы йылдарҙа юлланған быуын вәкиле. «Аңлаһалар, аңлай ағайҙар» тигән шиғырында ул, быуындаштарына хас дөйөм үҙенсәлекте билдәләп, юҡҡа ғына былай тип әйтмәгәндер:

Беҙҙең яҙмыш тамсы һыуҙай оҡшаш,
Һуғыштан һуң тыуған малайҙар.
Күңелдәрҙә дауыл уйнағанын
Аңлаһалар, аңлай ағайҙар.

Һәр осорға хас булғанса, был быуын вәкилдәре лә әҙәбиткә төрлөсә килде. Бәғзеләре – «тулҡын-тулҡын» булып, ә күбеһе – берәм-һәрәмләп. Бәғзеләре – бик йәшләй үк китап сығарып өлгөрҙө, ә күбеһе ул бәхәткә бик һуңлап ҡына өлгәште. Шиғриәт юлын һайлаған Әхмәҙин Әфтәхтең дә әҫәрҙәре матбуғат биттәреңдә байтаҡтан бирле күренгеләп килһә лә, «Йәшлегем урамдары» тигән тәүге йыйынтығы туҡһанынсы йылдар башында ғына донъя күрҙе. Етмәһә, алтмыш бер шиғырҙы берләштергән был йыйынтыҡ үҙаллы китап түгел, ә «Йәш шағирҙар тауышы» серияһының «Шарлама» (1993) тип аталған баҫмаһы эсендә.

Әйтергә кәрәк, Рәмил Ҡол-Дәүләт төҙөгән был баҫмаға бик матур аннотация бирелгәйне. «Китаптағы авторҙарҙың тауышы, – тиелгән унда, – гүйә таштан ташҡа һикереп, ҡояш нурҙарында “йым – йым” килеп уйнаған гәлсәр тамсылар. Бына шул дәртле һәм аһәңле, шаян һәм сая, моңло һәм зарлы тамсы-тауышытарҙан хасил булды әлеге “Шарлама”». Тик, «Йәш шағирҙар тауышы» тигән эмблемаһы булһа ла, «Шарлама»ға ингән авторҙарҙың береһенә күптән инде дүрт тиҫтә тулып уҙғайны. Һәм ошонда келт итеп уҙған быуаттың икенсе яртыһындағы әҙәби тормошҡа хас булған ҡайһы бер күренештәр иҫкә килеп төшә.

Ул заманда, бигерәк тә алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа, әҙәби-нәфис китаптар күберәк тә, йышыраҡ та сыға торғайны. Иң

мөһиме, был китаптарҙы республикабыҙҙың бөтә мөйөштәрендә лә (хатта ҡараңғы тип һаналған ауылдарҙа ла) осратырға һәм һатып алырға була ине. Башлап яҙыусы йәштәргә лә иғтибар ҙурыраҡ ине һымаҡ ул саҡта. Ғәҙәттә улар «Йәш көстәр» тигән әҙәби альманах биттерендә һынау үтте. Артабан өлкән ағаларының фатихаһы һәм хәстәрлеге менән баҫылып сыҡҡан үҙаллы китаптарын (кеҫәгә һыйышлы ғына булһа ла) күреп ҡыуандылар. Ҡыҙғансыҡа ҡаршы, өлкәндәр бағлаған өмөттө аҡламағандар ҙа булғыланы. Ләкин үҫеш процесы барыбер туҡталманы һәм әҙәбиәтебеҙ йәш таланттар иҫәбенә тулыланыуын дауам итте. Ул осорҙағы юбилейҙар, китап уҡыусылар менән осрашыу кисәләре тураһында һөйләп тә тораһы юҡ – улар ифрат йәнле һәм ысын күңелдән була торғайны.

Олораҡ быуын кешеләре хәтерләйҙер эле: алтмышынсы йылдар ахырында Өфө урамдары Әнғәм Атнабаев, Фәрит Иҫәнғолов, Вәзих Исхаков һәм егерме һигеҙҙә тыуған башҡа әҙиптәрҙең юбилей тантанаһына сыҡырған афишалар менән тулды. Улар эстетик талаптарға яуап бирерлек итеп, типография ысулы менән баҫып сығарылығайны. Яҙыусы халҡы телгә уҫал бит ул: күп тә үтмәне, ҡәләмдәш дуҫтары, мәрәкәләп, юбилярҙарға «кырҡмыштар» тигән ярлыҡты йәбештереп тә ҡуйҙы. Бер нисә йылдан һуң Атнабайҙың «Беҙ – егерме һигеҙенселәр» тигән шиғыры донъяны шаулатты. Ундағы берсә шаяныраҡ, берсә моңһоуыраҡ яңғыраған бына был:

Һуғыш беҙҙе, колаҡтарҙан тартып,
Вакытынан иртә өлгөрттө:
Кистән егет итеп йоклатты ла
Таң атыуға инде ир итте, –

тигән юлдар һис бер тотҡарлыҡһыҙ тиҫтерҙәренең йөрәк түренә инеп ятты.

Лирик сигенеүгә тартым был хәтирәләрҙең ностальгия булып тойолоуы ла ихтимал. Ләкин улар – ностальгия түгел. Үткән заманды да, хәҙергеһенең дә ыңғай–тиҫкәре яҡтарын бер аҙ самалайым кеүек. Хәтирәләр иһә шул мөхитте күпмелер күреп белгән, уның йылыһын тойоп йәшәгән Әхмәҙиндең (бер ул ғына микән әле!) тәүге йыйынтығы көттөрөберәк сығыуының сәбәптәрен аңларға тырышыуҙан ғына. Ярай әле унан һуңғылары бер-бер артлы тиерлек донъяға килде: «Тауҙар беҙҙә күккә ашҡан» (1993), «Асыулы болот» (1994), «Ҡаяларҙа томан» (1997).

Яңы быуатты ул «Ҡуласа» (2002) исемле күләмле генә йыйынтыҡ менән башлап ебәрҙе. Ә. Әфтәхтең һуңғы ете-һигеҙ йыл дауамында «Ағиҙел» биттәрендә баҫылып килгән шиғырҙарына ҡарап та (әгәр уларҙы бергә туплаһаң, матур ғына тағы бер китап барлыҡҡа килер ине), хәҙер ул – бөгөнгө башҡорт поэзияһында әүҙем һәм уңышлы ғына эшләүсе ижадсыларҙың береһе, тип әйтергә мөмкин.

Шағирҙың үҙен дә, ижадын да яҡшыраҡ белгең килһә, уның тыуып – үҫкән яҡтарында булырға кәрәк, тийеүсәндәр. Был, бәлки, дөрөҫ-тәҙлер. Тик бөтә шағирҙың да тыуған-үҫкән яҡтарында булыу – тормошҡа ашыр хәл микән? Назар Нәжми менән Мостай Кәрим нисәмә йылдар буйы бер һуҡмаҡтан атлаһалар ҙа, «Ҡара һыуҙар»ҙың авторына «Ҡайындар» авторының Миңеште ҡапҡаһын фәҡәт ул гүр эйәһенә эйләнгәс кенә асып инергә насип булды. Шуға күрә беҙгә башлыса шағирҙарҙың әҫәрҙәрен уҡыу менән генә сикләнергә ҡала.

Ә шулай ҙа бынан күп йылдар элек (ҡырҡ йылдан ашыу) миңә Әхмәҙин Әфтәхтең тыуған яҡтарында булырға яҙғайны. Ул яҡтарҙа Ағиҙелдең тар ҙа, һай ҙа икәнлеген, тауҙарҙың ысынлап та күккә ашҡанын, ҡаяларға төман ятҡанын үҙ күҙҙәрем менән күргәйнем. Тәбиғәттең ошо мәшһүр ҙә, үҙенсә гүзәл дә күренештәре Әхмәҙиндең шиғриәт юлын һайлауында ниндәйҙер роль уйнамай ҡалмағандыр, моғайын. Шиғриәт юлына ныҡлап аяҡ баҫҡас иһә рәссамдар күҙен ҡыҙыҡырлыҡ шул гүзәл күренештәр шағирҙың ижадын даими һуғарып-туҡландырып, уға һәр ваҡыт яңынан-яңы көс-дәрт өҫтәп торғандыр һәм әле лә тораҙыр, уның әҫәрҙәренә хас ябайлыҡ, тәбиғилек, эске бөтөнлөк тә шунан киләлер, тип уйлайым. Билдәле рәссам Әхмәт Лотфуллиндың яҡты иҫтәлегенә арнап яҙылған шиғыр, мәҫәлән, шуға асыҡ дәлил түгелме ни? Уның ҡайһы бер строфалары хәбәр һөйләүгә тартып ҡуйһа ла, рәссамдың, йәйге ял осорҙары еткәс, шағирҙы тыуған яҡтарына әйҙәгән бына был һүҙҙәре бер кемде лә (тәү сиратта – ижадсыларҙы!) битараф ҡалдырмаҫтыр:

Көтәләрҙәр туған-тыумасалар,
Атай-әсәй ятҡан зыярат.
Ерҙә-күктә ҡоштар моңланғанда
Өфөләрҙә ҡалыу – хыянат.

Минең рәсем, һинең шиғырҙарың
Йөрөйрҙәрҙәр унда аҙашып.

Бында ятып ауыл тураһында
Яҙып булмаҫ инде алдашып.

Тыуған-үҫкән төйәгенә мөкиббәнлеге, уның менән ғорурланып ҡына ҡалмай, ғүмер бакый унан һут та алып йәшәгәнлеге Ә. Әфтәхтең башҡа әҫәрҙәрендә лә йыш ҡына сағылып китә. Элегерәк яҙылған «Ҡала» исемле ыҡсым ғына бер шиғырҙың ауыл ерендә, тауҙар иленде, сая ҡылғандар шауын тыңлап үҫкән лирик геройы, ҡалаға килеп юлыҡҡас, үҙен үгәй бала шикеллерәк итеп һиҙә башлай: табандары «тоймай ер йылыһын»; ҡайҙа ҡарама – ҡолаҡ тондорғос шау-шыу; өҫкә ишелергә торған таш стеналарҙан тыны ҡыҫыла. Ҡалала йәшәгән кешеләрҙең психологияһы ла башҡасараҡ икән – эс серҙәрен бик сисеп бармайҙар, күберәк донъя малы артынан ҡыуалар.

Ләкин шағир гел үҙенең Белоретына, ундағы күккә ашҡан ҡаяларға ғына һоҡланып йәшәй икән, тиһәк, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине. Ризығы тартып, юлы төшкән һәр төбәктә лә Ә.Әфтәх матурлыҡ эҙләй, уны хәтерҙә ҡалырлыҡ шиғри юлдарға һалырға тырыша. Уның менән бергә беҙ Ырымбур далаларына ла барып сығабыҙ («Ырымбур далалары», «Күҙ талдырыр киңлектәрҙә...», «Юлдашта»), Силәбе яҡтарында ла йөрөп ҡайтабыҙ («Йырлы юл», «Тисем», «Кыҙҙарында сәбәбе»), үҙебеҙең Ишембай тирәләрен дә урап үҙмайбыҙ, тура килгәндә Ҡыйғы менән Асҡынын да ситтә ҡалдырмайбыҙ, Нөгөш ярҙарын да ят итмәйбеҙ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙе бөтә ерҙә лә тик матурлыҡ һәм шатлыҡ ҡына көтөп тормай шул: йыш ҡына күңелде ҡырған, кәйефте төшөргән, хатта тәрән уйға һалған хәлдәр менән дә осрашырға тура килә. «Күҙ талдырыр киңлектәрҙә...» тигән шиғырҙа, әйтәйек, Ырымбур далаларында тереклек итеп, көн күреп ятҡан милләттәштәребеҙ ата-әсәләренән бүленеп ҡалған йәтим балаларға тиңләнгән. Ярай әле, аралар алыҫ булһа ла, ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланған. «Тисем»дә һүҙ Силәбе өлкәһендәге атом заводы шартлау һөҙөмтәһендә үлем сығанағына әйләнгән йылға тураһында бара. Драматик хәл-ваҡиғаға таянып яҙылған был шиғыр һис тә ҡоро риторика түгел – уның нигеҙендә ысын поэтик ынйылар емелдәп ята.

Ә бына «Асҡындағы мишәр ҡыҙына» исемле шиғыр уғата ла драматиғыраҡ хәл-ваҡиғаларҙың һөҙөмтәһен яҡтыртыуға ҡоролған. Күҙ йәштәрен түгеп сиркәүҙән бер ситтәрәк ҡыңғырауҙар зыңын тыңлап торған яңғыҙ ҡатын һыны аша автор тарих төпкөлөнә ҡараш

ташлаған да, мишәрҙең ҡайҙан килеп сығыуын рәсми телмәр ярҙамында түгел, бәлки образлы фекерләү юлы менән йөрәктәрҙе тетрәкес итеп асып һалған. Идеяһы буйынса ла, эшләнеше йәһәтенән дә шиғыр, минеңсә, ифрат көслө яңғырай:

– Ғәжәпләнмә, ағай, мин – милләтһеҙ...
Бер ҡыҙымын мишәр халҡының.
Был сиркәүҙән килеп ялбарыуым
Күңелемә халҡым ялҡынын.

Ниңә сиркәүҙәнме?
Ошо сиркәү –
Сал тарихтың өнһеҙ шаһиты.
Милләт исеменән һөйләшәм мин,
Үткәндәрҙән тиеп: «Я и ты!»

Зинһар, ағай, бер һүҙ әйтмә, тыңла,
Ялыҡтырҙы өгөт, нәсихәт.
Мин башҡорт та, мин татар ҙа түгел,
Мишәрмен мин, шунда хәҡикәт.

«Ҡарт бөркөттөң әйткәне» тигән шиғырҙа ла Ә. Әфтәх бөгөнгөгә тарих күҙлегенән ҡараш ташлаған. Дүртәр юллы биш строфанан торған һәм аллегорияға ҡоролған был шиғыр М. Горькийҙың «Ыласын тураһында йыр»ын хәтерләтеп ҡуя (формаһы йәһәтенән, әлбиттә). Тере кеше шәйенә индерелеп, телгә килтерелгән ҡарт бөркөт монологы аша, меңәр битле китаптарҙа яҡтыртылған ғилми мәғлүмәтте автор егерме юллыҡ шиғырға һыйҙырған. «Өйөр йылҡы көтөүенән һығылды ерҙең биле», «Көндө баҫҡан килмешәктән һығыла Урал биле» кеүек сағыштырыу-метафораларҙы шағирҙың ярайһы ғына уңышлы поэтик табыштары, тиергә була. Быуаттар ҡауышҡанда ижад ителгән был әҫәр Ә. Әфтәхтең Силәбе, Ырымбур төйәктәренә бәйле артабанғы шиғырҙарына үҙенә күрә бер кереш һүҙ һымаҡ яңғырай хатта.

Ә. Әфтәхтең өҫтә телгә алып кителгән шиғырҙарын уҡып, уйланып ултырғанда, уҙған быуатҡа хас тағы бер хәл иҫкә килеп төштө. Ул заманда шағирҙар ҙа, ҙыусылар ҙа, сәхнә эшмәкәрҙәре лә алыҫҡараҡ юллана торғайны. М. Кәримдең «Вьетнам яҙмалары», «Болгар дәфтәре»,

Н. Нәжмиҙәң «Һиндостан сәхифәләре», М. Ғәлиҙең «Франция дәфтәре», «Монголия дәфтәренән» кеүек шиғри шәлкемдәре, сәйәхәтнамәләр (бында уларҙың бөтәһе лә түгел, тик күҙгә нығыраҡ салынғандары ғына күрһәтелде) тап ана шул донъя гиҙеп ҡайтҡас тыуған ижад емештәре булды ла инде. Хәҙер иһә беҙ Ырымбур менән Силәбенән ары китәлмәйбеҙ. Күптәр унда ла барып етәлмәй.

Хәйер, бер мин генә түгел, Ә. Әфтәх тә ошондайраҡ фекерҙә тора шикелле. Уның «“Шоңҡар” журналы егеттәренә» исемле шиғыры быға асыҡ дәлил булырлыҡ. Ҡарап тороуға һис кенә лә кеше хәтерен ҡалдырырға иҫәп тотмаған был әҫәрҙең (улай ғына ла түгел, уның атамаһы аҫтына йәйәләр эсендә «шаяртыу» тип тә өҫтәп ҡуйылған) лирик геройы, йәш ҡәләмдәштәре менән бер яҡлы ғына әңгәмә ҡороп ебәргән дә, үҙенең йәшлеген хәҙерге заман менән сағыштырып, ошо бәләкәй генә шиғри майҙанда ла, кинәйәләп-кинәйәләп кенә байтаҡ көнүҙәк мәсьәләләргә ҡағылырға өлгөргән.

Әйтәйәк, йәш сағында ул Ғәлимов Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһын яттан белгән (был инде «улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла» кеүегерәк яңғырай торғандыр: бөгөнгө мәктәптә балаларға белем биреү һәм үҙләштереү кимәле ниндәйерәк икән?); матур, уңған ҡыҙҙарҙы табыу өсөн лирик герой интернетҡа мөрәжәғәт итмәгән (быныһын «компьютерға ғына һалышып, әҙәм балаһы әкренләп үҙенең әске донъяһын ярлыландырыуға, тәбиғәттән бирелгән аҡыл-зиһен ҡеүәһен, тирә-йүндә йәйрәп ятҡан матурлыҡты ла, әшәкелекте лә һиҙемләү һәләтен юғалтыуға ғәфә бармаймы?» тиеберәк аңларға кәрәктер); тағы килеп, лирик герой илдең теләһә ҡайһы тарафына самолётта осоп, дуҫы менән осраша алған, сөнки ул заманда юл хаҡы «һуҡыр тин» генә булған; ололарға – хөрмәт күрһәтелгән, ә йәштәр эш урыны менән тәьмин ителгән. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, донъялағы хәл-ваҡиғаларға ҡарашыңды уҡыусы менән уртаҡлашҡанда, уны шалтырап торған риторика ярҙамында түгел, ә образлы фекерләү аша еткереүҙең тағы бер матур өлгөһөлөр был.

«“Шоңҡар” журналы егеттәренә»лә күтәрелгән мәсьәлә үҙған быуаттың егерменсе-утыҙынсы йылдар әҙәбиәтендә шаҡтай ғына ҙур урын алып торған «элек һәм хәҙер» темаһын хәтерләтеп ҡуя. Әлбиттә, был сетерекле, ҡатмарлы теманы яҡтыртҡанда бер яҡлы ғына, үтә өҙөп кенә фекер йөрөтөргә ярамайҙыр. Сөнки ҡайһы ғына заманды алып ҡараһаҡ та, «элек»тең яҡты һәм ҡараңғы яҡтары булған шикелле, «хәҙер» ҙә ул сифаттарҙан азат түгел. Быны Ә. Әфтәх тә яҡшы аңлай.

Шуға ла ул, «элек»те «хәҙер» менән, йәиһә «хәҙер»ҙе «элек» менән сағыштырғанда, йәшәйешебеҙҙең тиҫкәре күренештәренә күп осраҡта күҙ йәше аша йылмайып ҡарарға тырыша. Төрлө йылдарҙа ижад ителгән «Гонаһ», «Хат», «Төштөм күктән», «Яҙға сыҡтым», «Ҡара квадрат», «Өс бүлектән тора тамаша», «Бөйөк илдең бөлгәне», «Төнгө балконда», «Әйтәләрҙер һиңә, һылыу...», «Күтәрмә», «Ала-ҡола» тигән шиғырҙар шулай уйларға форсат бирә.

«Гонаһ»тарҙың тәүгеһе (ижад практикаһында һирәк осрай торған хәл: нишләптер Ә. Әфтәх, йөкмәткеләре йәһәтенән бөтөп, үҙаллы булһалар ҙа, бер юлы ике шиғырын ошо исем менән атаған; «Тулған ай» исемле шиғыры ла икәү уның) идея-эстетик яҡтан ҙур мәғәнәгә эйә – был донъяла кешенең тормошо гонаһ менән тәүбә араһында:

Көн йоҡламай, төн йоҡламай,
Үҙенә урын тапмай.
Шул гонаһты йыуыр өсөн
Мәккә юлдарын тапай.

Гонаһ ҡылып, тәүбә итеп,
Ғүмер юлдарын киҫә.
Үҙ тәүбәһе шаңдау булып
Кәйелеп артҡан төшө.

Дөйөм йөкмәткеһе, идея-эстетик йүнәлеше буйынса «Төштөм күктән» дә «Гонаһ»тан алыҫ китмәгән. Шиғырға ойоҡконо Әҙәм һәм Һауа тураһындағы дини риүәйәт һалған. Әҫәрҙән юмор еҫе аңҡып тора, сатира сатҡылары ла ялтлап китә:

Оҡшаманым аллаларға,
Фәрештә түгелмен шул,
Аҫтан өҫкә һелкетһәң дә,
Барыбер Әфтәхмен шул.

Күптән, күптән төштөм күктән,
Алйытып аллаларын.
Азан әйтеп ҡаршы алды
Еремдә муллаларым.

Ә бына «Хат» тигән шиғырҙа алла ла юҡ, мулла ла – бары тик тормош хәҡиҡәте генә бар. Шиғырҙың формаһы ла үҙенсәлекле: дуҫына яҙған хатында лирик герой үҙенең хәл–әхүәлдәре менән генә түгел, донъя хәлдәре менән дә уртаҡлаша. Автор билдәләүенсә, әҫәр Н.А. Некрасовҡа эйәреп яҙылған: атаҡлы рус шағирының «Кемгә Рәйсәйҙә йәшәү яҡшы?» тигән һүҙҙәре эпиграф итеп алынған. Күпмелер кимәлдә был һорауға асыҡлыҡ «Хат»тың дүртенсе строфаһында индерелгән:

Тик шуныһы... Хат яҙғансы
Хаҡтар артҡан һыуға–утҡа.
Көпә–көндөҙ, күҙ ҙә йоммай,
Талайҙар бит һис нахаҡҡа!

Эпиграфта яңғыраған һорауға яуап шиғырҙың һуңғы строфаһында бер аҙ асыҡлана кеүек:

Кәңәш бирсе, әллә миңә
Һайланырға депутатҡа?!
Бына кемгә Рәсәй-илдә
Бөтәһе лә яуа бушҡа!

Күҙәтеүемсә, Ә. Әфтәх строфиканы төрлөләндерергә ярата төшә. Һуңғы ваҡытта уның был мауығыуы уғата ла көсәйҙе һымаҡ. Хатта бер шиғыр эсендә лә дүрт юллыҡ традицион строфа менән бергә биш, алты, ике юлдан торған строфалар һыйышып йәшәүсән. Тик был алым һәр ваҡытта ла үҙен аҡлайҙырмы-юҡмы – уныһы инде икенсе мәсьәлә.

Шағирҙың ижад манераһына хас тағы бер үҙенсәлек: йыш ҡына ул шиғырҙың уртаһында, йә аҙағына табараҡ киҫкен боролош яһай ҙа көтөлмәгәнерәк һығымта яһап ҡуя. Бындай әҫәрҙәр, ғәҙәттә, символик йәнәшәлеккә, метафорик сағыштырыуҙарға ҡоролған була.

«Яҙға сыҡтым» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, оҙон ҡыштан һуң ҡояшлы, сағыу яҙға сығып, үләндә баҫып торған лирик геройҙың ҡыуанысы эсенә һыймай: «Йылы еле битте наҙлай, әсәйем ҡулы кеүек», ти ул. Ләкин йыл миҙгелдәре алмашынғанда лирик герой кисерегән шатлыҡ («Сабый кеүек сәпәкәйләп үләндә баҫып торам», тиһә лә), ул барыбер ҙә бала саҡтағы ғәмһеҙ, бер ҡатлыраҡ шатлыҡ түгел икә дә баһа:

Яҙға сыҡтым, күгүләндән
Көс алып баҫып торам.
Ҡаҡҡан-һуҡҡан был донъянан
Үҙемсә ҡасып торам.

Шиғырҙы бер аҙ серлерәк тә, шул уҡ ваҡытта көләмәсерәк тә яңғыраған ике юллы строфа ослап ҡуя:

Озайтырға миҙгелемде
Елкәне ҡашып торам.

Хикмәтле серлелек, хәйләкәр йәшеренлек Ә. Әфтәхтең «Ҡара квадрат» тип аталған шиғырынна ла ҡуҫҡан. Дөрөҫ, йөкмәткеһе буйынса ул «Яҙға сыҡтым»дан бик ныҡ айырыла. Әммә идея-эстетик асылдары йәһәтенән улар араһындағы ниндәйҙер яҡынлыҡты ла тоймай мөмкин түгел. Һуңғы шиғырҙа һүҙ бөгөнгө быуынға бигүк таныш булмаған Малевич атлы рус рәссамының XX быуат башында төшөргән «Ҡара квадрат» исемле һүрәте хаҡында бара. Ошо һүрәттә кәүҙәләндерелгән шомло ҡара бушлыҡ беҙҙең замандың зәңгәр экрандарынан һәм ҡайһы бер гәзит биттәренән көн дә тип әйтерлек ағылып торған буш фараздарҙы хәтерләткән лирик геройға. Ярайһы ғына уҫал яңғыраған был шиғырҙа ижадсыға аяҡ салыусы «аҡыллы баштар»ға ла «өлөш» сыҡҡан һәм уларға үҙенең ҡарашын белдерер өсөн автор ҡулай ғына ысул да тапҡан.

Әлбиттә, символик йәнәшәлек тә, метафорик сағыштыруҙар ҙа Ә. Әфтәхкә хәтле лә булған. Был өлкәләге тәүге аҙымдарҙы Ғ. Сәләм, М. Харис, Н. Нәжми, М. Кәрим кеүек остаздар яһаған, тигәнерәк фекер ҙә йөрөй әҙәбиәт тарихы буйынса яҙылған ҡайһы бер хәҙмәттәрҙә. Әлеге осраҡта иһә һүҙ шиғриәтебеҙҙә тупланған һәм йәшәп килгән бай традицияларҙы дауам итеү, уларҙы артабан да үҫтереү һәм байыктырыу тураһында ғына бара. Һәм ошо йәһәттән Әхмәҙин Әфтәх етди генә уңыштар ҡаҙана, тимәксемен.

Байтаҡ йылдар элек «Әҙәбиәт теорияһы» китабының «Лирика һәм лирик жанрҙар» тигән бүлегендә Ким Әхмәтйәнов былай тип яҙғайны: «Ҡобайыр – теге йәки был ижтимағи, әхлаҡи күренешкә халыҡсан баһа биреүсе поэтик монолог ул. Халыктың тормош тураһындағы философияһы был жанрҙа айырыуса яҡшы күренә». «...Ҡобайыр, үҙаллы жанр булып, героик эпос менән йәнәшә йәшәгән» тигән фекерҙе лә яҡлаған ғалим. Ким Әхмтйәновты иҫкә

төшөрөргә мине Ә. Әфтәхтең «Бөйөк илдең бөлгәне» исемле шиғыры мәжбүр итте. Сөнки шиғырҙың атамаһы аҫтына йәйәләр эсендә, «Ҡобайыр» тип яҙып ҡуйылған. Ул ысынлап та ҡобайырҙырмы, әллә авторҙың күҙ йәше аша сираттағы йылмайыуылырмы, иллә мәгәр дүртәр юллы дүрт кенә строфанан торған был шиғыр нәҡ ҡобайыр шикелле уҡыла: үҙенән-үҙе йырлап , көйгә һалыуҙы һорап тора. Йөкмәткеһе буйынса ул – беҙҙең тап һуңғы егерме йылдағы тормошобоҙоҙоң ҡағыҙ битенә төшөрөлгән һүрәте. Бөйөк илдең яҙмышын һәм булмышын образлы итеп күрһәтеү өсөн шағир ифрат матур художество формаһы һәм һүрәтләү сараһы тапҡан, тип өҫтәргә генә ҡала миңә.

Әйткәндәй, «Бөйөк илдең бөлгәне» – Ә. Әфтәхтең заман һулышы менән һуғарылған берҙән-бер әҫәре түгел. Антитезаға ҡоролған «Ала-ҡола» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, бөгөнгө ижтимағи-сәйәси һәм иҡтисади хәлебеҙ (иҫәпкә алығыҙ: шиғыр дүртәр юллы өс һәм биш юллы бер строфанан тора) хәтерҙә ҡалырлыҡ образдар, сағыштырыуҙар аша асып һалынған:

Яңы быуат. Һаман беҙҙә
Йәшәйештәр ала-кола.
Өҫтә тормош нурлы, тиҙәр,
Үрмәләйбеҙ бата-сума.
.....
Юлда саба машиналар,
Сит илдеке, ала-ҡола.
Мөйөш һайын хәйерселәр,
Хәйер һорап ҡулын һона.

Шуныһы мөһим, донъялар ни тиклем генә ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, тотороҡһоҙ булмаһын, Ә. Әфтәхтән лирик геройы төшөнкөлөккә бирелеүселәрҙән түгел. Ул еңелсә генә шаярып та, үйын-көлкө ҡороп та алырға мөмкин. Лирик геройҙың да, шул иҫәптән авторҙың да был сифаттары «Оялам», «Көлә-көлә ҡыҙҙар килә», «Аҡиҙелдә ҡыҙҙар һыу инә», «Әминә еңгәмә», «Төнгө балконда», «Нөгөш ҡыҙына», «Ҡоралай», «Еңгәләрем», «Тартма!.. Тартам!» тигән шиғырҙарҙа айырыуса асыҡ сағыла. «Оялам» тигән шиғырҙың ифрат оялсан лирик геройын, мәҫәлән, йәш сағында һылыу ҡыҙҙар ҡүҙ ҡыҫып шаяртҡан булһалар, хәҙер инһә ҡыҙҙар уның улына күҙ аталар, ә лирик геройға «ҡартлас» тип кенә ҡарайҙар.

«Ағиҙелдә ҡыҙҙар һыу инә»ләге лирик геройҙың да хәлдәре мөшкөл. Сыр-сыу килеп һыу ингән ҡыҙҙарҙы күҙәтеп ҡомда ятҡанда, уның ҡаны ҡайнай, үҙен ярға ырғытылған суртандай хис итә, ләкин бер ни ҙә ҡыла алмай, сөнки шартлар сиккә еткән йөрәген ауыҙлыҡлап, эргәһендә ҡатыны ята.

Был уйланыуҙарҙың инеш һымағыраҡ яңғыраған өлөшөндә «оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар эҙләү – әлегә төп маҡсат түгел», тип вәғәҙә иткәйнем дә, ләкин һүҙемдә тороп булмаҫтыр, ахыры. Маҡсат итеп ҡуймаһаң да, оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар осрап ҡына тора шул, ҡәһәрең. Ә. Әфтәхтең «Тартма!.. Тартам!..» тигән шиғырын уҡығас, нисек инде Н. Нәжмиҙең «“Яҙ! Яҙ!” – тиҙәр» исемле шиғырын хәтергә төшөрмәйһең? Үҙ ваҡытында был шиғырҙы К. Әхмәтйәнов бик ентекләп тикшергәйне һәм уның тәбиғәтен үҙе уйлап тапҡан «поэтик аймылышлыҡ» тигән өр-яңы термин менән билдәләгәйне. Ә. Әфтәхтең дә «Тартма!.. Тартам!..»ы ошо ҡалыпҡа һыя түгелме ни? Ул да бит, Н. Нәжми шикелле, шиғырына ике төрлө мәғәнә төргән. Лирик геройға, сәләмәтлеген һаҡларға өндәп, тәмәке тартыуын ташларға кәңәш итәләр, ә ул был кәңәште икенсегә бора:

Дөнъя йөгө – иңдә, көс-хәл барҙа
Тартам әле, шөкөр, тартайым.
Йөк аты бит буразнаны боҙмай,
Тарта-тарта алға атлайым.

«Тартма!.. Тартам!..»дың аҫтына автор йәйәләр эсендә «Шаярыу» тип яҙып ҡуйған. Ысынлап та, шиғыр – шаян да, мәғәнәле лә. Өҫтәүенә – ҡыҫҡа ла. Нәҡ Нәжмисә.

Оҡшашлыҡтар хаҡында һүҙ сыҡҡас, Ә. Әфтәхтең «Өс бүлектән тора тамаша» тигән шиғырына ла туҡталып китмәй булмаҫ. Был шиғырҙа кеше ғүмере өс бүлектән торған тамашаға тиңләнгән. Һәр бүлектең – үҙ биҙәге, үҙ буяуы: бала саҡ – ғәмһеҙ саҡ; егет саҡ – дыуамал саҡ, күкрәгеңдә дәрт ташып торған саҡ; ҡартлыҡ – хәйлә ҡороп мутлашҡан саҡ, ләкин, күпме генә мутлашһаң да, китер ваҡыт еткән һәм шунда тамаша ла бөткән. Беҙгә Н. Нәжми бүләк итеп ҡалдырған «Ғүмерҙең өс йыры» тигән шиғыр ҙа ошолайыраҡ яңғырамаймы ни?

Ғәжәп, оҡшашлыҡтар төрлө осорҙа йәшәгән һәм ижад иткән шағирҙар араһында ғына түгел (бындай осраҡта оҡшашлыҡтарҙы ла,

уртаҡлыҡтарҙы ла, яҡынлыҡтарҙы ла «традицияларҙың уңышлы дауам ителеүе»нә ҡайтарып ҡалдырырға булыр ине, юғиһә), бер тирәлә йәшәп ижад итеүселәр араһында ла күҙгә салынып китә. Миҫалдарҙы күпләп килтерегә мөмкин, ләкин шуларҙың тик береһенә генә, өр-яңыһына ғына иғтибарҙы йүнәлтәм – Ә. Әфтәхтең «Оло юлдан ситтә» («Ағиҙел», 2003, 6-сы һан) һәм М. Закировтың «Киткәнемә үтһен тотош ғүмер...» («Ағиҙел», 2003, 8-се һан) тигән шиғырҙарына ғына:

Киткәнемә үтһен тотош ғүмер –
Тауышымдан таныр ауылдаштар.
– Ә - ә, һинме был! – тиеп ҡайһы йорт та
Ете төн уртаһы ишек асыр.
(М. Закиров)

Ауыл улын, ауыл кешеләре
Ситкә типмәҫ, беләм, үҙ итер.
Урамына сығып аҡһаҡалы:
– Әйҙүк, улым! – тиһә, шул етер.
Күңел иретерлек һүҙ етер.
(Ә. Әфтәх).

«Оло юлдан ситтә»не лә, «Киткәнемә үтһен тотош ғүмер...»ҙе лә диҡҡәт менән уҡып сыҡҡас, авторҙарҙың икеһе лә хистәргә ифрат бай шағирҙар, тип өҫтәйһе генә ҡала. (Тағы иҫкә алығыҙ: «Оло юлдан ситтә»нең дүрт строфаһы – дүртәр юллы, ә береһе – биш юллы.)

Өҫтәрәк Ә. Әфтәхтең ижад манераһына символик йәнәшәлек, метафорик сағыштырыуҙар хас, тийелгәйне. Ошо поэтик сараларҙы шағир үҙенең лирик геройҙарының эске донъяһын асҡанда, уларҙың уй-кисерештәрен һүрәтләгәндә, хис–тойғоларын сағылдырғанда айырыуса киң файҙалана. «Гөлләмә», «Япраҡ бураны», «Аҡ ҡырҙа», «Төнгө балконда», «Аҡ томан», «Гонаһ» (бер үк исемле шиғырҙарҙың икенсеһе), «Аҡ болот», «Офоҡтарҙа йәшен сатҡылары», «Олоғайғас эҙләмәйек...», «Осрашыу» тигән шиғырҙар – быға асыҡ миҫал. Уларға айырым-айырым туҡталып, һәр ҡайһыһы хаҡында байтаҡ йылы һүҙ әйтергә булыр ине. Әлегә иһә бер нисәһе менән генә сикләнергә тура килер.

Бына «Япраҡ бураны» тигән шиғыр. Ул баштан алып аҙағына тиклем ассоциатив оҡшашлыҡҡа ҡоролған – ғүмер көҙөнә етеп килгән

лирик геройҙың кәйеф-сафаһы, күңел торошо, хәл-әхүәле тәбиғәттәге көҙгө күренштәр менән сағыштырылған. Шиғыр:

Күкрәк ситлегендә дөп–дөп тибеп
Төн буйына йөрәк туланы.
Ә урамда шул саҡ, таҡмаҡ әйтеп,
Эй, бейене япраҡ бураны,

тигән строфа менән асыла. Артабан лирик герой үҙенең үткәндәренә лә ҡараш һирпеп ала һәм эске кисерештәрен түбәндәге юлдар менән тамамлап ҡуя:

Йәрем дә юҡ, атым да юҡ,
Йоҡосо ла булманым...
Япраҡ тулай, йөрәк һыҙлай.
Көҙ бит инде – һуңланым...

Ә бынығы – «Аҡ болот» тигән шиғыр. Ул да йәнле сағыштырыуҙарға ифрат бай. Бала сағында лирик герой офоҡтарҙа ат булып уйнаған аҡ болоттарҙы йүгәнләргә хыялланған булһа, хәҙер инде уға шул мәлде һағынып иҫкә алырға ғына ҡала:

Әй, бала саҡ күктәре,
Беҙҙе күккә күтәрҙе.
Болоттары ат ине,
Ҡайғы-хәсрәт ят ине.

Шуға микән, мин һаман
Офоҡтарға күҙ һалам.
Килсе, көтәм, аҡ болот,
Бала саҡтан ат булып.

Был юлдар – бер үҡ шиғыр эсәндә төрлө рифмаларҙың (асығының да, ябығының да) үҙ-ара һыйышып, бер-береһен тулыландырып йәшәгәнлеген дәлилләп тороусы миҫал.

«Офоҡтарҙа йәшен сатҡылары» ла иғтибарға лайыҡ. Бында ла символик йәнәшәлек ярылып ята. Өс кенә строфанан торған был шиғырҙың тәүге икеһендә һүҙ төнгө күктәрҙе телгеләгән йәшен сатҡылары хаҡында

бара, ә һуңғыһында, киҫкен боролош яһау һөҙөмтәһендә, көтөлмәгән сағыштырыу хасил була:

Әй, шағирым, әллә тыныслandың
Иртәгәһен бөгөн уйламай,
Күкрәгеңдә күктәр күкрәмәгәс,
Күҙҙәреңдә йәшен уйнамай.

Юл ыңғайында «Күкрәгеңдә күктәр күкрәмәгәс, күҙҙәреңдә...» тигән аллитерацияның шиғырға айырым бер аһәңлелек өҫтәүе хаҡында әйтеп үтеү ҙә зыян итмәҫ. Бындай күренеш Ә. Әфтәхтең башҡа шиғырҙарында ла күҙгә салына.

Ниһайәт, шағирҙың маһирлығын күрһәтеп тороусы тағы бер әҫәр – «Осрашыу». Был шиғыр ҙа лирик геройҙы йәшлегенә алып ҡайта ла, бик тиҙ үтеп киткән ғүмер тураһында уйланырға мәжбүр итә:

Тормош беҙҙе ҡаҡҡан-һуҡҡан,
Һирәгәйгән сәфтәр ҙа.
Үйҙар ғына ҡайтып урай
Йәшлектәге сәктәрҙә.

Уфтанбыҙ, һоҡланабыҙ,
Яуаптар хәҙер яҡай.
Тик йәшлеккә ҡайта алмай
Сал сәсле әбей, бабай.

Шиғыр образлы һүрәтләү сараларына бай. Ул айырыуса йәшлектә осрашыу урыны булып торған күл буйын тасуирлағанда күҙгә нығ ташлана. Бында ҡайһы берҙәрен атап та китергә мөмкин: «Зәңгәр яллы сал тулҡындар сер һөйләй ҡамыштарға»; «Был күл буйын ҡалдырғанда йәш егет, ҡыҙҙар инек. Донъяларын бер балҡытып тоҡаныр ҡуҙҙар инек»; «Беҙҙең йәшлек, талпыныуҙар тулҡынға инеп ятҡан, ошо күлдәргә батҡан...».

Ә. Әфтәхтең ижад арсеналында донъя ағышына, ерҙә йәшәү мәғәнәһенә, беҙҙең көндәлек мәшәҡәттәребеҙгә фәлсәфәүи күҙлектәнерәк сығып ҡараш ташлаған шиғырҙар ҙа осрай. Ундай шиғырҙарҙа тормош ҡанундары, ғәҙәттә, тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып күрһәтелеүсән. «Тулған ай» тигән бер үк исем менән аталған

ике шиғырҙың тәүгеһе, мәҫәлән, яңғырашы буйынса көләмәсерәк тойолһа ла, ысынында иһә уның төбөндә оло хәҡикәт ята. Баҡһаң, кеше ғүмере тыуған ай менән тулған ай арауығына оҡшаш икән дәбаһа. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ай (тыуһа ла, тулһа ла) гел үҙ шәйендә ҡала, ә бына кешенең дәрте һаҡланһа ла, дарманы һүнә. Дөйөм алғанда, үҙенең идея–тематик йүнәлеше менән «Ябай һыҙыҡ» тигән шиғыр ҙа «Тулған ай»ға тартым. Дөрөҫ, формаһы йәһәтенән ул бигүк ғәҙәти түгел. (Заманында Шәриф Бикҡол ошолай яҙырға ярата торғайны.) Йөкмәткеһе менән – уйландырырлыҡ. Шиғыр лирик геройҙың зыяратта алған тәьҫораттары нигеҙендә тыуған: ҡәбер ташында – кешенең донъяға килгән һәм донъянан киткән йылдары, ә уртаһында – ябай һыҙыҡ. Ошо һыҙыҡты бәндә үҙе һыҙып киткәндәй тойола шағирға ла, уның лирик геройына ла. Һәм ошо һыҙыҡҡа кешенең бөтә ғүмере һыйған: яныу-көйөүҙәре лә, шатлыҡ-хәсрәттәре лә, юғалтыу-табыштары ла. «Яҙ ҡануны», «Тәбиғәттең уйсанлығы...», «Күтәрмә», «Яҙҙың йәйҙең – йәшлектәге...», «Йылғалар ҡайтты ярына...»лар ҙа – ошо типтағы шиғырҙар. Дүрт кенә строфанан тоған «Күтәрмә» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, символик йәнәшәлек аша аҡыллы ла, хикмәтле лә фекер әйтелгән: донъя шундай итеп ҡоролған – унда һәр кем үҙ урынын үҙе белергә тейеш. Шуны аңлау – ҙур аҡыллылыҡ:

Һин дә, йәнем, был һүҙлектән йолҡоп,
Сөйә күрмә мине күктәргә.
Күктәрҙә бит аяҡ һалындырып
Ултырырға юҡтыр күтәрмә.

Шиғыр үҙенең аһәңлелеге менән дә айырылып тора. «К», «ҡ» тартынҡыларын оҫта файҙаланып, автор күңелгә йәтешле аллитерация тыуҙырған: «Күкте ҡыйған ҡыйғас ҡарлуғастар ҡыйыҡтарҙа тынды төнлөккә»; «Ҡоштар аңлай: бындай сихри төндә күктәр өсөн күптәр сит ҡунаҡ», һ.б., һ.б.

Әйтелгәндәргә тағы шуны өҫтәргә мөмкин: Ә. Әфтәх дүрт юлдан ғына торған ҡыҫҡа шиғырҙар ижад итеүҙә лә ярайһы ғына әүҙемлек күрһәтә. Шиғриәттең күп көс һалыуҙы талап итә торған был төрөн (сөнки ул, күләме яғынан ҡыҫҡа булыуына ҡарамаҫтан, мотлаҡ фекер бөтөнләгәнә эйә булырға тейеш) заманында «парсалар» тип атайҙар ине. Хәҙер генә авторҙар ни өсөндөр уларҙы традицион (бер нисә

строфанан торған) шиғырҙарҙан айырып тормайҙар. Ә. Әфтәхтең парсаларына килгәндә иһә, улар эшләнештәре йәһәтенән һүҙ тейҙерерлек түгел, йөкмәткеләре менән – заманса яңғырайҙар: бөгөнгө тормоштоң айырым һыҙаттары һәм үҙенсәлектәре бик дөрөҫ тотоп алынған. Тематик яҡтан да улар күп төрлө. Арала әҙәбиәт, шиғриәт, шағир яҙмышына һәм тормошона ҡағылышлылары ла бар. Ҡайһы берендә ваҡыт ағышына һәм ғүмерҙең бик тиҙ үтеүенә аҡыл эйәләренсә ҡараш ташлана («Ғаләм телеп йондоҙ атылғанда кемдер әйтә һүнғы үҙ һүҙен»; «Ғүмер үтеп киткән, һыҡтай йөрәк... Үкенесе уның шундалыр»). Ә. Әфтәх парсаларының лирик геройы (әгәр шулай тип әйтергә мөмкин булһа) – заманға яраҡлашып йәшәүселәрҙән түгел, ил яҙмышы менән уйнаусыларҙы ул ҡаты тәнҡит уты аҫтына ала. Ауыл һайын мәсет, мулла булһа ла, етем, берәҙәктәр артыуы ғәжәпләндерә уны. Ни өсөн кеше бик тиҙ үҙгәреүсән һәм нишләп ул ҡан ҡоҫторған батшаларҙы, иҫкене күккә сөйөргә әҙер? – тигән һорауҙар ҙа тынғылыҡ бирмәй Ә. Әфтәхтең уйсан, тәрән хистәргә бирелеүсән лирик геройына. «Ситлектәге бөркөт – бөркөт түгел» тип тә ебәрергә мөмкин ул хыялдарға сумған минуттарында. Шулай ҙа бында шағирҙың бер дүрт юллығын килтермәй булдыра алмайым:

Тыуған ерҙе бер күрергә тиеп,
Көн-айҙарҙы һанап көтәбеҙ.
Яҙҙай балҡып унда ҡайтабыҙ ҙа,
Һағыш төйәп, көҙҙәй китәбеҙ.

Ә. Әфтәхтең һуңғы ете-һигеҙ йыллыҡ ижадын яҡынса ғына булһа ла күҙаллауға бағышланған был мәҡәләлә уның бөтә шиғырҙарына ла туҡталыу һәм уларҙы ентекләп тикшереү мөмкин түгел, әлбиттә. Һүҙ барышында, кинәйәләп-кинәйәләп кенә әйтелгән, ләкин шағирҙың күңеленә бигүк ятып бөтмәҫтәй фекерҙәр ҙә яңғырап киткәндер, бәлки. Уларҙы артабан ҡуйыртып тороуҙың хәжәте юҡ: шағирҙы күреп белмәһәм дә, ул һиҙгер йөрәкле кешегә оҡшаған. Уйланыуҙарымды иһә уның «Ҡорҙаштарым» исемле шиғырына ҡарашым менән тамамларға булдым. Дүрт строфанан торған был шиғыр рустың билдәле шағирҙары Некрасов һәм Демьян Бедный рухы менән һуғарылған. Уның лирик геройы, «Аңлаһалар, аңлай ағайҙар» тигән шиғырҙағы һымаҡ, үҙенең һуғыштан һуңғы быуын вәкиле икәнлегенә баҫым яһап әйтә. Ул быуын вәкилдәренең күбеһе инде хаҡлы ялда, шунлыҡтан, шағир уйынса, улар,

балталары һыуға төшкән һымаҡ, шаңҡып ҡалған. Лирик геройҙың иһә бындай хәл менән һис тә килешәһе килмәй:

Төптән ҡаҙһаң, яуҙан еңеп ҡайтҡан
Беҙ бит әле һалдат улдары.
Илде емергәндәр һин, мин түгел,
Күтәрәйек башты юғары.

Ҡорҙаштарым, һалдат уландары,
Һуңғы һулышҡаса сафтабыҙ.
Киләсәкте даулап йәшәр кәрәк,
Бер ни эшләп булмай балтаһыҙ.
Хаклы ялда. Әммә сафтабыҙ.

Был мәҡәләгә тотонғас, уға исем табалмай хитланғанда, Әхмәҙиндең ошо шиғыры ярҙамға килде. Ул уңышлылырмы, түгелдерме, уныһын башҡорт шиғриәте менән хәбәрҙар булған талапсан уҡыусы әйтер.

2008, декабрь

БАШКОРТ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ
БАШКИРСКАЯ ЭНЦИКЛОПЕДИЯ

«ЯМАУЛЫ КЕЙЕМ КЕЙҺӘК ТӘ, ЯМАУҺЫҘ ИНЕ ЙӨРӘК»

Билдәле, ләкин үзенең үтә баҫалҡылығы, саманан тыш тыйнаҡлығы арҡаһында күҙеңә кереп бармаған шағир Риф Мифтаховҡа быйыл сентябрь айында 70 йәш тула. Ошо ҙур юбилей айҡанлы шағирҙың һуңғы ете-һигеҙ йылда «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән әҫәрҙәренә таянып яҙылған был мәҡәләгә исем эҙләгәндә, миңә уның «Килегеҙ!» тигән шиғыры ярҙам итте. Оло быуын шағирҙарының күпселегенә хас булғанса, Риф Мифтахов та әлеге шиғырында, антитеза алымын ҡулланып, беҙҙең кисәгебеҙҙе бөгөнгөбөҙ менән сағыштырған:

Күптәнме ни, күңелдәрҙәй,
Ишектәр ине бикһеҙ.
Ҙур ине өмөт, ышаныс,
Хыялдар – икһеҙ-сикһеҙ.

Ямаулы кейем кейһәк тә,
Ямауһыҙ ине йөрәк.
Көнөбөҙ ине яҡтыраҡ,
Күгебеҙ – зәңгәрерәк.

Башҡалар һоҡланмаһа ла,
Һоҡландыҡ үҙебеҙгә.
Донъяның. бөтә тарафы
Һыйынды кеүек беҙгә.

Кемгә нисектер, миңә ҡалһа Риф Мифтаховтың был мәҡәләгә йән өрөп ебәргән шиғри юлдары яңғырашы буйынса ла, йөкмәткеһе менән дә әллә ҡайҙан иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Әйтерһең дә, улар халҡыбыҙҙың ифрат бай ауыҙ-тел ижады ерлегенән үҫеп сыҡҡан да әҙер килеш кенә «Килегеҙ!» тигән шиғырҙың икенсе строфаһына инеп ултырған.

Ләкин, иғтибарҙы үҙенә тартып тороу менән бер ҡатарҙан, был юлдар тәрән уйға ла һала. Ирекһеҙҙән һуңғы егерме йылда беҙҙең

кинематографта ҡый үләне шикелле үрсегән сериалдар теҙмәһе күҙ алдына килеп баҫа. Хәтерегеҙгә төшөрөп тораһы юҡ – улар ике тамсы һыу кеүек бер-береһенә оҡшаштар. Был фильмдарҙа төп урынды биләп тороусы персонаждар, халыҡты алдап, илде талап, иҫ китмәле байлыҡ (күҙеңдең яуын алырлыҡ виллалар, тиһеңме; сит ерҙәрҙән ҡайтарылған ҡиммәтле еңел автомобилдәр, тиһеңме; бассейнлы сауналар һәм төрлө сортлы спиртлы эсемлектәрҙән өҫтөнә ауырға торған буфеттар, тиһеңме) туплаһалар ҙа, күп осраҡта уларҙың ғүмере ҡыл өҫтөндә ҡала: байлыҡтарын артабан арттырыу өсөн барған үҙ-ара иҫәпһеҙ-хисапһыҙ бәрелештәрҙә бер-береһен аҫалар-киҫәләр, атып йәиһә сәнсеп үлтерәләр, тереләй килеш баштары менән һыуға сумдырып тонсоҡторалар, һис юғында сит илгә сығып ҡасалар.

Ни ҡылаһың, урлашып-мутлашып йыйған байлыҡ игелекле булмай икән шул – кешегә бәхет тә, шатлыҡ та, күңел тыныслығы ла килтермәй. Энәнән-ептән сыҡҡан кейем кейеп йөрөүең менәнме ни, күңелеңдә ҡара бесәй ҡотороп, йөрәгеңдә дауыл уйнағас! «Килегеҙ!» шиғырын ижад итеп ултырғанда, Риф Мифтахов та, бәлки, ошондай хистәр кисергәндер. Юл ыңғайында шул да мәғлүм булһын: «Ямаулы кейем кейһәк тә, ямауһыҙ ине йөрәк»кә тартым тәрән мәғәнәле афористик һөйләмдәр уның ижадында, бигерәк тә һуңғы осорҙа, ишәйеп киткән ике һәм дүрт юллыҡ шиғырҙарында йыш ҡына күҙгә салына.

Был фекергә асыҡлыҡ индереү өсөн ҡайһы бер фактларға таянырға, шулай уҡ шағирҙың үҙенә лә мөрәжәғәт итергә мөмкин. «Ағизел»дең 2003 йылғы 11-се һанында, мәҫәлән, ул бөтөн ике юллыҡтар менән генә сығыш яһаны. Туҡһан шиғырҙы эсенә алған был шәлкемде автор «Һүҙ ҡеүәте – тапҡырлыҡта» тип атаған. Шәлкемгә кескенә инеш һүҙе лә бирелгән. Унда Риф Мифтахов былай тип яҙған: «Өс тиҫтәнән ашыу ҡуйын дәфтәрҙәремдәге төрлө мәҡәлдәр, әйтемдәр, бөйөк шәхестәрҙең фәһемле фекерҙәре, бигерәк тә үҙемдең тормош күҙәтеүҙәрем, тәжрибә һығымталарым, кеше һәм яҙмыш һынамыштарым – уҡығандан, ишеткәндән, күреп белгәндән, үҙ фәлсәфәмдән тыуған яҙмалар... Мин уларҙы ғүмер буйы йыйҙым, йыям, ҡат-ҡат уҡып лөззәт, һабаҡ алам, үҙемә, әйтер һүҙемә күп нәмәләр асам. Бигерәк тә мәҡәлдәр менән әйтемдәргә мөкиббәнмен. Улар – һүҙҙең биҙәге лә, елеге лә. Өҫтәүенә, икеһе лә (бигерәк тә мәҡәлдәр) – поэзияның күп сифаттарын алған ярым шиғри әҫәрҙәр. Юҡтан ғына бөйөк В. Белинский, поэзия мәҡәлдәрҙән башлана, тимәгәндер».

Р. Мифтаховтың «Ҡояш шаһит» (1999) тигән йыйынтығына күҙ ташлаһаҡ, уның дүрт һәм ике юллыҡтар менән мауыға башлауы туҡһанынсы йылдарҙың ахырына тура килгәнлеген шәйләрбеҙ. Был китапҡа ингән дүрт юллыҡтарына ул – «Ут ҡабыҙ!», ә ике юллыҡтарына – «Матурлыҡ көсө» тигән исем ҡушҡан. Артабанғы йылдарҙа иһә бындай шиғырҙар ижад итеү – мауығыуҙан даимилыҡҡа, рухи талапҡа, көндәлек йән аҙығына әүерелгән, тиергә мөмкин. Сөнки яңы быуат башында «Ағизел»дә баҫылған шәлкемдәрҙең күбеһендә, ғәҙәти шиғырҙар менән бергә, дүрт һәм ике юллыҡтар ҙа байтаҡ урын алып тора. Кимәлдәре буйынса улар – төрлө юғарылыҡта. Әммә шуныһы ҡыуаныслы: Р. Мифтахов шиғриәтендә һис шикһеҙ «тапҡыр һәм ҡыҫҡа, тәрән һәм киң мәғәнәле» дүрт һәм ике юллыҡтар өҫтөнлөк итә. Уларҙың абсолют күпселеге ысын мәғәнәһендә һүҙ ҡеүәтенең тапҡырлыҡта икәнлеген иҫбатлап тора. Бында күп кенә миҫалдар ҙа килтерергә булыр ине. Тик ваҡыт һәм урын тығыҙлығы форсат бирмәй. Шуға күрә уҡыусы был дүрт һәм ике юллыҡтарҙы үҙе уҡыһын, ләззәтләнһен, фәһем алһын, шәхсән баһаһын бирһен, тигән теләктәр менән генә сикләнергә ҡала.

Шағирҙың ижад лабораторияһы минә ябыҡтан таныш булмаһа ла, ошо урында уның күҙгә бәрелеберәк торған ҡайһы бер үҙенсәлектәренә бәйле фекерҙәрем менән уртаҡлашырға баҙнат итмәксемен. Үрҙә телгә алынған инеш һүҙендә Р. Мифтахов, һуңғы йылдарҙа «афористик ҡыҫҡа» шиғырҙар уның поэтик ижадында төп нигеҙ ташына әүерелә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, бының бер сәбәбен «хәҙер оҙон, күләмле әҫәрҙәр уҡыу осоро үтте, тигән заман шауҡымы» менән аңлатмаҡсы.

«Заман шауҡымы»н инҡар итеү һәм уға ҡаршы тороу – еңел түгел, әлбиттә. Тик бөтә бәләне уға ғына япһарыу ҙа дөрөҫ булмаҫтыр. Күләмле әҫәрҙәрҙе элек тә артыҡ киң даирә уҡымағандыр ҙа инде. Ләкин быға һылтанып ҡына Ғ. Сәләм дә, Р. Ниғмәти ҙә, Б. Бикбай ҙа, М. Кәрим дә, Н. Нәжми ҙә, М. Ғәли ҙә төшөнкөлөккә бирелмәгәндәр бит һәм үҙҙәренең киң ҡоласлы эпик поэмаларын яҙыуҙан туҡтап ҡалмағандар. Бөгөн был жанр беҙҙә һүнеп бара түгелме һуң?

Уртаҡлашырға ниәтләгән фекеремдең икенсеһе. Күпселек шағирҙарҙан айырмалы булараҡ, Р. Мифтахов үҙ әҫәрҙәренә «ҡәләм төртөргә» (был һүҙбәйләнеште ул үҙе уйлап сығарҙы һымаҡ, тик ҡайҙа осратҡанымды ғына әйтә алмайым) яратыусан. Шик юҡ, әҫәрең өҫтөндә ныҡышмалы эшләү, уны торған һайын камиллаш-

тырыу – маҡтауға лайыҡ. Типография ысулы менән баҫтырып сығарғанға тиклем Лев Толстой үҙенең «Һуғыш һәм солох»он, әгәр хәтерем яңылышмаһа, ҡулдан ете тапҡыр аҡҡа күсергән, тиҙәр. Уйлап ҡарағыҙ әле: ҡалын-ҡалын дүрт китаптан торған романды, төҙәтә-төҙәтә, камиллаштыра-камиллаштыра, ҡулдан ете тапҡыр күсерер өсөн күпме көс, сыҙамлыҡ һәм түҙемлек, ғүмереңде бағышлаған ижадсылыҡҡа шул тиклем дә бирелгәнлек кәрәк!

Р. Мифтаховтың «Ҡәләм төрткән» әҫәрҙәре, артыҡ күп булмаһа ла, осраштырып тора. Бәгзеһенең исемен үҙгәртеп ҡуя ул, бәгзеһендә строфалар һаны кәмей төшә. Ҡайһы берҙә ике юллыҡтар ғәҙәти шиғыр эсенә инеп китә. Бәхәсһеҙ, былар бөтәһе лә әҙәбиәтселәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ. Сөнки бындай осраҡта бер үк әҫәрҙең төрлө варианттарын сағыштырып, шағирҙың ижад процесын, ижад манераһын аныҡраҡ итеп күҙаллау мәмкинлеге тыуа. Тик ябай уҡыусы быға нисегерәк ҡарай икән?

Һис шикһеҙ, әҙәби әҫәр, тәү сиратта, авторҙың хосуси милке. Бер генә тәнҡитсенең дә ижадсыға күрһәтмә яһарға, бойорорға йәиһә фарман бирергә хаҡы юҡ – ул фәкәт үҙенең уй-фекерҙәре менән генә бүлешергә мөмкин. Шулай за әҫәрендә уҡыусы ҡарамағына тапшырғансы, «Ҡәләм төртөү»гә ҡарағанда, уны, Толстой үрнәгендә, ҡәләм төртмәҫлек хәлгә еткереү хәйерлерәк түгел микән? (Юбилей айҡанлы яҙылған мәҡәләләр былай ҡаты бәрелеү, бәлки, килешеп тә бөтмәйҙер. Әммә ул бары тик изге теләктән сығып ҡына әйтелә, һәм Риф Мифтахов уны аңламаҫлыҡ кеше түгел. Тағы килеп, был теләктәр бер Рифкә генә лә ҡағылмай.)

Минең аңыма Риф Мифтахов уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында килеп инде. Ул саҡта әле Яҙыусылар союзы ағзаһы булмаһам да, «Советская Башкирия» гәзите биттәрендә башҡорт әҙәбиәтенә бәйле мәҡәләләрем күренгеләп торғанға микән, өлкән ағайҙар мине бер съездан да ҡалдырманылар – саҡырыу ҡағыҙы ебәрә торғайнылар. Уларға әле лә рәхмәтлемен.

Хәтеремдә, совет заманында актёрҙар йортонда үткәрелгән ошондай съездарҙың береһендә, Риф тә сығыш яһаны. Уға һүҙ бирелгәс, артҡы рәттә, минән әллә ни алыҫ булмаған креслола ултырыусы берәү, үҙ алдына һөйләнгәндәй: «Бик эмоциональ шағир. Тыңлайыҡ әле, нимә әйтер икән?», – тип ҡуйҙы. Күрәһең, Риф Мифтаховты әҫәрҙәрен уҡып ҡына түгел, үҙен дә яҡшы белгәндер был кеше, шуға күрә уның һүҙҙәре миндә лә ҡыҙыҡһыныу уятты. Инде

күп йылдар үткәнлектән, Рифтең үҙ телмәрендә ниҙәр һөйләгәнлеген хәҙер асыҡ ҡына иҫләй алмайым, ә бына Лев Толстойға тоҫҡама яһағанлығы һәм бөйөк аҡыл эйәһенең әҙәбиәткә, әхлаҡ мәсьәләләренә ҡағылышлы ниндәйҙер хеҙмәтенән бәләкәй генә өҙөк килтергәнлеге бөгөнгөләй күҙ алдымда.

Сәхнә аша ғына булһа ла ошо көтөлмәгән осрашыуҙан һуң мин Р. Мифтаховҡа иғтибарымды бермә-бер арттырҙым, уның башлыса «Аҡиҙел» биттәрендә донъя күргән шиғырҙарын да, сәсмә әҫәрҙәрен дә, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрен дә (ваҡытым еткәнсә һәм көсөмдән килгәнсә, әлбиттә) күҙәтеп барырға тырыштым. Тормошо һәм ижади яҙмышы ҡот осҡос афәткә тарыған Рәшит Назаровтың әҙәби мираҫын барлауға ҙур өлөш индергән кеше икәнлеген дә Рифтең «Аҡиҙел»дә баҫылған материалдары аша белә килдем. Журнал вариантында уҡ уҡылған хикәйәләренән алған тәьҫораттар әле лә күңелемдә һаҡлана. Уларҙың ҡайһы берҙәре миндә XX быуат рус әҙәбиәтенең күренекле вәкиле Иван Буниндың «Тёмные аллеи» тигән хикәйәләр шәлкемен иҫкә төшөргәйне ул саҡта. Ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем гүзәл заттарға битараф ҡалмаған рус классигы ир-аттар менән ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы үҙ-ара мәнәсәбәттәрҙе, хатта интим яҡынлыҡты тасуирлағанда һис кенә лә тупаҫлыҡҡа, дорфалыҡҡа юл ҡуймаған бит. Был нескә, үтә ҡәҙерле һәм үтә шәхсән хис-тойғоларҙы һүрәтләгәндә Риф Мифтахов та – шулай, тимәксемен.

Икебеҙ ике ҡалала йәшәгәнлектән, беҙ сәйләшә лә, сәйнәшә лә алмайбыҙ. Шуға күрә Риф Мифтаховты мин бик яҡшы беләм, тип әйтһәм, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине. Әммә әҫәрҙәре аша, съезд ултырыштары араһындағы тәнәфестәр ваҡытында үҙен тотоуы буйынса уның ҡайһы бер сифаттарын һиҙемләйем кеүек. Шул сифаттарҙың күҙгә иң ныҡ ташланғаны – кеселеклек, минеңсә. Бәғзеләр һымаҡ, ул бер ҡасан да эргәңдән «ҡып» итеп үтеп китмәҫ. Кеселеклек сифатына тағы илтифатлыҡ, инсафлыҡ тигәндәрен дә өҫтәргә мөмкиндер. Әҫәрҙәренән күренеүенсә, ижад уның өсөн – йәшәү сығанағынан да бигерәк, йән аҙығы, күңел байлығы, выждан иреклеге. «Сәм» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, бөтә көсөнә, йөрәге түренән урғылып сыҡҡан ғорурлыҡ тойғоһо менән «Тормош ҡаршында бил бөгөлмәне. Мал һәм дан тиеп баш эйелмәне» тип иҡрар итә икән, уны тулыһынса авторҙың үҙенә лә ҡайтарып ҡалдырырға булалыр.

Ә бына «Намыҫ ҡаршыһында»ны «Сәм»дең туранан-тура дауамы, тиергә мөмкин. Һүҙ унда ла шул уҡ дан, дәрәжә юллау, уға

ирешеү өсөн таҫма телләнә белеү, биленде бөгөү хаҡында бара. Эшләнеше йәһәтенән дә шиғыр бик үҙенсәлекле. Лирик геройҙың һис көтмәгәндә телгә килгән намыҫы үҙаллы образ шәйенә инә лә, үҙенең хужаһын (лирик геройҙы) «урынына» ултырта:

Уйҙы уйып, намыҫ ҡуҙғалды ла
Ырғып торҙо: «Баҫ, – тип, – ҡаршыма!
Нисек итеп килде был түбән уй
Юғары һәм ғорур башыңа?!
Меҫкенләнеү – хурлыҡ ир-егеткә,
Һәм бишләтә – ижад халҡына!

Арҡаһында ҡамҫы уйнағанда,
Баш өҫтөндә ҡылыс торғанда,
Ата-бабаң таҫма телләнмәгән,
Мал, алтын тип, иман-выждanына
Ҡундырмаған бөртөк туҙан да.
Ә һин әҙер дан-дәрәжә өсөн
Йән һатырға яйы сыҡканда...»

Әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәһендәге дәрәжәле һәм маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булһа ла, улар Риф Мифтахов өсөн үҙмаҡсат түгел. Шул уҡ ваҡытта һуңғы осорҙа был исемдәрҙең бер аҙ ваҡланып, арзанайып китеүенә өнһөҙ ҙә ҡалалмай ул. «Ағиҙел»дең 2006 йылғы 9-сы һанында донъя күргән «Шағир даны» тигән шиғыр быға асыҡ дәлил була алырлыҡ. Икешәр юллы һигеҙ строфанан торған был шиғырға автор эпиграф урынына «Шәйехзада Бабич хаҡында уйланыу» тигән һүҙҙәр яҙып ҡуйған. Шиғырҙа бындай юлдар бар:

Шағирлығың – йәштәр өсөн исем-шөһрәт,
Тик бар бәлә – лайыҡтары үтә һирәк,

Баҫып алды ижад тауын һөнәрселек,
«*Мин – нур!*» *– тиеп күҙҙе алдай һәр бер серек...*

Р. Мифтаховтың үрҙә телгә алынған ҡайһы бер кешелек сифаттарына уның итәғәтлеген дә өҫтәр инем. Күҙаллауымса, ул, барына шөкөр итеп, әҙҙән дә ҡәнәғәт була белә, шикелле.Үҙе тураһында әйтелгән

кескенә һүзгә лә иғтибар итмәй һәм мөнәсәбәтен белдермәй ҡалмаҫ ул. Был сифат уға әҙҙең төбөндә намыҫлы һәм көсөргәнешле хеҙмәт емеше ятҡанлығын яҡшы аңлауҙан киләлер, тип уйлайым. Уйымды йөпләү өсөн «Йырҙарымда ғүмер бар һымаҡ» тигән шиғырға туҡталырға мөмкин. Билдәле булыуынса, шөһрәт ҡаҙанған арҙаҡлы шәхестәр менән осрашыу кисәләрендә уларға, ғәҙәттә, шундай һорау биреүсәндәр:

– Әгәр донъяға яңынан килһәгеҙ, тормошта ниндәйерәк юл һайлар инегеҙ?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп осраҡта яуап бик ихлас булмай һәм шуға күрә ул бер төрлөрәк яңғырай:

– Бер нәмәнән дә баш тартмайынса, нисек булған – шулай ҡалдырыр инем.

Ә бына «Йырҙарымда ғүмер бар һымаҡ»тың лирик геройы башҡасараҡ фекер йөрөтә:

Ултырамын үҙған ғүмеремдең
Юл-һуҡмағын урап үйҙарға...
Мин уларҙы һайлап үҙар инем,
Мөмкин булһа ҡабат үҙарға.

Шағир, ғүмер юлын яңынан үҙарға мөмкин булһа, уны һайлабыраҡ үҙарға теләүенең ҡайһы бер сәбәптәрен дә асып һалған. Әйтәйек, донъя мәшәкәттәре, төрлө ваҡлыҡтар арҡаһында ҙур эштәр атҡарырға уның дарманы етмәгән; ижад сәме алға әйҙәп торһа ла, арғымағына эйәрен дә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һалған; һөйөү гөлө иртә япраҡ ярһа ла, был өлкәлә лә бөтәһе лә ал да гөл булмаған; тормош хәҡиҡәтен дә һуңлабыраҡ аңлаған ул. Үҙған ғүмер үҙған инде, нисек үҙһа ла, уны кире ҡайтарып булмай, тигән ныҡлы һығымтаға килә лирик герой. Һәм хәҙер уның иң ҙур теләге:

Яҙһын ине ҡалған тормошомдо
Аҙашмайса дөрөҫ үҙарға.

«Хоҙайҙан ҡурҡыу» тигән шиғырҙа авторҙың тормош позицияһы уғата ла сағыуыраҡ итеп күрһәтелгән. Әҫәрҙең формаһы ла уңышлы һайланған: лирик герой, йәнәһе, Хоҙай менән диалог ҡормаҡсы, ләкин ҡыйыулығы етмәй. Уның характер үҙенсәлеге, йәшәү принцибы түбәндәге юлдарҙа ышандырырлыҡ итеп асып бирелгән:

Алдашманым, урлашманым,
Хәләл көсөм – тапҡаным.
Түргә менергә самалап,
Түрәгә йән һатманым.

Ялландым бары халҡыма
Йән хеҙмәтсеһе булып.
Һайраным йөрәк йырымды
Күңел талына ҡунып.

Күләмле, метафораларға бай был шиғыр юмор сатҡыларынан да мәхрүм түгел. Лирик герой ҡасан да булһа бер хаҡ хөкөм өҫтөнлөк итеренә өмөтөн өҙмәһә лә, ғәҙеллек һағында торорға саҡырылған Тәңрегә үҙенең үпкәһен белдерергә лә онотмай, лайыҡлыны ер өҫтөндә сағында күрергә, тейешле баһаны ла уға шунда сағында бирергә өндәй.

Р. Мифтахов ижады тураһында уйланып ултырғанда, уға бәйле тағы бер хәл-ваҡиға иҫкә төштө. Туҡһанынсы йылдарҙың икенсе яртыһында булһа кәрәк, яҙыусыларҙың сираттағы съезында осрашҡанда, ул «Илаһи мәл» тигән яңы йыйынтығын бүләк итеп ебәрергә вәғәҙә иткәйне. Тик вәғәҙәһендә торманы: әллә онотто, әллә ваҡыты етмәне, әллә башҡа сәбәптәр булды. Ләкин мин уға һис кенә лә үпкәләмәнем. Китаптарын ебәрергә вәғәҙә итеп, вәғәҙәләрен үтәмәгән бер Риф кенә булһа икән! Ә «Илаһи мәл»де мин барыбер таптым. Исеменән үк Пушкин рухы бөркөп торған китапҡа нисек инде битараф ҡалаһың! Йыйынтыҡты асып ебәргән «Ҡәләм осонан йөрәк осорам» тигән һүҙҙәр үҙе генә лә ни тора! Китапҡа исем биргән шиғырҙа иһә автор, «үҙгәрәмен тиеп», «донъя бутап» йөрөүсе ике йөҙлөләргә ҡулын һелтәп, былай ти:

Эй, ҡуй әле, илаһи бер мәлдә
Иҫләргәме бындай юҡ-барҙы...
Ана, күрәм, ҡосаҡлайым тиеп,
Тирәктәрем һуҙған ҡулдарҙы.

Тыуған яғым, һиңә ҡайтып киләм
Таныш юлдан, таныш ерҙәрҙән.
Бар булмышым, һәр һулышым менән
Мин һинеке – мәңге үҙгәрмәм

«Донъя бутап» йөрөүсе ике йөҙлөләргә ҡулын һелтәһә лә, «үҙгәреү-үҙгәрмәү» мотивы Р. Мифтаховтың быуат башындағы ижадында ла яңғырап китә. Был мәкәләнең башында уҡ телгә алынған «Килегеҙ!» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, донъяның аҫтын-өҫкә килтереүселәргә мөнәсәбәтен автор туранан-тура ярып һалған:

Иблестәрҙең һүҙ бураны
Ҡупҡас – аҡыл аҙашты.
Ярты һүҙҙән аңлашҡандар,
Яҙмыш бүлеп, талашты.

Яҙҙан түгел, ташбаштарҙан
Ил, боҙ кеүек, кителде.
Буталды ла, яҡшы, яман
Бергә хөкөм ителде.

Ошо йәһәттән «Сабый көлгәс...» тигән шиғыр ҙа бик ғибрәтле. Уның лирик геройы һуңғы ваҡытта әхлаҡи ҡағиҙәләрҙең һиҙелерлек түбәнәйеүе, ә тиҫкәре күренештәрҙең саманан тыш артыуы арҡаһында әкренләп донъяла йәшәүҙең ҡыҙығы китә башлауына ишаралай:

Караға аҡ буталды,
Ялған менде юғары.
Өмөт, хыял йондоҙо
Баш осонан юғалды.
Намыҫ, выждан – ситлектә,
Иманһыҙлыҡ – иректә.
Азат килеш ҡанат һына,
Йәнем һүнә бер ситтә.

Бәхеткә күрә, лирик геройҙың ошондай ҙа ауыр уй-кисерештәрен уның эргәһендә көлөп торған сабый юҡҡа сығара.

Әйткәндәй, Р.Мифтаховтың «Сабый көлгәс...»е Мостай Кәримдең туҡһанынсы йылдар башында илдә ҡупҡан мәхшәргә бошоноп яҙған бына был шиғырын хәтергә төшөрөп ҡуйҙы:

Ямғыр ҡатыш ҡар –
Ерҙә, һауала.

Поезда барам,
Ҡаршымда бала.

Ул сабый миңә
Шундай саф ҡарай.
...Донъяла әле
Йәшәргә ярай.

Мотивтар – бер, образдар ҙа оҡшаш, әммә уларҙы һәр автор үҙенсә кәүҙәләндергән. Миңә иһә М.Кәрим традициялары – ышаныслы ҡулдарҙа, тип өҫтәйһе генә ҡала.

Р. Мифтахов ижадында мөхәббәт темаһы ҙур урын алып торғанлығы күптән билдәле. Уның сәсмә әҫәрҙәрен берләштергән бер китабы юҡҡа ғына «Ғишыҡ тотоу – ут йотоу» тип аталмағандыр. Был тема шағирҙың лирикаһында ла һирәк осрай торғандарҙан түгел. Ҡайһы берҙә, әйтәйек, «Яҙа алмай ҡалам инат хәбәр» тигән шиғырҙы уҡығас, мөхәббәт темаһына ул иректеҙҙән мөрәжәғәт итмәй микән, тип тә уйлап ҡуяһың. Һигеҙ генә юлдан торған был шиғырҙа беҙҙең заманға хас хәл-ваҡиғалар бик оҫта тотоп алынған: тышта йөрөгәндә лирик герой тирә-йөндәге һиллеккә, тәбиғәт матурлығына һоҡланып бөтә алмай; өйгә инеп, телевизорын асып ебәрҙеме, был тойғоларҙың эҙе лә ҡалмай, сөнки унда һуғыш, ҡан ҡойош, зәһәрлек хөкөм һөрә. Ә шағирҙың ул турала яҙаһы килмәй. Бәлки, шуға ла ул үҙенең күңел һандығында ҡаҙынырға мәжбүрҙер.

Риф Мифтаховтың мөхәббәт лирикаһы бай йөкмәткеле. Өҫтә иҫкә алып киткәнсә, мөхәббәт тойғоһо лирик геройҙан ут та йоторорға мөмкин; йәшлектә кисергән хистәрҙе лә атлаған һайын яңыртып торорға һәләтле икән ул һөйөү-яратыу тигән тойғо; һөйгәне берәй яры китһә, лирик геройҙың һағыштарға түҙәлмәгән йөрәге селпәрәмә килеп ватылмаҫ, ә ул ҡайтһа, донъяһы ҡояштай балҡып китмәҫ, тимә, һ.б., һ.б. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: был үтә ҡатмарлы, ҡайһы саҡта хатта һүҙ менән генә аңлатып бирә алмаҫлыҡ үтә нескә хис-тойғолар хаҡында һүҙ барғанда, Р. Мифтахов уларға һис кенә лә ҡара тап төшөрмәҫ. Киреһенсә, уның мөхәббәт лирикаһы башлыса сафлыҡ, тоғролоҡ, ихласлыҡ кеүек ыңғай сифаттар менән һуғарылған һәм шағир ошо сифаттарҙы яҡлап сығыш яһай, уларға дан йырлай.

«Көтмәгәндә осраштыҡ беҙ бер көндө...» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, үҙ ғүмерен урталайға бүлгән. Уның тәү яртыһы

һөйгәненән башҡа үткән, шуға күрә ул көйһөҙ, нурһыҙ, шишмәһеҙ, гөлһөҙ булған һәм лирик геройҙың йәне кипкән. Икенсе яртыһы бәхетле, өмөтлө, йырлы булған, бер көнө хатта миҙгелдәрҙән ҙур тойолған. Ғүмере урталайға бүленгән мәлде лирик герой яңынан тыуыуға тиңләй. «Үҙгәргәнһең, ләкин ваҡыт барыбер...», «Осрашҡаҫ...», «Өҙөлмәҫ йыр», «Һинең менән булды төрлө саҡтар...», «Сер һөйләр төн», «Осрашҡанда күҙҙәр ялҡын һипһә...», «Юлдарымда күпме аҙашманым...», «Уйлай китһәң, бары әүәлгесә...», «Ҡулдарың һуҙ», «Көймәйек», «Һин килгән кис ҡәҙер кисе ине...», «Хәтеремдә икәү бергә саҡта...», «Йылдар һине тик иркәләп киткән...», «Ике йылға», «Һине күргәс, мин күктәргә мендем...» тигән шиғырҙарҙа ла тәрән хистәргә бирелергә һәләтле лирик геройҙың эске халәте оҫта һәм ышандырырлыҡ итеп тасуирланған

Әлбиттә, Р. Мифтаховтың был шиғырҙарында һүрәтләнгән лирик геройҙар өсөн мөхәббәт – уларҙы ғүмер буйы оҙата барған гел бәхетле минуттар ғына, тип уйлаһаҡ, тормош диалектикаһына ҡаршы килер инек. Сөнки тормош тигәнең, билдәле булыуынса, кеше яҙмышына үҙенең төҙәтмәләрен бер туҡтауһыҙ индереп кенә тора. «Осрашҡас...» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, бер-береһен яратып та ҡауыша алмаған ике мөхәббәттең яҙмышы Сағ менән Суҡ яҙмышына тиңләнгән. Һәм бындай яҙмышты автор Хоҙай ҡарамағына тапшырған. «Осрашҡанда күҙҙәр ялҡын һипһә...» тигән шиғыр ҙа күптәнге, тормошҡа ашмаған мөхәббәт хаҡында. Ә бына «Сер һөйләр төн»дең лирик геройы, йәш сағынан уҡ килгән, ләкин тормошҡа ашмаған мөхәббәтен хәтерләп, йөрәгендә һаҡланған ғәзиз сере менән уртаҡлашмаҡсы: «Мөхәббәтем ысын икәнлеген әйткем килә, һуңлап булһа ла», ти ул. Шиғыр былай тамамлана:

Әле булһа көтөп йәшәйем мин
Икәү генә ҡалыр бер төндө.
Миҙгелдәрҙе миҙгелдәргә ялғап,
Мин көтмәнем шулай бер кемде.
Тик һин генә аңларһыңдыр кеүек
Үҙем менән серер серемде.

Шағирға («Юлдарымда күпме аҙашманым...» һәм «Йылдар һине тик иркәләп киткән...» тигән шиғырҙарға ҡарағанда, лирик герой менән автор араһында айырма юҡ, тиерлек, сөнки улар икеһе лә шиғыр

яҙыусылар) әле һаман тынғы бирмәйенсә, ваҡыты-ваҡыты менән бер ни тиклем үкенеслерәк уйҙар ҙа уятып ҡуйған мөхәббәт тураһындағы миҫалдарҙы артабан да килтерергә булыр ине. Ләкин реаль ысынбарлыҡта, ҡайнар хистәр менән бер ҡатарҙан, аҡыл, бурыс, намыҫ тигән төшөнсәләр ҙә йәшәй бит әле. Риф Мифтахов шулар хаҡында ла онотмай. «Ҡулдарың һуҙ» тигән шиғырҙа, әйтәйек, һүҙ «яҙмыш йылғаһының ҡауыштырмаҫ ике ярында» ҡалған ике заттың ғүмер буйы балалары һәм намыҫтары алдындағы бурысты үтәүҙәре хаҡында бара. Автор шиғырҙың тәүге ике юлында уҡ был фекергә асыҡлыҡ индергән: лирик геройҙың йәшләй һөйгәне тәне менән бүтән эргәһендә, ә үҙе йәне менән башҡа янында. Әҫәрҙең һуңғы дүрт юлында тормошта, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ-юҡ тиһәң дә осраштыра торған драматик хәл сағылыш тапҡан:

Ҡулдарың һуҙ: һинең йылмайыуҙан
Бәхет хисе дөрләр ҡанымда...
Тимәк, беҙгә уның яҙғаны шул
Мөхәббәт һәм бурыс алдында.

Ошондай уҡ идея «Көймәйек» тигән шиғырҙың да нигеҙендә ята. Йәшлектә мөхәббәт тойғоһо яҙмыштан да бөйөк булып күренһә, яндырһа-көйҙөрһә, хатта йондоҙҙарға үрләтһә, йылдар үткәс, олоғая төшкәс, «тойғо менән түгел, аҡыл менән фекер» төйнәлә икән:

Ҡорған ояларҙы туҙҙырманыҡ,
Ғәзиз күңелдәргә теймәнек.
Бәхет микән? Бәхетһеҙлек микән?
Икеһе лә барҙыр – көймәйек.

Тормошҡа ашмаған, ымһындырып ҡына ҡалған мөхәббәт шауҡымы «Хәтеремдә икәү бергә саҡта...» тигән шиғырҙа айырыуса матур (яңғырашы менән) һәм үҙенсәлекле (йөкмәткеһе йәһәтенән) итеп күрһәтелгән:

Шаян инең, ләкин шаяртманы
Тормош менән яҙмыш тигәнең:
Нисә йылдар инде башҡа менән
Баш ҡуйырға уртаҡ мендәрең.

Р. Мифтаховтың мотлаҡ кемгәлер төбәп түгел, ә аҫыл заттарҙың дөйөмләштерелгән образын тыуҙырыу ниәтенән яҙылған шиғырҙары ла байтаҡ Әгәр бер шиғырында («Һин килгән кис ҡәҙер кисе ине...») ул ҡатын-ҡыҙҙы аҡ фәрештәгә тиңләһә, икенсеһендә иһә («Сер») уны һис кенә лә төшөнөп етмәҫ сер ҡапсығы, тип атай. «Һине күргәс, мин күктәргә мендем...»дә инде «Йыһан яулап була – аңлап булмай ҡатын-ҡыҙҙарҙы», тип танырға мәжбүр. «Хоҙай менән һөйләшеү»тигән шиғырындағыса:

– Эй, Хоҙайым, ниңә ҡатын-ҡыҙҙың
Ахмаҡтарын ергә тараттың?
– Аҡыллыһын ир-ат ҡәҙерләмәй,
Ахмаҡтарын, әйҙә, яратһын,–

тип, бер аҙ шаяртып та алырға мөмкин шағир. Шулай ҙа уның метафораларға бай «Уҡ» тигән шиғыры көслөрәк яңғырайзыр һәм уны ҡатын-ҡызға арнап яҙылған мәҙхиә тип тә ҡабул итергә булалыр:

Йәйәләрең-каштар күтәрелгәс,
Аттың керпек-уҡтар менән.
Күкрәгемде ярып инделәр ҙә
Үтте улар йөрәгемдән.

Һыҙлай күкрәк, әрней йөрәк . . .
Нишләттең, әйт, Ер һылыуы?
Йөҙҙәремә сыҡты инде
Һағыш-хәсрәт урғылыуы.

Үҙем янам, үҙем барам
Шул уҡтарҙы тағы эҙләп:
Мөхәббәттән мин үләйем –
Уҡ-керпек ат миңә төбәп.

Һуңғы ваҡытта Р. Мифтаховтың лирик геройы ла, шағир үҙе лә тормош асылы, ерҙә йәшәү мәғәнәһе, кешеләр араһындағы мөғәмәлә, шулай уҡ ваҡыт һәм арауыҡ, сәбәп һәм һөҙөмтә, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың берҙәмлеге һәм көрәше кеүек фәлсәфәүи төшөнсәләр менән ныраҡ ҡыҙыҡһына башланы, шикелле. Әгәр ирекле формала яҙылған «Ғүмер . . .

Ижад... Күпме ҡалды икән?» тигән ҡыҫҡа ғына бер шиғырында автор «Ижад ҡәләмдәрем – үҙ ҡулымда, тәҡдир ҡәләмдәре – Хоҙайҙа» ти икән, был уның тәрән уйланыуҙарынан киләлер.

«Шашмайым, көйөнмәйем» дә тормош диалектикаһына ҡоролған шиғыр. Йәшәү диалектикаһының асылы иһә шунда: шатлыҡтар менән ҡайғылар һәр ваҡыт йәнәш атлай. Лирик геройҙың ерҙә йәшәү фәлсәфәһе түбәндәге ике юлға һыйған:

Ян-яҡтарға ауып китмәҫ өсөн
Донъя йөгөн тигеҙ йөкмәйем.

Уның фекеренсә, тормошта аҙашмаҫ, ерҙә юғалмаҫ өсөн берҙән-бер сара ла, берҙән-бер юл да – юғары маҡсатҡа ынтылыу. («Аҙашмаҫҡа...»). Һәм был донъяла иң зур ғәйеп – «алдарыңа бер маҡсат та ҡуймай, бушҡа йәшәү...». («Иң зур ғәйеп»). Ошо типтағы ҡыҫҡа шиғырҙарҙа шағирҙың үҙ характеры ла сағылып китәлер, бәлки. «Шатланмағыҙ»ҙа, мәҫәлән, ул ниндәй генә хәлдәрҙә ҡалһа ла, ҡыҙғаныс кешегә әйләнмәҫкә тырышасағын белдерә; «Ышанам»да, күпме генә алдамаһындар, аҫтан киҫеп өҫтән ялғамаһындар, барыбер кешегә ышанысын юғалтмаясағын иҡрар итә; «Курҡам бары...»ла лирик геройшағир «бары ялған һүҙ һөйләүҙән, әйтер ерҙә – өнһөҙ ҡалыуҙан»ғына ҡурҡа. Йәиһә Рәшит Солтангәрәевтың вафатына бағышлап яҙылған бына был юлдар кемдәрҙе генә уйға һалмаҫ икән: «Телдәремдә тереләргә әйтер әрнеүҙәрем: белһәк икән туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ ҡәҙерҙәрен» («Телдәремдә...»). Рәми Ғарипов иҫтәлегенә арналған «Ниңә шулай?» тигән шиғыр ҙа «Телдәремдә...» шикеллерәк яңғырай,

Шағирҙың үҙе, шағир менән уның лирик геройы араһындағы нисбәт хаҡында һүҙ сыҡҡас, Р. Мифтаховтың «Ҡәҙерлеһең, Ваҡыт» һәм «Хыял» тигән шиғырҙарына ла туҡталып китһәк, һис тә яҙыҡ булмаҫ төҫлө. Минең ҡарашымса, улар икеһе лә бик фәһемле, иғтибарҙы йәлеп итерлек әҫәрҙәр. «Ҡәҙерлеһең , Ваҡыт»та Шағир Ваҡыт менән әңгәмә ҡороп ебәрә. Шул әңгәмә ваҡытында Ваҡыт, Шағир характерындағы ҡайһы бер һыҙаттарҙы асып һала:

Оҙаҡ ектең һин атыңды,
Эҙләп ижад затыңды.
Кеше баҡырҙарын йыуып,
Юғалттың алтыныңды.

Ҡаныңдан килгән «бәләң» бар:
Намыҫ һәм баҫалҡылыҡ.
Иҫән саҡта уларҙы һис
Баһалап бармай халыҡ.

«Хыял» – «Кәҙерлеһең, Ваҡыт»тың дауамы шикеллерәк ҡабул ителә. Был шиғырҙа иғтибар ваҡыттың туҡтауһыҙ, хатта аяуһыҙ үтеүенә йүнәлтелгән. Шағирҙың бөтә теләге – яҡты донъянан «оят кисермәй» китеү. Шул уҡ ваҡытта ул мәңгегә юғалмаясағына ла өмөтөн өҙмәй, ер өҫтөндә йыры ҡалырына ла ышанысын юғалтмай. Ваҡыт аяуһыҙ осһа ла, шағир уның бер генә минутын да өмөт-хыялһыҙ үткәрмәй. «Кәҙерлеһең , Ваҡыт» менән «Хыял»ды «Юлдағы уй» йөпләп ҡуйғандай: унда ла шағир үҙенең эске кисерештәре менән уртаҡлаша һәм «Йәш егеттәй юлда ауһам икән, ҡарт йыландай ятмай, бөгөлмәй» тигән теләген белдерә.

Ижад юлын «Өскөл хаттар» (1972) тигән йыйынтыҡ менән башлап ебәргән Риф Мифтахов етмешенә аяҡ баҫҡанда ла Бөйөк Ватан һуғышы темаһына тоғролоҡ һаҡлай. (Шағирҙың биографияһы менән яҡынданыраҡ танышһаң, быға уның үҙ сәбәптәре лә барлығына төшөнәһең.): Журналдың 2005 йылғы 11-се һанында донъя күргән «Бергә йыйһаң . . .» тигән шиғырҙы «Өскөл хаттар»ҙың үҙенсәлекле бер дауамы, тиергә була:

Һалдат хатын әгәр бергә йыйһаң
Тыуыр ине быға кәҙәре
Һис булмаған һәм дә булмаясаҡ
Йән тетрәткес йөрәк әҫәре.

Заманында фашист илбаҫарҙарына ҡаршы трагик та, героик та көрәште сағылдырған әҫәрҙәр әҙ яҙылманы. Төрлө телдәрҙә, төрлө жанрҙарҙа. Ләкин Л. Толстойҙың «Һуғыш һәм солох»она тиң эпопея әле һаман тыумаған. Шуға күрә Р. Мифтаховтың «Васыят ҡалдырған» тигән бәләкәй генә шиғырында күтәрелгән мәсьәлә менән килешмәй сара юҡ. Ә был әҫәрендә автор, минең уйымса, Бөйөк Ватан һуғышы темаһына өр-яңы ҡараш ташлаған: «Һуғыш тураһында бик күп яҙҙыҡ» тип өс тапҡыр ҡабатлай ҙа, дүртенсегә: «Яңылышам – бик әҙ яҙылған» тигән көтөлмәгән боролош яһап ҡуя. Ун бер юлдан торған һуңғы строфала бер нисә генә шиғри һөйләм ярҙамында һуғыштың зәһәрлеге күҙ алдына баҫтырылған һәм әҫәрҙең төп идеяһы ла шунда асылған:

Яу ҡырында ятып ҡалған яугир
Һәр быуынға васыят ҡалдырған:
Һуғыш уты ҡабат ҡабынасаҡ,
Беҙ туҡтаһаҡ иҫкә алыуҙан,
Беҙ туҡтаһаҡ уны яҙыуҙан.

Шиғырҙан бер үҙе айырылып торған «Һуғыш тураһында бик аҙ яҙҙыҡ...» тигән иң һуңғы юл әҫәргә үҙенә башҡа колорит өҫтәй Һуңғы йылдарҙа ғына ижад ителгән «Һалдат булдым» тигән шиғырҙа ла, лирик геройҙан һалдатта хеҙмәт иткән йылдарын хәтерләтеү аша, шағир тос фекер әйтеүгә ирешкән:

Атай-ағайҙарҙың ҡаны менән
Беҙ донъяға Еңеү яуланыҡ.
Яуҙа ҡылған улар батырлығын
Беҙ һалдатта нығырҙаҡ аңланыҡ

Бында быуындар бәйләнешенә ишара яһалғанлығы хаҡында әйтеп тә тораһы юҡ. «Ил хәстәре билгә һалдат ҡайышындай уралған» тигән метафорик сағыштырыу ҙа – шағирҙың поэтик табышы, тиһәм, бәхәс уятмаҫ.

Өҫтәрәк Р. Мифтаховтың эмоциональ кеше икәнлеге хаҡында һүҙ сығып ҡуйғайны инде. Ысынлап та, уның әҫәрҙәрен иғтибар менәнерәк уҡыһаң, был фекерҙең хаҡлығына ҡат-ҡат ышанаһың. Теге быуаттағы шикелле, быныһында ла ул уҡыусыны лирик геройҙың тәрән кисерештәрен сағылдырған шиғырҙары менән ҡыуандырып тора. Ундай шиғырҙар ғәҙәттә авторҙың яҡындарына бағышланыусан була. «Әсәй киткәс...», «Әсәй янында», «Йәшемде һөрт, атай...», «Өҙөлгән», «Һорай төҫлө», «Хуш, абзый...», «Сәнсмә , йөрәк...» тигәндәре – тап ана шундайҙарҙан.

Әйтергә кәрәк, беҙҙә лә, башҡа әҙәбиәттәрҙә лә, әсәләр тураһында шиғырҙар әҙ яҙылмай. Ләкин йәшерен-батырыны юҡ, йыш ҡына улар әсәләргә дифирамб йырлауға ғына ҡайтып ҡалыусан. Риф Мифтахов иһә был темаға мөрәжәғәт иткәндә, уға күп осраҡта психологик күҙлектәнерәк сығып ҡарарға тырыша.Әсәһе вафатынын һуң, мәҫәлән, шағирға ла, уның лирик геройына ла туған яҡтың йәме китә, хатта йыһан да буп-буш ҡалғандай тойола («Әсәй киткәс...»). Әсәгә булған һөйөүҙең көсөн һәм тәрәнлеген, кеше тормошонда әсә тотҡан урынды,

ул уйнаған ролде бынан да ғәйрирәк итеп күрһәтергә мөмкин микән? «Әсәй янында» тигән шиғырҙа ла бер ниндәй сөсөләнеү ҙә, бөҙрә телләнеү ҙә юҡ – бары тик етди һөйләшеү генә бар:

Сал башымды һиңә мең ҡат эйеп,
Әлегә мин, әсәй, юл алам,
Тик килермен бер саҡ – ҡайталмам...
Төйәгеңдә булыр улың да –
Тыуған ер һәм һинең ҡуйында.

«Йәшемде һөрт, атай...» ҙа – хистәргә бай, психологик яҡтан ифрат көсөргәнешле шиғыр. Риторика ярҙамында түгел, фәҡәт хистәр аша, шағир атаһының хәтерҙә һаҡланырдыҡ образын һынландырған «Атай аҡылынан мөмкин ине һәр һорауға яуап табырға», ти ул. «Ҡулы – эшсән, теле сәсән ине, һәр тарихты яҙып ҡуйғайны. Мин – китаплы, ә ул баҫмаһыҙ ҙа һүҙ оҫтаһы – шағир булғайны», тип тә өҫтәй .

«Өҙөлгән» тигән шиғыр уғата ла аяныслыраҡ яңғырай. Автор уға йәйәләр эсендә юҡҡа ғына «Әрнеүле бер йыр» тигән өҫтәмә исем бирмәгәндер. Күп юғалтыуҙар кисергән лирик геройы, ысынлап та, әрнеүле хистәр, зарлы һағыштар тулҡынында йөҙә:

Төйәгемдә йорт-ҡуралар күреп,
Хужаларын күрмәү – аяныс.
Ауылымдың ҡото, йәме бөттө
Һәм ҡалманы кеүек таяныс

Ләкин шуныһы мөһим: Р. Мифтаховтың лирик геройы ара-тирә ауыр хистәргә бирелеп, күңелһеҙ тойғолар кисерһә лә, ул һис тә ебеп төшкәндәрҙән түгел. Бындай халәт өҫтөнлөк ала башлаһа, ул үҙенең йөрәгенә мөрәжәғәт итә, уны ашыҡтырмауын үтенә, сөнки уларҙың икеһенә лә (лирик герой менән уның йөрәгенә) ерҙә бик күп эштәр башҡараһы бар әле – әсәһе менән атаһы, апай-ағайҙары, туған-ырыуҙары, яҡташтары, дуҫтары алдында үҙен бурыслы һанай:

Тик үҙҙәре, көн-төн тирен түгеп,
Тормош йәмен күрмәй һүнделәр...
Һәр береһен, миндәй тере итеп,
Килер быуындарға кем һөйләр?

Тик һин тиңһәң, йәшәү бирһәң генә
Мөмкин булыр ҡәләм алырға.
Ҡаныбызға һеңгән үткәндәргә
Хәтер һүкмаҡтары һалырға.

Татарҙың билдәле шағиры Сибғәт Хәким, өлкән ҡәләмдәше Хәсән Туфан шикелле, башҡорт әҙәбиәтселәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән. Уларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында йылы хистәр менән һуғарылған мәҡәләләр ҙә яҙып ҡалдырҙы.Шулар араһында миңә "Бәхетле шағирҙар" тигәне айырыуса яҡын. Ул – Назар Нәжмиҙең 1972 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Ут күрше» тигән китабына яҙылған баш һүҙ. Ҡыҫҡа, ләкин ифрат йөкмәткеле был мәҡәләнең авторы бер-береһен тәржемәһеҙ аңлап торған башҡорт һәм татар шағирҙарын бәхетле шағирҙар, тип атағайны. Олуғ һүҙ эйәһенең был баһаламаһы менән бәхәскә инеүсе табылмаҫтыр. Ә быға уның даирәһен киңәйтергә мөмкин: фани донъяла йәшәгәндә үк үҙҙәре тураһында яҙылған китап-монография уҡып шатланған шағирҙарҙы ла бәхетле шағирҙар, тип атар инем. Донъя күләмендәге ҡайһы ғына әҙәбиәтте алып ҡараһаң да, ундайҙар күп булмай. Беҙҙә лә шулай – бармаҡ менән генә һанарлыҡ: Сәйфи Ҡудаш, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев. Күптән түгел ошо исемлеккә Риф Мифтахов килеп өҫтәлде – күренекле ғалим Әхмәт Сөләймәнов уның хаҡында «Йондоҙҙарҙан шағир йылынған» тигән монография баҫтырып сығарҙы.

Риф Мифтахов ижады тураһындағы минең был уйланыуҙарымды уның «Бәхет тауы» тигән шиғыры ла ҡеүәтләй һымаҡ. Ҡарап тороуға – ябай ғына шиғыр, ә уның төбөндә ғәйәт ҙур фәлсәфә – ерҙә йәшәү фәлсәфәһе ята. Баҡһаң, был ергә килгән бер генә кеше лә төйәген һайлап алмаған – ни яҙған, шуға ризалашып йәшәй. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, бөтә кеше лә бәхетле булырға, уның емештәрен татырға хаҡлы. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр өсөн бәхеткә ирешеү хыял ғына булып ҡала. Әммә әҙәм балаһы барыбер ҙә уға ынтылырға тейеш. Әллә ни юғары дәрәжәләргә эйә булмаһа ла, Риф Мифтахов, минеңсә, үҙенең сағыу ижады, намыҫлы хеҙмәте менән бәхет яулаған шағир. Юбилейҙарҙың әлегеһе лә, киләсәктәгеләре лә гөрләп үтһен, тип теләйһе генә ҡала уға.

2009, март

«ҒҮМЕР ЮЛЫМДАН КИЛӘМЕН ТИК ҮҘЕМДЕҢ ӘҘ МЕНӘН…»

Сафун Әлибайҙың 60 йәшен билдәләгән көндәрҙә шағирҙың замандашы һәм ҡәләмдәше Аҫылғужа Баһуманов уның тураһында былай тип яҙғайны: «Шиғриәткә алтмышынсы йылдарҙа атаҡлы Баязит Бикбайҙың изге фатихаһы менән килеп ингән Сафуан Әлибай башҡорт әҙәбиәтендә хәҙер ныҡлы үҙ урынын тотҡан күренекле әҙиптәр иҫәбендә тора. Шиғриәтебеҙҙе ул яңы һүҙ, яңы образдар менән байытты, йыр жанрын үҫтереүгә айырыуса күп көс һалды. Әлибай, үҙе әйткәнсә, «Халҡым тиеп яр һалмайса, ярһып күкрәк ҡаҡмайса, халҡының бәҫен белеп», туған халҡына «йән-тәненән ҡанын түгел, йыр ағыҙып» ижад итә. Ижады тос, мәртәбәле». («Ағиҙел», 2001, 2-се һан, 77-се бит). Тос ижадҡа тос баһа бирелгән, тиһәм, бер ниндәй ҙә арттырыу булмаҫ.

Төрлө йылдарҙа һәм төрлө сәбәптәр айҡанлы Давид Кугультинов, Мостай Кәрим, Зәһир Исмәғилев, Назар Нәжми, Ғилемдар Рамазанов, Фәүзиә Рәхимғолова кеүек билдәле шәхестәр ҙә Сафуан Әлибай хаҡында йылы һүҙҙәрен һәм изге хистәрен ҡағыҙ битенә теркәп киттеләр. Күренекле прозаик һәм драматург Ибраһим Абдуллин иһә кесе ҡәләмдәше хаҡында былай тип яҙып ҡалдырҙы: «Эйе, тәбиғәт Сафуанға хазиналарын йәлләмәгән: талантлы шағир ҙа, һоҡландырғыс матур, моңло тауышлы йырсы ла, ифрат кеселекле, инсафлы, ипле холоҡло кеше лә».

Шуныһы мөһим: әҙәбиәтебеҙҙең һәм сәнғәтебеҙҙең оло быуын вәкилдәре ауыҙынан сыҡҡан был маҡтау һүҙҙәре (уларҙы артабан да дауам итергә булыр ине) Сафуандың башын әйләндермәне – ул үҙенең етмешенә яҡынлашып барғанда ла «халыҡ улы, хаҡлыҡ йырсыһы» булып ҡала килә. Һуңғы йылдарҙа уның «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән «Оло үҙән уртаһында» (2004), «Таңды тоям шәфәк утында...» (2005), «Алыҫтыр ҙа туҡталышым...» (2006), «Был күперҙән кем үтер?..» (2007) тигән шиғри шәлкемдәре – быға асыҡ дәлил. Ҡырҡтан ашыу шиғырҙы берләштергән был шәлкемдәр шағирҙың, ирешкәндәр менән генә сикләнеп ҡалмайынса, яңы үрҙәргә ынтылып йәшәүен иҫбатлап тора. Тап «Эш башлайым...» тигән шиғырҙағыса:

Мин тағы ла, билем биштән быуып,
Эш башлайым – ваҡыт ҡәҙерле.
Миңә, ярай, бер кем биргәне юҡ
«Эш ташларға!» тигән әмерҙе...

Сафуан Әлибайҙың яңы быуат башында билен биштән быуып эшкә тотонған лирик геройы – оло тормош юлы үтеп, бай тәжрибә туплаған шәхес. Күпмелер кимәлдә авторҙың прототибы, серҙәше һәм фекерҙәше булған был шәхес үҙенең үткәненә, бөгөнгөһөнә, киләсәгенә йыш ҡына ошо бай тәжрибә бейеклегенән ҡараш ташлай. Тормош мәшәҡәттәренә, донъя ағышына, ерҙә йәшәү мәғәнәһенә лә ул шул тәжрибәнән сығып баһа бирә. Бейеклектән ташланған ҡарашта, тәжрибәнән сығып биреләгән баһала иһә – аҡыл эйәләренә хас фекер тәрәнлеге, сәсәндәргә хас һүҙ тапҡырлығы. Лирик геройҙың (шул иҫәптән, авторҙың да, әлбиттә) ошо сифаттары айырыуса «Оло үҙән уртаһында» тигән шәлкемгә ингән шиғырҙарҙа үҙҙәрен нығыраҡ һиҙҙерә, шикелле.

Шәлкем «Ташҡындарҙа» тигән шиғыр менән асыла. Уның асылына бик тиҙ генә, бер уҡыуҙа уҡ төшөнөп етермен тимә, сөнки ул йомаҡ һымағыраҡ яҙылған. Һүҙ унда хайуандар донъяһы хаҡында бармаһа ла, төҙөлөшө менән ул мәҫәлдә лә хәтерләтеп ҡуя. Билдәле булыуынса, күпселек осраҡта теләһә ниндәй шиғырҙың да төп идеяһы – автор әйтергә теләгән фекер – уның һуңғы строфаһында, хатта һуңғы юлдарында асыҡланыусан. Ә бында киреһенсәрәк – тәүге строфала уҡ автор, тирә-йүндә барған хәл – ваҡиғаларға үҙенең ҡарашы менән уртаҡлашып, уҡыусының иғтибарын йәлеп итә:

Һынай яҙмыш ағымдары:
Былар ауан, был көслө;
Абайлаһаң, , беҙ үҙебеҙ –
Ташҡындарҙа һал төҫлө.

Әгәр ошо строфа булмаһа, ҡалғандары, бәлки, бигүк аңлашылып та бөтмәҫ ине. Сөнки артабан автор, көтмәгән-нитмәгән ерҙән, ҡыуғын ҡыуыу күренешен һүрәтләргә тотона. Шиғырҙы аҙағына тиклем уҡып сыҡҡас, тәүге строфаға яңынан әйләнеп ҡайтып, был донъяла кешенең яҙмышы һәм булмышы – ана шул ҡыуғын менән бер, тигән һығымта яһайһы ғына ҡала.

С. Әлибайҙың күпте күргән, күпте белгән лирик геройы, халыҡ аңында киң билдәлелек менән файҙаланыусы «яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигән һынамышҡа бигүк ышанып бармаһа ла, унан бөтөнләй үк баш та тартмай кеүек. «Ел иçһә лә...», «Йәшел ҡайын» тиген шиғырҙар, минеңсә, тап бына ошо икеләнеү, шөбһәләнеү мотивы менән һуғарылғандар. Тик ул мотив туранан-тура түгел, ә кинәйәләп, сағыштырыуҙар, символик йәнәшәлектәр ярҙамында үткәрелә.

«Ел иçһә лә...»не, мәçәлән, башкөллө метафораларға ҡоролған шиғыр, тиергә була. Һүҙ йәнле кеше тураһында бармаһа ла, унда бөтәһе лә йәнле. Тәбиғәт донъяһында йыш осрай торған кескәй генә бер күренеш ифрат матур итеп тасуирланған һәм шул күренеш аша ярайһы ғына тәрән фекер әйтелгән:

Тулҡындар үргә сапһа ла,
Сайҡай-сайҡай ялдарын,
Йылғалар шул кире аҡмай,
Дауам итә юлдарын.

«Йәшел ҡайын» да – шулай. Тәү ҡарамаҡҡа, ул саф пейзаж лирикаһына оҡшап тора. Ысынында иһә,– «Ел иçһә лә...» шикелле: күпме генә тартҡалашһаң да, ваҡыт та, тәбиғәт тә үҙенекен итә. Әйтерһең дә, яҙмыштан уҙмыш юҡ:

Бойоҡмасы, ҡайын!
Фани донъя
Һине лә шул мәңге йәшәтмәç;
Сыуаҡ яҙҙа алсаҡланып кейгән
Йәшел күлдәк кенә йәшәртмәç...

Был шәлкемгә ингән «Ағамын...», «Йондоҙло юл», «Ғаләм иңләп...», «Һағындым», «Сәйер сәғәт» тигән шиғырҙар ҙа үҙенсәлекле яңғырай. М. Кәримгә эйәреп яҙылған «Ағамын...» тигән шиғыр «Ташҡындарҙа»-ның (был шиғыр өçтә телгә алынғайны инде) дауамы шикеллерәк ҡабул ителә. Айырма тик шунда: «Ташҡындарҙа» тигән шиғырҙа донъя хәлдәре дөйөмләштереп тасуирланған булһа, «Ағамын...»да иһә ул бер аҙ тарайтыбыраҡ, конкретлаштырыбыраҡ һүрәтләнә: был шиғырҙың лирик геройы үҙен кәшмәктән (һалдан) айырылып, «оло үҙән уртаһынан» ағып барғандай тоя. Лирик геройҙың «Ятҡаным юҡ ятыуҙарҙа ҡый-

ғыпырға эләгеп» тигән белдереүендә уның ерҙә йәшәү принцибы, әхлаки ҡағиҙәләргә тоғролоғо сағылып киткәндәй була. Ә инде «...Ҡайҙарҙалыр кескәй карап йөҙҙөрәлер бер малай» тигән юлдар шағир менән лирик герой араһындағы уртаҡлыҡты уғата ла яҡынайта торған бер факттыр.

Тәбиғи, күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән аҡҡан ваҡыт С. Әлибай лирикаһына ла үҙенең йоғонтоһон яһамай ҡалмай. Әгәр йәшлек романтикаһы бер аҙ баҫыла төшөп, уның урынын тормош баҫҡыстары аша үткән заман улына хас олпатлыҡ, етдилек, уйсанлыҡ кеүек сифаттар биләй бара икән, һис тә ғәжәп түгел. «Йондоҙло юл» тигән шиғырҙың лирик геройы, әйтәйек, матурлыҡты ла, мөхәббәтте лә, йәшерәк саҡтағы шикелле, күктә түгел, ә ерҙә эҙләргә өндәй. Дөрөҫ, ул күктән дә бөтөнләйгә ваз кисмәгән. Күнегелмәгәнерәк формала яҙылған «Ғаләм иңләп...» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, лирик герой хатта астроном шәйенә инеп киткән. Ләкин унда барыбер ҙә, романтик пафосҡа ҡарағанда, әҙәм балаһын ғүмер-ғүмергә борсоған ғәҙәти ғәм-хәстәр өҫтөнлөк итә:

Мин һәр көндө алыҫ сәфәр сығам,
Төшкән һайын эңер шаршауы;
Имен булһын, Ерем, сәфәрҙәрең,
Имен булһын ғаләм ҡоршауы!

Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: әлегерәк ғәҙәти тойолған был ғәм-хәстәр хәҙер глобаль мәсьәләләрҙең береһенә әйләнеп бара. Шуға күрә шағирҙың Ғаләм темаһына мөрәжәғәт итеүе лә юҡтан ғына түгелдер. Шулай тимәҫ инем, әгәр «Сәйер сәғәт» тигән шиғырҙа ла һүҙ ошо тәңгәлдәрәк бармаһа. Күләме яғынан шиғыр кескенә булһа ла, фантазияға бай, хистәргә бирелеүсән лирик геройҙың күңел торошо унда шаҡтай оҫта тотоп алынған: бер үҙе генә ҡалған саҡтарҙа, тек-тек килгән сәйер сәғәт уның серҙәшенә әйләнә, һәм ул «әйҙәй төҫлө, йәнтәслимгә хатта һөйрәй төҫлө әллә ҡайҙа Йыһан, Ер шарын?!»

Сәғәтләп кенә түгел, айлап, йыллап бер туҡтауһыҙ аҡҡан ваҡыттың шағир психологияһына, уның күңел ҡылдарына тәьҫирен «Һағындым» тигән шиғырҙа ла шәйләргә мөмкин. Был шиғыр биш бүлектән, һәр бүлек, үҙ сиратында, дүртәр юллы икешәр строфанан тора. Исеменә ҡарағанда, ул мөхәббәт лирикаһына тартҡандай тойола. Асылда иһә уның тәүге дүрт бүлеге йыл миҙгелдәрен тасуирлауға бағышланған; һуңғы, йомғаҡлаусы бүлектә генә мөхәббәт темаһы үҙен бер аҙ һиҙҙереп

ҡуя. Йәшлек романтикаһын артта ҡалдырып, хәҙер инде аҡһаҡалдар ҡорона инеп барған, тәбиғәт законҙарын яҡшы аңлаған лирик геройға яҙ ҙа, йәй ҙә, көҙ ҙә, ҡыш та берҙәй ҡәҙерле, сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенсә матур, үҙенсә күркәм, беҙҙең көнитмешебеҙҙә үҙенсә файҙалы. Шуға ла йылдың һәр миҙгелен ул һағынып көтә һәм көтөп ҡаршы ала. Үҙенең берҙән-бер теләген шағир бындай юлдар аша белдергән:

Һаҡауланған кәкүк булып
Килмәһен миҙгелдәрем,
Һинең менән килһен улар,
Булмаһын һинһеҙҙәрем.

Әйткәндәй, «Алыҫтыр ҙа тукталышым...» тигән шәлкемде асып ебәргән «Асыуым юҡ...» исемле шиғырҙа ла ошондайыраҡ мотив яңғырай. Унда кәүҙәләндерелгән лирик геройҙың бер нимәгә лә асыуы юҡ: һыуыҡҡа ла, әсе елгә лә, күҙ асырға бирмәгән аҡ ҡарҙарға ла. Сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы – үҙ урынында: һыуыҡ – бейемәҫ ерҙән бейетә: әсе ел – «ойоп барған күңелдәрҙе пак эштәргә» елкетә; аҡ ҡарҙар – шығыр-шығыр атлап килеүсе шағирҙың барлығын «хәбәр итә бар донъяға». Шулай итеп, ҡайҙа ҡарама – үҙенә күрә бер фәлсәфә.

Өҫтә тикшерелгән шиғырҙарға ҡарап, фекер эйәһе юғарылығына күтәрелгән Сафуан Әлибай хәҙер гел фәлсәфәүи йүнәлештәге шиғырҙар ижад итеү менән генә мәшғүл икән, тип уйларға ярамай, әлбиттә. Ул, әүәлгесә, тирә-йүнгә, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡҡа лириктар күҙлегенән сығып ҡараған ижадсы булып ҡала килә. «Көнөм» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, сағыу буяуҙар, образлы сағыштырыуҙар ярҙамында шағир таңдың нисек атыуын, көндөң нисек үтеүен, кистең нисек килеүен хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп һүрәтләгән. Был һүрәтләмәнән күренеүенсә, лирик герой яҡты донъяның ҡәҙерен белеп йәшәп ятҡан шәхес, шуға ла уның күңеле көр, кәйефе яҡшы. Ләкин, баҙрап тыуыр таңын шәфәҡ утында тойһа ла, ул үҙенең еңелсә алданып йәшәүен дә йәшермәй:

Хәйер, төндө көн итергә
Сама, әмәл юҡ – беләм,
Бар уйҙарым, төштәремде
Өн итә-итә киләм.

Ошо юҫыҡта яҙылған «Уй-хистәрем», «Мәрйен теҙеп...», «Көн ҡаршылап...», «Кояш мөхәббәте» тигән шиғырҙар ҙа күңелгә ятышлы. «Уй-хистәрем»дең лирик геройы беҙҙең алға асыҡ сырайлы, шат күңелле, бай рухлы кеше булып килеп баҫа. Ул гел нурға ынтыла, үҙенең уй-хистәре менән уртаҡлашҡанда уларҙың башҡалар өсөн зәм-зәмгә тиң булыуын теләй. «Мәрйен теҙеп...»тең лирик геройы башҡасараҡ күҙаллана: ул донъя мәшәҡәттәренән арыған кешегә оҡшап тора. Шуға ла уның бөтә хыялы түбәндәге юлдарға ҡайтып ҡала:

Һүҙ –мәрйендең иң кәрәгen
Һайлап өҙәһе инe,
Тып-тын ғына йондоҙҙарҙан
Мәрйен теҙәһе инe!..

«Көн ҡаршылап...»тың лирик геройы иһә донъя мәшәҡәттәренән алыҫ тора – ул тыуып килгән яңы көндө ҡаршылай. Шағирҙың үткер күҙе тәбиғәттең иртәнге мәленә хас байтаҡ күренештәрҙе оҫта тотоп алған һәм уларҙы йәнле итеп һүрәтләгән. Ғөмүмән, был шиғырҙы пейзаж лирикаһының матур бер өлгөһө, ә уның авторын – маһир пейзажсы, тиергә мөмкин. Ә бына сағыштырыуҙарға, метафораларға бай «Кояш мөхәббәте» – ошо маһирлыҡтың тағы бер күрһәткесе. Шиғырҙа кәүҙәләндерелгән лирик геройҙың кәйефе күтәренке, уның күңел түренән яҡтылыҡ бөркөлөп тора:

Мөхәббәттең тоям ялҡындарын,
Ҡанаттарым, ҡуйма өтөлөп!
Мәңгелектең йотҡас йәншишмәһен,
Дәрт-дарманым түгел бөтөрлөк.

Шиғыр С. Әлибай стиленә хас матур тел менән яҙылған:

Ә Кояшҡа кемдәр ғашиҡ түгел,
Йым-йым итә, серле төн үтә:
Һибеп кенә алтын толомдарын
Һыу ҡыҙымы, әллә комета?!

Пейзаж лирикаһы хаҡында һүҙ сығып ҡуйғас, уға бер аҙ туҡталып китергә кәрәктер. Лириканың был төрөнә әҙәбиәт ғилемендә

төрлөсәрәк ҡараш йәшәп килә. Бәғзеләр уны авторҙың стиленә, талантына, уның ҡайһы метод, йәиһә ниндәй ағым сиктәрендә ижад итеүенә бәйләп аңлата. Шунан сығып, сентименталистар, романтиктар, реалистар пейзажды, йәнәһе, һәр ҡайһыһы үҙенсә ҡабул итә һәм үҙенсә һүрәтләй, тип раҫлайҙар. Бындай ҡараш менән бәхәскә инеү – урынһыҙ, минеңсә. Сөнки уның нигеҙендә дөрөҫлөк юҡ түгел, шикелле. Әлеге осраҡта иһә беҙгә француздарҙа «төбәк, ил» мәғәнәһен аңлатҡан «пейзаж» һүҙенең әҙәбиәт ғилемендә «тәбиғәт күренештәре» тигән варианты мөһимерәк.

Сафуан Әлибайҙың теге быуаттағы шиғриәтендә лә, әлегеһендә лә тәбиғәт донъяһы ярайһы ғына урын алып тора. Һәм ул элек тә, хәҙер ҙә төрлө ракурста һынландырыла. Юғарыла иҫкә алып кителгән «Йәшел ҡайын» һәм «Көн ҡаршылап...» тигән шиғырҙар – быға асыҡ миҫал: уларҙың тәүгеһендә тәбиғәт күрке ҡайын автор идеяһын үткәрергә ярҙам итеүсе бер әҙәби сара ролен үтәһә, икенсеһендә иһә ноҡланғыс тәбиғәт донъяһы саф килеш, бер ниндәй нагрузкаһыҙ, бөтә күркәмлегендә һәм байлығында кәүҙәләндерелгән. Шуға ла уны саф пейзаж лирикаһына индерергә булалыр, тип иҫәпләйем. «Янғантау ҡайындары» менән «Ҡайындарым» тигән шиғырҙар миҫалында был уйланыуҙарҙы артабан да дауам итергә мөмкин.

«Янғантау ҡайындары» – метафораларға бай әҫәр. Ул саф пейзаж лирикаһына ҡарай, тимәксемен. Шағир тәбиғәт батшалығының матурлығына ноҡланып ҡына ҡалмай, шул батшалыҡтан сафлыҡ, паклыҡ бөркөлөп тороуына ла иғтибарын йүнәлтә. «Йәш ҡайында ҡайһы һылыуҡайҙың һыҙылып ҡалған ҡара ҡаштары?..» тигән ассоциатив сағыштырыуға һәм, әйтерһең дә, ниндәйҙер бер көй сығарып торған аллитерацияға кем генә битарафлыҡ күрһәтер икән? Дөйөм алғанда, шиғыр, ысынлап та, матур тел менән яҙылған, тик рифмаларҙың төрлөсә аралашыуы ғына уны уҡығанда бер аҙ уңайһыҙлыҡ тыуҙырып ҡуя.

Ә бына «Ҡайындарым» тигән шиғыр башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра. Уның «Һуғыш йылдарында тыуғандарға» тигән бағышламаһы ла бар һәм ошо бағышлама әҫәрҙе тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. Туған ауылына ҡайтып төшкән лирик геройҙы, ҡыуанышып, буй еткергән ҡайынлар ҡаршы ала. Ҡыуанышыуҙың да үҙ сәбәбе бар икән шул: хәҙер, һуғыштан һуң күп йылдар үткәс, «бәләкәй сана, оло балта менән күренмәй ҙә малай-шалайҙар». Теге

ауыр йылдарҙы хәтерләп, уй-кисерештәргә бирелеп киткән лирик геройҙың бына был һүҙҙәре автор әйтергә теләгән фекергә уғата ла асыҡлыҡ индерә:

Ҡалҡып ҡына килгән саҡтарында
Ғүмерҙәре өнһөҙ ҡырылды.
Һалҡын өйҙәр көтә саналарҙы...
Иҫләмәйбеҙ әле ҡырынды.

Ә хәҙер донъялар башҡаса. Һәм лирик герой үҙенең шатлығын йәшерә алмай:

Бала саҡтар ҡалды сауыллыҡта,
Буй еткергән, шөкөр, ҡайындар.
Ауылымдың тирә-түбәләре
Аҡ ҡайындар менән ҡайылған.

Күреүебеҙсә, шиғырҙа һүҙ тәбиғәт күрке тураһында бара ла, ул саф пейзаж лирикаһынан алыҫ тора: ҡайын образы бында– заманалар йөҙөн һүрәтләү өсөн ҡулланылған бер художество алымы.

Сафуан Әлибайҙың һуңғы йылдарға ҡараған лирикаһында автобиографик һыҙаттар көслөрәк һиҙелә башланы һымаҡ. «Таңды тоям шәфәҡ утында...» һәм «Алыҫтыр ҙа туҡталышым...» тигән шәлкемдәргә ингән шиғырҙарҙың байтағында шағирҙың тормош юлы сағылып киткәндәй була. Хәйер, ундай шиғырҙар «Был күперҙән кем үтер?..» тигән һуңғы шәлкемдә лә юҡ түгел. Бында шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китһәк, яҙыҡ булмаҫ.

«Сыҙамым» тигән шиғырҙың лирик геройы – һуғыш йылдарын тойоп үҫкән, һуғыштан һуңғы ауырлыҡтарҙы тойоп ҡына түгел, бөтә йәне һәм тәне аша үткәреп йәшәгән быуын вәкиле. Ҙур юғалтыуҙар менән яулап алынған Еңеүҙән һуң бер аҙ яйға һалынған, унан һуң тағы боҙолоп киткән донъя хәлдәренең тере шаһиты ул. Характеры, фекерләү ҡеүәһе, тормош ағышына объектив ҡарашы менән шағирҙың үҙенә оҡшап торған лирик герой, бер кеше ғүмеренә тиң арауыҡты, шул арауыҡ дауамында булып үткән хәл-ваҡиғаларҙы еңелсә күҙ уңынан уҙғара ла, аҡыл эйәләренә генә хас сабырлыҡ, намыҫсанлыҡ менән бындай һығымта яһап ҡуя әҫәрҙең аҙаҡҡы строфаһында:

Әрем һона яҙмыш...
Беҙ белмәйбеҙ
Ниҙәр тағы килеп сығаһын.
Түҙгәнгә бит түш тә әләгә, ти...
Шартлай ғына күрмә, сыҙамым!..

«Мин – Олойөр кешеһе» тигән шиғырҙа автобиографик һыҙаттарҙы эҙләп, баш та ватаһы юҡ – улар әҫәрҙең исемендә лә, йөкмәткеһендә лә. Шиғырҙың исемен төшөрмәлә автор «Олойөр – ауылым йылғаһы» тип аңлатҡан. Лирик герой «Был донъяға тыуғас инде, йәшәп ятам теттереп» тиһә лә, уның артабанғы һүҙҙәренә ҡарағанда, ул һис тә тыйнаҡһыҙ, еңел холоҡло кеше түгел: ваҡтар араһында – ул эре: унан алабутаһы ла, кесерткәне лә, балтырғаны ла, әреме лә ҡалмаған; ул – яугир улы; теләгәндә шиғырын да яҙа, йырын да ижад итә; тормош күпме генә һынамаһын, ул түҙем, сабыр, ризығы – хәләл; уның баштан ашҡан хыялдары ла, бәйһеҙ уй-хистәре лә юҡ. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, һигеҙ юлдан торған һуңғы строфала лирик геройҙың (шул иҫәптән, шағирҙың да) бөтә булмышы асып һалынған:

Хаттың ашмаҫ хыялдар юҡ,
Хис-уйҙарҙың – бәйһеҙе,
Мин – ғүмергә, ил өндәшһә,
Ат эйәрләр бәйгеҫе.
Олоһо булам, кесеһе,
Мин – Олойөр кешеһе,
Салауаттар тоҡомонан,
Мин – Оло Ер кешеһе!

«Мин – Олойөр кешеһе»ндә һанап кителгән автобиографик һыҙаттарға «Үпкәм юҡ» һәм «Аҙымлап...» тигән шиғырҙарҙың лирик геройҙары уғата ла асыҡлыҡ индерә: ул эштең байтаҡтарын татыған; шағир абруйын да ҡаҙанған; намыҫлылығы, тыйнаҡлығы арҡаһында артыҡ күккә лә ынтылмаған, әммә һәр яңы көн уға яңы өмөт алып килгән. Был йәһәттән «Аҙымлап...» тигән шиғыр иғтибарҙы айырыуса йәлеп итеп тора, сөнки унда, әйтерһең дә, шағирҙың биографияһынан ҡырҡып алынған айырым биттәр теркәп ҡуйылған:

Күп йүгерҙем инде был донъяла,
Йүгерттеләр, саҡ-саҡ яйлаһам.
Шөкөр итәм: шатлыҡ бүлешкәндә
Мин өлөшһөҙ һуңлап ҡалманым.

Шағир үҙенең үткән ғүмере, ирешелгәндәре менән ҡәнәғәт, ләкин ул ҡул ҡаушырып ултырыусыларҙан түгел. Уның эшсәнлеге лә, тырышлығы ла, тыйнаҡлығы ла түбәндәге юлдарҙа бик асыҡ сағылған:

Был донъялар мине күп йүгертте,
Елгәндәрем барыбер аҙ һымаҡ...
Һәр нәмәне күҙләп, барлай киләм,
Шул уҡ ерҙән атлап, аҙымлап.
Ерем, эй, киң, коластарым иркен,
Мин инәлтеп юлға тораммы?
Теләгемә етә алырмындыр, –
Аҙымдарым әле ырамлы!..

Ә бына күренекле яҡташы Хәбир Ғәлимовтың яҡты иҫтәлегенә арнап яҙылған «Замандаш» тигән шиғыр Әлибай лирикаһында автобиографик һыҙаттарҙың ишәйеүен раҫлап тороусы ап-асыҡ миҫал. Арҙаҡлы йырсының тышҡы ҡиәфәте, сәхнәлә үҙен тотошо тураһында уйланғанда, шағир күңелендә даны Башҡортостанға ғына түгел, бөтә Рәсәйгә таралған икенсе яҡташы – Салауат Юлаевтың мөһабәт һыны ҡалҡып сыға. Тәбиғи, автор ике яҡташы менән дә сикһеҙ ғорурлана, улар араһында ниндәйҙер тышҡы оҡшашлыҡ барлығын да тойомлай.

«Үпкәм юҡ» тигән шиғырҙың лирик геройы һәр яңы көн уға яңы өмөт алып килә, тигәйне. С. Әлибайҙың «Өмөт» тигән үҙаллы шиғыры ла бар, юғиһә. Ул Динис Бүләковҡа бағышланған. Шиғырҙың исеме аҫтында йәйәләр эсенә алынған «Юл һайын беҙ өйҙәргә китап тейәп ҡайта инек» тигән һүҙҙәр ҙә бар. Лирик геройҙың өмөтө һуңғы строфала белдерелгән:

Йәндәребеҙ ете күккә ашыр,
Рухтарыбыҙ осор юғары,
Кемдер берәү,
Йылдар туҙандарын өрә-һөртә,
Ҡулдарына алһа шуларҙы...

Шағирҙарға бағышлама һәм рухи байлығыбыҙҙың нигеҙен тәшкил иткән китап хаҡында һүҙ сыҡҡас, С. Әлибайҙың тағы ике шиғырына әҙ генә булһа ла туҡталып китмәй ярамаҫ. Уларҙың береһе – «Рәми сәләме», икенсеһе – «Серле гармун» тип атала. Рәми Ғарипов тураһында шиғырҙар хәҙер йыш яҙыла. Күп осраҡта уларҙың авторҙары – үҙҙәрен шағирҙың шәкерттәре, тип иҫәпләүселәр. Шулар араһында – Сафуан да. Ҡайһылыр бер баҫмала микән, мин уның Рәми Ғарипов менән бергә төшкән фотоһүрәтен дә күргәйнем, (Ни тиһәң дә, улар икеһе лә бер райондан бит.) Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, Р. Ғариповҡа арналған шиғырҙар ҙа – төрлө кимәлдә... Әлибайҙыҡы миңә оҡшайыраҡ төшә. Яңғырашы менән матур, сағыштырыуҙарға бай шиғыр. Шағирға дифирамб йырлау урынына, уның характерына хас төп сифатты С. Әлибай ике юлда асып биргән:

Һин китмәнең төҫлө, әллә ҡайҙа
Йөрөйһөңдөр хаҡлыҡ дауалашып.

«Серле гармун» иһә, исеменән үк күренеп тороуынса, серле шиғыр, оригиналь шиғыр. Уйламаған ерҙән һәм уйламаған формала шағир ябай ғына итеп рухи донъяһын асып ебәргән дә, үҙенең образына тағы бер һыҙат өҫтәп ҡуйған:

Кәштәләрҙә, гармун күрегелә́й,
Китаптарым – күңел моңдарым,
Тиккәме ни серле гармуныма
Үрелә лә тора ҡулдарым...

Ҡайһы бер шағирҙарҙан айырмалы булараҡ, яңы быуат башында С. Әлибай илдә барған хәл-ваҡиғалар хаҡында күп яҙмай, ләкин уларға бөтөнләй үк битараф та ҡалалмай. «Болғансыҡ» тигән шиғырҙың бер аҙ аптырашта ҡалған лирик геройы, мәҫәлән, тәүге строфала үҙенең шикшөбһәләре менән уртаҡлаша:

Болғансыҡлы һыу шикелле,
Әллә ниндәй заманы.

Артабан, ғәҙеллекте, хаҡлыҡты юллап барһаҡ та, уларҙың ялғанға бәрелеп ҡаҡланыуы хаҡында бәйән итә ул. Шиғыр тамамланырға

яҡынлашҡанда, лирик геройҙың шиге уғата ла көсәйә һәм ул үҙенең икеле-микеле уйҙарын туранан-тура ярып һалырға мәжбүр була:

Аға-аға заманаһы,
Ниҙәр төшмәҫ был башҡа?
Ярай ҙа, ул ҡалдырмаһа
Алабута, ҡурмаҫҡа...

Һуңғы строфала иһә, шағир лирик геройҙы үҙ шәйенә ҡайтара һәм уны оптимизм юлына баҫтыра:

Беҙ – өмөтһөҙ шайтан түгел,
Булсы сабыр саҡ ҡына.

Болғансыҡ һыуҙар ҙа әле
Бара-бара сафлана.

«Әллә инде...» тигән шиғырҙың да лирик геройы заман тураһында уйлана, тик уға ҡарата үҙенең фекерен өҙөп кенә әйтмәй – әҫәрҙең исеме шикеллерәк. Шиғыр:

Әллә инде иртә тыуҙым,
Әллә һуңлап яралғанмын?
Был донъяның саф эштәре,
Пак хистәре ҡаралған, –

тигән строфа менән башлана ла.

Иртә түгел, һуң да түгел,
Ғүмерҙәр аҡһын, аҡты ;
Беҙгә әле табаһы бар
Ошо ерҙә ожмахты!.. –

тигән строфа менән тамамлана. Урталағы строфаларҙа иһә автор уҡыусыны «донъя ғүмергә шулай булған» тигән һығымтаға килтермәксе. Бәлки, ул дөрөҫтәлер?

Күләме яғынан ярайһы ғына оҙон «Ауыҙлыҡ» тигән шиғыр ҙа ике яҡлыраҡ фекер уята. Авторҙың әйтергә теләгәне ат менән баҫыуға кәрәсин ташыған атаһы образын кәүҙәләндереүгә генә

ҡайтып ҡалмай торғандыр ҙабаһа? Әҫәрҙең елеге, бәлки, һуңғы строфалалыр:

Юл да төрлө – малҡайҙарҙа
Була хәйлә, яуызлыҡ.
Әмәлен тиҙ таба атай, –
Кейҙерә лә ауыҙлыҡ.

Әгәр шиғырға кинәйәле фекер төрөлгән булһа, ул сағында кем кемде ауыҙлыҡларға тейеш һуң? Бына бит ҡайҙа ғиллә!

«Ауыҙлыҡ»тан алдараҡ, шаян тел менән яҙылған «Мәңгелек арбаһында» тигән хикмәтлерәк шиғырҙа ла арба образы тыуҙырылған. Ләкин ундағы арба – тәрән мәғәнә менән һуғарылған метафора, һәм уны атты ауыҙлыҡлап ҡына туҡтатырмын тимә. Шуға күрә шағир менән килешеүҙән башҡа сара ҡалмай:

Ярай әле, туғын имен,
Түҙә килә сәкүшкә,
Мәлһеҙ төшөп ҡалмағанбыҙ
Һикертмәктә, үркәстә.

Әллә ҡайһы планетаға
Беҙ барабыҙмы күсеп?
Баш осонда ғына килә
Шул уҡ йондоҙҙар күсе.

Ижад әһелдәренә хас һиҙгерлек, зирәклек, үтә күреүсәнлек сифаттарын тәбиғәт Сафуан Әлибайға мул итеп биргән. Ябай кеше күҙенә бигүк салынып бармаған күренештән дә ул ниндәйҙер мәғәнә таба һәм уны шиғри юлдарға һала. «Ап-аҡ донъя» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, күпереп ятҡан ҡалын ҡар образы аша лирик геройҙың характер үҙенсәлеге асыла: ул сафлыҡты, паклыҡты ярата. Шунан сығып, һуңғы строфала дөйөмләштерелгән фекер төйнәлә:

Ап-аҡ булды ер, офоҡтар,
Ап-аҡ туғай, тау башы...
Ҡара эштәр, ҡара көстәр
Йөрөй күрһен аҙашып!.

Халыҡ телендә, әгәр яңылышмаһам, «Алыҫтан төшкән нур яҡтыраҡ тойола» тигән әйтем бар ине һымаҡ. Төрлө төбәктә ул, бәлки, төрлөсә лә яңғырай торғандыр, шуға күрә һүҙ көрәштерергә йыйынмайым. Әммә «Күгәрсенем» тигән шиғыр нәҡ ана шул әйтемдең йөкмәткеһенә тап килә. Беҙ бит, билдәле булыуынса, яҙ еткәс йылы яҡтарҙан осоп килгән, көҙ еткәс, кире шул яҡтарға осоп киткән ҡоштарҙы ғына маҡтарға күнеккәнбеҙ. Ә, уйлап ҡараһаң, күгәрсен һәр ваҡыт беҙҙең менән икән дәбаһа: ҡышын да, йәйен дә гөлдөр-гөлдөр килеп көй сығарыуын белә. Быға тиклем ошо ҡошҡа иғтибар итмәгәне, уның тураһында йыр яҙмағаны өсөн шағир үҙен ғәйепле һанай. Әҫәренең төп идеяһын ул һуңғы строфала асып һала:

Һағыныу ҙа онотолған,
Боҫоп оя ҡормағас.
Һин оҙаҡлап, торналарҙай,
Китеп... ҡайтып тормағас.

Һуңғы шәлкемгә ингән «Ҙҙәрем», «Кәбән», «Күпер», «Ишек», «Шығыр-шығыр...» тигән шиғырҙар ҙа тыштан ябай ғына күренһәләр ҙә, йөкмәткеләре менән ярайһы ғына хикмәтле әҫәрҙәр. «Шығыр-шығыр...»ҙа, мәҫәлән, Әлибай, «һыйыр мөгөҙөн һындырыр» һыуыҡта аяҡ астында шығырҙаған ҡарҙан да шиғыр таба: «Баҫҡан һайын тыңлап киләм, әйтерһең һөйләй шиғыр», ти ул. Ә бына был юлдар «Ишек» тигән шиғырҙан:

Күпме дәүер был ишектән
Кемдәр генә үтмәгән?!
Изгеһе лә, нахағы ла...
Ниҙәр, кемгә етмәгән?!

«Күпер» тигән шиғыр ҙа – уйландырырлыҡ. Рефрен һымағыраҡ яңғыраған «Ғүмер буйы күпер һалам», «Ғүмер буйы күпер һалдым» тигән метафоралар әҫәргә айырым бер аһәңлелек биреп тора. Уларҙың мәғәнәһе һуңғы строфала айырыуса тәрән асыла:

Ғүмер буйы күпер һалдым,
Әмәл юҡ уны һүтер.

Борсоғаны тик шул ғына:
Был күперҙән кем үтер?..

«Кәбән» тигән шиғырҙа автор яңынан атаһы образына әйләнеп ҡайтҡан. Йәйге матур, эҫе көндө болонда кәбән ҡойоу күренеше унда шул тиклем ентекләп һүрәтләнгән, ул бөтә йәнлелеге менән күҙ алдына килеп баҫа. Шиғырҙың елеге – эш бөткәндән һуң лирик геройҙың атаһы ауыҙынан сыҡҡан һәм эске бер ғорурлыҡ тойғоһо менән һуғарылған бына был һүҙҙәрҙә:

«Кәбәненә ҡарап әйтһен –
Кем һуң ҡойған тағанын?
Әллә ҡайҙан танып торһон
Тағанынан ағаһын!..»

«Эҫҙәрем» тигән шиғыр «Был донъяла эҙең ҡалһын, эҙең ҡалһын халыҡҡа» тигән ялтыраулыҡлыраҡ та, яңғырауыраҡ та юлдар менән башлана ла, «Ғүмер юлымдан киләмен тик үҙемдең эҙ менән...» тигән ябай ҙа, тәбиғи лә юлдар менән тамамлана. Ғүмер юлы буйлап та, шиғриәттә лә Әлибай, ысынлап та, үҙ эҙен һалып, шул эҫҙән тайпылмайса атлап килә. Юғарыла тикшерелгән шиғырҙарға ҡарап та быға ышанырға була. Әле генә исемләнгән дүрт шиғырға («Кәбән», «Күпер», «Ишек», «Шығыр-шығыр...») килгәндә иһә, улар – күрә, тоя белгән кешегә һәр ерҙә лә шиғыр ята тигән һәм хәҙер инде аксиомаға әйләнеп барған һүҙбәйләнеште хәтергә төшөрөп тороусы асыҡ бер миҫал.

Сафуан Әлибайҙың яңы быуат башындағы ижадына бағышланған был күҙәтеүемде уның «Көткәндәрем» тигән шиғыры менән осламаҡсымын. Дүртәр юллы ете строфанан торған был шиғыр бер аҙ абстрактлаштырылған фекерләүгә ҡоролған. Уның идеяһын яҡынса былай аңларға мөмкин: әҙәм балаһы донъяла ғүмер буйы нимәлер көтөп йәшәй. Ҡояш сыға ла байый, көн артынан көн үтә, ләкин көткәндәрҙең иге-сиге юҡ:

Теләгәндең барыһын да,
Эх, ысын итеп бөтөү.
Ишкән сыбыртҡылар оҙон,
Көткәндәрем бер көтөү!..

Был да – үҙенә күрә бер фәлсәфә: уй-хыялдары менән кеше нимәләр генә ҡылмай, ә ысынбарлыҡта иһә уның күбеһе тормошҡа ашмаған бойом ғына булып ҡала. Шуныһы мөһим: ошондай күңелһеҙ хәҡиҡәтте аңлаған хәлдә лә, Әлибайҙың лирик геройҙары яҡтылыҡҡа, сафлыҡҡа ынтылыусы, асыҡ йөҙлө, таҙа күңелле, ҡайһы саҡта бер аҙ хәйләкәрерәк шәхес булып ҡалыуҙарын дауам итәләр. Уларҙы донъяға килтергән шағир белә: өмөтһөҙ шайтан булғансы, нимәгәлер ышанып, нимәнелер көтөп йәшәү хәйерлерәк. Уға үҙе һайлаған эҙҙән шығыр-шығыр атлап, ишектәрҙең таныштарын да, яңыларын да аса-аса, ғүмер буйы һалған күперҙәре аша үтәһе лә үтәһе һәм тағандары әллә ҡайҙан айырылып торған ижад кәбәндәрен ҡояһы ла әле ҡояһы!

2009, май

«САБЫРЛЫҡТЫҢ ТӨБӨ – ҺАРЫ АЛТЫН»

Тормош асылына, ерҙә йәшәү мәғәнәһенә аҡыл эйәләренсә ҡараш ташлап, Гөлнур Яҡупова утыҙы тулыр-тулмаҫ мәлдә үк әле кеше ғүмерен етеҙ тәгәрләгән тәгәрмәскә тиңләгәйне:

Китер кеүек бер саҡ келтер-келтер
Түбәнләскә генә тәгәрләп,
Ҡатар ғына ике эҙ ҡалдырып,
Ғүмер тигән етеҙ тәгәрмәс.
(Тауға үрләгәндә, 1978).

Етмешенсе йылдар аҙағында донъяға килгән был шиғыр шул заманда уҡ берәй гәзит йә журнал битендә баҫылмай ҡалмағандыр, әлбиттә. Ә бына миңә уны тәү тапҡыр тик туҡһанынсы йылдар башында ғына – Гөлнур Яҡупованың «Автограф» (1992) тип аталған йәшкелт тышлы йоҡа ғына йыйынтығы ҡулға килеп эләккәс кенә уҡырға насип булды. Йыйынтыҡты Өфөнөң Ленин урамындағы китап кибетендә (ә был кибет миңә һуғыштан һуңғы ҡытлыҡ йылдарҙан бирле таныш һәм шуға мөкәм ул һәр ваҡыт күңелде үҙенә тартып торҙо) һатып алғанда кисергән уй-хистәрем бөгөнгөләй хәтерҙә.

Иң башта Рауил Бикбаевтың «Автобиография» (1969) тигән китабы иҫкә килеп төштө. Күләме яғынан (шиғырҙар һаны буйынса ла, баҫма табаҡтар иҫәбе менән дә) ул да әллә ни ҙур түгел, ләкин, ҡатырға тыш менән сығарылғанға күрәлер инде, ҡалын ғына тойола ине. Гректарҙан килеп ингән «авто» (беҙҙекенсә уны «үҙ» тип ауҙаралар) һүҙе Гөлнурҙың да иғтибарын йәлеп иткән дә баһа. Уның «Автограф»ы минең шәхси хазинама әйләнгәс, ғәҙәттәгесә, йыйынтыҡҡа бирелгән аннотацияға күҙ һалдым. Унда былай тип яҙылғайны: «Һәр кеше ер йөҙөндә үҙ эҙен – автографын ҡалдыра. Гөлнур Яҡупованың шиғырҙары ла шағирә яҙмышының үҙенсәлекле автографы ул. Авторҙың ижады уның биографияһы менән тығыҙ үрелеп, бөгөнгө замандаштың тулы ҡанлы образын күҙ алдына баҫтыра».

Һуңыраҡ, төрлө белешмәләр аша, Гөлнур Яҡупованың оҙаҡ йылдар район гәзитендә эшләгәнлеген һәм унда оло тормош мәктәбе үткәнлеген, унан һуң Өфөгә күсеп килгәнлеген һәм «Башҡортостан ҡыҙы» журналында хеҙмәт иткәнлеген, һикһәненсе йылдар башында «Йәш көстәр» альманахының бер нисә һанында шиғри шәлкемдәр менән сығыш яһағанлығын, ошо уҡ ун йыллыҡтың аҙағында «Нағыш» исемле бәләкәй генә тәүге китабы баҫылып сыҡҡанлығын белдем.

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, «Автограф»ҡа ингән йөҙҙән ашыу шиғырҙың байтағы миндә быға тиклем таныш булмаған хистәр уятып ебәрҙе, шул хистәрҙе башҡалар менән дә уртаҡлашыу теләге ҡытыҡлап ҡуйҙы күңелде. Оҙаҡламай, уйламаған-нитмәгән ерҙән, «Ә үҙем ул үҙе әллә нисәү...» тигән мәҡәлә (әлбиттә, «уйламаған-нитмәгән ерҙән»де мәҡәлә енел генә яҙылған икән тип аңларға ярамай) тыуҙы һәм ул, артыҡ көттөрмәйҫә, «Ағиҙел»дең туҡһан дүртенсе йылғы һуңғы һанында донъя күрҙе. Әле бына шул мәҡәләне табып, яңынан уҡып сыҡтым да, Гөлнурҙың «ғүмер тигән етеҙ тәгәрмәс» метафораһы хаҡында уйланып алдым. Ысынлап та, ғүмер шулай уҙа бит. Миңә, авторға, мәҡәлә кисә генә яҙылған һымаҡ тойолһа ла, уға инде ун биш йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ошо дәүерҙә Г. Яҡупованың шиғриәте хаҡында ни бары бер мәҡәлә («Йөрәк хаты» тигән йыйынтыҡҡа М. Ғәли яҙған рецензия) баҫылып сыҡҡан. Ә үҙҙәре тураһында матбуғат биттәрендә бер ауыҙ ҙа һүҙ ишетмәгәндәр күпме икән?

«Нағыш»тан һуң Гөлнур Яҡупованың ижад һуҡмағы киңәйгәндән-киңәйә, асыҡланғандан-асыҡлана барҙы. Был һуҡмаҡтың төп йүнәлеше һәм төп байлығы поэзия булһа ла, унда әкренләп сәсмә әҫәрҙәргә лә урын табыла башланы. Балалар донъяһы ла ят булманы шағирәгә. Егерменсе быуат ахырында ғүмеренең алтын уртаһын билдәләгәндә ул инде ете китап авторы ине. Шулай итеп, гәзит-журналдарҙан башланған һуҡмаҡ Гөлнурҙы оло юлға – ысын мәғәнәһендәге әҙәбиәт донъяһына алып сыҡты. Ул бөгөн дә үҙе һайлап алған ошо ауыр ҙа, шул уҡ ваҡытта ифрат мауыҡтырғыс та өлкәлә арымай-талмай эшләүен дауам итә. Яңы быуаттың тәүге ун йылында байтаҡ китаптар баҫтырып сығарҙы. Әүәлгесә «Ағиҙел» журналының даими авторы булып ҡала килә. Өҫтәүенә һуңғы йылдарҙа ул зурыраҡ, ҡатлаулыраҡ поэтик жанрҙарҙа ла үҙ көсөн һынап ҡарай башланы. «Мираҫ» («Ағиҙел», 2007, 12-се һан) һәм

«Әҙәм вә һауа» («Ағизел», 2008, 6-сы һан) тигән поэмалар – быға асыҡ дәлил.

Сюжет ҡоролошо йәһәтенән «Мираҫ» бер ҡәҙәр М. Ғәлизең «Ҡапҡаңды ас, Быуат!»ын хәтерләтеп ҡуя. Оҡшашлыҡ айырыуса поэмаларҙың экспозицияһында күҙгә ныҡ салына. Уларҙың икеһе лә тышта йәйге йылы ямғыр һибәләү күренешен тасуирлауҙан башлана; ямғырҙан һуң йәйғор ҡалҡып сыға; йәйғор иһә ейәндәр образы тыуыуға сәбәпсе була. «Ҡапҡаңды ас, Быуат!»тағы ейән, йәйғор-ҡапҡаға күрһәтеп, «Әйҙә, шул ҡапҡанан үтәйек урман арттарына» тип, ҡартатаһын урамға алып сығып китһә, «Мираҫ»тағы шуҡ ейән «... Өләсәкәй, ана, тәтәй күпер, йөрөп киләйексе шул юлдан!» тип, өләсәһенең еңенән тарта. Ике поэмала ла әҫәрҙең тәүге юлдарынан уҡ сюжет ебен лирик геройҙар үҙ ҡулдарында тота.

Собаналла!
Һушты алды йәйғор бер мәлгә –
Урал аръяғынан, дуғаланып,
Алдыма уҡ килеп терәлгән,

ти «Мираҫ»тың лирик геройыныһы шатлыҡ ҡатыш ғәжәпләнеү тойғоһо кисереп. Йәйғор юйылғас, ҡарашын күккә йүнәлтә лә, хыялдарға бирелеп китә: «Болот тиһәм... Аҡбуҙ толпарҙарҙа елеп үтеп бара һыбайҙар»; «Офоҡ ҡырлап, сәйер тәгәрмәс ... дала яҡҡа бара тәгәрләп»; «Ерҙең кендегенә – Арҡайымға арийҙары ҡайтып бара бит!»; «Күктә – мираж ... Ләкин сын тарихта булған улар – камил иманым». Тора-бара лирик героиняның уй-хыялдарынан риторик һорау үҫеп сыға:

Дөп-дөп ... тек-тек ...
Тояҡ тауышымы
Дөпөлдәй?
Йыһан сәғәтеме
Текелдәй?
Йөрәгемсе –
Арҡайым тип ярһый
Дөлдөлдәй ...

Артабан был юлдар рефренға әйләнеп китә. Тик сюжет ярҙары киңәйә барған һайын, алда һүҙ нимә тураһында буласағын

иҫкәрткәндәй, рефрендың да һуңғы юлдары үҙгәрә төшә, ә поэманың ахырына яҡынлашҡанда уның тәүге юлы ғына һаҡланып ҡала. Быларҙың бөтәһе лә, берҙән, автор әйтергә теләгән фекерҙе уҡыусы зиһененә йәһәтерәк илтеп еткереү ниәтенән сығып эшләнгән булһа, икенсенән, төрлө идея төрөлгән хәл-ваҡиғаларҙы бер-береһенән айырыбыраҡ тороу маҡсаты ла күҙ уңында тотолғандыр, тип уйлайым.

Экспозицияла лирик героиня үҙенең ҡайһы бер характер үҙенсәлектәре менән дә таныштырып уҙа: «Сор хәтерле башҡорт ҡатыны мин. Сәфәр сығам һиңә, Арҡайым»; «Киләм олоғайып ... Йәйғор күпер һуҙып, саҡырҙың бит, көтәһеңдер мине, моғайын»; «Саялығым барсы, баш күтәрҙе: күктәр көн дә бирмәй ишара. Тәүтөйәген ҡайтып күрер өсөн ҡоштоң-ҡошо оса – түш яра». Был юлдарҙа, бәлки, шағирәнең автобиографик һыҙаттары ла сағылып китәлер. Әгәр шулай була ҡалһа, тимәк, поэманың авторы менән уның лирик героиняһы араһындағы сиктәр ҙә юйыла һәм оҡшашлыҡтар бермә-бер арта бара. Ошонда сюжет та төйөнләнә: лирик героиняның сәфәре башлана. Сәфәр барышында уның күргән-белгәндәре, ҡайҙалыр һәм ҡасандыр ишеткән һәм хәтерендә һаҡланған фараздар, көтмәгәндә килеп тыуған һорауҙарға яуап эҙләгәндә кисергән уй-хистәре әҫәрҙең йөкмәткеһен тәшкил итә лә инде.

Поэмала ваҡиғалар үҫеше йылдам бара. Сәфәр сыҡҡан лирик героиня, «Сал даланың данлы үткәндәрен айҡап барҙы йылғыр уйҙарым» тип әйтергә лә өлгөрмәй, күҙ асып күҙ йомған арала барыр еренә барып та етә һәм унда тыуған тәүге хистәре менән уртаҡлашырға тотона: «Әйтерһең дә, ҡайттым төп йортҡа мин асыр өсөн тыуған ишекте»; «Был төйәк бит Ерҙә тиңдәшһеҙ!»; «Юллап килдем рухым тамырҙарын ...»; «Ер менән күк тоташҡанын күрҙем ...». Артабан ул тирә-йүнгә күҙ ташлап ала ла, уй-хистәре менән бүлешеүҙе дауам итә: «Ҡаулан араһында аулаҡ ятҡан тамға-ташҡа иттем иғтибар. Башҡорт баласына баҫып һуҡҡан аҫаға ул төҫмөр, оҡшашҡан»; «Ҡурҡып киттем. Күкрәгем боҙ булды: свастикаға тартҡан был тамға?». Һәм шунда уҡ аҡланырға ашыға: «Ҡояш билдәһе ул свастика – Арҡайымдың ысын арийҙары танытмаһы ...».

Бында «Мираҫ»ты энәһенән ебенә ҡәҙәр тикшереү маҡсат итеп ҡуйылмай. Уны поэма жанры менән махсус шөғөлләнеүселәр эшләр. Әгәр әҫәрҙең сюжет канваһы буйлап ваҡ ҡына аҙымдар менән хәрәкәт итә башлаһаң, уның асылын бөтә киңлегендә һәм бөтә тәрәнлегендә асып һалыр өсөн байтаҡ ваҡыт һәм байтаҡ урын кәрәк булыр ине.

Сөнки алты йөҙгә яҡын шиғри юлдан торған был әҫәрҙә автор бик күп мәсьәләләр күтәрергә өлгөрә. Уларға ныҡлап төшөнөр өсөн тарих, фәлсәфә, сәйәсәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт, дин өлкәһендә күпмелер әҙерлек кәрәктер. Ябай уҡыусы Г. Яҡупованың «Мираҫ»ын тәү танышыуҙа уҡ бөтә тәрәнлегендә аңлап та бөтмәҫкә мөмкин. Дөрөҫ, бынан әҙ генә элегерәк («Ағиҙел», 2006, 11-се һан) баҫылып сыҡҡан «Минең Одиссеям» тигән шәлкемгә асыҡлыҡ индереүсе төшөрмәлә шағирә: «Ағиҙел»де зыялылар алдыра, шуға күрә донъя мәҙәниәтенең тәүнигеҙе булған боронғо Эллада (Греция) мифтары тәңгәлендә оҙон-оҙаҡ аңлатмалар биреүҙе кәрәк тапмайым» тип иҫкәртҡәйне лә иҫкәртеүен, әммә «Мираҫ»та һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар ябай уҡыусыны ғына түгел, зыялыһын да уйға һалыуы ихтимал. Әҫәрҙең теле лә төрлөсәрәк ҡабул ителергә мөмкин. Сөнки унда беҙҙең бөгөнгө көндәлек аралашыуҙа һирәгерәк осрай торған һүҙҙәр мул ғына ҡулланылған. Ләкин был «уңайһыҙлыҡтарға» ҡарап ҡына «Мираҫ»тың тирә-йүнде, беҙгә хәтлемге тормошто һәм беҙҙең заманға хас хәл-ваҡиғаларҙы танып белеүҙәге әһәмиәтен инҡар итеп булмайҙыр. Ни тиһәң дә, әҙәби әҫәрҙең уҡыусы кимәленән (ябаймы ул, зыялымы) әҙ генә булһа ла юғарыраҡ тороррға тейешлеге, кешенең эстетик зауығын камиллаштырырға, унда мөмкин тиклем күберәк ыңғай сифаттар тәрбиәләргә саҡырылғанлығы юҡтан ғына түгел бит.

«Мираҫ» авторҙың үҙенә лә еңел генә бирелмәгәндер, шикелле. Поэмаға тотоноҙан алда уға байтаҡ ҡына өҫтәмә сығанаҡтар өйрәнергә, донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте үрнәктәре тупланған фолианттарҙы яңынан ҡат-ҡат аҡтарырға тура килгәндер, моғайын. Был фаразды өҫтә телгә алынған «Минең Одиссеям» тигән шәлкем дә ҡеүәтләй. Шәлкемгә ингән туғыҙ шиғырҙың бөтәһе лә шағирәнең антик әҙәбиәт нигеҙҙәре менән яҡшы хәбәрҙар булыуын ғына түгел, бәлки уның юғары өлгөләрен үҙебеҙҙең ерлектә уңышлы файҙаланыуын да күрһәтеп тора.

«Минең Одиссеям»ды асып ебәргән «Сер түгел дә...» тигән шиғыр – ҙтә хикмәтле, ҙтә кинәйәле. Боронғо грек мифологияһынан беҙҙең аңға һеңеп ҡалған батыр йөрәкле һәм хәйләкәр Одиссей, уның тоғролоҡло ҡатыны Пенелопа, циклоп тип йөрөтөлгән һыңар күҙле дейеү, кәйеф-сафа аллаһы Дионис, аллалар аллаһы Зевс, ул бүләк итеп биргән ҡумтанан көнө-төнө бөтә ғәләмгә бер туҡтауһыҙ бысраҡ атыусы Пандора образдары аша бөгөн донъя күләмендә хөкөм һөргән хәл-ваҡиғалар ярайһы ғына оҫта сағылдырылған был

шиғырҙа. Шуныһы ҡыуаныслы: лирик героиня, Одиссей карабына ултырып, уның менән серләшкәндә Сфинкс шәйенә инә яҙып ҡалһа ла, үҙенең тыуып-үҫкән ерҙәренә, Ағиҙеленә, башҡортлоғона хыянат итмәй. Киреһенсә, тамырҙары тарих атаһы Геродотҡа, йөрәк тибештәре Прометейға барып тоташыуы менән ғорурлана.

Һүҙ «Минең Одиссеям» шәлкеменә күскәс, ундағы тағы бер нисә шиғырға туҡталып китеү яҙыҡ булмаҫ. Шулар араһынан иң тәүҙә «Һыңар», «Утҡа бағыу», «Медея» тигәндәренә иғтибарҙы йүнәлтер инем.

«Һыңар» – күнегелгән формала яҙылған: дүртәр юллы дүрт строфанан тора. Лирик героиняның эске халәте бөтә нескәлегендә, ышандырырлыҡ итеп асып һалынған был әҫәрҙә. Яңғырашы буйынса ла һүҙ тейҙерерлек түгел. Лирик героиня үҙен Пенелопа һыңары тип атай. Ләкин, Пенелопанан айырмалы булараҡ, уның Одиссеяһы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайтмаҫ ергә киткән.

«Утҡа бағыу» ҙа донъя мәҙәниәтенең тәүнигеҙе булған боронғо Эллада мифтарына барып тоташа. Кешеләргә ут бүләк иткән өсөн утыҙ мең йыл ғазап сиккән Прометейға мөрәжәғәт итеп, лирик героиня былай ти:

Остоҡ кына осон ғазабыңдың
Тура килде миңә татырға,
Кара эслә, кара хислеләрҙең
Тырнағына бер саҡ тарырға.

Бәғеремә ҡандар һауған саҡта
Утҡа бақтым – үҙе бер аҡыл.
О, Прометей, минең хаҡҡа ла бит
ҡарғағандыр һине Геракл.

Ире Ясондың хыянатын кисерә алмай, ике балаһын һәм көндәшен үлтергән боронғо Медея һыны ла Гөлнурҙы вайымһыҙ ҡалдырмаған. Тик уның лирик героиняһы «Медея» тигән шиғырҙың тәүге юлдарында уҡ «Һөйөү, нәфрәт – игеҙәктәй, әлмисаҡтан (ҡырағай саҡтан) минең ҡанға бергә күскән» тип иҡрар итһә лә, Ясонды ла, Медеяны ла үҙенә иш тә һанамай, аҡламай ҙа. «Рухташ түгел Медеяға, ғишыҡ утын йүгәнләрлек көс бар миндә» ти ул. Шиғыр – фәһемле, хистәргә бай. Лирик героиня, яҙмыш ярҙарына якорь һалған Ясондың хыянатына

нәфрәтен белдереп һәм шул уҡ ваҡытта әҙәп һәм ғорурлыҡ һаҡлап, уны кире ҡаға: «Ҡыуа төшмәм Медеялай. Хаслыҡ көтмә минән улай. Тиҙерәк кит. Юҡһа, Ясон, нәфрәт ҡайнай ҡанда – ысын ...».

«Минең Одиссеям» шәлкеменә ингән шиғырҙар төҙөлөштәре йәһәтенән бер төрлө генә түгелдәр. Унда, мәҫәлән, икешәр юллы строфа менән яҙылған «Сибайҙа» исемле шиғыр айырылыбыраҡ тора. Йөкмәткеһе буйынса ул «Мираҫ» поэмаһына һалынған һуҡмаҡ кеүегерәк яңғырай. Сибай, Арҡайым яҡтарында йөрөгән саҡта тыуған уй-кисерештәре менән уртаҡлашып, автор ошо тирәлә ҡасандыр арийҙар йәшәгәнлегенә, башҡорт ҡанында мәжүсилек барлығына ишара яһай.

«Минең Одиссеям» шәлкеме «Әҙәм вә Һауа» поэмаһына ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Сөнки унда ҡайһы бер образ-фекерҙәр (әйтәйек, тоғролоҡло ҡатын Пенелопа) яңынан ялтлап китә. Лирик героинялар араһында ла яҡынлыҡ ҡына түгел, ниндәйҙер оҡшашлыҡ та, хатта рухи уртаҡлыҡ та һиҙелә. Был героинялар – нескә күңелле, саф йөрәкле, сабыр холоҡло, тәрән аҡыллы, ғорур тәбиғәтле заттар. Донъялағы төрлө ҡаршылыҡтар, бысраҡлыҡтар менән осрашырға тура килгәндә лә, улар ихтыяр көсөн һәм йәшәү дәртен юғалтмайҙар, үҙҙәре булып ҡалалар.

«Әҙәм вә Һауа»ның нигеҙендә дини риүәйәт ятһа ла, Гөлнур Яҡупова был легенданы ысынбарлыҡтағы хикәйәт дәрәжәһенә күтәреүгә ирешкән. Әгәр «Мираҫ» поэмаһында мөхәббәт темаһы башҡа темалар менән йәнәш куйылып ҡына яҡтыртылған булһа («Түбәләстәр бында әллә нисәү: бар Мөхәббәт тауы, Шамантау, Теләк тауы тағы, Аҡыл тауы ...»), бынһында иһә ул башкөллә үҙаллыға әйләнгән. Улай ғына түгел, «Әҙәм вә Һауа»ла бөтә кешелек донъяһы мөхәббәттән яралған, тигән фекер алға һөрөлә. Автор уйынса, йәшәү һәм үлеү, илау һәм көлөү, яҡшы һәм яман, йомарт һәм һаран, аҡ һәм ҡара төшөнсәләре лә донъя менән бергә барлыҡҡа килгән. Шуға күрә донъя гел мөхәббәттән генә тормай. Мөхәббәт менән бер ҡатарҙан Ер йөҙөндә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көнсөллөк, үс, хыянат, ялған, хөсөтлөк һәм шуның кеүек башҡа бик күп тиҫкәре сифаттар ҙа йәшәп ята. Ә был тиҫкәре күренештәр, ҡапма-ҡаршылыҡтар, үҙ сиратында, лирик героиняны, шул иҫәптән, шағирәнелә, тәрән уйға һала һәм өмөтөн күккә йүнәлтергә мәжбүр итә:

Иблис ҡыла тантанаһын,
Иманға ул янай һаман,

Яҡын әллә ахрызаман,
Әҙәмгә, бәлки, таман?

Раббым, ишет!
Сиртәм бишек –
Бир именлек
Ергә, һиллек.

– Һуғыш-ызғыш
Кемдең эше?
– Кешенеке.
– Үҙенә – гонаһ!
– Әйе, Аллаһ ...

«Әҙәм вә Һауа» диалогтарҙан һәм монологтарҙан тора. Ҡайһы берҙә Һауа менән лирик героиня бер бөтөнгә әйләнеп киткәндәй, ә диалогтарҙың күбеһе Һауа менән Аллаһ араһында барғандай тойола. Сюжет-композиция ҡоролошо йәһәтенән ҡайһы бер һорауҙар тыуҙыра ла, Г. Яҡуповаһың «Әҙәм вә Һауа»һы – уйландырырлыҡ әҫәр. Уны ысын, тотороҡло һәм тоғролоҡло мөхәббәткә, шундай мөхәббәтте үҙҙәрендә түкмәй-сәсмәй һаҡлап йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙар затына мәҙхиә, тип атарға мөмкин. Әҫәрҙең төп идеяһы ла, бәлки, бына был юлдарға төрөлгәндер:

Ә мин – Әсә,
Иртә-кисен
Бишек сиртәм.

Ә мин – Ҡатын,
Ҡурсалайым
Усаҡ утын,
Донъя ҡотон.

Лирик героиняның «Бишек сиртәм. Йырлай-йырлай, илай-илай, бәпесемдең ҡолағына өгөт киртәм: тик иманға, тик аманға. Күкрәк һөтөм, аҡ өгөтөм аралаһын яманаттан, яман заттан!» тигән теләге һәм өгөт-нәсихәте лә поэманың төп идеяһына көс һәм ҡеүәт өҫтәй, уны уғата ла үтемлерәк һәм әүрәтке серәк итә. Бөгөнгөнө үткәндәргә

бәйләп, «хәтер хатын» яҙыусы Г. Яҡупованың «Әҙәм вә Һауа»һын уҡып сыҡҡас, ирекһеҙҙән Достоевскийҙың «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән ҡанатлы һүҙҙәре иҫкә килеп төшә. Ун туғыҙынсы быуат ахырҙарында яңғыраған был ифрат тәрән фекерҙе, егерме беренсе быуат башында уғата ла киңәйтеп, «Донъяны дыуамаллыҡтарҙан, боҙоҡлоҡтарҙан, һәр төрлө афәттарҙан матурлыҡ һәм саф мөхәббәт ҡотҡарыр» тип иҡрар итке килә.

«Мираҫ» шикелле, «Әҙәм вә Һауа» ла юҡтан ғына бар булмаған, әлбиттә. Мин уны Г. Яҡупованың шиғриәт баҡсаһындағы мөхәббәт лирикаһынан яралған һәм шунан үҫеп сыҡҡан һутлы емешкә тиңләр инем. Ишетер ҡолаҡҡа был сағыштырыу, бәлки, мәҙәгерәк тә тойолор. Әммә, ни тиһәң дә, мөхәббәт темаһы Гөлнур өсөн иң ҡәҙерле, иң изге темаларҙың береһе булды һәм әле лә шулай булып ҡала. Уның ҡайһы ғына йыйынтығына күҙ ташлама, һөйөү һәм һөйөлөү ҡылдарын сирткән әҫәрен осратмай ҡалмаҫһың. Бында шундайҙарҙың быуат башында ижад ителгәндәренә бер аҙ туҡталып та китергә мөмкин.

Егерме һигеҙ шиғырҙы эсенә алған «Китә ҡышым, йәйләмәҫ тә ҡошом...» («Ағиҙел», 2002, 4-се һан) һәм «Хистәремдең көмөш һиҙәбе...» («Ағиҙел», 2004, 1-се һан) тигән шәлкемдәр күптәрҙең иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмағандыр, моғайын. Ошо ике шәлкем тураһында бөтөп үҙ аллы һәм ярайһы уҡ күләмле мәҡәлә яҙырға булыр ине. Бөгөн иһә улар әлеге ҡәтегүҙәрҙең бер өлөшөн генә тәшкил итәләр.

Сер түгел, йыш ҡына һөйөү һәм һөйөлөү тойғолары беҙҙә (айырыуса йыр текстарында) бушҡа яңғыраған бөҙрә һүҙҙәргә генә ҡайтып ҡалыусан. Г. Яҡупованың мөхәббәт лирикаһы ялған биҙәктәрҙән азат. Уның мөхәббәт лирикаһы тормоштоң үҙенән үҫеп сыға, шуға ла мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарында ерҙә йәшәүҙең ҡыуаныслы яҡтары ла, хәсрәтле мәлдәре лә берҙәй сағылыш таба. «Йәй сәләме» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, лирик героиня, уны үкһеҙ ҡалдырып киткән йәрен, йәре менән бергә йәшәгән дәүерҙә кисергән бәхетле саҡтарын һағынып иҫкә ала һәм шул саҡтарҙы тәбиғәт күренештәре аша ябай ғына, шул уҡ ваҡытта ышандырырлыҡ итеп күҙ алдына баҫтыра. Әҫәр һағышлы уй-хистәр менән һуғарылған булһа ла, ул ҡара буяуҙарға буялмаған: унда яҡты уй-теләк, йәшәү дәрте өҫтөнлөк итә Үтеп барған «ғүмер йәйенә» лә лирик героиня эске бер тыныслыҡ һәм сабырлыҡ менән ҡарай.

Г. Яҡупованың лирик героиняһы тормош һынауҙары аша үткәндә мөхәббәткә тоғролоҡ һаҡлаусы булараҡ та иғтибарҙы йәлеп итерлек. Әгәр «Талҡаҫ йыры»нда уның был сифаты туранан-тура асып һалынһа («Мөхәббәткә тоғро йәнемдә һин тынмаҫ йыр инде...»), «Һинең ҡулдар», «Әлләсе ...», «Исемеңде һыуға яҙҙым ...», «Күңелем фәрештәһе», «Яҙыҡлы яҙым», «Ғазап», «... Ап-аҡ ҡына ҡаурыйҙар ...» тигәндәрендә ул кинәйәләберәк асыла. Был шиғырҙар үҙҙәренең үтә эмоционаллеге, үтә лириклығы менән айырылып торалар. Күләме яғынан оҙон ғына тойолған «Һинең ҡулдар»ҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, йәне менән әҫәрҙең буйынан-буйына хыял донъяһында йөҙһә лә, һуңғы строфала ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайта:

Һыйынмайым бушлыҡ ҡосағына,
Урталыҡтан китәм,
Таянырға һинең ҡулдарыңа
Хыял итәм. Көтәм.

«Әлләсе ...» лә нескә тойғолар менән һуғарылған һәм ул тойғолар ифрат нескә итеп тасуирланған: лирик героиня йөрәге түрендә күптәнән бирле һаҡланған хистәренә тап төшөрмәҫкә, үҙ данын үҙе һатмаҫҡа һүҙ ҡуйған һәм шул һүҙендә тороуын дауам итә. «Күңелем фәрештәһе» рустарҙағы Ангел-хранитель тигән мифологик төшөнсәнән үҫеп сыҡҡанға оҡшай. Лирик героиня үҙенең Фәрештәһенән ҡәнәғәт, сөнки ул «тоғролоҡло отҡор» һаҡсы: «Өмөт һүнеп, ҡалһам ҡараңғыла, етәкләп ул ала тиҙ үк ҡулдан». « ... Ап-аҡ ҡына ҡаурыйҙар ...»ҙы күпмелер кимәлдә «Күңелем фәрештәһе»нең дауамы, тиергә була. Аҡлыҡ, паҡлыҡ бөркөп тора был лирик шиғырҙан. Ергә һибелгән ап-аҡ ҡаурыйҙар лирик героиняға әҙгә генә булһа ла һөйгәне менән элемтә урынлаштырып алырға форсат биргән тылсымлы көс итеп тасуирланған. Ә бына «Яҙыҡлы яҙым»дың лирик героиняһы, хыялында ғына булһа ла һөйгән йәренең йәшлегенә барып ҡайтыр өсөн тыны менән ҡарҙы иретергә һәм үҙ ҡышын үҙе яҙ итергә әҙер. Шиғыр аллитерацияға ҡоролған «Миңә яҙһын өсөн был яҙың, ҡышты яҙ итерлек йыр яҙҙым»тигән строфа менән башлана һәм «Ялан аяҡ ҡарҙан йүгерҙем дә, умырзаяң булдым саҡ ҡына ...» тигән метафора менән тамамлана. Гөлнур Яҡупова поэзияһында мөхәббәт темаһының тәрән һәм көслө бер ағым булып тороуын уның «Ғазап» тигән шиғырында ла тойомларға мөмкин.

Әҙәбиәт ғилемендә, поэтик әҫәрҙең лирик геройы менән уның авторы араһында ҡайһы бер ҙә әҙме-күпме, ә ҡайһы бер ҙә байтаҡ ҡына оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡ булырға мөмкин, тигәнерәк фекер йәшәп килә. Ошо фекерҙән сығып уй йөрөткәндә, Гөлнурҙың күп кенә шиғырҙары автопортрет һымағыраҡ яңғырай кеүек. «Ҡариҙелдә боҙ киткәндә», «Юлаусы», «Рәхмәт», «Ғәйбәт», «Бирнәм», «Шатлығым», «Ҡанат», «Будулай», «Мәмерйәлә», «Хәтер урманы», «Шәһит гөлдәр», «Аңла-аңлама ...», «Ышан!» тигән шиғырҙарҙа был үҙенсәлек айырыуса һиҙелеп тора.

«Ҡариҙелдә боҙ киткәндә»лә, әйтәйек, кешенең эске халәте тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып һүрәтләнә. Башта автор ҡапыл ҡуҙғалған боҙҙо аяғүрә баҫҡан дәү бәһлеүәнгә оҡшата һәм был сағыштырыуҙы «Үҙ күкрәген үҙе йыртҡа йылға» тигән метафора көсәйтеп ебәрә. Артабан ул «Күңелемдә урғый ташҡын хистәр, йылғаның мин әллә туғаны?» тигән риторик һорау ҡуя, кеше ғүмере йылғыр йылғаға тиңләнә, сөнки ғүмер ҙә киткән боҙҙар кеүек аға. Шулай итеп, артыҡ зур билдәлелеккә дәғүә итмәгән ошо шиғырҙа тәбиғәттең ябай ғына бер күренеше ябай ғына, ләкин мәғәнәле, хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп тасуирланған. Ҡариҙелде үҙенең тыуған яҡтарындағы кескәй генә бер йылға менән сағыштырыу ҙа авторға ла, шиғырға ла тыйнаҡлыҡ өҫтәй.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған «Юлаусы» тигән шиғыр ҙа ғәйәт тәрән фекер уята: кеше был донъяға, юлаусы булыуҙан да бигерәк, юллаусы булып килә. Лирик героиняның төп кредоһы, уның кешелек асылы һуңғы строфала кире ҡаҡҡыһыҙ итеп асып һалынған:

Баҫҡынсы түгел мин –
Юлаусы. Юллаусы
Бәхетте. Мөхәббәт
Барҙыр, тип уйлаусы.

Г. Яҡупованың лирик героиняһы ҡайһы саҡта ғәйбәт тоҙағына ла эләгеп ҡуйғылай, күрәһең. Йөкмәткеһе буйынса ла, эшләнеше йәһәтенән дә иғтибарға лайыҡлы «Ғәйбәт» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, бөтә заманда ла бер сама таралған был яман ғәҙәт кешенән һәр ваҡыт ҡан һорап, ҡарҡылдап торған ҡарға шәйенә индерелгән. Ошо яман сир арҡаһында лирик героиняның ҡан «тамған ерҙә» «ҡыҙыл ҡыналар» үҫеп сыҡһа ла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның «күңелендә, ҡарғаларҙан ҡурҡып, шып-шым ғына гөлдәр һыналар». Әммә, нахаҡ

һүҙҙәр лирик героиняның йөрәген күпме генә әрнетмәһен, ул һәр төрлө ғәйбәттәрҙән өҫтөн тора. Уның бөтә байлығы – һөйөүе, сәскә атҡан хисе, йөрәгендәге изге хәҙис. Үҙенең күңел байлығын ул «затлы бирнә», «бай бирнә» тип атай, ә бына уға күҙе төшкән берәүҙе былар һис кенә лә ҡыҙыҡһындырмай, сөнки уға алтын һәм көмөш кәрәк. («Бирнәм»). Өҫтәп тағы шуны әйтергә була: Гөлнурҙың лирик героиняһы – киң күңелле, ярҙамсыл шәхес. Ай йөҙөн болот ҡаплағанда, дөм һуҡыр ҡалған төндө яҡтыртыр өсөн, ул хатта алтын алҡаһын һалып бирергә әҙер. («Шатлығым»).

«Ғәйбәт» шиғырында яңғыраған мотив «Шәһит гөлдәр»гә лә күскән. Уның лирик героиняһы, әсенеп, кемгәлер үҙенең үпкәһен белдерә:

Юҡ, һин миңә мылтыҡ күтәрмәнең,
Күкрәгемә терәп атманың.
Гөлдәр белә — һинең таштай ауыр
Һүҙҙәреңдән йөрәк сатнағы.

«Мәмерйәлә», «Ышан!» тигән шиғырҙарҙа лирик героиняның эске донъяһы, уның характер үҙенсәлеге уғата ла сағыуыраҡ кәүҙәләндерелгән. «Мәмерйәлә»нең сая ҡолоҡло лирик героиняһына халыҡ телендәге «инер алда уйла сығарың» тигән киҫәтеү яҡшы таныш булһа ла, тәүтормоштан бирле бөҫөп ятҡан серҙе әҙ генә булһа ла асыу теләге уны мәмерйәгә йүнәлтә. Һәрмәнә-һәрмәнә мәмерйә буйлап барғанда, «сал быуаттар сыйған сәнғәтте» төҫмөрләй башлай. Сәскә есемен үпкән иңкеш һүрәтен күргәс, лирик героиня һөйөү тойғоһоноң шул замандан уҡ килеүен раҫлай, нескә сәскәнең үҙ асылын тоғро һаҡлауына һоҡлана. Иң һуңғы строфала лирик героиняның саялығына уның гуманлығы ла килеп ялғана:

... Ҡараңғыла, ҡырыҫ мәмерйәлә
Йыртҡыс менән йылан – ҡалһындар.
Сәскәңде мин көнгә алып сығам,
Күңелемдә уға ҡалҡан бар.

«Ышан!» тигән шиғырҙың да лирик героиняһы шундай заттарҙан. Ул үҙен тубырсыҡтан шытып сыҡҡан һәм үҫеп киткән шыршыға оҡшата. Тубырсыҡты тапағандар, ергә һеңдергәндәр, ә ул түҙгән, үҙ

сәғәтен көтөп ятҡан. «Емеш булған, еңмеш булған. Оҡшағанмы мин шыршыға? Сүп түгелмен – ышан шуға!» тип тамамлана шиғыр.

Г. Яҡупованың быуат башындағы шиғриәтенә уның гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған әҫәрҙәре лә көс һәм ҡеүәт өҫтәй, идея һәм тематик яҡтан байыҡтыра. «Төнгө Өфө», «Илгә һамаҡ», «Шағир йөрәге», «Акация», «Эт муйылы» тигәндәре – тап шундайҙар иҫәбендә. «Илгә һамаҡ»ҡа ойотҡоно башҡорт халыҡ әкиәтенән алынған «Ҡурай осонан ҡан тама» тигән һүҙбәйләнеш һалған. Тәүге строфала уҡ автор уҡыусыны былай тип киҫәтә:

Башкөллә̆й инеп бара ил
Убырҙар тамағына.

Артабанғы строфаларҙа ошо тема оторо ла үҫтерелә һәм конкретлаштырыла: бисмиллаһыҙ бизнесмендар, һары алтын, ҡара алтын, йәшел алтын, һатылған аҡылдар, хурланған ҡатындар, Чечняла, шешәлә һәләк булған улдар телгә алына. Ошоларҙың бөтәһе лә үҙенә һәм һүҙенә тоғролоҡло шағирәнең йөрәге аша үтә һәм әҫәрҙең һуңғы строфаһында уның әйтергә теләгәне бер ниндәй икеләнеүһеҙ, асыҡтан-асыҡ яңғырай:

... Ҡурай осонан ҡан тама –
Кем өсөндөр тантана,
Кем өсөндөр тамаша.

Идея-тематик йөкмәткеһе менән «Илгә һамаҡ»ты «Шағир йөрәге» дауам итә. Әҙәм балаһы аҡса ҡолона әйләнгән бер заманда шиғриәттең артҡы планға күсә барыуы тураһында әсенеп яҙа бында шағирә. Донъяны «яңы урыҫ» менән «яңы башҡорт» баҫып алғас, улар Күкте лә рәшәткәләп ҡуймаҫ, тимә, кеүегерәк фекер уята был шиғыр. Шағир иһә Дон Кихотҡа тиңләнә: уның һүҙен тыңлаусы ла, ишетеүсе лә юҡ.

Өфө тураһында элегерәк тә шиғырҙар әҙ яҙылманы, әле лә күренгеләп тора. Һәм был һис тә ғәжәп түгел, сөнки Өфө – беҙҙең баш ҡалабыҙ. Быға тиклем ижад ителгән шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә көй яҙылған һәм улар йыш ҡына радио һәм телевизор аша яңғырап торалар. Г. Яҡупованың «Төнгө Өфө»һө атамаһы менән романс тексына оҡшап тора. Ләкин йөкмәткеһе менән ғәйрәтте ҡайтара һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙағы Өфөнө хәтергә төшөрә: ул йылдарҙа ла төндә ҡала урамдары буйлап йөрөү ҡурҡынысһыҙ түгел ине. XX һәм XXI быуаттар

ҡауышҡанда Өфөбөҙ тышҡы яҡтан ялтырап торһа ла, эстән уны ҡалтыратыусы көстәр ҙә йәшәп килә шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Шағирә шуны бик оҫта тотоп алған.

Гөлнур Яҡупованың күпселек шиғырҙары психологик нескәлектәре менән айырылып тора. Билдәле булыуынса, кеше психологияһы үҙ эсенә күп төрлө сифаттарҙы һыйҙырған. Унда ыңғайҙары ла бар, тиҫкәреләре лә етерлек. Ыңғай сифаттарҙың береһе – сабырлыҡ. Был сифат психология буйынса яҙылған ҡалын-ҡалын китаптарҙа, ғилми тикшеренеүҙәрҙә, бәлки, бигүк күҙгә лә салынып бармайҙыр. Әммә халыҡ аңына ул бик күптән һәм бик тәрән инеп ултырған. Юҡҡа ғынамы ни «Сабырлы сыҙар, сабырһыҙ илар» тигән мәҡәл йөрөй ауыҙ-тел ижадында. Кеше психологияһының бер төрөн тәшкил иткән ошо сифатты Гөлнурҙың «Мираҫ», «Әҙәм вә һауа» поэмаларындағы лирик героиняларҙа ла, шулай уҡ уның лирик шиғырҙарында һүрәтләнгән аҫыл заттарҙа ла һиҙемләргә мөмкин. Әле уҙған быуатта уҡ яҙылған «Сабырлыҡтың төбө – һары алтын» тигән шиғырҙа иһә уны һиҙемләйһе лә юҡ – ул ус төбөндә ялтырап ята шикелле. Дүрт кенә строфанан торған ошо мөләйем шиғырҙы бында тулы килеш күсерһәм, һис тә яҙыҡ булмаҫ:

«Сабырлыҡтың төбө һары алтын» –
Был һүҙҙәрҙең асылын мин беләм,
Шуға ла бит ауыр минуттарҙа
Күҙ йәштәрем йотоп мин көләм.

Өҫкә ауып килгән болоттар ҙа,
Мәле еткәс, ҡапыл тарала.
Түҙә белһәң, әгәр еңә белһәң,
Кайғыларҙан шатлыҡ ярала.

Ямғырҙан һуң аяҙайтмай ҡалмай,
Дауыл баҫып ергә һил килә.
Һағыштарҙы кем һемереп эскән,
Бәхеттең дә ҡәҙерен шул белә.

«Сабырлыҡтың төбө һары алтын» –
Был һүҙҙәрҙең асылын мин беләм.
Мең бәләне атһам иңдәремдән,
Һөйөнөстән сәсәп мең көләм.

«Автограф» тигән йыйынтыҡтан алынған был шиғырға автор үҙе лә битараф түгел кеүек, сөнки уны, исемен һәм тыныш билдәләрен бер аҙ үҙгәртеп, «Йөрәк хаты» (1998) тигән китабына ла индереп ебәргән. «Сабырлыҡтың төбө һары алтын»ды шағирәнең бүтән йыйынтыҡтарында ла осратырға булалыр, бәлки, был турала өҙөп кенә әйтә алмайым. Тик ошо урында быға тиклемге мәҡәләләремдә лә белдерелгән бер ризаһыҙлығымды яңынан хәтергә төшөрөп китмәй булмаҫтыр. Нишләптер беҙҙең бәғзе әҙиптәребеҙ уҡыусы хазинаһына әйләнгән әҫәрҙәренә «ҡәләм төртөргә» яратыусан. Гәзит-журнал биттәрендә донъя күреп, күпмелер һынау үткән шиғырҙы китап битенә күсергәндә ҡайһы бер төҙәтмәләр индереү – бер хәл, ә бына әҫәр бер китаптан икенсеһенә күскәндә «ҡәләм төртөү», минең ҡарашымса, бөтөнләй килешмәгән эш. Сөнки шиғыр матбуғат битенә эләккән икән, ул инде һинеке генә түгел. Был турала беҙгә ныҡлабыраҡ уйланырға кәрәктер.

Сабырлыҡ темаһы, әгәр уны шартлы рәүештә генә булһа ла шулай тип атаһаҡ, Г. Яҡупованың яңы быуат башындағы шиғриәтендә лә байтаҡ урын алып тора. (Өҫтә был турала һүҙ сыҡҡылап ҡуйғайны инде.) 2004 йылда донъя күргән бер шиғырын («Сабырлыҡ һөрәне») ул хатта туранан-тура ошо һүҙ менән атаған, уның лирик героиняһы донъя мәшәҡәттәрен, тормош ҡаршылыҡтарын тешен ҡыҫып булһа ла («Аһтарымды эскә йыйҙым, сығарманым тышҡа, түҙҙем») күтәрергә өйрәнгән шәхес итеп һүрәтләнгән. Ә «Ғүмер» тип аталған икенсе бер шиғырына «Сабырлыҡтың төбө – һары алтын»ды эпиграф итеп алған. Был шиғырҙың да лирик героиняһы үҙенең сабырлығы менән айырылып тора – ғүмер мизгелдәрен тыныс ҡына үткәреүен бәйән итә ул. «Көҙгө ауаз», «Насибым», «Һуңғы шырпы», «Күнәм инде ...», «Хараба аҫтында ...», «Озон көй» тигән шиғырҙарҙа ла ошо мотив яңғырай.

«Көҙгө ауаз» – йөкмәткеһе менән оригиналь шиғыр. Уның лирик героиняһы, көҙгөгә ҡарап, үҙенең көҙө етеп килгәнен шәйләй, башта уға ышанмаҫҡа итә, алдаҡ тип уйлай, хатта көҙгөнө ватмаҡсы була, ләкин һуңыраҡ тыныслана, сөнки үҙеңдән үҙең ҡаса алмағанды ул яҡшы аңлай.

Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына юлдарҙан һәм строфаларҙан торған «Насибым» да тәрән йөкмәткеле шиғыр. Уға халыҡ телендәге «Ҡатын ҡырҡтан уҙған – уҡаһы ҡойолған» тигән һүҙҙәр эпиграф итеп алынған. Лирик героиняның уҡаһы ҡойолор ваҡыты еткән, ләкин ул

һис тә бошонмай, сөнки уның уҡаһын ҡыҙы йыя: тормош дауам итә – тәбиғәт кешелекте шулай яралтҡан.

Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән «Күнәм инде...»гә лә фәлсәфәүи фекер төрөлгән – күпме генә тырышһаң да («Көҙгө ауаз»дағы шикелле) үҙеңдән үҙең ҡасып булмай:

Күнәм инде ...
Киләсәккә елəм,
Үткəндəрҙе егеп мисəүгə.
Яуап көнөндə лə ҡалмаҫ улар,
Алдан килеп ятыр үлсəүгə.

«Хараба аҫтында...» (2005) тигән шиғырға ла уҡыусы битараф ҡалмағандыр. Сабыр холоҡло, түҙем лирик героиня, дуҫы хыянат итеп таяуһыҙ ҡалғас, иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы күтәрергә көс таба һәм үҙен хараба аҫтынан өҫкә ҡалҡып сыҡҡандай тоя, ә ышанысһыҙ таяуға йыназа уҡый.

Гөлнур Яҡупованың быуат башындағы шиғриәтенә бағышланған был күҙәтеүҙәремде тамамлағанда, уның «Селтербей ҡоралайы» һәм «Шиғыр иманы» тигән әҫәрҙәренә лә ҡарашымды белдерергә булдым. Миңә ҡалһа, күрер күҙгә бер-береһенән алыҫ торған был ике әҫәрҙе эстән ниндәйҙер ептӗр тоташтыра һымаҡ. Уларҙың тәүгеһе Әнисә Таһироваға бағышланған. Уға хас ҡайһы бер һыҙаттарҙы автор элегантлы итеп асып биргән. Әйтергә кәрәк, «Селтербей ҡоралайы» – Г. Яҡупованың нескә тойомлау һәләтен һәм юғары этикетын күрһәтеп тороусы асыҡ миҫал. «Шиғыр иманы»нда иһә ул үҙенең ошо сифаттарын ябай ғына, ләкин уғата ла үтемлерәк итеп асып һалған: «Иман кәрәк һәр бер эштә, бигерәк тә шиғриәттә», ти ул. Беҙгә иһә, шағирә артабан да аҡлыҡ, сафлыҡ, сабырлыҡ, хаҡлыҡ йырсыһы булып ҡала килһен, тигән өмөт бағлаһы ғына ҡала.

2009, октябрь

«Ә ШУЛАЙ ҘА ЙӨРӘК НИҘЕР КӨТӘ…»

Рәмилдең исеме миңә күптән таныш. Алтмышынсы йылдарҙың ахырында, етмешенсенең баштарында Бөрө педагогия институтында «Йәшлек» тип аталған әҙәби ижад түңәрәге эшләп алды. Уны Мәскәүҙә яңы ғына аспирантура бөтөрөп, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙлап ҡайтҡан Рәиф Әмиров атлы һәүәҫкәр (хәҙер ул филология фәндәре докторы, профессор, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында уҡыта) ойошторop ебәргәйне.

Башта түңәрәк ултырыштарына берәм–һәрәм генә йөрөһәләр, һуңыраҡ уның ағзалары ярайһы ғына ишәйеп китте. Түңәрәк етәксеһенең тынғыһыҙлығы һәм тырышлығы арҡаһында беҙҙең ҡалала Өфөнән саҡырып килтерелгән профессиональ шағирҙар ҙа йышыраҡ күренә башланы. Улар Бөрө йәштәренең шиғырҙарын тикшерҙеләр, файҙалы кәңәштәрен бирҙеләр. Әнғәм Атнабаев менән Рафаэль Сафиндар, мәҫәлән, «Йәшлек» ағзаларының көтөп алған ҡунаҡтары булды.

Тора–бара Башҡорт дәүләт университетында күп йылдарҙан бирле эшләп килгән «Шоңҡар» түгәрәге менән дә элемтә урынлаштырылды. «Йәшлек» һәм «Шоңҡар» ағзалары бергәләп үткәргән шиғриәт кисәләре, әҙәби фестивалдәр әкренләп дуҫлыҡ һәм ижадташлыҡ байрамына әүерелде.

Етмешенсе йылдар башында ойошторолған шундай осрашыуҙарҙың береһендә Өфө ҡунағы, шиғриәттә тәүге аҙымдарын яһаусы студент Рәмил Иәнбәковтың да тауышы яңғырап ҡуйғайны. Буйсан, асыҡ сырайлы, бер аҙ оялсыраҡ, көләс күҙҙәре менән шиғыр яратыусыларҙың иғтибарын үҙенә тартып торған был егет, ваҡыты еткәс, Йәнбәккә әйләнер, ә утыҙ–ҡырҡ йылдан һуң поэзиябыҙҙың ауыр йөгөн әүҙем тартыусылар сафында булыр, тип кем уйлаған ул саҡта!

Дөрөҫ, Рәмилдең китаптары артыҡ күп түгел. Ғүмерен (хәйер, бер ул ғына түгел дә инде!) башлыса республика матбуғатына сарыфланы, әле лә шул шөғөлөн дауам итә. Ләкин эш китаптар һанында ғына түгел бит. Теге быуатты ул дүрт шиғри йыйынтыҡ

менән оҙатты. Быныһына «Һине эҙләп юлға сығам әле...» («Ағизел», 2001, 8-се һан) тигән шиғырҙар шәлкеме менән аяҡ баҫты. Ун дүрт шиғырҙы эсенә алған был шәлкемде авторҙың уҡыусыға әйтергә теләгән инеш һүҙе асып ебәргәйне. «Мине, – тиелә унда, – лирик шағир, мөхәббәтте данлаусы шағир тип белә инең. Ғүмер йәшем төшкөлөккә еткәндә, әҙәм тормошо һәм мәңгелек, йәшәү мәғәнәһе һәм уҙған йылдар, изгелек һәм мәкер кеүек төшөнсәләр тураһында йышыраҡ уйландыра».

Р. Йәнбәктең был уйланыуҙарын журналдың әлеге һанында донъя күргән шәлкеменә генә түгел, бәлки яңы быуатта дауам итәсәк ижадына баш һүҙ, хатта үҙенә күрә бер вәғәҙә һымағыраҡ ҡабул итергә мөмкин ине. Һәм ул шулайраҡ булып сыҡты ла. Теүәл бер йылдан һуң, ғүмеренең алтын уртаһын билдәләгәндә, шағир йәнә ҙур ғына шәлкем менән сығыш яһаны. Ун шиғырҙы берләштергән был шәлкем «Күкте иңләп бәхет осоп йөрөй...» («Ағизел», 2002, 8-се һан) тип аталғайны. Шәлкемгә Риф Әхмәзиевтың йылы йөрәктән, ихлас күңелдән яҙылған «Ер... Йыр... Йәр... йырсыһы» исемле кескәй генә юбилей мәҡәләһе лә йәм өҫтәгәйне.

Юбилейҙан һуң да шағир йөрәге тынғылыҡ белмәне. Йыл һайын тиерлек ул хөрмәтле уҡыусыһына яңы шәлкемдәр («Атай йәшен үтеп киттем...», 2004; «Мин үҙгәрәм һирәк...», 2005; «Яҙҙар менән йәшлек һәр саҡ йәнәш...», 2006; «Ҡояш нуры яна тулҡында...», 2007; ун ике шиғырҙан торған исемһеҙ шәлкем, 2008; «Уйҙар урап алды ҡабаттан...», 2009) бүләк итеп тәрҙә һәм ошо дәүер эсендә «Ағизел» биттәрендә йөҙгә яҡын өр-яңы шиғыр баҫтырып сығарҙы. Шағир үҙенең алтмышына ла яҡынлашып килә. Шуға күрә уның ижады хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеү һис тә яҙыҡ булмаҫ, тип уйлайым.

Иң тәүҙә шуны билдәләп үтергә кәрәк: Рәмил Йәнбәктең һуңғы ун йылдағы ижадынан күренеүенсә, ул, ысынлап та, мөхәббәтте данлауға ҡарағанда, реаль тормош мәшәҡәттәрен, заман ҡатмарлыҡтарын һүрәтләүгә күберәк иғтибар итә башланы. Һәм хәҙер уның байтаҡ шиғырҙарына ысынлап та «йәшәү мәғәнәһе һәм уҙған йылдар, изгелек һәм мәкер» кеүек мәңгелек төшөнсәләр хаҡында уйланыуҙар хас.

Әлбиттә, быны шағирҙың яратҡан һәм күнегелгән темаһына хыянат итеүе, үҙ амплуаһынан ситләшеүе тип аңларға ярамай. Ул әүәлгесә мөхәббәт лирикаһына ла тоғролоҡ һаҡлай. «Бәхет йыры», «Һағышлы йыр», «Мин аңлайым...», «Татлы һағыш», «Кем белә...»,

«Күҙҙәрең тулы моң-һағыш...», «Йәш егеттәр, йәш ҡыҙҙар», «Йәш парҙарға», «Ғорур йән», «Донъя йәме», «Һин кем?», «Таллыҡта һары ҡамыш», «Киткең килһә, ирекһеҙләп тотмам...» тигән шиғырҙар шуға асыҡ миҫал булып тора алырлыҡ.

Ләкин ваҡыт тигәнең бер кемде лә урап уҙмай. Рәмилдең әле һанап киткән шиғырҙарында ла ул үҙенең сағылышын тапмай ҡалмаған. Әгәр шағирҙың һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙағы мөхәббәт лирикаһы уҡыусыны тойғоларҙың сафлығы, алсаҡлығы, ябайлығы, ҡайһы бер ҙә хатта бер ҡатлылығы менән йәлеп итеп торған булһа, хәҙер иһә ул татлы ғазаптарҙан ғибәрәт һәм һис йәлләмәйсә утына ла, һыуына ла һалған, әммә барыбер ҙә бик тиҙ үтеп киткән йәшлектең моң-һағышы һымағыраҡ яңғырай:

Хәтеремдә һаман эҫе тының,
Ҡулдарыңдың иркә назлауы.
Шат әрнеүле бышылдауың иҫтә,
Күҙҙәреңдең – дымлы базлауы.
. . . . . .
Телә һәк тә, ул саҡ кире ҡайтмаҫ,
Татлы һағыш инде йәл генә.
Донъялыҡта йәшлек – бер көнлөк шул,
Шатлыҡ менән бәхет – мәл генә.
(«Татлы һағыш», 2001).

Ваҡыттың бер кешене лә ситләп үтмәүе «Кем белә...» исемле шиғырҙа уғата ла сағыуыраҡ итеп күрһәтелгән. Уның «Дөрләү юҡ шул хәҙер шиғырымда...» тигән тәүге юлы уҡ уҡыусыны һағайта. Артабан лирик геройҙың (был шиғырҙа автор менән лирик герой араһында айырма юҡ тиерлек) йәш сағында хатта туңған йөрәкле яттарҙың да йәнен иреткәнлеге, ә хәҙер иһә мөхәббәттең барлығы-юҡлығына бер аҙ шикләнеберәк тә ҡарауы асыҡлана. Әммә ул бөтөнләй үк төшөнкөлөккә лә бирелмәй: уның «оло һөйөү, ысын һөйөү тапмай» һүрелгән йөрәген, «бәлки, Берәү булыр терелткән...» тигәнерәк өмөт менән йәшәп ята.

Рәмил Йәнбәктең мөхәббәт лирикаһы элегерәк тә үҙенең күркәмлеге, нәзәкәтлеге, нәфислеге менән йәлеп итеп торҙо, ул әле лә шулай булып ҡала. Бына уның дүртәр юллы дүрт строфанан торған, хистәргә бай, һөйөү тойғоһоноң йәшерен серҙәрен ифрат

нескә итеп кәүҙәләндергән «Мин аңлайым...» тигән шиғыры. (Йәйәләр эсендә иҫкәрмә яһап китмәй ярамаҫ: нишләптер ул «Ағиҙел» биттәрендә уҡыусы иғтибарына ике тапҡыр – 2001 һәм 2006 йылдарҙа – тәҡдим ителде.) Шиғырҙың лирик геройы һиҙгер йөрәкле, саф күңелле, ярайһы ғына бай тормош тәжрибәһе туплаған шәхес. Ул серле ҡарашты ла, йөҙҙәрҙең алһыуланыуын да, йыш-йыш тын алыуҙы ла, ҡыҫҡа һүҙҙәрҙе лә тиҙ тотоп ала һәм уларҙың мәғәнәһен тәрән аңлай. Һуңғы строфала яңғыраған фекер – шул саманан тыш һиҙгерлектең һәм күңел нескәлегенең бер бәләһе түгел микән, тигәнерәк уй ҙа тыуып ҡуя, юғиһә:

Тик күнергә ҡала яҙмышҡа –
Осраштырған беҙҙе яңлыштан.
Йәнем әрнеп, күңел дауыллана
Күкрәгемә тулған һағыштан.

Р. Йәнбәктең йәше олоғая барған лирик геройына ҡайһы саҡта мөхәббәттең төҫө уңғандай, һөйөү хистәре ҡасып китеп, күккә олғашҡандай тойолорға ла мөмкин. Бындай саҡта ул һөйгәненә уҡлы һүҙҙәр яуҙырыуҙан да тартынып тормай. Яңғырашы, яҙылышы буйынса һүҙ тейҙергеһеҙ «Киткең килһә, ирекһеҙләп тотмам...» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, шундайраҡ заттарҙан. Ул нескә күңелле булһа ла (бәлки, шуның өсөндәлер) үҙен эре генә тотҡан кирле-мирле кеше һымағыраҡ күҙ алдына килеп баҫа:

Киткең килһә, ирекһеҙләп тотмам
Һәм көнләмәм тойғоң, хисеңдән.
Булаһылар булған – төҫө уңған,
Киселәһе инде киселгән.
. . . . . .
Киткең килһә, кит һуң. Ихтыярың.
Йөрәк, һыҡтап, һиңә һарылмаҫ.
Ҡапҡа асылғандай булды
Бәлки
Мәңгелеккә тиеп ябылмаҫ

Ихтимал, ижадының шаҡтай күп өлөшөн мөхәббәтте данлауға арнаған шағир ҡәләме аҫтынан бындай юлдарҙың килеп сығыуы

мәҙәгерәк тә тойолор. Әммә шиғырҙа сағылыш тапҡан кисерештәргә, уй-хистәргә тормош үҙе, лирик геройҙың күңел торошо, хәл-әхүәле сәбәпсе икән, ни ҡылаһың? Улайға китһә, Рәмил Йәнбәктең быуат башындағы шиғриәтендә ерҙә йәшәү мәғәнәһе тураһында уйланыуҙар, уның серҙәренә төшөнөү теләге торған һайын күберәк урын ала бара икән, бының да сәбәптәрен тормоштоң үҙенән, йүнәлешен дә, тиҙлеген дә бер туҡтауһыҙ үҙгәртеп кенә торған заман елдәренән эҙләргә кәрәктер. «Юлаусы», «Ике арала уйланыу», «Арыным», «Ә шулай ҙа...», «Әллә тәртип бөттө ер йөҙөндә...», «Телевизор», «Көтмәйем», «Бер мәҙәк», «Әрнеү», «Түҙемлек», «Донъям ҡоршауы», «Иҫкәртеү», «Тын тарлыға, һауа етмәй миңә...», «Урталыҡ», «Өмөт» тигән шиғырҙар тап ана шул заман елдәре тыуҙырған емештәр булып тора ла инде.

«Юлаусы»ны тәүбә-шиғыр (исповедь) тип атарға мөмкин: уның авторы-лирик геройы эсендәген асыҡтан-асыҡ, түкмәй-сәсмәй һөйләп биргән. Әҫәр күнегелгән алым (дүртәр юллы строфа) менән яҙылған, шуға күрә ул күңелгә йәтеш, еңел уҡыла, тиҙ аңлашыла. Идея-эстетик асылы менән был шиғыр Александр Блокты ла хәтерләтеп ҡуя, символистар поэтикаһына ла тартым. «Ғүмер ҡояшы» төшкөлөккә еткән, шунлыҡтан йәшлек менән араһы йырағайған лирик герой үҙен реаль тормоштан алыҫтараҡ – «йылға ярындағы бер юлаусы итеп» тоя. Алда торған тормош-йылғала (күреүегеҙсә, бында тормош – йылғаға тиңләнгән) күпер ҙә, баҫма ла юҡ. Тәбиғи, «сығырға һуң уны ҡайһылай?» тигән һорау килеп тыуа. Артабан лирик герой узған юлына күҙ ташлай. Байтаҡ ҡына ҡайғы-хәсрәттәр кисерергә тура килһә лә, аҡ көндәре күберәк булған уның. Юлдаштарҙан да уңған. Хаталарын да йәшермәй, сөнки ул белә: бер кемдең дә ғүмер дәфтәре тап-таҙа биттәрҙән генә тормай. Шуныһы үкенесле: уны гел аҡҡа ғына ла күсереп булмай.

(А. Блок тураһында һүҙ сыҡҡас, юл ыңғайында Р. Йәнбәктең «Һин кем?» тигән шиғырына ла күҙ һирпеп китмәй килешмәҫ. Өс кенә строфанан торған был шиғырҙың лирик геройы үҙ хыялында, А. Блоктың «Предчувствую Тебя. Года проходят мимо...», «Вхожу я в тёмные храмы...» тигән шиғырҙарындағы лирик герой шикелле, күрмәгән-нитмәгән ханымдың образын тыуҙыра, портретын күҙ алдына баҫтыра. Ул сибәр, һөйкөмлө, «тал сыбыҡтай нескә», зифа буйлы, бит урталары һипкелле, йөҙҙәренән китмәй йылмайыуы, шишмә сылтырауы – тауышы, һ.б. Әлбиттә, рус шағиры менән башҡорт шағиры күҙаллаған гүзәлдәрҙең һыны, тышҡы ҡиәфәттәре бер-береһенән күпкә айырыла. Һүҙ бында бары тик төрлө милләт

шағирҙарының һүрәтләү сараларындағы оҡшашлыҡ һәм ҡайһы бер уртаҡлыҡ тураһында ғына барырға мөмкин.)

Әгәр «Юлаусы»ла һүҙ лирик геройҙың тик үҙ хәле һәм үҙ яҙмышы хаҡында ғына барһа, «Ике арала уйланыу»ҙа иһә донъяға, уның асылына, яҙылмаған законҙарына шаҡтай киңерәк ҡараш ташланған:

Йөҙәр, меңәр, миллион йылдар буйы
Бер үк ҡанун йәшәй донъяла:
Тамаҡ өсөн, байлыҡ өсөн кеше
Ҡан талаша, үсәй, ҡон ала.

Әҫәрҙең йөкмәткеһен лирик геройҙың быуаттан-быуатҡа күскәндәге уйланыуҙары тәшкил итә. Автор үҙҙәге быуаттың шанлы ла, ҡанлы ла ваҡиғаларына мөмкин тиклем тәғәйен баһа бирергә тырыша. Шиғырҙың ҡайһы бер юлдары татар классигы Һади Taҡташтың .«Быуаттар һәм минуттар» тигән поэмаһын хәтергә төшөрөп ҡуя:

Замандаштар!
Бәлки, беҙҙең быуат
Киләсәктә бөйөк аталыр.
Беҙгә аныҡ техник һикерештең
Нигеҙендә нимә ятҡаны:

Атты алмаштырып ракетаға,
Сикһеҙ етеҙ хәҙер сабабыҙ.
Бер һуғышта ғына, ыһ та итмәй,
Миллиондарҙы ҡырып һалабыҙ.

Ләкин, «атты алмаштырып ракетаға, сикһеҙ етеҙ» сапһаҡ та,

Ябай әҙәм һаман бер сифатта:
Һыныҡ икмәк өсөн бил бөгә;
Ә һанаулы «бөйөк зат» ҡулында –
Бөтә донъя, бөтә дилбегә.

«Ике арала уйланыу»ҙың ҡайһы бер строфаларында Мәжит Ғафуриҙең Февраль революцияһынан һуң яҙылған шиғырҙарына хас мотив та яңғырап китә:

Күсенәбеҙ яңы беҙ быуатҡа,
Яңы мең йыллыҡҡа инәбеҙ.
Ожмах ҡына көтмәҫ ул дәүерҙә,
Йәнә еңел булмаҫ – һиҙәбеҙ.

...Яҡшы батша килһен һәр илгә лә,
Икмәк бирһен иң тәү халыҡҡа.
Күрше шаһтар менән татыулашһын
Ҙур Ер, Кеше, Алла хаҡына.

Р. Йәнбәктең был шиғыры ла күнегелгән алым менән яҙылған. Күләме яғынан саманан тыш оҙон (ун биш строфа) булһа ла, бер тынала уҡып сығыла. «Ике арала уйланыу» менән бер тирәлә ижад ителгән «Арыным» тигән шиғырҙың да төҙөлөшөнә һүҙ тейҙерерлек түгел. Йөкмәткеһе, ҡайһы бер поэтик үҙенсәлектәре йәһәтенән ул «Юлаусы»нан алыҫ тормай: шул уҡ символика, шул уҡ метафора. Был юлы лирик герой үҙен осо-ҡырыйы күренмәгән сүлгә юлыҡҡандай тоя. Унда кешеләр ҙә юҡ, «тик шакалдар йөрөй теш шаҡып».. Ошо мөхиткә юлыҡҡан лирик герой арыған, уның тәне лә, йәне лә сирле, йөрәк йәше кипкән, өмөтө өҙөлгән, хыялы юғалған. Асылда иһә Рәмилдең был геройы ихлас күңелле, эскерһеҙ кеше, алдашыу-йолдашыуҙы ла, яраҡлашыуҙы ла, мәкерлекте лә белмәй, эсендәге – тышында: «Халыҡ өсөн йәнем фиҙа, тиеп алдашмайым: юлын белмәйем. Ә шулай ҙа алғы быуаттарҙа аҡ көндәр тик уға теләйем» ти ул. Һуңғы строфа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, моңһоу яңғырай һәм уның башҡаса булыуы ла мөмкин түгел:

Ҡаңғырған баш, һүнгән күңел менән
Киләм төҫлө сикһеҙ юл буйлап.
Оло маҡсат менән оло һөйөү
Мәңгелектә ҡалды ҡул болғап.

Р. Йәнбәк үҙ геройының күңел торошон күрһәтеп үтеү менән генә сикләнмәй – уның сәбәптәрен дә эҙләй. Ошо йәһәттән «Әллә тәртип бөттө ер йөҙөндә...» тигән шиғыр иғтибарға лайыҡ. Уның лирик геройы ил күләмендә генә түгел, бөтә донъя күләмендә барған катаклизмды аңларға һәм аңлатырға тырыша, күп кенә һорауҙар ҡуя, ләкин тамырын юллап, аныҡ ҡына яуап бирә алмай. Нимәһе менәндер был шиғыр Тәүраттағы бер риүәйәтте лә хәтергә төшөрөп ҡуя.

Ә риүәйәттә һүҙ Хоҙай тәғәләнең, Ерҙә хөкөм һөргән фәхешлеккә, аҙғынлыҡҡа, әҙәм затының тамам боҙоҡлоҡ юлына баҫыуына асыу итеп, ҡырҡ көн буйына туҡтауһыҙ ямғыр яуҙырыуы, шуның һөҙөмтәһендә туфан ҡалҡыуы һәм тик ошо юл менән генә донъяны сафландырыуға ирешеүе хаҡында бара. Рәмилдең бынауы юлдары, әйтерһең дә, шул риүәйәттән үҫеп сыҡҡан:

Гонаһтары әллә бәндәләрҙең
Самаларҙан шулай ашҡанмы?
Донъя бүлешкәндә, сауап кәмеп,
Намыҫтары шулай ҡасҡанмы?

Йорт-ерҙәрһеҙ, ас-яланғас ҡалған
Кешеләрҙе кем һуң йәлләһен?!
Шулай әллә, тәүбәгә килеп, тиеп
Киҫәтәме Хоҙай бәндәне?

«Тын тарлыға. Һауа етмәй миңә...» тигән әҫәрендә шағир йәнә ошо темаға әйләнеп ҡайта. «Йылдар үткән һайын», кешелек донъяһында һаман да көсәйә барған ығы-зығыларға, ҡапма-ҡаршылыҡтарға мөнәсәбәтен, ҡарашын, аптыраҡын лирик герой бына нисек белдергән:

Баш етмәҫлек яһап ҙур асыштар,
Йыһандарға осоп барып етә;
Тик үҙ-ара кеше һыйышалмай, –
Ерҙең йәме, Ерҙең кәре китә.
. . . . . .
Зиһен арта, аҡыл кәмей төҫлө –
Етеүеме әллә ахрызаман?
Алла ҡәһәрләйме бәндәләрҙе?
Шундай тормош беҙгә, ахры, таман.

Ҡайһы бер юлдарҙа ҡытыршылыҡтар осрап ҡуйһа ла, шиғыр көслө яңғырай, фәһемле. Ул градация алымына ҡоролған. Тәүге строфала лирик герой, тын алыуҙы еңеләйтеү өсөн, үҙ тәҙрәләрен генә асып ебәрһә, һуңғыһында, һигеҙенсеһендә, иһә, ул Йыһан тәҙрәләрен асмаҡсы, сөнки «тын тарлыға, һауа етмәй Ерҙә».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, Рәмил Йәнбәктең һуңғы ун йыллыҡтағы шиғриәтендә идея-тематик яҡтан бер төрлөрәк яңғыраған әҫәрҙәр ҙә осраштыра. Әлбиттә, теләһә ҡайһы шағирҙың да ижад офоҡтарын, ижад биләмәһен бер кем дә сикләй алмай һәм ул сикләнергә лә тейеш түгел. Әммә ләкин ижад офоҡтары тип аталған шул майҙанда уттарҙың төрлө төҫлө булыуы һәм төрлөсәрәк емелдәүе күпкә отошлораҡтыр ҙа һәм хәйерлерәктер ҙә. Әйтәйек, «Арыным»дағы фекер күпмелер кимәлдә «Көтмәйем», «Әрнеү», «Донъям ҡоршауы» тип аталған шиғырҙарҙа ла ҡабатлана тиһәм, һис тә гөнаһлы булмам кеүек.

«Арыным» шикелле, «Көтмәйем» дә өмөтһөҙлөк тойғоһо менән һуғарылған һәм шул сифаты уны ла XIX быуат ахырындағы һәм XX быуат башындағы рус поэзияһына яҡынайта. Илдәге хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булған лирик геройҙың күңеле тыныслыҡ, йәне өшөй, кәйефе юҡ. Низер көтә лә һымаҡ, ләкин көтә торған көндәре уҙған, хыялдары, өмөттәре «теге ярҙа» ҡалған. Үҙенең ошо халәтен ситтәргә һиҙҙермәҫкә тырыша. Тормоштан өмөтөн өҙһә лә, фанилыҡта ҡалған көндәрен нисек булһа ла уҙғарырына ышанысын юғалтмай. Ул үҙен йәлләтергә лә, уфтанырға ла иҫәп тотмай. Һуңғы строфалағы «Мин китермен мәңге ҡайтмаҫ ергә, ғүмер күсәремдән ысҡынып» тигән һөйләмде авторҙың табышы тиергә лә мөмкин.

«Әрнеү»ҙең «аптырау арбаһына ултырған» лирик геройы психологик яҡтан көслөрәк, ышандырырлыраҡ итеп һүрәтләнгән. Үҙенең кисерештәре, ҡаршылыҡлы уй-хистәре менән уртаҡлашып, ул былай ти:

Кайҙа ҡалды халҡым тиеп,
Ил тиеп сапҡандарым?
Намыҫһыҙҙарҙан баш сөйөп,
Ялғандан ҡасҡандарым?

Ялғанлау баҫҡан мөхиттә хыялһыҙ ҙа, маҡсатһыҙ ҙа ҡалған лирик геройҙың аяныслы хәле һуңғы строфаның һуңғы ике юлында айырыуса әрнеүле итеп асып һалынған:

Ҡайһы дәүер балаһы мин –
Халҡымдың кәрһеҙ улы?!

«Әрнеү» менән бер йылда (2008) баҫылып сыҡҡан «Донъям ҡоршауы» тигән шиғыр ҙа башлыса һағышлы, моңһоу, болоҡһоу

тойғоларҙан туҡылған. «Ниндәй ҡыҙыҡ ҡалды был донъяла? Тегеһендә нисек? – кем белә» тип уйлана лирик герой һәм «Дөрөҫ тыуғанмынмы мин был ергә? Дәүеренә микән тап киләм?» тигән һорау ҡуя. Тыштан ҡарағанда бөтә теләгенә лә ирешкән һымаҡ тойолһа ла, уның күңеле тынысһыҙ. Шуға күрә шиғырҙың:

Тормош дауам итә.
Минең генә
Сатнап бөткән донъям ҡоршауы, –

тигән яманһыуыраҡ метафора менән тамамланыуы һис тә ғәжәп түгел, минеңсә.

Р. Йәнбәктең моңһоу хистәр менән һуғарылған шиғырҙарын бер ояға туплап тикшергәс, уларҙың авторы донъяға әллә гел ҡара күҙлек аша ғына ҡарай инде, тигәнерәк хәүефле уй тыуып ҡуйыуы ихтимал. Юҡ, әлбиттә! Шағир хыялында яралып, тәрән хистәр кисереп көн итеүсе лирик геройҙарҙың күңелдәре саф, өмөттәре яҡты, гражданлыҡ позициялары көслө һәм ышаныслы. «Телевизор» тигән шиғырҙа ул бына нисегерәк белдерелгән:

Үҙ илебеҙ бигерәк ҡотһоҙ икән –
Ҡара ҡумта тылҡый көн һайын.
Күңелебеҙ менән Әмерикkә
Күсеп бөтөрбөҙҙәр, моғайын.

Замананың ғәжәп мөғжизәһе:
Ят донъялар килә һауанан.
Баштар миңрәй, ҡата йөрәгебеҙ.
Йәнебеҙҙе кемдәр дауалар?!
Ниҙәр дауалар?

«Иҫкәртеү» һәм «Өмөт» тигән шиғырҙарҙа ла ошо мотив яңғырап китә:

Көнбайышта тормош һәйбәт, тимә,
Улар ҡупыр элек-электән.
Донъяң балҡыр, малың теүәлләнер,
Уңған булһаң, ергә ерекһәң.
(«Иҫкәртеү», 2008)

Дон Кихоттың ел тирмәне менән
Алышҡаны төҫлө тормошом.
Ғәҙеллекте яҡлап етемлектән,
Ялған менән күпме һуғыштым.
(«Өмөт», 2009).

Әйтергә кәрәк, өмөт мотивы, гражданлыҡ пафосы Р. Йәнбәктең башҡа әҫәрҙәрендә лә йыш ҡына сағылып китә. Быуат башында уҡ әле донъя күргән «Ә шулай ҙа...» тигән шиғырҙа был сифаттар айырыуса көслө һәм ҡыйыу күҙалланғайны:

Ҙур өмөттәр, оло маҡсат менән
Тормош һуҡмағынан атланым.
Иң гүзәл ил – беҙҙең ил, тип үҫтем,
Ленин бабай һүҙен ятланым.

Ысынлап та гүзәл ине илем,
Гүзәллеге ине – дуҫлыҡта.
Йәнем әрнәй хәҙер яндарымда
Шул саҡтағы дуҫтар юҡлыҡҡа.

Беҙҙең көндәлек тормошобоҙҙа киң урын алған һәр төрлө тиҫкәре күренештәргә (рухи тарҡалышҡа, үйҙырмаларға, ялғанлауҙарға, ғәҙелһеҙлектәргә) ҡарата белдерелгән ризаһыҙлыҡ билдәһе тип ҡабул итергә кәрәктер был юлдарҙы. Әммә автор барыбер ҙә киләсәктә яҡшылыҡҡа табан үҙгәрештәр булырына яҡты өмөтөн өҙмәй һәм шиғырҙың һуңғы строфаһында «Ә шулай ҙа йөрәк ниҙер көтә...» тигән ышанысы менән уртаҡлашыуы һис тә юҡтан түгелдер Р. Йәнбәктең заман елдәре шауҡымы аҫтында донъяға килгән шиғырҙары араһында ҡаршылыҡлыраҡ фекер уятҡандары ла юҡ түгел, бәхәс тыуҙырырҙайҙары ла осрап ҡуя. «Бер мәҙәк» (2007) менән «Урталыҡ»ты (2009) шундайҙар иҫәбенә индерер инем.

«Бер мәҙәк»тең лирик геройы, өҫтә телгә алып кителгән ҡайһы бер шиғырҙарҙағы шикелле, ике төрлө ваҡыт арауығында тороп ҡалған. Ҡасандыр ул, хаҡлыҡ юллап, бөтә донъяны үҙгәртеп ҡороу хыялы менән янып йәшәгән, күҙҙәре осҡон сәсеп, йәш йөрәгендә дәрт ярһып торған. Ә хәҙер, томан араһында ҡалған шул заман, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға көлкө булып тойола, үткәндәге яңылыштар үкенес уята.

«Инде беләм: мин йәшәгән мәлдә үҙгәрмәне донъя остоҡ ҡына» ти ул. Тик донъя ҡайһы саҡта остоҡ та үҙгәрмәгән: «бик йыраҡта, томан араһында ҡалған» теге замандамы, әллә бөгөнмө? «Ҡулым һелтәп теләк-ынтылышҡа, ғәмһеҙлеккә инеп боҫтом бына» тип иҡрар итеүҙән ары китә алмаған ул. Демократия заманында, цензура бөтөрөлгән осорҙа яҙылған был шиғыр, ысынлап та, «бер мәҙәк» һымаҡ яңғырай.

Идея-эстетик асылы буйынса «Урталыҡ» тигән шиғыр ҙа «Бер мәҙәк»тән ары китмәгән. Һүҙ юҡ, лирик геройҙың күңел торошо, психологик хәле бик оҫта итеп асып һалынған бында. Башта уны тормош шауы ла, ярыша-ярыша тиерлек бер-береһен алмаштырып торған яңылыҡтар ҙа ҡыҙыҡһындырмаған кеүек, хыялдары ла ташлап киткәндәй, хистәрен дә йүгәнләп ҡуйған һымаҡ. Күңеле «тымыҡ ҡына, тыныс ҡына» бер күлгә әйләнеүе менән дә ризалашҡандай. Әммә бер аҙҙан һуң ул үҙенең бындай хәле менән килешә алмай башлай һәм элекке шәйеһә ҡайтмаҡсы:

Мин иртәрәк, ахры, нуҡталаным
Хистәремде, күңел, ваҡытты.
Һиллектәрҙә ҡыйҙым үҙ-үҙемде,
Һиллектәрҙән туйҙым.
Ялҡытты.

Йөрәгемә тағы елдәр өрә,
Ҡапҡастарын нисек ябырға?
Битарафлыҡ менән ярһыулыҡтың
Урталығын нисек табырға?!

Тағы һорау тыуа: нишләп әле ҡасандыр күҙҙәре осҡон сәсеп, йөрәгендә дәрт ярһып торған лирик герой бөгөн килеп үҙ урынын битарафлыҡ менән ярһыулыҡ араһында эҙләй? Был риторик һорауҙы, ауыҙ күтәреп, «Ура!» ҡысҡырырға саҡырыу, тип аңларға ярамай. Әммә шағир өсөн ауыҙҙы йомоп ултырыу ҙа килешмәйҙер..

Әлбиттә, элгәреге һымаҡ, беҙҙең заманда ла, шиғырҙарға, тәнҡит мәҡәләләренә ҡарап ҡына (улар әкренләп боҙҙо ярған тамсыларға оҡшап торһа ла) донъя әллә ни үҙгәрмәҫ. Илла мәгәр киләсәк быуын вәкилдәре, шул шиғырҙарҙы уҡып, быуаттар ҡауышҡандағы хәл-ваҡиғаларҙың шаһиттары булған ватандаштары ниндәйерәк хистәр кисереп йәшәгәнлеген бик асыҡ күҙаллар. Әйтәйек, беҙҙең быуын

Дауыт Юлтыйҙың бынан йөҙ йыл элек ижад иткән «Башҡорт хәле» тигән шиғырындағы кисерештәрен күҙаллаған шикелле.

Әлегә иһә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә мөмкин: Рәмил Йәнбәктең ижад багажында ҡайһы берҙә ҡаршылыҡлыраҡ фекер уятып ҡуйған шиғырҙар түгел, бәлки яҡты өмөт, изге теләк, татлы хыял менән һуғарылғандары өҫтөнлөк итә. Һанай китһәң, улар байтаҡ ҡына: «Боронғола күпме серлелек бар», «Ҡайтырмын», «Көҙ еткәндә», «Ишегемде асып...», «Юғалған ауыл», «Байырмын», «Кисә һәм бөгөн», «Бөгөнгөм», «Атай йәше», «Үткәндәрҙе һағынмағыҙ...», «Яҙмыштан уҙмыш бар...», «Үткән һәм киләсәк», «Йәндәй яҡын», «Өмөтләнәм», «Ҡасыу», «Йәйге селлә», «Маяҡ», «Хыялдар», «Ер ситендә», «Уҙғандарға салауат», «Бәхет килде».

Тоям, һанау оҙаҡҡараҡ һуҙылды. Ләкин тәнҡит мәҡәләһендә теге йәки был әҙиптең ижади ҡаҙаныштарын барлау һәм шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер етешһеҙлектрен дә күрһәтеү аша әҙәби процесҡа күпмелер йоғонто яһау ниәте менән бер ҡатарҙан, мөмкин тиклем уҡыусы аудиторияһын киңәйтеү, башта уларҙы әҫәрҙәрҙең исемдәре менән генә булһа ла ҡыҙыҡһындырыу һәм йәлеп итеү бурысы ла күҙ уңында тотолмаймы ни?

(Яйы сыҡҡанда, йәйәләр эсендә генә булһа ла, әйтәйем: ғәҙәти дүрт строфанан торған «Шағир бит ул» тигән әҫәрендә, Йәнбәк, шиғриәтте бөтә күркәмлегендә һәм нескәлегендә, эске һәм тышҡы матурлығында аңлап еткермәү арҡаһында, шағирҙарға көлөмһөрәберәк, кәмһетеберәк ҡараусыларға юҡҡа ғына үпкәһен белдермәгәндер һәм «бындай бәндәләргә беҙҙәр генә моң-мәғәнә һала алмабыҙ» тигән күңелһеҙерәк һөҙөмтәгә килмәгәндер.)

Рәмилдең өҫтә һанап киткән шиғырҙары (был исемлекте артабан да дауам итергә булыр ине) үҙҙәренең ҙур лириклығы менән айырылып тораларҙар. Уларҙың күбеһендә (ҡайһы берҙәренең атамаларынан уҡ күренеүенсә) лирик герой беренсе заттан сығыш яһай һәм ул үҙенең эске донъяһы, ҡайғы-хәсрәттәре, уй-кисерештәре, өмөт-хыялдары менән бик теләп уртаҡлаша. Был кисерештәрҙе, өмөт-хыялдарҙы авторҙың психологик күҙәтеүсәнлеге менән аңлатырға кәрәктер. Психологик күҙәтеүсәнлек иһә уны, үҙ сиратында, фәлсәфәүи юҫыҡтағы уйланыуҙарға алып килә. Үҙен-үҙе ҡабатлаған саҡтары ла булғылай, ҡыҙғанысҡа күрә. Ләкин Пушкин менән Лермонтов та үҙ-үҙҙәрен дә, бер-береһен дә ҡабатлаған бит. Күрәһең, шиғриәттә ғәфү ителә торған хәлдер. Тик ул бер сиргә әйләнеп китмәһен. Бөтә бәлә һәм ҡурҡыныс шунда.

Өҫтә әйткәндәрем буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, бер нисә шиғырға туҡталып китергә тура килерҙер. Бына «Боронғола күпме серлелек бар...» тигән әҫәр. Уның лирик геройы (шағир үҙе лә, әлбиттә) бер аҙ фараз ҡылып ала: әкиәттәге шикелле, бер мәлгә генә үткәндәргә күҙ һалып, ата-бабаларыңдың кемлеген белһәң ине; киләсәккә ҡараш ташлап, унда ниҙәр көтәсәген шәйләһәң ине, тип хыяллана. Ләкин был хыялдарҙың тормошҡа ашмаҫлығын яҡшы аңлай ул һәм «Уҙған менән йыраҡ киләсәкте мин тотҡанмын ике ҡулымда» тигән ҡыҙыҡ ҡына метафора менән тамамлап ҡуя шағир әҫәрен.

Йәиһә «Ҡайтырмын»ды алып ҡарайыҡ. Психологик яҡтан ул көслө генә шиғыр, минеңсә. Бигерәк тә уның һуңғы строфаһы:

Күҙҙәр күргән, йөрәк типкән саҡта
Мин Өфөмдә йәшәп ятырмын.
Фанилыҡтан күскәс, ауылҡайым,
Мәңгелеккә һиңә ҡайтырмын...

Атамаһы менән мәҙәгәрәк яңғыраған «Юғалған ауыл» исемле шиғыр, унда һүҙ тағы шул тарҡалған ауыл тураһында баралыр инде, тигәнерәк уй тыуҙырып, уҡыусыны бер аҙ һиҫкәндереп тә ҡуйырға мөмкин. Ләкин уның менән яҡындараҡ таныша башлағас, йөкмәткеһе менән ул бөтөнләй башҡа иҫәнлегенә төшөнәһең. Йәнбәктең «Бер һүҙ» (2001) шиғырындағы шикелле, «киләсәкһеҙ» тигән мөһөр баҫылған ауыл тураһында түгел, ә лирик геройҙың бала сағындағы ауылының юғалыуы хаҡында икән был әҫәр. Сөнки күп йылдарҙан һуң бында бөтәһе лә үҙгәргән, дөрөҫөрәге – яңы быуын тыуып үҫкән. Үтеп барған ғүмерен автор, образлы фекерләү аша, тыныс ҡына, бер ниндәй шаушыуһыҙ бына былай итеп күҙ алдына килтереп баҫтырған:

Юҡ, күренмәй балҡып ҡаршы алыр
Алсаҡ һәм һөйкөмлө инәйҙәр.
Танымайым байтаҡ йәштәрҙе мин,
Улар инә – мине белмәйҙәр.

Бала саҡ ауылын эҙләһәм дә,
Юҡ, мәңге лә хәҙер тапмамдыр...
Ә шулай ҙа уны йөрәгемдә
Күҙем йомолғансы һаҡлармын.

Р. Йәнбәк шиғриәтендәге өмөт мотивынан (был мотив тураһында өҫтәрәк һүҙ сығып ҡуйғайны инде) йыш ҡына «үткән – бөгөн – киләсәк» темаһы үҫеп сыға. Бәлки, ул киреһенсәлер – үткән менән бөгөндән киләсәккә юл һалыналыр, яңы өмөт тыуалыр. Һәр хәлдә, был айҡанлы байтаҡ ҡына миҫалдар килтерергә мөмкин. Яңғырашы менән дә, йыйнаҡлығы йәһәтенән дә айырылып торған «Ишегемде асып...» исемле шиғырҙағы бына был юлдарға кем генә иғтибар итмәҫ икән:

Фани ғына бынау донъяларҙың
Ҡәҙерҙәрен белеп ҡалайым.
Һыҡрап торған йөрәк яраһына
Өмөт-хистән ямау һалайым.

Әйткәндәй, өмөт төшөнсәһе Рәмил шиғырҙарының эсендә генә түгел, уларҙың тышында ла (йәғни атамаларында ла) ҡат-ҡат ҡулланыла. Шуларҙың береһе («Өмөт», 2004) – «Ишегемде асып...» һымаҡ йыйнаҡ та, фәһемле лә. Уның лирик геройы – алсаҡ, ерҙә йәшәүҙең ҡәҙерен белеүсе шәхес. Халыҡ ижады арсеналына кереп китерҙәй «Кешеләрҙе һөймәҫ – үҙен һөйгән, ҡара яғыр бары тар күнел» тигән әйтем дә шиғырға йәм өҫтәп тора. Ә уның һуңғы строфаһына һалынған фекер үткән менән бөгөндән киләсәккә табан йүнәлгән өмөт сағылдары кеүек ҡабул ителә:

Үткәндәрҙән – яҡты иҫтәлектәр,
Юҡ, кәрәкмәй уның ҡалғаны.
Үткәндәр һәм бөгөнгөләр нимә? –
Дәртләндерә мине алдағы.

Халыҡ ижады хаҡында һүҙ сыҡҡас, тағы шуны әйтеп уҙайым. Р. Йәнбәк шиғырҙарының теле ябай, халыҡсан. Уларҙы аңлау өсөн һүҙлектәр аҡтарып ултыраһы юҡ. Халыҡ әйтемдәре лә үҙмаксат өсөн түгел, ә әҫәргә тәрән фекер һалып, уны мөмкин тиклем уҡымлыраҡ итеү өсөн файҙаланыла. Быға «Уҙғандарға салауат» тигән шиғыр миҫалында ла ышанырға мөмкин. Башта уҡ ныҙыҡ өҫтөнә алайыҡ: яҙылышы һәм яңғырашы буйынса әҫәр бик матур, психологик күҙәтеүҙәргә бай Уның лирик геройы, әйтерһең, йәшәлгән ғүмеренә хисап тота. «Үҙем булып ерҙә йәшәнемме?» тигән һорау ҡуя ул. Һәм уға эскерһеҙ яуап бирә:

Булды, булды ситкә тайпылыштар
Намыҫ тигән компас уғынан.

Үткәндәрем шуға тынғы бирмәй,
Шуға бәрелеп, шуға һуғылам.

Был бәрелеп – һуғылыуҙарҙың сәбәбен дә аңлатырға тырыша:

Яҡшы менән яман, аҡ һәм ҡара,
Дан менән хур йәшәй йәнәшә.
Ғүмер көҙҙәрендә, ахры, хатта
Мөхәббәт һәм нәфрәт берләшә.

Лирик геройҙың эскерһеҙлеге, ихласлығы ике юлдан торған һуңғы строфала уғата ла ышандырырлығыраҡ яңғырай:

Йөрәк ярһый, намыҫ ҡуҙғала.
Ник ғазаплай икән уҙғандар?

«Уҙғандарға салауат»тан саҡ ҡына элегерәк яҙылған «Маяҡ» тигән шиғыр ҙа идея-тематик яҡтан ошо типтағы әҫәр – һүҙ унда ла үткән менән киләсәк тураһында бара. Ләкин уның лирик геройы, үткәндәрҙе барлауға ҡарағанда, киләсәктә хуп күрә һәм уны маяҡҡа тиңләй:

Үткәндәрҙән киләсәккә табан
Һөйрәп килә мине аяҡтар.
Ярай әле, мәңге ымһындырған
Өмөт тигән сағыу маяҡ бар.

Эҙләнеүҙәрҙе артабан да дауам итһәк, «Кисә һәм бөгөн» тигән шиғырға ла юлығырбыҙ. Ҡарап тороуға ябай ғына тойолған был шиғырҙың төбөндә ябай ғына фәлсәфә ята – көн артынан көн үтә, тормош шулай дауам итә:

Кисә менән бөгөнгөнө бәйләү –
Таң еленең генә эшелер.
Иҫсе, елем! Яңы таңдар аша
Киләсәге тыуа кешенең.

Рәмил Йәнбәк поэзияһында фәлсәфәүи фекерләүҙең шаҡтай ҡатмарлығырағын да осратырға мөмкин. Оҙаҡҡа һуҙылған һүҙҙе

ҡыҫҡарта башлау ниәтенән сығып, «Бер нәмә лә ерҙә...» тигән шиғырға ғына туҡталып уҙайыҡ. Яңғырашы буйынса ҡайһы бер ҡытыршылыҡтар ҡолаҡҡа салынып киткәһә лә, йөкмәткеһе менән ул бик отошло: «Ваҡыт»тан башҡа «бер нәмә лә мәңге түгел ерҙә» тигән идеяны үткәрә автор. Шиғырҙың «Мәңгелектә һис иҫкермәй торған / Бөйөк ғали йәнәп – Ваҡыт бар» тигән һуңғы ике юлын уҡығас, теләйһеңме-теләмәйһеңме, философия ғилемендәге ваҡыт һәм арауыҡ категорияларының иҫкә килеп төшә.

«Кисә һәм бөгөн» тигән шиғырҙа тәнҡитсе ниндәй фәлсәфәүи фекер тапты икән, тип, икеләнеберәк ҡараусылар ҙа булыр, бәлки. Минеңсә, был шиғыр – торғаны бер фәлсәфә. Бер туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүсе атмосфера күренештәрендә автор ҙур мәғәнә тапҡан: таң елдәре алып килгән яңы таңдар кешенең генә түгел, Еребеҙҙең дә, хатта бөтә ғаләмдең өҙлөкһөҙ яңырып тороуына килтерә. Р. Йәнбәк лирикаһында бына шулай фәлсәфәүи фекерләүгә дәғүә итерҙәй шиғырҙар байтаҡ ҡына. Бөгөн уларҙың ҡайһы берҙәрен һанап китеү менән генә сикләнергә тура килер: «Яҙ һәм көҙ», «Бәхет хаҡында», «Төнгө уйҙар», «Мин кем?», «Апрель ямғыры», «Кеше ғүмерҙәре», «Хәҙер инде яҙҙар...», «Миҙгелдәр», «Ҡар яуһа ла, таш яуһа ла бурау-бурау...», «Күк менән ер», «Өҫтөнлөк», «Хат көткәндә» һ.б.

Фәлсәфәүи юҫыҡтағы уйланыуҙар шағирҙың гражданлыҡ пафосы һәм сәйәси мотивтар менән һуғарылған әҫәрҙәренә барып тоташа, тиһәк, һис тә хата булмаҫ. (Был ике стихия, ике тематик йүнәлеш бергә, бер-береһенә үрелеп һәм бер-береһен тулыландырып үҫә, тиһәк, уғата ла дөрөҫөрәк булыр.) «Күктәр сабыр» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, һуҙ – беҙҙең заманға хас хәл-ваҡиғалар хаҡында. Яңы быуаттың тәүге ун йылы үтеп барһа ла, һаман ниҙер көтөп йәшәйбеҙ, әммә ул юҡ та юҡ. Ер йөҙөндә һуғыштар ҙа туҡталмай, сөнки «бөтә байлыҡ бүлеп бөтөлмәгән» әле, тип, тураһын ярып һала автор.

Был йәһәттән «Яралы һалдат» тигән шиғыр ҙа хикмәтле яңғырай. Ул биш строфанан тора. Тәүге дүрт строфала, калейдоскоптағы шикелле генә булһа ла, һуғыш яланы, унда ҡаты яраланған һалдат һыны күҙ алдына килтереп баҫтырылған. Шағирҙың әйтергә теләгәне һуңғы строфаның һуңғы ике юлында: «Әллә ниңә ғәзиз илебеҙҙе шул һалдатҡа бөгөн оҡшатам» ти ул. «Түҙемлек» тип аталған икенсе бер шиғырҙағы «Ҡаным ташты, ғәзиз илкәйемде тере килеш киҫкәс өлөшкә» тигән һүҙҙәр ҙә көслө яңғырай.

Һуңғы ваҡытта Р. Йәнбәк ижадында юмор һәм сатира сатҡылары ла күренгеләп ҡала башланы. Был өлкәлә лә ул уңыш яуламаҡсы. «Мыжыу» тигән шиғырҙың лирик геройы, мәҫәлән, үҙенең ҡайһы бер ҡылыҡтарын асып һалыу менән генә сикләнмәй – уларҙың сәбәптәрен дә күрһәтергә тырыша:

Маҡтайһы ерҙә, түрәмдең
Ялҡытты тиргәүҙәре;
Мал таба белмәйһең, тип
Ҡатындың игәүҙәре
. . . . . .
Сей елкәгә тейә инде
Тейенә алмау аҡсаға;
Йәй буйына соҡсоноуҙар
Ус аяһы баҡсала.

«Был ҡай саҡ була?» тигән шиғыр беҙҙең заманға хас йәшәү рәүешенә еңелсә бер сатира һымаҡ яңғыраһа, «Үлсәү»ҙә иһә, байтаҡ һынауҙар аша үтеп, тормош тәжрибәһе туплаған лирик геройҙың хәҙер бөтә нәмәгә лә ҙур һаҡлыҡ менән ҡарауы юмор ҡалыбына төрөп күрһәтелгән,:

Телемде көскә күҙғатып,
Һүҙ әйтәм үлсәп кенә.
Үҙ алдыма бәхәсләшәм
Йыйылыш үткәс кенә.

Р. Йәнбәктең классиктар үрнәгенә иғтибарлы булыуы һәм уларға ихтирам менән ҡарауы хаҡында юғарыла бер аҙ әйтелгәйне инде. Был тәңгәлдә һүҙҙе артабан да дауам итергә мөмкин. Өс кенә строфанан торған «Шағир» тигән әҫәрен, мәҫәлән, ул рустың танылған әҙибе Валерий Брюсовҡа арнаған. Яңғырашы буйынса шиғыр бик матур. Әҙ генә һүҙҙәр ярҙамында автор тос фекер әйтеүгә ирешкән. Һуңғы строфала уның тыйнаҡлығы ла күҙгә бәрелеп тора:

Күҙем менән, һүҙем менән
Табынамын һин шағирға.

Һине данлар өсөн нисек
Һинекеләй һүҙ табырға?!

«Ҡасыу» тигән ыҡсым ғына шиғырҙа бер ниндәй ҙә бағышлама юҡ. Әммә миңә ул нишләптер М.Ю. Лермонтовтың «Елкән»ен хәтерләтеп ҡуйҙы. Лирик герой кешеләрҙән, үткәндәрҙән, яҡындарынан ҡаса ла, күңеле бер ерҙә лә йәм тапмай; һиллек эҙләп, яңғыҙлыҡҡа сума һәм унда һары һағыш менән ҡауыша. Һуңғы строфала, ниһайәт, аҡылға ултырғандай була:

Хоҙай айырмаһын кешеләрҙән,
Улар менән генә – мин әҙәм.
Ҡайғы-хәсрәттәргә түҙеп булыр,
Яңғыҙлыҡҡа, әхры, һис түҙмәм.

Йәиһә бына «Яҙылмай ҡалған шиғыр хаҡында шиғыр»ҙы алып ҡарайыҡ. Бағышлау-арнауы булмаһа ла, ул Назар Нәжмисәрәк яңғырамаймы ни? «Ҡарҙар яуа» тигән шиғырында халыҡ шағиры:

Асылмайса ҡалды миндә
Күпме сәскәм бөрөләре,
Уянманы хистәремдең
Тереләрҙән тереләре, –

тип яҙһа, Рәмил Йәнбәктә иһә шул уҡ мотив былайыраҡ кәүҙәләнеш тапҡан:

Донъя тиеп күпме йырҙарымды
Яҙмайынса ҡулым тыямын. –
Әйтерһең дә, әсә ҡарынында
Сабыйҙарҙың йәнен ҡыямын.

Өҫтәрәк әйткәнемсә, «Ә шулай ҙа йөрәк ниҙер көтә...» тип яҙғайны Р. Йәнбәк яңы быуат башында ижад иткән шиғырҙарының береһендә. Уға инде ун йыл булып бара. Шағир һаман юлда, һаман ижад утында янып-көйә, ул һаман ниҙер көтә. Көтһөн әйҙә! Көтөп йәшәү – хәйерлерәк. Беҙ бит шайтан түгел. Шайтан өмөтһөҙ була, тиҙәр.

2010, февраль

ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ – ХАҠЛЫҠ ҺАҒЫНДА

Имеш, кемдер берәү (бөйөктәрҙән булғандырмы, урта ҡулдырмы) әйткән ти: шиғриәт ул көнсөл һәм көйһеҙ ҡатын һымаҡ – һөйҙөрә лә, көйҙөрә лә, әммә ҡосағынан ысҡындырмай. Кем әйтһә лә әйткәндер, әммә был һүҙҙәрҙең төбөндә дөрөҫлөк ята, шикелле. Күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, әҙиптәрҙең күбеһе үҙ юлын шиғырҙан башлай. Артабан уларҙың ҡайһы берҙәре ижадтың башҡа төрөнә күсә. Арала ғилем өлкәһен һайлағандар ҙа табыла. Шул уҡ ваҡытта ижадтың ниндәй генә төрө менән шөғөлләнеүҙәренә ҡарамаҫтан, ғүмер баҡый шиғриәткә тоғро ҡалғандар ҙа бихисап. Башҡорт әҙәбиәтенән дә, башҡа әҙәбиәттәрҙән дә быға бик күп миҫалдар килтererгә мөмкин. Беҙҙең әҙәбиәттәге шундай әҙиптәрҙең береһе – Рауил Бикбаев.

Тәүге шиғырҙары матбуғат биттәрендә студент мәлендә үк әле күренә башлаған Рауил Бикбаев хәҙер – танылған шағир ҙа, билдәле ғалим да, үткер ҡәләмле публицист та, ағымдағы әҙәби процесҡа үҙ ҡарашын белдереп торған талапсан тәнҡитсе лә, кәрәк саҡта – тәржемәсе лә, байтаҡ йылдар инде Башҡортостан яҙыусыларының әйҙәүсеһе лә, һуңғы ваҡытта – дәүләт эшмәкәре лә. Һанап киткән өлкәләрҙең һәр ҡайһыһына айырым – айырым туҡталып, бик күп йылы һүҙҙәр әйтергә булыр ине уның хаҡында. Ләкин бөгөн шағирҙың яңы быуат башында «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән поэтик әҫәрҙәренә генә күҙ һирпеп алырға иҫәп. Ә «Ағиҙел» биттәрендә инә ул үҙенең яңы әҫәрҙәре менән йыл һайын тиерлек сығыш яһап тора.

Р. Бикбаевтың быуат башындағы шиғриәте хаҡындағы һүҙҙе, бер аҙ мәҙәгерәк тойолһа ла, уның формаһына бәйле күҙәтеүҙәрҙән башламаҡсымын. Сөнки шағир, етмешенсе-туҡһанынсы йылдар менән сағыштырғанда, һуңғы ваҡытта строфиканы бик ныҡ (ҡайһы саҡта, саманан артып китмәй микән, тип тә уйлап ҡуйырһың) төрләндерә башланы. Бер шиғыр эсендә төрлө юллы строфаларҙың аралашып килеүе генә етмәгән, ике, өс, дүрт, биш, алты юлдан ғына торған үҙаллы ҡыҫҡа шиғырҙар ҙа әленән-әле күренгеләп тора. Бер нисә йыл дауамында ғына ла уларҙың һаны илленән ашып китте.

Әлбиттә, әҫәрҙең формаһын һайлау – автор ҡарамағында. Ләкин һайланған форманың автор ихтыярына буйһонмайса, уны төп юлдан ситкә бороп алып киткән саҡтары ла булғылайҙыр ижад практикаһында. Сөнки ысын ижад – ифрат ҡатмарлы, ифрат нескә процесс бит ул. Тәнҡитселәр, әҙәбиәт белгестәре иһә ошо процесты күҙәтеү һәм фактттар теркәү менән генә сикләнмәйенсә, был фактттарзың тәбиғәтен аңларға һәм аңлатырға, уларға үҙҙәренең мөнәсәбәтен белдерергә тейештәрҙер.

Р. Бикбаевтағы өс, биш, алты юллыҡтар беҙҙең шиғриәттә, бәлки, һирәгерәк осрай торған күренештер, а бына ике һәм дүрт юллыҡтар күптән йәшәп килә һәм был формаға шағирҙарыбыҙ йыш ҡына мөрәжәғәт итә. Фәйзи Ғүмәровтың һикһәненсе йылдар башында донъя күргән «Йөҙ ҙә бер хикмәт» тиғән китабы, мәҫәлән, фәҡәт дүрт юллы шиғырҙарҙан ғына тора. Билдәле ғалим Ким Әхмәтйәнов ошо китапҡа яҙған баш һүҙендә шағирҙың дүрт юллыҡтарына юғары баһаһын биреп, жанрҙары буйынса уларҙы парсалар тип атағайны.

Һуңғы йылдарҙа шиғриәттең был формаһын үҙләштереүгә һәм уны артабан үҫтереүгә Риф Мифтахов та үҙ өлөшөн индерҙе һәм индерә. Уның ике юллыҡ шиғырҙары, автор билдәләүенсә, «Һүҙ ҡеүәте – тапҡырлыҡта» тигән мәкәл йоғонтоһо аҫтында ижад ителгәндәр. Ысынлап та, уңышлы килеп сыҡҡан ҡыҫҡа шиғырҙар иҫ киткес тәрән мәғәнәгә эйә булыусан. Шәрәф Әхмәмәттең туҡһанынсы йылдар башында уҡ әле яҙылған бынау дүрт юллығы һаман ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора һымаҡ:

Куян илай бүре тырнағында:
– Балаларым үлә, ебәр, – тип.
Бүре әйткән: Балаларым көтә,
Улар астан үлә, йүләр, – тип.

Һанаулы ғына юлдар аша ниндәй ҙә булһа берәй тос фекер әйтер өсөн тел йүгереклеге генә етмәй, әлбиттә. Бының өсөн, тәү сиратта, бай тормош тәжрибәһе, аҡыл зирәклеге, күҙәтеүсәнлек, унан һуң инде күргән-белгәнендән, кисергән хис-тойғоларыңдан тейешле һөҙөмтә яһап, уны башҡаларға еткерер өсөн иң ҡулайлы һүҙҙәрҙе генә һайлап алыу оҫталығы кәрәктер. Шуға күрә, шаҡтай ҙур тормош юлы үткән Рауил Бикбаев шиғриәтендә ике, дүрт һәм башҡа юллыҡтар һиҙелерлек урын ала бара икән, һис тә ғәжәп түгел. Әйткәнемде йөпләр өсөн бер генә миҫал – шағирҙың бер дүрт юллығын килтерәм:

Олоғайған һайын көн тиҙ үтә,
Ваҡыт ҡәҙере арта нығыраҡ.
Һәр яңы көн хәҙер байрам һымаҡ,
Һәр яңы көн тыуған көн һымаҡ.

Был юлдарҙа артыҡ хикмәт тә, яңылыҡ та юҡ кеүек. Уларҙы бында килтерғән өсөн бәғзеләрҙең мәҙәкһенеп ҡуйыуы ла ихтимал. Ләкин дүрт юллыҡтың һәр юлын иғтибар менәнерәк уҡыһаң, уларҙың төбөндә аҡһаҡалдар ғына тойомлай алған хистәр ятҡанлығын кем генә инҡар итә алыр икән? Был уй-хистәр егермеһе менән утыҙы араһындағыларҙың төшөнә ике ятып бер генә булһа ла ингәне бар микән?

Р. Бикбаевтың ҡыҫҡа шиғырҙары – әлегә тарҡау. Берәй ваҡыт бергә тупланғас, һандары ла күбәйгәс, улар тураһында иркенләберәк һүҙ ҡатылыр, моғайын. Бөгөн иһә тәүге тәьсорат менән генә уртаҡлашырға мөмкин: шағирҙың ике (һирәкәмирәк кенә уның бер юллыҡтары ла күҙгә салынып ҡала), өс, дүрт, биш, алты юллыҡтары араһында, бәлки, ҙур поэтик табышҡа дәғүә итмәгәндәре лә осраштыралыр, әммә улар барыбер иғтибарға лайыҡ. Шундайҙарҙың өсөһөн уҡыусы хәтерендә яңыртмаҡсы булдым:

Эҙләп намыҫ бизмәндәрен,
Әллә ҡайҙа алыҫ барма.
Яныңдағы сабыйҙарҙың
Күҙенә ҡарап, намыҫың барла.

• • •

Был донъяның хайран матурлығы
Һаҡланмайҙыр ниңә бик күпкә?
Кисә күҙҙең яуын алған сәскә
Әйләнде бит бына бер сүпкә.

• • •

Каютаңда йәм нимәгә,
Тишек булғанда карап?
Ватаның бәхетһеҙ икән,
Бәхетле булып ҡара!

Бында беҙ әҫәр формаһының нигеҙен тәшкил иткән күп компоненттар араһынан тик береһенә генә – строфикаға ғына ҡүҙ йүгертеп уҙҙыҡ. Уның башҡа төрҙәре хаҡында һүҙ ҡуйыртып тороуҙың әлегә хәжәте

юҡтыр, сөнки ябай уҡыусыны иң ныҡ ҡыҙыҡһындырғаны – йөкмәтке. Әҙәбиәт ғилемендә лә йөкмәтке менән форма берлеге тигән төшөнсә юҡҡа ғына йәшәп килмәйҙер. Ысынлап та, йөкмәткегә иғтибар итмәйенсә, әҙәби әҫәрҙең формаһы күңелгә йәтешме әллә шыҡһыҙмы икәнлегенә генә ҡарап, уның идея–художество асылын баһалау мөмкин түгел.

Рауил Бикбаевтың быуат башындағы шиғриәтенә ошо бейеклектән ҡараш ташлаһаҡ, уның ярайһы ғына бай йөкмәткеле булыуын шәйләрбеҙ. Тәбиғи, йылдар үткән һайын был шиғриәт күҙгә күренеп олпатлана бара, етдиләнә һәм уйсанлана төшә. Шул уҡ ваҡытта ул йәштәргә хас өлгөрлөгөн, үткерлеген һәм ҡыйыулығын да юғалтмай. Шағирҙың һуңғы йылдарҙағы лирикаһы темалар һәм жанрҙар төрлөлөгө менән дә үҙган быуаттағынан ҡайтыш түгел. Баштан-аяҡ саф килеш булмаһа ла, пейзаж лирикаһын да осратырға мөмкин уның бөгөнгө поэтик арсеналында. Бер аҙ моңһоуыраҡ яңғыраһа ла, мөхөббәт лирикаһы ла бөтөнләй үк ҡорғаҡһымаған әле. Тормош хәлдәре, йәшәү асылы хаҡында фәлсәфәүи юҫыҡта уйланыуҙарға ҡоролған шиғырҙар ҙа күҙгә йыш ҡына салына. Лирик геройҙың күңел төрөшөн, характер үҙенсәлектәрен сағылдырған әҫәрҙәр ҙә етерлек бында. Әхлаҡ, үҙ-үҙенә, дуҫтарыңа тоғролоҡ һәм шуның кеүек башка бик күп мәсьәләләр әүәлгесә тынғылыҡ бирмәй шағирға.

Быуат ҡапҡаһын Рауил Бикбаев «Уралымдың күкһел монарына, моңдарына инеп юғалам» тигән шәлкем («Ағизел», 2001, 10-сы һан) менән асып ебәрҙе. Шелкемгә исемде «Һыҙылып ҡына атҡан таңға ҡарап...» тигән шиғырҙан алынған юлдар биргән. Яҙылышы-төҙөлөшө һәм йөкмәткеһе менән һоҡландырғыс шиғыр. Ҡала шаушыуынан арынып, күкһел тауҙар ҡуйынына килеп юлыҡҡан лирик герой тәбиғәт менән бер бөтөнгә әйләнгән һәм уның «Бында миңә бер кем кәрәк түгел, бимазам юҡ бер кемгә» тигән һүҙҙәрендә артты-рыу ҙа, яһалмалыҡ та һиҙелмәй.

«Бимазам юҡ бер кемгә» тигән һүҙбәйләнеш мине шиғырҙа һүрәтләнгән иҫ киткес бай һәм матур тәбиғәт ҡосағынан бер аҙға ғына булһа ла ситкә тайпылып алырға мәжбүр итә. Тыштан күҙәткәндә, Рауил Бикбаев ҡырыҫ холоҡло, үҙен рәсмирәк тоторға тырышҡан кеше һымаҡ тойолһа ла, ысынында иһә ул (шиғырҙарынан күренеүенсә) ифрат нескә күңелле, шунлыҡтан йәне бик тиҙ йәрәхәтләнеүсән, кешеләр менән мөғәләмәгә ингәндә һәр ваҡыт

дөрөҫлөктө, изгелекте өҫтөн ҡуйыусан шәхескә оҡшап тора. Уның был сифаттарын дәлилләрҙәй байтаҡ миҫалдар килтererгә булыр ине, шулар араһынан бынауы алты юллыҡты уҡыусы иғтибарына тәҡдим итеү менән генә сикләнәм:

Берәйһенә ауыр ваҡытында
Ярҙамдарым тейһен,
Тик башҡаға
Ауырлығым ғына һалмаһамсы.
Алырҙарын кәмдәр алып бөткән?..
Бирәсәкле булып ҡалмаһамсы.

Хәҙер яңынан тәбиғәт ҡосағына әйләнеп ҡайтайыҡ. «Хатта ҡояш өшөп байығанда...» тигән шиғырҙа ла төп һүрәтләү объекты – тәбиғәт. Тик, «Һыҙылып ҡына атҡан таңға ҡарап...»тан айырмалы булараҡ, бынһынында шағирҙың иғтибар үҙәгендә тауҙар, һыҙғырып иҫкән елдәр, ҡая-олатайҙар, урман тынлығы һәм шифалы йылға түгел, ә сатлама ҡышҡы һыуыҡта төндө аҫтарында үткәреүсе ҡоштар тубы. Түҙер әмәле ҡалмағанда, лирик герой ошо ҡоштарҙы хәтеренә төшөрә һәм улар шикелле сыҙам булырға өндәй үҙ-үҙен. «Ҡая-олатай» ҙа, «Ҡояш өшөп байығанда» ла – уңышлы образ-метафоралар.

Р. Бикбаевтың лирик геройҙары бына шулай тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнештә йәшәйҙәр: һоҡланалар ҙа, кәрәк саҡта унан үрнәк тә, аҡыл да алалар. Был геройҙарҙың кешелек сифаттары, психологик хәлдәре, хис-тойғолары, уй-кисерештәре лә, йыйып ҡына әйткәндә – бөтә булмыштары башлыса тәбиғәт күренештәре аша асыла һәм шул күренештәр юҫығында һүрәтләнә «Тынғы белмәҫ япраҡ» тигән шиғырҙа, әйтәйек, күҙгә бигүк салынып тормаған бәләкәй генә бер хәл-ваҡиға – ҡарап тороуға тып-тын күренгән урманда бер яңғыҙы өҙгөләнгән саған япрағы миҫалында шағир ғәйәт ҙур дөйөмләштереүгә өлгәшкән: «Тормош ағасында мин дә тынғы белмәҫ япраҡ» тип тамамлай лирик герой үҙенең күҙәтеүҙәрен. Уйланған, эҙләнгән кешегә бында дөйөмләштереү генә түгел, символлаштырыу ҙа етерлек.

Ә бына «Йәшерендем йәшел сәхрәләрҙә...» тигән шиғырҙы пейзаж лирикаһының уғата ла матурыраҡ, уғата ла уңышлыраҡ өлөгөһө, тиергә мөмкин. Өҫтә аталған шиғырҙарҙағы кеүек, бында ла лирик герой менән тәбиғәт – бер бөтөн. Ләкин был юлы лирик герой тәбиғәт менән һоҡланып ҡына ҡалмай, унан дәрт тә, көс тә ала, хатта шунда

ирей һымаҡ: «Был тынлыҡта тыным иркенәйә. Был танлыҡта рухым киңәйә» тип уртаҡлаша ул үзенең халәте менән. Шиғырҙың һуңғы ике строфаһы (ә унда бөтәһе һигеҙ строфа) айырыуса тәьҫирле яңғырай һәм уҡыусы ҡүңелендә күтәренке тойғолар, йылы хистәр уятырына шик ҡалдырмай:

Ҡояш сыға.
Көлтә нурын бөркөп,
Ни арала күккә олғаштыҙ?
Наҙ-йылыһы електәргә үтә,
Күргәнем юҡ быйдай ҡояшты.

Күҙҙәремә теклəй өр-яңы көн,
Мең-мең һорау менән тулышып.
Ошо тынлыҡ, ошо киңлектәрҙә
Донъяларға яңынан тыумышым.

Рауил Бикбаевтың лирикаһы – тормошсан лирика. Ә тормош, билдәле булыуынса, бер төрлө буяуҙарҙан ғына тормай. Шуға күрә тәбиғәт күренештәрен шағир күтәренке кәйефте генә түгел, төшөнкөһөн дә тасуирлау өсөн файҙалана икән, һис тә ғәжәп түгел. Уның поэтик арсеналында быйдайҙарын да күпләп табырға була. Әле иһә шундайҙарҙың береһен генә күрһәтеп үтергә иҫәп: «Аҡиҙелдә шартлап ярыла боҙҙар...» тип атала ул. Шиғырҙан күренеүенсә, лирик геройҙың кәйефе шәптән түгел. Боҙҙар менән бергә нахаҡ һүҙҙәрҙең, әүрәү-ымһыныуҙарҙың, ваҡлыҡтарҙың ағып китеүен теләй ул һәм «Ярһып көтәм яҙғы яңырыуҙы, ҡар аҫтында ятҡан сәскә кеүек» ти, яҙғы яңырыу ваҡытында үҙен яңынан тыуғандай хис итеп.

Р. Бикбаев тәбиғәт күренештәрен лирик геройҙарҙың кәйеф-сафаһын тасуирлау сараһы итеп кенә түгел, бәлки тормоштағы шаҡтай ҡатмарлыҡ хәл-ваҡиғаларҙы символлаштырыу өсөн дә уңышлы файҙалана. 2005 йылда донъя күргән «Һорау» тигән шиғыр – ошо фекерҙе раҫларҙай миҫал. Төрлөшәр юллы (дүрт, биш, алты, ете, ун ике) егерме ете строфаны эсенә алған был шиғыр балладаға оҡшап тора.Миңә ул А. Блоктың«Ун ике» тигән поэмаһын да хәтерләтеп ҡуйҙы. Унда ла бит уҙған быуаттың ун етенсе–ун һигеҙенсе йылдарында Рәсәйҙә ҡупҡан мәхшәрҙең бәләкәй генә бер күренеше елегеңә үтеп инерлек ыҙғыр ел фонында һүрәтләнгән.

Р. Бикбаевтың «Һорау»ында ла А. Блок әҫәрендәге шикеллерәк күренеш кәүҙәләндерелгән. Шиғырҙың сюжетын былайраҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Хафалар ябырылып килгәнен һиҙенгән лирик герой йоҡоһонан яҙа. Тыныслыҡта тырышып, төн уртаһында Өфө урамдарын ҡыҙырып йөрөгәндә, ҡалтыранған сәйер тауыш ишетә. Светофор утына килеп еткәс, ҡулына хат тотҡан бер ҡатынға тап була. Улына яҙған ошо хатты һалыр өсөн, ул почта йәшниге эҙләй икән. Шул ваҡыт ел иҫә башлай, ғәрәсәт күтәрелә, әсә ҡулындағы теге хатты осороп алып китә. Хатын юғалтҡан әсәнең хәле былай һүрәтләнгән:

Үҙе берсә һыҡтап илай,
Берсә көлә хахылдап.
Әллә ҡайта аҡылына,
Әллә яҙа аҡылдан.

Шиғырҙа, минең ҡарашымса, романтизм шауҡымы ла сағылып киткәндәй. Билдәле булыуынса, XIX быуаттың тәүге яртыһында был методҡа таянып ижад иткән рус шағирҙары, алдарына ҡуйған эстетик бурыҫҡа мотлаҡ ирешеү ниәтенән, хәл-ваҡиғаларҙы ҡабартыбыраҡ, тормош дөрөҫлөгөнән хатта бер аҙ ситкә лә тайпылыбыраҡ һүрәтләүсән булғандар. Ким Әхмәтйәнов билдәләүенсә, ошо йәиһә уға тартым күренеш башҡорт поэзияһында, атап әйткәндә, М. Ғафури, Д. Юлтый, Ш. Бабич, С. Ҡудаш ижадтарында XX быуат башында күҙгә салынып ҡалған. XXI быуат башында был әҙәби алымдың ҡайһы бер һүрәтләү саралары Рауил Бикбаевты ла мауыҡтырып ҡуймағанмы? Уның да бит, йәненә урын табалмай төнө буйы ҡала урамын ҡыҙырып йөрөгән лирик геройы, тамам арып, хәлдән тайып, таң алдынан йортона әйләнеп ҡайтһа, ни күҙе менән күрһен, тупһаһында теге бәхетһеҙ ҡатын ҡулынан осоп киткән конверт ята. Шартлылыҡ, ғәҙәти булмаған хәл түгелмени был? Ләкин автор был шартлылыҡты реаль ысынбарлыҡтан алынған драматик хәлде образлы һынландырыу өсөн ҡулланған: лирик герой конвертты асып ҡараһа, хат урынына,«бер бит ҡағыҙ уртаһында оло һорау билдәһе» торғанлығын күрә. Укыусы был шартлылыҡҡа, моғайын, иғтибар ҙа итмәйҙер, сөнки ул, шиғырҙы диҡҡәт менән уҡып сыҡҡас, ҡағыҙ битендәге оло һорауҙы Афған, Чечня һәм башҡа лоҡаль һуғыштарҙа ғәзиз балаларын юғалтҡан әсәләр ҡуйғанлығын яҡшы аңлай. Хаҡлыҡ һағында торған шағир инһә шул һорауға яуап эҙләй:

Минән һаман яуап көтөп,
Ул хат өҫтәлдә ята.
Таң ата ла кисе етә,
Кис була ла таң ата.
Шул ҡатын, шул хат, шул һорау
Төшкә кереп уята.

Был – шиғырҙың һуңғы строфаһы. Ундағы «Таң ата ла кисе етә, кис була ла таң ата» тигән юлдар үҙенә күрә бер фәлсәфә түгелме һуң? Тик беҙ уға иғтибар ғына итмәйбеҙ, сөнки форсат юҡ, тормош мәшәҡәттәре унан көслөрәк.

Һуңғы ваҡытта әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә «фәлсәфәүи фекер», «фәлсәфәүи ҡараш», «фәлсәфәүи тәрәнлек» һәм башҡа шуның кеүек төшөнсәләр йыш ҡына күҙгә салына башланы. Бәлки, әҙерәк арттырыбыраҡ та ебәрәбеҙҙер. Ләкин төптәнерәк уйлаһаң, «фәлсәфәүи» тигән төшөнсә философия фәнендәге закондар һәм категориялар менән генә сикләнмәй бит. Өҫтәүенә, шуны ла онотмайыҡ: ул закондар һәм категориялар тормоштоң үҙенән үҫеп сыҡҡандарҙыр ҙабаһа. Аҡыллы философтар – уларҙы асыусылар ғына һәм билдәле бер тәртипкә һалыусылар.

Ошо урында ирекһеҙҙән Назар Нәжмиҙең «Һәр нәмәлә шиғыр ята, әгәр күрә, тоя белһәң, күргәнендә йөрәгеңдә шиғыр итеп ҡоя белһәң» тигән юлдары иҫкә килеп төшә. Әгәр был һүҙҙәргә икенсерәк яҫылыҡтан ҡараш ташлаһаҡ, тормоштағы һәр төрлө хәл-ваҡиғаның да төбөндә ниндәй ҙә булһа фәлсәфә ята, тик уның мәғәнәһен тотоп ала белергә генә кәрәк, тигәнерәк һығымта килеп сыға түгелме һуң? Шағирҙарҙың мөҡәддәс бурысы – йәшәү асылының ана шул йәшерен, фәлсәфәүи серҙәрен, Һүҙ ҡөҙрәтен тулы файҙаланып, юғары эстетик кимәлдә асып һалыуҙалыр. Әйтәйек, Р.Бикбаевтың «Башлаһам да тик изге уй менән...», «Йылынып килә йомшаҡ ҡаҙ үләне...», «Сәйер иртә», «Мораҙыма ирештем!..», «Башлана һәр көн усаҡтан...», «Утялҡыным неҙҙе өтмәһен тип...», «Үтә ғүмер ниҙер эҙләп...», «Боҙҙарҙа туң да утта беш, имеш...», «Үсентеләр һата ҡатын-ҡыҙҙар...», «Көн менән төн», «Был сабырһыҙ тормош ҡайҙа саба?...», «Яңы йыл теләге» тигән шиғырҙарында һымағыраҡ.

Биш строфанан торған «Башлаһам да тик изге уй менән...» тигән шиғыр, мәҫәлән, фани донъяла әҙәм балаһының ниндәй генә һынауҙарға дусар ителмәүе хаҡында уйланыуҙарҙан ғибәрәт. («Ишә

ваҡыт беҙҙең ғүмерҙәрҙе ҡараңғы төн менән аҡ көндән»). Был һынауҙарға дусар ителеүҙә ҡайһы берҙә уның үҙе ғәйепле булыуы ла кире ҡағылмай. Шиғыр, донъялағы һәр нәмә ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан, уларҙың үҙ-ара көрәшенән һәм бәрелешенән тора, тигән һығымтаға килтерә уҡыусыны:

Баҡыйлыҡта түгел, фанилыҡта
Сират күперҙәре үтәбеҙ.
Тәңрем әллә алдан сыныҡтыра:
Бәхетенә михнәт үрелеп тора,
Ожмахтарҙың ҡотон, тамуҡ утын
Был донъяла күреп китәбез.

Р. Бикбаев шиғриәтенә күскән бына был күҙәтеүҙәр ҙә шул уҡ фәлсәфәүи уйланыуҙарҙан үҫеп сыҡҡандыр, моғайын: кешенең иң гонаһһыҙ, иң бәхетле сағы – балалыҡ йылдары, ләкин ошо хәҡиҡәтте ул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик һуңлап, сал һаҡаллы булғас ҡына саҡ-саҡ аңлай башлай («Йылынып килә йомшаҡ ҡаҙ үләне...»); көн иләҫ-миләҫ кенә башланһа ла, ваҡыт барыбер үҙенекен итә – туҡтап тормай, аға ла аға («Сәйер иртә»); көн артынан көн тыуа, эш артынан эш ҡабатлана («Мораҙыма ирештем!...»); кеше бер ҡасан да тормоштан, үҙ-үҙенән тулыһынса ҡәнәғәт булалмай («Үтә ғүмер ниҙер эҙләп...»); донъялар хәҙер шул тиҡлем үҙгәрҙе, шул тиклем буталсыҡ, күп осраҡта хатта көндө төндән айырып булмай («Көн менән төн») һ.б.

«Үҫентеләр һата ҡатын-ҡыҙҙар...», «Был сабырһыҙ тормош ҡайҙа саба?.. », «Яңы йыл теләге» тигән шиғырҙар ҙа ошондай уйланыуҙарҙан хасил булғандыр. «Үҫентеләр һата ҡатын-ҡыҙҙар... » – яҙылышы менән дә, йөкмәткеһе яғынан да матур шиғыр. Тик исеме генә йөкмәткеһенә тап килеп бөтмәгәндәй.Сөнки шиғырҙа һүҙ, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда, башлыса улар һатҡан үҫентеләр хакында бара, дөрөҫөрәге – үҫентеләр менән кеше араһында ифрат нескә йәнәшәлек үткәрелә.

Мин үҙем дә – хас та һеҙҙең һымаҡ
Ерҙе һөйөп туймаҫ үҫенте, –

ти лирик герой, һәм әҫәр тәрән фекер төрөлгән юлдар менән тамамлана:

Иркәләнер саҡтар елеп үтер,
Һарыларға һалып, етер көҙ.
Беребеҙ ҙә ерҙән китмәҫбеҙ шул,
Бөтәбеҙ ҙә ергә китербеҙ.

Дүртәр юллы өс строфанан торған «Был сабырһыҙ тормош ҡайҙа саба?..» тигән йыйнаҡ ҡына шиғырҙа иһә кешелектең бөгөнгө йәшәү рәүешенә аҡыл эйәләренсә ҡараш ташланған. Шиғырҙың тәүге строфаһы «Был сабырһыҙ тормош ҡайҙа саба?..» тигән юл менән асыла ла:

Ҡабаланып һуңғы ҡабат һулап
Донъяларҙың моңон, йәм-ҡотон,
Һыуһындарым ҡанмай, мин туҡтармын.
Туҡтар Ваҡыт. Минең Ваҡытым, –

тигән строфа менән тамамлап ҡуйыла. Дүрт юллыҡ бер строфанан ғына торған «Яңы йыл теләге» тигән шиғырҙы миңә бында түкмәй-сәсмәй күсереп яҙаһы ғына ҡала:

Иҫке йыл үтер. Үтмәй ҡалмаҫ ул.
Яңы йыл килер. Килмәй ҡалмаҫ ул.
Килгән бәләләр китмәй ҡалмаһын.
Көткән шатлыҡ килмәй ҡалмаһын.

Тәрән йөкмәткеле уй-фекерҙе бынан да ҡыҫҡараҡ, бынан да үтемлерәк итеп тағы нисек белдерергә мөмкин икән? Бында, минеңсә, тормош фәлсәфәһе лә, шағирҙың зиһен ҡеүәһе лә, тел тапҡырлығы ла бөтә күркәмлегендә сағылған.

Р. Бикбаев шиғриәтенә бәйле ошо юҫыҡтағы һөйләшеүҙе артабан да дауам итергә булыр ине. Әлегә уның «Бәхетлерәк тамсылар» тигән шиғыры менән сикләнергә иҫәп. Ни бары алты юлдан (өсәр юллы ике строфа!) торған был шиғырҙа авторҙың күҙәтеүсәнлеге, нескә тойомлау һәләте, тирә-йүнгә, беҙҙе сорнап алған мөхиткә фәлсәфәүи күҙлектән ҡараш ташлау маһирлығы тағы бер тапҡыр кәүҙәләнеш тапҡан. Ҡарап тороуға, әҫәрҙә һүҙ йәйге осорҙа тәбиғәттә йыш ҡына ҡабатланыусан бер күренеш тураһында барған һымаҡ. Шағир иһә шул ябай күренештән ғәләмәт матур һәм йөкмәткеле һығымта яһап

ҡуйған: таңда яуған ямғырҙың ағас япраҡтарында ҡалған һуңғы тамсылары, ергә һеңгәндәренә ҡарағанда, бәхетлерәк икәндәр ҙәбәһә, сөнки улар бер мәлгә генә булһа ла яҡты донъяға оҙағыраҡ ҡарап ҡаласаҡтар. Яҡты донъяла йәшәгәндә һәр минутҡа һаҡсыл булырға, уны ҡәҙерләй белергә саҡырыу түгелме ни был?! Бер үк ваҡытта пейзаж лирикаһы аша ҡайһылай тәрән фекер әйтергә мөмкинлеген күрһәтеп тороусы сағыу миҫал да.

Мәҡәләнең башында Рауил Бикбаевтың үткер ҡәләмле публицист икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алынғайны инде. «Үткер ҡәләмле»гә тағы әллә күпме эпитеттар өҫтәргә булыр ине. Әйтәйек, ялҡынлы, сая, ҡыйыу, уҫал, көслө һәш башҡалар, һәм башҡалар. Нишләп әле һүҙ шиғриәттән публицистикаға күсте, тип, аптырабыраҡ ҡалыусылар ҙа табылыр, бәлки. Әйтергә теләгәнем иһә шул: Р. Бикбаевтың ҡайһы бер шиғырҙарына публицистик аһәң хас. Ләкин быны һис кенә лә шағир, йәнәһе, ялтырауыҡлы-шалтырауыҡлы әҫәрҙәр ҙә яҙа икән, тип аңларға ярамай. Һүҙ уның гражданлыҡ позицияһы, бөгөнгө иҫ киткес ҡатмарлы тормошта үҙе һайлаған, үҙе ышанған, үҙе табынған принциптар хаҡында бара, ә гражданлыҡ позицияһы, принциптарына тоғролоҡ, билдәле булыуынса, ижтимағи-сәйәси мәсьәләләргә ҡарата белдергән мөнәсәбәттә асығыраҡ сағылыусан.

Бөгөнгөләй хәтерҙә, һиҡһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһында, туҡһанынсының баштарында, борғослай-борғослай, шығырлата-шығырлата Советтар Союзын «үҙгәртеп ҡорған» мәлдә, шағирҙарыбыҙ, бигерәк тә һуғыш яландарында ҡан ҡойоп, ярты сәләмәтлектәрен юғалтып ҡайтҡан өлкән буын вәкилдәре (әйтәйек, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ғилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев, Шәриф Бикҡол, Муса Ғәлиҙәр) илебеҙ тарихындағы сираттағы мәхшәргә һис кенә лә битараф ҡала алманылар һәм үҙҙәренең фекерен бик асыҡ белдерҙеләр. Эҙләй китһәң, Р. Бикбаев та улар араһында булғандыр. Әле бына, байтаҡ йылдар үткәс, ул яңынан шул осорға әйләнеп ҡайта ла бөгөнгөнө кисәге менән сағыштыра.

«Бынау ҡырыҫ донъяларҙан башҡа...» тигән шиғырҙың лирик геройы фекеренсә, мәҫәлән, теге илдә йәшәү, көн итеү, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт күпкә еңелерәк, күңеллерәк,ышаныслыраҡ булған икән. Ләкин әҫәрҙең төп идеяһы был сағыштырыуҙа ғына түгел. Һис уйламаған ерҙән автор ҙур дөйөмләштереү яһай: ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кеше үҙ ғүмерендә ике төрлө илдә лә йәшәргә мөмкин икән. Һәм ошо яғы менән Р. Бикбаевтың был шиғыры,

«үзгәртеп ҡороу»ға бағышлап, һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа яҙылғандарҙан айырылып тора ла инде: әгәр ул осорҙа ҡайҙа барғаныбыҙҙы бик иҫләп бөтмәгән булһаҡ, хәҙәр инде, сирек быуаттан һуң, ҡайҙа килеп еткәнебеҙ көн кеүек асыҡ:

Киҫешәме шулай параллелдәр,
Яҙмыштарҙан ҡалыр кем ҡасып?
Был донъялар хәҙер яп-яланғас,
Был донъялар хәҙер ап-асыҡ.

. . . . . .

Миңә насип хәҙер ҡырыҫ донъям –
Үҙе хайран, үҙе вайран ил.
Үҙе йәнде арбап һайрар ил дә
Үҙе ҡылыс итеп ҡайрар ил.

«Бынау ҡырыҫ донъяларҙан башҡа...» глобаль әһәмиәткә эйә булған фекерҙәр ҙә уятып ҡуя. Әйтәйек, минең быуын, беҙҙең атайҙар һәм әсәйҙәр уҙған быуат башындағы үҙгәрештәрҙе еңел генә кисермәгәндәрҙер, тип уйланған булһа, хәҙер үҙебеҙ шул хәлдә. Был фекерҙе артабан да үҫтерә төшһәк, беҙҙең ил дә, башҡалар ҙа, бөтә кешелек донъяһы ла шулай (үҙгәрә-үҙгәрә) йәшәгән, тигән һығымтаға киләһе генә ҡала. Айырма тик үҙгәрештәрҙең ҡайһы яҡҡа табан барыуында ғына.

Р. Бикбаев шиғырҙарында был һорауға ла күпмелер яуап табырға була. Алтышар юллы ике строфанан торған «Иркәләр ҙә саҡта йәмле йәйҙәр...»ҙә, мәҫәлән, автор, ассоциатив һүрәтләү сараһын уңышлы ҡулланып, шиғырҙың икенсе строфаһында бындай һығымта яһай:

Ниндәй бәлә килде ил-Рәсәйгә?
Ҡаныбыҙҙы эсә серәкәйҙәр.
Хәлдәребәҙ ауыр.
Ҡаныктылар күпме ҡан эскестәр,
Тупланырмы илде яҡлар көстәр,
Ҡасан ҡубыр дауыл?

Күреүебеҙсә, беҙҙәге «үҙгәртеп ҡороу»ҙар бигүк дөрөҫ юлдан китмәгән һәм шуның арҡаһында уңышһыҙлыҡҡа осраған. «Көнҡүрештең ябай күренеше...» тигән икенсе бер шиғырҙа был фе-

кер уғата ла нығытып ҡуйыла. Унда һөмһөҙҙәр, ҡомһоҙҙар тәнҡит уты аҫтына алынған,сөнки уларҙың бөтә уйы – бушҡа байыу, һәм шул теләктәрен бойомға ашырыу ниәтенән донъяларҙы бутау менән ғенә сикләнмәйенсә, әгәр ҡулдарынан килһә, ынйы йыйыр өсөн хатта диңгеҙ төбөн аҡтарыуҙан да баш тартмаҫтар ине. Шиғыр үҙенең формаһы йәһәтенән дә иғтибарға лайыҡ. Икенсе строфалағы (әҫәр дүрт һәм биш юллы ике строфанан тора) фекерҙе тағы ла шул йәнәшәлек ысулы менән әйтер өсөн ерлек беренсе строфала әҙерләнә: сәйҙе болғатмай эсһәң, шәкәре сынаяҡ төбөндә ҡала. Ҡомһоҙҙар-һөмһөҙҙәр быны якшы аңлай, шуға күрә улар башта донъяны бутайҙар, унан һуң байлыҡ йыйалар.

Һикһәненсе–туҡһанынсы йылдарҙағы «үҙгәртеп ҡороу»ҙарҙың яңылыш юлдан киткәнлеге «Тоҙло күл» тигән шиғырҙа ла сағылыш тапҡан. Унда һүҙ – Ырымбур яҡтарындағы даны тирә-йүнгә таралған Тоҙло күлдең бөгөнгө көндәге яҙмышы хаҡында. Шиғырҙа сатира сатҡылары ла ялтлап китә. Ләкин унда сатира түгел, ә әсе күҙ йәше өстөнлөк итә:

Бурҙары менән Рәсәйгә
Ниндәй дәүләт тиңләшер?
Үҙе тоҙло күл булырлыҡ,
Йыйһаң илдең күҙ йәшен.
. . . . . .
Былай барһа, донъяларҙа
Иң көслөләре – бурмы?
Һауабыҙ ҙа һатылырмы?
Ил-халыҡ һатылырмы?
Күтәреп кенә йөрөтә,
Ҡайҙа бар шундай күлдәр?
Бөтә мөлкәте һатыла,
Ҡайҙа бар ундай илдәр?

Дүрт кенә строфанан торған «Ҡыҙыл китап» тигән шиғырҙың да төбөндә тәрән мәғәнә ята. Атамаһы менән дә, уға төрөлгән йөкмәткеһе менән дә был шиғырҙы авторҙың поэтик табышы, тиергә мөмкин. Ул үҙ эсенә бик күп проблемаларҙы һыйҙырған. Ҙурға китһә лә, уҡыусынан ғәфү үтенеп, урталағы ике строфаны бында тулы килеш күсермәй булдыра алмайым:

Юғалырға тора аҫыл һүҙҙәр:
Сафлыҡ, намыҫ, хаҡлыҡ, өмөт, иман.
Юғалырға тора шишмә, урман.
Юғалырға тора ант, тоғролоҡ,
Юғалырға тора милли холоҡ,
Дан дәүләттән ҡалып бара шәүлә.
Ҡыйралырға тора тотош дәүләт!
Бер юғалтһа, быны кем тапҡан?

Күрмәйбеҙме, йәнгә бәлә янай,
Һүҙҙәр яна, илде ҡырғын ялмай,
Телдең шишмәләрен ләм ҡаплай.
Эй заманым! Күпме ҡот-хазинаң
Инеп бара «Ҡыҙыл китап»ҡа.

Заман елдәренең йүнәлешен асыҡлап, уның көсөн һәм тиҙлеген билдәләгәндә, Р. Бикбаев, XX быуат башындағы рус поэзияһының атаманы В. Маяковский шикелле, ара-тирә неологизмдарға ла мөрәжәғәт иткеләй. «Берәү ил тип кәпәренә...» тигән шиғырҙа ул күҙгә айырыуса ныҡ ташлана һәм халыҡ шағирының хаҡлыҡ һағында торғанлығын асыҡтан-асыҡ раҫлай:

Берәү ил тип кәпәренә,
Халҡым тип яңғырҙы.
Фекер төйнәһендәр өсөн
Ойотҡо һала, имеш.

Ил бит былай ҙа ойоған,
Ни этемә ойотҡоң?
Милләтте килһә уятҡың,
Булмайыҡ тиһәң йыбытҡы,
Уятҡы һал, уятҡы!

Заман елдәренең көсөн-ҡеүәтен үлсәүгә арналған айырым шиғыры ла бар Р. Бикбаевтың. «Был замандың тиҙлектәрен...» тип атала ул. Бер аҙ алдатҡысыраҡ әҫәр. Ун бер строфанан торған был оҙон шиғырҙа һүҙ заман сиренә әйләнгән юл һәләкәттәре хаҡында барғандай тойола башта. Асылда иһә уның нигеҙендә тәрәнерәк һәм

ҙурыраҡ мәғәнә ята икән. Шағирҙың әйтергә теләгәне һуңғы ике строфала асыҡлана:

Юлда беҙҙе ниҙәр аңдый –
Кем генә белә?
Һәләкәткәме был донъя
Ҡотороп елә?

Донъяның ҡайҙа елгәнен
Кем генә аңлай?
Бәрелмәҫме илдәр илгә
Маңлайға маңлай?

Ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы, уларҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында ихлас борсолоп, шул борсолоуҙарын йөрәге аша үткәреп йәшәгән шағир, публицистик рухта яңғыраған шиғырҙар менән генә сикләнмәй. Үҙенең теге быуатта туплаған бай тәжрибәһен артабын үҫтереп, бынығында ла күләмле поэтик әҫәрҙәр ижад итеүгә күп көс һала ул. Әле шуларҙың береһенә генә – үҙгән көҙҙә «Ағиҙел» журналында (2010, 10-сы һан) баҫылып сыҡҡан «Хазина» поэмаһына ғына бер аҙ туҡталып китергә иҫәп. Ишетелеп ҡалыуынса, был әҫәр баш ҡала йәмғәтселеге араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан, уның сюжеты буйынса Йәштәр театры хатта мини-спектакль дә ҡуйған.

Поэма, ысынлап та, иғтибарҙы йәлеп итерлек. Формаһы йәһәтенән ул өҫтә тикшерелгән шиғырҙар һымағыраҡ: төрлөшәр юллы строфаларҙан туҡылған. Күләме яғынан – ифрат ҙур: мең дә ике йөҙҙән ашыу юлдан тора. Композицияһы менән дә бик ябай түгел: ғәҙәттә ҙур күләмле әҫәрҙәргә хас була торған киҫәктәр ҙә, бүлектәр ҙә юҡ бында – уларҙы йондоҙсоҡтар алмаштырған. Шул йодоҙсоҡтарҙы шартлы рәүештә бүлектәр йәиһә киҫәктәр сигенә тиңләһәк, уларҙың һаны ун һигеҙгә барып етә. Йондоҙсоҡтар менән бүленгән иң ҙур киҫәк – утыҙ бер строфанан (йөҙ ҙә илле һигеҙ юлдан), иң бәләкәйе – ике строфанан (туғыҙ юлдан) тора.

Бәғзеләргә минең былай юлдар, строфалар һанап, төпсөнөп ултырыуым, бәлки, мәҙәгерәк тә тойолор. Ләкин төпсөнмәй ҙә булмай шул. Поэманы ҡат-ҡат уҡығандан һуң, төрлө йөндоҙсоҡтар араһындағы строфалар һанының төрлөсә булыуы һис тә юҡтан түгел икәнлегенә төшөнәһең һәм форманы һайлағанда авторҙың йөкмәткенән (әйтергә

теләгән уй-фекеренән) сыгып эш итергә мәжбүр булганлыгына тагы бер тапкыр ышанаһың. Шунда инде цифрзар урынына йондоҙсоктар куйылыуы ла максатка ярашлыраҡ тойола башлай.

Поэмала һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙың хронологик сиктәре артыҡ ҙур түгел – күп тигәндә бер нисә айҙыр. Әҫәрҙең инеш өлөшөн тәшкил иткән дүртәр юллы һигеҙ строфала йылдың бик матур яҙғы миҙгеле тасуирланған: баҡсала «аҡ болот һымаҡ сейәләр, шау сәскә алмағастар». Баҡсалы, сәскәле йорттарҙың тәҙрәләре, кәрниздәре лә автор иғтибарынан ситтә ҡалмаған. «Ҡайһы ижадсы ҡулдары йорттарҙы сәнғәт иткән?! Ағастан селтәр бәйләгән, таҡтанан сигеү сиккән» тип һоҡлана ул. Ошонда Юлдаш атлы (әйтерһең дә, Мостай Кәримдең «Декабрь йыры» тигән поэмаһындағы төп геройҙың аҙаш ҡустыһы) тәүге персонаж да пәйҙә була.

Әлегә беҙ Юлдаш хаҡында бер нәмә лә белмәйбеҙ. Шуға күрә автор экспозицияны ябырға ашыҡмай – үҙенең геройы менән яҡынданыраҡ таныштыра башлай. Ул утыҙ һигеҙенсе йылдың йәйендә тыуған. Атаһы, «илдең аҫыл ире... ҡаһарман Ғәҙел Аҡъюлов» – утыҙ етелә ҡулға алынған һәм улы тыуыр алда атып үлтерелгән, ә ғаиләһе урамға ҡыуып сығарылған. Үҫкәс, Юлдаш тарихсы булырға теләй, ләкин «халыҡ дошманы улы» тигән ҡара мөһөр уның был хыялын юҡҡа сығара. Ғүмере заводта эшләп уҙа. Атаһы аҡланғас, унан ҡалған йортто «юллап-даулап» кире ҡайтара. Әҫәһе менән шунда торалар. Ғаилә ҡора. Улы тыуа. «Улы үҫә. Донъя имен. Бәхет өсөн күп кәрәкмәй!». «Ошо йортҡа ҡайтҡанға ла ярты быуат үтеп киткән!».

Тукһан юлға һуҙылған экспозиция «Көн башлана. Юлдашҡа ла юлланырға ваҡыт икән» тигән юлдар менән тамамлана. Һәм ошонда сюжет та төйөнләнә: йәш сағында тормошҡа ашмай ҡалған хыялына тоғролоҡ һаҡлаған пенсионер Юлдаш, үҙе төҙөгән шәжәрәнең яңы тармағын табырға ниәтләп, телефон аша алдан һөйләшеп ҡуйылғанса, Өфөлә йәшәгән бер ҡарт менән осрашырға тип сығып китә. Ә бына поэманың сиселеше – аяныс: Әбйәлил яҡтарынан, шатлыҡ тейәп, туған Өфөһөнә ҡайтыуына уның теге сәскәләргә күмелеп ултырған кәрнизле йортонан ҡара күмер генә тороп ҡала – уҫал уйлы яуыз кешеләр уға ут төрткән.

Әлбиттә, әҫәр ошо ике нөктәнән генә – төйнәлеш менән сиселештән генә торһа, ифрат күңелһеҙ булыр ине. Ләкин тормошта ла, сәнғәттә лә ундай хәл осраһа ла бик һирәк осрай торғандыр. «Хазина» сюжетының артабанғы өлөштәрендә иһә автор әҙәбиәт

арсеналындағы бай һүрәтләү сараларынан киң файҙланып, экспозицияла күренеп ҡалған геройҙың бөтә тормош юлын, эскиз рәүешендә генә булһа ла, ышандырырлыҡ итеп тасуирлауға ирешкән. Шуның һөҙөмтәһендә поэмала яҡтыртылған ваҡыт арауығы ла бермә-бер киңәйгән – ике-өс айҙан етмеш-һикһән йылға һуҙылған, финалдағы аяныслы хәлдең дә сәбәптәре асып һалынған.

«Хазина»ла дүрт быуын вәкиле ҡатнаша. Шуларҙың икәүһе – Юлдаш менән уның ейәне Азат – әҫәрҙең башынан алып ахырына тиклем хәрәкәт итһәләр, ҡалған икеһе – Юлдаштың атаһы Ғәҙел Аҡъюлов менән уның ейәне Азамат (Юлдаштың улы булып сыға инде ул) – автор хикәйәләүендә телгә алына. Ләкин, поэма биттәрендә ниндәй кимәлдә һәм нидәй сифатта ҡатнашыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙың һәр ҡайһыһы уҡыусы күңелендә үҙ урынын биләй. Ғәҙел Аҡъюлов, әйтәйек, башлыса утыҙ етенсе – утыҙ һигеҙенсе йылдарҙа айырыуса киң ҡолас алған шәхес культы ҡорбаны булараҡ хәтергә һеңә. Уның ейәне Азамат – көтөлмәгән, ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тормошта була торған фажиғәле хәлгә тарыусы итеп иҫкә алына.

Тәңҡитселәр бер-береһен әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләү менән мауығыуҙа ғәйепләүсән. Бында дөрөҫлөк юҡ түгелдер, әлбиттә. Әҙәби тәңҡит мәҡәләһе әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп сығыуға ғына ҡайтып ҡалһа, ысынлап та, ҡыҙғаныс хәл. Әммә әҙәби әҫәрҙе тәңҡит күҙлегенән сығып тикшергәндә уның йөкмәткеһенән бөтөнләй үк баш та тартып булмай торғандыр. Йөкмәткегә таянмай ғына яҙылған мәҡәлә итһеҙ һурпаны, ауыҙға алмайса ғына, бер туҡтауһыҙ болғатып ултырыуға оҡшап китер ине, юғиһә. Р. Бикбаевтың «Хазина» поэмаһы тураһында һүҙ барғанда ла уның йөкмәткеһенә мөрәжәғәт итмәй булманы инде. Ҡәләмдәштәр ғәфү итерҙәр.

Нимәһе менәндер Р. Бикбаевтың «Хазина»һы уның «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» тигән поэмаһын хәтерләтеп ҡуя. Унда ла бит лирик геройҙың Ағиҙел буйлап сәйәхәте ваҡытында бик күп көнүҙәк мәсьәләләр күтәрелә. «Хазина»ла ла шулайыраҡ. Шәжәрәһен дауам итерҙәй яңы мәғлүмәттәр табырға өмөтләнеп, телефон аша һөйләшеп килешкән ҡарт янына йәйәүләп, тирә-йүнде күҙәтә-күҙәтә Өфө урамдары буйлап атлағанда, Юлдаш төрлө уйҙар кисерә. Уны бигерәк тә бынан байтаҡ йылдар элек төҙөлгән «хрущёвкалар» һәм беҙҙең заманда улар эргәһендә бик тиҙ генә ҡалҡып сыҡҡан күп ҡатлы мөһабәт йорттар ҡыҙыҡһыдыра, ҡалала һәм илдә барған үҙгәрештәрҙең асылына төшөнөргә тырыша:

Үçмер саҡтан ил тип билен бөккән
Ҡартлығында асҡа ҡаҡлана.
Кемдәр йәшәй икән был йорттарҙа,
Ала икән ниндәй аҡсаға?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, осрашыуҙың көнө-сәғәте алдан билдәләп ҡуйылһа ла, юл уңышһыҙ булып сыға: Юлдаштың эҙләнеүҙәренә күпмелер асыҡлыҡ индерерҙәй ҡартты кисә ерләгәндәр. Шулай итеп, шәжәрәнең осо тағы өҙөлә. Ләкин поэманың геройы төшөнкөлөккә бирелеүселәрҙән, юғалып ҡалыусыларҙан түгел. Ул уйланыуҙарын дауам итә, ошонда уның тарихҡа һәм тарихи шәхестәргә ҡарашы ла сағылып китә:

Халыҡ ижад иткән ил тарихын
Үҙ яйына көйләй батшалар.
Әйтерһең дә, бөтә бөйөк эштәр
Яңы дәһри килгәс башлана.

Юлы уңмаған Юлдаш, «рухы берсә ҡанатланып, күңеле берсә таланып», тәрән уйҙарға сумып тыуған йортона ҡайтып килгәндә бөгөн хөкөм һөргән хәл-ваҡиғаларҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмай һәм уларға үҙ баһаһын бирә:

Яңы урыҫ илде талай,
Аҡса һуға яңы татар.
Иҫке башҡорт ҡурай тарта,
Иырлай, бейей, моң тарата.
Иҫке башҡорт иҫереп ята,
Яңы башҡорт ерен һата.

Был фекер Юлдаш менән уның ейәне (ҡартатаһы шикелле, Азат та тарих менән мауыға) араһындағы диалогта һәм авторҙың лирик сигенешендә артабан үҫтерелә. Мәҙәгерәк яңғыраһа ла, әйтәйем: диалог монологтарҙан тора. Унда һүҙ шәжәрә тураһында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, төптә шаҡтай ҙурыраҡ мәғәнә ята. Быны раҫлау өсөн, Юлдаш монологынан бер өҙөк килтерегә мөмкин:

Эй, был заман!
Хәләл закондарҙы
Харам яҡҡа бороп ебәрә.
Төп законды борғоларға була,
Тарихтарҙы боҙоп яҙып була,
Борғоланмай бары шәжәрә.

Ҡартатаһы фекерен ҡеүәтләп, Азат үҙ монологында былай ти:

Иң олоһо – илдең шәжәрәһе,
Шәжәрәлә – халыҡ хәтере.
. . . . . .
Тарихыбыҙ менәр йыллыҡ, тиеп
Бәғзе берәү күңелен йыуатмаҡ.
Ни мәғәнә үҙған мең йыллыҡҡа
Ялғынмаһа яңы быуаттар?

Ҡартатай менән ейәнден был монологтарына һиҙмәҫтән генә автор һүҙҙәре ялғанып китә. «Мине һаман ныҡыраҡ арбай тарихтың тылсым-серҙәре», «Мине тәүге башҡорттан да һуңғы башҡорт ныҡыраҡ борсой», ти ул һәм үҙенең хәүефе менән туранан-тура уртаҡлаша:

Ҡыҫҡарғандай хоҡуғыбыҙ,
Тарайғандан-тарая ер.
Илдең тотҡаһы булырлыҡ
Аҙайғандан-аҙая ир.

Авторҙың лирик сигенешендә уның патриотик идеялары ла ярылып ята:

Тыуған ерем, берҙән-берем,
Ҡәғбәм дә һин,
Ҡәлғәм дә һин,
Сәждәм дә һин, сәм, ғәм дә һин,
Тәғәм дә һин, йәм, тәм дә һин,–
Башҡортостан!

Кисәге һәм бөгөнгө көнитмешебеҙгә еңелсә ҡараш ташлап, ул риторик һорау ҡуя:

Ҡайҙа булды бөйөк дәүләт?
Китаптарҙа ҡалды бары.
Ҡаҙалды бит йөрәгемә
Ватанымдың ярсыҡтары.

Әҫәрҙең идея-художество структураһында Юлдаш ҡарттың Әбйәлил яҡтарында алған тәьсортаттары һәм ял йортонан ҡайтып килгәндә Салауат Юлаев һәйкәле тыуҙырған кисерештәре ҙур урын алып тора. Уларға айырым –айырым туҡталып, һәр ҡайһыһы тураһында бәйнә-бәйнә һөйләргә һәм төплө генә фекерҙәр әйтергә булыр ине. Был бурысты хәҙерге заман башҡорт поэмаһын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе йәш ғалимдарға йөкмәтәйек, әммә беҙ «Хазина» биттәрендә емелдәп киткән афористик һөйләмдәрҙең ҡайһы берҙәрен күрһәтеп китеү менән генә сикләнеп торайыҡ: «Төҙөк урамдарҙа емерек яҙмыштар»; «Моңланғанда һандуғас ул, кәрәк икән – ыласын» (башҡорт халҡына бирелгән баһа); «Ерҙе-күлде беҙҙән ҡамар өсөн долларҙарҙан аҡҡан ишәләр» («Әбйәлил әкиәте»нән үҙеп сығҡан ифрат көслө, ифрат урынлы афоризм); «Баҫыу – мәңгелек. Баҫыу барҙа – йәшәү мәңгелек»; «Күпме өйҙәр етемһерәй, тәҙрәһенән ут күренмәй, ишегенән кеше кермәй»; «Мәктәп бар ҙа ул – балалар юҡ. Мәсет бар ҙа ул – бабайҙар юҡ»; «Күҙебеҙ бар ҙа ул – күрмәйбеҙ. Ҡолағыбыҙ бар ҙа ул – ишетмәйбеҙ»; «Емерелә һәйкәл-өйҙәр, ҡыйратыла ҡомартҡылар»; «Ҡар башына ҡар еткәндәй, башҡорт башына башҡорт етә» һ.б., һ.б.

Фекер ҡыйыулығы, тура һүҙлелеге, тел үткерлеге менән Рауил Бикбаевтың «Хазина»һы билдәле рус совет шағиры А. Твардовскийҙың һуғыштан һуңғы поэмаларына тартым. Ғәжәйеп хәл: дәүерҙәр төрлө булһа ла, әҙәм балаһын, дөйөм алғанда, бөтә кешелек донъяһын борсоған проблемалар – шул уҡ, тиерлек. Был фекерҙе дәлилләрҙәй миҫалдарҙы ла күпләп килтерергә мөмкин. Әлегә шуларҙың береһе менән генә – авторҙың әрнеү ҡатыш әйтелгән ораны һымаҡ яңғыраған менән генә ҡәнәғәтләнеп торайыҡ:

Бөлгөнлөккә халкын батырып,
Илде емереү – ниндәй батырлыҡ!..
Бөйөк мәмләкәтте һәләк иткән

Һатлыҡ хаиндарҙы ҡәберҙәрен
Үҙҙәренән ҡаҙҙырып атырлыҡ.

«Хазина» – фекерҙәргә бай поэма. Уның сюжет тамырҙары буйлап ҡуйы һәм ҡайнар ҡан аға. Һүрәтләнгән йәиһә телгә алынған ваҡиғалар үҙҙәренең һиммәтлеге менән айырылып торалар. Шәхес культы тыуҙырған бәлә-ҡазалар ҙа урап үтелмәгән бында. Һуғыштан һуңғы осорҙа тыныс хеҙмәттә яуланған үрҙәр ҙә бер аҙ сағылып киткән. Афған синдромы ла килеп ҡушылған. Социализмдан баш тартып, капитализм төҙөгәндә ирешкән «уңыштар» ҙа ышандырырлыҡ итеп тасуирланған. Уйлап ҡуям: бер нисә әҫәргә торорлоҡ ошондай ҙа бай тормош материалын бер поэмаға һыйҙырып, автор үҙен-үҙе ярлыландырманы икән? Хәйер, уның нимәһен һөйләп тораһы инде: поэма яҙылған, ташҡа баҫылған. Ә шулай ҙа, урыҫтар әйтмешләй, ара-тирә хыялдарға бирелеп алыуҙың зыяны юҡ.

Поэманың аяныслы тамамланыуы хаҡында өҫтә әйткәйнек инде. Сюжеттың был өлөшө ике строфаға һыйған:

Ашығырҙар ине,
Кем уйлаған
Ошолай осланырын был юлдың?
Өлгөрмәне Юлдаш ергә баҫып –
Йорт эсенә Азат йомолдо.

Аҡарынды Юлдаш.
Мәңгелеккә
Туҡталғандай ваҡыт был саҡта.
Сәсәй-сәсәй уттан сыҡты Азат,
Ауҙы шәжәрәне ҡосаҡлап.

Әсәһе ҡарынында сағында уҡ атаһыҙ ҡалып, михнәт сигә-сигә үҫкән Юлдашҡа улын-киленен, ғүмер иткән ҡатынын юғалтыу ғына етмәгән, яҙмыш уның алдына тағы бер һынау сығарып ҡуя. Был юлы йөрәге күтәрә алырмы? Афған һуғышынан аңы юйылып ҡайтҡан Күренгес–Ҡарасҡыны (был образға бер аҙ асыҡлыҡ индерәһе юҡ миҡән?) өгөтләп һәм бер шешә араҡыға алдатып, баҡсалы, сәскәле йортон яндырған банкирҙарға ҡаршы торорға Юлдаштың, бәлки, көсө етмәҫ, әммә уның рухы һынмаҫ, тип уйлайым мин. Кем белә, уның

ейәненә оҡшаған намыҫлы, дөрөҫлөк һәм ғәҙеллек өсөн йәндәрен аямаған йәштәр ҙә күбәйеп китер бер заман.

Поэманың һуңғы биттәрендә бындай юлдар бар:

Тезләнәбеҙ ергә,
Хаҡҡа табынабыҙ.
Үҫһен шәжәрәбеҙ –
Бөйөк хазинабыҙ!

Шулай итеп, әҫәрҙең атамаһы ла асыҡлана: беҙҙең шәжәрәбеҙ – ул беҙҙең хазинабыҙ. Ләкин шәжәрәгә бында нәҫел-ырыу баҫҡыстарын теркәүсе ҡағыҙ, тип кенә ҡарарға ярамай. Минең аңлауымса, Рауил Бикбаев был төшөнсәгә бик ҙур мәғәнә һалған: хазина ул – беззең шәжәрәбеҙ ҙә, тәлибеҙ ҙә, әҙәбиәтебеҙ-мәҙәниәтебеҙ ҙә, сәнғәтебеҙ ҙә, тирә-йүн мөхитебеҙ ҙә, еребеҙ-һыуыбыҙ ҙа, һулаған һауабыҙ ҙа, ер өҫтө һәм ер аҫты байлығыбыҙ ҙа йәйрәп ятҡан болон-ҡырҙарбыҙ ҙа, шаулап ултырған урмандарыбыҙ ҙа, совет осоронда өҙөлөп-йолҡоноп төҙөгән завод-фабриктарыбыҙ ҙа, һ.б., һ.б. Шағир шуларҙы һаҡларға саҡыра, «Ер сигенән килеп, байып ята еребеҙҙә күпме килмешәк <...> Тура килмәгәйе тыуған өйҙә өйҙәш кенә булып йәшәргә», тип киҫәтә. Бында «Хазина» хаҡындағы һүҙ ҡыҫҡаса ҡүҙәтеү рәүешендә генә барҙы. Уның көслө яҡтары һәм ҡайһы бер кәмселектәре тураһындағы бәхәстәр алдалыр эле.

«Хазина» – өр-яңы әҫәр булһа ла, Рауил Бикбаевтың быуат башындағы ижадына арналған был күҙәтеүҙәремде, башта уҡ уйлап ҡуйылғанса, поэмаға тиҡлем төрлө йылдарҙа яҙылған биш шиғыр («Каруан», «Һуңлап яҙылған шиғыр», «Рәйес Түләк! Йәнең менән түләп...», «Яҡты донъяларҙан күсте йәнең...», «Арыҫлан һәйкәле янында») хаҡында ике генә ауыҙ һүҙ менән тамамламаҡсымын.Ни өсөн шулай? Сөнки ул шиғырҙар, минең ҡарашымса, «Хазина» поэмаһына ауаздаштар. «Хазина» поэмаһында автор Бабич, Буранбай, Вәлиди кеүек шәхестәрбеҙҙе (улар ҙа бит беҙҙең хазинабыҙ!) ғорурланып иҫкә алһа, был шиғырҙарында иһә ул замандаштарын-ҡәләмдәштәрен юҡһынып, исемдәрен хәтерҙә яңырта.

Әйтергә кәрәк, бындай типтағы шиғырҙар беҙҙә юҡ-юҡ та күренгеләп тора. Заманында бағышлама шиғырҙарҙы Назар Нәжми күп яҙҙы. Шағирҙың ижадын өйрәнеүгә арналған китабымда ундай шиғырҙарҙы мин мини-портреттар тип атағайным. Мини-портреттар

яҙыу еңел түгелдер, тип уйлайым. Саманы онотоп ташларға ла мөмкин. Портрет уңышлы килеп сыҡһын өсөн, геройының ниндәй ҙә булһа бик сағыу бер сифатын тотоп алырға һәм шул сифатты юғары эстетик кимәлдә уҡыусыға еткерергә кәрәк. Ошо талаптар Р. Бикбаевтың юғарыла йәйәләр эсендә һанап кителгән шиғырҙарында теүәл үтәлгән һымаҡ, минеңсә. Рәшит Солтангәрәевка төбәп әйтелгән «Аҫылдарҙы тәңре янына йыя, алтындарын ергә йәшергәндәй» тигән тапҡыр һүҙҙәр кемдә генә ризаһыҙлыҡ уятыр икән? Ошо шиғырҙы уҡығанда, мөһабәт кәүҙәле, үҙ бәҫен белеп, һәр саҡ ғорур атлап йөрөүсе Рәшит күҙ алдына килеп баҫа. Шиғриәтте артыҡ өнәп бөтмәһә лә (был турала уның үҙе әйткән һүҙҙәре бар), ҡыҫҡа көләмәстәре, дуҫтарса шарждары менән әле лә беҙҙең арала кеүек. Ә Мостай Кәримгә бирелгән «Һин бар замандарҙың замандашы!» тигән баһа ҡайһылай көслө яңғырай?!

Арыҫлан Мөбәрәков Яҙыусылар берлеге ағзаһы булып тормаһа ла, барыбер яҙыусылар иҫәбендә – һуғыш йылдарында ул бер нисә пьеса яҙып сәхнәләштергән. Ләкин Р. Бикбаев арҙаҡлы шәхескә бағышланған шиғырын уның артыслығын күҙ уңында тотоп яҙған:

Терелткән дә яңынан Салауатты,
Яңғыратҡан батыр ораның.

Ике бөйөк башҡорт ҡанатында
Башҡорт даны донъя ураны.

Ижад кешеһенең дөйөмләштерелгән образын һынландырған тағы бер шиғыр – «Сәхнә әһеленең әйткәне». Был шиғырҙы мин психологик монолог, тип атар инем. Унда һүҙ сәхнә әһеле хаҡында барһа ла, ул кисергән хистәр ижадтың башҡа тармаҡтарында эшләүселәргә лә хастыр. Минең был фекеремде Рауил Бикбаев үҙе лә раҫлағандай. Уның «Ҡай берәүҙәр уйлай...» тигән шиғырында шундай юлдарҙы табырға мөмкин:

Шағир – донъялағы иң азат йән,
Тик халҡында мәңге әсирлектә.
Яҙмыш уны йөккә төптән еккән.

2010, июнь

АҫЫЛ ИКӘН ЗАТЫҢ – ҺҮҘЕҢ БУЛҺЫН АЛТЫН

(Шағирәләребеҙҙең быуат башындағы ижадына бер ҡараш)

1

Ҡайһы бер «аҡыл эйәләре» (мәҫәлән, һис нәмәгә ҡарамай үҙ һүҙен өҫкә сығарыу һәм алдына ҡуйған барлы-юҡлы маҡсатына ирешеү өсөн бер ниндәй саранан да тартынып тормаған принципһыҙ сәйәсмәндәр, ауыҙ һыуҙарын сәсә-сәсә уларға көнө-төнө хеҙмәт иткән айырым журналистар) илебеҙҙең совет осорон нисек кенә хурламаһындар һәм уны тарих битенән йолҡоп ташлап, тиҙерәк оноторорға тырышмаһындар, шул дәүерҙә төрлө өлкәлә яуланған ҡаҙаныштарға күҙ йомоп ҡараһаҡ, дөрөҫлөккә хилафлыҡ булыр ине. Бындай ҡараштың, ысынлап та хилафлыҡ икәнлегенә башҡорт әҙәбиәте, айырыуса уның XX быуат дауамында сәскә атҡан шиғриәте миҫалында ла нығлап төшөнөргә мөмкин.

Шиғриәтебеҙҙең үҫеш юлдарын, уның теоретик нигеҙҙәрен өйрәнеүгә бағышланған ғилми хеҙмәттәр, айырым шағирҙарҙың тормош һәм ижад юлын яҡтыртҡан монографиялар, поэзиябыҙ алдында торған көнүҙәк мәсьәләләрҙе барлауға һәм хәл итеүгә арналған проблемалы мәҡәләләр – былар бөтәһе лә үткәндәрҙе бер яҡлы ғына баһаларға маташыусыларҙың күҙҙәрен асып ебәрерҙәй кире ҡаҡҡыһыҙ фактлар.

Күп кенә башҡа халыҡтарҙыҡынан айырмалы булараҡ, башҡорт поэзияһы үҙенең гүзәл шағирәләре менән дан тота һәм улар менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Был да совет системаһының бөтөнләй үк яраҡһыҙ булмағанлығын, гел генә ҡара буяуҙарҙан тормағанлығын раҫлаусы фактларҙың береһе. Ун етенсе йылға тиклем түр яҡҡа шаршау артынан ҡасып-боҫоп ҡына күҙ һирпеп йәшәргә дусар ителгән мосолман ҡатынының (бында башҡорт һәм татар ҡатын-ҡыҙҙары ғына түгел, Кавказ, Урта Азия һәм башҡа шундай төбәктәрҙә көн күргән мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ла күҙ уңында тотола) егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа уҡырға-яҙырға өйрәнеп кенә ҡалмайынса, әкренләп әҙәбиәт донъяһына тартылыуы һәм ижад серҙәренә төшөнә

башлауы был фактты уғата ла көсәйтә һәм артабан бәхәсләшергә урын ҡалдырмай.

Башҡорт ерлегендә пәйҙә булған ошондай аҫыл заттарҙың иң тәүгеһе – Һәҙиә Дәүләтшина икәнлеге бөгөн һәр кемгә билдәле. Дөрөҫ, беҙҙең аңға ул башлыса сәсмә әҫәрҙәр («Һылыуҡай-пионерка», «Һырға һабағы» тигән хикәйәләр, «Айбикә», «Башаҡтар тулҡыны» исемле повестар, ниһайәт, атаҡлы «Ырғыҙ» романы) авторы булараҡ һеңеп ҡалған. Ләкин, төрлө сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Һ. Дәүләтшина байтаҡ ҡына шиғырҙар ҙа яҙып ҡалдырған. Ҡайһы бер ғалимдарҙың фараз итеүенсә, уларҙың әлегә табылмағандары ла булырға тейеш. Тимәк, Һәҙиә Дәүләтшинаны башҡорт әҙәбиәтендәге ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһының (был төшөнсә һирәк-мирәк кенә төрлө осорҙа һәм төрлө телдә ҡолаҡҡа салынып киткеләһә лә, ул шартлы рәүештә генә ҡулланылалыр, тип уйлайым, сөнки ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар психологияһында күҙгә бәрелеп торған етди айырмалыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, улар бер үк һауаны һулап, бер үк һыуҙы эсеп, шатлыҡтарҙы ла, ҡайғы-хәсрәттәрҙе лә берҙәй кисереп, шуларҙы ижадтарында һәр ҡайһыһы үҙенсә сағылдырып йәшәргә дусар ителгәндәр) юл ярыусыһы тип атарға тулы нигеҙ бар.

Юл ярыусының эҙенә оҙаҡламай Зәйнәб Биишева, Кәтибә Кинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова аяҡ баҫа. Улар һуғышҡа тиклем үк әле, төрлө уҡыу йорттарында белем алып йөрөгән саҡта, үҙҙәренең ҡәләмен тибрәтә башлай. Һуғыштан һуңғы ауыр 1947 йылда был өсәүҙең береһе – егерме алты йәшлек Фәүзиә Рәхимғолова – «Яҡын дуҫ» исемле тәүге поэтик йыйынтығын баҫтырып сығара Тышлығында ҡатын-ҡыҙ фамилияһы балҡып торған был китап автор биографияһында ғына түгел, бөтә башҡорт поэзияһы тарихында ла (Һәҙиә Дәүләтшинаның Өфөлә 1935 йылда башҡорт телендә донъя күргән «Хикәйәләр шәлкеме» һәм 1936 йылда рус телендә баҫылып сыҡҡан «Айбика» тигән китаптарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) тәүгеләрҙән ине.

Артабан йәш шағирәнең «Гел алға» (1954), «Март ҡояшы» (1959), «Зәйнәптең йыры» (1960), «Хуш киләһең» (1962) тигән йыйынтыҡтары бер-бер артлы донъя күрҙе. Шул йылдарҙа, Фәүзиә Рәхимғоловаға эйәреп тигәндәй, Кәтибә Кинйәбулатова әүҙемләшеп китә. Уның «Тәүге сәскәләр» (1954), «Йәшел япраҡтар» (1958), «Әнисә» (1960), «Һүнмәҫ мөхәббәт» (1962) исемле шиғри йыйынтыҡтары, тамаҡ туйҙырыр өсөн ул йылдарҙа төрлө ерҙә эшләп йөрөргә мәжбүр булған

авторҙың, бер ниндәй икеләнеүһеҙ, тамам әҙәби ижад юлын һайлағанлығын раҫланы.

Фәүзиә Рәхимғолова менән Кәтибә Кинйәбулатованан бер ни тиклем айырмалы булараҡ, ижадтың ике төрөнә – театр сәнғәтенә һәм әҙәбиәткә – көсөнән килгәнсә тоғро хеҙмәт иткән Рәғиҙә Янбулатова ла үҙенең «Елбәҙәк ҡарҙар» (1959) һәм «Таныш көйҙәр» (1962) тигән тәүге китаптарын уҡыусыға тап ошо осорҙа бүләк итте.

Ниһайәт, Зәйнәб Биишеваның поэмаһын һәм шиғырҙарын туплаған (быға тиклем ул күберәк сәсмә әҫәрҙәрен нәшер итеү менән мәшғүл булды) «Гөлбәҙәр» (1961) тигән китабы. Бына шулай һалынды совет осорондағы башҡорт әҙәбиәтендә «Ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһы»ның нигеҙ ташҡары.

Һәр ҡайһыһы үҙ юлы, үҙ иманы менән әҙәбиәткә килгән Әлфинур Вахитова, Гөлфиә Юнысова, Әнисә Таһирова, Айһылыу Йәғәфәрова, Фәниә Чанышева, Рәмзилә Хисаметдинова, Миңлегөл Хисмәтуллина, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Зарема Әхмәтйәнова, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева кеүек яңы көстәр ҡатнашлығында был шиғриәт уҙған быуаттың һикһәненсе йылдар башына көслө бер ағымға әүерелде, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ. Тәбиғи, яңы көстәр (бында авторҙарҙың исем-шәрифтәре уларҙың йәш айырмалыҡтарына ҡарап түгел, ә тәүге китаптарының баҫылып сығыу тәртибе буйынса һаналды) әҙәбиәткә ниндәйҙер яңылыҡтар алып килһә лә, ижади яҙмыштары һәм поэзиябыҙға индергән өлөштәре төрлөсә булды.

Ҡайһы берҙәре йәшерәк саҡта дәррәү генә эшләп алды ла, һуңыраҡ нишләптер һүрелеп ҡуйҙы. Бәғзеләр иһә үҙ һәләттәрен шиғриәткә генә түгел, ижадтың башҡа төрҙәренә лә берҙәй әүҙем сарыфланы. Ҡыҙғанысҡа күрә, яҡты донъянан иртәрәк китеп, таланттары бөтә күркәмлегендә һәм бөтә тәрәнлегендә асылып бөтмәйсә, ижадтары ярты юлда өҙөлөп ҡалғандар ҙа юҡ түгел был исемлектә. Әммә, нисек кенә булмаһын, улар, бөтәһе лә бергәләп, өлкән ҡәләмдәштәре һалған һуҡмаҡты һыуытманылар, ҡулдарынан һәм көстәренән килгәнсә уны артабан киңәйтеү һәм үҫтереү хәстәрен күрҙеләр, иҫәндәре иһә был изге эште әле лә дауам итә.

Һикһәненсе йылдарҙа «Ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте»нә (был юлы ла аҫыл заттарҙың исемдәре уларҙың йәштәренә ҡарап түгел, ә тәүге йыйынтыҡтарының донъя күреү тәртибендә килтерелде) Таңһылыу Ҡарамышева, Нәжибә Әминева, Гөлшат Әхмәтҡужина (Гөлгизәр Фәйзи), Гүзәл Ғәлиева, Эльмира Сәсәнбаева (Сәсәниә), Зөһрә

Ҡотлогилдина, Гүзәл Ситдикова, Кәүсәриә Шафиҡова, Динә Булгакова, Тамара Искәндәриә, Миңлегөл Хисамова, Гөлнур Яҡупова, Динә Талхина, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Йомабикә Ильясовалар тауышы ла өҫтәлгәс, ул инде ҡеүәтле ташҡынды хәтерләтә башланы.

Шуныһы ҡыуаныслы: ташҡынға оҡшаған был ағымға, әленән-әле тип әйтерлек, урғылып сыҡҡан яңы шишмәләр ҡушылып тора һәм ваҡыт үткән һайын ташҡын-ағым шул шишмәләр иҫәбенә уғата ла киңәйә, тәрәнәйә һәм ҡеүәтләнә бара. Туҡһанынсы йылдарҙа, мәҫәлән, шиғриәт күгендә Гөлсирә Шафиҡова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Римма Ғәлимова, Лилиә Ҡәйепова (Һаҡмар), Гөлназ Ҡотоева, Фәндидә Харрасова, Айһылыу Ғәрифуллина, Нәфисә Хәбибдиярова кеүек яңы исемдәр ҡалыҡты. Ижад юлдарының тәүге ун йылында уҡ улар икешәр, ҡайһы берҙәре хатта дүртәр-бишәр китап сығарып өлгөрҙө.

Ошо фактҡарға таянып, әҙәбиәтебеҙҙә утыҙынсы йылдарҙа тамыр йәйә башлаған «ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте», етмеш йыл дауамында ил алдында, тыуған халҡы алдында торған дөйөм бурыстарҙы художество саралары менән хәл итешеүҙә әүҙем ҡатнашып, быуатты ослағанда үҙ-аллы һәм ғәжәп ҡыҙыҡлы бер күренешкә әүерелде, тиергә була. Тик бында үҙ-аллылыҡты һис кенә лә айырымланғанлыҡ тип аңларға ярамай. Киреһенсә, «ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәте» ир-егеттәр ижад иткән поэзия менән һыйышып йәшәүсе, уның менән бергә атлаусы, уға көс-ҡеүәт өҫтәүсе күренеш.

Ләкин был күренештең үҙенә генә хас айырым сифаттары ла юҡ түгелдер, моғайын. Әйтәйек, йәмғиәтебеҙҙә ижтимағи-сәйәси мәсьәләләргә шағирәләр ниндәйерәк күҙлектән сығып ҡараусан? Ғөмүмән, уларҙы сәйәсәт ҡыҙыҡһындырамы? Әллә көндәлек тормош мәшәҡәттәре ысҡындырмаймы үҙ ҡыҫаһынан? Әгәр сәйәсәткә лә урын ҡалһа, уға ҡарата үҙ фекерҙәрен туранан-тура ярып һалалармы, әллә уратыбыраҡ белдерәләрме? Был һорауҙарға гражданлыҡ позицияһы тигән төшөнсә килеп ялғана. Ул да шағирҙар өсөн дә, шағирәләр өсөн дә бик мөһим күрһәткес. Унан иһә тормоштоң, ерҙә йәшәүҙең фәлсәфәүи асылын аңлау ҡеүәһе үҫеп сыға. Беҙҙең бөтә булмышыбыҙҙа ҙур урын алып торған тағы ла бер тема – мөхәббәт темаһы нисегерәк сағыла икән шартлы рәүештә генә булһа ла ике төркөмгә бүлеп ҡаралған шиғриәттә? Уларҙың ҡайһыһында ихласлыҡ, тойғолар сафлығы, хистәр нескәлеге көслөрәк яңғырай һәм ҡайһыһында психологик тәрәнлек өҫтөнлөк итә? Әллә икеһендә лә бер самамы? Кем кемде күберәк һәм йышыраҡ ғәйепләй, йәиһә ҡурсалай? Әхлаҡ,

рухиәт проблемалары ҡайһылайыраҡ яҡтыртыла һәм улар, ғәҙәттә, ҡайһы яҡ файҙаһына хәл ителеүсән?

Уйлай китһәң, ошондай һәм ошоға тартым һорауҙар атлаған һайын тиерлек тыуып ҡына тора. Һәм ул бик тәбиғи. Ҡыҙғанысҡа күрә, әлегә беҙ уларға иғтибар итеп еткермәйбеҙ, дөрөҫөрәге – бөтөнләй иғтибар итмәйбеҙ, шикелле. Тәү ҡарамаҡҡа, был һорауҙар әллә ни ҡатмарлы ла, һуштан яҙып йығылып китерлек тә түгел һымаҡ. Ләкин уларға мөмкин тиклем тулы, мөмкин тиклем төплө яуапты, минең ҡарашымса, әҙәбиәт ғилеме киңлектәрендә генә түгел, бәлки философия, логика, социология, психология, физиология, педагогика кеүек йәнәш фәндәр сиктәрендә лә эҙләргә кәрәктер.Был мәҡәләлә иһә ундай ҙур маҡсат ҡуйылмай, сөнки ул бер ултырыуҙа ғына хәл ителә торған мәсьәлә түгел. Иҫ киткес ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс был проблема үҫеп килеүсе йәш ғалимдар ҡарамағына ҡалып торһон. Бөгөн иһә аҫыл заттарҙың яңы быуат башында «Ағизел» биттәрендә баҫылып сыҡҡан ҡайһы бер шиғри шәлкемдәренә ҽнелсә ҡараш ташлап алыу менән генә сикләнергә иҫәп.

2

Һүҙҙе Егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫҡанда үҙҙәренең күркәм юбилейҙарын билдәләгән өлкәнерәк быуын өс шағирәнән – Кәтибә Кинйәбулатова, Фәниә Чанышева һәм Әлфинур Вахитованан башлаһаҡ, дөрөҫөрәк булыр.

Төрлө йылдарҙа, Өфөлә һәм Мәскәүҙә, башҡорт һәм рус телдәрендә утыҙлап китап баҫтырып сығарған Кәтибә Кинйәбулатованың әҙәби яҙмышы миңә ҡайһы саҡта рустың ҡаһарман яҙыусыһы Лев Толстой яҙмышын хәтерләтеп ҡуя. Ул да бит, үҙенең иң көслө, иң күләмле әҫәрҙәрен XIX быуаттың икенсе яртыһында ижад итһә лә, XX быуатҡа күскәс ҡапыл ғына туҡтап ҡуймай. Киреһенсә, ҡатмарлы һәм аяныслы тормоштоң фәлсәфәүи асылына төшөнөргә тырышып, эске ҡаршылыҡтар кисерә-кисерә булһа ла, ижадын дауам итә һәм яңы быуаттың тәүге ун йылында бынамын тигән яңы әҫәрҙәрен яҙырға өлгөрә.

Башҡорт шағирәһе Кәтибә Кинйәбулатова ла шулайыраҡ. Уның да ижадындағы иң емешле осор XX быуаттың икенсе яртыһына ҡарай. Ләкин ул XXI быуат башында ла ҡул ҡаушарып ятмай. Был турала шағирәнең ижадташы, ҡәләмдәш һеңлһе Әнисә Таһирова

үҙенең «Шиғыр көҙө булмай...» тигән мәҡәләһендә («Ағиҙел», 2005, 9-сы һан) бик асыҡ һәм аңлайышлы итеп яҙҙы: «Ғәжәп, инде 85 йәшен туйлаған шағирәнең ижад ҡомары һис тә кәмемәй, сағыу хистәре һүрелмәй, фекерләүе, шиғри биҙәктәре элеккесә баҙыҡ, һоҡландырғыс».

Әйткәндәй, Кәтибә Кинйәбулатованың шәхесе теге быуатта ла иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Уның бер-бер артлы сығып торған китаптарына, Лев Толстойҙыҡына шикелле саманан тыш күп булмаһа ла, тейешле баһа бирелә барҙы. Юбилейҙары ла онотолманы. Шағирәнең ижады Муса Ғәли, Ҡадир Даян, Назар Нәжми, Ғайнан Әмири кеүек танылған ҡәләмдәштәрен генә түгел, Салауат Галин, Александр Макаров, Әхиәр Хәкимов, Ғайса Хөсәйенов кеүек билдәле ғалимдарҙы ла ҡыҙыҡһындырҙы һәм уның исемен Өфөнән Мәскәү юғарылығына алып сыҡты. «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»ның алтынсы томындағы (1996) монографик очерк иһә (уның авторы академик Ғайса Хөсәйенов) әҙибәнең тормош һәм ижад юлын мәңгеләштереп ҡуйҙы.

Әнисә Таһированың өҫтә телгә алынған мәҡәләһендә Кәтибә Кинйәбулатова ижадына яңысараҡ ҡараш ташланған, тиер инем. Анна Ахматова ижадына мөкиббән киткән Ә. Таһирова, рус шағирәһе менән башҡорт шағирәһенең биографияларында ғына түгел, бәлки уларҙың ижадтарында ла ҡайһы бер оҡшашлыҡтар һәм уртаҡлыҡтар таба. Ләкин «Шиғыр көҙө булмай...» тигән мәҡәләнең әһәмиәте һәм күҙгә бәрелеп торған өҫтөнлөгө, минеңсә, К.Кинйәбулатова шиғриәтендәге бығаса иҫкә алынмаған сифаттарға иғтибар йүнәлтелеүҙәлер. Өлкән ҡәләмдәшенең егәрлелегенә, шиғриәтенең эстетик кимәленә һоҡланып, мәҡәләнең авторы бындай һөҙөмтәгә килә: «... башҡорт әҙәбиәтенә ярты быуат хеҙмәт иткән Кәтибә Кинйәбулатова, шағирәләрҙән иң беренсе булып, башҡорт поэзияһын үҙенең саф, самими, шул уҡ ваҡытта ярһыу тойғоло лирикаһы менән классик юғарылыҡҡа күтәрҙе». (Һыҙыҡ өҫтөнә мин алдым. – *Ә.Х.*).

Бирелгән баһаның хаҡлығы һәм ғәҙеллеге шик тыуҙырмай. Быға ышаныу өсөн К. Кинйәбулатованың бөтә китаптарын аҡтарып ултырыу юҡ – юбилей айҡанлы «Ағиҙел»дең шул уҡ һанында баҫтырылған ун өс шиғыр, әйтерһең дә, Ә. Таһированың фекерен раҫлау өсөн һайлап алынған. Бында шуларҙың бер нисәһенә («Һағыш, һағыш», «Тағы төшкә индең», «Минән бәхетле юҡ», «Ҡайҙан белһен», «Көнбағыштар») күҙ һалайыҡ.

«Ҡайҙан белһен» тигән шиғыр тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойола. Хатта исеме лә бигүк шиғриәтсә яңғырамаған төҫлө. Шуғалыр, бәлки, тиҙ генә хәтергә лә һеңмәй. Әммә, елегенә төшөргә ниәтләп, уны ҡат-ҡат уҡыһаң, баштағы тәьҫорат әкренләп юҡҡа сыға. Шиғырҙың атамаһы йәнле кеше шәйенә индереп һүрәтләнгән сәскә миҫалында асыҡлана: яңы ғына ҡарҙан арынған уйым ерҙә башын ҡалҡытҡан сәскә, көтөп алынған яҙғы көндөң иртәнсәк йылы булыуын, ә төнгә ауышҡас, халҡынайыуын һәм шуның һөҙөмтәһендә таң атыуға шиңеп ҡалырын ҡайҙан белһен инде?! Шиғыр К. Кинйәбулатова стиленә хас йомшаҡ, күңелде иреткес тел менән яҙылған. Ошо бәләкәй генә әҫәргә ниндәй тәрән мәғәнә халынғанлығы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ:

Ҡайҙан белһен сабый – бер ҡатлылыҡ –
Яҙҙарҙың да уҫал көлөүен,
Нур балҡығас, һикергән дә баҫҡан,
Ихластыр, тип уның һөйөүе...
Ҡайсаҡ
Шулай итә яҙмыш кешене,
Асығауыҙ минең ишене...

Килтерелгән юлдарҙан күренеүенсә, сабыйға тиңләнгән сәскәнең аяныслы яҙмышы уның бер ҡатлылығы менән аңлатыла. Ә был сифат, башлыса, ихлас күңелле, яҡты уйлы, эскерһеҙ кешеләргә хас булыусан. Автор үҙе лә шундайҙар иҫәбендәлер, моғайын. Ләкин әҫәрҙең мәғәнәһе бының менән генә сикләнмәй. Көлөп, йылмайып, көн дә таң һарыһынан ҡалҡҡан яҙғы ҡояштың алдатҡыс икәнлеге халыҡ телендәге «Ялтыраған бөтә нәмә лә алтын булмай» тигән әйтемгә тап килә һымаҡ дабаһа. Иртән нур балҡыу менән тиҙерәк көнгә баҡҡан сәскәнең ҡылығы иһә (шиғырҙа һүҙ бешеү тураһында түгел, һыуыҡ тейеп быжыу хаҡында барһа ла) халыҡ телендәге икенсе әйтемде – «Ашыҡҡандың ауҙы бешкән» тигәнде хәтерләтә түгелме ни?

«Минән бәхетле юҡ» исемле шиғырҙың да халыҡ ижады традицияларынан үҫеп сыҡҡанлығы бәхәс уятмаҫ. Ҡыҫҡа ғына ошо шиғырҙың лирик героиняһы үтелгән тормош юлына еңелсә күҙ һирпеп алған һәм шул уҡ ваҡытта үҙенең ҡайһы бер характер үҙенсәлектәре менән дә уртаҡлашҡан. Һуңғы строфала иһә ул, артыҡ күп нәмәгә өмөт итмәйенсә, берҙән-бер теләген белдергән:

Бер бүреккә ике баш һыймай, тип
Әйтә ине бик йыш атайым.
Шуға, тим, мин теге донъяға ла
Йыр-моң менән генә ҡайтайым.

«Бер бүреккә ике баш һыймай» тигән һөйләм уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ. Ләкин бында уға иркенләп туҡтап тороуҙың әллә ни хәжәтен күрмәйем. Сөнки йөкмәткеһе менән ошоға тартым әйтемдең төрлө вариантарын халыҡ ауыҙ-тел ижадында йыш ҡына осратырға мөмкин. Ә бына «теге донъяға... ҡайтайым» һүҙбәйләнешенә ҡолаҡ һалһаҡ, яҙыҡ булмаҫ. Сөнки унда шағирәнең һүҙгә, һүҙҙең яңғырашына һәм мәғәнәһенә ҡайһылай һаҡсыл һәм иғтибарлы булыуы күҙгә бәрелеп тора.

Ғәҙәттә, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсеү тураһында һүҙ сыҡҡанда, теге донъяға китте тиеүсәндәр. Кәтибә Кинйәбулатова иһә «... теге донъяға ла йыр-моң менән генә китәйем» тимәй, ә «ҡайтайым», ти. «Йыр-моң менән генә ҡайтайым» тигән юл «Әйтә ине бик йыш атайым» тигән юл менән аралаш рифмалашҡан, дөрөҫөрәге – «ҡайтайым» һүҙе «атайым» менән ауаздаш. Әгәр автор «ҡайтайым» урынына «китәйем» тиһә лә әллә ни диссонанс булмаҫ ине: «атайым»дағы бер аҙ ҡалыныраҡ яңғыраған ялғау һәм «китәйем»дәге нәҙегерәк ялғау барыбер рифмалашалар бит. Ләкин ул ваҡытта һүҙбәйләнештең мәғәнәһе бер ни тиклем үҙгәрәсәк. Дин әһелдәре юҡҡа ғына «был донъяла беҙ ҡунаҡ ҡына», тимәйҙәрҙер. Ҡунаҡтан иһә, билдәле булыуынса, китмәйҙәр, ә ҡайталар.

К. Кинйәбулатованың халыҡ ижады традицияларынан оҫта файҙаланыуы уның башҡа шиғырҙарында ла һиҙелә. «Тағы төшкә индең»дә, мәҫәлән, халыҡ телендә киң билдәле «Әсә күңеле – балала, бала күңеле – далала» тигән мәҡәл яңы боролош алып, һис көтмәгән яҡтан асылып киткән: «Бала ҡайғыларын еңеләйтер әмәл юҡ шул» тип борсола баҡыйлыҡҡа күскән әсә, фанилыҡта ауырлыҡтар кисереп йәшәүсе ҡыҙын йәлләп.

Тәүге юлдары пейзаж лирикаһына оҡшап торған «Көнбағыштар» исемле шиғыр иһә халыҡ педагогикаһында быуаттар буйына тупланған хазинаны хәтерләтә. Таңды көн һайын аяғөҫтө ҡаршылаусы көнбағыштарҙы әхлаҡ ҡағиҙәләрен яҡшы үҙләштергән һәм уларҙы теүәл үтәгән инсафлы балаларға тиңләп, шағирә былай ти:

Уйлайым да һоҡланам мин
Бындай матур йолаларға,
Ата-әсәһен хөрмәт иткән
Аяғөҫтө балаларға.

Поэтик һүҙҙең алтын бәрәбәренә торорға тейешлеге хаҡында уйланғанда, К. Кинйәбулатованың «Һағыш, һағыш» тигән шиғырына ла туҡталмай мөмкин түгел. Ни бары ун һиҙеҙ юлдан торған был шиғыр – ысын мәғәнәһендә классик әҫәр юғарылығында. Уның тәүге строфаһы һәр ҡайһыһы үҙ аллы фекер белдергән дүрт һөйләмдән тора. Беренсеһендә лирик героиня торна тауышына һиҫкәнеп китә; икенсеһендә был тауыштың моңһоу ғына атҡан таң мәлендә ишетелеүенә ишара яһала; өсөнсөһөндә торна тауышы лирик героиняны тағы бер йәйҙең үтеп киткәнлеге тураһында иҫкәрткәндәй; дүртенсеһендә йыл да ҡабатлана торған ошо тауышты лирик героиняның йөрәге аша тыныс ҡына үткәреп ебәрә алмауы белдерелә. Строфа үҙ аллы мәғәнә белдергән һөйләмдәрҙән тора ла, шағирә уларҙы (икенсеһе менән дүртенсеһен) рифмалаштырыу сараһын да күргән. Торна тауышына һиҫкәнеп киткән лирик героиня шиғырҙың икенсе строфаһында үҙенең шул мәлдәге эске кисерештәре менән бүлешә. Артабан инә ул, алап һалып ат өркөтмәйсә генә, илдә барған хәл-ваҡиғаларға ҡарашын белдереп ала.

Әлбиттә, күпме генә тырышһаң да, теләһә ниндәй шиғырҙы ла аҙағына тиклем бөтә нескәлегендә асып һалыу еңелдән түгел. Бәлки, мөмкин дә түгелдер. Өҫтәүенә, поэтик әҫәрҙе аңы-зиһене менән ҡабул иткәндә, һәр уҡыусының үҙ үлсәме лә була бит әле. Уны ла оноторға ярамайҙыр. Шуға күрә «Һағыш, һағыш»ты талапсан, юғары зауыҡлы һәм зирәк аҡыллы уҡыусы үҙ күҙҙәре менән күрһә, хәйерлерәк булыр, тинем һәм уны бында тулы килеш күсерергә ниәтләнем:

Һиҫкәндем мин торна тауышына.
Тонйорап ҡына атҡан таң мәле.
Үттеләрме икән был йәйҙәр ҙә...
Йөрәгемде ялҡын ялманы.

Әй, һин, торна, торна, торнаҡайым,
Шып-шым ғына осһаң ни була,
Тағы ҡалдым яңғыҙ... япа-яңғыҙ,
Күҙҙәремә ҡайнар йәш тула.

Таң да атты,
Һеҙ киттегеҙ алыҫ.
Һауаларҙа ҡалды
тауыш, тауыш...
Тауыш ҡына булһа бер хәл ине,
Ерем үкһей...
Һуғыш, ҡарғыш...
Йәндәремде өттө бөтәһе лә:
Һағыш, һағыш...
Йөрәгемдә мәңге дауыл – алыш.

Туҡһан йәше тулаһы йылға аяҡ баҫҡанда, К. Кинйәбулатова «Ғүмер түгел, бер көн үткәндәй...», «Мин мин түгел...», «Кил һин миңә!», «Уҙған ғүмер», «Мөхәббәт», «Тормошта мин ябай кеше» тигән шиғырҙарын («Ағиҙел», 2010, 1-се һан) бүләк итте ҡәҙерле уҡыусыһына. Улар ҡәҙимгесә йыйнаҡтар, йөкмәткелеләр, фәһемлеләр. «Тормошта мин ябай кеше» тигән шиғырҙағы бынауы юлдарҙа шағирәнең бар булмышы сағылғандай:

Ниҙә тапҡыр, нисә ҡабат инде
Әсәй, өләсәй мин – һөйөнөс!
Тик ғүмерҙәр һыуҙай аҡты китте,
Ғүмер үтеүҙәре – көйөнөс.

Юбилейҙың көнө-сәғәте еткәндә (2010, сентябрь) «Ағиҙел» журналы илленсе йылдар башындағы хеҙмәткәренә артабан да иғтибарһыҙ ҡалманы: «Зая түгел ғүмер...» тигән баш аҫтында К. Кинйәбулатованың ун алты шиғырын берләштергән шәлкем баҫтырып сығарҙы. Арала, артыҡ күп булмаһа ла, Яңы быуат башына ҡарағандары ла бар («Китә инде кеше», «Яҡын дуҫым», «Әй, ғүмеркәйҙәрҙең үтеүҙәре»). Бында уларҙы тәпсирләп тикшереп тормайынса, шуны әйтеү менән генә сикләнмәксемен: шиғырҙар, әүәлгесә, ыҡсымдар (шәп шиғыр бик оҙон булмай ул!), әҙ генә һүҙ менән тос фекер, тәрән мәғәнә белдереүгә ҡоролғандар

Белмәйем, йәш аралары бик ҙур булмағанға күрәме, әллә бер заманда, бер мөхиттә тыуып-үҫеп, бер төрлөрәк ғаилә тәрбиәһе алдылар микән, Кәтибә Кинйәбулатованың тормош һәм ижад дәүерендәге ҡайһы бер хәл-ваҡиғалар һәм күренештәр Фәниә Чанышеваныҡына ла хас

кеүек. Икеһенең дә хеҙмәт юлдары мәктәптә балалар уҡытыуҙан башланған һәм был хеҙмәттең ҡайһылай ҙа ауыр, яуаплы икәнлеген улар кеше ауҙынан ишетеп түгел, ә үҙ елкәләрендә татып белгәндәр, йөрәктәре аша үткәргәндәр. Икеһе лә әҙәби ижадҡа ныҡлап тотоноҙған алда, журналистика ҡаҙанында ҡайнап алғандар һәм был ике йөктө уларға байтаҡ ҡына йәнәш тартырға тура килгән. Икеһе лә шиғриәтте лә, прозаны ла берҙәй үҙ иткән әҙибәләр улар һәм шуға күрә уларҙың ижад багажында ошо ике төрҙөң һыйышып йәшәүе һис тә ғәжәп түгел.

Биобиблиографик белешмәләрҙә бирелгән баһаламаларҙан күренеүенсә, был ике әҙибәнең поэтик алымдарында ла ҡайһы бер яҡынлыҡ һиҙелә. М. Ғәйнуллин менән Ғ. Хөсәйенов төҙөгән «Совет Башҡортостаны яҙыусылары» тигән белешмәлә (Өфө, 1988), мәҫәлән, «Бала нур» поэмаһында Кәтибә Кинйәбулатова төп героиняның «өмөт ҡатыш ғазаплы кисерештәрен әсәләргә хас нескәлек һәм сабырлыҡ менән таусир итте» (192-се бит), тиелһә, шул уҡ белешмәлә Фәниә Чанышеваның «шиғырҙары әсәлек һөйөүе, тәрән лиризм тойғолары менән һуғарылған. Ул бөтә донъяға, халҡының үткәненә һәм киләсәгенә, донъялар именлегенә әсә күҙе менән баға, барыһын әсә күңеле һиҙгерлеге менән тоя» (362-се бит), тиелә.

Өҫтәп, тағы шуны әйтергә була: Кәтибә Кинйәбулатованыҡы шикелле, Фәниә Чанышеваның да шиғриәте тышҡы ябайлығы, йөкмәткелелеге, халыҡсанлығы менән айырылып тора. Был шиғриәткә ауыҙ-тел ижады яһаған йоғонтоно ла шәйләмәй мөмкин түгел. Етмеш биш йәшлек юбилейын билдәләгәндә (2001, сентябрь), «Ағиҙел» журналы уҡыусыға шағирәнең ун шиғырын тәҡдим итте. Шулар араһында «Ниҙәр күреп, ниҙәр кисерелде...» тигәне лә бар. Әҫәрҙең исемендә үк авторҙың ҙур юл үтеп, байтаҡ тормош тәжрибәһе туплағанлығы ярылып ята. Шиғыр лирик героиняның уҙған ғүмер тураһында уйланыуҙарына ҡоролған. Уның ифрат тыйнаҡ, баҫалҡы, намыҫлы кеше икәнлеге әллә ҡайҙан күренеп тора. Һүҙҙәрендә тамсы ла һауалылыҡ, ялған тәкәбберлек, мин-минлек һиҙмәҫһең. Киреһенсә, ул халҡы алдында, ата-әсәһенең яҡты иҫтәлеге, ейән-ейәнсәрҙәре, дуҫтары алдында ҙур яуаплылыҡ тойғоһо кисереп йәшәй. Ете строфанан торған был шиғыр түбәндәге юлдар менән тамамлана:

Ниҙәр күреп, ниҙәр кисерелде,
Ниндәй юлдар менән йөрөлдө?

Һорау арты һорау, йәнде игәй,
Борсолоуҙар биләй күңелде.

Аҡ, ҡараға дөрөҫ урын биреп,
Айырҙыммы хаҡты ялғандан?
... Шик-шөбһәләр үҙем менән китер,
Баһа бирер ерҙә ҡалғандар.

Кәтибә Кинйәбулатованың «Тағы төшкә индең», «Минән бәхетле юҡ», «Көнбағыштар» исемле шиғырҙары һымаҡ, Фәниә Чанышеваның да «Беҙҙән уҙҙы, һеҙгә етәсәк», «Әсә хаты» тигән шиғырҙары ғәжәп халыҡсан яңғырай. Улар формалары менән дә бик үҙенсәлекле. Тәүгеһе – лирик героиня менән уның гүр эйәһенә әйләнгән ата-әсәһе араһындағы диалог. Шиғыр ифрат матур тел менән яҙылған. Ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, әҫәрҙең төбөндә шаҡтай тәрән тормош фәлсәфәһе ята. Ул лирик героиняның һорауына ата-әсәһе ҡайтарған яуап рәүешендә асып һалынған. Яуаптың нигеҙендә иһә халыҡ аңы, халыҡ аҡылы ятҡанлығы шик тыуҙырмай.

– Тирә-йүнгә ҡарап фекер йөрөт,
Өлөшөңә, балам, шөкөр ит.
Йәшәйешең булһын мөбәрәк,
Донъя ҡасан булған тыныраҡ?

Йәшәү – ләззәт хайран ҡалырлыҡ,
Йәшәү – ғазап ғибрәт алырлыҡ,
Беҙҙән уҙған – һеҙгә етәсәк,
Юлдаш булһын күркәм сабырлыҡ!

Был һүҙҙәргә ни тиклем тәрән фекер төрөлгәнлеге хаҡында һүҙ ҡуйыртып тороуҙың кәрәге юҡтыр. Әйткәндәй, «Әсә хаты» тигән шиғыр ҙа ошоға тартым. К. Кинйәбулатованың «Көнбағыштар»ы кеүек, унда ла халыҡ педагогикаһы ынйылары йымылдап ята. Һигеҙ строфаның ҡайһыһын ғына алып ҡараһаң да, уны тыныс ҡына, күңел ҡылдарыңа ҡағылмай ғына уҡып үтерлек түгел. Шуларҙың береһен генә килтерәм:

«Ҡош телендәй генә хәбәр көтәм,
Мохтажлығым – бары хаттарҙа.

Көнөм түгел, төндәрем дә нурлы
Һеҙҙән хәбәр килгән саҡтарҙа.»

Ишетеп тә, уҡып та белеүемсә, һуңғы осорҙа Ф. Чанышева күберәк хәтирәләр, әҙәби портреттар яҙыу менән мәшғүл. Бәлки шуғалыр ҙа, Яңы быуатҡа күскәс, уның ижад баҡсаһында шифриәткә урын ҡыҫыла төштө һымаҡ. Был хәл шағирәнең сираттағы юбилейын (2006, сентябрь) билдәләгәндә лә үҙен һиҙҙермәй ҡалманы: «Ағиҙел» журналы уның бер нисә яңы һәм бер нисә элегерәк ижад ителгән әҫәрҙәрен биреү менән генә сикләнергә мәжбүр булды. Ләкин бының менән мин шағирәне нимәләлер ғәйепләргә, уның абруйын төшөрөргә йыйынмайым. Хәтирәләр, ижади портреттар беҙгә һай нисек кәрәк! Уларҙы Фәниә Чанышева кеүек әҙибәләр яҙмай кем яҙһын! Яҙмыш уға һирәктәргә тейә торған (рус әҙәбиәтендәге Дмитрий Мережковский менән Зинаида Гиппиус, Анна Ахматова менән Николай Гумилевтарҙыҡына оҡшашыраҡ) ижади ғаилә коморға насип иткән бит: тормош юлдашы, шағир һәм ғалим, Ғилемдар Рамазанов менән бергәләп, улар бөтә ғүмерҙәрен башҡорт әҙәбиәтенә тоғро хеҙмәт итеүгә бағышланылар. Ф. Чанышеваның «Педагогик уйланыуҙар», «Арҙаҡлы замандаштар», «Онотолмаҫ осрашыуҙар», «Иҫтәлектәр» тигән бүлектәрҙе эсенә алған «Замандаштар» (Өфө, 2009) исемле китабы минең фекеремде раҫларҙай факт булып тора ала. Был китап Сәйфи Ҡудаш менән Сәләх Кулибай яҙып ҡалдырған һәм уҙған быуаттың егерменсе-ҡырҡынсы йылдарында башҡорт әҙәбиәте майҙанындағы йәнле лә, һағышлы ла күренештәрҙе сағылдырған иҫтәлектәренә, әҙәби портреттарына үҙенсә бер йәм өҫтәне, тиергә мөмкин.

Теге быуатта нисегерәк булғандыр, бының һында Ф. Чанышева ташҡа баҫылған һәм уҡыусы хазинаһына әйләнгән ҡайһы бер әҫәренә «ҡәләм төртөп» тә алғылай (был ғәҙәттең, ҡызғанысҡа ҡаршы, бүтән шағирәләребеҙгә һәм шағирҙарыбыҙға ла хас икәнлеге хаҡында элегерәк тә һүҙ сыҡҡылап ҡуйғайны инде): йә шифырҙың исеме үҙгәрә; йә уның берәй юлы икенсе төрлөрәк яңғырай; ҡайһы берҙә шифырҙың исеме, хатта тотош строфаһы ла төшөп ҡалғылай, йәиһә бер строфаны башкөлләй яңы строфа алмаштыра. Бында ошондай үҙгәртеүҙәргә дусар ителгән шифырҙарҙың исемдәрен атап тормайым, сөнки уларҙы автор үҙе яҡшы белә. Ә бына «Шифриәт – ул намыҫ, выждан иле» тигәненә (исеме лә, юлдар ҙа бер аҙ үҙгәртелеп, бер строфа бөтөнләй төшөрөп ҡалдырылһа ла) туҡтап китһәк, насар булмаҫ.

Иң тәүҙә «Шиғриәт – ул намыҫ, выждан иле»н шағирәнең яҙмышнамәһе, тип, һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтер инем. Сөнки унда авторҙың бөтә булмышы күҙ алдына килтереп баҫтырылған:

Әсә һөтө, бишек йыры менән
Йырҙар һеңгән минең күңелгә.
Йылдар үткәс кенә, ҡыйыр-ҡыймаҫ
Атлап индем шиғыр иленә.

Артыҡ сағыу булмаһа ла, күптәр
Ихласлығын тойҙо йырымдың.
Ләкин байрамдарҙа, майҙандарҙа
Күләгәлә минең урыным.

Өҫтә телгә алынғанса, Фәниә Чанышева был әҫәрендә лә шағирә генә түгел, бәлки ерҙә йәшәүҙең әхлаҡи-этик нигеҙҙәрен яҡшы ҙәләштергән, шуларға инанған оло йәнле аҡыллы педагог та булып сығыш яһай. Шиғриәт уның өсөн – «намыҫ, выждан, иман иле». Бер баҫылып сыҡҡан әҫәренә яңынан әйләнеп ҡайтып, уға ара-тирә «ҡәләм төртөүе» лә шунан килмәй микән? Ижад өлкәһендә һирәк-мирәк булһа ла күренгеләп-һиҙелгеләп ҡалыусан тыйнаҡһыҙлыҡҡа, илтифатһыҙлыҡҡа, инабатһыҙлыҡҡа тыныс ҡала алмауы ла, бәлки, шуның менән аңлатылалыр?

Үҙ-үҙеңде нисек күрһәтергә
Өйрәнергә мөмкин йәштәрҙән,
Шиғриәттең бөйөклөгөн аңлап,
Алыҫ торам ундай хәстәрҙән.

Кәрәк микән, шөһрәт ҡаҙанам тип,
Терһәк менән ярып йөрөүҙәр?
Ғәҙелһеҙлек менән дан көҫәүҙәр,
Бөйөк булып йәшәй белеүҙәр?

Шағирәнең әхлаҡ ҡағиҙәләре, кешелеклек сифаттары хаҡындағы уйланыуҙары уның өс кенә строфанан торған «Ғүмер юлы гел һынауҙар икән...» тигән шиғырына ла күскән:

Сабырлыҡҡа, сыҙамлыҡҡа һынау,
Дуҫлыҡ, тоғролоҡҡа тиһеңме...
Ауырыу, ғәйбәт, хыянаттары ла
Гелән һынап тора кешене.
Мин дә үттем тормош һабаҡтарын,
Булыр әле улар тағы ла.
Һынауҙарҙың иң ауыры икән
Баш эйеүҙәр түбән йәнлегә.

Әле һүҙ барған шиғырҙарға ҡарап, Ф.Чанышева гел үҙенең күңел донъяһында ҡаҙына икән, тип уйларға ярамай, әлбиттә Аҫыл зат илдә барған хәл-ваҡиғаларға ла битараф түгел. Шуныһы ҡыҙыҡлы: көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларға битарафһыҙлығын белдергәндә лә, ул барыбер ҙә ҡатын-ҡыҙ булып ҡала. «...Кемдер күккә аша» тигән шиғыр был йәһәттән айырыуса үҙенсәлекле. Унда бындай юлдар бар:

Күрер күҙгә байлыҡ, муллыҡ та бит. . .
Ялтыр биҙәктәрҙән күҙ ҡамаша.
... Кемдер түбән теклəп ҡулын һуҙа,
Кемдер байып шаша, күккә аша.

Әй болғаһа донъя, әй тулғана,
Тормошобоҙ, ғүйə, бер тамаша.
Һиллек, именлектəр көтə-көтə,
Ғүмерҙəрҙең һуңы яҡынлаша.

Бөтә ғүмерен тиерлек журналистикаға арнаған шағирə Әлфинур Вахитова Яңы быуатта «Ағиҙел» биттəрендə бер генə тапҡыр (2001, 11-се һан) күренеп ҡалды, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Уны сираттағы юбилейы менəн ихлас ҡотлап һəм ижади уңыштар теләп, журнал редакцияһы үҙ уҡыусыларына шағирəнең «Ирекле ҡош мин үҙ илемдə...» тигəн шəлкемен тəҡдим итте. Шəлкемдə шиғырҙар һаны əллə ни күп түгел – алтау ғына, ләкин, шуға ҡарамаҫтан, улар авторҙың ҡайһы бер стиль үҙенсəлектəрен бер ни ҡəҙəр самаларға мөмкинлек бирə. Əгəр «Күк ҡабағы асылдымы шулай...» образлы фекерләү ҡеүəһенең ярайһы уҡ көслө булыуын күрһəтеп торһа, «Кəрешкəм һин минең, кəрешкəм...» иһə фекер тəрəнлеге, рифмалар теүəллеге менəн айырыла. «Йырға күчһə...» менəн «Ярһымасы, йөрəк!»тəге лирик

героиняның уйланыуҙарында шағирәнең үҙ донъяһы, үҙ халәте сағылғанға оҡшай. Әйтәйек, «Йырға күсһә...»ләге бына был юлдарҙа:

Барыр юлым яҡты, маҡсат асыҡ,
Ирекле ҡош – мин үҙ илемдә.
Ә ниңә һуң баш эйелгән түбән,
Болот китмәй һаман күңелдән?

Ҡайғым да юҡ кеүек, ғәйебем дә,
Ә ниңә һуң юлда кәртәләр?
Яулаясаҡ үрҙәр һәм табыштар
Башҡаларҙы, ахыры, көтәләр...

Күккә ҡарап йөрөмәгән өсөн,
Меҫкен, тиә күрмә, эй, кешем.

Ҡыҫыр башаҡ ҡына ғорур була,
Минең әшләйәсәк күп эшем.

«Ярһымасы, йөрәк!»тә лирик героиняның (шул иҫәптән, авторҙың-далыр, бәлки) характер үҙенсәлеге, холоҡ-фиғеле уғата ла сағыуыраҡ итеп асып һалынған. Тынғыһыҙ йөрәгенә ризаһыҙлығын белдереп, ул бына нимә ти:

Минең ҡайғыларым һис иш түгел,
Кем өсөн ул йәшәй донъяла?
Кеше ҡайғыһына көйәләнә,
Кеше яраһына һыҙлана.

Төндө генә түгел, бер файҙаһыҙ
Уткәрәмен күпме көндәрҙе.
Уйым менән бар ғаләмде байҡап,
Эҙләп китәм әллә кемдәрҙе.

Аҡылымды эшкә бәйләйемсе,
Ярһымасы шулай, йөрәгем.
Һин түгел дә күктән төшкән ҡояш,
Мин түгел дә донъя терәге.

Әлфинур Вахитова – ете китап авторы. Улар башлыса балалар өсөн яҙылған шиғырҙарҙан ғибәрәт. Шуғалыр ҙа, бәлки, күләмдәре йәһәтенән бик ҙур түгелдәр. Әле бына «Йырға күсһә...» менән «Ярһымасы, йөрәк!»те бирелеп уҡып ултырам да, үҙемсә уйлап ҡуям: йөрәк майыңды һурып, бауыр итеңде кимерә торған журналистлыҡ хеҙмәте Әлфинур Вахитованың тәбиғәттән килгән талантын бөтә тулылығында асылып китергә ҡамасаулаған сәбәптәрҙең береһе булманымы икән? Хәйер, барлай башлаһаң, ундайҙар беҙҙең шиғриәттә лә, башҡа халыҡтарҙыҡында ла бер ул ғына түгел: ҡатын-ҡыҙҙар шиғриәтендә лә, ир-аттарҙыҡында ла.

3

Өҫтә, Кәтибә Кинйәбулатова хаҡында һүҙ барғанда, Әнисә Таһированың да исеме телгә алынғайны. Үҙенән өлкәндәргә ул, ысынлап та шулай иғтибарлы булды. Уның Рәғиҙә Янбулатова тере сағында магнит таҫмаһына яҙҙырып, зәңгәр экран аша күрһәткән телевизион очеркы әле лә күҙ алдында. «Ағиҙел» биттәрендә Фәниә Чанышеваға арнап әйтелгән йылы һүҙҙәре лә хәтерҙә. Мин ишетмәй-күрмәй ҡалғандары ла булыуы бик ихтимал. Ләкин был бүлектә мәҡәләләр, ижади портреттар авторы Таһирова түгел, ә шағирә Таһирова күҙ уңында тотола.

Әнисә Таһированың ижади биографияһы уҙған быуаттың етмешенсе йылдарынан башлана. Бөгөн ул егермеләп китап авторы («Егермеләп», тиеүҙең үҙ сәбәбе бар. Әҙәби хужалығыбыҙға беҙ нишләптер битарафлыҡ күрһәтәбеҙ һымаҡ, сөнки теге йәки был яҙыусының йәиһә шағирҙың ижады менән ныҡлабыраҡ ҡыҙыҡһына башлаһаң, уның тураһында төрлө сығанаҡта төрлө белешмәгә тап булаһың. Бынан байтаҡ йылдар элек Ә. Таһирова ижадын тикшереүгә арналған «Йырым менән донъя яҡты» тигән мәҡәләмдә уңайһыҙыраҡ хәлгә тарып ҡуя яҙғайным, шуға күрә был юлы һаҡлыҡ күрһәтергә булдым.)

Яңы быуатты Әнисә Таһирова сонеттар шәлкеме менән асып ебәрҙе. («Ағиҙел», 2001, 1-се һан). Шәлкемгә ун биш сонет тупланған. Ләкин уларҙың бөтәһе лә теге быуатҡа ҡарай. Шағирәнең яңы быуатта яһалған яңы аҙымдары иһә уның түңәрәк юбилейы айҡанлы донъя күргән «Баш эйәм тик шиғыр ҡаршында» («Ағиҙел», 2001, 12-се һан) тигән шәлкемдән башлана. Тәбиғи, юбилей булғас, унда элегерәк ижад

ителгән әҫәрҙәр ҙә осрай. Яңыларҙан иһә «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...», «Йәшлек баҡсаһы», «Йыһан гөлө», «Дан», «Аҫылташтар тулы аҡ карабым...», «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...»де күрһәтергә мөмкин. Ә бына «Хәтер йәшәй миндә...» («Ағизел», 2002, 11-се һан) тигән шәлкем яңы әҫәрҙәрҙән тора. Артабан шағирә «Тәңре нуры», «Һүҙ», «Сихриәтле, яңы йыр сорнаны...», «Яңы йыл шиғыры», «Аҡ гөрләүек», «Селтәр ситле япрағына ятып...», «Төн уртаһында тыуған шиғыр» тигән шиғырҙары («Ағизел», 2003, 3-се һан), «Шағир булмышында – илаһилыҡ...» («Ағизел», 2006, 12-се һан), «Моң өҫтәлә сазым ҡылында...» («Ағизел», 2007, 9-сы һан) тигән шәлкемдәре менән сығыш яһаны журнал биттәрендә. Әйтергә кәрәк, ул әүәлгесә сонетҡа ла хыянат итмәй – һирәк-мирәк булһа ла улары ла күренгеләп тора. Аллитерация һымағыраҡ яңғыраған «Әнисә сонеттары» тигән баш аҫтында киң күләмле һәм тәрән йөкмәткеле үҙаллы мәҡәлә яҙырға ла ваҡыттыр инде хәҙер.

Ә. Таһированың быуат башындағы шиғриәтенә күҙ ташларҙан алда, уның теге быуат ахырындағыһын бер аҙ ғына булһа ла хәтергә төшөрөп китке килә. «Йөрәк йәдкәре» (1996) исемле китабына ингән байтаҡ ҡына шиғырҙарында ул тормошта, шул иҫәптән, ижад өлкәһендә лә осраштырып торған һәр төрлө ғәҙелһеҙлектәрҙе, намыҫһыҙлыҡтарҙы, ялағайланыуҙарҙы фашлай, бындай кире күренештәрҙе һис кенә лә үҙ итмәй. «“Бермуд өсмөйөшө”ндә ҡалыусы ҡәләмдәштәремә асыҡ хат» тигәне теленең үткерлеге һәм зәһәрлеге менән әле булһа үҙенең бәҫен юғалтмай, сөнки «йылтыр күҙле йылтыр әпкәләйҙәр», «төрлө төлкөбайҙар, әфәнделәр» һаман да беҙҙең арала йәшәп яталар һәм йылы урындарын тиҙ генә ташлап китергә йыйынмайҙар.

Шағирәнең ошоға тартым халәте уның өҫтә телгә алынған сонеттар шәлкеме айҡанлы әйтелгән инеш һүҙендә лә сағылып киткән. «Донъяны, – тиелә унда, – кәсепселәр баҫып алды. Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһында ла ялған матурлыҡ күҙҙе сағылдыра, китап кәштәләрендә ялтыр тышлы, йөкмәткеһеҙ яҙмалар тупланған китап ишараттары тулып ята. Ләкин, минең уйымса, былар үтер, ысын сәнғәт, юғары зауыҡ менән яҙылған әҫәрҙәр үҙ урынын алыр». («Ағизел», 2001, 1-се һан).

Бик уҫал яңғыраған был һүҙҙәр миндә Ә. Таһированың элегерәк яҙылған «Зәйнәб Биишева апайҙың әйткәне» тигән сонетын яңыртып ҡуйҙы. Сонеттың тәүге строфаһы бына былай:

Мин фәрештә түгел, кеше инем,
Ерҙә кеше булып йәшәнем.
Хаҡһыҙлыҡты күрһәм, ярып әйттем,
Йәшен булып яршып йәшнәнем.

Күреүебеҙсә, сонеттың авторы, З. Биишева шәйенә инеп, уның характерына, йәшәү принцибына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе ярайһы ғына оҫта һәм ышандырырлыҡ итеп асып һалған. Әгәр поэтик әҫәрҙәрҙең лирик геройҙары менән уларҙың авторҙары араһында күпмелер оҡшашлыҡ һәм уртаҡлыҡ йәшәүсән, тигән фекерҙән сығып уй йөрөтһәк, З. Биишева менән Ә. Таһированың да тормошҡа, әҙәбиәткә ҡараштарында ниндәйҙер яҡынлыҡ барҙыр, бәлки. (Был ике шағирәнең матбуғат биттәрендә күренеп ҡалған хатлашыуҙары ла минең фаразды ҡүәтләй һымаҡ.)

Әнисә Таһированың теге быуат ахырындағы ижадында һиҙелерлек урын биләп торған саялыҡ һәм зәһәрлек күүек сифаттар, яңы быуатҡа күскәс, бер аҙ кәмей төштө күүек. Бының сәбәбен бер һүҙ менән генә аңлатып биреүе ҡыйын, әлбиттә. Бәлки, бер балыҡ башын күпме сәйнәһәң дә, фәтүә сыҡмаҫ, тип, бер аҙ төшөнкөлөккә лә бирелеп ҡуйыуҙандыр. Бәлки, яңы быуатҡа сыҡҡас, ҡояш уға икенсе төрлөрәк ҡарай башлағандыр. Бүтән сәбәптәр ҙә булыуы ихтимал. Әлегә иһә шуны әйтергә була: һуңғы йылдарҙа шағирә күберәк үткән һәм ҡалған ғүмер тураһында уйлана һымаҡ. Яңы быуаттың тәүге йылында, хатта тәүге айҙарында уҡ ижад ителгән «Дан», «Йәшлек баҡсаһы», «Аҫылташтар тулы аҡ карабым...», «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...» тигән шиғырҙар һәм «Йыһан гөлө», «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...» тигән сонеттар шундай фекер тыуҙыра.

Әгәр «Дан» тигән бәләкәй генә әҫәрендә шағирә, Ерҙә йәшәгәндә дандарҙың ниндәй төрҙәре булыуын һәм уларға нисек ирешергә мөмкинлеген иҫбатлап, «Тик уйлаһа дан килергә, йондоҙ булып килһен миңә! Мин китермен мәңгелеккә. Ә ул балҡып ҡалыр күктә» тигән теләген белдерһә, «Яҙғы күкрәү булып күкрәмәнең...»дә иһә лирик героиня «ғүмер буйы йондоҙ ямғырҙарын» күңелендә һаҡлап йөрөтһә лә, ахыр сиктә уның тик «ымһындырғыс яңғыраҡ» ҡына булыуына үкенесен белдерә. «Йыһан гөлө» менән «Ғүмер йомғағымды һүтеп бөткәс...»тә лирик героиняның хәле башҡасараҡ: ул, сонет жанры талаптарына ярашлы рәүештә, Ерҙәге дан-шөһрәттәргә артыҡ иҫе китмәйенсә, ғаләмдәргә ашып, сикһеҙ ғәрештәрҙә осоп

йөрөгән изге һәм саф йәндәр араһында үҙен иркенерәк тә, бәхетлерәк тә итеп тоя.

Алты строфанан торған «Йәшлек баҡсаһы» тигән шиғыр ҙа яҙылышы менән бик матур. Ул халыҡ шағиры М. Ғафуриҙың яҡты иҫтәлегенә бағышланған. Минең аңлауымса, шиғырҙың исеменә ике төрлө (тура һәм күсмә) мәғәнә һалынған. Һәм ошо ике төрлө мәғәнәне аралаш файҙаланып, автор, яйлап ҡына, быуындар күсәгилешлеген һүрәтләүгә ирешкән:

... Килер яңы быуын.
Тынмай сыңлар
Ғафуриҙың хисле, аҡ сазы.
Һәр саҡ йәшлек гөлбаҡсаһы булыр
Ғафуриҙың йәшел баҡсаһы!

Лирик героиня, баҡсалағы ул яратҡан һуҡмаҡтарҙан ҡасандыр Ғафури менән Туҡайҙың бергә атлауын күҙ алдына килтереп, ике халыҡтың тоғро ике улына бындай баһаһын бирә:

Шиғриәттең ике саф йондоҙо,
Ғорурлығы ике милләттең!

Тик ошо урында кескенә бер һорау тыуып ҡуя: Әнисә Таһирова күҙ алдына баҫтырған картина Сәйфи Ҡудаштың «Яҙҙы ҡаршылағанда» тигән повесында тасуирланған хәл-ваҡиғаларға тап киләме икән?

Әйткәндәй, Әнисә .Таһированың күңел түрендә бөгөн бер Ғафури ғына түгел. «Яҡты күңеледә һинең булған...», «Аҡ гөрләүек», «Шиғырҙарың төҫлө затлы инең», «Ҡаплай алмаҫ», «Миәссәр Басировтың ҡәбере янында», «Ҡайтмаҫһың шул...» тигән әҫәрҙәрендә, мәҫәлән, ул Хәй Мөхәмәтйәров,Рафаэль Сафин, Муса Ғәли, Зөлфәр Хисмәтуллин, Миәссәр Басиров, Рәшит Назаров кеүек ҡәләмдәштеренең һәм замандаштарының яҡты образын һынландырған, уларҙың һәр ҡайһыһына хас кешелек сифаттарын һәм ижад үҙенсәлектәрен асып һалырҙай тәғәйен һүҙ тапҡан.

Һүҙ, тигәндән, Ә. Таһированың ошондай исемле бер шиғыры ла бар. Уны энәһенән ебенә хәтлем тикшереп, бәҫен ебәрмәҫ өсөн, күңелгә нығыраҡ ятҡан бер нисә строфаны бында күсереү менән генә сикләнһәк, хәйерлерәк булыр:

Иң тәүҙә һүҙ булған.
Һәр бер һүҙҙең
Бар үҙ мәғәнәһе, үҙ сере.
Һүҙ баһаһын белгән тел маһиры
Тоямы һуң бөгөн ҡәҙерҙе?

. . . . . .

Һүҙе аҫылдарҙың – халҡы аҫыл,
Буш һүҙ осһоҙлата халыҡты.
Бәҫле һүҙҙәр менән һаҡлап була,
Яҡлап була ирек, хаҡлыҡты.

. . . . . .

Иң тәүҙә һүҙ булған.
Һүҙ ҡөҙрәтен
Быуа алмай ерҙә бер көс тә,

Һүҙ, тел йәшәгәндә, халыҡ йәшәр,
Һүҙ ул – йәшәү бирер Йәнешемә!

Шуныһы мөһим, Ә. Таһирова һүҙҙең бәҫен һаҡларға өндәп кенә ҡалмай – һүҙгә ҡарата белдергән ҡараштарын һәм юғары талаптарын үҙенең ижад практикаһында ла мотлаҡ тормошҡа ашырырға тырыша. Яңыларҙан иҫәпләнгән «Үткән йылдар – көмөш ҡыңғырауҙар...», «Был һарайҙа күпме матурлыҡ бар...», «Йылдар үткәс...», «Петрарканы күрҙем төшөмдә...», «Ғаләмдәрҙән ҡайтмай тауышың», «Яңы йыл шиғыры», «Селтәр ситле япрағына ятып...», «Ер алиһәләре», «Яралы ай», «Һинең күҙҙәрең», «Аҡҡош ҡайтты», «Мин йәшәйем әле!», «Яҙҙым исемеңде...», «Төштәрем дә үкенесле хәҙер...» тигән шиғырҙар, минең ҡарашымса, быға асыҡ дәлил булып тороролоҡ. Маҡсат итеп ҡуйһаң, уларҙың һәр ҡайһыһында ынйы бөртөктәре кеүек йымылдаған һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе күпләп табырға була. Бында шуларҙың бер нисәһен күрһәтеп китергә лә мөмкин: «Елберләшеп оса алһыу таждар, болоҡһотоп нескә күңелде»; «Сағыу шатлыҡ ҡунһын түрҙәреңә, сағыу шатлыҡтарҙың туты юҡ»; «Утта өшөп, һыуҙа янырһың, һағышлы уй тулыр башыңа...»; «Ергә, күккә, болоттарға бағам, баҫыр өсөн йөрәк һағышын»; «...Иҫке йылдың нуңғы аҡ ҡарҙары күңелемде ҡабат көйрәтте»; «Булмышыңдан һелкеп ташлап булмай йылдарыңдың һалған эҙҙәрен»; «Аҡҡош аҡлыҡтары йыуһын юшҡындарҙы күңелдән»; «Сыңрау торна булып йырым осто,

ҡаурыйҙарын түгеп эҙемә»; «Исемеңде йөрәгемә яҙҙым йәшлек гөлөм сәскә атҡанда», һ.б.

Өҫтәрәк, Ә. Таһирова шиғриәтенә хас саялыҡ һәм зәһәрлек, яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, бер аҙ кәмей төштө, тигәйнем. Кәмей төшһә, бәлки, төшкәндер, әммә бөтөнләйе менән юҡ булманы. «Шағир һүҙе кәрәк Рәсәйгә», «Дауаханала тыуған уйҙар», «Бөйөк Рәсәй – Тәңре биләмәһе...», «Йөк», «Таң алдынан күргән төш» кеүек шиғырҙарҙан, мәҫәлән, шул уҡ саялыҡ, шул уҡ зәһәрлек бөркөп тора, тиергә мөмкин. Дүрт строфанан торған «Шағир һүҙе кәрәк Рәсәйгә»нең тәүге строфаһында, әйтәйек, автор, уҡыусы менән кәңәш тотҡандай итеп, уның алдына шундай һорау ҡуя:

Шағир һүҙе, шағир күҙе бөгөн
Кәрәк микән бөйөк Рәсәйгә?
Күгенән ваз кискән күңелдәр бар,
Оҡшаш улар тоҡсай-кәсәгә.

Ә һуңғы строфала уға үҙе үҡ яуап ҡайтара:

Шағир һүҙе, шағир күҙе бөгөн
Бик тә кәрәк бөйөк Рәсәйгә!
Уяу рухлы халыҡ кына бары
Кәртә булыр тоҡсай-кәсәгә.

«Йөк» тигән шиғырҙа һүрәтләү объекты бик уңышлы табылған, минеңсә. Баҡһаң, тәбиғәт һиңә күҙәтеүсәнлек һәләтен күпләп биреп, шул һәләтеңә образлы фекерләү һәм йәнле һүрәтләү ҡеүәһе лә килеп өҫтәлһә, вокзалда сират көтөп ултырған юлсыларҙың йөктәренә ҡарап та ғәләмәт ҡыҙыҡлы һәм шул уҡ ваҡытта ифрат тормошсан һығымта яһап ҡуйырға мөмкин икән:

Күп микән һуң
Йөктәр араһында
Хәҙер рухи байлыҡ һаҡлана?
Юҡ шул. Әҙәм күңелдәре хәҙер
Баҡыр аҡса кеүек ваҡлана.

Кемдәр затлы мәрйен итеп йыя
Аҫыл китаптарҙың аҡылын?

Күптәр хәҙер башҡа байлыҡтарға
Йүнәлтә шул барлыҡ таһылын.

Шуғалыр ҙа – күҙ маңлайға менгән,
Тәндәр ҡатыр иблис һыуынан.
Ҡай берәүҙәр иблис булып бара
Үҙе теләп алған ыуынан.

Шағирәнең күҙәтеүсәнлеге, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡта атлаған һайын тип әйтерлек осрап торған тиҫкәре күренештәрҙе дөйөмләштереп, күргән-белгәндәрен художестволы образ юғарылығына күтәреү маһирлығы уның «Дауаханала тыуған уйҙар»ында ла сағыу кәүҙәләнеш тапҡан:

Табип күрһәтмәһен үтәй-үтәй,
Көндәр бер-бер артлы ағыла.
Дауаханала ла Рәсәй-илдең
Бар булмышы, йөҙө сағыла.

Кешеләр ҙә, рентгенттағы кеүек,
Бында асығыраҡ күренә.
Ошонда ла нәфсе микробтары,
Баҙар йырттыслығы терелә.

Ниһайәт, «Таң алдынан күргән төш». Формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә – ҡойоп ҡуйған шығыр. Миңә иһә, әйткәндәрҙән сығып, Әнисә Таһирова – бөгөнгө башҡорт поэзияһының ныҡлы һәм ышаныслы терәге, тип өҫтәйһе генә ҡала.

Ә. Таһирова кеүек, Яңы быуаттың тәүге ун йылында Гөлфиә Юнысова менән Факиһә Туғыҙбаева ла әүҙем эшләнеләр. Уларҙың поэтик әҫәрҙәре «Ағиҙел» биттәрендә әленән-әле күренеп кенә тора. Тәнҡитселәр ҙә битараф түгел был шағирәләрҙең ижад емештәренә. Ә бына Зөбәржәт Йәнбирҙина хаҡында мәҡәлә уҡырға тура килмәне. Хәлбуки, ул шаҡтай ғына үҙенсәлекле әҙибәгә оҡшап тора ине. Биобиблиографик белешмәләргә, күпмелер кимәлдә шағирәнең күңел донъяһын сағылдырған һүрәттәренә, лирик геройҙарының уй-кисерештәренә ҡарағанда, уның тормош юлы ла, әҙәбиәт һуҡмағына аяҡланыуы ла башҡаларҙыҡынан күпкә айырыла. Шул айырмалыҡ

шағирәнең ижадына ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр, моғайын. «Күк мунсаҡ» (1991)тигән йыйынтығына бирелгән аннотацияла бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:«Зөбәржәт Йәнбирҙинаның ижады замандың ҡырҡыу проблемаларына мөрәжәғәт итә, тормоштоң ҡара яҡтарын ҡыйыу рәүештә асып һала. Репрессия, экологик катастрофа, бюрократлыҡ һ.б. көнүҙәк темалар ярылып ята уның шиғриәтендә».

Әйтергә кәрәк, ҡырҡыу мәсьәләләр Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Тик ҡунаҡҡа килдем», «Рәсәйем», «Бер автобус ирҙәр Себер китте» («Ағиҙел», 2010, 5-се һан) исемле һуңғы шиғырҙарында ла ярайһы уҡ ҡыю күтәрелгән. Төҙөлөштәре-формалары йәһәтенән ҡайһы бер ҡытыршылыҡтар күҙгә салынып киткеләһә лә, был шиғырҙарҙа ҡуйылған проблемалар ифрат киҫкен яңғырай. Уларҙа һүҙ, башлыса, әҙәм балаһының тыуып-үҫкән һәм көн иткән мөхите, уның шул мөхиткә мөнәсәбәте, шунда яулаған үрҙәре һәм биләгән урыны, үҙ илендә, үҙ ерендә үҙ хоҡуҡтарының һаҡланыуы-һаҡланмауы хаҡында бара. Бында автор, шағирә булып ҡына түгел, бәлки ижтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади, мәҙәни, әхлаҡи-этик мәсьәләләрҙең тормошҡа ашыу-ашмауы тураһында уйланыусы һәм баш ватыусы ил инәһе һымағыраҡ та сығыш яһаған, дөрөҫөрәге – йәшәйешебеҙҙең күп яҡлы һәм ғәжәп ҡатмарлы проблемаларын образлы фекерләү аша күҙ уңынан уҙғарған. «Тик ҡунаҡҡа килдем» тигән шиғырҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, ауырлыҡтар кисерә-кисерә, көс-хәл менән тиерлек, ят яҡтарҙан тыуған төйәгенә ҡайтып төшкәс, эсенә һыймаған шатлығын бына нисек итеп белдергән:

Эй тыуған ил! Бөйөклөгөң белдем –
Рәхмәт инде ата-бабама.
Тыуған ер тип киҫектергән мине,
Өйрәтермен мин дә балама.

Шағирә фекеренсә, һәр кем, һәр халыҡ үҙ еренә үҙе хужа булырға, уның тәбиғи һәм рухи байлыҡтарын әрәм-шәрәм итмәҫкә, ә, киреһенсә, уларҙы артабан үҫтереү һәм арттырыу хәстәрен күргә тейеш. Асылда иһә беҙ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быныҡ киреһенә шаһит булып торабыҙ: үҙебеҙҙең типһә, тимер өҙөрҙәй аҫыл ир-егеттәребеҙ әллә ҡайҙарҙа олағып, бәхет эҙләп йөрөгәндә, башҡорт иле килмешәктәр менән тула:

Аҙмы ни һуң беҙҙең һыуҙы эсеп,
Үҙ иленә ҡарап суҡынған.
Беҙ тораһы йорттo билəп тороп,
Көлгән була беҙҙең тоҡомдан.

Ерен яҡламаған – илһеҙ ҡалған,
Был ерҙə лə һатлыҡ ерекмəҫ.
Күпме бүреккə һал, урман тиер,
Һөйлəшкəндə һүҙе берекмəҫ.

Атамалары менән бер-береһенән бик ныҡ айырылып торһалар ҙа, «Тик ҡунаҡҡа килдем»дəге тема һəм идея «Бер автобус ирҙəр Себер китте»лə лə дауам ителə, тиергə була. Тəүгеһендə кинəйəлəберəк белдерелгəн фекер бының эсенə асыҡтан-асыҡ əйтелгəн. Лексикаһы, тел-стиль саралары, автор интонацияһы буйынса ла был ике əҫəр араһындағы яҡынлыҡ һəм уртаҡлыҡ күҙгə бəрелеп тора. Тəүгеһендə, ерҙе һаҡламаған өсөн, үпкə белдерелһə, бының эсенə инде «яйлап күсə сит ҡулдарға Башҡортостан тигəн башҡорт ере» тип, туранан-тура ярып һалынған. Шиғырҙа өндəш ҡатыш бирелгəн риторик һорау ҙа яңғырап китə:

Салауаттар ерен һаҡлар халыҡ,
Ҡайҙа таралдығыҙ һеҙ, тоҡомом?!
Аҫабалар ере көтə күптəн,
Мая булып ҡалып ил ҡотоноң.

«Рəсəйем» – Эзоп теле менəнерəк яҙылған шиғырға оҡшап тора. Əгəр Мостай Кəримдең «Россиянмын» шиғырындағы «Рус түгелмен, ләкин россиян мин» тигəн юл Зөбəржəт Йəнбирҙинаның «Рəсəйем»енə эпиграф итеп ҡуйылмаһа, əҫəрҙең айышына, бəлки, тиҙ генə төшөнөп тə булмаҫ ине. Эпиграф иһə, халыҡ шағирының бынан алтмыш йыл самаһы элек донъя күргəн атаҡлы шиғыры «Рəсəйем» авторына ижади дəрт биреп, үҙенсə бер этəргес көс булып торғанлығын раҫлаусы дəлилдер, тимəксемен.

Йəшерə алмайым, Зөбəржəт .Йəнбирҙинаның «Рəсəйем»ен тəү тапҡыр уҡып сыҡҡас, ул бер ни тиклем ҡаршылыҡлыраҡ фекер уятҡандай, хатта «Россиянмын» менəн (айырыуса беренсе строфалағы «Тел əйләнмəй, əммə сараһыҙҙан «Россиянмын» тим дə сəсəйем...»

тигән юлдар) асыҡ полемика рәүешендәрәк яңғырағандай тойолдо. Ләкин был ике шиғырҙың йөкмәткеһенә үтеп инеп, уларҙың идея-эстетик әһәмиәте тураһында уйлана башлаһаң, теләйһеңме-теләмәйһеңме, тарихилыҡ принцибы тигән төшөнсәне иҫкә алырға тура килә: төрлө пафос менән һуғарылған ике шиғыр бер үк ерлектә ижад ителһәләр ҙә, тыуыу йылдары менән бер-береһенән бик ныҡ айырылып торған ике төрлө заманға ҡарайҙар.

З. Йәнбирҙинаның «Рәсәйем»е Ә. Таһирова менән Факиһә Туғыҙбаеваның (хәйер, бер улар ғына ла түгел!) ошо темаға арналған ярһыу ҙа, шул уҡ ваҡытта бер аҙ моңһоуыраҡ та яңғыраған айырым шиғырҙарын хәтерләтеп ҡуйыуы ла һис тә ғәжәп түгел. Сөнки яҙмыш уларҙың бөтәһенә лә стрелкалары ике яҡҡа ҡарап торған ике төрлө Ваҡыт арауығында йәшәргә һәм ижад менән шөғөлләнергә насип иткән. «Рәсәйем»дәге бына был юлдарҙағыса:

Ҡояш ҡуянсығы кеүек, бөрсә
Уңға сыға, һулға гербыбыҙ.
Рәсәй, һинән олоғ булып булмай,
Ҡайҙа элһәң, шунда торорбоҙ.

Әйтергә кәрәк, Зөбәржәт Йәнбирҙинаның быуат башындағы ижадында йәшәйешебеҙҙең ҡырҡыу проблемаларын күтәргән шиғырҙар түгел, ә тыуып-үҫкән төйәге, уның үҙенсәлекле тәбиғәте, ер-һыуы, шул мөхиттә үткән йәшлеге, тәүге мөхәббәте тураһында лирик уйланыуҙарҙан торғандары өҫтөнлөк итә. Шағирәнең 2003, 2004, 2005, 2007 йылдарҙа «Ағизел» биттәрендә баҫылып сыҡҡан ҡырҡҡа яҡын поэтик әҫәре – быға асыҡ дәлил. Уларҙың ҡайһы берҙәрен атап та китергә мөмкин: «Ҡабат-ҡабат», «Талдарым», «Далам – далан!», «Һағындым, Ҡыҙыл ярым», «Ауылымда», «Ах, Аҡкүлем!», «Юшатыр», «Һиңә ҡайтһам...», «Эй, тыуған яҡ».

Шиғырҙарҙың исемдәре үк авторҙың уй-кисерештәрен, эске халәтен, күңел донъяһын сағылдырып торғандай. Уларҙың байтағында шағирәгә таныш һәм яҡын тирә-йүндең колоритлы күренештәре йәнле итеп тасуирланған. Үҫмер ҡыҙ сағынан күңеленә һеңеп ҡалғандары ла күҙ алдына баҫтырылған. Шул төйәктәге ер-һыу атамалары ла уҡыусының күңел байлығына әүерелгән һәм уның хәтер һандығына инеп ятҡан.Диалект һүҙҙәр ҙә йыш ҡына осрай бында. Саманы онотмағанда, улар ҙа артыҡ түгелдер. Сөнки әҙәби телебеҙҙе башҡа

халыҡ теленән килеп ингән һүҙҙәр менән сыбарлауға ҡарағанда, республикабыҙҙың төрлө мөйөштәрендә әйләнешкә ингән диалект һүҙҙәр иҫәбенә байыҡтырыу хәйерлерәктер ҙә, ышанысыраҡтыр ҙа, уңайлыраҡтыр ҙа, маҡсатҡа ла ярашлыраҡтыр.

Өҫтә һанап үтелгән лирик шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәрендә һағыш ҡатыш моңһоуыраҡ ҡылдар ҙа сиртеп ҡуйғылай. Уларҙың күпселеге күләмдәре (юлдар һәм строфалар һаны) йәһәтенән йыйнаҡтар, яңғыраштары буйынса ла һүҙ тейҙерерлек түгелдәр. «Ҡабат-ҡабат» тигән шиғырҙың йәше олоғайып барған лирик героиняһы, мәҫәлән, төшөндә гел ҡыҙ сағын – силәктәрен аҫып, Имән бүләк буйындағы шишмәгә һыуға барған сағын күрә. Был хәл уны аптырашҡа ла һала, бер аҙ һағайта ла төшә, «Ҡайтыр көндәремдең (тап Кәтибә Кинйәбулатовалағыса!) яҡынлығын аңғартамы кереп бер үк төш?!» тигән уйға ҡала. Артабан был моңһоу уйҙар һәм борсолоуҙар тағы ла көсәйә төшә, шул уҡ ваҡытта лирик героиняның характер үҙенсәлеге лә бер ни тиклем асыҡлана («Төшөнөп тә бөткәс йәшәү серен йәшәйһеләр килмәү, ти, ҡайҙа!») һәм һуңғы строфала уның күңелен тырнаған һорауҙарға яуап та табыла, шикелле:

Кабат-ҡабат бер үк төштө күрәм,
Кабат-ҡабат бер үк үй саға.
Кабат-ҡабат күргән һайын һаман,
Сат йәбешкәнмен был донъяға.

Шулай итеп, ҡарап тороуға юҡ-барҙан ғына башланған һүҙ, ахыр сиктә уҡыусыны тәрән мәғәнәле һөҙөмтәгә алып килә: тормош һинең алдыңа ниндәй генә һынауҙарын сығарып ҡуймаһын, унан туймаҫҡа, тешең-тырнағың менән йәбешеп йәшәргә кәрәк.

Шиғыр һүрәтләү сараларының баҙыҡлығы менән дә иғтибарҙы үҙенә тартып тора. Әйтәйек, бәүелсәкте хәтерләткән баҫма бында алһыу таҫмаға тиңләнгән; һыу алырға килгән ҡыҙҙың нәҙек беләгенә ҡағылған талдар уның йәшлектә һөйгән йәре һымаҡ тойола, һ.б. Былар бөтәһе лә төштә генә күрелһә лә, асылда иһә ысын тормоштағы шикелле ҡабул ителә.

Тал образы Зөбәржәттең тағы бер шиғырында кәүҙәләнеш тапҡан («Талдарым»). Тик был юлы ул икенсе төрлөрәк юҫыҡта күҙалланған. Апрель һыуығында уҡ бөрөләнеп, һыуға таянған талдар шағирә күңелендә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ышанысһыҙ ир-аттар

һүрәтен тыуҙырған. Һәм ошо ассоциатив уй-фекерен түбәндәге юлдар менән йомғаҡлап ҡуйған:

Һыуға таянған да талдар кеүек,
Таяндырһаң, яҙмыш, Изелгә,
Көс бирә күр, нескә талдар кеүек,
Ауырлыҡты күркәм гиҙергә!

З. Йәнбирҙинаның тыуған яҡтары менән ғорурланыуын, уға булған һөйөү хистәрен сағылдырған лирик шиғырҙарында пейзаж күренештәре ярайһы ғына һутлы итеп тасуирлана. Уларға иркенләп туҡтап тормаҫтан, ҡайһы берҙәренән айырым миҫалдар килтереү менән генә сикләнәйек: «Далам тулҙаҡ йәйгән, һай, күк үлән!»; «Болот юрған япҡас елдәр тартты ебәк сымылдығы – ҡорғанын»; «Өс түбәлә аҡ бәрхәттәй балҡып гөрләп сәскә атҡан аҡ ҡылған»; «Изрәп ятам, һабантурғай күктә үрле-ҡырлы килеп йыр һуҙа» («Далам–далан!»): «Бауырһаҡ ҡамыры кеүек, тупраҡҡайым яуында»: «Һағынам һалам ҡыйыҡлы, һыу үткән балсыҡ өйҙө» («Һағындым, Ҡыҙыл ярым»); «Ауыл күтендәге йондоҙҙар ҙа эрерәктәр, күк тәлгәшләп элгән»: «Ҡаҙлайырым аға йондоҙ йыуып, ай тәгәрләп күктә йыр-моң тыңлай»; «Бесән еткән, еләк бешкән мәл бит, бытбылдыҡтар гел бер һүҙҙе игәй» («Ауылымда»); «Өрпәләмә сабый ҡарҙар өркә аяҡ еленән»; «Буран көйөн көйләр елдең, әйтерһең, юҡ бер кеме»; «Ҡар диңгеҙе әйләнәмдә, ҡараһаң – күҙ бәйләнә» («Эй, аҡ ҡарҙар»);«Зәңгәр күктә ҡауырыйланып аҡ болоттар ҡанатланған, ҡайһылары яулыҡ болғай, ҡайһылары ат атланған» («Апрель»); «Күрегеҙсе, ана, алһыуланып дөйә сәнскәктәре гөлләнә»; «Тере төҫлө таштар, йәнең күккә аша, ошо хозурлыҡтан моң урһаң»; «Ер йылмая, бите шау бәпембә, әйтерһең, бер ҡыҙсыҡ һипкелле» («Эй, тыуған яҡ») һ.б.

Билдәле булыуынса, теҙмә әҫәрҙәрҙә лә, сәсмәләрендә лә тәбиғәт күренештәрен йәнле итеп һүрәтләү, уның иҫәпһеҙ-һанһыҙ биҙәктәрен бөтә байлығында һәм күркәмлегендә төҫмөрләү – еңел шөғөл түгел. БыныҢ өсөн һүҙ ҡеүәһе лә, унан да бигерәк, тирә-йүнде (ағы-ҡараһы, ыңғайы-тиҫкәреһе менән бергә) бөтә нескәлегендә һиҙемләү һәм тойоу һәләте кәрәктер. Ә ул инде талантҡа барып тоташалыр. «Тәбиғәттең ... күркәмлеген һүрәтләргә етмәй һүҙҙәрем» тип тыйнаҡлыҡ күрһәткән З. Йәнбирҙина – ошо һәләткә эйә булған шағирә ине, тимәксемен. Уның әле өҫтә килтерелгән юлдары ғына түгел, тотошлай пейзаж

күренештәрен тасуирлаған шиғырҙары ла бар. Шулар араһынан «Тәңкә ҡарҙар!» тигәненә генә иғтибарҙы йүнәлтеп китмәксемен.

«Тәңкә ҡарҙар!» – дүртәр юллы алты строфанан торған традицион шиғыр. Ләззәтләнеп һәм һөйөп кенә уҡыр шиғыр, тип тә өҫтәргә була Сәсмә әҫәр теленә күсереп тикшергәндә, ул былайыраҡ яңғырар ине. Донъя аҡ нурҙарға ҡойонғас, тирә-яҡ аҡ моңдарға сумған. «Аҡ тәңкәне сәстәренә ҡушып үргән ҡайындар» уғата ла ағарып киткәндәй тойола шағирәгә. (Йәйәләр эсендә әйтәйем әле: икенсе бер шиғырында З. Йәнбирҙина, хатта аҡ туҙҙары күренмәҫлек булып ҡарға күмелгән ҡайындарҙы төҙәнә белмәй кершәнгә ҡойонған ҡыҙҙарға тиңләгәйне.) Ап-аҡ донъяла «һүлгә-түлгә, һутҡа» тулышҡан «бөрөләр моң тыңлай». Яҙҙың һулышын белгерткәндәй, аҡ тәңкәләр таҡҡан ел иҫә. Ҡарҙар ҡай тарафтан килһәләр ҙә, уларҙың сафлығы шик уятмай. Үҙен – аҡ яулыҡлы илсе, тип танытҡас, лирик героиняның уға булған ышанысы артабан да арта һәм, аҡ ҡарҙарға серҙәрен һөйләп, бушанып ҡала.

Шиғри телде проза теленә әйләндереү – ҡайһы берәүҙәргә мәҙәгерәк тә тойолор, бәлки. Ләкин әҙәбиәт тәлемендә бөтөнләй үк кире ҡағылырлыҡ һәм ҡабул ителмәҫлек алым да түгелдер. Уҡыусыла икеле-микеле уй тыумаһын өсөн, шиғырҙың һуңғы ике строфаһын бында үҙгәрешһеҙ күсерәм һәм уҡыусы аңлар: ҡышҡы тәбиғәттең бер мәлен шағирә иҫ киткес матур итеп тасуирлап ҡына ҡалмаған, шул уҡ ваҡытта тос фекер әйтеүгә лә ирешкән:

Эй, аҡ ҡарҙар, нең икәнһегеҙ бит
Иңгә ятып бәхет юраусы.
Именлеген илдең үтенеүсе,
Тик изгелек кенә юллаусы,

Ябалаҡлап тәңкә ҡарҙар яуа,
Күк ауҙар ҙа ары сап, имеш.
Ап-аҡ ҡарҙар, ҡайҙа һаҡландығыҙ
Ап-аҡ көйө, былай саф килеш?

Тәбиғәттең бай һәм серле күренештәренә иғтибарлығы, унда өҙлөкһөҙ барған хәрәкәт-үҙгәрештәрҙе тотоп ала белеү маһирлығы Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Өс минут», «Ҡантүшкәйҙәр», «Шәфәҡ балҡый» тигән шиғырҙарында ла күҙгә бәрелеп тора. Уларҙың һәр ҡайһыһы – шағирә өсөн үҙе бер табыш. Кем белһен, әгәр һәр нәмәгә

ифрат талапсан, йор һүзле Назар Нәжми иҫән булһа, «ҡар – аҡ була инде, ҡыҙыл түгел» тип, еңелсә шелтәләп тә алыр ине, бәлки. Ләкин хәҙер улар икеһе лә гүр эйәләре инде. Өҫтәүенә, «аҡ ҡар» бер Зөбәржәттә генә түгел, башҡа шағирҙарыбыҙҙа ла (исемдәрен атап тормайым!) осрап ҡуя, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Әлегә шуныһы мөһим: З. Йәнбирҙинаның был шиғырҙарында һүҙ, башлыса, тәбиғәт күренештәре хаҡында ғына барғандай тойолһа ла, шағирә уларҙан йыш ҡына шаҡтай фәһемле һығымта ла яһап ҡуйыусан. Әйтәйек, «Шәфәҡ балҡый»ҙағыса:

Ғәзиз донъя, әлдә был донъяға
Аңһыҙ килеп, уйлы китәбеҙ.
Һүрентеләй генә ғүмерҙе лә
Оло итеп йәшәп үтәбеҙ.
Әллә ниҙәр эшләп бөтәбеҙ...

Һуңғы йылдарҙа ижад иткән поэтик әҫәрҙәрендә шағирә ерҙә йәшәүҙең күберәк яҡты яҡтарын күргә, уның мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға тырышты. «Ҡыр ҡаҙҙары» тигән кескенә, әммә бик матур яңғыраған шиғырҙа, мәҫәлән, лирик героиняның йөрәгенә йылы яҡҡа осоусы ҡоштар һалып киткән һағыш һәм ошо айҡанлы үткән ғүмер тураһында уйланыуҙары бындай юлдар аша белдерелгән:

Ҡыр ҡаҙҙары, тағы ҡайтырһығыҙ,
Яҙҙар кеүек шаулап, әйләнеп.
Йәш ғүмер ҙә ҡабат ҡайтмһа икән
Яҙ моңона ғына бәйләнеп.

Шағирәнең ошоға тартым кәйеф-сафаһын һәм күңел торошон «Йән туңмай», «Һиңә ҡайтһам», «Ah, уйҙарым...», «Үпкәм дә юҡ», «Бар», «Эй һин, ғүмер», «Тәрән һағыштарым», «Матурҙыр ул», «Үрмә гөл» тигән шиғырҙарында ла шәйләргә мөмкин. Миҫал итеп, бында шуларҙың ҡайһы берҙәренән айырым строфалар килтереп китһәк, яҙыҡ булмаҫ:

Ғүмер ахырында бар яҙмышым
Үҙемә лә үтә йәл кеүек.
Таңғы ысыҡ ҡына булғанһың бит,
Насип түгел һөйгән йәр кеүек.
(«Эй һин, ғүмер»).

Мин киткәс тә, ожмах кеүек ергә
Яҙҙар килер, ҡайтыр ҡошҡайҙарым.
Был донъяға мәңге килгән төҫлө
Йәшәр дошман, илар дуҫҡайҙарым.
(«Тәрән һағыштарым»).
Эй, һин, ғәзиз ғүмер, кире ҡайтыр булһаң,
Аҡ ҡапҡалар асыҡ, бермә-бер.
Ah!
Ҡайтыр юлың ябыҡ, шуның өсөндөр ҙә
Матурһыңдыр, ғүмер – үрмә гөл!
(«Үрмә гөл»).

Зөбәржәт Йәнбирҙина хаҡындағы һүҙемде уның 2003 йылда донъя күргән «Рәхмәт, ҡояш!» тигән шиғыры менән тамамламаҡсы булдым. Ул ни бары дүрт строфанан тора. Уның тәүге һәм һуңғы строфалары былай яңғырай:

Рәхмәт, ҡояш! Ғүмерем буйы
Ихлас булдың һәр көн иртән,
Был донъяла күргән бәхет
Бөтәһе лә һинән икән!
. . . . . .
Рәхмәт, ҡояш, һәр таң миңә
Яңы ҡанат, көс биргәнһең.
Ун ике лә тәңремдең
Кендек бәйе һин икәнһең.

Шағирә менән уның шиғырҙары аша ғына таныш булһам да, донъялыҡта ул бик ғәҙел, тура һүҙле, кәрәк саҡта бер аҙ уҫалыраҡ та, әммә үҙ bahahын, үҙ ҡәҙерен, үҙ урынын үҙе белеп йәшәгән йән эйәһе булғандыр, тип уйлайым. Шуны әйткем килә: дуҫ-иштәре, заман-даштары, фекерҙәштәре иҫән саҡта, донъянан киткәндәрҙең «һайланма әҫәрҙәр»ен туплап, уларҙың үҙҙәре һәм әҫәрҙәре хаҡында кескенә булһа ла аңлатмалар биреп, китап итеп баҫтырып сығарыу хәстәрлеген күрергә кәрәк ине. Әгәр был тәҡдим ҡабул ителһә, ул халҡыбыҙҙың милли аңын уғата ла үҫтереүгә, рухи байлығын арттырыуға, эстетик зауығын күтәреүгә йүнәлтелгән бер сара булып торор. Ундай китаптарҙың мәктәп китапханаларында көтөп алынған

һәм алыштырғыһыҙ хазинаға әүереләсәктәре хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ.

4

Бынан күп йылдар элек проф.Ғ. Хөсәйенов үҙенең «Яңы быуын шағирҙар сафында» тигән мәҡәләһендә, бер төркөм йәштәрҙең ижадына еңелсә ҡараш ташлап, уларҙың «ҡыҙҙар наҙы, әсәлек хисе, ҡатын-ҡыҙ мөләйемлеге һәм йылылығы бөркөлөп торған шиғырҙары поэзиябыҙға йәм өҫтәрлек, шағирәләрҙең киләсәгенә өмөт менән ҡарарлыҡ әҫәрҙәр» тип яҙғайны. (Ғайса Хөсәйенов. Шағирҙәр. Өфө, 1981, 238-се бит). Шул төркөмдә Тамара Ғәниеваның да исем-фамилияһы бар. Әле бына Тамара тураһында уҡыған-ишеткәндәремде, күргән-белгәндәремде барлап ултырам да, ғалимдың юрағаны юш килде, тип уйлап һәм шатланып куям. Сөнки һуңғы утыҙ йылда Т. Ғәниева ижад өлкәһендә зур һикереш яһаны һәм бөгөнгө әҙәби процестың уртаһында ҡайнай, тип әйтергә тулы хоҡуҡ бар.

Яңы быуатты Тамара Ғәниева «Мәрйен-мәрйен тиҫбе фани ғүмерем» тигән шиғри шәлкем менән асып ебәрҙе. («Ағиҙел», 2001, 6-сы һан). Был шәлкем шағирәнең тәүге түңәрәк юбилейына арналғайны. Шәлкемдән һуң «Дәүер менән дәүер араһында» тигән баш аҫтында шағирәнең ижадын тикшергән мәҡәләләрҙән өҙөктәр килтерелгәйне. Шунда Рәшит Шәкүрҙән алынған бынау юлдарҙың иғтибарымды йәлеп иткәнлеге лә хәтеремдә: «Тамарала ҡыйыулыҡ та, саялыҡ та етерлек. Ир-уҙамандарға биргеһеҙ көс-ғәйрәт тә, тәүәкәллек тә бар унда. Фекерҙәр тос, үткер, һүрәтләү саралары сағыу. <...> Дөйөмләштереберәк әйткәндә, киң тарихи һәм рухи-мәҙәни контекста ижад итә ул». Артабан мәҡәләнең авторы Тамараны «көслө шәхес һәм көслө талант» тип атаған һәм һүҙен дауам итеп, «Быға иң яҡшы дәлил – хәҡиҡәттең әсеһенә лә, сөсөһөнә лә тигәндәй тура ҡарай белеүендә. Бары тик көслө кешеләр үҙҙәре хаҡында уның һымаҡ итеп тураһын әйтеп бирә ала торғандарҙыр», тип өҫтәй.

Рәшит Шәкүр, ғалим булараҡ та, шағир булараҡ та, ҡәләмдәшенең ижадына ла, шәхесенә лә хас айырым үҙенсәлектәрҙе сос тотоп алған, юғиһә. Тамара Ғәниеваның был үҙенсәлектәрен уның һуңғы ун йылда «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән яңы әҫәрҙәрендә лә (иллегә яҡын шиғыр, бер тәкбир, бер поэма һәм бер мистерия) шәйләргә мөмкин. Буш һүҙ булмаһын өсөн, шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә кәрәктер.

«Әнейемә тәкбир» – жанры буйынса ҡыҙыҡлы ғына бәхәс ҡуҙғатып алырҙай әҫәр. «Тәкбир» тигән һүҙ беҙҙең көндәлек аралашыу телебеҙҙә бик һирәк ҡулланылһа ла, автор уға бер ниндәй ҙә асыҡлыҡ индереп тормаған. «Ислам дине турында белешмә-сүзлек» тигән китапта (Казан, 1981, 154-че бит) «тәкбир» төшөнсәһе былай аңлатылған: «Тәкбир әйтү (гар. – ололау) – «Аллаһы әкбәр» («Алла бөек») дигән сүзләрне кабатлау». «Башҡортса-русса һүҙлек»тә (Мәскәү, 1996) төҙөүселәр ҙә тәкбир әйтеү – алланы данлау, тип кенә сикләнгәндәр. Т. Ғәниеваның ете бүлектән, өс йөҙ илленән ашыу юлдан торған был әҫәрендә алла ла юҡ, мулла ла. Ким Әхмәтйәновтың «Әҙәбиәт теорияһы»на мөрәжәғәт итергә ҡала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «тәкбир» тигән һүҙ унда ла осраманы. Ә бына йөкмәткеһе менән уға яҡын торғандары бар: ода (йыр), мәдхиә (маҡтау), мәрҫиә (һыҡтау), нәзирә (оҡшатыу), элегия (зарланыу). Тамараның «тәкбире», бәлки, үҙаллы жанрҙыр? Унда ла бит ололау, данлау менән бер ҡатарҙан, йыр ҙа, маҡтау ҙа, һыҡтау ҙа, оҡшатыу ҙа, зарланыу ҙа бар. Бындай көтөлмәгән хәл (әҙәбиәт теорияһының күнегелгән ҡалыбынан ситкәрәк тайпылып китеү) беҙҙең башҡа шағирәләребеҙҙә лә осраштырып ҡуя ул, юғиһә.Әйтәйек, Факиһә Туғызбаеваның – нағышнамәһе («Сәләмеңде еткер, Аҡсарлаҡ!») Гөлнур Яҡупованың – бағышы («Рух ҡиблаһы»). Кемдәлер яҙмышнамә лә күренеп ҡалғайны һымаҡ.

Ҡайһы ғына милләт әҙәбиәтен алып ҡарама, ҡатын-ҡыҙ затына, бигерәк тә әсә образына битараф булғанын табалмаҫһың. Был тема шағирҙарҙың да, шағирәләрҙең дә иғтибарын берҙәй тарта үҙенә. Әммә шағирәләр тәрәнерәк һәм профессионалерәк үтеп инә уға. Беҙҙең башҡорт поэзияһында ла шулай. Миҫал эҙләп, алыҫ китәһе юҡ. Әнисә Таһирова, мәҫәлән, «Йөрәк йәдкәре» (Өфө, 1996) тигән китабын тулыһынса әсәһенең яҡты иҫтәлегенә арнаны. Авторҙың китапҡа яҙған баш һүҙе һәм егерменән ашыу шиғырҙы берләштергән «Һинең рухың беҙҙең менән бергә...» тигән беренсе бүлеге – минең уй-фекерҙәремде хупларҙай фактттар. Т. Ғәниеваның «Әнейемә тәкбир»е лә шул фекерҙәрҙе ҡеүәтләй кеүек.

Жанр үҙенсәлектәре йәһәтенән «Әнейемә тәкбир», ысынлап та бик ҡыҙыҡлы әҫәр. Унда, өҫтә һанап киткән ода, мәдхиә, мәрҫиә, нәзирә, элегия жанрҙарына хас булған сифаттарҙан тыш, балладаға тартҡаны ла бар. Сөнки әҫәрҙә һүҙ тәү ҡарамаҡҡа лирик героиняның әсәһе хаҡында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, асылда иһә уның нигеҙендә «эскиз формаһында яҙылған ҙур эпик йөкмәтке» (К. Әхмәтйәнов) ята, тимәксемен. Балладанан поэмаға ла бер аҙым

ғына ҡала. Әйткәндәремде йөпләү өсөн, уҡыусынан ғәфү үтенеп, Тамараның тәкбиренән оҙон ғына бер өҙөк килтерергә мәжбүрмен:

Ҡыҙыу тупраҡ өтә табандарҙы,
Туҡмай ҡояш иңде, түбәне.
Эй, каторжан башҡорт бисәләре,
Ғүмерегеҙ нужна эстәрендә
Сөгөлдөрҙә иҙелеп үтәме?
Наҡаҫтан да оҙон йәйге көндән
Ҡайышланған алсаҡ йөҙөгөҙ.
Йәй төҫөнә бер һирпелеп бағып,
Хозурланды микән берегеҙ?
Йәйге селлә, көҙгә ҡара яуын
Үтеп ингән саҡта елеккә,
Ниндәй хыял ҡунып йәнегеҙгә,
Етәкләне яҡты өмөткә?
Эй, ауылдың әрһеҙ бисәләре
Ҡулығыҙҙа тәпкә, һәнәкме?
Кем имләне һағыш-зарығыҙҙы,
Кем аяны һеҙҙең йөрәктә?
Яланаяҡ балсыҡ баҫа-баҫа
Һылағанда колхоз һарайын,
Бер-берәүҙәр диңгеҙ ярҙарында
Рәхәт кенә сикте, моғайын.
Ауылыбыҙҙың аҫыл бисәләре,
Ебәк күлдәк наҙлар иңегеҙ
Ҡараһына ҡатҡан халат кейгәс,
Ҡарасҡылай ямаҡ инегеҙ.

Тормош дөрөҫләгөнөң бәләкәй генә бер күренешен тотоп алған был һүрәтләмә менән килешмәү мөмкин түгел. Ләкин тәкбирҙә сағылдырылған заманның яҡты яҡтары ла етерлек ине – улары, бәлки, күберәк тә булғандыр әле. Ошо урында нишләптер XIX быуат рус әҙәбиәтендә Петербург ҡалаһының нисек төҙөлөүен, Петербург менән Мәскәүҙе тоташтырған тимер юлының нисек һалыныуын һүрәтләгән әҫәрҙәр, шул уҡ осорға ҡараған тарихи сығанаҡтар иҫкә төшөп ҡуйҙы. Уларға бөгөнгө ысынбарлыҡты кәүҙәләндергән кинофильмдар, радио һәм телевидение тапшырыуҙары килеп ялғанды.

Һәм, ирекһеҙҙән, халыҡ телендәге «ҡайҙа ғына барһаң да, ҡара һаҡалың артыңдан ҡалмай» тигән әйтем бик тә тормошсан яңғырай икән дәбаһа, тип уйларға мәжбүр булаһың. Шөкөр, әҫәрҙә, бындай ҙа ауыр, бындай ҙа күңелһеҙ уйҙарҙы яңыртып ҡуйған юлдарға ҡарағанда, әсә образын тыуҙырыуға арналғандары өҫтөнлөк итә. Ул образ иһә ҡайһы бер күренештәрҙе һәм хәл-ваҡиғаларҙы лирик героиняның балалыҡ, үҫмер һәм өлгөрөп еткән мәлендәге зиһене аша үткәреү алымы менән тыуҙырылған. Әйтәйек, беләктәренең «ҡоршауына һеңеп»,ғәзиз күкрәгенә һыйынған бала өсөн әсә – өй генә түгел, хатта Йыһан.Уның ҡараштары – миләүшәләй яҡты, йылмайыуы – алсаҡ, сабыр. Әсә күҙҙәрендә бала үҙ һүрәтен күрә.Үҫә төшкәс, лирик героиня әсәһенең бөтә ерҙә лә – йорт ҡураһында ла, колхоз эшендә лә – ифрат егәрлекле, хәстәрлекле һәм өлгөр булыуына һоҡлана, хатта уның туҡмас йәйгән кескәй генә ҡулдары ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаған. Лирик героиня мәкәптә уҡыған йылдарҙа әсәһе уға «ғәмәл дәфтәре,ике аяҡлы һүҙлек һәм Белешмә » һымаҡ тойола башлай, сөнки «һәр һорауға әҙер» уның яуабы. Үҙаллы тормош көтә башлағас та лирик героиняның әсәһе менән ғорурланыуы кәмемәй: «Отҡор булғанһың шул: бар инеме һин белмәгән урыҫ һүҙҙәре?» тип иҫкә ала ул әсәһен. Әсәһенең ауыл халҡы араһындағы абруйын һүрәтләгән юлдар ҙа байтаҡ ҡына был әҫәрҙә. Мәҫәлән: «Ниндәйерәк таҫыл ағайҙар ҙа килер ине һиңә кәңәшкә...»; «Нисә мәрхүм һинең Ясин менән әхирәткә табан юлланды?» һ.б.

Т. Ғәниеваның тәкбирендә һүҙ ҡонкрет әсә хаҡында, уның характерына һәм бөтә булмышына хас айырым һыҙаттар тирәһендә барһа ла, был персонажды типик образ юғарылығына күтәрерҙәй күренештәр ҙә юҡ түгел бында. Әйтәйек, әсәнең ойоҡ-бейәләй, шәл-яулыҡ бәйләү шөғөлөн һүрәтләгән юлдар, тула йә кейеҙ баҫыу, балаҫ нуғыу кеүек күмәк эш айҡанлы ойоштороlған өмәләрҙә башҡарылған таҡмаҡтар һәм халыҡ йырҙары – былар бөтәһе лә әҫәрҙең бәҫен, уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттыра. Йәшерә алмайым, «Кейеҙ баҫҡан, балаҫ һуҡҡан йә бүтән өмәләрҙә араҡы юҡ, тик һөтлө сәй табын-көрәгәләрҙә» тигән юлдар мине уйға һалмай ҡалманы. Ошо юлдарҙы аҙып-туҙып, эсеп-иҫереп йөрөгән, бәпестәренә вайымһыҙ бисә-сәсәләр уҡыһын ине лә бит, ҡайҙа инде ул: кешене матурлыҡҡа, изгелеккә өндәүсе нәфис әҙәбиәт ҡайғыһымыни уларҙа?!

«Әнейемә тәкбир»ҙә рефренға әйләнеп китә яҙған «Һинең хаҡта нимә беләм һуң мин?» тигән фраза бар. Ни өсөн «әйләнеп китә яҙған»? Сөнки был фраза ике генә тапҡыр ҡабатланған, ә өсөнсөһөндә иһә,

әҫәрҙең аҙағына табаныраҡ, ул бер аҙ үҙгәртелгән: «Һинең хаҡта бик аҙ беләм шул мин». Рефренға әйләнеп китә алмаһалар ҙа, фразаларҙың икеһенә лә иғтибарҙы йәлеп итерлек тәрбиәүи мәғәнә һалынған, минеңсә: донъялыҡта саҡта үкенестәргә урын мөмкин тиклем әҙерәк ҡалһын.

Тамара «киң тарихи һәм рухи-мәҙәни контекста ижад итә» тиелгән Рәшит Шәкүрҙең өҫтә телгә алынған мәҡәләһендә. Мәҡәлә авторы биргән баһалама Т. Ғәниеваның «Ҡатын» исемле яңы поэмаһында ла («Ағиҙел», 2006, 1-се һан) раҫлау тапҡан. Сөнки шағирә был әҫәрендә лә уҡыусыны бөгөнгө мәшәҡәттәрҙән арындырған да бынан дүрт-биш йөҙ элек булған хәл-ваҡиғалар эсенә илтеп сумдырған. Ҡыҫҡа ғына, аныҡ ҡына итеп әйткәндә, поэмала һүҙ башҡорт ырыуҙарының үҙ ихтыяры менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы хаҡында бара.

Совет осоронда ла, унан һуң да тарихи үткәнебеҙҙе образлы һүрәтләү аша күҙаллауға иғтибар ителмәне түгел, ителде. Әле лә ителә. Саманан тыш күп булмаһа ла, тәҙмә әҫәрҙәр ҙә, сәсмә һәм сәхнә әҫәрҙәре лә яҙылып һәм баҫылып тора. Быны – маҡтауға лайыҡлы күренеш, тип иҫәпләргә кәрәк. Сөнки ҡоро һандарҙан, айырым шәхестәрҙең исем-шәрифтәренән, ауыл-ҡасаба атамаларынан торған тарихи фактҡарҙы сәнғәт теленә күсереү күпкә отошлораҡ. Уның йәлеп итеү көсө лә, танып белеү һәм тәрбиәүи әһәмиәте лә һис шикһеҙ ҙурыраҡ. Т. Ғәниеваның «Ҡатын» поэмаһы ла шулар иҫәбендә, тимәксемен.

Поэманың күҙгә бәрелеп торған үҙенсәлеге – тарихи фактты мифик сюжетҡа төрөп биреүҙәлер. Әҫәрҙең тәүге юлында уҡ беҙ Шаһит исемле персонаж менән осрашабыҙ. Башта ул яңғыҙлыҡ исемен йөрөткән ғәҙәти бер кеше шикелле генә ҡабул ителә: Шаһиттың уртаҡ исемдән яралған мифологик образ икәнлеге тураһында уҡыусы әлегә бер ни ҙә белмәй. Ошонда уҡ Ҙур Аҡыл тигән персонаж телгә алына. Уныһы инде Аллаһы тәғәлә тигәнде аңлата торғандыр, ләкин беҙ уға ла артыҡ иғтибар итмәйбеҙ. Күп тә үтмәй, тирмәлә тиҫбе тартып ултырған Өлкән Ҡатын һәм уның һуҡыр ейәне пәйҙә була. Шунда уҡ Өлкән Ҡатындың улын һәм киленен (һуҡыр сабыйҙың атаһын һәм әсәһен) «сырхау ҡоршап бөккән йот» алыуы хаҡында хәбәр һалына. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, поэманың экспозицияһында беҙ миф һәм ысынбарлыҡтың аралашыуына шаһит булабыҙ. Сюжеттың артабанғы үҫешендә иһә мифик Шаһиттың, Ҙур Аҡылдан килгән фарман-ҡарарҙарҙы үтәп, Ғаләм Ҡотоғонда хөкөм һөргән тәртиптәрҙе, ундағы ыңғай һәм тиҫкәре күренештәрҙе,ғөмүмән алғанда, бөтә хәл-ваҡиғаларҙы «Тарих хәтере» тип аталған китапҡа теркәп барыусы икәнлегенә төшөнәбеҙ.

Ләкин әҫәрҙең елек майы, минеңсә, Ҙур Аҡылда ла, уға башкөллө буйһонған мифик Шаһитта ла, донъяла ниндәй хәүеф-хафалар, көтөлмәгән һәләкәттәр булырын күңел күҙе менән алдан күргән һуҡыр малайҙа ла (поэманың аҙағына табан ул сәсән шәйеңә индерелә) түгел, ә реаль тормошто ышандырырлыҡ итеп һүрәтләгән күренештәрҙә. Тик был һис кенә лә Тамара уйлап тапҡан форманы инҡар итеү тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, поэманың баштағы киҫәктәре ауырыраҡ уҡылһа ла, ысынында иһә ул ифрат мауыҡтырғыс әҫәр. Ырыу башлыҡтарының үҙ-ара бәхәстәр ҡороп, ҡаршылыҡлы фекерҙәр кисерә-кисерә берҙәм уйға килеүҙәре айырыуса хәтерҙә ҡалырлыҡ. Бөтә ғүмере буйына Илем, Телем, Рухым – өс таған, тип йәшәгән һәм ырыу башлыҡтарын, тарихи шарттарҙан сығып, шул осор өсөн берҙән-бер аҡыллы ҡарар ҡабул итергә күндергән Өлкән Ҡатынды автор Ил инәһе тип атаған икән, быныҢ менән дә килешмәй булмай. Поэма ла юҡҡа ғына «Ҡатын» тип аталмаған бит.

Тамара Ғәниева – рус һәм донъя әҙәбиәте менән яҡшы хәбәрҙар шағирә. Был уның әҫәрҙәрендә лә, кәндәлек матбуғат биттәрендәге сығыштарында ла һиҙелеп тора. Шуларҙы иҫкә алғанда, шағирәнең ижад офоҡтары башҡорт поэзияһында күптән тамырланған традицион жанрҙар һәм темалар менән генә сикләнмәй, тиергә була. 2007 йылда уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән («Ағизел», 9-сы һан) «Уралым» тигән күләмле генә әҫәр ҙә – быға асыҡ дәлил. Әҫәрҙең жанрын автор «Мистерия» тип атаған. Билдәле инде, был атаманы күреү менән В. Маяковскийҙың «Мистерия-буфф» исемле пьесаһы хәтергә килеп төшә. Ул әҫәрен рус совет шағиры, Октябрь революцияһының тәүге юбилейына арнап, 1918 йылдың йәйге һәм көҙгө айҙарында яҙған. Өс йылдан һуң пьесаның икенсе, идеяһы яғынан көсәйтелгәнерәк варианты ла хасил булған.

«Мистерия» һүҙе төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсәрәк аңлатыла. Ҡайһы берҙәрендә уның мәғәнәһен, боронғо гректар, римляндар, шулай уҡ боронғо Көнсығыш халыҡтары араһында таралған һәм йәшертен генә башҡарылған дини йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, тип раҫлау менән генә сикләнелә. Бәғзеләрендә иһә мистерия төшөнсәһенә, Урта быуаттарҙа Көнбайыш Европа илдәрендә билдәлелек алған һәм ҡала майҙандарында киң күләм халыҡ массаһына күрһәтелгән дини йөкмәткеле драмалар, тип, бер аҙ асыҡлыҡ индерелгән .

Урта быуаттарҙа нисек булһа ла булғандыр, әммә В. Маяковскийҙың «Мистерия-буфф»ында, Тәүраттағы риүәйәткә (имеш, ҡырҡ көн, ҡырҡ төн буйына өҙлөкһөҙ яуған ямғыр һөҙөмтәһендә Ер йөҙөнә туфан ҡаҡҡас, донъя үҙ шәйеңә ҡайтҡандан һуң яңынан үрсейәсәк тереклектең

парлы заты Нух кәмәһендә ҡотолоп ҡалған) таянып, уҙған быуаттың ун етенсе – егерменсе йылдарында илдә барған хәл-ваҡиғалар бик үткер тасуирланған, юғиһә. Пьесаның исеме аҫтына автор юҡҡа ғына «беҙҙең дәүерҙең героик, эпик һәм сатирик сағылышы» тип яҙып ҡуймағандыр, моғайын. Тамара Ғәниеваның «Уралым»ына килгәндә инде, унда Тәүрат та, Ҡөрьән дә юҡ. Ә бына мистерияһы бар. Хатта буффы ла (беҙҙеңсә «мәрәкә» тигәнде аңлата) юҡ түгел

Рус халҡының характер үҙенсәлеген күрһәтеп торған милли ғорурлығы Волга булһа, башҡорттоң баш төйәге – Урал. Уның тураһында борон-борондан йырҙар (шул иҫәптән – халыҡ йырҙары ла), шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар яҙылған икән, һис тә ғәжәп түгел. Тамараның да иғтибарын Урал темаһына йүнәлтеүе әллә ни шик-шөбһә уятмай. Тик был юлы ул, йәшәп килгән традицияларҙан айырмалы булараҡ, тыуған төйәгенә икенсерәк күҙлектән ҡараш ташлаған. Заман башҡа – заң башҡа, тигәндәре шулдыр инде. «Уралым»дың йәне мөхәббәткә сарсаған лирик героиняһы Нух кәмәһендә түгел, ә интернет донъяһында йөҙә. Уның исеме – Гөлдәр.

В. Маяковский пьесаһына бирелгән комментарийҙарҙың береһендә «мистерия» һүҙе ябай ғына итеп аңлатыла: серле, тылсымлы көс. Тамара Ғәниеваның «Уралым»ында шундай көстәр икәү: исемен атамайынса ғына (Инкогнито), Лондондан тороп, интернет аша Гөлдәр менән бәйләнешкә ингән бер Ир-егет һәм көтмәгәндә компьютер экранында пәйҙә булған билдәһеҙ Ҡатын. Әҫәр Гөлдәрҙең алмаш-тилмәш ошо ике көс менән алып барған диалогы формаһында төҙөлгән. Сюжет ағышында был икәүҙең ике төрлө маҡсат көҫәүе асыҡлана. Инкогнитоның уйында – бары тик аҡса, байлыҡ, бизнес, шау-шыуға ҡоролған күңелле тормош, тәмле аш-һыу. Уның ысын йөҙө, күңел донъяһы, бөтә булмышы айырыуса әҫәрҙең аҙағына табан (бәйләнешкә һуңғы тапҡыр сыҡҡанда) тулы кәүҙәләнеш тапҡан. Быға ышаныу өсөн, Инкогнитоның ләстит һатыуға оҡшап торған тирадаһынан бына был юлдарҙы килтереү ҙә етә:

Уйын тамам.
Гөлдәр тинең мәле?
Мираҫың
Ҡала торған булһа....
Был адресҡа
Васыятнамә яҙа алаһың...

«Уралым»дағы серле, тылсымлы көстәрҙең икенсеһе – күпкә ҡатмарлыраҡ күренеш. Әҫәрҙең жанр баһаламаһы ла башлыса шунан киләлер. Сөнки был көс (ул Тамара Ғәниева мистерияһының тәүге юлдарында уҡ, экран көҙгөһөндәге армыт-армыт үрҙәр иңендә айға ҡарап, күкһел сәсен тарап тороусы тауыш-өнһөҙ Ҡатын шәйендә һүрәтләнгән) автор хыялында ғына йәшәй. Ярай әле уның героиняһы, Гөлдәр, тауыш-өнһөҙ ымды үҙенең «эске тойғоһо» менән аңлап, фараз ҡылырға һәләтле. Юғиһә, монитор экранында, уйсан йөҙөндә нур һарҡытып, намаҙлыҡһыҙ аҡ мәрмәр ташҡа теҙләнгән был серле Ҡатындың Йыһан илсеһе икәнлеген дә белмәй ҡалыр инек. Йыһан илсеһенең синонимдары ла бар:Йыһан Анаһы, Ғаләм йәне, Донъя Әбейе... Быларын да Гөлдәргә уның «эске тойғоһо» еткергән.

Тауыш-өнһөҙ серле Ҡатындың образын тыуҙырғанда, шағирә Абсолют Уй, Бөйөк Рух, Аҡыл көсө, Ижад ихтыяры, Ғаләм аңы, Йыһан тәғәрмәсе, Ваҡыт Тәғәрмәсе, Аҡыл ташы, Юғары аң һәм башҡа шуның кеүек юғары, фәлсәфәүи төшөнсәләр менән эш итә. Интернет аша эфир киңлектәрендә осрашҡанда, Илаһи һынлы был Ҡатын Гөлдәрҙе һәр ваҡыт иғтибар менән тыңлай, аңы, һүҙҙең бәҫен тойғаны өсөн уны бер аҙ маҡтап та ала, әлбиттә Гөлдәргә мираҫ итеп ҡалдырған нәҫел ташының Аҡыл ташы икәнлегенә төшөндөрә, һ.б. Серле Ҡатындың: Ергә батша – тик Аҡыл; Урал – Күккә, Ергә, Ҡот, Иманға буҫаға; Донъя асҡысы – Ҡатын-ҡыҙ түлендә, унан һора ҡибла ҡайҙа икәнен; Уйҙың көҙгөһө – Һүҙ, Йыһанда унан изге, унан яуыз көс юҡ, тигән афоризмдары ни тиклем көслө һәм фәһемле яңғырағаны тураһында һөйләп тороуҙың кәрәге юҡтыр. Үҙенең рух-көҙрәте менән Урал армытын һаҡлаусы, тау итәгенә һыйынып көн иткән халыҡты яҡлаусы, уны һәр төрлө бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалаусы булып күҙ алдына килеп баҫа Тамара Ғәниеваның мистерияһында һүрәтләнгән Йыһан илсеһе. Минең был фаразымды әҫәрҙең һуңғы юлдары ла ҡеүәтләгәндәй. Героиняның «эске тойғоһо» йәнә уяна ла, уға киҫәтеү яһай: «Ишеттеңме!? Был Йыһанда һиңә адрес берәү – йәнеңдәй күр Урал-ҡибланды!».

Т. Ғәниеваның әле һүҙ барған күләмле поэтик әҫәрҙәрендәге ҡайһы бер мотивтар уның һуңғы осорға ҡараған шиғырҙарында ла яңғырап киткеләй. Шундайҙар иҫәбенә «Талҡаҫ», «Мираҫ», «Ҡырҡ ҡатын», «Был ауылда...», «Һылыу, килендәр...», «Башҡортостан» тигәндәрен индерер инем. Әгәр «Талҡаҫ»та лирик героиня, «Төйәккенәм, һәр урының – сәнғәт» тип хозурланһа, «Башҡортостан»да иһә ул үҙ төйәген «һөйгәненә тоғро йәр шикелле» яратыуы хаҡында бәйән итә. Ләкин, был шиғырҙар

бөтөп күтәренке пафос менән генә һуғарылғандар икән, тип уйлаһаҡ, дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки уларҙың икеһендә лә лирик геройняның эске һыҡрауы һиҙелеп тора. Тәүгеһендә ул үҙен «аҫыл батшалыҡта ҡибла тапмаҫ дәрүиш» итеп тойһа, икенсеһендә иһә «Үлгәс түгел, бөгөн ярат, Башҡортостаным!» тигән үтенесен ярып һалған. Шиғырҙарҙың икеһенә лә кинәйәле фекер төрөп бирелгәнлеген шәйләмәү мөмкин түгел, минеңсә.

«Ҡырҡ ҡатын» менән «Һылыу, килендәр...»ҙә лә ошо алым өҫтөнлөк итә кеүек. Уларҙың тәүгеһе бындай юлдар менән тамамланған:

Беҙ ҡырҡ ҡатын.
Көтөп көтөк булдыҡ.
Усаҡ яҡтыҡ – ил-йорт билгеһе.
... Өйөлөп ята алтын,
Баса тундар...
Ник эленһен шулар күҙебеҙгә!
Ир-егеттең зәғиф күбеһе...

Авторҙың нимә әйтергә теләгәнен оҙон-оҙаҡ аңлатып тороуҙың кәрәге юҡтыр: ерҙә йәшәүҙең төп мәғәнәһе төрлө ысулдар менән байлыҡ туплауҙа түгел, ә донъя тыныслығында, ғаилә именлегендә, әхлаҡи бөтөнлөктә. Тик, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был уй-теләктәр күп осраҡта күңел түрендә һаҡланған йәшерен хыял ғына булып ҡала.

«Һылыу, килендәр...»ҙә заман сиренә әүерелеп барған күренештәр үтә лә ҡалҡыуыраҡ, уғата ла киҫкенерәк итеп һүрәтләнгән. Автор фекеренсә, төрлө сәбәптәр арҡаһында «ирҙәр ҡырылып ята», күңеле кителгән йәтимдәр арта, аҡһаҡалдар ҙа барлы-юҡлы ғына. Һөҙөмтәлә, донъя көтөү мәшәҡәттәре әкренләп һылыуҙар, йәп-йәш килендәр иңенә күсә бара. Инде улар бирешеп ҡуя күрмәһен тигән шиген дә йәшермәй шағирә. «Кәбер ҡазыусыға – эш тубыҡтан, табут оҫтаһына – муйындан. Аҙан әйтер ир юҡ ауылыбыҙҙа, ҡатын-ҡыҙға был эш тыйылған» ти ҙә, шиғырын былай ослап ҡуя ул:

Һылыуҙарым,
Йәп-йәш килендәрем,
Милләт хәсрәттәрен күтәреп,
Яйлап ирегән май шәмеләй һарҡып,
Заманаңың күҫәгенән шаңҡып,
Уртҡынаһын сәйнәй үртәлеп.

«Мираç» менән «Был ауылда...»ны «Әнейемә тәкбир»гә ауаздаш, тиергә була. Кем белә, «Мираç», бәлки, «Әнейемә тәкбир»гә ойоткo ла һалғандыр. Сөнки унда ла бит шағирә ябай ғына, ләкин хәтергә һеңерҙәй һыҙаттар аша атаһы менән әсәһенең йәнле образын кәүҙәләндергән:

Баш аçтымда әнәй мендәре лә
Атайымдың трофей бәкеһе.
Артыҡ малым, артыҡ даным да юҡ,
Таман ғына булған хәтлеһе.

Карағастай ине минең атай,
Бәп-бәләкәй һылыу әнәйем.
Үҙемә лә нәфсе аҙҙырмаған
Хәләл генә ғүмер теләйем.

Ә «Был ауылда...» инһә «Әнейемә тәкбир»ҙе ослап ҡуйғандай тойола:

Был ауылда мине яраталар,
Хәйләһеҙ зат тигән даным бар.
... Ер өҫтөндә шундай ауыл бар...

Т. Ғәниеваның быуат башында ижад иткән һәм баҫылып сыҡҡан шиғырҙарында лирик героиня йәш ҡына үҙенең үткәне һәм киләсәге хаҡында уйлана, донъялыҡта биләгән урынын асыҡларға тырыша, бигүк ябай булмаған заманыбыҙ тураһындағы ҡайһы бер уй-фекерҙәре менән уртаҡлашырға ла онотмай. Шуныһы ҡыҙыҡлы: ҡарап тороуға юмор һымағыраҡ яңғыраған шиғырҙа ла ярайһы ғына тәрән фекергә тап булаһың. Һәм, киреһенсә, йөкмәткенән тормош фәлсәфәһе аңҡып торһа ла, унда емелдәгән юмор сатҡыларын да шәйләмәй ҡалмайһың. Ошондай шиғырҙар иҫәбенә тәү сиратта «Ана ғына», «Мөнбәрҙәргә баҫып ағай-эне...», «Мәкер», «Иҫке бишмәт», «Бар әле...», «Һандал», «Мөгәрәп», «Беҙ – еңеүсе балалары», «Һары төштө инде тәбиғәткә...», «Шәхси шиғыр», «Мейесен һүтеп алған өй шикелле...», «Әхирәтем», «Мистер Икс», «Донъяларға шундай күҙем төштө...», «Ресторанда», «Йән», «– Арттараҡ бул...», «Әүерелмәләр», «Ҡартлыҡ» тигәндәрен индерер инем.

«Йән» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, автор юғары материя хаҡында баш вата. «Нишләп илай икән сабый йәндәр // Яҡты донъяларға

килгән саҡта? <...> Ни ҡурҡыта йәнде донъялыҡта?» тигән һорауҙан башлай ул шиғырын. Артабан был һорауға бер аҙ асыҡлыҡ индерелә: «Берсә көлә, берсә илай кеше // Ғүмер тигән юлды үткән саҡта. // Йән төйәге күктә тиһәләр ҙә, // «Үлем» һүҙе ниңә ныҡ ҡурҡыта?». «Йән, йәнәһе, һәр саҡ әйләнештә» тигән уйҙырманан сығып, «Үткән менән бөгөнгөмдө берәй // Индерһәңсе, раббым, бәйләнешкә» тип үтенә лирик героиня. «Тыуыу, йәшәү, һулыу, юҡҡа сығыу...» кеүек ҡатмарлы, әлегә бер кем дә аңлатып бирә алмаған төшөнсәләр хаҡында уйлана-уйлана ла, шиғырҙың һуңғы строфаһында автор шул уйланыуҙарын бер көләмәскә әйләндерә лә ҡуя:

Алыҫ түгел яҡты ҡараңғылыҡ,
Үҙем ҡурҡам унан,
Үҙем көтәм...
... Ҡайтһам йәнә бүтән бер сүрәттә,
Ғәниева тигән бер шағирҙың
Шиғырҙарын яратырмын микән?..

Ә бына «Ресторанда» тигән шиғыр бөтөнләй башҡа тәьсир ҡалдыра: йөкмәткеһе менән дә, төҙөлөшө йәһәтенән дә, тел-стиль саралары яғынан да. Уны «Йән»дең ҡапма-ҡаршыһы, тиһәк тә хата булмаҫ: шиғыр башынан алып аҙағына тиклем юморға ҡоролған. Шаян холоҡло лирик героиня, диңгеҙ шауын тыңлап, ресторанда ултыра. Тәүҙә ул официантҡа өндәшә һәм тәғәмдең дә, шараптың да иң затлыһын килтерергә ҡуша. Унан һуң музыканттарға мөрәжәғәт итә: «Байрам икән, байрам! <...> Вена вальсын килә тыңлағым. // Беҙҙә көйҙәр бигерәк моң-һағышлы, // Һыҙылыу менән килә илағың». Артабан был ханым тағы ла официантҡа һүҙ ҡатып, «Боҙ һал шарабыма...» тип ебәрмәһенме! Ләкин Ғәниеваның лирик героиняһы аяуһыҙ тормоштоң гелән бындай күңел асыуҙарҙан тормағанлығын яҡшы аңлай. Юғиһә шиғыр «Уныһы шулай ҙа... <...> Әле көтә өйҙә һабантурғай, // Бесәнлектәр көтә туғайҙа» тигән юлдар менән тамамланмаҫ ине.

Әйткәндәй, Тамараның был көләмәс әҫәре күпмелер кимәлдә А. Блоктың 1906 йылда яҙылған «Незнакомка» исемле шиғырын хәтерләтеп ҡуя. Унда ла бит ресторан шау-шыуы һүрәтләнгән. Тик Блок шиғырындағы ресторан диңгеҙ буйында түгел, ә ҡала ситендә, башлыса иҫерек әтрәгәләмдәр хөкөм һөргән ерҙә урынлашҡан. Рус шағирының лирик геройы кистәрен ошо ҡотһоҙ, бысраҡ ресторанда ултырыусы бер

ят ҡыҙҙы күҙәтә. Ул иҫ киткес сибәр, һәр саҡ бөхтә кейенә, үҙенән ҡиммәтле хушбый еҫе бөркөп тора. Ят ҡыҙ көн һайын билдәләнгән бер ваҡытта залға килеп инә лә, иҫереп алған ир-аттарға иҫе китмәйенсә, улар эргәһенән үтеп, гел бер үк тәҙрә янына барып ултыра. Был сибәркәй лирик геройҙы бик ныҡ ҡыҙыҡһындыра, уның кем икәнлеген һәм ни өсөн көн дә ресторанға килеүен аңларға тырыша, ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «истина в вине» тиеүҙән башҡа һығымтаға килә алмай.

Блок геройынан айырмалы булараҡ, Тамараның героиняһы, ресторанда ҡылансыҡланып ултырһа ла, «Эскелекте // Тәбиғәтем минең хушһынмай!» ти. Шулай булғас, «Ресторанда» тигән шиғыр, бәлки, беҙҙең заманда тиҙ генә, еңел генә байып киткән һәм, хәҙерге күпселек кинофильмдарҙа күрһәтелгәнсә, типтереп йәшәргә өйрәнеп алған бизнесмендарға, уларҙың бирсәткә урынына алышынып торған һөйәркәләренә ҡарата үҙенә күрә бер пародиялыр?

Шикләнеберәк, икеләнеберәк белдерелгән был фекергә «Мөнбәрҙәргә баҫып ағай-эне...» тигән шиғыр ҙа кеүәт өҫтәгәндәй. Әҫәрҙә һуҙ беҙҙең бөгөнгө көнитмешебеҙгә хас күренештәр (алдау-йолдауҙар, ғәҙелһеҙлектәр) хаҡында барһа ла, ул ифрат тыныс тонда яҙылған. Тормошҡа ашмаған вәғәҙәләр биреп көн итеүселәр адресына бында юмор ғына түгел, сатира ла етерлек. «Ә ғәмәлдә // Беҙҙең өйрә һимеҙ, // Ҡуйы булды бары – // Хыялдан» тип яуап ҡайтара лирик героиня трибунанан ялған хәбәр һөйләүселәргә. «Анауҙарҙы әйтәм, // Тығыналар, // Ауыҙҙары микән арандан» тип тә өҫтәй ул. Буяуҙар бер аҙ ҡуйыртыбыраҡ ебәрелһә лә, лирик героинянының саркастик көлөүе үтә урынлы яңғырай. Был көлөүҙе хәрәмләшеп ҡулға төшөргән мал иҫәбенә кәйеф-сафа ҡылып йәшәүселәрҙән көнләшеү тип аңларға ярамай. Сөнки лирик героиня көнсөлдәр затынан түгел: үҙенең күңел сафлығы, рухи ихтыяжы менән ул заман ҡолдарына әйләнгән ихтыярһыҙ һәм инабатһыҙ бәндәләрҙән сағыштырғыһыҙ өҫтөн тора. Байлыҡҡа артыҡ иҫе китмәйенсә, таманса ғына, хәленән килгәнсә генә донъя көтһә лә, был героиня – ифрат ғорур йән эйәһе. Милләттәштәрен дә шуға өндәй, баш эйеп йәшәмәҫкә саҡыра:

Ә беҙ барыбер,
Зинһар,
Өңшәймәйек
Калдыҡ-боҫтоҡ затлы ҡабымға.
Әйҙүкләрҙәр ҡайсаҡ

Ҡалған ашҡа
Йә һығылып торған табынға.

Ерҙә йәшәү дәүерендә әҙәм балаһына кисерергә тура килгән ғәҙәлһеҙлектәр, кәмһетелеүҙәр, мыҫҡыллауҙар, нахаҡҡа рәнйетеүҙәр хаҡында күп уйлана Тамара Ғәниеваның лирик героиняһы. Айырыуса – һуңғы йылдарҙа. «Өйрә» темаһы, мәҫәлән, «Ана ғына» тигән шиғырҙа ла сағылып китә:

Өлөш самалымы,
Даланмы юҡ,
Ҡойто булды яҙмыш яҙғаны.
Нисә һапырһам да, шыйыҡ өйрә
Һондо миңә Ғаләм ҡаҙаны.

Шиғырҙың асылы, йәлеп итеү көсө – автор һайлаған теманың үҙенсәлегендә генә түгел, бәлки уның эске төҙөлөшөндә лә: әйтергә теләгән фекерҙең мәғәнәһен уҡыусы күңеленә тәрәнерәк һеңдерер өсөн уңышлы ҡулланылған эпитеттарҙа, сағыштырыуҙарҙа, бөтөнләй яңыса яңғыраған метафораларҙа, кинәйәле һүҙбәйләнештәрҙә.

«... Арттараҡ бул...» тигән шиғырҙа лирик героиняның характерына тағы бер һыҙат өҫтәлгән. Әҫәрҙең тәүге өс строфаһында (уларҙың беренсеһе – биш юлдан, икенсеһе – дүрт юлдан, өсөнсөһө – һигеҙ юлдан тора) лирик героиня юморға тартым алым менән үҙе тураһында, таныш-белештәре, дуҫ-дошмандары араһында уға ҡарата хөкөм һөргән мөнәсәбәт хаҡында һөйләп ала ла, һуңғы строфала бындай һығымта яһап ҡуя:

<...> арҡанан тондоралар,
Шул да булғанмы уйын.
... Мине, барыбер, Ер шарынан
Төртөп төшөрөү ҡыйын.

Башҡорт шиғриәте хаҡында һүҙ алып барғанда, миңә йыш ҡына рус поэзияһына ла күҙ ташларға тура килгеләй. Уҡыусы, бәлки, еләп тә китәлер. Ләкин был, рус әҙәбиәте менән күпмелер кимәлдә хәбәрҙар булыуымды күрһәтеү ниәтенән түгел, үҙенән-үҙе шулай килеп сыға. Әгәр Тамараның «Әхирәтем» исемле шиғырын ҡат-ҡат уҡып ултырғанда, Блоктың символизм менән мауыҡҡан саҡтарында ижад ителгән ҡайһы

бер шиғырҙары (әйтәйек, «Предчувствую Тебя. Года проходят мимо...», «Вхожу я в тёмные храмы... », тигәндәре) күңелемдә ҡыбырлап алалар икән, нишләтәйем инде?! Блок шиғырҙары шикелле, Тамараның да «Әхирәтем»е тәү тапҡыр уҡыуҙа мәҙәгерәк тойола бит. Был әҫәрен шағирә үҙенең бик яҡын дуҫына, ышаныслы серҙәшенә арнағандыр, тип уйлайһың башта. Аҙағына еткәс иһә, көтөлмәгән асыш яһайһың: лирик героиня «әхирәтем» тип үҙе үткән ғүмерҙе атаған икән. Шиғырҙы поэтик автобиография, тиергә лә була. Сөнки унда автор, ғүмер юлы буйлап атлағанда, үҙенә тап булған айырым хәл-ваҡиғаларҙы ла хәтеренә төшөрөп китә. Уртаҡлыҡ исемде яңғыҙлыҡҡа әйләндереп, шиғырын бындай юлдар менән тамамлай ул:

Эйе...
Аҙашманым былай,
Һин өйрәттең.
Ханбикә лә булдыҡ, кол да булдыҡ, –
Ташламайыҡ,
Ғүмер-Әхирәтем.

«Мөгәрәп», «Мәкер», «Бар әле...» тигән шиғырҙарҙа ла «Әхирәтем»дәге автобиографик һыҙаттар сағылып киткәндәй:

Берәүгә лә һөйләп яҡлау табыр
Сарам булмағанды аңлауҙан,
Үҙем һалған диуарымда ғына
Дауа таптым
Нахаҡ, ғәҙелһеҙлек
Йөрәгемә ҡаҡҡан ҡазауҙан.
(«Мөгәрәп»).

Офоҡтарым, ай-һай, киң ине бит,
Аша атлаулы хәҙер –
Яп-яҡын.
... Ир-ат мәкеренән бирешеүҙән
Иңе өҙөлөп барған мин ҡатын.
(«Мәкер»).

Бер юнысҡы.
Мәғрур ҡарағастан.

Бирешмәгән төҫө – Нух сағы.
Мәкер нишләтмәһен,
Мин – бар әле!
...Емһә етер башыма бер осҡоно
Үҙ заттарым яҡҡан усағы.
(«Бар әле...»).

Йылдар үткән һайын, шағирәнең гражданлыҡ позицияһы, донъяға ҡараштары асыҡланғандан-асыҡлана, нығынғандан-нығына бара. Әгәр «Әүерелмәләр» тигән шиғырында ул аҡты – ҡара, ҡараны – аҡ, тип, үҙенекен тылҡыған («Ҡара йөрәк берәү, // Мин аҡтин-аҡ, // Эскерһеҙмен, ти ҙә заң ҡаға») ике йөҙлөләрҙең күҙҙе быуыуҙарын яйлап төшөнә башлауы хаҡында хәбәр һалһа, «Мистер Икс»та иһә, хыял донъяһында йөҙөүсе кеше булып ҡыланып, «битлек кейеп алған» йән эйәләренән әсе көлә. («Ниндәй генә сүрәт, ҡиәфәткә // Инергә һуң миңә // Бөгөн кис?»). Әгәр «Мейесең һүтеп алған өй шикелле...»лә шағирә «илдең иманы кем илендә» икәнлеге хаҡында («Иманымы? // Ah, ул ғәҙәт-әҙәп // Иҫтәлеккә күсҡән, тарихҡа») бер ауыл миҫалында ғына фекер йөрөтһә, «Беҙ – еңеүсе балалары»нда инде ул ошо уҡ һорауға яуапты бөтә ил күләмендә эҙләп таба: «Беҙ – еңеүсе балалары инек... // Шөкөр, тинек, ҡында булат ҡылыс. // Һәм... // Яуландыҡ... // Утҡа тотмай ғына // Теҙләндерҙе беҙҙе «Ҡалҡын һуғыш».

Шағирәнең һыҙланыу ҡатыш был уйланыуҙары уның «Һандал» тигән әҫәрендә уғата ла киҫкенерәк, хатта, әйтер инем, драматик төҫ алған: унда үҙебеҙҙең яңы буржуйҙар тырнағына эләккән еңеүсе балаларының һәм ейәндәренең бөгөнгө аяныслы яҙмышы ифрат ҡабарынҡы һәм тетрәндererлек итеп һүрәтләнгән:

Егет-елән мәрмәр аҫтарында...
Аҡыл ултырмаҫтан,
Тас салҡан
Тәгәрәгән нәфсе ҡорбандары.
Аҡса, алтын өсөн алыштан
Туйып китте микән донъяһынан?..
Киттеләрме гонаһ – шомлоктан?

Ята теҙелешеп йәш бандиттар,
Алҡымында ҡаны ойошҡан.

Ҡалғандарға таш һын – терәкме?..
Сәсе ап-аҡ әсәләргә, тием,
Ул ҙурлығым һәйкәл кәрәкме?

Ошо урында күптәнән бирле мейемде ҡайнатҡан бер фекерем менән уртаҡлашмаҡсымын. Бәғзеләргә уның мәҙәгерәк тә тойолоуы ихтимал. Тамара Ғәниеваның заман елдәре менән һуғарылған лирикаһын уҡығанда, нишләптер Факиһа Туғыҙбаева күҙ алдына килеп баҫа. Факиһаның шундай уҡ шиғырҙарын уҡығанда, Тамара хәтергә төшә. Тәбиғи, ни өсөн шулай, тигән һорау тыуа. Бының сәбәбе ике шағирәнең дә ижад принциптарында ниндәйҙер оҡшашлыҡ йәиһә уртаҡлыҡ булыуҙа түгел микән? Улар икеһе лә йор һәм тура һүҙлеләр (үҙһүҙлелектән дә мәхрүм түгелдәр, шикелле); ҡыйыуҙар (әйтергә теләгәндәрен әйтмәй ҡалмайҙар); талант тигән эликсирҙы ла тәбиғәт икеһенә лә мул ғына өләшкән. Ләкин был, бер осорҙа тыуып үҫкән, берҙәй тормош юлы үткән ике шағирә араһында, уларҙың художество алымдарында, ижад процесында алдарына ҡуйған бурыстарына ирешеү юлдарын эҙләгәндә бер ниндәй ҙә айырма булмаған һәм юҡ икән, тиғән һүҙ түгел, әлбиттә. Шундай айырмалыҡтарҙың береһе, миненсә, шағирәләр үҙҙәренең гражданлыҡ позицияларын яп-яланғас итеп асып һалғанда күҙгә салына: Ф. Туғыҙбаева, ҡаты әйтеп, йомшаҡҡа ултырта һымаҡ; Т. Ғәниева иһә, киреһенсә, йомшаҡ әйтеп, ҡаҡ һикегә таяндыра кеүек. Ғәмәлдә иһә, улар икеһе лә бер үк ижади мәсьәләне хәл итәләр.

Т. Ғәниева шиғриәтендә мөхәббәт темаһы ла ярайһы ғына урын алып тора. Тик был тема уның әҫәрҙәрендә нисектер сәйерерәк тә, серлерәк тә яңғыраған төҫлө. «Ҡар ҡойона икәү...»ҙә, мәҫәлән, лирик героиня, «ҡар диңгеҙен гиҙеп пыр» туҙыусы ике ғашиҡҡа һоҡланып, «... Осондо ла китте иҫәр күңел, // Саҡ өйөрөп алдым: // Ергә төш!» тип, хыял ҡошон баҫалҡыраҡ булырға өндәһә, «Һүрәнәйгәс күңелең усаҡтары...»нда иһә ул үҙен «Етмәгәнсе һүнер, һүрелер сағың, <...> Үрһәләнмәсәле, бул тыныс» тип йыуата. «Бәлки, әле былай, һүҙҙән генә...» тигән шиғыр ҙа лирик героиняның халәтен, мөхәббәткә бәйле уйланыуҙарын-борсолоуҙарын,икеләнеүҙәрен-шикләнеүҙәрен һүрәтләүгә ҡоролған:

Бығаса мин...
(Яман, яҡшы микән?)
Донъя көттөм фәҡәт үҙемсә.

Бер түремдә – тәхет
(Теләһәң – һинеке),
Бер түремдә – һалҡын көлдөксә.

Ошо типтағы «Санаң йәшел түгел, дуғаң зәңгәр...» исемле шиғырҙың үҙ баһаһын үҙе белеп йәшәгән лирик героиняһы тура һүҙлелеге һәм шул уҡ ваҡытта юл ҡуйыусанлығы, күндәмлеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Башта ул эре генә ҡыланып:

Үрәсәгә баҫып һөйләшмәгәс,
Ымһынмағас йәнем түренә,
Нимәгә мин һиңә?
Йә, нимә тип
Эленәмдер инде күҙеңә.

Һыбай елгән ынғай ҡармап алып,
Арҡыры һалып ал да бүҙатҡа,
Ай-вайламай, затлы биләмәңдең
Алтын ҡазығына ҡағаҡла,

ти ҙә, бер аҙ һыуына төшкәс, уға күҙ атып йөрөүсене тыныс ҡына, аҡыллы ғына итеп үҙ урынына ултыртып ҡуя:

Ысынында, тормам әҙер генә,
Алмаштырам данды малыңа.
Миңә табылыр, тиһең,
Кемгә лә ул
Иләгенә силәк табыла.

Ә бына Анна Ахматованы хәтергә төшөрөп ҡуйған «Шәхси шиғыр» – ваҡытында ҡәҙерле беленмәгән һәм шунлыҡтан үкенесле тамамланған мөхәббәттең поэзия биттәренә күсерелгән ғибрәтле өлгөһө, тиһәк тә арттырыу булмаҫ:

Мәрйен кеүек һибелеп төшкәнендә
Хазинаға торош хисебеҙ,
Ҡорбан йолҡколаған кейек кеүек,
Кемуҙарҙан, ахыры, ботарланыҡ
Бер-беребеҙ йәнен икебеҙ.

«Ашыҡтым»дағы «Әйттең: // Ашыҡма! // Үкенес – // Һыҙланыуҙың иң ҙуры. // Ҡайҙа! // Мин ҡыҙғайным ул саҡ: //Һин – аҙғынһың! // Мин – тоғро!»; «Остом!..»дағы «Ҡатының инем мин бит элек.// Ә хәҙер? // Һиңәме – // Һөйәркә? // Ышанма! // Һатылмай минең тән! // Буйһона ни бары // Тәкәтһеҙ теләккә»; «Һин бар, беләм...»дәге «Тотош үтә күрәм: // Тура ҡарамаҫҡа көсәнеүең // Барыбер һата. // Ҡырыҫыраҡ ҡыланаһың хатта. // Әммә ирлек сәмең игәй, // Ыҙалата»; «Был арала никтер күңелдәрем...»дәге «Их, нишләп беҙ элек айырылыштыҡ? // Һин уҡ аттың... // Ә мин таш аттым», тигән юлдар бер генә уҡыусыны ла битараф ҡалдырмаҫ һәм мөхәббәт тойғоһоноң ни тиклем бөйөк тә, бер үк ваҡытта һаҡһыҙ яһалған хәрәкәттән селпәрәмә килергә торған гәлсәр быяла ла икәнлеген ҡат-ҡат иҫенә төшөрөр.

Тамара Ғәниеваның тәбиғәт күренештәрен тасуирлауға арналған лирикаһы ла иғтибарҙы йәлеп итерлек. Метафораларға бай «Һаумыһығыҙ!» тигән йыйнаҡ ҡына бер шиғырҙа, мәҫәлән, лирик героиняның күктә ҡар бөртөктәре уйнаҡлағанда кисергән уй-тойғолары уҡыусыға бик матур итеп еткерелгән. Тәбиғәттең ошо үҙенсә илаһи мәлендә уның аны аяҙайып киткәндәй була, йәненә «зар ҙа һыя», «наз ҙа һыя», ә үҙен ул Ер өҫтөндәге бер нөктә итеп тоя.

«Ирәндеккә баҡһаң, маз булырлыҡ...» һәм «Таш сәскәһе» тигән шиғырҙарҙа авторҙың тәбиғәт донъяһындағы матурлыҡты һәм камиллыҡты бөтә нескәлегендә һәм бөтә гүзәллегендә тоя белеү ҡеүәһе күҙгә ташланһа,«И, тәбиғәт...» тигәнендә иһә ошо донъяла өҙлөкһөҙ дауам иткән үҙенсәлекле тормош мауыҡтырғыс итеп кәүҙәләндерелгән. Ә бына «... Тәҙрәләргә бәрелеп тулай ямғыр...»ҙа инде тәбиғәттең үҙ закондары барлығына һәм уның, кешегә буйһонмайынса, шул закондар буйынса йәшәүенә ишара яһала:

Тәбиғәт, һин, ғалəм – барсабыҙ ҙа
Сараһыҙлыҡ тоҙағында – кейек.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, Т. Ғәниеваның ижад практикаһында ара-тирә авторҙың ни әйтергә теләгәне бигүк асыҡланып бөтмәгән шиғырҙар ҙа осрап ҡуйғылай. Миҫал итеп, «Таң алдынан баллы ысыҡ тамды...», «Ҡурҡам», «Көтөү» тигәндәрен күрһәтеп үтер инем. Әлбиттә, мин уларҙы рифмаға һалынған матур һүҙҙәр теҙмәһе генә тип баһаларға йыйынмайым. Уларҙың төбөндә, бәлки, авторҙың үҙенә генә билдәле һәм аллегорияға ҡоролған фекер яталыр. Шағирәнең ижады

фәнни нигеҙҙә өйрәнелгәндә был һорауҙарҙың бөтәһенә лә аныҡ яуап бирелер, тип уйлайым.

Тормоштоң аяуһыҙ ҡанундарын, тирә-йүндә атлаған һайын осрап торған ғәҙәлһеҙлектәрҙе ҡыйыу фашлаусы шағирә Ғәниева ерҙә йәшәүҙең күберәк яҡты яҡтарын күргә һәм шатлыҡлы мәлдәрен тотоп алырға тырыша. Әгәр бер шиғырында ул:

Донъяларға шундай күҙем төштө:
Үҙе яҡты, үҙе түңәрәк.
Торған һайын ҡыҙыҡ кеүегерәк,
Ғүмер кисеп аяҡ талдырһам да,
Күңелдәрем булды бигерәк, –

тип яҙһа, икенсеһендә иһә, үҙен әҙгә генә булһа ла йылы яҡтарға осоп барыусы торналар өйөрөндә хис итеп «...Намыҫсанды беҙҙә ситнәтеү бар, // Теш-тырнаҡлы ғына үҙәктә», тигән фекерен дә йәшермәй.

Шағирәнең кисерештәргә бай күңел донъяһы, рух көсө, оптимистик тәбиғәте уның «Йондоҙом» исемле ҡыҫҡа ғына әҫәрендә (бер ыңғайҙан шул да мәғлүм булһын: күпселек осраҡта Тамараның шиғырҙары еләткес оҙон түгелдәр!) айырыуса тәрән итеп, күтәренке пафос менән асып һалынған. Шиғыр үҙенең романтик асылы менән генә түгел, төҙөлөшө һәм яңғырашы йәһәтенән дә хәтерҙә һаҡланырлыҡ. Бында уның һуңғы строфаһын тулы килеш килтерһәк, һис тә яҙыҡ булмаҫ:

Эй, йондоҙом!
Зиһенем, күңелем ҡуҙы!
Яралдыҡмы әллә иртәрәк?
Шуға әйтәм:
Ғәмһеҙ был донъяла
Һин һүнмәһен өсөн –
Мин кәрәк.
Миңә иһә
Аҡыл юймаҫ өсөн
Саф яҡтылыҡ бөркөр –
Һин кәрәк.

Йыйып ҡына әйткәндә, Тамара Ғәниеваның быуат башындағы ун йыллыҡ ижады – шағирәнең поэзия үрҙәрен яулағанда яһаған сираттағы

аҙымы ул. Был аҙым, өҫтә телгә алынған әҫәрҙәрҙән күренеүенсә, тағы ла ырамлыраҡ, тағы ла күркәмерәк булды, тиергә мөмкин. Алда уны яңы поэтик асыштар көткәнлегенә шик юҡ.

5

Бөгөнгө шиғриәтебеҙ майҙанында уңышлы һәм һөҙөмтәле ижад итеүселәр араһында Гөлнур Яҡупова, Нәжибә Әминева, Таңһылыу Ҡарамышевалар ҙа бар. Өсөһө лә − «Ағиҙел» журналының даими авторҙары. Т. Ҡарамышеваның «Эй, донъя» (2002), «Өмөттәр сәсәмен донъяға...» (2004), «Килде тауҙар ораны...» (2008), «Шағир» (2009), «Яҙҙар килде тағы − наҙҙар килде!» (2010) тигән баш аҫтында баҫылып сыҡҡан шиғырҙары уҡыусы күңеленә хуш килгән булһа, Н. Әминеваның да «Татлы яза» (2001), «Уйлат, донъя» (2002), «Ышанам» (2003), «Йән йылыһы һаҡлана әле бында» (2004), «Арала, яҙмыш» (2005), «Килешер ине» (2006), «Китмәйбеҙ» (2007), «Бәхет − ҡанатланыуҙа...» (2008), «Ҡарап ҡалайымсы», тигән исем аҫтында донъя күргән шиғырҙары иғтибарҙан ситтә ҡалмағандыр. Г. Яҡупова иһә яңы быуатта шиғри шәлкемдәр менән генә сикләнеп ҡалманы − «Мираҫ» (2007) һәм «Әҙәм вә һауа» (2008) тигән поэмаларын да тәҡдим итте уҡыусы иғтибарына.

Ижад өлкәһендә шаҡтай бай тәжрибә туплаған был өсәүҙе хәҙер инде башҡорт поэзияһына тоғро хеҙмәт итеүсе һәм уны әленән-әле үҙенсәлекле әҫәрҙәре менән байытып тороусы әҙибәләр, тиергә тулы хоҡуҡ бар. Ҙур тәжрибә туплаһалар ҙа, һиҙемләүемсә, уларҙың өсөһө лә, өлкән ҡәләмдәштәре Кәтибә Кинйәбулатова менән Фәниә Чанышева һымаҡ, тыйнаҡтар, инабатлылар, итәғәтлеләр, терһәкте алдан йөрөтмәйсә, тәбиғәттән бирелгәнде тауышһыҙ-тынһыҙ ғына яратҡан уҡыусылары менән уртаҡлашалар. Т. Карамышева, Н. Әминева, Г. Яҡупова ижады хаҡында элегерәк ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашҡайным инде. Артабанғы йылдарҙа уларға яңынан әйләнеп ҡайтырға ниәтем юҡ түгел. Бөгөнгө күҙәтеүҙәремдә иһә шиғырҙары ла, китаптары ла баҫылып торған, ләкин исемдәре тәнҡит мәҡәләләрендә һирәгерәк осраған Миңлегөл Хисамова, Гүзәл Ситдикова, Тәнзилә Дәүләтбирҙинаға туҡталып китһәм, маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр төҫлө.

Ижад менән эштән һуң ғына шөғөлләнергә тура килһә лә, яңы быуаттың тәүге ун йылында Миңлегөл Хисамова поэзия өлкәһендә ярайһы ғына әүҙемлек күрһәтте. Ошо дәүер эсендә ул «Ағиҙел» биттәрендә биш тапҡыр сығыш яһаны һәм уҡыусы иғтибарына ал-

тмышлап шиғыр тәҡдим итте. Был шиғырҙар менән яҡынданыраҡ танышҡанда уларҙың тышҡы йыйнаҡлығы, строфаларҙың традиционлығы, рифмаларҙың теүәллеге күҙгә ташлана. (Дөрөҫ, рифмаларҙы артабан да теүәлерәк яңғыратырға тырышыуҙандыр, бәлки, шиғри юлдар араһындағы логик бәйләнешкә көс килгән саҡтар ҙа осрап ҡуйғылай, ҡыҙғанысҡа күрә.)

Дөйөм алғанда, М. Хисамованың лирикаһын хистәр лирикаһы, тип атарға була, минеңсә. Хистәр иһә, билдәле булыуынса,күңел торошоноң төрлө мәлен сағылдыра.Шуға күрә йөкмәткеһе менән дә, тышҡы буяуҙары менән дә хистәрҙең шатлыҡлы-ғазаплы ла, күтәренке-төшөнкө лә булыуы һис тә ғәжәп түгел. «Шыбырлаған ямғыр шауы...»нда, әйтәйек, ижад процесы тәбиғәт күренеше менән йәнәш ҡуйып тасуирланһа, «Аҡ төҫтәргә ҡарап...»та инде лирик героиня ерҙә күпме йәшәйһе ҡалғанлығы хаҡында уйлана. «Минең төш» менән «Кәрәк» тигән шиғырҙар өгөт-нәсихәт шикеллерәк ҡабул ителһә («Минең өлөш»тә шағирә, һәр кешенең үҙ яҙмышы, үҙ булмышы тигәнерәк ҡараштан сығып, «кемдер башҡасараҡ көн итһә», уларҙы ғәйепләмәҫкә саҡыра, ә яңғырашы менән халыҡ әйтемдәренә тартым «Кәрәк»тә ул ғәҙәти кешегә хас булырға тейеш сифаттарҙы һанап сыға), «Ырымдарың һинең гел дә дөрөҫ...» менән «Үҙ-үҙемә ғәжәпләнәм...»дә хистәргә бирелгән лирик героиня үҙенең ҡайһы бер ҡылыҡтары менән уртаҡлаша. («Ырымдарың һинең гел дә дөрөҫ...»тә, мәҫәлән, ул әсә кәңәштәренең, юрауҙарының юш килеүен раҫлай һәм ара-тирә шул кәңәштәрҙе һанламауына бер аҙ үкенеп ҡуя; анафора тип йөрөтөлгән стилистик алымға ҡоролған «Үҙ-үҙемә ғәжәпләнәм...»дә иһә лирик героиня, күңелендә ҡупҡан буранды баҫырға тырышып, көтөлмәгән һығымта яһап ҡуя: «Асыҡ дошманыңдан ҡурҡма, // Дуҫтарыңдан бул абай!»).

М. Хисамованың хистәргә бай лирикаһында үтә лә нескә, үтә лә шәхсән тойғолар менән һуғарылған шиғырҙар ҙа йыш осрай. Шундайҙар иҫәбенә «Үҙемде сәм еңә», «Сабырлығым һынды,йырым тынды...», «Ғазаптарҙы ғаҙаптарға ялғауҙарым...», «Был шаулауҙар – тына белмәҫ урман...», «Устарыңда таш һаҡланың...», «Аҡ ерлектә генә ҡара таптар...», «Ер тетрәнеме ни, күк күкрәне...», «Ҡыҙынаһың әле йәйҙәреңдә...», «Ҡара төн бағыуы – күңел төшөү...», «Һүрелдең...», «Яҙмышым», «Йәшлегеңә ҡарап һоҡланғанда...», «Серем бар ине...», «Ғашиҡтар теләге», «Өс ҡатлы алҡа», «Һине хәтерләтте...» тигәндәрен индерер инем. (Шиғырҙар исемен былай күпләп килтереү бәғзеләргә, бәлки, бик оҡшап та бөтмәйҙер. Ләкин уларҙы тема, идея,

һүрәтләү сарлары, тел-стиль үзенсәлектәре һәм башҡа шуның кеүек компоненттар йәһәтенән ҡарағанда, ниндәйҙер төркөмдәргә бүлмәй ҙә булмай шул.)

Әйтергә кәрәк, өҫтә һанап кителгән шиғырҙар үҙҙәрәнең художество камиллығыкатры яғынан төрлө кимәлдә. «Устарыңда таш һаҡланың...» менән «Аҡ ерлектә генә ҡара таптар...»ҙа, мәҫәлән, лирик героиня кемгәлер төбәп, үҙенең йөрәк түренән сыҡҡан үпкәһен, һыҙланыуын,уфтаныуын белдерһә,«Ғазаптарҙы ғазаптарға ялғауҙарым...» менән «Был шаулауҙар – тына белмәҫ урман...»да иһә авторҙың нимә әйтергә теләгәне бик асыҡланып бөтмәгән кеүек. «Ҡыҙынаһың әле йәйҙәрендә...» лә шулайыраҡ. «Ер тетрәнеме ни, күк күкрәне...», яҙылышы – төҙөлөшө буйынса матур ғына яңғыраһа ла, лирик героиняның кемдән һәм ни өсөн алыҫыраҡ китергә тырышыуы ла йомаҡ булып ҡала. Ә бына «Серем бар ине...» менән «Ғашиҡтар теләге»нә, минеңсә, һүҙ тейзererлек түгел: яңғырашҡатары яғынан да, һүрәтләү саралары менән дә. Уларҙың береһендә лирик героиня, көсөнән килһә, «гөл – сәскәле аҫыл тыуған» яғын йәренә бүләк итергә әҙер булыуын белдерһә, икенсеһендә иһә ул йәренең ҡар – ямғырлы юлын гел ҡояшлы яһарға әҙер тороуын бәйән итә.

М. Хисамованың лирикаһы гел уның үҙен биләп алған нескә хистәрҙән генә ғибәрәт икән, тип уйлаһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине, әлбиттә. Шағирәне тирә-йүндә атлаған һайын булып торған хәл-ваҡиғалар ҙа урап уҙмай, күңелмештең төптәрәк, алыҫтараҡ ятҡан күренештәре лә борсоп ҡуя уны. «Яҙалы төш» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, ул «Ниндәй рәхәт күрҙегеҙ һеҙ, // Олатай-өләсәйҙәр?» тигән һорауға яуап эҙләй. Ҡайһы бер юлдарҙың бигүк теүәл рифмалашмауы әҫәрҙең бәҫен бер аҙ төшөрһә лә, формаһы йәһәтенән ул ярайһы ғына оригиналь яңғырай: олатаһы лирик героиняның төшөнә инеп яфалай.

«Юҡҡамы ни?» тигән шиғырҙың исеме бер үк ваҡытта анафора ла, рефрен да ролен үтәй. Ошо һорау аша автор байтаҡ ҡына күңүҙәк мәсьәләлә күтәрә, уларҙы хәл итергә, һис юғында тәғәйен генә яуап табырға тырыша. Ә бына был строфа үҙенә күрә бер киҫәтеү ҙә булып яңғырай:

Йәш-елкенсәк шыйыҡ талсыбыҡтай,
Күтәрерме сибек иңдәре?
Баҫып ҡына бара тормош йөгө,
Һыҙғанырмы улар еңдәрен?!

Киҫәтеүҙәр, һиҫкәнеүҙәр, өндәүҙәр Миңлегөл Хисамова шиғриәтендә артабан да осрап ҡына тора. «Был донъяның бар һул яғы ла...» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, йәшәйшебеҙҙең күп яҡлы булыуына ишара яһала. Ишара яһалып ҡына ҡалмай, уның һул яғы ла, күләгәһе лә, «салт аяҙҙай яҡты яғы ла бар» тигән идея үткәрелә. Шуға ярашлы рәүштә, ваҡыт төшөнсәһе хаҡында ҡыҙыҡлы ғына фәлсәфә ҡороп алына: «Аяуһыҙҙыр ваҡыт һәммәбеҙгә», «Һәр кемгә лә хөкөмдар тик ваҡыт». Шағирә уҡыусыны донъяның күберәк яҡты яғын күрергә саҡыра. Әгәр күңел күҙең донъяның күберәк яҡты яғын күрһә, «Ҡара төндәреңде еңеү булыр», //Үкендермәй килер һәр яҙың...», тип тә өҫтәй.

Яҙылышы – төҙөлөшө менән иғтибарҙы йәлеп итеп торған икенсе бер шиғырында иһә автор, заман ағышына шағирә булып та, байтаҡ ҡына тормош тәжрибәһе туплаған аҡыл эйәһе булып та ҡараш ташлай һәм ундағы хәл–ваҡиғаларға үҙенең мөнәсәбәтен белдерә:

Ah, донъялар ҡайҙа китеп бара,
Ер өҫтәрен утта төтәпеп.
Ҡояш йөҙө саҡ-саҡ күренә лә,
Ҡара көйөп, тағы етә төн...
(«Тыныс йәшәп ҡара...»).

Формаһы һәм йөкмәткәһе менән «Нимә күрҙең?» тигән шиғыр ҙа оригиналь яңғырай. Лирик геройиня үҙ алдына биш һорау ҡуя: был донъяла нимә күрҙең, нимә белдең, нимә ҡалдыраһың, ниндәй васыятҡа тоғроһоң, үкенесең бармы. Бөтә һорауҙарға ла ҡыҫҡа ғына, әммә ифрат төплө яуап ҡайтарыла. Шулар араһынан иғтибарҙы иң ныҡ йәлеп иткәне:

Ниндәй васыятҡа тоғро һуң?
Ныҡлы булһын илең нигеҙе.
Тик телеңдән яҙма, телең – иман,
Ошо ике ҡеүәт – игеҙҙәр.

Өҫтә анафора тип аталған стилистик алым тураһында һүҙ сығып ҡуйғайны инде. Был алымға М. Хисамова йыш ҡына мөрәжәғәт итә. Шуға тағын бер миҫал: «Ҡара көндәрмдең аҡ ынйыһы». Ул традицион (дүртәр юллы) дүрт строфанан тора. Строфаларҙың дүртеһе лә «ҡара» һүҙе менән башлана. Автор әйтергә теләгән фекер шиғырҙың һуңғы строфаһында бик матур һәм аңлайышлы итеп асып һалынған:

Ҡара көндәремдең аҡ ынйыһы...
Тамсы нур ҙа етә кешегә.
Шул тамсыны яҡынынан тапмай,
Күпме йәндәр ерҙә күшегә...

Ошо шиғырҙан һуң, Миңлегөл Хисамованың күп кенә әҫәрҙәрендә лирик героинаның характер үҙенсәлектәре, уның күңел торошо, уй-кисерешәтре сағылдырылған, тиһәм, әллә ни яңылыҡ булмаҫ. Сөнки лирик поэзияла башҡаса булыуы мөмкин түгел. Шулай ҙа был әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәренә туҡталып китмәй ярамаҫ.

«Йырым ҡалды»ның тәүге өс строфаһында автор әйтергә теләгән фекер бигүк аңлашылып бөтмәһә лә, дүртесеһенә һүҙ тейзererлек түгел:

Күңелемдең көзгө һағышына
Серҙәш булып атлап килгәндә,
Мин ҡәҙерһеҙ минуттарҙы ҡыуҙым,
Тоғро йырым ҡалды эргәмдә...

«Ҡәҙере арта»ның нимәнәндер тетрәнгән лирик героиняһы өсөн «йәшәү ҡәҙере арта өсләтә...». Ул үҙенең «үҙ һүҙле», «еңмеш» булыуын да йәшермәй уҡыусынан. «Зәһәр бәндәләр бит йәнде саға...»лағы «Һәр кемдең дә ерҙә үҙ юлы бар, // Үҙ намыҫы менән яуаплы» тигән һүҙбәйләнештәр ҙә күңелгә йәтешле. «Татый белһәң...»дең лирик героиняһы, «һөйөнөрҙәй мәлдәр аҙайһа ла», яҡты донъяның ҡәҙерен белеп, уның һоҡланғыс йәмен татып йәшәргә саҡыра:

Мин ризамын ошо аҙына ла,
Ошо аҙҙа күпме йәмдәр бар,
Татый белһәң аҙҙың матурлығын,
Аҡ дөнъямда бөтмәҫ ғәмдәр бар, –

тип тамамлана был шиғыр. Ә инде «Үҙ самам бар»ҙа лирик героиняның образы уғата ла сағыуыраҡ итеп һүрәтләнгән. Ул ярамһаҡ кеше түгел, алтын ҡашыҡ тотмаған; яңғыҙ башы ҡалғанда ла түрәләр алдында бөгөлмәгән; хатта дошмандарын да ул уларға тәғәйен һүҙ менен түгел, ә «дуҫ күрмәгән кешеләр» тип атай. «Таш атманым һис кемгә лә», «Бар терәгем – ғорурлыҡ», ти ул. Шиғыр «Үҙ самам бар, үҙ баһам бар // Үҙ үремә торорлоҡ»,

тигән юлдар менән тамалана. Тыйнаҡлыҡ менән ғорурлыҡ бергә үрелгән бында.

Миңлегөл Хисамованың хистәргә бирелеүсән, тыйнаҡ, ғәҙәлһеҙлектәрҙе, рәйһетеүҙәрҙе ауыр кисерһә лә, уларҙы гәфү итергә һәләтле, шул уҡ ваҡытта ғорур тәбиғәтле, кәрәк саҡта үҙ һүҙле һәм еңмеш холоҡло лирик героиняһы менән беҙ уның «Йәш үлән эҙенән...», «Күрәһең, күнәһең бар...», «Уҙғандарға...», «Тик үҙемсә...», «Зарланмайым», «Етмәне...», «Йыр ҡала», «Даръяларҙа йөҙәм», «Донъя хәлен уйлап...», «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...», «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...», «Тынысланыр йәнең...» тигән шиғырҙарында ла осрашабыҙ.

Әгәр «Йәш үлән эҙенән...»дә лирик героиня, үҙ-үҙе менән һөйләшкәндәй итеп һәм үҙенең һыҙланыуҙарын еңеп:

Үрһәләнмә, йәнем, ауҙсендә,
Йырылып сыҡ яҙғы ташҡындай.
Йәшмә төҙлө йәш үләндәй ҡалҡын,
Юғалырға үҙең ашҡынма...,

тиһә, «Күрәһең, күнәһең бар...»ҙа иһә ул, халыҡ телендәге «күрәһеңде күрмәй, гүргә инеп булмай» тигән әйтемде күҙ уңында тотоптор, бәлки, ниндәй генә ауырлыҡтарға осраһаң да, «Ерең бар бит имләргә, // Ашыҡмасы иңрәргә...», тип кәңәш итә.

Әгәр йәшертенерәк мәғәнәле «Уҙғандарҙа...» исемле шиғырҙың лирик героиняһы «Донъя бик шәп булмаһа ла, // Көсөм юҡ та, рухым ныҡ», тиһә һәм ошо фекерен түбәндәге юлдар менән йөпләп ҡуйһа:

Ниәтемә етермен бер,
Йәйәүләп йөрөһәм дә.
Йөрәгемдә йырым шыта
Уйҙарым бөрөһөндә,

икешәр юллы ете строфанан торған «Тик үҙемсә...»лә иһә, тормоштоң асылы тураһында уйланғанда, уның тағы бер характер үҙенсәлеге асылып киткәндәй:

Атлата ул ерҙең өҫтәрәнән,
Арып йығылғансы көстәреңдән.

Ә мин риза ошо йәннәтемә,
Каршымын тик бары йәлләтеүгә.

Анафора алымына таянып яҙылған «Зарланмайым» һәм «Етмәне...» тигән шиғырҙар ҙа мотивтары менән бер-береһенән алыҫ түгелдәр. Тәүгеһенең лирик героиняһы беҙҙең күҙ алдына барына ҡәнәғәт, риза булып йәшәүсе зат һымағыраҡ килеп баҫһа, икенсеһенекеме инә башта үҙенең кәйеф-сафаһы менән уртаҡлаша ла, һуңғараҡ «Һүрәнләнде инде көн йөҙө, // Шымсы һымаҡ баҡты төн күҙе...» тигәнерәк һығымта яһап ҡуя. Һәм шунда уҡ, йәнәш кенә торған «Йыр ҡала» исемле шиғырҙа, лирик героиня үҙ-үҙен тынысландырырға ашыға.

Тәҙрәләрҙән ҡояш яҡты төшә,
Аҡ таң ата йәнә күренәлап.
Моң ағылыр ҡалам иртәһенә,
Һөйөү һүҙе булып йыр ҡала.

«Зарланмайым» менән «Етмәне...»гә «Донъя хәлен уйлап...» тигән шиғыр килеп ялғана. Ғаҙ ҡышына яҡынайғанын һиҙеп–тойоп йәшәүсе лирик героиняның күңел торошо бында бик матур итеп һүрәтләнгән. Берсә яманһыуыраҡ, берсә үкенеслерәк хис-тойғо уятҡан «Йырланаһы йырҙар ымһындыра» тигән һүҙбәйләнеш тә хәтерҙә эҙ ҡалдырмаҫлыҡ түгел. Бер-береһенә һылашып торған рифмалар инә шағирәнең әҙәби оҫталығы артҡандан-артҡанлығын күрһәтеүсе фактор.

«Даръяларҙа йөҙәм», «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...», «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...» тигән шиғырҙарҙа лирик героиняның характер үҙенсәлегенә яңы һыҙаттар өҫтәлә. «Даръяларҙа йөҙәм»дә, әйтәйек, ул үҙен «Дауылдарҙы еңер кеше мин!» тип таныта, «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...»лә уның, ысынлап та, көслө рухлы, юғалтыуҙар кисергәндә лә бөгөлөп төшмәгән, киреһенсә, йәшәү дәрте менән янған кеше икәнлеге күренеп тора. «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...»ҙә инә лирик героиня көтөлмәгәнсәрәк асылып китә: ул бер кемде лә күңеленә яҡын юлатмаған, уның бәтә йыуанысы, илһам сығанағы – тәбиғәт булған. «... Тыңлап ятам йылға шауын, // Йылғаларҙан йырҙар отам», ти ул. Шиғырҙың һуңғы строфаһында лирик героиняның бөтә булмышы, хәл-әхүәле сағылыш тапҡан шикелле:

Тик күңелем барыбер яңғыҙ,
Яңғыҙлығым яңғыҙ һүнә,
Шәмсыраҡтай янып бөтөм,
Сабыр итәм, йәнем түҙә.

Ниһайәт, «Тынысланыр йәнең...». Уны М. Хисамованың быуат башындағы тәүге ун йыллыҡты ослап ҡуйған шиғыры, тиергә булалыр. («Ағиҙел», 2010, 5-се һан). Дүрт кенә строфанан торған (Миңлегөлдөң шиғриәтенә хас сифаттарҙың береһе тап бына ошо ҡыҫҡалыҡта ла инде!) һәм тыштан ябай ғына күренгән был шиғыр ерҙә йәшәүҙең асылы тураһында уйланыуҙарға ҡоролған. Лирик героиня үҙ алдына күп һорауҙар ҡуя. Ни өсөн шатлыҡ-һөйөнөстәр, мәҫәлән, көйөнөстәр менән йәнәш йөрөй? Ни өсөн донъя айышы үҙе бер сер? Ни өсөн тормош өйөрмәһенә эйәреп, сәсәрҙәй булып йүгерәбеҙ, янабыҙ-көйәбеҙ ҙә, «Һуңғы төйәгебеҙ – тыуған ергә // Күҙ йәштәре булып тамабыҙ?..». Минеңсә, риторика ла, фәлсәфә лә етерлек был һорауҙарҙа. Ҡайһы яҡтан киләһең бит уларға! Бөтә ғиллә лә – шунда.

Ғәжәп, ошоға тартым һорауҙар Гүзәл Ситдиковала ла яңғырап киткеләй. «Ҡанундар» тигән шиғырҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, ерҙә йәшәү тәртибенең ҡасан һәм ҡайҙан килеп сығыуы, ул тәртиптең кем тарафынан уйлап табылыуы һәм урынлаштырылыуы хаҡында баш вата:

Мәңгелектә теҙгә бөгөр төҫлө,
Ҡанун уйлап бәндә үртәлә,
Ә ҡануны бөгөн таман булһа,
Өр-яңыһы кәрәк иртәгә.

«Кеммен?..» тигән шиғырҙың лирик героиняһы иһә уғата ла ҡатмарлыраҡ һорауҙарға яуап эҙләй. Нимә ул йән? Йән нимәнән яратылған? Нимә ул тән? Йәнде йөрөтөүсе һауытмы? Әллә йән үҙе бер һауытмы?

Был шиғырҙарҙың икеһе лә Г. Ситдикованың яңы быуатты асып ебәргән «Һәр кешенең – үҙ ҡояшы» тигән шәлкеменән («Ағиҙел», 2010, 3-се һан) алынды. Шәлкемгә ун алты шиғыр тупланған. Уларҙың күбеһе («Һыуыҡ ҡояш сабынында», «Ямғыр булып...», «Ғүмер шәме», «Сағым», «Айһыҙҙарға», «Ай һәм Ҡояш», «Ҡанат», «Аҡ юл – юлаҡ», «Шағир йыры – Миңеште», «Аҡ күлдәк», «Бирнә») иғтибарҙы йәлеп итерлек. Йәкмәткеләре менән дә, һүрәтләү саралары йәһәтенән дә.

Дөрөҫ, Гүзәлдең строфаларға бүлмәйсә, тотош юлдар теҙмәһенән торған шиғырҙары уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн, бәлки, бер аҙ юғалта ла төшәлер. «Ямғыр булып...» исемле шиғырҙа, әйтәйек, дүрт тапҡыр ҡабатланған һәм әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан дүрт киҫәккә бүлгән «Һыуҙан ҡурҡам, ҡурҡам уттан...» тигән рефрен булмаһа, лирик героиняның «Ямғыр булып яуырмын бер // Үҙем ятыр гүрҙәргә» тигән һығымтаһын уҡыусы нисегерәк ҡабул итер ине икән? Ижад практикаһында, төрлөлөккә ынтылған хәлдә лә, күнегелгән, күптән һыналған формаларға тоғролоҡ наҡларға тырышыу хәйерлерәктер, моғайнын. Дүртәр юллы өс строфанан торған «Ай һәм Ҡояш» тигән шиғыр ана нисеҡ матур яңғырай! Үҙе ыҡсым, үҙе фәһемле: бала кешегә һәр ауылдың үҙ ҡояшы, үҙ айы булғандай тойолһа, мәктәптә уҡый башлағас ул Ҡояштын да, Айҙың да берәр генә икәнлегенә төшөнә; ә бына тормошҡа ҡарашы киңәйгән лирик героиня өсөн «Һәр кешенең – үҙ ҡояшы, // Һәр кешенең – үҙ айы». Һәм уның менән килешмәү мөмкин түгел.

Әлбиттә, строфаларға бүленмәгән өсөн генә Г. Ситдикованың шиғырҙарына ҡырын ҡараһаҡ, ғәҙәлһеҙлек булыр ине. Улар, өҫтә әйтелгәнсә, ысынлап та, иғтибарҙы тарта. Ҡоро һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, тағы бер шиғырға тукталайыҡ. «Ғүмер шәме» тип атала ул. Кеше ғүмере тураһында ла, яҡтылыҡ өләшкән шәм хаҡында ла шиғырҙар юҡ түгелдер, әҙләй китһәң. Ә бына Г. Ситдикова был ике һүҙҙе йәнәш ҡуйып, бәйләнешкә индергән дә, үтеп барған ғүмерҙе ике остан янған шәм менән сағыштырған һәм шул рәүешле өр-яңы образ тыуҙырған. Артабан, быҫҡып ҡына янған шәмде быҫҡып ҡына уткән ғүмергә тиңләп, был образдың йөкмәткеһен уғата ла тәрәнәйтеүгә ирешелгән: лирик героиняның һис кенә лә быҫҡып янғыһы килмәй. Һәм ул «Тик ыҫланып, күрер-күрмәҫ кенә // Йәшәүҙәрән бармы икән йәмдәр?!» тигән риторик һорау ҡуя. Һорауға аныҡ ҡына яуап талап ителмәһә лә, лирик героиня ахыр сиктә үҙенең ҡарашын һәм теләген уҡыусынан йәшермәй:

Күмер түгел, көлдәр генә ҡалһын,
Янып бөтмәй ҡалмаһын тик һүнеп.

Егерме дүрт юлдан торған «Ҡанат» исемле шиғыр ҙа фәһемле күренә. Был әҫәрендә автор лирик героиняның фекерләү ҡеүәһен эшкә егеп, әҫәлрҙең дөйөмләштерелгән портретына яңы бер һыҙат өҫтәгән. Тәүге дүрт юлда (шартлы рәүештә, әлбиттә, сөнки шиғыр

әүәлгесә строфаларға бүленмәгән) ул «Ҡанаттарым минең – әсәйемдән, // Хаталарым иһә – үҙемдән» тип таныһа, һуңғы ике юлда инде бөтә хаталарҙы, етешһеҙлектәрҙе үҙ өҫтөнә ала:

...Ҙурлар ерем булһа – әсәйемдән,
Хурлар ерем булһа – үҙемдән.

Район гәзитендә эшләгәндә, байтаҡ йылдар, көн дә тип әйтерлек ябай хеҙмат кешеләре менән аралашып йәшәгәнгә күрә микән, Гүзәл Ситдикова шиғриәтендә йыш ҡына халыҡ аңынан, халыҡ аҡылынан, халыҡ йолаларынан үҫеп сыҡҡан мотивтар яңғырап китә. Сәс толомона бәйле юрауға таянып яҙылған «Аҡ юл – юлаҡ» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, автор, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә итеп, тыуған ерҙән дә ҡәҙерлерәк һәм яҡыныраҡ урын юҡлығын иҫкәртә:

Уралыма өҙөлөп ҡайтам
Ете диңгеҙ, ил ҡурап.
Сәс ҡалдырам юлаҡ - юлаҡ
Уткәндәргә юл һорап,
Киләсәккә юл юрап.

«Бирнә» тигән шиғырҙың тамырҙары бөтөнләйе менән ауыҙ-тел ижадына барып тоташҡан, тиһәк тә була. Әҫәрҙең һуңғы дүрт юлы (шиғыр строфаларға бүленмәгән) быға асыҡ дәлил:

Ҡыҙыл башлы һөлгө сиктем,
Нағыштары – һомай ҡош,
Һомай – ҡошло өйҙә генә
Йәшәрҙәргә, Хоҙай, ҡуш.

«Бирнә»нең дауамы булып «Яҙмыш – таш» («Ағиҙел», 2005, 12-се һан) тора, тиергә мөмкин. Уға ҡыҙын кейәүгә оҙатҡанда әсәнең «Барған ереңә таштай бат» тигән теләге эпиграф итеп алынған. Боронғонан килгән был халыҡ әйтеменең беҙҙең заманда, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кире мәғәнәлә йышыраҡ осрауы хаҡында көрһөнөп тә, әсенеп тә яҙа шағирә:

Һирәгерәк әммә хәҙер
Әүерелеүсе ташҡа.

Диңгеҙҙәре һайығамы –
Заман башҡа, заң башҡа.

Беҙҙең һәммәбеҙҙе лә атлаған һайын тиерлек өйкәп торған «бәхет» төшөнсәһе тураһында ла Г. Ситдикова үҙенсәлекле генә фекер йөрөтә. Иҫ киткес тормошсан яңғыраған һәм халыҡсан тел менән яҙылған «Айһыҙҙарға» тигән шиғырҙың лирик героиняһы биргән өгөт-нәсихәт менән килешмәүсе табылыр – табылыуын, әммә ундайҙар күп булмаҫ:

Тулған ай ул – түҙгәнгә,
Бәхет – көтә белгәнгә.
Айҙан да ҙур сабырлыҡ бир
Айһыҙ төндәр килгәндә.

Туранан-тура «Бәхет» тип аталған икенсе бер шиғырында («Ағиҙел», 2002, 6-сы һан) автор, әхлаҡ принциптары юғарылығынан ҡарап, был төшөнсәнең нигеҙҙәрен нисек аңлауы менән уртаҡалаша: әгәр бәхетеңде күрмәй уҙһаң, уны дуҫың табышһың һәм һинең менән бергә шатланһың; әгәр дуҫың менән аймылышһаң, уны бәхет эҙләшһен. Дүртәр юллы ике генә строфанан торған «Өмөт» тигән шиғырҙы ла («Ағиҙел», 2005, 12-се һан) ошо юҫыҡта ҡарарға мөмкин. Уның лирик героиняһы, күкте болот ҡаплағанда ла, «Бар ул ҡояш, ҡояш бар ул!» тигән ышаныс менән йәшәргә саҡыра уҡыусыны.

Теге быуаттың ахырында, быныһының башында сәйәсмәндәр донъяһында ҡайнаған шағирә Гүзәл Ситдикова, һирәк-мирәк кенә булһа ла, үҙенең ижадында был өлкәне лә ситләтеп үтмәй. Дөрөҫ, башҡалар һымаҡ артыҡ сиселеп китмәй: шәхсән ҡараштарын ҙур һаҡлыҡ менән генә белдерә. Ошо йәһәттән, «Сағым» тигән шиғыр – ғәйәт ғибрәтле әҫәр. Ул мәҫәлгә лә тартым, ләкин мәҫәл түгел. Дөрөҫөрәге – аллегория алымына ҡоролған шиғыр. Унда һүҙ үҙ ашын екһенмәй, ят мөхиткә ҡыҙыҡҡан «колорадо ҡуңыҙы» хаҡында бара. Һәм ошо образ аша автор ярайһы уҡ тәрән фекер әйтеүгә өлгәшкән: «...Ялған алтын сағымынан // Албарғап ҡалған халҡым». Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына булһа ла, «Аҡ күлдәк»тә лә сәйәси мотив яңғырап ҡиткән:

Өҫтәремә кейер инем,
Аҡ күлдәгем – йәл генә.

...Кергә ҡатҡан илде баҫты
Кер күтәрер йәнлеләр.

Был мотивты «Карауанһарай», «Диңгеҙ кистерһәләр...», («Ағиҙел», 2002, 6-сы һан), «Башҡорт иле», «Система» («Ағиҙел», 2005, 12-се һан) тигән шиғырҙарҙа ла шәйләргә мөмкин «Диңгеҙ кистерһәләр...» – строфаларға бүленгән шиғыр. Уның «Димсе диңгеҙ кистерә» тигән тәрән йөкмәткеле һәм бик урынлы яңғыраған эпиграфы ла бар. Тағы ла шул аллегория алымына таянып, автор баҙарҙағы алдау-йолдауҙарҙы һиҙҙермәйсә генә сәйәсәт юҫығына күсерә лә, реаль тормошобоҙҙа һәр төрлө димләү-маҡтауҙарҙан һаҡ булырға өндәй.

«Башҡорт иле» тигән шиғырҙа Г. Ситдикова туған халҡына хас дөйөм сифаттарҙы, уның ҡайһы бер характер үҙенсәлектәрен оҫта ғына асып һалған. Шиғырҙы ослап ҡуйған «Иман сәсһең, дуҫ күбәйтһең, // Торған ерен ожмах итһен // Башҡорт иле!» тигән теләк тә күңелгә хуш килерлек. Тик бына шиғырҙың башындараҡ яңғыраған «Иманым, тип, ил-ғәмем, тип // Ҡаның ҡойған, йәнен ҡыйған...», тигән юлдар тулыһы менән ысынбарлыҡты сағылдыра микән? Эйе, һүҙ юҡ, башҡорт ҡанын да ҡойған, йәнен дә ҡыйған, ләкин ҡанын ҡойған саҡта алғы планда нимә торҙо икән: иманмы, әллә иҡтисади һәм сәйәси азатлыҡ мәсьәләләреме? Ә бына «Система» шиғырына һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә. Дауаханала тамырға дарыу ебәрә торған система унда, әгәр мин дөрөҫ аңлаған булһам, йәмғиәт ҡоролошо менән йәнәш ҡуйылған. Әгәр шулай була ҡалһа, был – шағирәнең поэтик табышы, тимәксемен.

Иман тураһында һүҙ сыҡҡас, Г. Ситдикованың «Сабыр доғаһы» һәм «"Йәшен" сүрәһенән» тигән шиғырҙарына ла («Ағиҙел», 2007, 12-се һан) туҡталып китеү урынлы булыр. «Сабыр доғаһы» – ҡаршылыҡлыраҡ фекер уята торған шиғыр. Ул ҡаршылыҡ эпиграф урынына ҡулланылған «Үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы, эсеп уҙғандарҙы халкыбыҙ егерменсе быуттың 80-се йылдарына тиклем зыярат тышына ҡуя ине» тигән һүҙҙәрҙән үк башлана кеүек. Шиғырҙың тәүге юлдарында автор беҙҙең заманда зыяраттарҙың киңәйеүен фажиғәле үлемдәрҙең артыуына бәйләй. Ләкин, күп тә үтмәй, «Тик заманға һылтанмайыҡ әле – // Ҡай заманда еңел йәшәлгән?!» тип аҡлана башлай. Бер аҙҙан Изге Китапҡа һылтана: «Ер йөҙөндә күргән бар ауырлыҡ // Ожмах кеүек кенә тойолор!» Тимәк, баҡыйлыҡта кешене уғата ла зәһәрерәк ҡыйынлыҡтар һәм ауырлыҡтар көтә? Ахыр сиктә зыяраттарҙың киңәйеүе (икенсе төрлө әйткәндә – үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыусыларҙың,

эсеп үлеүселәрҙең күҙгә күренеп ишәйеүе) баҡыйлыҡҡа күскән ҡанбабаларбыҙға япһарыла: йәнәһе, улар баҡыйлыҡҡа сабыр доғаһын тапшыралмай күскәндәр, уларҙың «Доғаларын белмәй йәшәгәнгә // Ҡыйралып та бара донъяһы». Әлбиттә, бында байтак дәлилдәр, тере факттар килтереп, автор менән йәнле бәхәс ҡороп еберергә булыр ине. Ләкин уны кәрәк тип тапмайым. Сөнки шағирә үҙе лә, зирәк аҡыллы укыусы ла донъялар ҡыйратылыуҙың төп сәбәбе доғаларҙа түгеллеген бик яҡшы аңлайҙар, тип уйлайым.

«“Йәшен” сүрәһенән» исемле бәләкәй генә шиғырҙы «Сабыр доғаһы»ның игеҙәге тиергә була. «Ҡайғы-хәсрәт – ул күк күкрәү генә» тип ебәрелә бында хатта. Шиғыр «Бәхет орлоҡтары шытһын өсөн // Түккән тирең, түккән йәшең кәрәк», тип тамамлана. Тир түгеү – аңлашыла, тәбиғи хәл. Ә бына йәш түгеү?! Шулай ҙа йәш түкмәйсә генә бәхеткә ирешеп булмай микән ни? Ниндәй аяныс!

Гүзәл Ситдикованың быуат башындағы поэзияһында автор менән лирик героиня араһындағы сиктәрҙең юйылып бөтә яҙған саҡтары ла булғылай, минеңсә. Метафораға ҡоролған «Һыуыҡ ҡояш сабыныда» исемле шиғырҙағы «Мең балҡышлы сәскә түгел // Күрән генә гөлләмәм» тигән юлдар, әгәр минең фаразым дөрөҫкә сыҡһа, авторҙың үҙ ижадына биргән баһаламаһы түгелме һуң? Шулай була ҡалһа, «Күбәләргә һалам инде, // Үләнем сейле-бешле» тигән юлдар бер аҙ аптырауға һала лабаһа: сейле-бешле үлән тора-бара күгәреп серемәҫме? Тыйнаҡ булыу – һәйбәт сифат. Ләкин тыйнаҡ булып күренергә тырышҡанда ла һаҡлыҡ күрһәтергә кәрәктер шул.

Ә бына «Тау ҡыҙы», «Ғәмәл дәфтәре», «Зәңгәр толпар» тигән шиғырҙар («Ағизел», 2002, 6-сы һан) уҡыусыла икеле-микеле фекер уятмаҫ. Уларҙың тәүгеһендә лирик героиня үҙен тау ҡыҙы тип атай, уға табына. Шиғырҙағы алты строфаның һәр ҡайһыһы героиняның (шул иҫәптән, авторҙыңдалыр, тип уйлайым) тормош юлына, характерына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе һүрәтләүсе юлдар менән тамамлана: «Тау артырға тауҙар өйрәтте»; «Йығылмаҫҡа тауҙар өйрәтте»; «Юл табырға тауҙар өйрәтте»; «Сер һаҡларға тауҙар өйрәтте», һ.б.

«Ғәмәл дәфтәре» яҙылышы-яңғырашы йәһәтенән бер аҙ ризаһыҙлыҡ уятып ҡуйғылай-ҡуйғылауын, әммә барыбер һәйбәт шиғыр ул. Формаһы үҙенсәлекле: лирик героинянының донъялылҡта ҡылған хаталары ла, күрһәткән изгелектәре лә, йәнәһе, уның ғәмәл дәфтәренә яҙып барыла. Әҫәрҙең дөйөм йөкмәткеһенән күренеүнсә, лирик героиня үҙ булмышына тәнкиттән ҡарай, уның бөтә ҡурыҡҡаны – нахаҡлыҡ. Үҙен «Ҙур

Ғаләмдең кескәй йән эйәһе» тип атауы ла бер яңылыҡ. «Уттан алыр, һыуға һалмаҫ, тиеп // Өмөт тотҡан булам дуҫтарыма» ла хәтерҙә ҡалырлыҡ.

«Зәңгәр толпар» тигән шиғырҙы «Һыуыҡҡояш сабынында»ның көҙгөләге кире сағылышы тиергә була. Сөнки баныһында автор, үҙенең шиғриәттәге урыны һәм яҙмышы хаҡында уйланғанда, һағыраҡ фекер йөрөтә, «сейле-бешле» үләнгә урын юҡ. Шиғриәтте йүгәнһеҙ ат менән сағыштырыуы ла ҡыҙыҡлы. Әлбиттә, был сағыштырыу менән бәхәсләшеп тә алырға мөмкин. Әммә дөрөҫлөк Гүзәл яғында кеүек тойола миңә. Шулай ҙа киләсәктә, тормош мәшәҡәттәренән бер аҙ арына төшкәс, шиғриәткә яуаплылыҡты үғата ла арттырып, кәрәк саҡта уны ауыҙлыҡлап та тотоуын теләр инем уға.

Бынан ун алты йыл элек «Шиғриәттә заман һулышы» тигән мәҡәләмдә мин былай тип яҙғайным: «Хатта йәш шағирәләребеҙҙең береһе Тәнзилә Дәүләтбирҙина ла «үҙгәртеп ҡороу» алып килгән бәлә-ҡазаларға битараф ҡалмаған. «Беҙҙең тормош – хәҙер шайтан ҡуласаһы», «Сиктәр аша, ситән аша хәйер бирә күршеләр, был ахмаҡтар илен маҡтап, йылмайып күрешәләр», ти ул. Һәм ошо ҡыҫҡа ғына шиғри юлдарҙа ла беҙҙең бөгөнгө иктисади хәлебеҙҙе ифрат үтемле, образлы итеп күрһәтә алған» («Ағизел», 2002, 6-сы һан, 101-се бит).

Егерменсе быутатты Тәнзилә Дәүләтбирҙина ҡулына өс китабын тотоп оҙатты. Егерме беренсеһен ун өс шиғырҙы эсенә алған «Ҡош юлында һынау кисеп...» тигән шәлкем менән ҡаршыланы («Ағизел», 2001, 5-се һан). Дөрөҫ, был шәлкемдән һуң ул бер аҙға тынып ҡалғандай тойолдо. Һәр хәлдә, «Ағизел»дә күҙәтеп барыусыларға шағирә үҙенең барлығын ике мең бишенсе ыйлдың ахырында ғына белгертеп ҡуйҙы. Әммә һуңғы ваҡытта ул барыбер ҙә үҙ шәйенә ҡайтты һымаҡ. Яңы быуттың тәүге ун йылында уның «Ағизел» биттәрендә дөнъя күргән алтмышлап шиғыры шулай уйларға форсат бирә.

Ваҡыт тигәнең бер кемде лә аямай, ситләтеп уҙмай. Шул иҫәптән – Тәнзиләне лә. Өҫтә телгә алынған мәҡәләнән һуң үткән дәүерҙә ул үҙе лә, уның шиғриәте лә олпатлана төштө. Әлбиттә, «олпатлана» төшөнсәһенең ижадҡа ҡағылышлыһын шағирә тыныс ҡабул итер, әҙерәк ҡыуанып та ҡуйыр. Ә бына уның үҙенә ҡағылған өлөшөн нисек ҡабул итере хаҡында бер ни ҙә әйтә лә, фараз да ҡыла алмайым. Шуны ғына хәтергә төшөрөп китәм: әлегә тиклем донъя йөҙөндә бер кем дә үҙенән – үҙе ҡасып ҡотола алмаған. Тәнзилә үҙе лә, уның быуат башына

ҡараған шиғырҙарында хәрәкәт итеүсе лирик геройнялары ла олпатлана төшкән икән, һис тә ғәжәп түгел. Сөнки бөтә нәмә лә Ваҡыт ҡарамағында, беҙ бөтәбеҙ ҙә – Ваҡыт ҡолдары.

Т. Дәүләтбирҙинаның быуат башында ижад иткән әлеге алтмышҡа яҡын шиғырын бергә туплап күҙ уңынан уҙғарһаҡ, уларҙың үҙәгендә яңғыҙлыҡ исеменә тартҡан һәм шунлыҡтан баш хәрефтәр менән яҙылырға хаҡлы Лирик героиня образы торғанлығын шәйләрбеҙ. Был героиня әҫәрҙән – әҫәргә күсә, шул рәүешле уның бәтә булмышы – холоҡ-фигеле, характер үҙенсәлектәре, эске кисерештәре асыҡланғандан – асыҡлана бара, образ да тәрәнәйгәндән – тәрәнәйә. Лирик героиня менән автор араһында ҡайһы бер уртаҡлыҡтар һәм оҡшашлыҡтар ҙа осраштыралыр, бәлки. Ҡабатлауҙар ҙа күҙгә салынып киткәләй, ҡыҙғанысҡа күрә.

Әйткәндәр бушҡа яңғырамаһын өсөн, шиғырҙарҙың үҙҙәренә мөрәжғәт итеү хәйерлерәк булыр. «Бесәндән ҡайтҡанда», мәҫәлән, бала саҡ хәтирәләренә таянып яҙылған. Унда лирик героиняның атаһы образы ла ялтлап китә, йәйге тәбиғәт күренештәре лә бик матур итеп һүрәтләнгән. Метафораға ҡоролған «Ҡарағайҙар күктән нур имә», «Һөттәй күперек болот» һымаҡ сағыштырыуҙар ҙа шиғырға айрым бер йәм өҫтәп тора. Әҫәрҙең ахырында автор, әлеге шул бала сағынан хәтеренә һеңеп ҡалған хәл-ваҡиғаларҙы иҫләп, көтөлмәгәнсәрәк яңғыраған һөҙөмтә яһап ҡуя: «Донъя ҡыуып, эштән баш сыҡмаҫ». Был һығымта менән кем генә бәхәсләшер икән!

«Йәш сағымда миңә “болан” тиеп…» исемле шиғырға ла ойотҡоно бала саҡ хәтирәләре һалған. Үҫмер сығында лирик героиня бүреләрҙән генә ҡурҡҡан булһа, хәҙер инде, аҙымдары һалмаҡланғаҫ, уға «хәйлә-төлкө үрелә». Ләкин ул ебеп тәшкәндәрҙән түгел:

Үрелһә лә, буйы етмәҫ әле,
Ғорур башым ашыр болотҡа.
Үҙ баһамды нығыраҡ аңлармын мин,
Төлкө үртәп, бүре олотһам.

Ошондайраҡ мотивты «Барыһынан: йөрәк яраһынан...» тигән шиғырҙа ла һиҙемләргә мөмкин. Лирик героиняның күңел торошон сағылдырған был шиғырҙа ул бик тынғыһыҙ, үтә борсолоусан, һәр ваҡыт нимәгәлер ынтылып йәшәүсе, үҙенең асылына төшөнөргә тырышыусы шәхес булып күҙ алдына килеп баҫа:

Сәм уттары ҡайнап эстәремдә,
Нурға ҡойонор тағы тышҡынам, –

тип бүлешә ул уҡыусы менән.

Шулай ҙа лирик героиняның булмышы, эске донъяһы, кисерештәре нескә хистәр, уй-тойғолар менән һуғарылған әҫәрҙәрҙә сағыуыраҡ асыла һымаҡ. Ошо йәһәттән үҙенең төҙөлөшө менән дә, йөкмәткеһе яғынан да «Хәҙер миңә бер ни кәрәк түгел...» тигән шиғыр иғтибарҙы йәлеп итерлек. Алтышар юлдан торған өс строфаның һәр ҡайһыһы тарҡау анафораға тап килгән «Хәҙер миңә бер ни кәрәк түгел...» тигән юл менән башлана ла, ике юлдан торған һуңғы строфалағы «Хәҙер миңә бөтә нәмә кәрәк!» тигән һүҙбәйләнеш әҫәрҙең мәғәнәһен йөҙ ҙа һикһән градусҡа бора ла ебәрә. Ниңә шулай? Сөнки тәүге строфала лирик героиняға доньяның ҡыҙығы киткәндәй, икенсе строфала – дуҫ-иштәре ситләшкәндәй, өсөнсө строфала уның йөрәге талғандай, күңеле арығандай тойола. Әгәр шиғырҙа һүҙ гел ошо тирәлә генә барһа, бик күңелһеҙ булыр ине. Бәхеткә күрә, өсөнсө строфаны ябып ҡуйған «Мине тапты һинең ышаныс!» тигән юл яҙмаға килә. Был юл шиғырҙың һуңғы строфаһына асҡыс хеҙмәтен үтәй, тиһәк тә, хата булмаҫ: ышаныс тыуғас, лирик героиняның кәйефе көтмәгәндә ыңғай яҡҡа үҙгәрә лә китә:

Хәҙер миңә бөтә нәмә кәрәк!
Был донъялар – баллы алтын кәрәҙ!

«Туҙғып–туҙғып, сәскә саңы булып...» тигән шиғыр ҙа хистәргә бай. Татлылыҡты һәм уңғанлыҡты символлаштырған сәскә саңы менән бал ҡорто образы аша шағирә лирик героиняһының моңһоуыраҡ һәм бошонҡораҡ тойолған күңел көҙгөһөн көтөлмәгәнсәрәк асып һалған:

Ғүмерең буйы эҙләп таптың мине,
Беләһеңме ҡәҙерем, ҡәҙерлем?
Ҡәҙерем булған өсөнмө шулай
Мин саң булырға ла әҙермен?
Ниңә ҡәҙерем юҡ, ҡәҙерлем?

Әҫәрҙең уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттырыусы аллитерация күренеше тураһында һөйләп тороуҙың кәрәге юҡтыр бында.

Ҡайһы берҙә лирик героиняһының эске кисерештәрен, күңел торошон тулыраҡ итеп асып һалыу өсөн Т. Дәүләтбирҙина тәбигәт күренештәренә лә мәрәжәғәт итә. «Хыялый төн», «Көҙ», «Көҙгө һағыш» тигән шиғырҙарҙа был айырыуса күҙгә ташлана. Билдәле булыуынса, йылдың көҙгө миҙгелен беҙ күберәк яҡты, матур буяурҙарҙа күрергә күнеккәнбеҙ. Халыҡ телендәге «көҙгө байлыҡ» тигән төшөнсә лә, бәлки, шуға бәйлелер. Ләкин хәҡиҡәткә тоғро ҡалһаҡ, көҙҙөң йыш ҡына Т. Дәүләтбирҙина шиғырындағыса саҡтарына ла шаһит булырға тура килгеләй бит: «Тышта моңһоу, шомло, ҡараңғы». Шуға күрә автор тәүге строфалағы:

Көҙ ҙә килде. Килмәҫ кеүек ине.
Тышта моңһоу, шомло, ҡараңғы, –

тигән юлдарҙың бер генә һүҙен үҙгәртеп, һуңғы строфала ҡабатлай ҙа, ашыға–ашыға:

Кыш килһен дә, тиҙерәк
шыҡһыҙ донъя
Йәшеренһен ҡарға,
күмелһен! –

тигән юлдар менән тамамлап ҡуя. Шиғыр тасуирлау сараларының муллығы менән дә күңелде үҙенә тартып тора. Яңысараҡ яңғыраған метафоралар, сағыштырыуҙар ҙа әҫәргә йәм өҫтәй. Ергә ҡойолған япраҡ, мәҫәлән, лирик героиня өсөн – сыбар түшәк тә, бер үк ваҡытта – һағыш та; шул «һағыш аша һулҡый ерҙең йөрәк ҡағышы...» (иғтибар итегеҙ: йөрәк тибеше урынына – йөрәк ҡағышы); ер өҫтөн япҡан япраҡ – ауыр уй, уны «күтәралмай ер ҙә ауырый» һәм «шуға донъя еүеш, эс бошорғос...».

«Көҙгө һағыш»тың лирик героиняһы (шиғырҙың атамаһынан уҡ һиҙелеп тороуынса) үҙенең хәл-әхүәлен, кәйеф-сафаһын тирә-йүндә хөкөм һөргән күңелһеҙ ҙә, моңһоу ҙа күренештәр аша асып һалған. Был күренештәр, аңлашыла инде, уны яманһыу һығымтаға килтерә: «Көҙөм етте. // Килер йәйҙәремдә // Юҡ һөйөүҙе эҙләп // Йәйләмәм».

Ә бына «Хыялый төн»дө мин поэзияның юғары өлгөһө тип йөрөтөлгән шиғырҙар рәтенә индерер инем. Был юлы Тәнзиләнәң лирик героиняһы беҙҙең алға уғата ла тәрәнерәк хистәргә бирелергә

һәләтле шәхес булып килеп баҫа һәм ул хистәр шиғырҙа бик матур тасуирланған. Лирик героиняның хыялдарында актив роль уйнаған Ел мөстәкил образ шейенә ингән хатта: елберҙәп, героиняның йөҙҙәренә ҡағылғанда, уның биттәренә «наҙға тулы илаһи нур яғылғандай» була; елберҙәп, героиняның хистәрен, әйтерһең дә, «йыһандарға алып китә»; «Күк йөҙөндә, күк диңгеҙҙә // Ҡарпып йөҙөр балыҡ итә» уны. Лирик героиняның ошо хистәр менән бергә тыуған хыялы шиғырҙың һуңғы ике строфаһында үтә матур, үтә нескә итеп асып һалынған:

Шул балыҡҡа эйә булыр
Йыһандағы шағир-аусы –
Ҡауышһын, тип, ике хыял,
Елдәр булыр маһир яусы.
Ул шағирҙа үҙ йөрәген
Йондоҙ итеп миңә атыр,
Йыһан ярып төшкән йөрәк
Күңелем дарьяһына батыр.

Т. Дәүләтбирҙинаның быуат башындағы шиғриәтендә байтаҡ урынды мөхәббәт темаһына бәйле лирика биләп тора. Был мәңгелек тема «Ҡаурыйын ҡойған ҡәләмгә...», «Китәм», «Һин юғалһаң», «Мөлдөрәмә тулы һыулы күлдәй...», «Ватыҡ сәйнүк», «Һинең кеүек мине кем яратыр...», «Һүҙ ҡушырға ҡурҡам һиңә...», «Мәғәнәһеҙ булып ҡалды донъя...», «Ҡаса торған мәл түгел бит...», «Ғүмер тәртәһенән ырғып...», «Моңло йыр», «Икебеҙ» тигән шиғырҙарҙа төрлө яҡлап яҡтыртылған. Мөхәббәт утында яныусылар кисерә торған бөтә хис-тойғолар ҙа: һөйөнөстәр – көйөнөстәр ҙә, үкенестәр – ныҡтауҙар ҙа, юҡһыныуҙар – һыҙланыуҙар ҙа етерлек бында. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһы хаҡында бер юлы һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел. Шулай ҙа, уҡыусының иғтибарын йәлеп итеү ниәтенән, бер нисәһенә генә булһа ла (өҫтә һанап кителгән шиғырҙарҙы «Ағиҙел»дең 2005 йылғы 10-сы һәм 2007 йылғы 4-се һандарында табырға мөмкин) туҡталып китһәк, зыян итмәҫ.

«Ҡаурыйын ҡойған ҡәләмгә...» тигән шиғыр (ни сәбәптәндер ул башта «Ағиҙел»дең 2001 йылда сыҡҡан 5-се һанында, унан һуң 2005 йылғы 10-сы һанда баҫылды) тәү тапҡыр уҡыған мәҙәгерәк күренһә лә, тора-бара уның үтә лә нескә, үтә лә саф тойғолар менән һуғарылғанлығына төшөнәһең: «Ынйы булып тамған» йыры «йөҙ

йәшәрен» белһә лә, лирик героиня «Болотһоҙ бәхет ул – һөйөү, // Ә яңғыҙлығым – бәлә» тип танырға мәжбүр.

Яңғыраштары буйынса «Моңло йыр» менән «Икебеҙ» тигән шиғырҙар ҙа күңелгә йәтешле. Тик йөкмәткеләренә аныҡлыҡ индерелмәүе генә бер аҙ уйға һала һәм символистар стилен хәтергә төшөрөп ҡуя. Әгәр «Моңло йыр»зың лирик героиняһы кемдер хаҡында (бәлки, һөйгәнелер) күңелендә яралған йырҙы ауыҙ тултырып, кешегә ишетерлек итеп йырлаһа, уның һүҙҙәре буталырҙай, уға күҙ тейерҙәй тойолһа (ә был йыр уның ҡанына һеңгән, йөрәгенән үтеп, бөтә тәне буйлап таралған), «Икебеҙ»зең лирик героиняһы иһә кемгәлер бик рәхмәтле булыуын белдерә, уны үҙенең түңәрәк айы, йөрәк майы тип атай, уның менән булғанда бер кемдән дә ҡурҡмағанлығын бәйән итә, хатта «бер шиғырҙы // Икәүләшеп яҙабыҙ. // Шиғыр менән беҙ матурбыҙ, // Шиғыр менән таҙабыҙ», тип тә өстәй.

Ҡызғанысҡа ҡаршы, ысынбарлыҡ беҙ уйлағандан күпкә ҡатмарлыраҡ шул. «Ватыҡ сәйнүк» тигән шиғырҙың лирик героиняһы үҙенсә хаҡлылар, бәлки:

Һөйөү – ҡулдан тайып төшөр сәйнүк,
Мәңге түгел һөйөү –
Бер сәйлек!
Аҫыл һөйөү инде эләкмәҫ шул
Минең кеүек инһеҙ ҡуллыға.
Өмөттәрем инде япраҡ ҡойған,
Гөл-сәскәләй хистәр
Һулыған.

Күреп тороуыбыҙса, язылышы-яңғырашы менән шиғыр матур, сағыштырыуҙарға бай, фекер тәрән, уйландырырлыҡ. Ә бына «Ҡаса торған мәл түгел был...»да фекер уғата ла тәрәнерәк, киҫкенерәк, хатта бәхәсҡә индерерлек. Икәү бергә үткән ғүмерҙәре йәл булмаһа ла, бер-береһенән туйған икәүҙең артабан да бергә йәшәүе «кисектерер хәл түгел» тигәнерәк идея үткәрелә шиғырҙа. Был идея шиғырҙың һуңғы ике юлында туранап-тура асып һалынған: «Биҙеп, алйыған күңелдәр // Бер-береһенә йәл түгел».

Ошондайыраҡ фекер Т. Дәүләтбирҙинаның «Китәм» тигән шиғырында ла төп урынды алып тора. Тағы ла ҡызғанысҡа ҡаршы тиәйем инде, донъла йыш ҡына осрай торған хәл был шиғырҙа ифрат

тыныс тонда, элегантлы итеп асып һалынған: «Китәм һинән. // Ташламайым. Китәм. // Ташларға һин иҫке әйберме ни?». Китеүҙең сәбәбе лә йәшерелмәгән: «Туң ҡыш менән наҙлы йәй», «һағыш менән шатлыҡ» бер түгел, «ғазап менән бәхет игеҙ түгел». Лирик геройняның һуңғы строфала һүрәтләнгән халәте уҡыусыла бер нидәй ҙә һорау ҡалдырмайҙыр, тип уйлайым:

Үҙ утымда үҙем янып бөттөм
Һине артыҡ шашып яратыуҙан.
Һуңғы һүтлы балан өҙөлөп төштө
Башҡынайын изеп
ҡар ятыуҙан.

«Китәм», «Ватыҡ сәйнүк», «Ҡаса торған мәл түгел был...»дағы мотив, бер аҙ үҙгәреп, «Ғүмер тәртәһенән ырғып...»ҡа ла күскән. Дөрөҫөрәге, темалары буйынса улар ауаздаштар, формалары йәһәтенән дә бер-береһенә бик яҡын торалар.Тегеләре шикелле, «Ғүмер тәртәһенән ырғып...» та яңғырашы менән матур шиғыр, унда бөтәһе лә үҙ урынында: рифмалар ҙа теүәл, һүрәтләү сараларына ла һүҙ тейҙерерлек түгел, тик бына йөкмәткеһенең аяныслыраҡ булыуы ғына әҙерәк кәйефте ҡыра. Ләкин бының өсөн авторҙы ла, уның лирик геройняһын да ғәйепләп булмай, сөнки унда тормошта осрай торған хәл сағылдырылған. Шиғырҙан күренеүенсә, лирик героиня – ғәжәп энергиялы, ғәйәр, иҫ киткес ҙәртле, ғәйрәтле шәхес. Йәшерәк саҡта ул бер кемгә лә баш бирмәгән, елдәй елгән, йәйғор аша һикерергә хыялланған. Әле лә, бер аҙ олоғая төшһә лә, йөрәге ярһыу уның. Тик бына уға һаман да «ярыш сабыр юртаҡ» осрамаған. Шиғырҙы ослап ҡуйыусы «Һиҫкәндереп ҡуя ҡай саҡ // Бысаҡ ҡайраған тауыш» тигән юлдар һағайта-һағайтыуын, ләкин улар һис кенә лә үрҙә тасуирланған көслө рухлы героиняның тәбиғәтенә тап килмәй.

«Ғүмер тәртәһенән ырғып...»та күрһәтелгән бер минутлыҡ йомшаҡлыҡтың сәбәбе нимәлә икән һуң? Философтар раҫлауынса, донъяла сәбәпһеҙ хәл-вакиғалар булмай ла баһа. Ҡуйылған һорауға, бәлки, мотивы буйынса «Хәҙер миңә бер ни кәрәк түгел...»де хәтерләткән «Мәғәнәһеҙ булып ҡалды донъя...» күпмелер асыҡлыҡ индерә торғандыр. Төрлөшәр юллы өс строфанан торған был шиғыр тулыһы менән оксиморон булмаһа ла, барыбер уға тартым. Беренсе строфалағы «Йәнем инде түлһеҙ ҡатындай. // Хис-тойғоға сәсәр

мәлем үткән...» тигән юлдарҙы икенсе строфала «Йәнем йәйҙә ярһып осона. // Хис-тойғомдан һығылып аҡыл тама...» тигән юлдар алмаштыра ла, һуңғы (өсөнсө) строфала ошо метаморфозаның («Мәғәнәһеҙ булып ҡалды донъя...»ның кинәт кенә «Мәғәнәле булып ҡалды донъя...»ға әйләнеп китеүенең) сере асып бирелә:

Күҙҙәремдә күҙең ҡалыу етте,
Донъям китте балҡып, үҙгәреп!
Эй ҡыҙыҡ та инде был ғашиҡтар –
Үҙ донъяһын йәмләй үҙҙәре.

Өҫтә яңғыраған һорауға яуапты табырға «Һығылып илар саҡтарымда...», «Ғашиҡ ҡына ғүмер ҡәҙерен белмәй...» тигән шиғырҙар ҙа ярҙамлаша. Тәүгеһендә лирик геройыняның һыҙланыуҙары башлыса уның характер үҙенсәлеге менән аңлатыла. Характерҙың төп үҙенсәлеге иһә ғүмер юлын үткәндә гел аймылыш аҙым яһауҙа:

Ғүмерем буйҡа үткәненә
Ал таңдарҙа үкһейем,
Үҙем төндә яңы ҡылыс
Һандалдарҙа сүкейем, –

тип тамамлана шиғыр.

Төрлөшәр юллы строфаларҙан торған «Ғашиҡ ҡына ғүмер ҡәҙерен белмәй...» – мөхәббәт темаһына арналған бик матур шиғир. Уның, айырыуса, һуңғы строфаһы уйландырырлыҡ:

Ғашиҡ саҡтар үткәс, хәҙер бына
Ғүмер үтеүҙәре аптыраҡ!
Әллә йәшәү татлы була бара,
Ер тиҙлеген әллә арттыра...

Ләкин Т. Дәүләтбирҙинаның лирик героиняһын мөхәббәт утында янып, гел шунан ғына ғазап сигеүсе итеп күҙ алдына баҫтырһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ. Уның күңел тыныслығын боҙоп тороусы башҡа сәбәптәр ҙә етерлек. Шуларҙың иң әшәкеһе – мәкерлек. Әгәр «Уйҙар – мәке...» тигән шиғырҙың лирик героиняһы мәкерҙәрҙән ҡасып, уйҙары менән мәкеләргә батыуҙан да сирҡанмай икән, һис тә

ғәжәп түгел. «Был көн – бөркөү...»ҙең дә лирик героиняһы ярлыҡауға мохтаж. Поэтик әҫәр булараҡ, был шиғыр, минеңсә, бөтә яҡтан да килгән. Героиняның һыҙланыуҙары, эске кисерештәре метафорик сағыштырыуҙар ярҙамында үтемле, ышандырырлыҡ итеп асып һалынған. Хистәр бәрелеше бында тәбиғәт күренештәре аша бик оҫта һүрәтләнгән. «Нахаҡ» тигән шиғыр хаҡында һүҙ ҡуйыртыуҙың кәрәге юҡтыр, сөнки уның исеме үк әйтеп тора: үҙе тураһында атлаған һайын нахаҡ һүҙ ишетеп йөрөгән лирик героиня «Алсаҡ күңелемде һәр кем // Тапарға ғына тора», тип бошона. Йөкмәткеһе менән ифрат үҙенсәлекле «Дошманыма үлем түгел...» тигән шиғыр – лирик героиняның даирәһе гел дуҫ-иштәрҙән генә тормағанлығына үҙе бер ишара. Күләме яғынан бәләкәй генә ошо әҫәрҙә кешеләргә яла яғып, хәсрәт өләшеп йәшәргә яратыусыларҙың типик портреты төҫмөрләнгән:

Таңға тиклем йөрөп сыға,
Ҡаңғырып боҙоҡ үйҙан –
Йоҡо – ғәннәт баҡсаһына
Хоҙай зур йоҙаҡ ҡуйған!

«Ҡаршылыҡтар була тора...» – шағирә менән уның лирик героиняһы араһындағы айырма юҡ хәленә етә язған шиғырҙарҙың береһелер, бәлки. Мотивы буйынса ул бер аҙ «Ғүмер тәртәһенән ырғып...», «Нахаҡ» тигән шиғырҙарҙы хәтергә төшөрөп ҡуя:

Яҙмыш миңә өйөп кенә тора
Йөгөн, язаларын.
Киттем – барҙым булыр бираҡтырып
Барыһын ҡазаларҙың!

Оломағай шунда бүреләре,
Төлкө сыйнамағай.
Һайыҫҡаны ем булды, тип,
Иркен ҡыланмағай.

«Мин – һауа гимнасы», «Бөтәһе лә алда кеүек ине...» тигән шиғырҙарҙың да лирик героинялары бошонҡораҡ хистәр кисереп, күңел тыныслыҡлығы тойоп көн итәләр. Ике генә строфанан торған «Мин –

һаya гимнасы» аллегорияға ҡоролған. Унда лирик героиняның шәхсән тормошона бәйле берәй күңелһеҙ хәлдәң сағылдырылыуы ла ихтимал. Әгәр шулай була ҡалһа, бик аяныс, әлбиттә. Үҙен «һаya гимансы» тип атауҙың да йәшерен мәғәнәһе бар: лирик героиняның юғары үрләүенән көнләшеүселәр ҙә юҡ түгел, тимәк. Ундайзар яйы сыҡҡанда аяҡ салырға әҙер генә торалар. «Бөтәһә лә алда кеүек ине...»нең нигеҙендә символик йәнәшәлек ята: юлында осрап торған ҡаршылыҡтар һөҙөмтәһендә лирик героиня имән ишеккә асҡыс яраталмай һәм шунлыктан уның тышында баҫып тороpға мәжбүр.

Бәхеткә күрә, Т. Дәүләтбирҙинаның лирик героинялары, беҙҙең ата – улды, инә – ҡыҙҙы белмәй торған болғауыр заманда йәшәп, күпме генә ҡыйырһытылмаһындар, улар барыбер ҙә көслө рухлы, тормош мәшәҡәттәре алдында иреп төшмәҫ, үҙҙәрен юғарыраҡ тотоусылырға баш бирмәҫ шәхестәр булып ҡалалар. Быны дәлилләү өсөн миҫалдарҙы күпләп килтерергә мөмкин. «Күңелемдә нур йөрөтә инем...»дәге «Үҙ йәнемдән һарҡып яңынан тыуа, // Өмөттәргә төрөнөп, сағыу нур!» тигән оптимистик юлдар «Ғүмер тәртәһенән ырғып... »тағы «Һиҫкәндереп ҡуя ҡай саҡ // Бысаҡ ҡайраған тауыш», «Ҡаршылыҡтар була тора...»лағы «Киттем–барҙым булыр...» кеүек күңелһеҙерәк яңғыраған уй-фекерҙәрҙе һәм хистойғоларҙы башкөлләй юҡҡа сығара, тиергә була.

Т. Дәүләтбирҙинаның көслө рухлы геройнялары менән беҙ «Ни һан йыһан!...», «Уйым арта», «Ләззәтле һағыныу, йәнем...» тигән шиғырҙарҙа ла осрашабыҙ. «Уйым арта»лағы йәше олоғая башлаған лирик героиня ерҙә йәшәү мәғәнәһе, тормош асылы хакында уйлана. Юлында осраған кәртәләргә артыҡ иҫе китмәйенсә, оптимист булып ҡала:

Бошонмайым үҙем бер нигә лә.
Рух – терәгем, аяғүрә киләм.
Үҙем үрләп менеп еткән тауға
Үҙ ҡулдарым менән байраҡ эләм.

Ҡарамаҡҡа «Ләззәтле һағыныу, йәнем...» – мөхәббәттә бер-береңә тоғролоҡ һаҡлауҙы бик матур һүтләгән ғәҙәти лирик шиғыр. Ләкин, һүҙ ошондай нәзәкәтле тема хаҡында барһа ла, әҫәрҙең үҙәгендә үҙ баһаһын үҙе яҡшы аңлаған, ғорур йәнле, шул уҡ ваҡытта хистәр донъяһынан арына алмаған лирик героиня образы торғанлығын шәйләмәү мөмкин түгел:

Ваҡытлыса был айырылыу,
Танһыҡ ҡына юҡһыныу.
Мин бит белəм: һине арбар,
Күңелең яулар юҡ һылыу.

Мин үҙем дə ҡəлғə кеүек,
Буй етмəҫлек бейекмен.
Һинең яндарыңда ғына
Башын эйгəн кейекмен.

Т. Дəүлəтбирҙинаның быуат башындағы ижадында һирəк- мирəк кенə булһа ла фəлсəфəүи, ижтимағи-сəйəси, ғаилə, əхлаҡ темаларына арналған шиғырҙар ҙа күренгеләп киткеләй. «Көрəш» тигəн шиғырҙың нигеҙендə, мəҫəлəн, философия фәнендəге «йəшəйеш – ул капма-ҡаршылыҡтарҙың көрəше» тигəн закон ята. Һүҙ бында «Эйе һəм Юҡ», «Аҡ һəм Ҡара», «Яҡшы менəн Яман»,«Иблис менəн Фəрештə», «Тыуым – үлем», «Яуыҙ – изге», «Йомарт – Һаран» төшөнсəләре тирəһендə бара. Шиғырҙың тəүге строфаһында автор «Был донъяға низəр булған? // Был донъялар ҡайҙа бара»? тигəн һорау ҡуя. Ләкин яуап таба алмай. «Ғүмер буйы көрəшергə көстө» ҡайҙан алырға, тип, ҡул һелтəйһе генə ҡала.

«Ҡылысһыҙ биҙрə» лə уйландырырлыҡ шиғыр. «Колаҡһыҙ иҫке науыт» миҫалында автор, тормош ул алдын да, артын да күрһətергə мөмкин, шуға күрə уның менəн бик һаҡ булырға кəрəк, тигəн фекерҙе ябай ғына, əммə образлы итеп асып һалған.

Тик беҙҙең заманға ғына хас хəл-ваҡиғаларҙы яҡтыртҡан шиғырҙар ҙа бар Тəнзиләнең поэтик арсеналында. Шуларҙың береһе – «Ҡурсаулыҡ». Күләме йəһəтенəн ул əллə ни ҙур түгел. Ләкин унда күтəрелгəн мəсьəлə ифрат актуаль яңғырай. (Йəйəләр эсендə əйтəйем: был тема беҙҙең бүтəн шағирəләребеҙҙе лə, шағирҙарыбыҙҙы ла берҙəй борсой һəм шуға күрə үҙ ижадтарында уға йыш ҡына əйләнеп ҡайталар.) «Ҡурсаулыҡ»та һүҙ, тəбиғи əжəлде көтмəйенсə, төрлө сəбəптəр арҡаһында донъялыҡтан ваҡытынан алда китеү (үҙ ирке менəн дə, тирə-йүндə хөкөм һөргəн йыртҡыслыҡтан да) хаҡында бара. Шуныһы мөһим: башҡаларҙан айырмалы булараҡ, Т. Дəүлəтбирҙина был күренештең тамырҙарын барларға һəм асыҡларға тырыша, əлеге лə баяғы, философтар телендəге «донъяла сəбəпһеҙ бер нидəй ҙə хəл-вакиға булмай», тигəн төшөнсəнəн сығыбыраҡ эш итə:

Мәлһеҙ үлем тора аңдып ҡына
Көрәшеүҙән ҡурҡып, бирешкәнде.
Аяп тормай
көслө рухы менән
Был донъяла күпкә ирешкәнде.

Ахырызаман етер мәлдә шундай
Аңһыҙ үлем булыр, тигән ҡарттар.
Аҙғын нәфсе итәгенә тағылып
Гел ҡыйралыш килер булған арттан...

«Күккә ашҡан байҙар»ҙа йыһан киңлегенә осоусы ҡалын кеҫәлеләр фашланған. Бөҙҙең поэзияла был – өр-яңы тема, булһа кәрәк. «Улар өсөн ғилми тикшеренеү, // Асыш яһау һис тә маҡсат түгел», тиелә шиғырҙа. Авторҙың позицияһы бигерәк тә һуңғы строфала асыҡ сағылған:

Яҡынаям, тиҙер ул бахырҙар,
Күккә һыйыныл, Аллаһ Тәғәләгә.
Бисмилләһеҙ йыйған мал туҙҙырып
Хаҡлыҡ эҙләүҙәрҙән ни мәғәнә?

«Яһалма» тигән шиғыр, тәү ҡарамаҡҡа, юмор һымағыраҡ тойолһа ла, һис тә юмор түгел. Һүҙ бында – беҙҙең тормошта, көнкүрешебеҙҙә бөтә нәмәнең дә әкренләп яһалмаға әйләнә барыуы хакында. Был күренешкә авторҙың ҡарашы түбәндәге юлдарҙа белдерелгән:

Яһалмаға өйрәнәбеҙ,
Организм күнегә.
Тик беребеҙ ҙә өйрәнмәй
Яһалма йән, күңелгә.

Шиғырҙың аҙағында яңғыраған «Яһалма эт... нығыраҡ тешләр!» тигән киҫәтеү ҙә иғтибарҙы йәлеп итерлек.

«Күҙ алдында» тигән шиғырҙа беҙҙең заманда күпереп сәскә атҡан битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ бик оҫта тотоп алынған һәм һүрәтләнгән:

Һәр бер кешенең яҙмышы
Бер-береһенә бәйләнгән.

Ҡайһы арала улар ятҡа,
Ҡырағайға әйләнгән?

Бөтә ошо ҡырағайлыҡ лирик героиняның күҙ алдында барлыҡҡа килә һәм үҫә. Шиғырҙы түбәндәге дүрт юл ослап ҡуя:

Имәндәй көслө кешеләр
Күҙ алдында йығыла.
Аҫыл заттар һирәгәйә,
Йөрәккәйем һығыла.

Символик йәнәшәлеккә ҡоролған «Төрткөләшеп, кемуҙарҙан... » тигән шиғыр Назар Нәжмиҙең «Япраҡ» исемле шиғырын хәтерләтеп ҡуя. (Хәтерләтә, ләкин тулыһы менән тап килмәй.) Япраҡтарға йән индереп, уларҙы тере кеше һымаҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу аша шағирә ғәжәп үҙенсәлекле дөйөмләштереүгә ирешкән:

...Нәфсе, көнсөллөк япраҡты
Һуңғы юлға оҙата:
Барыһын ел бергә өйөрә,
Барыһына ла боҙ ята.

Т. Дәүләтбирҙинаның ҡайһы бер шиғырҙарында, бәлки, автобиографик һыҙаттар өҫтөнлөк итәлер. Ә бына «Иркәмен», «Таяныс», «Әсәйемдең күҙҙәрендә...», «Ағайыма» тигән шиғырҙар хаҡында фараз ҡылып тораһы юҡ – улар шағирәнең иң яҡын, иң ҡәҙерле кешеләренә бағышланған. Әйтергә кәрәк, был әҫәрҙәрҙә, минеңсә, бер ниндәй арттырыу, урынһыҙға маҡтау-маҡтаныу юҡ. Бөтәһе лә Танзиләсә: ябай ҙа, ихлас та, эскерһеҙ ҙә, шуға күрә күңелгә лә йәтешле.

Быуат башында ижад иткән байтаҡ ҡына шиғырҙарын күҙ уңынан уҙғарғандан һуң, шуны әйтке килә: Тәнзилә Дәүләтбирҙина – бөгөнгө башҡорт поэзияһының күренекле, тотанаҡлы һәм тотороҡло вәкиле. Тәбиғәт уға үҙ байлығын мул итеп өләшкән. Ләкин рустарҙа шундай бер әйтем бар – уны үҙебеҙсәгә былайыраҡ тәржемә итергә булалыр: кемгә күп бирелгән – уға талап та ҙурыраҡ. Тәнзилә талаптың юғарылығын яҡшы аңлай. Юғиһә ул үҙенең бер шиғырында былай тип яҙмаҫ ине:

Кемдер менеп вакыт толпарына
Йыһандарға ҡарай юл ала.
Ә кемдеңдер тәтәй шиғырҙары
Үҙе менән бергә юғала.
(«Сағыштырыу»)

Тағы бер шиғырында бындай юлдарҙы уҡырға була:

Шағир ергә һирәк төшә,
Уның урыны күктәрҙә.
Ожмахҡа әйләнер ине Ер –
Шағир йәне, шағир күңеле
Булһа әгәр күптәрҙә.
(«Шағир»).

Тәнзилә Дәүләтбирҙина киләсәктә үҙенең потенциаль мөмкинлектәрен тағы ла тулыраҡ файҙаланып, алдына ҡуйылған юғары талаптарға артабан да тоғролоҡ һаҡлауын дауам итер, тигән өмөт бағлаһаҡ, яңылышмабыҙ кеүек. Шағирәнең шаулар-гөрләр саҡтары алдараҡтыр әле. Шуға ышанып йәшәйек.

* * *

Был күҙәтеүҙәрҙә башҡорт поэзияһында үҙаллы һәм шаҡтай ҡеүәтле күренешкә әүерелгән ҡатын-ҡыҙҙар (шартлы рәүештә, әлбиттә!) шиғриәтенең барлыҡҡа килеү һәм үҫеш юлдарын төҫмөрләп, уның XXI быуат башындағы емештәрен тәмләп ҡарау маҡсаты ҡуйылғайны. Маҡсаттың тәүге яртыһы тормошҡа ашты һымаҡ, ә бына икенсеһе – өлөшләтәсә генә. Сөнки бер мәҡәлә сиктәрендә был зур майҙанды бер юлы һәм бөтә киңлегендә күҙаллау мөмкин түгел. Әлегә шуны ғына әйтә алам: ижадтары хаҡында бөгөн үк ауыҙ тултырып һөйләрлек шағирәләребеҙ бар; ҡанаттары нығынып килгәндәре лә байтаҡ. Улар ҙа иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалмаҫҡа тейештер. Әҫәр (уңышлымы ул, әллә бигүк түгелме) ташҡа баҫылған икән, мотлаҡ үҙ баһаһын көтә. Шуға ирешергә тырышайыҡ.

2010, сентябрь – 2011, июнь

ШАҒИРҘЫҢ РУХИ ДОНЪЯҺЫ

(Рауил Шаммастың быуат башындағы ижадына бер ҡараш)

Уҙған йылдың ноябрендә Рауил Шаммас үҙенең 80 йәшен туйланы. Ошондай ҙа күркәм ваҡиға әҙәбиәт йәмәғәтселеге иғтибарынан ситтә ҡалманы, әлбиттә. Башҡортостан «Китап» нәшриәте шағирҙың «Ҡәҙерен беләһеңме?..» тип аталған шаҡтай ғына ҙур күләмле йыйынтығын баҫтырып сығарҙы. Йыйынтыҡҡа шиғырҙар, поэмалар, балладалар, әкиәттәр тупланған. Уның автор үҙе яҙған «Үҙем тураһында үҙем» тигән баш һүҙе лә бар. Бәләкәй генә ошо баш һүҙҙә иғтибарымды «Шағир исеме бөтәһенән дә юғарырыҡ» тигән һөйләм йәлеп итте һәм ҡыҙыҡһыныу уятты. Китапты битләй башлағас, «Мин баш эйәм бөйөк яҡтылыҡҡа» тигән тағы бер һүҙбәйләнешкә күҙем төштө һәм тамам ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр итте. Ләкин был мәҡәләлә һүҙ – шағирҙың яңы китабы хаҡында түгел, ә уның һуңғы ун йылда «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән әҫәрҙәре тураһында.

Бынан утыҙ йылдар элек проф. Ғайса Хөсәйенов былай тип яҙғайны: «… төрлө темпераментлы, төрлө тауышлы, йыш ҡына декларациялар менән диҡҡәтте үҙҙәренә тартырға тырышҡан яңы шағирҙар араһында күҙгә бик артыҡ салынып бармаған, тыныс холоҡло, тымыҡ тауышлы бер шағир бар. Ул – Рауил Шаммас. Ҡайһы бер ҡәләмдәштәре шикелле, ул артыҡ янып-ярһып та бармаҫ, әллә ҡайҙа күк-йондоҙҙарға ла ашмаҫ. Бар көнө, бар хәстәре ерҙә уның, көндәлек тормошта. Уның темалары, геройҙары, хатта шиғри биҙәктәре лә үтә ғәҙәти.Әммә иң ҡыуандырғаны: Рауил Шаммас көндәлек, ғәҙәти хәл-ваҡиғаларҙан, ябай нәмәләрҙән поэзия таба белә. Шуны ябай, мәғәнәле, үтемле итеп еткерә ала. «…» Р. Шаммастың лирикаһы үтә алсаҡ, яҡты, нурлы ижад. Шағир үҙе кешеләр күңеленән нур йыя ла шуны шиғри биҙәк итеп яңынан балҡыта». (Ғайса Хөсәйенов. Шағирҙәр. Өфө, 1981, 228-се бит).

Рауил Шаммас артабанғы йылдарҙа ла олуғ ғалимдың бындайын да ихлас, тәрән мәғәнәле баһаламаһына кер төшөрмәне – тәбиғәттән килгән асылына хыянат итмәйенсә, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ижад менән шөғөлләнеүен белде: әҫәрҙәр яҙыла, китаптар баҫыла торҙо, төрлө дәрәжәләр юллап йөрөгәне ишетелмәне. Хәҙер инде ул – ҙур тормош

юлы үткән, бай тәжрибә туплаған, булмышыбызға, йәшәү рәүешебеҙгә төптән уйлап ҡараш ташлаусы шағирҙар иҫәбендә. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, бөгөн дә ҡәләмен ҡулынан төшөрмәй, ижад ҡомарын эшкә егеп кенә тора. «Ағиҙел»дең яңы быуатта нәшер ителгән һандарында баҫылып сыҡҡан «Матурлыҡ хаҡы» тигән әкиәт-поэмаһы һәм алтмышлап шиғыры шул турала һөйләй.

«Матурлыҡ хаҡы» – халыҡ ижады традицияларына таянып ижад ителгән әҫәр. Уның жанрын автор юҡҡа ғына әкиәт-поэма тип билдәләмәгән. (Юл ыңғайында хәтергә төшөрөп үтәйек: Рауил Шаммастың «Аҡһылыу», «Тауҙар күҙе», «Аҡыл таяғы» исемле күләмле әҫәрҙәре лә жанрҙары буйынса ошо типтағылар.) «Матурлыҡ хаҡы»ның темаһы һәм идеяһы «Ҡатын-ҡыҙ аҡылына һәм матурлығына тиң бар микән был донъяла?!.» тигән эпиграфта уҡ асыла башлай. Сюжет башкөллө эпиграфта ҡуйылған өндәш ҡатыш һорауға уҡыусыны ышандырырлыҡ яуап эҙләүгә, шағирҙың ҡатын-ҡыҙ аҡылына һәм матурлығына һоҡланыуы һис тә буш һүҙ түгел икәнлеген иҫбат итеүгә ҡоролған. Үҙенең геройҙарын (Нәзир менән Гөргүзәлде) әкиәттәргә генә хас иҫ киткес мажаралы хәл-ваҡиғалар аша үткәреп, автор, яйлап ҡына, «Ҡатын-ҡыҙҙың сәсе озон, аҡылы ҡыҫҡа» тигән мәкәлде юҡҡа сығара.

Шул да мәғлүм булһын: «Матурлыҡ хаҡы»ның темаһын һәм идеяһын аңларға, яңы әҫәре менән шағирҙың ни әйтергә теләгәнлеген тулыраҡ күҙалларға эпиграф ҡына түгел, бәлки әкиәт-поэманы асып ебәреүсе инеш һүҙе лә булышлыҡ итә. Был һүҙ әллә ни зур түгел – ни бары ун алты юлдан тора. Автор уны хатта инеш һүҙе тип тә атамаған. Ләкин йөкмәткеһе һәм яңғырашы менән тап шуға тартым.

Билдәле булыуынса, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡты ғилми нигеҙҙә яҡтыртыусы фәндәрҙә (шул ысынбарлыҡтың үҙендәге шикелле үк) ҡапма-ҡаршылыҡлыраҡ мәғәнә белдергән парлы төшөнсәләр йәшәп килә. Әйтәйек, ваҡыт һәм арауыҡ, иреклек һәм зарурлыҡ, һан һәм сифат, гүзәллек һәм шыҡһыҙлыҡ, аҡыллылыҡ һәм йүләрлек, йүнселлек һәм йүнһеҙлек, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, матурлыҡ һәм йәмһеҙлек, һ.б. «Матурлыҡ хаҡы» тигән әҫәрендә Рауил Шаммас ошо парлы төшөнсәләрҙең тик береһенә генә туҡталырға һәм уның асылын художество сараларына таянып, образлы фекерләү аша асып бирергә булған: «Йырға һалам яман менән яҡшылыҡтың алышын», ти ул инеш һүҙендә.

Инеш һүҙендә тағы бер һөйләм иғтибарҙы үҙенә тартып тора: «Яҡшылыҡҡа тамырланыр күңеле матур заттар ». Матур күңелле заттар! Бының инде әле һүҙ барған әкиәт-поэмаға ғына түгел, шағирҙың

бөтә булмышына ҡағылалыр, тип уйлайым. Бәлки, ижадтағы һәм йәшәйештәге кредоһы булып та яңғырайҙыр әле. Сөнки «Матурлыҡ хаҡы» менән бер осорҙа яҙылған һәм баҫылып сыҡҡан шиғырҙарҙың да күпселеге шундайыраҡ тәьҫир ҡалдыра бит.

Тышҡы яҡтан уҡ (традицион дүртәр юллы биш кенә строфа) иғтибарҙы йәлеп иткән «Әйт һүҙеңде…» исемле шиғыр («Ағиҙел», 2003, 4-се һан) бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр. Шәйехзада Бабичтан эпиграф итеп алынған «… Ал да нур сәс халҡыңа…» тигән ҡанатлы һүҙҙәр, һигеҙәр һәм етешәр генә ижекле ыҡсым, бер-береһенә һылашып торған шиғри юлдар әҫәргә үҙенсә бер йәм өҫтәй, көс-ҡеүәт бирә. Йөрәгенән урғылып сыҡҡан ялҡынлы хис-тойғоларын, уй-фекерҙәрен уҡыусыға илтеп еткерер өсөн һайланған форма ла үҙенсәлекле: шағир, әйтерһең дә, үҙ-үҙе менән диалог ҡороп ебәргән. Ошо бер яҡлы диалогты түбәндәге оран ослап ҡуя:

Яңы һүҙ әйт, йылмайып әйт –
Шунда донъяның йәме.
Йәшәүеңдән милләтеңдең
Нурланһын рухи иәме.

Р. Шаммастың донъяға оптимистик ҡарашын уның шиғриәтендә йыш ҡына шәйләргә мөмкин. «Һибелә бит ергә…»лә (был шиғыр уғата ла йыйнағыраҡ – дүрт кенә строфанан тора), мәҫәлән, йәшәү дәүерендә бал-наҙынан да, утынан да ауыҙ итә-итә олоғайған шағир киләсәге өсөн һис кенә лә бошонмай, сөнки ул белә:

«Был ерҙе мин матурлайым», – тиеп
Юрта-атлай ашығып барғанда,
Ятып ҡалыуың бар көтмәгәндә –
Яҙмыш бит ул, уны кем белә.

Баштан-аяҡ оптимистик рух менән һуғарылған был шиғырҙың һуңғы строфаһы уҡыусы күңеленә яңы көс, яҡты өмөт һәм йәшәү дәрте өҫтәмәй ҡалмаҫ:

Кеше йәне – сәскә.
Ник ҡурҡырға,
Ергә һибелә бит, һибелһен.

Йәп-йәш бөрөләрҙән был донъяны
Һоҡландырыр гөлдәр терелһен.

Кеше йәнен сәскәгә тиңләп, шағир, образлы сағыштырыу аша, ярайһы ғына ҡыҙыҡлы һәм бер үк ваҡытта тәрән мәғәнәгә эйә булған дөйөмләштереүгә ирешкән: тәбиғәт менән кеше – бер бөтөн, шуға күрә кеше ғүмеренең тәбиғәттә өҙлөкһөҙ алышынып-яңырып торған мизгелдәрҙе хәтерләтеүе һис тә ғәжәп түгел.

«Өс мизгелең» тигән шиғырҙың да нигеҙендә ошоға тартым идея ята. Был юлы автор символик йәнәшәлек алымына таянып, кеше ғүмеренең тәбиғәттә барған үҙгәрештәргә-яңырыуҙарға оҡшашлығын уғата ла тәьҫирлерәк итеп (башта сейәләрҙең сәскә атыуы, унан һуң уларҙың ҡыҙарып бешеүе, тора-бара япраҡтарҙың һирәкләнеүе) һүрәтләнгән. Шиғыр юмор сатҡыларынан да мәхрүм түгел: «Һирәгәйгән япраҡ араһынан ап-аҡ сәсле ҡартлыҡ ҡарап тора». Әҫәр бындай юлдар менән тамамлана:

И, ғүмерҙең олуғ, ғорур сағы –
«Картлыҡ» тигән олпат, хозур сағы.
Ғүмер көҙөң. Нимә кәрәк тағы –
Алдарыңда, ана, сейә ҡағы…

«Аҡ орлоҡ», «Япраҡ ярам», «Утын өҫтә…» тигән шиғырҙар ҙа идея-тематик яҡтан һәм һүрәтләү сараларының байлығы йәһәтенән «Һибелә бит ергә…» менән «Өс мизгелең»дән алыҫ тормайҙар. «Аҡ орлоҡ»та, мәҫәлән, тәбиғәт донъяһындағы ябай ғына бер күренеш аша («Орлоҡтарын сәскән зифа тирәк, ап-аҡ итеп асфальт өҫтәрен»), ерҙә тереклек итеүҙең өҙлөкһөҙ бер процесс икәнлеге күҙ алдына килтерелеп, хәтерҙә оҙаҡ һаҡланырлыҡ буяуҙар ярҙамында кәүҙәләндерелгән:

Йәй тантана итә ҡолас йәйеп:
Орлоҡ сәсә, йәшәү өләшә.
Ҡыуанысы:
Уҙған ғүмерҙәрҙе
Дауам итер өсөн көрәшә.
. . . . . .
Йәй тантана итә:
Йәшел ергә

Йәшәү сәсер дәрте һоҡланғыс.
Шундай түгелме ни әҙәми зат,
Ғүмер дауам итеү – йыуаныс.

Аллитерация, анафора һәм шуның кеүек башҡа поэтик биҙәктәрҙе мул һәм оҫта файҙаланып, автор тәбиғәттә һәм кеше тормошонда туҡтауһыҙ барған ошо йәнле процесҡа ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен дә белдермәй ҡалмаған:

Ниндәй йыуаныс!
Ошо аҡ күркәмлек,
Аҡ изгелек минең ҡағыҙҙа.
Аҡ орлоҡтар төшкән ҡара ерҙә
Йәш тирәктәр шаулар һәр ерҙә.

Рауил Шаммастың ейәнһенә бағышлап яҙған «Япраҡ ярам» тигән шиғыры ла аллитерация-ассонанстарға ифрат бай. Һигеҙәр-бишәр ижекле ҡыҫҡа-ҡыҫҡа юлдарҙан торған был шиғыр еңел һәм ҡыҙыҡһынып уҡыла. Ләкин әҫәрҙең өҫтөнлөгө һәм йәлеп итеү көсө – бында ғына түгел. Иң мөһиме – уның идеяһы. Идея иһә шалтырап та, ялтырап та тормай, ә бик тәрәндә ята: яны яҙға аяҡ баҫҡанда бар тәбиғәт менән бергә шағир ҙа япраҡтар яра һәм йәшел япраҡ булып ҡояшҡа баға. Күбәләктәр менән уйнап йөрөгән ейәнен күреп, ул бына нимә ти:

Япраҡ ярам. Ейәнем бит –
Йәшел япрағым:
Ул бит минең яҙҙарыма
Яҙ өҫтәй тағы.

Шулай итеп, «япраҡ», «яҙ» тигән һүҙ-төшөнсәләрҙе тура мәғәнәһендә лә, күсмәһендә лә уңышлы файҙаланып һәм улар араһында символик йәнәшәлек үткәреп, автор, ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған шиғыры менән уҡыусыла көтөлмәгәнерәк фекер уятҡан: баҡһаң, быуындар бәйләнеше тәбиғәт миҙгелдәренә оҡшаш икән дәбәһа.

Ейән образына «Утын өҫтә…» тигән щиғырҙа ла мөһим урын бирелгән. «Әйт һүҙеңде…»лә шикелле, был шиғыр ҙа бигүк ғәҙәти булмаған диалогҡа ҡоролған. Уны бер үк кеше (шағир үҙе) ике образға (ҡартлыҡ менән йәшлеккә) инеп алып бара һәм бер үк ваҡытта улар

араһында арбитр һымағыраҡ сығыш яһай. Диалог барышында ул үҙенең йәшлегенән ҡайһы бер эпизодтарҙы хәтеренә төшөрә, ҡартлығынан үҙ адресына яҡлау һүҙҙәре лә әйттерә: «Ҡартлығың бит матур, әбейең сибәр, ундай ҡартлыҡтарға ни етә!». Ләкин, ҡартлығы матур булһа ла, «арбитр» яуапһыҙ ҡалмай, сөнки йәшлеккә лә, ҡартлыҡҡа ла уның үҙ ҡарашы, үҙ фекере, үҙ баһаламаһы:

Дөрөҫтөр һүҙең.
Барыбер, әй,
Йәшлектән бит килмәй китәһе.
Киске шәфәҡтәргә ҡарағанда,
Ҡәҙерлерәк көндөң иртәһе.

Ниһайәт, шиғырҙың аҙағына табан яҡынлашҡанда, уның төп мәғәнәһе лә асыраҡ күҙаллана. Йәштәрсә дәртләнеп, төрлө уй-хистәрҙә бирелеп ултырған шағир-арбитрҙы эргәһендәге ейәненең наҙлы тауышы һиҫкәндереп ебәрә: «Картатай, бер аҙ ял итеп ал…». Сабыйҙың наҙлы тауышы шағирҙы реаль ысынбарлыҡҡа алып ҡайта һәм ул үҙенең ҡартлыҡ осорон кисергәнлеген таныра мәжбүр була. Ләкин һаман оптимист булып ҡала: «Тик, ҡартлығым, ашығып китә күрмә, утын өҫтә яныр усаҡҡа».

Иркенләп, ҡолас йәйеп ҡыстәр диңгеҙендә йөҙгәндә Рауил Шаммас йыш ҡына бына шулай көтөлмәгән боролош яһап ҡуйыусан. Ҡайһы берҙә йылмайып ҡына әйтелгән көләмәстәргә лә тап булаһың. Ләкин улар буш һүҙ һөйләп, уҡыусы күңелен әүрәтер өсөн түгел, ә шағирҙың үҙ күҙәтеүҙәренән, тормош тәжрибәһенән үҫеп сыҡҡан берәй аҡыллы фекерҙе ябай ғына итеп аңлатып биреү теләгенән ҡулланылалыр, тип уйлайым. Әлбиттә, ундай шиғырҙарҙа авторҙың рухи донъяһы ла сағылыш тапмай ҡалмай. Кем белһен, бәлки, нәҡ шундай шиғырҙарҙа ул тәрәнерәк тә сағыла торғандыр әле.

«Өҫтәлгә алма ҡуяһың…»да шағирҙың ябай нәмәләрҙән дә поэзия таба белеү оҫталығы әҫәрҙең тәүге строфаһында уҡ күҙгә ташлана: кемдеңдер алмаларҙы «Өҫтәл буш тормаһын» тип ҡуйыуы уға оҡшап бөтмәй һәм был һөйләмде ул үҙенсәгә бора: «Алманың хуш-еҫе менән бүлмәбеҙ һулаһын». Артабан инде – төрлө сағыштырыуҙар: донъяның алма кеүек түп-түңәрәк булмауы; ғүмерҙең тамыр ебәргән алмағаҫҡа тиңләнеүе; алмағастың аҡ сәскәһен аҡ өмөткә оҡшатыу; алланып бешкән алмаларҙың бөркөлөп торған ҡояш нурҙарына ҡойоноуы; ал

алмаларға ҡарап, шағирҙың (күңеле менән) ғүмер юлдарын барлап үтеүе, һ.б. Уның яҡты уйҙары һәм изге теләктәре шиғырҙың аҙаҡҡы строфаһында ап-асыҡ итеп белдерелгән:

Һуңғы һулышҡаса беҙҙе
Алма оҙата барһын.
Кешеләрҙең күңелендә
Түңәрәк алма ҡалһын.

Строфаларға бүленмәгән «Таң ауазы» исемле шиғырҙа иһә автор беҙҙең алға ғүмерҙең ҡәҙерен белеп йәшәүсе, тыуған һәр яңы көндө таң һарыһы менән ҡаршылаусы кеше булып килеп баҫа. Әҫәр формаһы менән дә үҙенсәлекле. Ҡыҙарып атҡан таңды күҙәтеп тороусы шағир уны телгә килтерә һәм бындай һүҙҙәр әйттерә:

«Мин йәмләргә киләм бар ғаләмде.
Эй, кешеләр, аҡ көн алып киләм,
Ҡаралтмағыҙ уны, паклағыҙ.
Керләмәгеҙ бөрөк, хурламағыҙ,
Күҙ караһы кеүек һаклағыҙ.
Мәрхәмәтле булһын уйҙарығыҙ,
Мөхәббәтле булһын күңелегеҙ»

Ошондайын да изге, матур теләктәрҙе уҡыусыға түкмәй-сәсмәй илтеп еткереү өсөн шағир һүҙҙәрҙең дә ифрат килешлеһен, йөкмәткеле һен тапҡан.

«Таң ауазы» менән бер тирәлә ижад ителгән «Нур» исемле шиғырҙа ла кеше күңелендәге ыңғай эмоцияларға өҫтөнлөк бирелгән:

Яҙмыштар бит күләгә аша түгел,
Яҡты нурҙар аша тоташа.

«Емешлерәк булһын»да шағирҙың рухи донъяһын, характер үҙенсәлектәрен сағылдырыусы тағы бер сифат асыҡлана. Шиғырҙың баштағы строфаларында әҙәм балаһының һәр таңды яҡты өмөт, зур ышаныс менән ҡаршылауы, таңдың ал офоғон үрелеп алырға теләһәң дә уға буй етмәүе, ер менән күктең тоташҡан һыҙығына табан атлаған һайын уның сигенә һәм киңәйә барыуы хаҡында бәйән ителә. Ошо

күренештәрҙе тасуирлағанда, бәйән итеүсенең (тимәк, шағирҙың) кеше өлөшөнә керергә яратмауы төҫмөрләнә: ал офоҡто үрелеп алырға буйы етмәгәнгә бер аҙ үкенеп ҡуйһа ла, ерҙәге һәр бер матурлыҡтың тик уға ғына тәғәйенләнмәгәнлеген яҡшы аңлай ул.

Артабанғы строфаларҙа автор, әҫәрҙең идеяһын уғата ла үтемлерәк, образлыраҡ итер өсөн, балаларса хыялға бирелеп ала: йәнәһе, офоҡ артынан, алтын арбаға алтын алма тейәп, кемдер килеп сығыр төҫлө. Шиғырҙың һуңғы юлдарында иһә был хыялды тормошҡа ашырыр өсөн «билде биштән быуып», тир түгеп эшләргә кәрәк һәм шул саҡта ғына һәр тыуған көнөң дә, бөтә ғүмерең дә емешле булыр, тигән һөҙөмтә яһала. Өҫтәп, шағирҙың хистәре кешеләрҙең эстәрен дөрләтерлек булһын, тигән теләк тә белдерелә.

«Таң ауазы», «Емешлерәк булһын…» тигән шиғырҙарҙағы мотив «Кеше көтә һәр бер тыуыр таңдан…»да ла яңғырап китә. Күләме яғынан бәләкәй генә ошо шиғырында автор үҙ уҡыусыһын өмөт менән йәшәргә саҡыра һәм уны «Бик ныҡ көтһәң, килер яҡшылыҡ…» тип ышандыра. «Кеше көтә һәр бер тыуыр таңдан хыял иткән изге яҡтылыҡ» тигән юлдар иһә «Емешлерәк булһын…»дың туранан-тура дауамы шикелле ҡабул ителә хатта.

Өмөт, тигәндән, Р. Шаммастың «Өмөт иң һуңғы булып үлә» тигән рус халыҡ мәҡәлен эпиграф итеп ҡуйған «Тел яраһы» исемле шиғыры ла бар. Ул бик нескә хистәр менән һуғарылған – тиҙ генә төбөнә лә төшөп етә алмаҫһың. Һүҙ тән яраһы менән йән яраһы тураһында бара. Уларҙың икеһе лә ауыр кисерелә. Әммә шулай ҙа үткер бысаҡтай яман телдәр һалған йән яраһы күпкә ауырыраҡ кисерелә. Уны бары тик сабырлыҡ ҡына төҙәтә ала. Был хәҡиҡәт шағирҙың әсәһенән отоп алынған:

«Сабыр кәсәләрең тула ҡалһа,
Бушат, – тиер ине, – ҙурына.
Кара болоттарың китер, балам,
Ҡояш күмер тағы нурына…
Түгелмәһен кәсәң…».

Ғәзиз әсәһенең йәне һымаҡ тойолған аҡ күбәләк образы ла отошло, айырыуса шағирҙың уға мөрәжәғәт итеп әйткән бына был һүҙҙәре: «Нәфис ҡанатыңды тик бер елпе, саф елен бир миңә йәшәүҙең!».

Шиғриәтте һөйгән талапсан уҡыусы Рауил Шаммастың тәрән лиризм менән һуғарылған «Эй йәшәүҙең татлы минуттары!..», «Йәнемдең халәтелер», «Аҡ толпарым, елдер, арыма!», «Аҡҡан саҡта ғүмер-йылғағыҙ…», «Таң һағышы», «Һөйөү һүҙе», «Ҡар бөртөгө хаҡында уйланыу», «Көзгө бөрөм – йәшәү серем» исемле әҫәрҙәренә лә битараф ҡалмаҫ, тип уйлайым. Әгәр «Эй йәшәүҙең татлы минуттары!..»нда шағир, беҙҙең ҡарамаҡҡа бирелгән һәр минуттың ҡәҙерен белеп йәшәйһе урынға, ҡай саҡ үкһеп-һыҡрағаны өсөн:

Мин дә әҙәми зат.
Аңлай күрегеҙ, берүк, мине лә.
Ҡалған ғүмер юлым күберәк көлөп,
Күберәк йырлап үтһен ине лә…
Улай тиһәм, яҙмыш нимә яҙған, –

тип ғәфү үтенһә, «Аҡ толпарым, елдер, арыма!»ла иһә ул үткәндәренән ҡәнәғәт, киләсәгенә өмөт менән ҡарай:

Гел яҡшыға юра, яҡшыға.
Төкөр сүп-сарына, шаҡшыға.
Яҡшылыҡҡа юрау – канаттыр.
Киләсәккә юртыр пар аттыр.

Ә үткәндәр инде үтелгән.
Ғүмер-йомғаҡ шаҡтай һүтелгән.
Киләсәккә күңел ашҡына.
Иҫән булһын бары баш ҡына.

Әгәр «Таң һағышы»нда ҡышҡы таңды ҡаршылаусы шағирҙың һағышы уның ҡолағында шишмәләр тауышы булып яңғыраһа, образлы сағыштырыуҙарға, башҡа һүрәтләү сараларына бай «Һөйөү һүҙе»ндә иһә ул һөйөү орлоҡтарының ҡояштан, зәңгәр күктән, һандуғастарҙан, болон сәскәләренән барлыҡҡа килеүе хаҡында бәйән итә лә, һуңыраҡ:

Кешеләрҙең йылы ҡарашында
Ҡояш ҡайнарлығы бар һымаҡ,
Күңелдәрҙә ятҡан яҡшылыҡтар
Сәскәләге татлы бал һымаҡ, –

тигән һығымта яһап ҡуя. Кешеләрҙең саф, йылы ҡарашын, «күңелдәрҙә ятҡан бал кәрәҙен» бөтә Ер шарына өләшергә әҙер ул.

«Һөйөү һүҙе» шикелле, «Ҡар бөртөгө хаҡында уйланыу» тигән шиғыр ҙа метафорик сағыштырыуҙарға ҡоролған. Усындағы ҡар бөртөгөнә ҡарап, шағир «Ҡар-күҙәнәк, бөйөк тәбиғәттең кескәй генә ижад емеше» тигән ғәжәп матур яңғыраған поэтик табыш яһай. Артабан, уйланыуҙарын дауам итеп, көтөлмәгәнерәк йәнәшәлек үткәрә: йылы усында ирегән ҡарға тағы бер тапҡыр ҡарай ҙа, үҙен Ер усындағы күҙәнәк итеп хис итә. Ләкин, ҡар-күҙәнәктән айырмалы булараҡ, Ерҙә уның йыры ҡаласаҡ.

Ә бына «Йәнемдең халәтеле», шул уҡ метафорик сағыштырыуҙарҙан, йәнәшәлектәрҙән торһа ла, күпкә реалерәк яңғырай. Был әҫәр Р. Шаммастың көтмәгәндә, уйламаған-нитмәгән ерҙән шиғри деталь табып (әлеге осраҡта ул – күгәрсендәр көтөүе), шул деталдән художестволы образ тыуҙырып, уны әкренләп тейешле кимәлгә күтәреү оҫталығын иҫбатлаусы миҫал булып тороролоҡ. Күгәрсендәрҙең тәүге пары – ата-әсә рухын, икенсеһе – шағирҙың үҙе менән уның йәрен кәүҙәләндерә. Өсөнсө пар – улы менән киленен. Шулай итеп, быуындар бәйләнеше хасил була. Һәм ул бәйләнеш көсләп, мәжбүриләп түгел, ә үҙенән-үҙе, тәбиғи рәүештә тыуа. Тәрбиәле, әхлаҡи ҡағиҙәләрҙе яҡшы үҙләштергән һәм уларҙы еренә еткереп тормошҡа ашырыусы ғаиләләрҙәгесә.

«Йәнемдең халәтеле»ҙән бер нисә йыл һуңыраҡ яҙылған «Аҡҡан саҡта ғүмер-йылғағыҙ…»ҙа автор яңынан өмөт төшөнсәһенә әйләнеп ҡайта, хатта өмөт аты тигән бик шәп метафора ла уйлап тапҡан («Әҙәми зат барын еңә ул, өмөт атын тотоп егә ул»). Әҫәрҙең нигеҙенә донъя гел шатлыҡтарҙан ғына, йәиһә гел ҡайғыларҙан ғына тормай, тигән идея һалынған («Ҡайғы-шатлыҡ йөрөй йәнәшә, йәшәү насип саҡта һин йәшә»). Шағирҙың оптимислығы, романтик рухлы шәхес икәнлеге күҙгә бәрелеп тора. Балҡып-йылмайып шатлыҡ килгәндә лә, ҡанды көйҙөрөп һағыш өткәндә лә күҙ йәштәрен эстә ҡалдырмаҫҡа, йөрәгеңде ҡороға яндырмаҫҡа саҡыра ул. Был саҡырыу «Аҡҡан саҡта ғүмер-йылғағыҙ» тигән рефрен менән дә нығытып ҡуйыла. Шағирҙың романтик халәте, донъяға оптимистик ҡарашы һуңғы строфала уғата ла ышандырырлыҡ итеп асып бирелгән:

Йәшәү матлы, гүзәл барыбер,
Юҡтыр ерҙә уға бәрәбәр.
Аҡҡан саҡта ғүмер-йылғағыҙ,
Көлө-көлә, дуҫтар, илағыҙ.

Ошо урында, ниһайәт, Рауил Шаммас шиғриәтенә хас тағы бер үҙенсәлек тураһында ла әйтергә ваҡыттыр. Минең тойомлауымса, шағирҙың быуат башына ҡараған байтаҡ әҫәрҙәре автобиографик характерҙағы фактҡарға һәм хәл-ваҡиғаларға таянып яҙылған. Шуға күрә күп осраҡта шағир менән лирик герой араһындағы айырма юҡ хәлендә, тиерлек. Быға юғарыла телгә алынған шиғырҙар миҫалында ла ышанырға мөмкин.Уларға тағы «Нигеҙ моңо», «Аттар алмаштырмам…», «Һынмағанды һындырып», «Аҡһаҡал әйтерҙәре», «Һиңә килдем, көҙөм», «Йәшәнем, тип…», «Борсомағыҙ…», «Ғәжәпһенмә», «Тел асҡысы», «Йөрәк», «Үҙ асылың» тигәндәрен дә өҫтәргә була. Һис шикһеҙ, был шиғырҙарҙың бөтәһе лә иғтибарға лайыҡ. Ләкин бер мәҡәлә сиктәрендә уларҙың һәр ҡайһыһына ла иркенләп туҡтап булмаҫ, әлбиттә.

Хикәйәләү манераһы менәнерәк яҙылған «Нигеҙ моңо»нда һүҙ, тыуып-үҫкән өйҙәң урыны ғына ҡалһа ла, уның үҙенә тартыу көсө әле һаман юғалмағанлығы тураһында бара. Аталары ултыртҡан ҡуш ҡайын, ҡайын араһынан янып, ҡыҙарып ҡарап торған миләш образы аша, төрлө яҡҡа таралған ете баланың (әҫәрҙән автобиографиклығын күрһәтеп тороусы бер факттыр был) барыбер ҙә ошо нигеҙ менән тоташҡан булыуҙары, унан моң алып йәшәүҙәре хаҡында бәйән ителә.

Р. Шаммастың эстетик ҡараштары сағылып киткән «Йәшәнем, тип…» исемле шиғырҙа автор, шағир үҙен шағир итеп һанай алһын өсөн, уның алдына бик ҙур талаптар ҡуя: ул ете быуын ата-баба затын һаҡлаһын; уның рухи шишмәһе халҡының күңел баҡсаһын һуғарһын; замандың аҡса сирен еңеп, намыҫын һаҡлаһын; кешеләрҙе мәкерҙән арындырһын; эҙендә шифалы гөл-үлән үҫеп ҡалһын; шиғриәтте һөйөүселәр уның ижадын яҡын күрһен. Ошо талаптарға яуап биргәндә генә, «Мин йәшәнем, тип әйтермен» хоҡуғына эйә булырын белдерә шағир.

Ошоға тартым фекер «Борсомағыҙ…» тигән шиғырҙа па яңғырап китә. Был шиғырында автор тормошта ла, ижадта ла үҙенсә булып ҡалыу теләген белдергән: «Үтелгән дә, алда үтәһе лә – үҙемдеке булһын һәммәһе лә…», ти ул. Һәр кемдең үҙ һуҡмағы булырға тейеш, тигән идеяны үткәрә шағир, һәм төрлө кәңәштәр, күрһәтмәләр биреп борсомауҙарын үтенә.

Яңылар иҫәбендәге «Йөрәк» исемле шиғыр уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмағандыр, моғайын. Уға Рәшит Назаровтың киң билдәле «Йыртып астым күкрәгемде, йолҡоп алдым йөрәгемде» тигән юлдары эпиграф итеп ҡуйылған. Төҙөлөшө-яҙылышы йәһәтенән үҙенсәлекле генә шиғыр. Шағирҙың йөрәге телгә килә лә, уның

күкрәгенән сығып китә һәм, ерҙе, күкте ыласындай иңләп осҡанда, байтаҡ ҡына шәфҡәтлек күрһәтеп өлгөрә. Шиғырҙың йомғаҡлау аккорды һымағыраҡ яңғыраған һуңғы ике строфаһында шағир менән уның йөрәге араһындағы диалогҡа нөктә ҡуйыла:

Урап ҡайтты күкрәгемә,
Хәлдән тайып, тыныслаһын.
Ялҡын аша үткән ҡоштай,
Бөткән үҙе көйөп-яныҫ.

Уттар сәсеп әйтте йөрәк:
«Инде риза нишләтһәң дә,
Биклəп ҡуйыҫ, Һуң сиккәсә
Көнө-төнө эшләтһәң дә».

«Нигеҙ моңо»ндағы шикелле, шағирҙы балалыҡ һәм үҫмер саҡтарына алып ҡайтҡан тағы бер нисә шиғырҙы осратырға мөмкин Р. Шаммастың быуат башындағы ижадында. «Сөйөлдөрөк тартам», «Кәлйемә», «Хәлекәй шишмәләре», «(Э)стәрлебаш – тамырым минең», «Ашҡазарым» – шундайҙар иҫәбендә.

«Сөйөлдөрөк тартам» халыҡ йырындағы «Ат туғарып, егә белмәй, ҡыҙҙар һайлаған буҙа» тигән юлдарға таянып яҙылған. Шуға күрә шиғыр халыҡсан да, тормошсан да яңғырай.«Хәтер ебе», «заман һабаны» тигән метафоралар әҫәргә үҙенсә бер йәм өҫтәй һәм уның мәғәнәһен тәрәнәйтергә булышлыҡ итә. Һуғыш ваҡытында үҫмерҙәр елкәһенә төшкән ауырлыҡтарҙы күҙ уңынан узғарып, автор, образлы фекерләү ярҙамында, кисәгене бөгөнгө менән сағыштырып ҡына ҡалмай, уға үҙенең мөнәсәбәтен дә белдерә:

Ямауҙарҙы, бәлки, иҫкә алыу
Кәрәкмәйҙер бөгөн «шәп» заманда,
Тик донъяның ялтыр һабаны ла
Ташҡа элəгеп сатнай шул һаман да…

Хәтерләүҙәр, бәлки, барлауҙыр ул
Таҙартырға заман һабандарын;
Сөйөлдөрөгөн дә тартыр кәрәк,
Ҡамытына терəп табандарың.

Уйланған кеше Эзоп телен дә шәйләмәй ҡалмаҫ был шиғырҙа. Йөкмәткеһе менән «Кәлйемә» тигән шиғыр ҙа ифрат тормошсан әҫәр. Формаһы йәһәтенән дә үҙенсәлекле: һуғыш ваҡытында һәм унан һуңғы йылдарҙа тормош ауырлыҡтарын үҙ башынан кисергән шағир, хәҙерге заманға мөрәжәғәт итеп, үткәндәрҙе онотмаҫҡа, икмәк ҡәҙерен белергә, йәш быуын кәлйемәнең нимә икәнен белмәһә лә, уны йәшәү асылын белергә, беҙҙең бала саҡтан көлмәҫкә саҡыра. «Һоро шинель кейгән кәлйемә» тигән метафора шиғырҙың уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттыра:

Көлмәһендәр беҙҙең бала саҡтан!
Уян, заман, уян, алйыма. –
Күҙҙәремә, ана, ҡарап ята
Үлемдәрҙән беҙҙе алып ҡалған
Һоро шинель кейгән кәлйемә.

Р. Шаммастың һуңғы ун йылдағы ижадында башлыса хис-тойғолар менән тулы шиғырҙар өҫтөнлөк итһә лә, улар араһында һирәк-мирәк кенә булһа ла заман еле ҡағылғандары ла осраштырып ҡуйғылай. Шундайҙарҙан иң тәүҙә «Уҫҡа тупраҡ алдым…»ды күрһәтер инем. Традицион дүртәр юллы биш кенә строфанан торған бик матур һәм тәрән мәғәнәле шиғыр ул. Рифмалар теүәл, шиғри юлдарҙа урынһыҙға ҡулланылған бер генә һүҙ ҙә тапмаҫһың, строфалар ҙа бер-береһенән айырып алғыһыҙ – уларҙың һәр ҡайһыһы әҫәрҙең төп идеяһын асыҡлауға буйһондоролған: «тыуған ерҙең аҡ икмәк биргән изге ҡара тупраҡҡайы барҙа алтындарың торһон бер яҡта». Беҙҙе тыуҙырған да, туйҙырған да ер-әсәбеҙгә дан йыры һымағыраҡ яңғырай «Уҫҡа тупраҡ алдым…». Ләкин авторҙың тыуған ергә, тыуған тупраҡҡа арнап әйтер иң көслө һүҙе «Күпме ирҙәр яуҙа ятып ҡалған бирмәҫ өсөн уны сит-ятҡа. Тапатмаған уны дошмандарҙан, изге рухын тоғро һаҡлаған…» тигән юлдарҙалыр.

Заман еле «Бер-бер заттар үҙенең йүнһеҙлеген…», «Уйҙар уйлап…», «Тарих битен асып…», «Һандуғас та белә…» титгән шиғырҙарға ла ҡағылып киткәндәй. «Бер-бер заттар үҙенең йүнһеҙлеген…»дә, әйтәйек, шағир, үҙен изге йәнгә һанап, бөтә етешһеҙлектәрҙе гел заманға япһарыусылар адресына еңелсә генә яңғыраған тәнҡит һүҙҙәре ташлаһа, «Уйҙар уйлап…» иһә киреһенсәрәк фекер тыуҙыра. Бында «илем, тиеп, ғәзиз ерем, тиеп йәп-йәш көйө» һуғышта һыңар аяғын ҡалдырып ҡайтҡан, ә хәзер инде аҡһаҡал ҡорона ингән ҡарттың

бөгөнгө хәл-ваҡиғалар хаҡында әсенеп уйланыуҙары һүрәтләнгән. Бөгөн тәхеттәрҙә ултырған, төрлө юл менән аҡса һуҡҡандар өсөн ҡандар түктек микән ни, тигән һорау бирә ҡарт үҙ-үҙенә.

«Тарих битен асып…» менән «Һандуғас та белә…» тигән шиғырҙар ҙа уйландырырлыҡ. Тәүгеһендә шағир, «таңдан тороп ҡара ергә йәшәү өсөн орлоҡ һибеүсе» игенсенең ил башлыҡтары иғтибарынан төшөп ҡалыуына:

Ил туйҙырған ирҙе оноттоғоҙ.
Оноттоғоҙ икмәк ҡәҙерен.
Тарих битен асып аҡтарам да,
Әрнеп ҡуя йөрәк-бәғерем, –

тип үпкәһен белдерһә, икенсеһендә инһә илдә хөкөм һөргән ғәҙелһеҙлекте хатта һандуғас та аңлай һәм, моңон йәлләп, ҡап ҡорһаҡлы әфәнде биләмәһенә әйләнгән урманды ташлап ҡитә лә бер ярлының йорт-ҡыуағына күсә.

Р. Шаммастың быуат башындағы шиғриәтендә, «Матурлыҡ хаҡы» тигән әкиәт-поэмаһынан тыш, мөхәббәт темаһына арналған «Шул ике һүҙ араһында» тип аталған шиғыры ла бар. Тик ул бер аҙ ҡаршылыҡлыраҡ фекер уята һымаҡ. Тәүге строфала автор «“Яратам”, – тип әртисләнеп әйткән һүҙҙән ҡурҡыу кәрәк…», – тип киҫәтә лә, һуңғыһында инһә хистәрҙе йәшермәҫкә күндерергә тырыша:

«Яратам» йә «яратмайым»… –
Улар, әйҙә, йәнәш барһын.
Тик йәнәшең йәшермәһен –
Тура әйтһен, алдамаһын.

Р. Шаммастың был шиғыры XIX быуат рус әҙәбиәтенең бер вәкиле яҙып ҡалдырған (әгәр яңылышмаһам) бынау юлдарҙы хәтерҙә яңыртып ҡуйҙы: «Любит не тот, кто “люблю” говорит, любит тот, кто при встрече краснеет». Хаҡлыҡ кем яғында икәнлеген тәрбиәле, әхлаҡ нигеҙҙәрен яҡшы үҙләштергән уҡыусы әйтер. Әммә, нисек кенә булмаһын, «Шул ике һүҙ араһында» – кендектәрен күрһәтеп йөрөгән хәҙерге заман ҡыҙ-ҡырҡындар өсөн фәһем алмаҫлыҡ шиғыр түгел.

Ошо йәһәттән Рауил Шаммастың «Аҡһаҡал әйтерҙәре» тигән шиғыры ла фәһемле. Дөрөҫөрәге – шиғырҙары. Сөнки шаҡтай зур тормош юлы үткән аҡһаҡалдың башлыса йәштәргә тәғәйенләнгән аҡыллы кәңәштәре

төрлөшәр юллы ун шиғырҙан тора. Тәүгеһендә (һиғеҙ юллыҡта), мәҫәлән, ул уҡыусыны сабырлыҡҡа өндәй. Икенсеһендә (биш юллыҡта), һөйөп-һөйөлгәндәр – иң бәхетле кешеләр, тип иҫәпләй, шуға күрә уларҙы ошо тойғоноң ҡәҙерен белергә саҡыра. Өсөнсөһөндә (һигеҙ юллыҡта), эсендә кер һаҡламаған, асыу-үс тотмаған, йәне төрлө сүп-сарҙан азат кешеләр йәше олоғайғас та тиҙ генә төҫ ташламай, тигән фекерҙе үткәрә. Дүртенсеһендә (ун юллыҡта), нәпсеңә баш булырға ҡуша: «Булғанына шөкөр, тиң дә батша булып йөрө өйөңдә». Бишенсеһендә (ун дүрт юллыҡта), «Ҡыш киләһен күреп тораһың, уйлама әле үткән йәйеңде. Йәйең ҡалһын, әйҙә, күңелеңдә. Ҡаршылай бел ҡыштың килеүен дә», тип тыныслandыра шағир үҙен дә, уҡыусыһын да. Алтынсы, етенсе, һигеҙенсе, туғызынсы, унынсы шиғырҙар – дүрт юллыҡтар. Уларында ла автор аҡыл эйәһе булып ҡала. Әгәр береһендә, «Көнсөл быуа алмай башҡаларҙың һулар һулышын», тигән фекере менән бүлешһә, икенсеһендә, донъяла төрлө хәлдәр була, ләкин баһаң бүтәндәргә кәрәк булыуың-булмауың менән үлсәнә, тип иҫкәртә. Тағы береһендә, ерҙә йәшәйһең икән, кеше исемен аҡларға тырышырға кәрәк, тигән талапты алға һөрә һ.б.

Р. Шаммастың яңы быуатта ижад ителеп, «Ағиҙел»дең төрлө һандарында донъя күргән «Ҡалдырмағыҙ ҡәләм-ҡағыҙһыҙ», «Ғүмер кәрәҙҙәрең», «Рәхмәтебеҙ төҫө», «Тере ялҡын», «“Атай – ата ҡаҙ”, – тимәгеҙ», «Йәй эҙләйем», «Бер минут», «Тынлыҡ», «Кәҙерен белә-неңме?» тигән шиғырҙары ла — уның рухи донъяһын, күңел торошон сағылдырыусы әҫәрҙәр. «Ҡалдырмағыҙ ҡәләм-ҡағыҙһыҙ», әйтәйек, шиғриәттең тормоштағы ролен күтәрергә тырышыуҙың бер күренеше һымағыраҡ ҡабул ителһә, «Ғүмер кәрәҙҙәрең»дә иһә, кеше ғүмерен кәрәҙҙәргә тултырылған балға тиңләп, автор бик үҙенсәлекле образ-картина тыуҙырған: йылдар менән йылдар араһын хәтер генә тоташтырғанлыҡтан, үҙ кәрәҙеңде ҡапшап ҡына ҡарарға мөмкин, ә балын ҡаба алмайһың, сөнки ул килер быуындарға тәғәйенләп йыйылған.

Дүртәр юллы өс кенә строфанан торған «Йәй эҙләйем» – Р. Шаммас стиленә хас тел менән яҙылған лирик шиғыр. Унда тәбиғәт мизгелдәрен һүрәтләү аша кешенең күңел торошо кәүҙәләндерелгән һәм образлы фекерләү ярҙамында ярайһы ғына тәрән мәғәнә белдерелгән:

Елберҙәһен көҙгө шөлдөр –
Һис үпкәм юҡ көҙҙәргә.
Беҙҙең йәй бит яратылған
Көҙҙән йәйҙе эҙләргә.

Строфаларға бүленмәгән «Бер минут», ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, ысынында иһә фәлсәфәүи фекерләүгә ҡоролған: «… бер минут кешене бәхетле итә йә бәхетһеҙ итә ғүмергә»; «… бер минут ерҙе гөл итә ала, әйләндерә ала күмергә». Һуңғы дүрт юлда был фекер уғата ла үткерләнә:

Бер ҡараһаң, кеше ғүмерендә
Нимә генә инде бер минут.
Ә уйлаһаң, ғүмер – үҙе бер ут,
Янды, һүнде ғүмер – бер минут.

Әле һанап кителгән әҫәрҙәрҙең бөтәһенә лә иркенләп туҡтап тормаҫтан, Рауил Шаммастың быуат башындағы ижады хаҡында уйланыуҙарымды уның «Ишек тоткаһы» исемле шиғыры менән тамамларға булдым. Дөрөҫөрәге – был шиғыр тураһында уйланыуҙарым менән. «Ишек тоткаһы» – Ғайса Хөсәйеновтың өҫтә килтерелгән баһаламаһын тағы бер тапҡыр раҫлаусы миҫал: ябай нәмәләрҙән поэзия таба белеү маһирлығы. Әгәр тойомлау һәләтең булып, хистәргә бирелә белһәң, ишек тоткаһын йәнле кеше итеп күҙ алдына баҫтырырға була икән дә баһа. Телгә килгән ишек тоткаһының бына был һүҙҙәре менән кем генә килешмәҫ икән:

– Хәйерле юл теләп көн дә
Ҡалам оҙатып,
Бына хәҙер әйләнер, тип
Көтәм күҙ атып;
. . . . . .
Тауҙай шатлыҡ алып ҡайтһаң,
Ҡотланым тәүләп,
Уның ләззәтен татыныҡ
Тәүләп икәүләп…

Назар Нәжми дөрөҫ әйткән шул: «Һәр нәмәлә шиғыр ята, әгәр күрә, тоя белһәң, күргәнеңде йөрәгеңдә шиғыр итеп ҡоя белһәң». Рауил Шаммас – шундайҙарҙың береһелер.

2011, сентябрь

«ДОНЪЯ – НАҒЫШ, Ә КҮҢЕЛДӘ – ҺАҒЫШ»

(М. Ямалетдиндың һуңғы йылдарҙағы шиғриәтенә бер ҡараш)

Мәүлит Ямалетдиндың исеме әҙәбиәт һөйөүселәргә уҙған быуаттың етмешенсе йылдарынан бирле таныш. Шул мәлдән башлап, бөгөнгө көнгә тиклем, төрлө жанрға ҡараған һәм бер-бер артлы ташҡа баҫылып торған китаптары менән ул халҡыбыҙҙың һүҙ сәнғәтенә тоғро хеҙмәт итә, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ. Һыйына күрә – хөрмәте, тигәндәй, һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа уға тәнһитселәр ҙә битараф булманы. Хатта уларҙың иғтибар үҙәгендә торҙо, тиергә мөмкин. Ике тиҫтәгә яҡын ваҡыт арауығында шағир һәм прозаиктың әҫәрҙәрен баһалауға арналған ун бишләп мәҡәлә яҙылыуы һәм матбуғат биттәрендә донъя күреүе – шуға асыҡ дәлил.

Бәхеткә күрә, был популярлыҡ талант эйәһенең башын әйләндереп, «йондоҙ сире»нә һабыштырманы: ул, эш урындарын йыш ҡына алыштырғалап торһа ла, бер нигә ҡарамай, әүәлгесә ижад менән шөғөлләнеүен белде. Тик бына, нишләптер, һуңғы йылдарҙа, ундан артыҡ китап авторына иғтибар бер аҙ кәмей төштө һымаҡ. Ул, бәлки, әҙип хаҡында тегә быуатта баҫылып сыҡҡан бәҙге мәҡәләләрҙең авторҙары үтә күренекле һәм үтә мәртәбәле шәхестәр булыуҙан да киләлер. Назар Нәжмиҙең «Шағир тигән исем күтәреп…» («Ҡыҙыл таң» гәзите, 1997 йыл, 6-сы март) тигән мәҡәләһенән һуң, мәҫәлән, Мәүлиттең шиғриәте хаҡында яңы һүҙ әйтергә баҙнат итеп ҡара әле!

Ләкин баҙнат итмәй ҙә булмай. Сөнки әҙип – юлда. Йыл артынан йыл үткән һайын, үләне ҡырып сабылған бесән бакуйы шикелле, уның ижад емештәре лә ишәйгәндән-ишәйә, һутланғандан-һутлана бара. Ошо урында йәнә Назар Нәжмигә – был юлы уның «Яҙ! Яҙ! – тиҙәр» (1958) исемле шиғырына һылтанырға тура килә: нисек инде Мәүлит Ямалетдиндың быуат башындағы шиғриәтенә битараф ҡалаһың? Шағирҙың күпселек әҫәрҙәре үҙҙәре үк «Беҙҙең хаҡта ла яҙ, яҙ!» тип торғандай бит. «Бер шағирға» («Ағиҙел», 2009, 5-се һан) тигәнен уҡып сыҡҡас, уның авторы тураһында бер кәлимә генә булһа ла һүҙ әйтеү теләге уғата ла арта төштө.

Дүртәр юллы дүрт кенә строфанан торған был шиғыр Мәүлит Ямалетдиндың, ҡәләмдәш ағаһы Назар Нәжми шикелле, шиғриәткә ни тиклем ҙур яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡарағанлығын иҫбатлап тора: табаҡ-табаҡ һәм том-том шиғри китаптарын сығарыусы берәүгә мөрәжәғәт итеп, «Һүҙ ынйыһын һиңә рух-даръянан сүпләргә лә әле сүпләргә» тигән кәңәш бирә ул һәм кәңәшен түбәндәге юлдар менән нығытып ҡуя:

Сүпләп бөткәс, «иң-иң»дәрен һайлап,
Фекер ептәренә теҙергә;
Кешеләрҙең күңеленә уны
Моң епсәһе менән тегергә.

Ышанмаһаң, тыңла: Буранбайҙың
Моң-зар тулы кескәй хатынан
Ҡарттар илағанға тетрәнгән ил
Арына алмай һаман аһынан.

Әлбиттә, һүҙ ынйыһын сүпләү – ғәҙәти кәсеп түгел. Уны кәсеп тип атап булһа әле. Һүҙ ынйыһы тиҙ генә табылмаҫҡа ла мөмкин. Таптым,тигәс тә, алдатҡыс ҡына булып сығыуы ихтимал. Иң мөһиме, ынйы булып күренгән һүҙҙәндең тәрән мәғәнәгә эйә булыуындалыр. Тыштан ялтырап торған, ләкин һай фекерле һүҙҙәр теҙмәһенән кемгә һәм ни файҙа? Мәүлиттең «Бер шағирға»һына был ҡурҡыныс янамай һымаҡ.Һуңғы ике юлда кинәйәләп әйтелгән фекер уҡыусыла икеләнеү-микеләнеү тойғоһо уятырға урын ҡалдырмайҙыр.

Әйткәндәй, ошо ике юлға төрөлгән фекер М. Ямалетдиндың «Буранбай сәсәндең хаты» («Ағиҙел», 2010, 10-сы һан) тигән шиғырында артабан үҫтерелгән һәм бер ни тиклем асыҡлабыраҡ бирелгән. Минең уйымса, ошо бер шиғыр сиктәрендә автор йөкмәткеһе буйынса поэма геройына торорлоҡ образ тыуҙырыуға ирешкән. Буранбайҙың «Илем, халҡым иҫән ҡалһын өсөн мин кисерер инем мең үлем», «Мин ҡайтырмын ҡурай моңо булып, мин ҡайтырмын һеҙгә йыр булып» тигән һүҙҙәре генә лә Себер тарафтарына олаҡтырылған сәсәндең онотолмаҫ поэтик һынын күҙ алдына килтереп баҫтыра.

Һүҙҙең, һүҙҙән үрелгән шиғриәттең тылсымлы ҡөҙрәтенә тәрән ышаныу һәм уға ысын күңелдән табыныу хисе М. Ямалетдиндың бынан элегерәк ижад ителгән «Бер күңелле шиғыр яҙһаң ине…»

(«Ағиҙел», 2001, 6-сы һан) тигән әҫәрендә айырыуса көслө яңғырай. Шиғырҙың тәүге өс строфаһында автор, был донъяның барлыҡ көйөктәрен, һағыштарын юҡҡа сығарырҙай, ғаләм халҡын, йығылып китеп, күҙҙәренән йәштәр сыҡҡансы көлдөрөп, ғүмер буйы күңеленә йыйған юшҡындарҙы иретеп ағыҙырҙай шиғыр яҙһаң ине, тип хыялланa һәм:

Көлгән тауыш яңғыраһын ине
Ҡош йырында, шишмә сыңында.
Тормош үҙе бер йылмайһын ине
Егерменсе быуат һуңында,.. –

тигән теләген белдерә. Әҫәрҙе ошо изге теләк менән ослап ҡуйырға ла булыр ине, бәлки. Ләкин ул саҡта бигүк Мәүлитсә килеп сыҡмаҫ ине. Сөнки әлеге осраҡта уға шиғриәттең тәьҫир итеү көсөн күрһәтеп кенә сикләнмәйсә, уҡыусы менән донъя хәлдәре тураһында гәпләшеп алыу мөһимерәк. Шуға күрә лә шиғырҙың ҡалған өс строфаһында ул, үҙенең эске донъяһы һәм күңел торошо менән уртаҡлашҡан булып, әйтергә теләгәнен туранан-тура ярып һала:

Донъя буп-буш.
Күңел үкһеҙ етем,
Һағышынан ятып үлмәле.
Ә беҙ һаман низер даулашабыҙ,
Тәгәрәп йөрөп шуға көлмәле.

«Шағирҙар ҙа шул уҡ кеше…», «Хушлашыу», «Һаҡмар ағыр», «Аҡмулла», «Әхмәҙин Әфтәхкә», «Әйләнә лә бер ҡош…» тигән әҫәрҙәр ҙә авторҙың шиғриәт хаҡында, уның асылы һәм тәғәйенләше хаҡында уйланыуҙарҙан үҫеп сыҡҡандар, тиергә була. Тәүгеһендә, әйтәйек, шағирҙарҙың күңеле нескәрәк булыуы, шуға күрә «илдең ғәмен, халыҡ зарын» тәрәнерәк аңлауҙары һыҙыҡ өҫтөнә алынһа, икенсеһендә иһә ижад кешеләренең күңел кисерештәре бик оҫта тотоп алынған һәм матур итеп һүрәтләнгән: әҫәр яҙылып бөткәс, шатлыҡлы хистәр кисереп, үҙеңде өҫтөңдән оло бер тау төшкән шикелле итеп тойһаң да, барыбер яманһыу, сөнки хәҙер ул һине ташлап китә. (Тәңкит мәҡәләһен яҙып бөткәс тә шундай хистәр кисерәһең.) Шиғырҙың һуңғы юлдарында был тойғо айырыуса һағышлы яңғырай:

Һин, беләмен, көн итерһең минһеҙ,
Ә мин бына ҡалайтырмын һинһеҙ?

Был донъяла йәнә яңғыҙ ҡалам,
Хәс ашлығын урып алған ялан…

«Һаҡмар ағыр» – арабыҙҙан иртәрәк китеп барған билдәле шағир Рәйес Түләк иҫтәлегенә арналған ыҡсым, әммә ифрат тәрән йөкмәткеле әҫәр:

Рәйес Түләк!
Ниндәй хаҡтар түләп
Ҡайтарайыҡ яҡты донъяға?..
Хәйер, ҡайтмаҫ инең – ыласындар
Ике ҡунмай бер уҡ каяға.
. . . . . .
Донъя фани. Гүмер сикле. Әммә
Унда түгел эштең асылы –
Мәңге һүнмәҫ дан ҡалдырып китә
Ата балаһының аҫылы.

«Аҡ күңелле Аҡмулланың һыны балҡый йыраҡтан» тигән юлдар менән тамамланған «Аҡмулла» исемле шиғыр ҙа, ҡәләмдәше һәм замандашы, сәсән телле шағир Бураңбай Иҫҡужин иҫтәлегенә арналған «Әйләнә лә бер ҡош…» тигән шиғыр ҙа Мәүлит Ямалетдиндың шиғриәт Ғали йәнәптәре алдында ысын мәғәнәһендә баш эйеүен дәлилләп тороусы асыҡ миҫалдарҙыр ул.

Тәбиғәте, холҡо-фиғеле менән Мәүлит юморға бай шәхескә оҡшап тора: уның тәү ҡарамаҡҡа етди генә күренгән шиғырҙарында ла аҫтыртын йылмайыуҙы шәйләргә мөмкин. Башкөллө шаян тулҡындарға көйләнгән әҫәрҙәр ҙә осрап ҡуйғылай шағирҙың ижад арсеналында. Шундайҙар иҫәбенә һис бер шикләнеүһеҙ «Яҙмағандыр» менән «Әхмәдин Әфтәхкә» тигәндәрен индерер инем. Улар икеһе лә шул уҡ шиғриәт темаһына, шиғриәттең эстетик мөмкинлектәрен асыҡлауға һәм уның йәмғиәт тормошонда тотҡан урынын билдәләүгә арналғандар.

«Яҙмағандыр»ҙа, мәҫәлән, автор, тормошҡа ашмаҫ хәбәр һөйләп, уҡыусыны еңелсә йылмайып алырға мәжбүр итә. Йәнәһе, көтмәгәннитмәгән ерҙән, Нобель премияһы алырға саҡырып, уға Стокгольмдан

телеграмма килеп төшә. Аптырашта ҡалған автор, кәңәш һорап, башта йөрәгенә мөрәжәғәт итә. Унан һуң – аҡылына. Йөрәге шағирҙы премия алырға барырға өндәһә, аҡылы иһә киреһенсә хәл итә: «Ҡуй, йөрөмә, ҡустым, мине тыңла. Һәм ҡайт асылыңа»,– ти ҙә, артабан һүҙен былай дауам итә:

«Йә, был хәбәр дөрөҫлөккә сығып,
Тапшырылһа Нобель миллиондары,
Илһам утын байлыҡ томалаһа,
Нигә ынтылырһың унан ары?..»

Шиғыр ирониялы көлөү менән тамамлана: йәнәһе, шағирҙың ике самолеты ла ремонтта, шул сәбәпле премия алырға баралмауын белдереп, Корольгә хат яҙып һала.

Шаяртыу формаһында яҙылған «Әхмәдин Әфтәхкә» тигән шиғыр ҙа уҡыусыла йылмайыу тойғоһо уятмай ҡалмаҫ, моғайын. Башҡорт шағиры Әхмәдиндең исеме Иран президентыныҡына яҡын тороуҙан оҫта файҙаланып, автор был шиғырында шаҡтай уҫал һәм зәһәр үткер фекер әйтеүгә ирешкән.

Шулай ҙа М. Ямалетдиндың сатира һәм юмор өлкәһендәге маһирлығы «Шаңдауҙар» («Ағизел», 2007, 7-се һан) тигән әҫәрендә көслөрәк сағылғандыр. Был әҫәрен автор үҙе «пародик поэма» тип атаған. Ләкин бында, минең ҡарашымса, пародия ғына түгел, гротеск та барҙыр, сөнки сатира-юморға хас йылмайып көлөү сюжет ағышында әкренләп әсе көлөүгә әйләнә.

Әҫәр – күләмле генә: ете йөҙ иллеләп юлдан тора. Структураһы ла үҙенсәлеклерәк: рим цифрҙары менән билдәләнгән ун өс бүлеккә бүленгән. Тик, тышҡы яҡтан ҡарағанда, улар бер ниндәй ҙә ҡанунға буйһондоролмағандар: иң ҡыҫҡаһы – туғыҙ, иң оҙоно – йөҙ ҙә һикһәндән артыҡ юлдан тора. Өҫтәп, тағы бер үҙенсәлек хаҡында әйтергә кәрәк: Мәүлит Ямалетдин поэмаһының һәр бүлеге шағир Инсур Артурҙан (Йәһүҙиндән) эпиграф итеп алынған юлдар менән асыла.Һәр эпиграф Мәүлит ҡәләме аҫтында пародияға әйләнә һәм, бүлектән-бүлеккә күскән һайын, ул көсәйгәндән-көсәйә, үткерләнгәндән-үткерләнә бара.

Ләкин Мәүлиттең төп маҡсаты – Инсурҙы битәрләү түгелдер (хәйер, уға ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәре урыны-урыны менән ярайһы уҡ ҡаты яңғыраһа ла). Ҡәләмдәшен битәрләүҙән дә бигерәк, поэма авторы был эпиграфтарҙы ширма өсөн ҡулланғандыр, тип уйлайым. Сөнки

ул үзенең был әҫәрен башлыса, йәшертен генә, көлөп-йылмайып, ләкин тоҙлап-борослап ҡына (ошо яғы менән «Шаңдауҙар»ҙың стиле уҙған быуаттың илленсе-алтмышынсы йылдарында шағирҙарыбыҙ бер-береһенә төрттөрөп яҙған һәм «Һәнәк» журналы биттәрендә баҫылғалап торған эпиграммаларҙы иҫкә төшөрөп ҡуйҙы) йәмғиәтебеҙ тормошондағы тиҫкәре күренештәрҙе фашлауға арнаған бит.

Бындайын да ҡатмарлы бурысты үтәп сығыр өсөн автор художестволы әҙәбиәткә, бигерәк тә уның сатирик жанрҙарына хас һүрәтләү сараларын мул ғына файҙаланған. Шул сараларҙың бында йыш ҡына күҙгә салынғаны – символлаштырыуҙыр, үҙебеҙсә әйткәндә – ишаралыр. Поэма баштан-аяҡ ишараға ҡоролған, тиһәк тә, хата булмаҫ. Беренсе бүлектәге «заман» тигән уртаҡлыҡ исеменең икенсе бүлектә «Заман» тигән яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китеүе – үҙе генә лә серле йомаҡҡа оҡшап тора. Поэмала тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙың (дөрөҫөрәге – Заман менән шағир, лейтенант ҡатын менән шәфҡәт туташы араһындағы диалогтарҙың) айныҡҡыста барыуы ла – ишара. Хатта, бик ҡурҡыныс ишара, тиер инем: яңғыҙлыҡ исемен йөрөткән Заман ҡарт, хәмер эсеп, айныҡҡысҡа килеп эләккән икән, тимәк, уртаҡлыҡ исемен йөрөтөүсе заман да (йәғни беҙ йәшәгән заман!) шул хәлгә тарыған түгелме һуң? Авторҙың был ишараһын шулай аңларға кәрәктер. Һәм уның менән килешмәй сара юҡ. Ниндәй аяныс!

Заман ҡарттың «Шағир булған ерҙә – мөтәшағир, бесәйем бар ерҙә бар этем», «Бер келәмгә ике тубыҡ һыймай, зурын алам тиһәң – аҡса юҡ», «Төрлө мәғәнәһеҙ талап менән сығармағыҙ мине сығырҙан: элеккесә аралармын һаман был донъяны йүнһеҙ шағирҙан», «Яҡты донъя – цирк. Тик мин унда тамашасы ғына ни бары» һәм башҡа шуның кеүек кинәйәле фекерҙәре; Иблистең Заман ҡолағына «Талант булған ерҙә көнсөллөк бар» тип бышылдауы; телгә килгән аҡ бесәйҙең Заман ҡартҡа йән аҙҙырғыс кәңәштәр биреүе; эскеселектә ғәйепләгән шәфҡәт туташының «Ниндәй көнгә төшөрҙөләр илде» тип әсенеүе; айныҡҡыс хеҙмәткәре лейтенант ҡатындың «Беҙҙең илдә башҡаса һис мөмкин түгелдер. Бында йәшәү аҡылынан яҙған диуанаға ғына еңелдер» тигән ишаралары поэманы уҡыған саҡта бер-бер артлы тыуып торған бошоноу-борсолоу хистәрен уғата ла көсәйтәләр

Әҫәрҙең башынан алып ахырына тиклем тулып ятҡан кинәйәле фекерҙәрҙе, ишараларҙы артабан да килтерергә булыр ине. Ләкин уҡыусы иғтибарына Заман менән шағир араһындағы бәхәс-диалогты (етенсе бүлек) тәҡдим итеү менән генә сикләнергә тура килер.

Айныҡҡысҡа килеп эләккән шағирҙың «Ниңә аҙҙың улай, әйт заман?» тигән һорауына Заман ҡарт былай тип яуап ҡайтара: «Был һорауың миңә түгел, улым, – үҙеңә. Һорау ниндәй – яуап шундай, кисер, тура бәреп әйтһәм йөҙөңә. Ниңә аҙҙың, тинең. Мин – тик шәүлә. Һеҙ, кешеләр, үҙегеҙ аҙҙығыҙ. Дошманығыҙ Иблис ыңғайына хаҡ һәм тура юлдан яҙҙығыҙ. Кеше ниндәй – заман шундай. Мин бит – донъялағы һеҙҙең сағылыш. Ниңә миңә өйөләргә тейеш тормоштағы һәр бер яңылыш?».

Йыйып ҡына әйткәндә, Мәүлит Ямалетдиндың «Шаңдауҙар» исемле пародик поэмаһы – был жанрҙың шаҡтай киң эстетик мөмкинлектәргә эйә булыуын раҫлап тороусы әҫәр, тиер инем. Әгәр дәртең-дарманың, көсөң-ҡеүәтең етһә, тәүәкәллегең һәм ҡыйыулығың шашып торһа, ә иң мөһиме – талантың булһа, пародияны кемдән булһа ла берәй кешенән, уның айырым-асыҡ етешһеҙлектәренән, тормош тип аталған ҙур сәхнә буйлап ҡыйыш-мыйыш атлауынан әсе көлөү өсөн генә түгел, бәлки сәйәси һәм фәлсәфәүи юҫыҡтағы мәсьәләләрҙе күтәреү өсөн дә ярайһы ғына уңышлы файҙаланырға мөмкин икән. Киләсәктә башҡорт поэзияһында сатира һәм юмор темаһын фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе йәш быуын әҙәбиәт белгестәре был поэмаға иғтибар итмәй ҡалмаҫтар, моғайын, һәм уны иркенләберәк, тәрәнерәк тикшереҙәр, тип өмөтләнәйек.

Яңы быуатты Мәүлит Ямалетдин «Хуш, бәхил бул, егерменсе быуат…» тигән шиғыры менән ҡаршыланы. Муса Ғәлиҙең «Ҡапҡаңды ас, Быуат!» тигән поэмаһын һәм Ихсан Әхтәмйәновтың «Рәхмәт һиңә, Егерме!» тигән шиғырын иҫкә төшөрөп ҡуя ҡуйыуын, ләкин Мәүлит уларҙы ҡабатламай: үткән быуатҡа уның үҙ ҡарашы, үҙенең әйтер һүҙе. Әгәр Ихсан Әхтәмйәнов Егерменсе быуатты шатлыҡ хистәре кисерәкисерә оҙатһа, Мәүлит Ямалетдин иһә уның менән моңһоуыраҡ тойғоларын белдереп хушлаша. Шуныһы мөһим: был шиғырҙың артында ялтырауыҡ һүҙҙәр менән эш итеүсе түгел, ә ғүмер ағышына философтарса күҙ ташлаусы һәм фекер йөрөтөүсе зат тора. Ул Егерменсе быуатты дифирамб йырлап оҙатмай, ә хушлаша, бәхилләшә, рәнйеп ҡалмауын үтенә, ташлап киттеләр, тип үпкәләмәүен һорай, сөнки был беҙҙең теләктән һәм ихтыярҙан тормай, ул гел шулай булған һәм киләсәктә лә шулай дауам итәсәк. Шиғырҙың авторы үҙен Егерменсе быуат балаһы тип һанай һәм унан, фатихаһын бирep, киләсәккә аҡ юл теләүен һәм бәхет юрап ҡалыуын үтенә. Шиғыр яҙылышы менән дә бик матур яңғырай. Һигеҙ строфалы ошо матур шиғырҙан бында икеһен генә күсереү менән сикләнергә мәжбүрмен:

Бик яманһыу һинән айырылыу,
Ташлап китеү ҡыйын.
Ғәзизерәк була бара инең,
Йылдар үткән һайын.

Тороп ҡала һиндә ғүмерҙәрҙең
Иң ҡәҙерле мәле.
Уны һағынып иҫләр көндәребеҙ
Алда булыр әле.

Үҙенсә бер фәлсәфәүилелекте (ябайлаштырыбыраҡ, мин уны тәрән фекер төрөлгән серлелек, тип атар инем) М.Ямалетдиндың «Ҡыш бигерәк кинәт килде быйыл…», «Көҙгө йыр», «Көрәш», «Бушлыҡ», «Төн», «Азатлыҡ», «Мәҙәниәт»,«Сәнғәт», «Баҫалҡылыҡ», «Донъя», «Телһеҙ ҡыңғырау», «Өҙгәләнеү», «Культура», «Символдар», «Яңғыҙлыҡ», «Тормош йыры», «Көнәй-көнәй замандарҙы…», «Хыял» тигән шиғырҙарында ла һиҙемләргә була. Әлбиттә, бер мәҡәлә сиктәрендә уларҙың бөтәһе тураһында ла иркенләп һүҙ алып барыу мөмкин түгел, әммә ҡайһы берҙәренә туҡталып китеү мотлаҡ кәрәктер.

«Ҡыш бигерәк кинәт килде быйыл…» менән «Көҙгө йыр» тигәндәрен, мәҫәлән, башта, исемдәренә ҡарап, былар – пейзаж лирикаһылыр, тип уйлайһың. Асылда иһә, уларҙы иғтибар менән уҡый башлағас, шиғырҙарҙың икеһендә лә көро пейзаж ғына түгел икәнлегенә төшөнәһең. Тәүгеһендә, тәҙрә аша тәбиғәт донъяһын күҙәтеп торған лирик герой ҡыҙыҡ ҡына һөҙөмтә яһап ҡуя:

Өйөрөлөп яуған был ҡарҙың да
Ни эше бар беҙҙә – тереклектә?
Үҙ ҡануны, күк көҙрәте менән
Яралған бит улар бейеклектә.

Беҙ – ерҙеке.
Хәстәребеҙ бында –
Ҡоштарҙыҡы тышта, минеке өйҙә.
Үҙебеҙгә күрә эшебеҙ бар.
Ҡар беҙһеҙ ҙә яуыр.
Яуһын әйҙә!

Икенсеһендә, «Көҙгө йыр»ҙа, һалҡын ел аҫтында сайҡалған ағастар телгә килә. Ҡоштарҙай теҙелеп, йылы яҡтарға осоп китеү ниәтенән уларҙы бер уй туҡтата:

«Беҙ, ярай, китербеҙ,
Елдәр күп ҡаҡһалар.
Кешеләр нишләр һуң
Беҙһеҙ ҙә ҡалһалар?!»

«Көрәш» – бөтөн фәлсәфәүи шиғыр, тиергә мөмкин. Философиялағы закондар һәм категориялар туранан-тура аталмаһа ла (әгәр шулай була ҡалһа, ул, бәлки, шиғырлығын да юғалта төшөр ине), был закондарҙың һәм категорияларҙың образлы сағылышы күҙгә бәрелеп тора:

Ваҡыт көслө – ташып тора ҡеүәте,
Мәңгелектең бирешмәҫкә – ниәте.

Уртала беҙ – тарихты бар итеүсе,
Мәңгелекте мәңгелеккә илтеүсе.

(Ошо урында Назар Нәжмизе, унын:

Ер өҫтөнә һибелгәндәр
Мәңгелек уттар.
Бара ғүмер... Яна уттар –
Яна минуттар,
Яна минуттар.

Яна уттар, уттар яна –
Мәңгелек уттар.
Мәңгелеккә ҡалыр өсөн
Һүнә минуттар,
Һүнә минуттар,.. –

тигән юлдарын хәтергә төшөрмәй сара юҡ.)

Фәлсәфә булған ерҙә хәйләгә лә урын барҙыр ул. Мәүлит Ямалетдиндың «Бушлыҡ», «Төн», «Азатлыҡ» тигән шиғырҙары шундайҙарға оҡшап тора. Уларҙың береһендә лә сәйәси лексика тапмаҫһың: әйтер фекерен автор туранан-тура ярып һалмай, бәлки,

сағыштырыуҙар, йәнәшәлектәр аша белдерә. «Бушлыҡ»тағы «Донъя – нағыш, ә күңелдә – һағыш» тигән фраза, мәҫәлән, бер генә уҡыусыны ла битараф ҡалдырмағандыр. «Төн»дә авторҙың уй-фекерҙәрен асыҡларға Иблис образы ярҙамға килгән: уның, «Әҙәмде еңдем»,тип маҡтаныуынан һуң, авторға, «Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ шул инде – төн ҡуйыра күңел күгендә», тип килешеүҙән башҡа сара ҡалмай. Яңғыраштары менән дә, мәғәнәләре буйынса ла шиғырҙың тәүге һәм һуңғы строфалары (ә ул алты строфанан тора) бер-береһенә бик яҡындар:

Тарихта төн.
Ҡараңғылыҡ арта.
Шом пәрҙәһе ҡаплай офоҡто.
Беҙ күрмәбеҙ, нәҫелебеҙ күрер
Киләсәктә таңғы ысыҡты.

Төрлө осорҙа, төрлө телдә азатлыҡ хаҡында баш ватып шиғыр яҙыусылар әҙ булмағандыр. Ә бына Мәүлит азатлыҡтың ҡатлы-ҡатлы булыуына, уның тик уйҙа ғына еңел, хыялда ғына татлы икәнлегенә баҫым яһап әйткән. Шиғырҙың дүрт строфаһы ла «Азатлыҡтың юлы фажиғәле» тигән рефрен менән көсәйтелгән.

«Көнәй-көнәй замандарҙы…» менән «Хыял» тигән шиғырҙар ҙа («Ағиҙел», 2009, 5-се һан) – ошо типтағы әҫәрҙәр. Тәүгеһе быуындан-быуынға күскән ғүмерҙең мәғәнәһеҙерәк үтеүе хаҡында фәлсәфәүи пландағы уйланыуҙарға ҡоролған. Ул бындай юлдар менән тамамлана:

Баҡыйға китеп барабыҙ
Әкиәт һөйләй-һөйләй.
Ни ҡалдырҙығыҙ беҙгә, тип
Салғыйҙан тарта тәнәй.

Икенсеһе («Хыял» тигәне) – аллегорияға тартым. Кинәйә тәүге строфанан уҡ башлана:

Ваҡыт машинаһы булһа ине,
Үҙе менән мине алһа ине.
Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ
Офоҡ аръяғында ҡалһа ине.

Артабанғы строфаларҙа лирик герой бала сағына сәфәр ҡылырға, атаһы менән әсәһен күргәһ, тыуған төйәгендәге дуҫтары менән осрашырға хыяллана. Ләкин был хыялдар уның төп теләген йәшерер өсөн генә һанап сығылғандыр. Сөнки һуңғы строфала ул, бала саҡтағы болоттар уны үҙе менән алып китһә ине һәм «Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ ҡулғынаһын болғап ҡалһа ине» тигән теләген белдерә. Шунан сығып, тәүге һәм һуңғы строфалар шиғырҙың идеяһын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итеүсе компоненттар булып торалар, тиергә мөмкин.

Был мәҡәләлә телгә алынған шиғырҙарҙың байтағында Мәүлит Ямалетдин, «Яҙмағандыр» тигән шиғырындағыса, күберәк аҡылға таяна.Ләкин аҡылдың ара-тирә хис-тойғоларҙан өҫтөнлөк итеүе һис кенә лә шиғриәттең төп ҡанундарын һанға һуҡмау тигән һүҙ түгел. Әгәр ҡайһы бер осраҡта аҡыл, ысынлап та, үҙен нығыраҡ һиҙҙерә башлай икән, ул һаман шул Мәүлит шиғриәтенә хас фәлсәфәүилелек менән аңлатыла торғандыр, тип уйлайым. Мәүлиттең шиғриәттә һәм музыка сәнғәтендә генә түгел, бәлки, кеше эшмәкәрлегенең башҡа өлкәләрендә лә киң мәғлүмәтле, донъяға айыҡ ҡарашлы шәхес икәнлеге бер кемдә лә шик-шөбһә уятмайҙыр.

Фәлсәфәүилелек, эрудиция хаҡында һүҙ сыҡҡас, «Мәҙәниәт» («Ағиҙел», 2003, 1-се һан) тигән шиғырға тукталып китеү урынлы булыр. Бынан элегерәк яҙылған «Бушлыҡ» тигән шиғырына бирелгән төшөрмәлә автор «мәҙәниәт» һүҙе ғәрәпсәнән алынған «цивилизация» мәғәнәһен бирә, тип аңлатҡайны. Әле һүҙ барған шиғырҙың исемен «Цивилизация» тип атаһа ла бер ниндәй ҙә хилафлыҡ булмаҫ ине. Беренсенән, был һүҙ башҡорт телендә лә йәшәй. Икенсенән (бынығы – мөһимерәк тә) шиғырҙа һүҙ, ысынлап та, Ер йөҙөндә бөҙгә тиклем йәшәп, юҡҡа сыҡҡан цивилизациялар хаҡында бара.

Шиғырҙы (күләме менән ул әллә ни ҙур түгел) «Һәр бер мәҙәниәт, ахыр сиктә, тамамлана ерҙә үлем менән» тигән юлдар асып ебәрә. («Һәр бер цивилизация…» тиелгән булһа, көслөрәк тә, урынлыраҡ та яңғырамаҫ ине микән?). Артабан уларҙың исемдәре һанала. Һуңынан, «Хужалары киткән. Ятып ҡалған серҙәр тултырылған һандыҡтары» тигән ғәйәт йөкмәткеле һәм ғибрәтле һөҙөмтә яһап ҡуйыла.

Шулай ҙа авторҙың әйтергә теләгән төп фекере (шиғыр цивилизацияларҙы тиктомалға һанап сығыу өсөн түгел, ә шул фекерҙе әйтер өсөн яҙылғандыр ҙа инде!) беренсе строфалағы «Улар һәләкәте беҙҙекенән айырыла бары күләм менән» тигән юлдарҙалыр, минеңсә. Ошо урында ирекһеҙҙән Урта быуаттарҙа киң таралған «Мәскәү –

Өсөнсө Рим» тигән сәйәси теория иçкә килеп төшә. Ул теория, 1453 йылда төрөктәр Византияны (Икенсе Римде) ҡолатҡас, донъяға тыуа. Шул замандағы ҡайһы бер аҡыл эйәләренең «Дүртенсе Рим булмаясаҡ!» тигән киçәтеүҙәре лә билдәле. Был киçәтеү ике яҡлыраҡ фекер уята, әлбиттә: Мәçкәү – йә ғүмергә Өсөнсө Рим булып ҡаласаҡ, йә, ваҡыты еткәс, тағы бер цивилизация юҡҡа сығасаҡ. Төплө әйтелгән бер поэтик юл бына ниндәй фекерләүҙәргә алып килергә мөмкин!

Беҙ йәшәгән цивилизация сиктәрендәге тормоштоң ҡайһы бер яҡтарын сағылдырған «Сәнғәт» һәм «Баçалҡылыҡ» тигән шиғырҙар (улар икеһе лә «Мәҙәниәт» менән бер тирәлә ижад ителгәндәр булһа кәрәк), ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бәхәслерәк уй-фекер тыуҙыра. Тәүгеһендә һүҙ сәнғәттең бөйөклөгө, донъяның да, сәнғәттең дә камиллығы һәм теүәллеге хаҡында бара. Тик бына камиллыҡтың да, теүәллектең дә ниндәйҙер ҡөҙрәт менән аңлатылыуы ғына нисектер мәҙәгерәк тойола. Икенсе шиғырында автор үҙ-үҙен инҡар иткәндәй: башта ул баçалҡылыҡ, тыйнаҡлылыҡ, әҙәплелек урынына мин-минлектең, һөмһөҙлөктөң арта барыуы тураһында бәйән итә лә, һуңынан бындайыраҡ һығымта яһап ҡуя:

Донъя алмаш.
Бер ҡараһаң, алдын,
Бер ҡараһаң, артын күрһәтә.
Мәңгелектәй күргән кимәттәрең,
Кәкре ҡайындарға терәтә.

Камил, теүәл донъя, шулай итеп, йә алдын, йә артын күрһәтергә лә һәләтле икән дәбаһа.

Ҡөҙрәт хаҡында һүҙ сығып ҡуйғас, бынан алда донъя күргән ҡайһы бер мәкәләләремдәге шикелле, бынһында ла уға бер ни тиклем туҡталып китергә кәрәктер. Билдәле булыуынса, халыҡ аңында, башлыса – сәйәсмәндәр араһында, выждан иреклеге тип аталған иç киткес нескә төшөнсә йәшәп килә. Йөкмәткеһе буйынса ул ифрат сетерекле. Уны һаҡһыҙ ҡулланһаң, мөкиббән китеп дингә бирелгән кешенең хәтерен ҡалдырып ҡуйырға ла күп кәрәкмәй. Әммә Мәжит Ғафуриҙың 1915 йылда, бөтә диндәрҙең дә ҡотороп сәскә атҡан мәлендә, «Юҡтырһың да, алла» тип икеләнеүен дә онотоп булмай. Ошо исемдәге шиғырының тәүге строфаһында уҡ ул «Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаç инең ерҙә алтын, көмөшкә…» тип нарыҡлаған бит. Йөҙ йылдан һуң

уҡыусы зиһененә Ғафури әйткәндең киреһе тылҡыҫлана түгелме? Бынан йөҙ йыл элек ижад ителгән «Юҡтырһың да, алла» бөгөн ифрат заманса яңғырамаймы? Уны ҡат-ҡат уҡыйһың да,совет заманында еңел генә махсус юғары белем алып, әҙергә мәҙер генә әҙәбиәт донъяһына килеп ингән бәгзе берәүҙәрҙең халыҡ шағиры мираҫына еңелсәрәк ҡараш ташлауына ғәжәпләнәһең.

Мәүлит шиғырҙарына кире әйләнеп ҡайтып (хәйер, ҡөҙрәт көсөн иҫкә алыу бер уға ғына хас күренеш түгел), шуны әйткем килә: ҡөҙрәт менән һатыу итеүгә ҡарағанда, уҡыусыны ерҙә йәшәп киткән һәм йәшәп яткан аҡыл эйәләре, әүлиәләр үрнәгендә тәрбиәләргә тырышыу отошлораҡ түгел микән? «Зәйнулла ишан нәсихәттәре» – ана ниндәй матур, күңелгә йәтешле һәм уҡыусы аңында ышаныс уятырҙай шиғыр! Ни өсөн ышаныс уятырҙай? Сөнки шиғырҙың геройы – абстракт төшөнсә түгел, ә ер кешеһе. Һәм Мәүлит Ямалетдин халыҡты яҡшылыҡҡа өндәүҙең бик урынлы, ориғиналь ысулын уйлап тапҡан: йәнәһе, ишан, выжданығыҙ таҙа булһын, тигән; ҡомһоҙлоҡтан ҡасырға ҡушҡан; ғәйбәт һатыуҙан, яла яғыуҙан һаҡ булырға өндәгән; боҙоҡлоҡтан бушанырға саҡырған, һ.б.

Аҡылдың ара-тирә хис-тойғоларҙан өҫтөнлөк алып ҡуйыуын «Символдар» тигән шиғырҙа ла төҫмөрләргә мөмкин. Был шиғыр уҙған быуатта үҙенең «Кеше», «Кардиограмма», «Авиаэтюдтар», «Карусель» тигән китаптары менән шаулаған Литва халыҡ шағиры Эдуардас Межелайтисты хәтергә төшөрөп ҡуйҙы. Иғтибарҙы йәлеп итерлек фәлсәфәүи уйланыуҙар юҡ түгел бында. Шағир фекеренсә, беҙҙең бөтә тормошобоҙ символдарға оҡшаш. Ерҙә йәшәүҙе ул бөйөк символ тип атай. Тыуыу менән үлем дә, уныңса, – символ: кеше «үтә ике билге – тыуым менән үлем араһын».

Ниһайәт, фәлсәфәгә ҡоролған тағы бер шиғыр – «Тормош йыры». Тик был юлы «фәлсәфә» төшөнсәһе бер аҙ икенсерәк мәғәнәлә ҡулланыла. Ҡайһы бер ғалимдарҙың фекеренсә, үҙенең законҙарына, категорияларына таянып йәшәүсе философиянан тыш, ябай тормошто сағылдырған ғәҙәти философия ла танылыу алырға хаҡлы икән. Шунан сығып, Мәүлит Ямалетдиндың әле һүҙ барған шиғырын мин «Тормош фәлсәфәһе» тип атар инем. Сөнки унда, йәйәләр эсендә «Бер ҡатын ауыҙынан» тигән булып, кешенең ер йөҙөндә йәшәү асылы, билдәле бер ҡалыпҡа һалып, күҙ алдына килтереп баҫтырылған. Шиғыр дүрт строфанан тора. Уларҙың дүртеһе лә «Тормош көтөүҙәре еңел түгел» тигән юлдан башлана. («Тормош көтөүҙәре» урынына «Донъя көтөүҙәре»

тиелһә, дөрөҫөрәк булмаҫ ине микән?). Һәр строфаның үҙ мәғәнәһе, үҙ тәғәйенләнеше бар. Беренсеһенеке – «Еңел түгел йәшәп китеүҙәре»; икенсеһенеке – «Еңел түгел бала көтөүҙәре»: өсөнһөнеке – «Еңел түгел иргә түҙеүҙәре»; дүртенсеһенеке – «Еңел түгел ҡартлыҡ етеүҙәре». Яңғырашы менән дә шиғыр ҡолаҡҡа йәтешле.

Аҡылға таянып, фәлсәфәүи юҫыҡта уй-фекер йөрөтөүсән М. Ямалетдин өсөн заман ғәмеләят тема түгел. Өҫтәрәк һүҙ барған «Шаңдауҙар» поэмаһынан башҡа, был тема уның айырым шиғырҙарында ла сағылыш таба. Әгәр «Ауырыйым. Сирем бик яман…»да ул наркомандың хәлен ышандырырлыҡ деталдәр ярҙамында асып һалһа, «Алыпһатар, талпан булып…»та иһә сирҙең икенсе төрөн – бизнес тыуҙырған ауҙы фашлай:

Алыпһатар, мәскәй булып,
Һура елегебеҙҙе.
Ул, исмаһам, тауар һата,
Ә беҙ – бер-беребеҙҙе.

Мәүлиткә хас булғанса, шиғырға кинәйәле фекер төрөлгән, әлбиттә: уның асылы бизнесты фашлауға ғына ҡайтып ҡалмағанлығы күҙгә бәрелеп тора.

«Рекламалы донъя» менән «Ер һатыуға ҡарата» тигән шиғырҙар бер ниндәй ҙә кинәйәгә мохтажлыҡ кисермәйҙәр, сөнки унда бөтәһе лә ап-асыҡ һәм яп-яланғас. Телеканалдар аша бер үк нәмә тураһында сәғәтенә бишәр тапҡыр ҡабатланған рекламаларҙы автор яфа һәм яза тип атай. Һуңғы строфа айырыуса уҫал яңғырай:

Аҡса.
Нәфсе.
Рекламалы донъя –
Һыҙаттары яңы быуаттың.
Тормош, тормош!
Дөрөҫ юҫығыңды
Ҡайһы бөгөлдәрҙә юғалттың?!

«Ер һатыуға ҡарата» – публицистик пафос менән һуғарылған әҫәр. Был ҡырын эште автор ҡасандыр «ирек өсөн башын һалған батырҙарҙың рухын кәмһетеү», тип нарыҡлай һәм уны енәйәт ҡылыуға тиңләп, былай ти:

Ерен һатҡан бәндә – көнәлгәре
Үҙ ҡәберен һатҡан әҙәм ул.
Ундай мөртәттәргә был донъяла
«Кеше» тигән исем әрәм ул.

Һирәк-мирәк булһа ла, Мәүлит Ямалетдин мөхәббәт темаһына ла мөрәжәғәт иткеләй. Был мәңге иҫкермәҫ, һүнмәҫ-һүрелмәҫ темаға тотонғанда ла ул үҙе булып – әҙ һүҙле, бер аҙ ҡырыҫыраҡ, йыш ҡына көтөлмәгәнерәк боролош яһап ҡуйыусан шағир булып ҡала. «Табындым мөхәббәткә»нең лирик геройы, мәҫәлән, ҡиәмәт көнөндә үҙенә башҡа төрлө яза табыуҙарын үтенә, сөнки ул, мөхәббәт ялҡынында ғазапланып, алаһы язаһын ерҙә саҡта уҡ алып киткән.

«Мин көнләшеү ялҡынында янам…» менән «Яндыр, әйҙә, йөрәгемде» тигәндәре лә шул уҡ сериянан. Тәүгеһенең йәлеп итеү көсө – көслө тойғоно сөсөләнеп, борғанлап түгел, ә тәрән фекер төрөлгән тәғәйен һүҙҙәр ярҙамында асып һалыуҙа булһа, икенсеһенеке – әлеге шул көтөлмәгәнерәк боролошта: ике арала килеп тыуған һалҡынлыҡты лирик герой яңған йөрәге менән йылытмаҡсы.

«Алты егет, ете ҡыҙ», «Шандауҙар» шикелле, көләмәсерәк әҫәр. Унда шаянлыҡ та етерлек, сатираһы ла бар, юморы ла күҙгә бәрелеп тора. Был сараларҙың бөтәһе лә заманыбыҙға хас һәм шаҡтай киң таралған бер сирҙең симптомын асыҡлауға буйһондоролған:

Ауыл һайын кәлеп һала
Бер өйөр буйҙаҡ егет,
Донъя көтәһе урынға –
Эт менеп, бесәй егеп.

Берҙән-бер уй-хәсрәттәре –
Яртылыҡ аҡса табыу.
Ҡайҙа инде кәләш күҙләп,
Ҡыҙҙар артынан сабыу?!.

Башҡорт халыҡ йырынан алынған эпиграф та авторға ярҙам иткән. Уның әйтергә теләгәне, элек ете ҡыҙға алты егет тура килһә, «ә бөгөн һуң нисә егет тап килә ете ҡыҙға?» тигән һорауға ҡайтып ҡала. Быға яуапты тормоштоң үҙенән эҙләргә кәрәк.

Мәүлит Ямалетдин – үҙен төрлө жанрҙарҙа һынап, арымай-талмай эшләгән тынғыһыҙ ижадсы. Баштараҡ әйткәнемсә, байтаҡ китап авторы. Ул китаптарҙа ижадсының шиғырҙарын да, поэмаларын да, әкиәттәрен дә, повесть менән хикәйәләрен дә, риүәйәттәрен дә, дастандарын да, робағиҙарын да, тәржемәләрен дә, хатта йыр ноталарын да табырға мөмкин. Был мәҡәләлә һүҙ Мәүлиттең быуат башына ҡараған ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәре хаҡында ғына барҙы. Күреүебеҙсә, улар бай йөкмәткеле, тос фекерле, заманса яңғырашлы, уйланғанды – уйландырырлыҡ. Шағир әүҙем ижад тормошонда ҡайнап йәшәй. Беҙҙе артабан да үҙенең яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырып торор әле, тигән ышаныс белдерәһе генә ҡала.

2011, декабрь

ЙЫЛЫ ҺҮҘ – ЙӘН АҘЫҒЫ

(Марис Нәзиров шиғриәтенә бер ҡараш)

Уның әсәһе татар әҙәбиәтенә Нур Ғайсин менән Ғәлимйән Латипты бүләк иткән Базы буйҙарында тыуып үҫһә, атаһы – башҡорт әҙиптәре Ғиззетдин Иҫәнбирҙин менән Әкрәм Вәлигә ҡанат ҡуйған Сәрмәсән яландарында буй еткергән. Шуғалыр, бәлки, улдары Марис, әсәһе менән атаһы аралашҡан туғандаш ике телдә иркен һөйләшә һәм ижад итә: уның шиғырҙарын һәм шиғырҙары тупланған китаптарын башҡорт телендә лә, татар телендә лә берҙәй кинәнеп, улар араһындағы яҡынлыҡты, күп осраҡта хатта уртаҡлыҡты һәм ниндәйҙер эске бер гармонияны тойоп уҡыйһың. Шуғалыр, бәлки, мин йыш ҡына был шиғырҙарҙың һәм китаптарҙың авторын бер ҡанаты менән татар мөхитендә, икенсеһе менән башҡорт ерлегендә талпынған сәмреғош һымағыраҡ итеп күҙ алдына килтерәм. Эстетик яҡтан был сағыштырыу, бәлки, бик матур за яңғырамайҙыр, әммә йөкмәткеһе менән ул тап шулай.

Ҡәләмен мәктәп йылдарында уҡ тибрәтә башлаһа ла, ысын мәғәнәһендәге шағирлыҡ статусы Марис Нәзировҡа көттөрөбөрәк килде. Бының үҙ сәбәптәре бар, әлбиттә. Бөрө ҡалаһында юғары уҡыу йортон тамамлағас, башта ул, әрме сафына саҡырылып, Ватан алдындағы изге бурысын атҡарып ҡайтты. Унан һуң байтаҡ йылдар республикабыҙҙың көньяҡ райондарында өлкә гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләне. Журналислыҡ вазифаһының күпме көс һәм күпме ваҡыт талап иткәнлеген уны үҙ елкәһендә татып, үҙ башынан кисергән кеше генә белә. Әгәр мин көндәлек матбуғатты бер туҡтауһыҙ әйләнеп торған тирмән ташына тиңләһәм, һис тә арттырыу булмаҫ.

Халыҡ телендә «Ямандың да яҡшы яғы була», тигән әйтем бар. Ошо әйтем Марис Нәзиров яҙмышында үҙенең тура һәм тулы кәүҙәләнешен тапты, тиер инем. Шиғриәткә һанаулы ғына сәғәттәр-минуттар бүленһә лә, был осорҙа ул, Тыуған илебеҙҙең көс-ҡеүәтен нығытҡан баҫыу батырҙары, хеҙмәт алдынғылары менән бергә ҡайнап йәшәне һәм улар араһында оло мәктәп – кешене һәр яҡлап сыныҡтыра торған тормош мәктәбе үтте. Төп вазифаһына тоғролоҡ һаҡлап, көнүҙәк мәсьәләләрҙе яҡтыртҡан информацион хәбәрҙәр, айырым

шәхестәргә бағышланған һүрәтләмәләр, ваҡыт тиҙлеге менән ярышыусы репортаждар, сәйәсәт һәм иҡтисад өлкәһендә үҙенә башҡа әҙерлекте талап иткән аналитик мәҡәләләр яҙыу менән бергә, әкренләп булһа ла, шиғырҙар ҙа тыуа торҙо, һуңыраҡ иһә китаптар ҙа күренгеләй башланы. Өҙөп кенә әйткәндә, егерменсе быуатты ослағанда, ул инде әҙәбиәт майҙанында ныҡлы һәм ышаныслы баҫып торған шағир булып танылды.

Шағирлыҡ титулы көттөрөбөрәк килһә лә, Марис Нәзировтың шиғырҙарына һәм шиғырҙары тупланған китаптарына нәфис әҙәбиәт һөйөүсе ябай уҡыусы тарафынан да (бында, бәлки, байтаҡ шиғырҙарҙың йырға әйләнеп китеүе лә сәбәпселер), шулай уҡ өлкән быуын ҡәләмдәштәре яғынан да битарафлыҡ күрһәтелмәне. Әлеге осраҡта мин үҙенә һәм үҙенән йәштәргә ифрат талапсан булған Рафаэль Сафин менән Башҡорт дәүләт университеты профессоры, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Суфиян Поварисов биргән баһаламаларҙы күҙ уңында тотам. Татар телендә сыҡҡан «Йондоҙҙар табын ҡора» (Өфө, 1992) тигән китапҡа профессор Рәиф Әмиров яҙған «Устарыма ҡуҙҙар аламын да», шул уҡ телдә донъя күргән «Елдар ҡары» (Өфө, 2002) исемле китапҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов яҙған «Енел юлға сығманы» тигән баш һүҙҙәр ҙә Марис Нәзировтың иғтибарҙан ситтә ҡалмауын раҫларҙай факттар.

Поэзиябыҙҙың бөгөнгө хәле менән яҡындан һәм даими рәүештә ҡыҙыҡһынып тороусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был мәҡәләлә Марис Нәзировтың бөтә ижадын байҡау күҙ уңында тотолмай, әлбиттә. Һүҙ бары тик уның яңы быуатҡа сыҡҡас «Ағизел» биттәрендә баҫылған шиғри шәлкемдәре хаҡында ғына. Шиғырҙарҙың һаны күп – туҡһандан ашыу, сөнки был шәлкемдәргә авторҙың өр-яңылар иҫәбендәгеләре генә түгел, ара-тирә өҫтә аталған йыйынтыҡтарҙан алынғандары ла инеп киткеләгән.

«Инеп киткеләгән» тигән һүҙбәйләнешенең төбөндә еңелсә генә юмор ятҡан һымаҡ тойолһа ла, ул Марис Нәзировҡа ниндәйҙер дәғүә белдереү түгел. Әгәр автор үҙенә нығыраҡ оҡшаған ҡайһы бер шиғырҙарын башҡорт телендә уҡырға яратыусыларға тәҡдим иткән икән, бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡтыр, тип уйлайым. Ә бына бер үк шиғырҙы (мәҫәлән, «Йорт ҡаҙҙары», «Күнегелә»,«Был донъяла барҙар әле, һаман барҙар…», «Гонаһтарың самаһыҙҙыр, әҙәми зат…», «Ауыл урамынан узғанда ла…») бер үк баҫмаға (әлеге

осраҡта – «Ағиҙел»гә) икешәр тапҡыр тәҡдим итеү – дәғүә тыуҙыра. Күрмәмешкә һабышып, был турала, бәлки, һүҙ ҙә ҡуйыртып тормаҫ инем, әгәр ул ғәҙәт беҙҙең бүтән шағирҙарыбыҙға ла хас булмаһа. Был ғәҙәттең сәбәбе (донъяла сәбәпһеҙ бер ни ҙә ҡылынмағанлығы бөтәбеҙгә лә билдәле!) нимәләлер, аныҡ ҡына аңлата алмайым. Тик шуны әйтке килә: әйҙәгеҙ бер үк ҡәләм аҫтынан сыҡҡан бер үк әйберҙе (прозамы ул, поэзиямы, тәнҡит мәҡәләһеме) ҡат-ҡат баҫтырып, уҡыусының башын ҡаңғыртмайыҡ. Үҙебеҙгә талапсанираҡ булһаҡ, шиғриәткә лә, сәсмә әҫәрҙәргә лә һөйөү артабан да артыр, әҙәби хужалығыбыҙ ҙа йыйнағыраҡ булыр.

Марис Нәзировтың өҫтә йәйәләр эсендә һанап кителгән шиғырҙарына килгәндә иһә, улар һис кенә лә ҡат-ҡат баҫтырыуға мохтаж түгелдәр – тәү тапҡыр уҡығанда уҡ күңелгә инеп яталар. «Йорт ҡаҙҙары» («Ағиҙел», 2002, 10-сы һан; 2004, 3-се һан) тигән шиғыр, мәҫәлән, икенсе тапҡыр баҫылғанда бер аҙ үҙгәртелгән үҙгәртелеүен, ләкин үҙенең йәлеп итеү көсөн юғалтмаған:

Ҡаҙҙар, ҡаҙҙар,
Мин аңлайым һеҙҙе
Һәм ҡушылам һеҙҙең зарға:
Осмайса һин түҙеп ҡара
Иңдәреңдә ҡанат барҙа!
... Йәшәп ҡара!

Әгәр «Йорт ҡаҙҙары»нда образлы сағыштырыу аша әҙәм балаһының тыумыштан килгән тәбиғи мөмкинлектәре күҙалланһа, «Күнегелә»лә («Ағиҙел», 2004, 3-се һан; 2009, 7-се һан) ошо мөмкинлектәрҙең ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һанға һуғылмауы һәм йыш ҡына уларҙың тормошҡа ашырылмай ҡалыуы, ҡыуанып, ҡанатланып йәшәйһе урынға, шәфҡәтһеҙлек, ғәйбәт һатыу, үҙ балаңдан баш тартыу һәм шуның кеүек башҡа тиҫкәре күренештәрҙең сәскә атыуы тәнҡит уты аҫтына алына. Ләкин «тәнҡит утын» бында публицистика шауҡымы тип ҡабул итергә ярамай. Айырыуса беҙҙең заманда киң таралып киткән был кире һәм ят күренештәрҙе шағир һис кенә лә публицистик лирикаға хас ярһыулыҡ, айырым бер пафос менән түгел, ә тыныс ҡына, шау-шыу күтәрмәйсә генә асып һалған: «Ҡорой шәфҡәтлек ағасы»; «Ишелә шәфҡәтлек тауы»; «Һүнә шәфҡәтлектең уты» һ.б. Шиғырҙың һуңғы юлдары зәһәр көслө яңғырай:

Аһ, һаман күнегелә
Вайымһызлыҡ һаҙына
Күңелдәр күмелеүгә.

«Был донъяла барҙар әле, һаман барҙар…» ҙа («Ағиҙел», 2006, 4-се һан; 2009, 7-се һан) дөйөм йүнәлеше буйынса «Күнегелә»нән алыҫ тормай. Күләме яғынан әллә ни ҙур булмаған был шиғырҙа тормоштағы кире күренештәр (ҡомһоҙлоҡ, тар эслелек, кенә тотоу, ҡомағайлыҡ, байлыҡ артынан ҡыуып, дошманға һатылыу) фашланған. Публицистик жанрға дәғүә итмәһә лә, шиғыр шаҡтай уҫал яңғырай:

Арабыҙҙа төрлө заттар әле барҙар…
Бил быуылған. Кем-кемлеген бәйге барлар!

Ә бына «Гонаһтарың самаһыҙзыр, әҙәми зат…»та («Ағиҙел», 2008, 9-сы һан; 2010, 7-се һан) публицистика шауҡымы юҡ түгел. Төрлөшәр юллы строфаларҙан торған был шиғыр йөкмәткеһе менән көслө, формаһы менән теүәл. Ул:

Гонаһтарың самаһыҙзыр, әҙәми зат,
Шул тиклем дә шашмаҫ инә был тәбиғәт, –

тигән юлдар менән башлана ла, артабан иһә тәбиғәт донъяһында ла, йәмғиәт тормошонда ла атлаған һайын ҡабатланып торған бәлә-ҡазалар, вайымһыҙлыҡтар һүрәтләнә. Шиғыр түбәндәге оран менән тамамлана:

Ҡазаларҙан яҡлар, тиһәң, был тәбиғәт,
Гонаһтарҙан арын, паклан, әҙәми зат.
Күҙ йәштәрен киптер, сафлан, әҙәми зат,
Выждан ғазабынан һаҡлан, әҙәми зат!

Ниһайәт, ҡабаттан баҫылған шиғырҙарҙың һуңғыһы – «Ауыл урамынан уҙғанда ла…» («Ағиҙел», 2010, 7-се һан; 2012, 1-се һан). Исеменән үк күренеп тороуынса, был шиғырҙа ауыл тормошонан тотоп алынған һәм ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған хәл-ваҡиғалар тасуирланған. Шиғыр сатира һәм юмор сатҡыларынан да мәхрүм түгел. Дөрөҫ һүҙгә – яуап юҡ, тигәндәй, бөтә был һүрәтләмә менән килешеүҙән башҡа

бер ни ҙә ҡалмай. Әҫәрҙең күсмә мәғәнәһе лә бар. Ул һуңғы строфала ярайһы уҡ асыҡ сағылған:

Ғүмер ишек бикләмәгән ауыл
Йорт аралаш хәҙер эт тота.
Этте тыйып була.
Иман юйған
Эт бәндәләр нығыраҡ ҡурҡыта.

Түңәрәк юбилейҙарының береһен билдәләгәндә, М. Нәзиров «Алтмышынсы көҙөм» тигән шиғырын яҙғайны. Яңғырашы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә («Гәрәбәләй эре бөртөктәрҙе» иҫкә алмағанда) шиғыр ифрат матур – орошорлоҡ бер генә сәбәп тә тапмаҫһың. Бында уны тулы килеш күсергәндә лә яҙыҡ булмаҫ ине, ләкин һуңғы строфаһы менән генә сикләнәм:

Алтмышынсы көҙөм.
Алтын көҙөм.
Ғүмер баҫыуының
Ашлыктарын йыйып һуғыр саҡ.
Һынауҙарҙа түҙеп,
Эштә йөҙөп
Кискән йылдарымдың
Һөҙөмтәһен барлап ҡуйыр саҡ.

Иғтибарҙы был шиғырға йүнәлтеүем юҡтан түгел. Шиғырҙы ашыҡмайса ғына, бер аҙ хистәргә бирелеп уҡып ултырғанда, күңелем түрендә көтөлмәгәнерәк һорауҙар ҡыбырлап ҡуйҙы. Кем ул бөгөн Марис Нәзиров? Һуңғы йылдарҙа «Ағиҙел» биттәрендә баҫылған шиғырҙары уның ижади портретына ниндәйерәк яңы һыҙаттар өҫтәй икән? Иллеһе менән алтмышы араһында шағирҙы ниндәй темалар үҙенә нығыраҡ һәм йышыраҡ тартҡан? Ниндәй поэтик алымдар, тел-стиль саралары хас уның бөгөнгө шиғриәтенә? Көн үҙәгендә торған ҡатмарлы мәсьәләләргә ниндәйерәк ҡарашта йәшәй? һ.б., һ.б.

Марис Нәзиров ғүмеренең күберәк өлөшөн ауыл ерендә үткәрҙе микән (райондашым булһа ла, өҙөп кенә әйтә алмайым), әллә балалыҡ һәм үҫмер йылдарында алған тәьҫораттар бик көслө булып, үтә тәрән эҙ ҡалдырғанмы шағирҙың хәтер төпкөлөндә, нисек булһа ла булғандыр,

әммә ауыл мөхите, ауыл күренештәре, ауыл тәбиғәте – уның яратҡан һәм күнегелгән стихияһы, тиер инем. Өҫтә тикшерелгән шиғырҙар ҙа, шағирҙың бик күп башҡа әҫәрҙәре лә шулай уйларға мәжбүр итә.

Былай фекер йөрөтөүемде, уҙған быуаттың егерменсе-утыҙынсы йылдарындағы шикелле, поэзияны ике төргә – ҡалаларҙа завод-фабриктарҙың шау-гөр килеүен, ауылдарҙа иһә ағас һуҡаның тимер һабанға юл ҡуйыуын данлап йырлаған поэзияға – бүлеп ҡарарға маташыу (заманында ул, бәлки, шулай кәрәк тә булғандыр) һымаҡ аңларға ярамай, әлбиттә. Һүҙ шағирҙың күреп тойомлау даирәһе, ниндәй темаға өҫтөнлөк биреүе хаҡында бара.

Билдәле булыуынса, бөгөн дә, элек тә шағирҙарыбыҙҙың күпселеге ауылда тыуып, ауылда үҫкәндәр, ауыл мәктәбендә белем алғандар. Ләкин ауыл мөхитен ысын мәғәнәһендә үҙ итеү һәм уны шиғырҙарыңда йәнле итеп сағылдырыу өсөн был ғына етмәй торғандыр әле. Быныҡ өсөн ауылдың бөтә булмышын (күңелле һәм күңелһеҙ, яҡты һәм бигүк яҡты булмаған яҡтары менән бергә) ҡан тамырҙарыңа һеңдереп, уның һауаһын да, һыуын да үҙеңсә һулап, үҙеңсә уртлау зарурҙыр. Марис Нәзиров, миненсә, ошо сифаттарға эйә: үҙенең шиғырҙарында ул ғүмергә ауыл кешеһе булып ҡала, донъя хәлдәренә лә ауыл кешеһе күҙлегенән сығып ҡараш ташлай. Әйткәндәрем ҡоро һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, ҡайһы бер миҫалдар ҙа килтереп китергә мөмкин.

Ҡарап тороуға, мәҫәлән, «Иген һуғыр ваҡыт» тигән шиғыр («Ағизел», 2002, 10-сы һан) атамаһы менән дә, ҡулланылған һүрәтләү саралары менән дә артыҡ билдәлелеккә дәғүә итмәгәндәй. Ләкин уның ер хужаһы һымағыраҡ күҙ алдына килеп баҫҡан лирик геройы төшөп ҡалғандарҙан түгел: «Иген һуғыр ваҡыт тағы етте» тип ҡыуана ул. Шиғырҙың өс строфаһы ла ошо һөйләм менән асыла. Икмәк еҫенә лә, «илем туйһын, тиеп аяғүрә» ауған арыштарға ла, бойҙай бөртөктәренә лә битараф түгел лирик герой. Әҫәрҙең иң һуңғы юлында, ер хужаһылай тойолған лирик геройҙың шағир үҙе икәнлеге асыҡлана, сөнки уның да ишеген көҙ ҡаға икән: «Һабан – ҡәләм, ҡырҙар – аҡ ҡағыҙ…» тигән үҙенсәлекле генә сағыштырыу менән тамамлап ҡуя ул шиғырын.

Йәиһә «Силәгендә таң» тигән шиғырға («Ағизел», 2009, 7-се һан) күҙ һалайыҡ. Дүртәр юллы ике генә строфанан торған был шиғырҙа ауыл иртәһе ифрат матур итеп тасуирланған. Таңдан тороп, һыйыр һауырға сыҡҡан һеңлеһенә һоҡланыуын автор бындай юлдар аша белдергән:

Ҡай арала, минән уҙып,
Йоҡоһонан уянған –
Ап-аҡ һөт тамсыһы булып
Силәгендә сыңлай таң.

«Тыуған ауыл тупһаһында– йыһандың мин уртаһында» тигән метафора – үҙе бер табыш. Ауылды бик ныҡ яратып, хыял донъяһында йөҙөргә һәләтле булһаң ғына үҙеңде йыһандың уртаһында итеп тойорға мөмкиндер ул.

Яңылар иҫәбендәге «Ауылым кисе», «Саҡырғас та ҡайттым, тыуған яғым», «Бала саҡтан беләм…» тигән шиғырҙар ҙа Маристың йәне-тәне менән ауыл мөхитенән, ауылдың ер-һыуынан айырылғыһыҙ икәнлеген иҫбатлап тороро̆ай миҫалдар. Һәр юлы тиерлек метафорик сағыштырыуҙарға ҡоролған «Ауылым кисе», мәҫәлән,күптәрҙең күңел түренә инеп ятҡандыр, тип уйлайым. Был шиғыр аша киске ауыл күренешенән алынған бай тәьсоратты ярлыландырмаҫ өсөн, айырым юлдар йәки строфалар килтереп тороуға ҡарағанда, уны үҙеңә тулы килеш бер тынала уҡып сығыу хәйерлерәк булыр, моғайын. Ә бына «Саҡырғас та ҡайттым, тыуған яғым»дан бер строфаны күсерһәк, зыян итмәҫ:

Саҡырғанға ҡайттым, тыуған яғым,
Кәрәк булғаныма һөйөнөп.
Ир ҡорона кергәс,
Кендек ҡаның тамған ерҙә
Йәшәү – бәхет, һөйөп-һөйөлөп.

«Бала саҡтан беләм…»дә иһә шағир тағы ла шул кендек ҡаны тамған ерен иҫләп, хәтеренә төшөрә икән, ул да яҙыҡ түгел:

Бала саҡтан беләм:
Һыйлы көнөң – һыйыр менән,
Ауыл таңы матур һөт менән!

Ауылға бәйле бала саҡ тураһында һүҙ сыҡҡас, юл ыңғайында «Ҡар өҫтөндә март нурҙары уйнай…» тигән шиғырға («Ағизел», 2008, 9-сы һан) туҡталып китеү ҙә артыҡ булмаҫ. Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән «Ҡыйыҡтарҙа боҙҙар хас шәкәрҙәй» тигән образ-сағыштырыуҙан автор бынамын тигән шиғыр үргән. Яңғырашы менән матур, бер ниндәй ҙә

ҡылансыҡланыу һиҙелмәй унда. Яҙмыш лирик геройҙы «әллә нисә ҡабат йомшаҡтарҙан алып ҡатыға» һалһа ла, балалыҡ йылдарындағы теге шәкәр кисәге күңелендә мәңгелеккә уйылып ҡалған:

Шәрбәт-шәкәрен дә йәлләмәне,
Һынауҙарҙы еңгәс, Хоҙайым.
... Атам устарынан алғанынан
Тәмлерәге булмаҫ, моғайын.

Тойомлауымса, «Ҡар өҫтөндә март нурҙары уйнай…»ҙы ла, «Саҡырғас та ҡайттым, тыуған яғым» менән «Бала саҡтан беләм…»де лә ижад иткәндә автобиографик характерҙағы факттар файҙаланылған булырға тейеш. Шундай уҡ уй Марис Нәзировтың «Күңелемде бер һүҙ – бер ҡуҙ шомландыра…», «Эй сабый саҡ…», «Әсәй хаттар яҙа», «Килгән инең ер өҫтөнә…», «Йәй уртаһы» тигән шиғырҙарын уҡығанда ла башҡа килә. Тамырҙары, тыуған алыштары менән улар бөтәһе лә шағирҙың тыуған төйәгенә, ауыл мөхитенә барып тоташа.

Ғүмер баҡый тыуған тупраҡынан көс һәм ҡеүәт, һут һәм дәрт алып йәшәгән,хәҙер инде «ил ҡорона кергән» шағирға, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө ауылдың ҡырын яҡтарына ла шаһит булырға тура килә. Шиғырҙарынан күренеүенсә, был ҡырын яҡтарға ул һис кенә лә битараф түгел. Өҫтәрәк шундай шиғырҙарҙың береһе хаҡында («Ауыл урамынан уҙғанда ла…») һүҙ булғайны инде. Уға «Күҙ йәштәреме ни…», «Их, ауылым бөтә микән инде…», «Аҙбарында һыйыры ас…»,«Ҡар өҫтөндә миләш күҙ йәштәре», «Ауырый ауыл…» тигәндәрен өҫтәргә мөмкин. Ни тураһында һүҙ барғанлығын күбеһенең исеме үк әйтеп тора. Яңғыраштары, эшләнештәре йәһәтенән улар төрлө кимәлдә. «Күҙ йәштәреме ни…» тигәнен, мәҫәлән, тетрәткес шиғыр, тиер инем. Тарҡалып, юҡҡа сыҡҡан ауылдан тороп ҡалған зыяраттың да таралып, ата-бабаларыбыҙ ҡәберлегенең ер менән тигеҙләнеп бөтөүе уҡыусыла ифрат ауыр тәьҫир ҡалдырырлыҡ итеп һүрәтләнгән унда.

Ә бына «Ҡар өҫтөндә миләш күҙ йәштәре» тигән шиғыр бәхәс уятмай ҡалмаҫтыр, сөнки ул, башынан алып ахырына тиклем, һорау артынан һорау тыуҙыра. Шиғырға атама биргән метафора ла бик уңышлыларҙан түгел шикелле: нисек инде миләш тәлгәштәренән һытылып сыҡҡан ҡыҙыл тапты ат ҡанына тиңләргә мөмкин? «Ел осора боҙло ҡыл йомғағын // Шул урынды йотҡан сүплектән» тигән һөйләмде

нисегерәк аңларға? Авторҙың был шиғырҙа әйтергә теләгәне – йәнәһе, беҙҙең заманда аттар ҙа кәмей бара:

Хәйерселек сиктәренә ҡабат
Етеп бара ниндәй бай ауыл.
Ҡалмағанда кеше кәҙерҙәре
Ҡәҙерләүҙәр атты ҡайҙа ул?!

Тағы һорау: ауылда аттар кәмеүендә «миләш күҙ йәштәре»нең ниндәй ғәйебе бар? Был шиғыр бер-береһенә бигүк берегеп бөтмәгән ике теманы үҙ эсенә алмай микән? Авторҙың, Н. Нәжмигә эйәреберәк булһа кәрәк, атҡа гимн йырларға тырышыуы күренеп тора. Ләкин уны Нәжми кимәлендә йырларға кәрәк ине.

Һиҙеп торам, былай ҡаты бәрелеү авторға оҡшап бөтмәҫ, әлбиттә. Ләкин бәрелмәй ҙә булмай шул. Сөнки «Ҡар өҫтөндә миләш күҙ йәштәре»ндәге ҡайһы бер аңлашылмаусанлыҡтар Маристың башҡа әҫәрҙәрендә лә осраштырғалап куя, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. «Тормош» тип аталған шиғыр («Ағизел», 2004, 3-се һан), мәҫәлән, иселе менән фәлсәфәүи уйланыуҙарға дәғүә итһә лә, ессеме менән башватҡыс һымағыраҡ килеп сыҡҡан. «Һыу күҙенә тулҡын ишкән ташлы // Ҡом ғыналай түгелдер һин, тормош…» тигән һөйләмде, әйтәйек, нисегерәк аңларға икән? Шулай шул, тормоштоң һәр саҡ ҡатмарлы булыуын образлы итеп һүрәтләргә тырышҡан хәлдә лә, сағыштырыуҙар, метафоралар менән һағыраҡ эш итергә, заманы онотоп ташламаҫҡа кәрәктер. Юғиһә, шиғырың артыҡ хикмәтле булып китеүе бар.

«Тормош – сәфәр…Яҙмыш хәтәр…» менән «Електәргә тиклем үтә зәһәр һыуыҡ…» тигән шиғырҙар ҙа («Ағизел», 2008, 9-сы һан) фәлсәфәүи пландағы уйланыуҙарға ҡоролғандар. Әммә уларға һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә. Сөнки бында бөтәһе лә үҙ урынында, бөтәһе лә ап-асыҡ һәм аңлайышлы. Шиғырҙарҙың икеһендә лә кешенең ерҙә йәшәү рәүеше һәм мәғәнәһе ябай ғына, ләкин һиҫкәндереп ебәрерлек итеп таусирланған. Уларҙың тәүгеһен бында тулы килеш күсермәй булдыра алманым:

Тормош – сәфәр… Яҙмыш хәтәр.
Беҙ юлдабыҙ,
Тұмгәктәргә абынабыҙ,
Йығылабыҙ.
Торабыҙ ҙа танһыҡ наҙға

Һыйынабыҙ.
Беҙ юлдабыҙ… Тын ҡыҫылыр
Үрҙәре бар.
Талсыҡҡанда көс тупларға
Түрҙәре бар.
Мәңгелектә туҡталырға
Гүрҙәре бар.

«Електәргә тиклем үтә зәһәр һыуыҡ…»тағы шикелле, «Яңғыҙ ҡайын, яңғыҙ ҡайын…», «Ҡояш – гүйә яралы ҡош…», «Тағы урман япраҡ ҡойған…», «Миҙгелдәр», «Умырзая», «Ләйсән һиптем ергә…», «Көҙҙән һуң», «Тағы ҡышты имен сығтыҡ…», тигән шиғырҙарҙа ла тәбиғәт күренештәре аша кешенең күңел торошо, хәл-әхүәле асып һалынған. Был шиғырҙарҙа авторҙың үҙ алдына ҡуйған маҡсаты төрлөсәрәк кимәлдә хәл ителһәлә, дөйөм алғанда уларға һүҙ тейҙерерлек түгел. Ошо төркөмгә яҡын торған «Йән өшөткөс таң был. Ҡар өҫтөнән…» һәм «Тәбиғәт тә ҡайсаҡ хаталана…» тигәндәренә туҡталып та китергә мөмкин.

«Йән өшөткөс таң был. Ҡар өҫтөнән…» тигән шиғырҙы уҡығанда, мәҫәлән,үҙенде ҡыштың үтә һалҡын бер иртәһендә шомло шығырлаған ҡар өҫтөндә баҫып торған шикелле хис итәһең. Күҙгә-биткә зәһәр һалҡынын өргән зәңгәр таңды тасуирлау өсөн автор килешле генә буяуҙарын да тапҡан. Ул буяуҙарҙан да һалҡын бөркөп торғандай. Ләкин лирик геройҙың күңелен, ҡышҡы һалҡынға ҡарағанда, «йән һалҡыны – беҙ үҙебеҙ ҡылған зәһәрлек» нығыраҡ өшөтә.

«Тәбиғәт тә ҡай саҡ хаталана…»ның да үҙәгендә лирик герой образы тора. Үҙе тураһында һөйләгәндә, ул кәмселектәрен дә йәшермәй төҫлө, хаталарын да таный шикелле, шул уҡ ваҡытта аҡланырға ла тырыша. «Йән өшөткөс таң был. Ҡар өҫтөнән…» менән сағыштырғанда, бында тәбиғәт күренештәре артыҡ ҙур урын биләмәгән. Әммә булған хәтлеһе лә лирик геройҙың ҡаршылыҡлы хистәр менән тулы эске донъяһын ярайһы уҡ ышандырырлыҡ итеп асып һалырға булышлыҡ иткән. Дүртәр юллы ете строфанан торған был шиғырҙың композицияһы художестволы ҡаймалау тип йөрөтөлгән алымды хәтерләтә, сөнки тәүге һәм һуңғы строфалар мәғәнәләре яғынан бер-береһенә бик яҡын торалар:

Тәбиғәт тә ҡай саҡ хаталана,
Ни әйтәһең әҙәм хаҡында?

Үлән күшектереп, ҡарҙар яуҙы
Көтмәгәндә, йәй уртаһында.

. . . . . .

Көтмәгәндә йәйҙең уртаһында
Яуған ҡар аҡлығы башымда.
Тәбиғәт тә ҡай саҡ хаталана…
Ни әйтәһең әҙәм хаҡында?

«Ҡар аҡлығы башымда» тигән һүҙбәйләнеш Марис Нәзировтың «Ғүмер буйы һине эҙләгәнмен», «Мамыҡ бураны», «Тәҙрәләрҙән йәй көлһә лә…» исемле шиғырҙарын иҫкә төшөрөп ҡуя. Уларҙың да лирик геройҙары шундайыраҡ һағыштары менән уртаҡлаша бит. «Ғүмер буйы һине эҙләгәнмен»дә ул, һөйгән йәренә мөрәжәғәт итеп, «Ҡырау ҡунған сәскә – ситһенмә» тип ялбарһа,«Мамыҡ бураны»нда «…Барлайым сәсем ҡараһын, // Минең дә йәй еткән икән» тип уфтанып ала. «Тәҙрәләрҙән йәй көлһә лә …» тигәндә иһә «Ҡышыма ла күп түгелдер, // Ҡарын сәстәргә һипкән» тип ҡанырға мәжбүр. Бер үк шағирҙың ижад практикаһында бер-береһенә оҡшаш һүрәтләү сараларының былай ҡабатланыуы бер аҙ риҙаһыҙлыҡ тыуҙыра-тыуҙырыуын, әммә шуныһы ҡыуаныслы: сәсенә ҡырау ҡунған лирик геройҙың күңеле көр, дәрте ташып тора. «Тәрән йылға тып-тын аға…» тигән шиғырҙа ул:

Таша йылға, шаша йылға,
Киң йәйеп ҡоластарын.
Минең дә бит әле шулай
Ярҙан ашҡан саҡтарым, –

тип ебәрә хатта.«Көҙҙән һуң», «Тағы ҡышты имен сығтыҡ…», «Яман күҙҙән һаҡла, Хоҙай!», «Тимәк…», «Йәшәйбеҙ әле», «Яратығыҙ мине…», «Алдарымда–офоҡтарҙың алы…» тигән шиғырҙар ҙа ошо мотив менән һуғарылған. Өр-яңыларҙан иҫәпләнгән «Алдарымда – офоҡтарҙың алы…» тигәне айырыуса күңелгә йәтешле. «Үрләгәндә ғүмер түбәһенә» тигән метафора ла уңышлы күренә. Тәүге строфаның тәүге юлына һалынған идея һуңғы строфала үҙенең тулы кәүҙәләнешен таба:

Иртә миңә юлым туҡтатырға,
Арыманым әле, күп хәлем.

Алдарымда – офоктарҙың алы,
Артҡы яҡта – үрле үткәнем.

М. Нәзировтың яңы быуатҡа сыҡҡас «Ағиҙел» биттәрендә баҫылған шиғырҙары араһында, һирәкләп булһа ла, саф пейзаж лирикаһына тартҡандары ла осраштыра. Шундайҙарҙың береһе – «Ҡойола сәтләүектәр» («Ағиҙел», 2002, 10-сы һан). Күнегелгән, традицион ысул менән яҙылған был шиғыр уҡыусыла йылы хистәр уятмай ҡалмаҫ, тип уйлайым. Шиғырҙың тәүге юлдарында уҡ автор үҙ алдына «Йәйҙәр менән көҙ араһын // Айыра ниндәй сиктәр?» тигән һорау ҡуя ла, шунда уҡ уға тиҙ генә яуабын да ҡайтара: «Имәндәрҙән япраҡ түгел, // Ҡойола сәтләүектәр».

Әгәр бындай ҡәтғи яуап менән ҡәнәғәтләнһәң, шиғырҙы дауам итеүҙең артыҡ кәрәге ҡалмай һымаҡ. Һәм ул бер генә строфанан тороpға тейеш булып сыға. Шуға күрә автор һорауҙың да, яуаптың да сығанаҡтарын һәм сәбәптәрен юлларға керешә һәм артабанғы строфаларҙа йәйге тәбиғәттә өҙлөкһөҙ дауам иткән хәрәкәтте, йыл көҙгә ауыша башлағас иһә тирә-йүндә барған үҙгәрештәрҙе биология уҡытыусыларына ғына хас күҙәтеүсәнлек менән иҫ китмәле матур итеп тасуирлап бирә. Иң һуңғы строфала йәшлек менән ҡартлыҡ араларын ниндәй сиктәр билдәләгәнен дә асыҡлап ҡуя. Шиғырҙың йәлеп итеү көсөнә һоҡланыуым буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, унан ике генә строфа (ә шиғыр туғыҙ строфанан тора) килтерәм:

Ҡарағай ҙа һаман йәшел,
Йәм-йәшел шыршылар ҙа.
Йыйынмайҙар микән әллә
Ҡыштарҙы ҡаршыларға?

Йәй илендә көҙ күҙләргә
Теләһәң – килеп ҡара:
Бешкән миләш тәлгәштәре
Ҡуйынға кереп бара.

«Тирәктәр мамыҡ осора» («Ағиҙел», 2004, 3-се һан) менән «Һүрәт күрәм («Ағиҙел», 2009, 7-се һан) дә «Ҡойола сәтләүектәр»ҙән ҡайтыш түгелдәр. Күләмдәре буйынса улар икеһе лә ыҡсымдар – дүртәр юллы дүртәр генә строфанан торалар.Әммә шул бәләкәй генә шиғырҙарҙа ла

автор тәбиғәттең төрлө миҙгелдәренә хас айырым күренештәрҙе йәнле итеп кәүҙәләндереүгә ирешкән. «Тирәктәр мамыҡ осора»лағы:

Мамығын ҡоя тирәктәр,
Тып-тын ғына бурай буран,
Буй-буй йөн еп һуҙылған да –
Селтәрле шәл төҫлө урам.

Уралған кеүек ҡаҙ йөнө
Муйыл, миләш, йүкәләргә –
Сәскә атҡан, гүйә, ҡабат
Улар күҙҙе иркәләргә,

һәм «Һүрәт күрәм»дәге:

Асыҡ тәҙрәләрҙән күк итәген
Ел күтәреп керә өйөмә.
Яҙ көлгәндә аҡ-аҡ сәскәләрҙең
Кар тишкәнен күреп һөйөнәм, –

тигән юлдарҙы пейзаж лирикаһының матур өлгөләре, тиер инем. «Һүрәт күрәм»дәге «Ҡыш килһә лә, иркәм күнеленә // Ләйсән ямғыр булып һибеләм» тигән юлдар иһә – пейзаждың мөхәббәт тойғоһон һүрәтләгәндә уңышлы ғына ҡулланылған үрнәге, тимәксемен.

Әйткәндәй, мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙар йыш ҡына осрай М. Нәзировтың быуат башындағы ижадында. Уларҙың ҡайһы берҙәрен һанап та китергә мөмкин: «Хуш, мөхәббәт», «Йырым табыр», «Онотормон, тимә…», «Һағындым», «Китмә, һөйөү», «Яҙҙарыңда ҡалдыр мине», «Ситлектәге ҡоштай бәргеләнде…» һ.б. Шағирҙың иллеһе менән алтмышы араһында донъяға килгән был әҫәрҙәр, ғәҙәттә, йәшерәк саҡта өҫтөнлөк итеүсән еңел-елпе мауығыуҙарға, барлы-юҡлы хистәргә түгел, ә ваҡыт һынауын үткән һәм шунлыҡтан төпкөлдәрәк яткан уй-фекерҙәргә һәм хис-тойғоларға нигеҙләнгән, әлбиттә «Хуш, мөхәббәт»тең лирик геройы, мәҫәлән, бер-береңдән юҡ-бар ғәйеп эҙләп йәшәүҙең ахыр сиктә наҙҙар ишегенең ябылыуына килтереүе хаҡында бәйән итә лә, «Был һалҡында һин өшөйһөң микән?» тип өндәшә йәренә һәм шунда уҡ үҙенең хәле менән дә уртаҡлаша: «Ә мин инде күптән өшөнөм». «Йырым табыр»ҙың да лирик геройы мөхәббәт утында янып

көйгән һәм һағышлы хистәр, моңһоу уйҙар кисереп йәшәгән шәхескә оҡшап тора, сөнки ул миләш тәлгәштәренең ҡыҙғылтын да, һыуһылын да, туңғанын да өҙөп ҡарай, ләкин «татлы миләш кеүек мәлдәр» һаман килмәй ҙә килмәй. Шуға күрә йәренә юлды йыры табырына өмөтләнеп көн итә.

Ә бына «Онотормон, тимә…» менән «Һағындым» йөкмәткеләре һәм яңғыраштары буйынса башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра: уларҙың лирик геройҙары, моңһоу, һағышлы хистәр тулҡынында йөҙөүгә ҡарағанда, мөхәббәт теҙгенен үҙ ҡулдарында тотоуҙы өҫтөн күрәләр һәм маҡсаттарына ирешеү өсөн бөтә булмыштарын сарыф итергә әҙер тораларҙ. «Һағындым»да лирик геройҙың монологы һымағыраҡ яңғыраған бынауы юлдар:

Яҙҙар уҙған кеүек ине инде,
Күҙы тузған кеүек ине инде, –
Дөрләп уттта янған сағымдың .
Көтмәгәндә кескәй генә сәтҡы
Күңелемә осоп инеп ятты,
Мин яңынан бер ҡасан да
Кабынмаған һымаҡ кабындым, –

татар классигы Һади Таҡташтың «Мөхәббәт ул үҙе иҫке нәмә, ләкин һәр бер йөрәк уны яңырта» тигән ҡанатлы һүҙҙәрен хәтергә төшөрөп ҡуйғандай хатта.

«Китмә, һөйөү», «Яҙҙарыңда ҡалдыр мине» һәм «Ситлектәге ҡоштай бәргеләнде…»лә Марис Нәзиров лирикаһының ҡылдары уғата ла нескәрәк, уғата ла наҙлыраҡ сиртә һымаҡ. «Китмә, һөйөү»ҙең лирик геройы аңлауынса, мәҫәлән, кешене «ғәҙәтиҙән – илаһиға» күтәреүсе мөхәббәттән дә ғәйрирәк көс юҡ ер йөҙөндә. Һөйөү һәр саҡ уның менән ҡалһын өсөн, ул, хис утында көйөп, мәңге ғазап сигергә лә риза. «Ситлектәге ҡоштай бәргеләнде…»нең дә лирик геройы тәрән һәм ысын һөйөү хистәре кисереп йәшәргә һәләтле. Ләкин яҙмыш уға, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, аймылыш юлды һайлаған:

Йөрәк тибештәре тибрәндерә
Ғүмер ҡылдарының сыңлауын.
Яҙмыш һуҡмаҡтарын бер итергә
Мин һуңланым, һин дә һуңланың.

Шағир – үҙ дәүеренең йырсыһы ла, илсеһе лә, ҡоло ла, хөкөмдары ла. Әгәр ул тирә-йүндә барған хәл-ваҡиғаларға ҡолаҡ һалып, реаль тормош ҡаҙанында ҡайнамаһа, «сәнғәт сәнғәт өсөн» тигән уйҙырмаға буйһоноп, ҡул ҡаушырып ятырға ғына ҡалыр ине. Бәхеткә күрә, шиғриәттең мөмкинселектәре, беҙ тереклек иткән Йыһан шикелле, осһоҙ – ҡырыйһыҙ, уның сиктәренә әле бер кем дә барып етә алмаған. Шуға күрә тема эҙләп, форма һайлап һис кенә лә асмандарға ашаһы юҡ – уларҙы ерҙә табырға мөмкин, уҡыусыңдың рухи донъяһын байытырҙай уй-фекерҙәреңде уның аңына һәм йөрәгенә бер уҡыуҙа уҡ инеп ятырҙай итеп әйтергә генә кәрәк.

М. Нәзиров шиғриәте гел пейзаж һәм мөхәббәт лирикаһынан ғына тора икән, тип уйлаһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ ине, әлбиттә. Әҙиптең гражданлыҡ позицияһын сағылдырған шиғырҙары ла байтаҡ ҡына күренә. Уларҙың ҡайһы берҙәре (айырыуса – бөгөнгө ауыл яҙмышына ҡағылғандары) хаҡында өҫтәрәк һүҙ сығҡалап ҡуйғайны инде.Өҫтәп, «Етер инде: ер күтәрмәҫ…», «Ни ҡала?»,«Ике һүрәт», «Ят яҡтарҙан ҡайтып килешләй…», «Һин йәшәйһең, тимәк», «Етем бала», «Һуңға ҡалма!», «Ah, алданған халҡым», «Боҙ баҫҡан, ҡар күмгән эҙҙәр…», «Йәшәүҙәрем юҡҡа түгел, тиеп әйтә алам…», «Түгелдер», «Тимәк…», «Йәшәйбеҙ әле», «Февраль ҡары, ынйы бөртөгөләй…» тигәндәрен дә атарға була.

Быуаттар ҡауышҡанда ижад ителгән «Етер инде: ер күтәрмәҫ…»те формаһы – йөкмәткеһенә, йөкмәткеһе – формаһына тулыһынса тап килгән шиғырҙарҙың бер өлгөһө, тиер инем. Уға ойотҡоно халыҡ телендәге «Ҡаш төҙәтәм, тип, күҙ сығарыу» тигән мәҡәл һалған. Дөрөҫөрәге, шул мәҡәлде оҫта файҙаланып, шағир ярайһы уҡ тәрән фекер әйтеүгә өлгәшкән. Фекерҙең тәрәнлеге иһә бер кеше ғүмерендә генә лә донъяның алмаш-тилмәш үҙгәреп тороуына ҡайтып ҡала. Шиғыр, «Күҙ сыҡмаһын өсөн йәнде дауала, илем, башта!» тигән бик аҡыллы һәм урынлы саҡырыу менән тамамлана.

«Ни ҡала?»ның лирик геройы, беҙҙең заманда тәбиғәткә ҡарата күрһәтелгән һаҡһыҙлыҡты фашлап, киләсәктә урмандан – ҡыуаҡ, ҡыуаҡтан – ҡыяҡ, боландарҙан – боланлы һүрәт, йылғаларҙан – инеш ҡалыр, тип бошонһа, әсәйле килеш – әсәйһеҙ, атайлы килеш – атайһыҙ йәшәргә мәжбүр ителгән балалар хаҡындағы «Етем бала», «Һуңға ҡалма!», «Боҙ баҫҡан, ҡар күмгән эҙҙәр…»ҙә иһә ул бошоноп ҡына ҡалмай, саң ҡаға:

Тәҙрә һайын йә ир, йә ҡыҙ бала
Һиңә, миңә баға, бөҙгә баға:
– Кил, әсәйем, тиҙерәк минең янға…
– Ал, атайым, бынан, һуңға ҡалма…

«Һин йәшәйһең,тимәк»тә лирик геройҙың актив гражданлыҡ позицияһы туранан-тура ярып һалынған. Үҙеңде ысын мәғәнәһендә был донъяла йәшәүсе итеп иҫәпләү өсөн, ул бик ҙур талаптар ҡуя: күкрәгеңдә илһам дөрләп тороро тейеш; тыуған ереңдең иртәгәһен хәстәрләп, ил яҙмышын алға һөйрәп барырға тейешһең; һүнгән йондоҙ яҡтыһында һүрелмәйенсә, йөрәгең йыһан йырын йырлап тибергә тейеш.

«Ah, алданған халҡым» – аллегорияға ҡоролған көслө лә, ғибрәтле лә шиғыр.

Телен, динең, илең һатҡандарҙы
Үҫтерҙең, үҫтерәһең.
. . . . . .
Аҙғын хисте, һай аңды ла
Мөнбәргә менедерәһең…
Бер яманды фашлап өлгөрмәйһең,
Яңыға һикерәһең, –

тип мөрәжәғәт итә лирик герой халҡына, һәм:

… Ah, бисара халҡым, күрәләтә
Үҙеңде бөтөрәһең, –

тигән үкенесле хистәр менән тамамлай һүҙен.

«Түгелдер» тигән шиғырҙа шау-шыу күтәрмәйсә, тауыш-тынһыҙ ғына тыуған илгә, тыуған ергә һөйөү тойғоһы уятыла. Әҫәрҙең патриотик пафосы кульминацияға оҡшап торған икенсе строфала (ә ул алтышар юллы өс строфанан тора) айырыуса көслө яңғырай:

Тыуған ерҙән ситтә йәшнәп
Балҡып киткәндәрҙең
Ялҡындары мәңге түгелдер.
Тирә-йүнгә сәсрәп
Дөрләп-янып бөткәндәре
Ҡуҙ түгелдер инде, күмерҙер.

Марис Нәзировтың быуат башындағы шиғриәтенә яһалған был күҙәтеүҙәремдең ахырына яҡынлашҡанда, поэзия яратыусыларҙың иғтибарын «Музейҙа» тигән шиғырға йүнәлтергә булдым. Тематик яҡтан был шиғырҙы бер ергә лә теркәрлек түгел: пейзаж лирикаһына ла, мөхәббәт лирикаһына ла, гражданлыҡ лирикаһына ла. Формаһы буйынса ла, йөкмәткеһе йәһәтенән дә ул үҙенә башҡа. Автор уйлап тапҡан алым да отошло: музейҙағы экспонаттарҙы бәйнә-бәйнә һанағанда, ул «Күпме быуат бында һыйған…», «Төрлө осор эҙе ҡалған…» тигән өндәү ҡатыш риторик һорауҙар ҡуя ла, шиғырын түбәндәге строфа менән тамамлай:

Йәдкәр булып беҙгә ҡалған
Төрлө мираҫ бабайҙарҙан:
Кемдән – хәтәр, кемдән – ҡалҡан…
Кемдән – йәҙрә, кемдән – һабан…

Шулай итеп, музей экспонаттары аша кешелек донъяһының тарихы күҙ алдына килтереп баҫтырыла. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, ул бер ҡасан да тура һәм тигеҙ юлдан бармаған: дар ағасы ла булған, гильотинаһы ла, булат ҡылысы менән һөңгөһө лә, һабан менән ҡалҡаны ла.

Ниһайәт, «Тағы ниҙәр күрәсәк бар килер көндә?» тигән шиғыр. Күләме яғынан бәләкәй генә булһа ла (бишәр юллы – ике, ике юллы – бер строфа), был шиғырҙа лирик геройҙың холоҡ-фиғеле, эске донъяһы, уй-кисерештәре ярайһы ғына образлы итеп асып бирелгән. Шиғырҙың һуңғы строфаһы уйға һалмаҫлыҡ түгел:

Тағы ниҙер булыр кеүек тиҙҙән:
Кабынырға әҙер мин бер йылы һүҙҙән…

Күреүебеҙсә, шағир йылы һүҙгә мохтаж, сөнки ул йылы һүҙҙең йән азығы икәнлеген яҡшы аңлай. Шуға күрә үҙенең шиғырҙары менән уҡыусыларына ла йылы һүҙ өләшергә тырыша.

2012, март

НАЗАР НӘЖМИ һӘМ ТАТАР ӘҘӘБИӘТЕ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми туғандаш татар әҙәбиәте һәм уның күренекле вәкилдәре менән аралашып, дуҫ булып йәшәне. Был дуҫлыҡтың ептәре мәктәп йылдарына барып тоташа. Миңештелә әсә телен һәм әҙәбиәтен уҡытҡан Хәмит Бикметовҡа арнап яҙылған «Ауырһынма…» (1940) тигән шиғыр шулай уйларға форсат бирә. Хәмит Бикметовтың исеме шағирҙың «Кем уйлаған…» (1974) тигән автобиографик яҙмаларында ла йыш ҡына телгә алына. «Әҙәбиәт юлынан китергә иң тәүге ойотҡо һалған уҡытыусым – ул тиһәм, яңылыш булмаҫ», тиелә унда Хәмит Бикметов хаҡында.

Шул уҡ яҙмаларҙан күренеүенсә, буласаҡ шағирҙың үҫмер сағынан уҡ әҙәбиәткә тартылыуында уның өлкән ағаһы Ғәҙелкарамдың да өлөшө булғандыр. Утызынсы йылдар башында уҡ әле ул район һәм өлкә гәзиттәре алдырған, уларҙы даими уҡып барған, белемгә, яҡтылыҡҡа ынтылған. Һөҙөмтәлә ябай ауыл тегенсеһенән заманына күрә ярайһы ғына ҙур дәрәжәләргә күтәрелгән. Ағаһынан күрмәк, ҡустыһы ла уҡыуға һәүәҫләнеп китә. Нәжметдиновтар өйөндә Кәрим Тинчуриндың «Һүнгән йондоҙҙар» тигән пьесаһы ла юҡтан ғына бар булмағандыр. Ҡат-ҡат уҡыҙған, ул туҙып-таушалып, бумалаға әйләнеп бөткән хатта.

Назар Нәжми өсөн татар әҙәбиәте Ғабдулла Туҡайҙан башлана, тиһәк, әллә ни хата булмаҫтыр. Мәктәп йылдарын байтаҡҡа артта ҡалдырып, танылған шағирҙарҙың береһенә әүерелгәс, Башҡортостан яҙыусыларының алтынсы съезында (1968) һөйләгән инеш докладында ул былай тип әйтер: «…төрлө поэтик экспериментаторлыҡ, минеңсә, үҙеңдең йүнһеҙ булыуыңды йәшерер өсөн бер сара ғына. Әйтәйек, Пушкинды, Туҡайҙы Ер шары итеп ҡараһаң, төрлө «новаторҙар», поэтик шарадалар – Ер тирәһендә әйләнеп йөрөгән яһалма юлдаштар ғына». Саманан тыш киҫкен әйтелһә лә, был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк юҡ түгелдер, әлбиттә.

Н. Нәжми ғүмере буйына Туҡайҙың яҡты иҫтәлегенә тоғролоҡ һаҡлап, уның ижадына һоҡланып йәшәне. Был турала ул үҙенең шиғырҙарында ла, төрлө йылдарҙа яҙылған мәҡәләләрендә лә һәм юғары трибуналарҙан тороп яһаған сығыштарында ла асыҡтан-асыҡ

әйтә килде. Алтмышынсы йылдар ахырында, мәҫәлән, ул «Шағирҙар» тигән шәлкем яҙып баҫтырҙы. Ошо шәлкем эсендә «Булғандыр бит…» тигәне лә бар. Ул Ғабдулла Туҡайға бағышланған. Унда бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:

Күңелемдең заман ҡошсоғо! –
Баҫып һайрай алтын кәртәгә.
Һатылырға бөгөн әҙермен,
Туҡай сыҡһа минән иртәгә.

Шул уҡ шәлкемдәге Мостай Кәримгә арналған «Ваҡыт һаҡлай әҙәп» тигән шиғыр ҙа иғтибарҙы үҙенә тартып тора, бигерәк тә бынауы юлдар:

Шағирлыҡ ул кила тыумыштандыр,
Ҡанда булалыр ул, моғайын.
Ташты тишеп сыҡҡан сәскә кеүек,
Йылдар, ни булһа ла Туҡайын
Биргән кеүек, барыбер бирер ине
Рәсүлен, Кайсын, Мостайын.

Алтмыш етенсе йыл үҙенең һуңғы һулыштарын һулаған көндәрҙә Н. Нәжми уҡыусыға «Ҡарҙар яуа»тигән яңы шиғырын бүләк итте. Ифрат матур яңғырашлы һәм иҫ киткес тәрән йөкмәткеле ошо шиғырға Ғ. Туҡайҙың «Осто донъя ситлегенән…» тигән һүҙҙәре эпиграф итеп алынған. Дүрт йылдан һуң был шиғыр шағирҙың «Ҡарҙар яуа» исемле яңы китабына йән өрҙө. Китап, үҙ сиратында, авторға яңы шатлыҡ алып килде – 1972 йылда уға Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы тапшырылды. (Шиғырҙың бәҫе китмәһен, тип микән, автор уны артабан рус һәм башҡорт телдәрендә сыҡҡан йыйынтыҡтарына бер-ике тапҡыр ғына индерҙе. Шулай ҙа «Ҡарҙар яуа» уҡыусы күңелендә лә, ҡәләмдәштәре зиһенендә лә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Татар телендә ижад итеүсе башҡорт шағиры Марис Нәзиров үҙенең 2002 йылда Өфөлә донъя күргән бер китабын Н. Нәжми шиғырынан алынған «Йылдар ҡары» тигән һүҙбәйләнеш менән атаны хатта.)

Премия яҙмышы хәл ителгән айҙарҙа «Ҡарҙар яуа» китабы хаҡында һүҙ ҡатыусылар араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи

Ҡудаш та бар ине. Үҙенең «Шағир баҡсаһында» («Кызыл таң», 1972, 6 февраль) тигән мәҡәләһендә ул, премияға дәғүә итеүсенең «Ғүмерҙең өс йыры» исемле шиғырынан:

Илдең ҡайғыларын, шатлыҡтарын
Күтәрҙем мин көсөм еткәнсә.
Йәшәүемдең саҡматашын саҡтым –
Осҡондан ут, тинем, ҡабыныр.

Был йырым да минең шәп сыҡманы,
Шәбе әле, тинем, яҙылыр, –

тигән юлдарҙы килтереп, уларҙың авторын Туҡай менән Ғафури традицияларын дауам иттереүсе, тип билдәләгәйне. Бер нисә йылдан һуң был фекерҙе Татарстандың халыҡ шағиры Сибғәт Хәким менән башҡорт шағиры Ғайнан Әмири ҙә ҡеүәтләп ҡуйҙылар. Ысынлап та, Н. Нәжмиҙе талант эйәһе Туҡайҙың алдынғы ҡараштарын һәм поэтик алымдарын башҡорт ерлегендә үҫтереүсе шағирҙарҙың береһе, тип әйтергә тулы нигеҙ барҙыр. «Туҡайҙың ғүмере, — тип яҙҙы ул «Шиғриәт йондоҙо» тигән мәҡәләһендә, – уның ҡыҫҡа булыуы менән дә,ни бары һигеҙ йыл яҙып ҡалыуы менән дә «бер күҙ асып йомған ара» кеүек кенә. Ул миҙгел, әлбиттә, гүзәл һәм уның туҡталмауы тәбиғи, сөнки туҡтала ҡалһа, гүзәл дә булмаҫ ине. Был гүзәллек үҫә, үҙенән һуң йәшәгән кешеләрҙең йөрәгендә дауам итә, ул мәңгелек хәрәкәттә, ул үлемһеҙ!» (Назар Нәжми. Күңел сәхифәләре. Өфө: «Китап», 1999. 54 б.).

Назар Нәжми татар әҙиптәренән (Туҡайҙан ҡала) Һаҙи Таҡташ менән Муса Йәлилде лә яҡын күрҙе. Уның ижад мираҫында айырыуса Таҡташ исеме күҙгә йыш салына. Ғәҙәттә ул Пушкин, Лермонтов, Туҡай, Туфан исемдәре менән йәнәш ҡуйыла. Шағирҙың етмеш йыллығына арналған «Бәхет» тигән мәҡәләһендә, мәҫәлән, Н. Нәжми Һ.Таҡташ тураһында былай тип яҙҙы: «Ул да башҡалар шикелле йәп-йәш көйө донъянан китте. Пушкинға ни бары 38 булған… Лермонтовҡа, Туҡайға, Сәләмгә 27-шәр… Таҡташҡа 30… Белмәйем, улар иртә үлерҙәрен һиҙеп шулай дөрләп янып ҡалдылармы, әллә артыҡ дөрләп, ялҡынланып янған өсөн иртә һүнделәрме икән?».

Ошо ҡыҫҡа ғына мәҡәләһендә лә автор Һаҙи Таҡташтың татар донъяһында тотҡан урынын бик асыҡ һәм үтә аңлайышлы итеп билдәләне.Татарҙың мәшһүр шағирына башҡорт шағиры Назар Нәжми

биргән баһаламаларҙы бында иҫкә төшөрөп китһәк, һис тә яҙыҡ булмаҫ: «Таҡташ – тәбиғәттең иҫ киткес бер бүләге»; «Таҡташ – ысын мәғәнәһендәге халыҡ шағиры»; «Таҡташ, халыҡ шағиры булыу менән бергә, шағирҙар шағиры ла»; «Таҡташ – күренеш». Өҫтәрәк телгә алынған автобиографик яҙмаларында Назар Нәжми татар мәшһүренә яңынан әйләнеп ҡайта. Улай ғына ла түгел, был әҫәренә ул атаманы ла Таҡташтың киң билдәле «Моҡамай» тигән шиғырынан ала.

Муса Йәлил тураһындағы уйланыуҙарын Назар Нәжми «Заман легендаһы» тип атаны. Был очерк та күләме яғынан ыҡсым, ә бына йөкмәткеһе – тетрәндергес. Сөнки унда автор, надзирателдәрҙән алған һорауға таянып, Плетцензее төрмәһендә Муса Йәлилдең нисек үлтерелеүен энәһенән-ебенә тиклем күҙ алдына килтереп баҫтырған. «Заман легендаһы»нда Н. Нәжми үҙенең Муса Йәлилгә арнап 1957 йылда яҙған «Кисер мине» тигән шиғырын да файҙаланған. Шиғырҙың һуңғы ике строфаһын тыныс ҡына уҡыу мөмкмн түгел:

Хәтерләйем төрмә ҡоймаларын,
Бәреп ингән тимер ҡапҡаһын.
Үҙ күҙҙәрем менән күргәнмен мин,
Үҙ ҡулдарым менән тотҡанмын мин
Һине харап иткән балтаны.
Был хәтерләү ниңә кәрәк хәҙер –
Һинең даның шуға ҡалғанмы?!
Палачтарға һине бирмәҫ инем,
Кисер мине – һуңлап барғанмын!

Әгәр Ғ. Туҡай, Һ. Таҡташ, М. Йәлил менән Н. Нәжми уларҙың ижад мираҫтары аша ғына хәбәрҙар булһа, татар әҙиптәре араһында уның күҙгә күҙ терәшеп, аралашып, яйы сыҡҡан һайын күрешеп-осрашып торғандары ла байтаҡ ҡына ине. Шуларҙың иң билдәлеләре һәм иң яҡындары Сибғәт Хәким менән Хәсән Туфандыр,тиһәк,яңылышмабыҙ. Назар Нәжми ҡәләмдәш ағалары С. Хәким менән Х. Туфан хаҡында күп һәм ҡиммәтле иҫтәлектәр яҙып ҡалдырҙы. Әммә татар әҙиптәренән уның осрашып танышҡан һәм артабан ғүмер буйы күрешеп тә, хатлашып та йәшәгән тәүге дуҫы Ғүмәр Бәширов булғандыр, моғайын. Башҡортостандың рус дәүләтенә ҡушылыуына 400 йыл тулыу айҡанлы 1957 йылдың йәмле йәйендә Өфөлә үткәрелгән байрам көндәрендә башланып киткән был дуҫлыҡ Назар Нәжмиҙең 1996 йылда Ғүмәр

Бәширов исеменә адресланған асыҡ хатына барып тоташа. Хат Татарстандың халыҡ яҙыусыһына туҡһан биш йәш тулған көндәрҙә яҙылған.

Асыҡ хат булғас, ул ғәҙәти сәләм хаты ғына түгел, әлбиттә. Уның атамаһына уҡ ҙур мәғәнә һалынған: «Бер быуат, ә быуаты ниндәй!..». Хаттың тәүге юлдарында Н.Нәжмиҙең автобиографик яҙмаларына инмәгән һәм уҡыусы өсөн быға тиклем билгеле булмаған яңы штрихтар өҫтәлгән. Миңештелә саҡта, мәҫәлән, ул Пушкин менән Лермонтовты, Туҡай менән Таҡташты, Мәжит Ғафури менән Сәйфи Ҡудашты, Афзал Таһиров менән Дауыт Юлтыйҙы ғына түгел, бәлки Ҡәүи Нәжмиҙең «Шыбаға»һын һәм Ғүмәр Бәшировтың «Сиваш»ын да уҡыған икән дә баһа. Ә Кәрим Тинчуриндың «Зәңгәр шәл»ен ауыл сәхнәһендә ҡуйғандар. Ғәлимйән Ибраһимовтың «Тәрән тамырҙар»ын иһә класта ҡысҡырып уҡығандар. Бына ҡайҙан килә икән ул ике халыҡтың, ике әҙәбиәттең дуҫлыҡ һәм туғандашлыҡ ептәре.

Хаттың авторы ара-тирә сәйәси мәсьәләләргә лә ҡағылып китә. Ул турала һүҙ сыҡҡанда Н. Нәжми, һәр ваҡыттағыса, үҙе булып ҡала. Ләкин хаттың төп йөкмәткеһен әҙәбиәт донъяһына бәйле мәсьәләләр тәшкил итә. Ғүмәр Бәшировтың бер нисә йыл дауамында бер-бер артлы баҫылып сыҡҡан дүрт томлығының һәр томын, автограф менән, Назар Нәжмигә ебәреп тороуы – ике әҙип араһындағы дуҫлыҡтың һәм ихтирам итешеүҙең асыҡ сағылышы, тиергә була. Ғүмәр Бәшировтың «Етегән шишмә» романы һәм шул исемдәге йыры тураһында хат авторы киҫәткән мәғлүмәттәр ҙә фәһемле һәм иғтибарҙы йәлеп итерлек.

Н. Нәжмиҙең был асыҡ хатында татарҙың тағы бер танылған прозаигы телгә алынып ҡуя. Ул – башҡорт шағирының аҙашы Ҡәүи Нәжми. Ике Нәжми араһындағы бәйләнеш ниндәйерәк юғарылыҡта булғандыр (Ҡ. Нәжми, ҡызғанысҡа күрә, был донъянан иртәрәк – 1957 йылда китеп барҙы), әммә башҡорт шағиры Назар Нәжмиҙең татар яҙыусыһы Ҡәүи Нәжмигә арнап, бынан илле биш йыл элек ижад иткән «Шыбаға» тигән шиғыры бөгөнгөләй яңғырай:

Йөрәгендә гел йыр ине,
Йырлап һис тынмай ине;
Ҡайғырырға бер урын юҡ,
Шатлыҡтар һыймай ине,
Йырлап һис тынмай ине.

Шыбаға тотолдо бөгөн…
Ах, өҫкә сыҡты үлем.
Ләкин яҙғы елдәр булып,
Ул ҡабат иҫә бөгөн –
Елдәргә теймәй үлем.

Ҡазандағы дуҫы Сибғәт Хәким тураһында ла Назар Нәжми күп яҙҙы. Яҙғандары Башҡортостандың да, Татарстандың да гәзит-журналдарында донъя күрә барҙы, ҡайһы берҙәре шағирҙың Өфөлә сыҡҡан «Яҡтылыҡ юғарынан төшә», «Кем уйлаған…», «Күңел сәхифәләре» тигән китаптарына ла инеп китте. Шулар араһында иң ҡыҫҡаһы, әммә иң һутлыһы етмешенсе йылда яҙылған «Шағир нисек тыуа?» тигәне түгел микән? Уның исеме лә, есеме лә бик хикмәтле: әгәр Сибғәт Хәким «Шиғыр нисек тыуа?» тигән мәкәләһендә ижадтың, шиғыр яҙыуҙың ҡайһы бер серҙәре менән уртаҡлашһа, Назар Нәжми иһә, мәкәлә авторының ижадына еңелсә ҡараш ташлап, «шағирҙы үҙе тыуҙырған иң яҡшы шиғырҙары тыуҙыра», «ысын шағир шиғырҙан-шиғырға тыуа бара» тигән ҡыҙыҡлы ла, көтөлмәгәнсәрәк тә яңғыраған һөҙөмтәгә килә.

Бында Н. Нәжмиҙең «Шағир нисек тыуа?»нан элегерәк, шул уҡ С. Хәкимгә арнап яҙған бағышламаһын да хәтергә төшөрөп китһәк, бер әҙиптең икенсеһенә ҡарата ниндәйерәк мөнәсәбәттә йәшәгәнлектәре уғата ла тулыраҡ күҙалланыр:

Оҙон ине һәм туң ине ул төн…
Туң төн ҡаплағайны туң ерҙе.
Урманда өй… Мин бер үҙем инем…
Килеп тапты шағир шағирҙы.

Китап менән беҙ икәүҙән-икәү…
Шиғырҙарҙа күңел саф ине.
Уйҙарыма хаким булды шул саҡ
Татарҙың ҙур моңло Хәкиме.

Шул туң төндө иреп китте йөрәк,
Яҙғандарым – шағир биргән бүләк.

Ә бына «Сығанаҡтар» тип исемләнгән асыҡ хатында ут күршеһе Сибғәт Хәким хаҡында Назар Нәжми шағир булараҡ ҡына түгел, бәлки

тормош фәлсәфәһен дә, йәшәүҙең ҡатмарлы законҙарын да, әҙәбиәт ғилеме нигеҙҙәрен дә тәрән үҙләштергән ғалим шикелле сығыш яһай. Һүҙ бер шағир икенсеһенән нимәһе менән айырыла, тигән һорауға яуап эҙләүҙән башлана. «…Барыбыҙҙың да күңел бер, уй бер, көй бер, моң бер – айырма ниҙә? Айырма бары тик шунда:кемдеңдер уйы тәрәнерәк, кемдеңдер күңеле нескәрәк, кемдеңдер көйө башҡараҡ, кемдер моңлораҡ».

Артабан автор Сибғәт Хәким шиғриәтенең сығанаҡтарын юлларға керешә. Шул сығанаҡтарҙы барлағанда, әсә теле, эске моң, милли йән, милли үҙенсәлек, ижади йөҙ кеүек төшөнсәләргә үҙенең ҡарашы менән уртаҡлаша, уртаҡлашып кына ҡалмай, уларға үҙеннән яңыларын да өҫтәй: телдең йәне, телдең ҡаны, телдең йөрәге. Муса Йәлилдең рус теленә ауҙарылған шиғри юлдарын туған телдәге варианты менән сағыштырып ҡарай ҙа, «бер телдең йәнен икенсе телгә күсереп … булмайҙыр» тигәнерәк шиген дә йәшермәй. Ахыр сиктә иһә ул, Гёте менән Шиллер ҙә, Туҡай менән Сәйҙәш тә, Таҡташ менән Ҡотой ҙа, Фәтих менән Муса ла, Туфан менән Хәким дә бер үк сығанаҡтан – әсә теле менән һуғарылған халыҡ күңеленән эскәндәр, тигән һығымтаға килә.

«Сығанаҡтар»ҙағы ҡайһы бер фекерҙәр Н. Нәжмиҙең һикһән дүртенсе йылда яҙылған һәм «Күңелдең алғы һыҙығында» тип аталған мәҡәләһендә лә дауам иттерелә һәм артабан үҫтерелә. Был мәҡәләне ижади портреттың матур бер өлгөһө, тиергә мөмкин: унда автор Сибғәт Хәкимдең бер нисә генә шиғырына таянып, уның ғәжәп көслө һәм хәтерҙә ҡалырлыҡ образын тыуҙырған. Сибғәт Хәкимде ул «йәне-тәне менән Туҡайсы» тип атай һәм үҙенең был баһаламаһына түбәндәге асыҡлыҡты индерә: «Туҡай рухлы булыу – иң тәүҙә тормоштоң алғы һыҙығында булыу тигән һүҙ. Туҡай рухлы булыу – ысын мәғәнәһендә милли шағир булыу, үҙ милләтең менән ғорурланыу, ә үҙ милләтең, үҙ халҡың менән ғорурланмай тороп, ысын шағир булып булмай».

Сибғәт Хәкимдең әҫәрҙәрен даими уҡып барған Назар Нәжми уларҙың арбау көсө нимәлә икәнлеген дә асыҡларға тырыша. Был көстө иһә ул Сибғәт шиғырҙарының тәбиғилегендә, халыҡсанлығында күрә. Шунда уҡ халыҡсанлыҡ төшөнсәһенә үҙенең билдәләмәһен дә бирә: «халыҡсанлыҡ – халыҡ күңеленә, аңына сыҡмаҫ өсөн инә алыу, үҙ хистәренә уртаҡ хистәрҙе башҡаларҙа ла тыуҙыра алыу». «Сибғәт Хәким, – тип дауам итә фекерен Н. Нәжми, – шиғырҙары, йырҙары менән генә түгел, бөтөн булмышы менән халыҡ йөрәгендә, ул ысын

мәғәнәһендә халыҡ шағиры». Ҡызғанысҡа ҡаршы, ошо хаҡлы баһанан һуң Сибғәт Хәким оҙаҡ йәшәмәне – ике йылдан һуң вафат булды.

Назар Нәжмиҙең Татарстанда йәшәгән һәм шунда ижад иткән ҡәләмдәш дуҫы тураһындағы һуңғы һүҙе «Сибғәт Хәким иҫтәлегенә» тип аталған шиғыр булғандыр, моғайын. Шиғыр туҡһан алтынсы йылдың йәйендә, Сибғәт Хәкимдең вафатына ун йыл тулған көндәрҙә яҙылған. Унда татар ҡәрҙәшенең «оло йөрәкле, киң күңелле кеше» булғанлығын иҫбатлап тороусы түбәндәге юлдарҙы уҡырға мөмкин:

Кеше өсөн, һин шатланған кеүек
Шатланыусы хәҙер бик һирәк.
Кешеләрҙә кеше ҡайғыһы юҡ,
Үҙ ҡайғыларың шул көслөрәк.
Ун йыл инде һинән хаттар килмәй,
Бирһен генә Хоҙай тыныслыҡ…
Юҡһыныуым ваҡытлыса түгел,
Ул ғүмерлек икән, ғүмерлек…

Шиғырға С. Хәкимдең «Был ваҡытлы ғына юҡһыныуым» тигән һүҙҙәре эпиграф итеп алынған. Күреүебеҙсә, Н. Нәжми был һөйләмдең йөкмәткеһен үҙгәртеп, уға антитеза һымағыраҡ яңғыраған мәғәнә налған. Һәм уның менән килешмәү мөмкин түгел.

Н. Нәжмиҙең һикһәненсе йылдар ахырына ҡараған «Тәрәнлекте тойоу» тигән бер мәҡәләһе бар. Унда һүҙ татар әҙәбиәте тәнҡитсеһе Мөдәррис Вәлиев (псевдонимы Сәлих Маннапов) һәм уның «Тамыр тәрәнлеген япраҡ тоя» тигән китабы тураһында бара. Был китапта Сибғәт Хәкимгә лә, Хәсән Туфанға ла арналған мәҡәләләр бар икән. Х. Туфанға арналғаны – «Туфан тәҙрәһе», С. Хәкимгә арналғаны – «Яҙылмай ҡалған йыр һағышы» тип аталған. Нәжмиҙең иғтибарын Туфанға арналғаны йәлеп иткән. «…Мин, – тип яҙа ул, – Хәсән аға Туфандың ижадын һәм тормошон энәһенән-ебенә тиклем беләмдер, тип уйлай торғайным… Уның шиғырҙарының һәр юлы юллап уҡылған, сирек быуат самаһы аралашып йәшәлде, бер бүлмәлә йоҡлай алмай төндәр буйы һөйләшеп сыҡҡан, хатта ауыл мунсаһында арҡаларын йыуған саҡтар булды». Ә бына С.Маннапов мәҡәләһен уҡығас, бөйөк шағир уға көтөлмәгән яҡтан асылып киткәндәй тойола башлай

Хәсән Туфан һәм Назар Нәжми темаһы, Сибғәт Хәким һәм Назар Нәжми темаһы кеүек үк, – үҙ аллы ҙур тема. Уны бөтә киңлегендә һәм

тәрәнлегендә яҡтыртыу өсөн был өс шағирҙың шәхси архивтарында ҡаҙынырға кәрәк. Әлегә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, өсөһөнөң дә яҡты донъя менән хушлашыуҙарына байтаҡ ваҡыт үтеп китһә лә, уларҙың әҙәби мираҫын барлауға тотонған кеше күренмәй шикелле. Шуға күрә бында киң күләм матбуғат биттәрендә һәм ҡайһы бер китаптарҙа баҫылып сыҡҡан материалдарға ғына таянып фекер йөрөтөргә ҡала.

Шундай материалдарҙың береһе – Н. Нәжмиҙең «Аҡ елкән» тигән шиғыры. Ул Хәсән Туфанға арналған. Шиғырға эпиграф итеп автор яратҡан шағиры М. Лермонтовтың «Белеет парус одинокий» тигән һүҙҙәрен алған. Әҫәр традицион ҡалыпҡа һалынған ете строфанан тора. Уларҙың һәр ҡайһыһына тәрән мәғәнә төрөлгән. Шул стофаларҙың һуңғыһын күсереү менән генә сикләнәйек:

Уфтаныу ят уға, ишеттермәҫ
Үткән тураһында ауыр һүҙ.
«Бер ғазапһыҙ шағир буламы ни,
Океан буламы ни дауылһыҙ».

Н. Нәжмиҙең ҡәләмдәш ағаһына арналған яҙмалары араһында «Осрашыуҙар һәм айырылышыу», «Ғүмерҙең дауамы» тигәндәре – иң билдәләләре һәм иң ныҡ хәтерҙә ҡалғандары, тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ. Уларҙың икеһе лә Ҳ. Туфандың вафатынан һуң яҙылғандар, шуға күрә автор был яҙмаларын иҫтәлектәр тип атаған. Иҫтәлектәрҙең икеһендә лә башҡорт һәм татар әҙәбиәттәре һәм әҙиптәре араһындағы дуҫлыҡ һәм ижади бәйләнештәр хаҡында байтаҡ ҡына ҡыҙыҡлы һәм файҙалы мәғлүмәттәр табырға мөмкин.

«Осрашыуҙар һәм айырылышыу» тышҡы яҡтан бер-береһенә һуйып-ҡаплаған ғәжәйеп күренештән башлана. Әгәр 1957 йылдың йәйендә Назар Нәжми Ғүмәр Бәширов һәм Мостай Кәрим менән Башҡортостандың көньяҡ райондарына сәфәр ҡылған булһа, теүәл ун биш йылдан һуң, 1972 йылдың йәйендә, Ҡазандан үҙе саҡырып килтергән ҡунаҡтары Хәсән Туфан һәм Сибғәт Хәким менән шул уҡ сәфәрҙе ул яңынан ҡабатлай. Был юлы уларға Ғилемдар Рамазанов та ҡушыла. Һүҙ ҙә юҡ, Көньяҡ Урал тәбиғәте һәм унда йәшәгән халыҡ сәйәхәтселәрҙә юйылмаҫ эҙ ҡалдыра. Әммә иң мөһиме шунда: улар сәйәхәт ваҡытында ла ижадтан айырылмайҙар.

Стәрлетамаҡ ҡалаһына еткәс, мәҫәлән, Назар Нәжми татар дуҫтарына Ашҡаҙарҙы ҡарап китергә тәҡдим итә. Тегеләр шатланып

ризалашалар. Яр буйында бер нисә минут ҡына баҫып торалар. Ә ошо бер нисә минут Хәсән Туфанға, Себерҙә үткән йылдарын, Обь, Енисей йылғаларын күҙ алдына баҫтырып, «Ул да йәш кенә ине…» тигән шиғырҙы бүләк итә. Назар Нәжми иһә ошо күренештән бындай һығымта яһап ҡуя: «Был шиғыр – яҙмыш, авторҙың яҙмышы. Был шиғыр шағир кешенең (таланттың, әлбиттә) тылсымлы һәм серле икәнлеген, һәр шиғыр үҙе ҙур яҙмыш икәнлеген күрһәтеп тора һәм шулай уҡ шағир кешенең йөрәгендә, ҡайҙалыр күңел төбөндә һәр ваҡыт шиғыр тулышып йөрөгәнлеген, шуны тыуҙырыу өсөн кескәй генә осҡон-ваҡиға еткәнлеге хаҡында һөйләй».

Назар Нәжмигә Хәсән Туфан менән йыл һайын тип әйтерлек осрашып-күрешеп торорға насип була – йә Өфөлә, йә Ҡазанда. Һәр осрашып күрешеү, тәбиғи, Туфандың портретына яңы һыҙаттар өҫтәү мөмкинлеген аса. Уның етмеш йәшен билдәләгәндә бергә үткәргән көндәрҙе хәтерләп, мәҫәлән, Назар Нәжми былай тип яҙа: «…Хәсән Туфандың поэзияға һәм дуҫлыҡҡа бер кимәлдә – ҙур талап менән ҡарағанлығын белдем – шиғриәт тә, дуҫлыҡ та уға бер иман ине. Уларға ҡарата саҡ ҡына хилаф итеү, уларҙа ялғанлыҡ саҡ ҡына һиҙелеп ҡалынһа ла шағир күңеле ғәфү итмәйәсәген аңланым, ике йөҙлөлөктө ул иң түбәнлек итеп ҡараны».

Икенсе бер осрашҡанында олуғ шағир Н. Нәжмиҙә бындайыраҡ тәьҫир ҡалдыра: «Хәсән Туфан ағай… ҡайһы бер кешеләргә, уларҙың ижадына субъективыраҡ ҡараны шикелле, бөтөнләй үк талантһыҙ булмаған шағирҙарҙы ла инҡар иткән саҡтары булды, ләкин шул уҡ ваҡытта үҙ ҡарашын шиғриәткә һәм башҡаларға көсләп таҡманы… Ул бер ваҡытта ла, үҙен ҡояш итеп тойоп, бөтәһен дә тигеҙ йылытыу хәйләкәрлегенә барманы… Бөтә ярамһаҡланыуҙарҙы ене һөймәне».

Н. Нәжми «Осрашыуҙар һәм айырылышыу» тигән мәҡәләһендә Хәсән Туфандың һикһән йәшлек юбилейын да тәфсилләп һүрәтләгән. Тик, ҡызғанысҡа ҡаршы, был осрашыу һуңғыһы булып сыға: биш ай үткәс, «бала йәнле алла бәндәһе» менән мәңгегә айырылышҡанда, хәтирәләр авторы, «күпме тапҡырҙар күрешкән ҡулдар һалҡын ине», тип танырға мәжбүр була.

«Ғүмерҙең дауамы» тигән икенсе яҙма формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә «Осрашыуҙар һәм айырылышыу»ҙан күпкә айырыла. Әгәр «Осрашыуҙар һәм айырылышыу»ҙа, исеменән үк күренеп тороуынса, Назар Нәжми башлыса хәтирәләргә бирелгән нескә

күңелле шағир булып сығыш яһаһа, бында иһә ул үзен күберәк тәнкитсе һәм әҙәбиәт белгесе итеп күрһәтә.

«Ғүмерҙең дауамы» мөстәкил ике киҫәктән тора.Тәүгеһе – «Гүзәл ғәм», икенсеһе – «Шағир һабағы» тип атала. Тәүге бүлектә һүҙ мәшһүр шағир Хәсән Туфандың вафатынан һуң ун йыл үткәс сыҡҡан «Гүзәл ғәм» тип исемләнгән шиғырҙар китабы хаҡында бара. Китапҡа һәм уның авторына Н. Нәжми юғары баһа бирә. «“Гүзәл ғәм”дең уҡып сыҡҡас, – тип яҙа ул, – күңелдә ҡалған төп тойғо шул: бында шағир үҙенең рухы менән, йөрәге һәм уйҙары менән, хатта көндәлек тормошо менән, шиғри халәте менән, был халәттәге мөнәсәбәттәре менән бөйөк классиктарға ауаздаш, уларҙың ижади йөҙөн, рухын хәтерләтә». Артабан автор үҙ фекерен конкрет миҫалдар менән нығыта.

Был киҫәктә Назар Нәжми бәйән иткән шаҡ ҡатырғыс хәл – уның 1960 йылда яҙған «Иртә төшкән ҡар» исемле шиғырының Хәсән Туфандың әле һүҙ барған йыйынтығына инеп китеүе. Автор был хәлдең нисек һәм ни сәбәпле килеп сығыуын үҙенсә аңлатҡан аңлатыуын, ләкин иң ҡыҙығы – китапты архив материалдарына таянып төҙөгән кешеләрҙең Назар Нәжми шиғырын Хәсән Туфандыҡынан айыра алмауҙарында. Тимәк, был ике шағирҙың ижад алымдарында, яҙыу манераларында, стилдәрендә ниндәйҙер яҡынлыҡ, уртаҡлыҡ булған. Шуға күрә Н. Нәжми был хата өсөн «Гүзәл ғәм»де әҙерләп, донъяға сығарыусыларға үпкәләмәй ҙә, ризаһыҙлығын да белдермәй.

«Шағир һабағы» тип аталған икенсе киҫәктә Назар Нәжми Хәсән Туфандың ижад лабораторияһына күҙ һалған. Бының үҙ сәбәбе бар: «Гүзәл ғәм» тигән йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙар араһында Н. Нәжми шәхесенә бәйләнеше лә юҡ түгел икән. Шуларҙың береһен – «Юл ауыр булған һайын» тигәнен – автор еңелсәрәк, ә икенсеһен – «Тик сәләм был» тигәнен – энәһенән-ебенә тиклем тикшергән. «Юл ауыр булған һайын»дың ике вариантын сағыштырғандан һуң ул Хәсән Туфандың шиғыр өҫтөндә нисек эшләгәнлегенә, һәр бер һүҙҙең яңғырашына һәм мәғәнәһенә ниндәй иғтибарлы булғанлығына хайран ҡалһа, «Тик сәләм был»дың өс вариантын сағыштырып ҡарағандан һуң иһә ул бындай һөҙөмтәгә килә: «Шиғыр яҙыуҙың әсеһен-сөсөһөн татымаған кешеләр өсөн Хәсән Туфандың шиғыр өҫтөндә эшләй-эшләй шул тиклем интегеүе (был һүҙҙе ҡулланыуҙан һис тә тартынмайым, сөнки шиғыр яҙыу ысын мәғәнәһендә интегеү – тик был интегеүҙә көсәнеү генә һиҙелмәһен – ижади бәхеткә, шатлыҡҡа ирешеү өсөн бәхетле,

шатлыҡлы интегеү ул) бер аҙ ят тойолор, әммә ул интегеү шундай тәбиғи! Тимәк, шағир ғүмере гел шулай, гел шундай – эҙләнеү халәтендә».

Назар Нәжми татар әҙәбиәтенең өлкән йәштәге вәкилдәренә генә түгел, үҙенән йәшерәктәргә лә һәр ваҡыт иғтибарлы һәм ихтирамлы булды. Етмеш дүртенсе йылдың августынан алып һикһән беренсе йылдың июленә тиклемге арауыҡта татар дуҫтарына арнап, Дим буйынан яҙған хаттары быға асыҡ дәлил. Ижад һәм шиғриәт тураһындағы был хаттар һуңыраҡ «Ут күршеләр» тигән дөйөм баш аҫтында шағирҙың «Кем уйлаған» исемле китабына инеп киттеләр. Әйтергә кәрәк, Назар Нәжмиҙең Дим буйынан яҙған асыҡ хаттары туғандаш әҙәбиәт менән асыҡтан-асыҡ аралашып йәшәүҙең ул уйлап тапҡан яңы бер формаһы ине. Был форманы асыҡ хат ҡалыбына һалынған әҙәби тәнҡит мәҡәләһе, тиһәк тә хата булмаҫ.

«Ут күршеләр» шәлкеме алты хаттан тора. Шәлкемде Сибғәт Хәкимгә арналған «Сығанаҡтар» тигән хат-мәҡәлә асып ебәрә. (Был хаттың төп йүнәлеше һәм дөйөм йөкмәткеһе хаҡында өҫтәрәк һүҙ булғайны инде.) Сибғәт Хәкимгә бағышланған мәҡәләне Ғалим Афзалға, Илдар Юҙеевҡа, Сажидә Сөләймәновағa, Рәдиф Ғатауллинға адресланған «Ике шиғриәт», «Үҙ һәлмәклеге менән», «Эҙләнеү ғазаптары», «Туҡай урамында» тип аталған хаттар дауам итә лә Мөҙәррис Әғләмовҡа тәғәйенләнгән «Аяҡ үрә» тигән хат-мәҡәлә ослап ҡуя.

Хаттарҙың һәр ҡайһыһы – татар шиғриәтенә битараф булмаған башҡорт уҡыусыһы өсөн үҙе бер табыш. Күпмелер кимәлдә (тәү сиратта – формалары йәһәтенән, әлбиттә) улар Мостай Кәримдең илле алты менән илле етенсе йылдар ҡауышҡанда Балтик буйынан – Рига ярҙары тип йөрөтөлгән ерҙән, ул осорҙа башҡорт поэзияһында ҡанаттарын ҡаға башлаған Әбделхаҡ Игебаевҡа, Марат Кәримовҡа, Рәми Ғариповҡа һәм Рафаэль Сафинға атап яҙған асыҡ хаттарын иҫкә төшөрә. Башҡорт әҙәбиәтендә һәм мәҙәниәтендә ҙур урын алып торған ошо ике шәхестең ҡәләмдәштәренә (уларҙың йәш аралары төрлө булыуға ҡарамаҫтан) адресланған асыҡ хаттары, ярты быуат самаһы ваҡыт үтеп киткәндән һуң да, үҙҙәренең эстетик һәм танып белеү әһәмиәтен юғалтмайҙар. Өҫтәп, шуны әйтергә мөмкин: М. Кәримдең «Ҡәләмдәш иптәштәргә хаттар»ы ла, Н. Нәжмиҙең «Ут күршеләр»е лә бөгөн дә, киләсәктә лә шиғриәт һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә тәүге азымдарын яһаусы йәштәр өсөн оло мәктәп һәм йәнле өлгө булып торорлоҡ.

Әйткәндәр буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, «Ике шиғриәт» тип аталған хатҡа ҡолаҡ һалайыҡ. Татарстандың халыҡ шағиры һәм Ғ. Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Ғамил Афзалдың «Үҙем һүнеп ятам, үҙем көлөп ятам, кеше бәхете өсөн һөйөнөп» тигән юлдарына таянып, Назар Нәжми әҙәбиәт, ижад, шиғриәт хаҡында хас ғалимдарса бәхәс ҡороп ебәргән. «Ғармунсы дуҫ» тигән пьесаһына бәйле тәнҡит һүҙҙәре тураһында уйланып, геройының үлемен ысын сәнғәт дәрәжәһенә күтәрә алмағанлығына үкенә һәм тәнҡит утына алыныуының да сәбәбе шундалыр, тигән ҡарарға килә. Шул уҡ ваҡытта ул һәр ижадсының үҙ-үҙенә ышанырға тейешлеген, үҙенең эске инаныуы булырға тейешлеген, үҙ инаныуына башҡаларҙы ышандыра алырға, ә кәрәк саҡта шул инаныуы өсөн көрәшергә, йәнен фиҙа ҡылырға тейешлеген дә яҡлап сыға. Үҙенең ошо ҡарашын йөпләү һәм ҡеүәтләү өсөн ул Лев Толстой менән Чеховҡа ла мөрәжәғәт итә.

Ғамил Афзалдың өҫтә килтерелгән шиғри юлдарына кире ҡайтып, хаттың авторы татар дуҫының әҫәренә һәм бөтә ижадына үҙенең юғары баһаһын бирә. «Был, – ти ул, – һинең биографияң һәм яҙмышың, улай ғына ла түгел, ул һинең шиғыр менән булған айырылғыһыҙ бер бөтөнлөгөң, шиғырға күскән һинең ҡаның, һулышың». «Бындай бөтөнлөк ҡайҙан килә?» тигән һорау ҡуя хаттың авторы һәм шунда уҡ яуабын да ҡайтара: «Ул үҙе килә, тәбиғәт килтерә, тормош килтерә». Уйланыуҙарын артабан дауам итеп, «әҙәбиәт изге нәмә, уны ни генә эшләтһәң дә, тәбиғәттең һайланмалары ғына тыуҙыра һәм ваҡыт шуларҙың үҙҙәрен генә һайлап ҡалдыра, артығын үҙенән ситкә ырғыта», тип тә өҫтәй. Йыйып ҡына әйткәндә, был хат – үҙе бер әҙәби трактат, тиерлек.

Татарстандың тағы бер халыҡ шағиры һәм шулай уҡ Ғ. Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Назар Нәжмиҙең күңел түрен биләгән. Ул – Илдар Юзеев. «Үҙ һәлмәклеге менән» тип аталған асыҡ хатында автор татар «ағаһы»ның (бында Н.Нәжми башҡорт халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙән тороп ҡалған ғөрөф-ғәҙәтте тергеҙгән: ул да үҙенең яратҡан шағирына,ихтирам иткән кешеһенә, үҙенән шаҡтай күп йәштәргә кесе булыуына ҡарамаҫтан, «ағай!» тип өндәшкән икән) ижадына тәнҡитселәрсә үткер ҡарашын ташлап, был ижадтың айырым үҙенсәлектәрен, йәш ҡәләмдәшенең поэтик табыштарын ус төбөндәге шикелле итеп күрһәткән.

Хат-мәҡәлә көтөлмәгән сағыштырыуҙарға бай. Ғөмүмән, әҙәби тәнҡит мәҡәләләренән дә, әле һүҙ барған асыҡ хаттарынан да күренеүенсә,

Назар Нәжми киң мәғлүмәтле шәхес булған. Өҫтә, Ғамил Афзал тураһында һүҙ барғанда, мәҫәлән, ул француз скульпторы Роденды телгә алһа һәм уның ҡанатлы һүҙҙәренә таянып, скульптура менән шиғриәт араһында иҫ киткес матур йәнәшәлек үткәрһә,әле инә, Илдар Юзеев хаҡында уйланғанда, француздың икенсе бер бөйөк кешеһе – архитектор Монферран уның мейеһен быраулаған. Автор ҡарашынса, Илдар Юзеевтың шиғриәте үҙенең һәлмәклеге менән Санкт-Петербург ҡалаһында Монферран проекты буйынса төҙөлгән һәм Пушкиндың киң билдәле шиғырында иҫкә алынған Александр колоннаһын хәтерләтә. «Ысын шиғыр, – тип асыҡлай үҙ фекерен Назар Нәжми, – ана шул Александр колоннаһы кеүек үҙ ауырлығы, үҙ һәлмәклеге менән торорға һәм йәшәргә тейеш. Һине ана шундай шиғырҙар, әҙәбиәттә үҙ һәлмәклектәре менән йәшәй торған шиғырҙар төҙөүсе архитекторҙар иҫәбенә индерер инем».

Әүәлгесә, Н.Нәжми был юлы ла сәнғәткә, әҙәбиәткә, айырыуса шиғриәткә бәйле дөйөм мәсьәләләрҙе лә урап уҙмаған. Уның ҡайһы бер баһаламалары, ҡәләмдәштәре алдына ҡуйған талаптары, бәлки, артыҡ ҡәтғи һәм киҫкен дә яңғырайҙыр, ләкин, дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ, тигәндәй, улар менән килешмәй ҙә сара юҡ. «Әгәр ҙә сәнғәт кеше күңеленә ҡағылмай икән, уны тулҡынландырмай икән, тимәк, уның кәрәге юҡ, ул үлергә тейеш» тип яҙа ул ижадтағы уртасалыҡ хаҡында һүҙ ҡуҙғатып. Уртасалыҡтың тамырҙарын юллап, уның сәбәбен шағир булып тыумауҙа, һөнәрселектә күрә. Был тезистың икенсе яртыһы – бәхәсһеҙ, әлбиттә, ә бына беренсе яртыһы – уйландыра. Үҙ иңеңә саманан тыш ауыр йөк һалыу түгелме был?

Шағирҙың тыумыштанмы, түгелме икәнлеген раҫлау өсөн ниндәй критерийҙар бар һуң? Әллә быны һәр кем үҙенсә, ҡулынан килгәнсә, аҡылы һәм тойомлау һәләте еткәнсә асыҡларға мәжбүрме? Ул саҡта теге йәки был шағирға, уның ижадына бирелгән баһаламала дөрөҫлөк, ғәҙеллек сағыштырмаса ғына, яҡынса ғына була түгелме һуң? Ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларының беҙҙең көндәргәсә килеп еткән өлгөләре лә, беҙ йәшәгән дәүерҙә тыуып торғандары ла халыҡ хазинаһы икәнлеген иҫкә төшөрһәк, бөтә кеше лә тыумыштан уҡ шағир була торғандыр ҙабаһа. Тик, Ер йөҙөндә бер-береһенә оҡшаған (һуйып ҡаплаған) ике кешене осратыу мөмкин булмаған шикелле, уларҙың тәбиғәттән килгән образлы фекерләү ҡеүәләре лә шулай төрлөсә булырға, бер-береһенә тап килмәҫкә тейештер.

Был уйланыуҙарға Сажидә Сөләймәнова менән Рәдиф Ғатауллинға адресланған хаттар ҡуҙ өҫтәне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Сажидә

Сөләймәнованың ижади уңыштарына шатланыу тойғолары үҙәк өҙгөс әрнеүле хистәр менән үреп бирелгән: хат шағирә иҫән саҡта яҙыла башлаһа ла уның вафатынан һуң ғына тамамланған. Автор был мәҡәләһендә лә үҙен ҙур эрудит итеп күрһәтә. Әйтәйек, хөрмәт иткән татар шағирәһе менән донъя күләмендә танылыу тапҡан шағирәләрҙең ижад психологияһындағы яҡынлыҡты төҫмөрләү – шуға асыҡ дәлил булып торорлоҡ.Ҡатын-ҡыҙҙар поэзияһы менән ир-егеттәр поэзияһы араһындағы уртаҡлыҡты ла, айырмалыҡты ла ифрат оҫта тотоп алған. Хат-мәҡәләнең төп идеяһы уның атамаһына төрөлгән: «Эҙләнеү ғазаптары». Күптәр өсөн, шул иҫәптән Сажидә Сөләймәнова өсөн дә, шиғриәт – ысынлап та эҙләнеү ғазаптары, шул ғазаптарҙы кисерә-кисерә генә татлы емештәргә ирешергә мөмкин. Шиғриәткә ҡарата күптән формалашҡан талаптарын Назар Нәжми ғәҙәтенсә уҫал итеп, йөҙөнә бәреп әйтә: «Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, – ти ул, – бөҙрә һәм ҡыҫыр шиғырҙар яҙыусылар… нисектер, бер-береһенән «шиғри» еҫ тойоп табышалар: әлеге шул русса әйткәндә, рыбак рыбаҡа видит издалека. Улар бер-береһен маҡташалар, шиғыр арнашалар, етмәһә, ғөмүм поэзия тураһында фекер йөрөтөргә, баһа бирергә баҙнат итәләр – бынан да ҙур ҡыҙғаныс хәлдең булыуы мөмкин түгел».

Рәдиф Ғатауллинға адресланған хаттың да атамаһы хикмәтле – «Туҡай урамында». Ул тәрән мәғәнә төрөлгән символик йәнәшәлектән башлана: емеш баҡсаһы һәм шиғриәт баҡсаһы. Артабан Назар Нәжми яҡташы Рәдиф Ғаташтың ижадын күптән бирле күҙәтеп килеүе, был ижадта ысын шағирҙы эҙләүе һәм, эҙләнә торғас, уны «Туҡай урамында» тип аталған шиғырында килеп табыуы хаҡында бәйән итә. Хаттың авторына был шиғыр бик оҡшаған һәм шиғырҙан алған тәьҫорат аҫтында бындай һөҙөмтәгә килгән: «Туҡай урамы – поэзия урамы. Беҙҙә бит төрлө-төрлө шиғырҙар бар – ҡайһы берҙәрендә фекер бар, йән юҡ; бәғзе берҙәрендә йән бар кеүек, ә фекер юҡ, ә өсөнсөләрендә фекер ҙә, йән дә булмай. Туҡай урамы – ул ысын поэзия элементтарының бергә тупланған тулы гармониялы урамы. Туҡай урамы – Пушкиндан, Лермонтовтан башланған урам. Был урамда йәшәү һәм ижад итеү ауырыраҡ, тиер инем. Һинең шул урамда булыуың, уға килеүең һәм донъяны «Шул урамдай күрәйем», тип әйтеүең бик шатландырҙы».

Шулай итеп, «Туҡай урамында» тигән хат-мәҡәләһендә Назар Нәжми үҙенән байтаҡҡа йәш ҡәләмдәшенең табыштарына ҡыуана, ләкин башынан һыйпамай, күңеленә ятмаған ҡайһы бер шиғырҙарын атап та китә. Рәдиф Ғаташты ла, поэзияға «шаулап, өйөрмә шикелле,

кинәт» килеп кергән башҡа йәштәрҙе лә «ижад өсөн үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәт булмауҙан да ҡәҙерле нәмә юҡ», тип киҫәтә.

Ниһайәт, Н. Нәжмиҙең Дим буйынан яҙған һуңғы хаты – Мөҙәррис Әғләмовҡа арналған «Аяҡ үрә» тип аталған мәҡәлә. Хат «геройҙары» араһында ул – иң йәше. Назар Нәжми уға асыҡ хат яҙғанда, уның әле бер ниндәй ҙә титулы булмаған. Туҡһан икенсе йылда М. Әғләмовҡа Ғ. Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы тапшырылыуы – Н. Нәжмиҙең талантлыны алдан күреп, талантһыҙҙан айыра белеү һәләтенең асыҡ бер сағылышы булманы микән?

Күпселек осраҡтағыса, «Аяҡ үрә» лә образлы сағыштырыуҙарҙан башланып китә. Ошо сағыштырыуҙар ваҡытында поэзияның үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында уйланыуҙарға ла урын бирелгән. Татар шағиры Мөҙәррис Әғләмов менән башҡорт шағиры Рәшит Назаров шифриәте араһындағы ҡайһы бер яҡынлыҡты тойомлау ҙа үҙе бер асыш, тиергә мөмкин. Сағыштырыуҙар, үҙ сиратында, авторҙы әҙәбиәт ғилеменә ҡараған мәсьәләләргә лә ҡағылып китергә мәжбүр итә. «Поэзияла йоғонто бар һәм эйәреү бар. Әғләмов ижадында Хәсән Туфан поэзияһы йоғонтоһо ныҡ һиҙелә, тип яҙыусыларға яуап рәүешендә. – Был ике әйберҙе бутау – һауаға ҡоро фекер элеп ҡуйыу менән бер, тип әйтер инем, ә ундай дәлилһеҙ фекерҙәр шағир йөрәген кимерә торған ҡорт кеүек». Мөҙәррис Әғләмовтың, Рәшит Назаров шикелле, «поэзияның төп йүнәлешендә, шиғриәт йылғаһының үҙәгенә төшөп хәрәкәт» итеүен һәм барыуын нарыҡлау ҙа үҙенсәлекле яңғырай.

Назар Нәжми «Асыҡ хаттар»ҙың композицияһы хаҡында ла хәстәрлек күргәнгә оҡшап тора. Мәҫәлән, хат-мәҡәләләр шағирҙарҙың йәш араларын иҫтә тотоп (өлкәндән – кесегә табан) яҙылғандар һәм шул уҡ тәртиптә урынлаштырылғандар. Был – беренсенән. Икенсенән, мәҡәләләр шәлкеме ҡоршаулап ҡуйылған: «ут күршеләр» тигән һүҙбәйләнешкә ҡыҫҡаса аңлатма биреүҙән башлана һәм шул уҡ мәғәнәне уғата ла ҡеүәтләгән уй-теләктәр менән тамамлана. «Был яҙғандарым, – тип мөрәжәғәт итә автор уҡыусыларына, – «ҡунаҡ ашы – ҡара ҡаршы» сифатында түгел, беҙҙең әҙәби бәйләнештәребеҙҙе киләсәктә тәрәнерәк һәм киңерәк сифатта дауам итеү, уңыштар менән бергә шатланыу, етешһеҙлектәрҙе бергә-бергә еңеү теләге менән дә тыуған тип фараз ителһә ине».

Ошо бәйләнештәрҙе артабан да үҫтереү һәм нығытыу хәстәрлеге Назар Нәжмиҙең һикһәненсе йылдарҙың ахырында, туҡһанынсының урталарында яҙылған «Тәрәнлекте тойоу», «Таланттың ябайлығы»,

«Күңел тарихы», «Өс хат», «Дуҫ» тип аталған яҙмаларында ла ярылып ята. Улар татар әҙәбиәтенең күренекле вәкилдәре С. Маннапов, Р. Миңнуллин, Зөлфәт (Дөлфәт Маликов). Н. Дәүли, М. Хөсәйендәргә арналған.

Был бишәүҙең өсөһө – һуғыштан һуң тыуып үҫкән һәм әҙәбиәткә һәр ҡайһыһы үҙенсә аяҡ баҫҡан ҡәләм оҫталары. Сәлих Маннапов (псевдонимы, ысын исем-фамилияһы – Мөҙәррис Вәлиев) – шағир ҙа, тәнҡитсе лә. Әммә Назар Нәжмиҙең иғтибарын ул тәү сиратта «һәр яҙыусының, шәхестең үҙенә генә хас сифатын, характерын, ижади үҙенсәлеген оҫта тотоп ала» белгән тәнҡитсе булараҡ йәлеп иткән. Н. Нәжми татар әҙәбиәте тәнҡитсеһенең «Тамыр тәрәнлеген япраҡ тоя» исемле китабына үҙенең ҡараштары менән уртаҡлашҡан, китапҡа ингән тәнҡит мәҡәләләренең күберәк отошло яҡтары хаҡында һөйләһә лә, уҡыусыла һорау тыуҙырырҙайҙарын да,күрмәмешкә һалышып, урап үтмәгән. Дөйөмләштереп әйткәндә, Н. Нәжмиҙең «Тәрәнлекте тойоу» тигән был мәҡәләһе туғандаш татар поэзияһының шул осорҙағы торошон күпмелер күҙалларға ярҙам итә.

Ә бына Роберт менән Зөлфәт икенсе ампулаға күҙ алдына килтереп баҫтырылғандар. Әлбиттә, улар икеһе лә – бөгөнгө татар донъяһындағы талантлы шағирҙар. Шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр ҡайһыһы – үҙенсә талантлы. «Таланттың ябайлығы» һәм «Күңел тарихы» тигән яҙмаларында Н. Нәжми ана шул үҙенсәлекле айырманы асып һалырға тырышҡан да инде. Роберт Миңнуллиндың «Һандуғастың тыуған көнө» тигән китабын уҡып сыҡҡас, мәҫәлән, ул бындайыраҡ хистәргә бирелә: «Роберт Миңнуллиндың шиғырҙары – бик тә йөрәккә ята торған шиғырҙар. Ни өсөн һуң шундай улар? Иң тәүҙә шағирҙың холҡо, тәбиғәте, йән һулышы, эскерһеҙлеге шиғырҙарына күсеүендә, үҙендәге бөтә мөмкинлекте тыуасаҡ шиғырына бушата белеүендә, талантында, оҫталығында». Р. Миңнуллин шиғриәте хаҡында уйланғанда Назар Нәжми әҙәбиәттә традиция һәм новаторлыҡ мәсьәләләренә лә ҡағылмай китә алмаған. «Тәбиғәт тарафынан бирелгән шағирлыҡты, – ти ул, – бер кемдең дә тәьҫире, йоғонтоһо булмай тороп үҫтереү мөмкин түгелдер. Хикмәт шунда: остаздарың алдыңда баш эйеп, үҙең булып ҡалыу – ҙур бәхеттер, был бәхеттең дә тәбиғәт тарафынан бирелеүе ап-асыҡ».

Зөлфәт поэзияһының үҙенсәлектәрен Н.Нәжми уның «Ике урман араһы» исемле китабынан эҙләй, сөнки был китап үҙ эсенә шағирҙың утыҙ йылдан ашыу ижадын һыйҙырған. Китапҡа автор үҙе яҙған баш һүҙ («Сытырманда былбыл һайрай» тип атала ул) менән танышҡас,

Н. Нәжми, «шағир яҙған мәҡәләгә етмәй», тип һоҡланһа, китапты уҡып сыҡҡас иһә ул, «бында бит шиғыр һайын шиғыр» тип танырға мәжбүр булған. Артабан Н. Нәжми Зөлфәттең поэтик алымдарына, образдар тыуҙырыу маһирлығына, юҡ ҡына ерҙән дә шиғыр табыу һәләтенә, сюжетлы шиғырҙарҙа үҙен һыуҙағы балыҡ шикелле тойоуына һоҡлана. «Осор һүрәте» тигән әҫәргә иркенләберәк туҡтап, хат-мәҡәлә авторы шағирға былай тип мөрәжәғәт итә: «Һинең күңел ҡылың шул тиклем тартылған, уның сыңлап китеүе өсөн тын ғына иҫкән елдең дә ҡағылыуы етә». Фекерен уғата ла үҫтереп, Н.Нәжми, «ә заман елендә, заман күкрәүендә ул ҡыл нимә эшләргә тейеш?» тигән борсоулы һорау ҡуя. Ләкин ул һорауға әлегә бер кем дә яуап ҡайтармаған.

Татар һәм башҡорт уҡыусыларына киң билдәле «Йәшәү менән үлем араһында» тигән повестың авторы Нәби Дәүли ҙә Назар Нәжмигә яҡшы таныш булған. Дөрөҫ, уларҙың аралашыуы хаттар яҙышыуға, һирәк-мирәк булһа ла телеграмма йә открытка налыуға ғына ҡайтып ҡалған. Әммә легендар шәхес Нәби Дәүлиҙең «шаҡтай ҡырыҫ холоҡло, үҙ фекерендә бик принципиаль булғанын, үҙ баһаһын үҙе ныҡ белгәнен, хаҡһыҙлыҡҡа бик тә рәхимһеҙлеген» Назар Нәжми күп тапҡырҙар ишетеп белгән.

Туғандаш ике әҙәбиәткә ғүмер буйы тоғролоҡ һаҡлаған был ике әҙиптең хатлашыуына Нәби Дәүлиҙең баҫтырып сығарырға бер кем дә баҙнат итмәгән «Йөрәк» исемле поэмаһы сәбәпсе булған. Назар Нәжми, «“Йөрәк” поэмаһы йөрәктән ала, поэтик эшләнеше яғынан тетрәткес һәм юғары кимәлдә яҙылған», тип баһалаһа ла, әҫәрҙең ҡаршылыҡлы фекерҙәр уятыуы хаҡында ла әйтмәй булдыра алмаған. Быға ҡаршы яҙған хатында Нәби Дәүли бына нимә тигән: «Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин йөрәк күсереү уйыны менән күңел асыуға ҡаршымын. Донъяла кешегә оҙаҡ йәшәр өсөн үҙ йөрәге лә етә. Быға дәлилдәр етерлек, ә бына шулай оҙаҡ йәшәр өсөн ерҙә шарттар тыуҙырырға кәрәк. Хәҙер әле астарға икмәк кәрәк, кешеләргә саф һауа кәрәк, ә беҙ йөрәк күсереү менән шөғөлләнергә керештек». Хаттың ахырында автор үҙ фекерен уғата ла асығыраҡ итеп белдергән: «Минең девиз: минең үҙ йөрәгемә йәшәргә мөмкинлек булһын!».

Назар Нәжмиҙең татар әҙиптәре хаҡындағы хат-мәҡәләләре, иҫтәлек-хәтирәләре араһында иң күләмлеһе һәм иң йылыһы – Мәхмүт Хөсәйенгә арналғанылыр, моғайын. «Дуҫым тип әйтеүем юҡҡа ғына түгел, сөнки Мәхмүт Хөсәйен кеүек дуҫлыҡтың ҡәҙерен белеүсене мин үҙ ғүмеремдә бик һирәк осраттым», тигән һүҙҙәрҙән башлап ебәрә

Н. Нәжми үҙенең «Дуҫ» тип аталған мәҡәләһен. Һәм, Мәхмүт Хөсәйенде яратмаған кешеләргә үҫ итеп тигәндәй, уның бик күп ыңғай сифаттарын асып һала. Мәҙәгерәк тойолғандарына ла күҙ йоммай. Ғөмүмән, был мәҡәләһендә Н. Нәжми үҙен кешеләр менән нәҙәкәтле мөғәмәлә ҡора белеүсе, һиҙгер күңелле, үткер күҙле психолог итеп тә таныҡҡан. «Нишләйем һуң, мин икенсе төрлө була алмайым, үҙ-үҙемә тоғро булып ҡалыуым минең өсөн ҡиммәтерәк», тип нығыта ул татар дуҫы тураһында күп йылдар дауамында формалашҡан ҡарашын.

Ғәжәп, байтаҡ ҡына шағирҙарҙы ысын шағир тип иҫәпләмәгән Назар Нәжми, Мәхмүт Хөсәйенде «тәбиғәте менән тыумыштан шағир», тип таный. Дуҫының халыҡ араһында популяр һәм кешеләр яратҡан шағир булғанлығын ышандырырлыҡ миҫалдарҙа күрһәтеп биргән. Ул «һис ялағай булманы. Уның миңә булған мөнәсәбәте кешелекле һәм эскерһеҙ ине», тип хәтерләй мәҡәләнең авторы Мәхмүт Хөсәйенде. «Кеше шатлығына шатлана белеү – кешелеклектең, ысын дуҫлыҡтың иң юғары билдәһе», тип тә өҫтәгән Назар Нәжми.

Н. Нәжмиҙең татар әҙәбиәте менән бәйләнеше бер яҡлы ғына булманы, әлбиттә. Ҡәрҙәш әҙәбиәттең арҙаҡлы вәкилдәре (оло быуын да, йәшерәктәре лә) уның ижадына телгә алдылар, уның тураһында Ҡазанда ла, Өфөлә лә сығыштар яһап торҙолар, тура килеп, яйы сыҡҡан һайын ҡунаҡҡа ла саҡырҙылар, юбилейҙарын да онотманылар, уға бағышлап хатта шиғырҙар ҙа яҙҙылар. Был аралашыу һәм бер-береңә һүҙ ҡатыу айырыуса 1962 йылдан һуң йәнләнеп китте һымаҡ. Сөнки тап ошо йылда Ҡазанда шағирҙың «Һөйөү һүҙҙәре» тип аталған татар телендәге тәүге йыйынтығы донъя күрҙе. Мәҡәләләрҙән һиҙелеүенсә, биш мең дана тираж менән баҫылып сыҡҡан был китапты татар йәмәғәтселеге йылы ҡабул итте. «Назар Нәжми ижады, – тип яҙып сыҡты «Социалистик Татарстан» гәзитендә шағир Ғәли Хужиев, – үрҙән-үргә күтәрелә барған башҡорт поэзияһының һәйбәт үрнәге. Ул һине уйландыра, тулҡынландыра, тормошто тәрәнерәк аңларға, уның актив төҙөүсеһе булырға ярҙам итә. Беҙгә ана шундай поэзия кәрәк тә».

Н. Нәжмиҙең Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Ут күрше» (1972) һәм «Һиңә барам» (1988) тигән китаптары ла эҙһеҙ ҡалманы. Уларға Сибғәт Хәким яҙған «Бәхетле шағирҙар» һәм Гәрәй Рәхим яҙған «Моңдар шағиры» тип аталған баш һүҙҙәр ҙә был китаптарҙың авторына күрһәтелгән иғтибар һәм ихтирам тураһында һөйләп торалар. С. Хәким, мәҫәлән, башҡорт ҡәләмдәшенең шиғриәттәге урынын бына нисек образлы итеп билдәләгән: «Бәхетле шағирҙар… Туҡай. Башҡорт уны был

татар тип торҙо микән? Тормағандыр, ул турала уйламағандыр ҙа әле. Үҙ шағиры иткән. Ғафури, Шәйехзада Бабич… Был башҡорт шағирҙарын һин татар халҡының яҙмышынан айырып ҡара. Таҡташтар, Туфандар, Йәлилдәр шулай. Сәйфи Ҡудаш, Баязит Бикбай, Мостай Кәримдәр шулай. Был – аралашыуҙың иң матур формаһылыр. Сиктәр юҡ, телдәргә сиктәр юҡ. Хатта тәржемәсе кәрәкмәй. Назар Нәжми лә беҙгә шулай килеп керҙе. Тәржемәсеһеҙ».

Был фекер шағир һәм телсе Мостафа Ноғмандың «Социалистик Татарстан» гәзите аша Назар Нәжмигә һалған «Ҡанатлы йырҙар» тигән асыҡ хатында ла сағылған. «Башҡорт шағирҙары, – тип яҙа хат авторы, – беҙҙең күңелдәш дуҫтарыбыҙ, телдәребеҙ ҙә, уйҙарыбыҙ ҙа яҡын беҙҙең. Утташ күршеләрҙе сикләп торған бер ниндәй кәртәләр ҙә юҡ. Туғандаш шағирҙар араһында, Назар дуҫ, һин айырыуса бер уйсан шағирһың. Исемең дә есемеңә тура килгән дәбаһа. Нажар – ғәрәп телендә столяр мәғәнәһен белдерә… Боронғо телебеҙҙә, быны балтасы, ҡырмасы тип атап йөрөткәндәр. Әйе, оҫта ҡырмасылар ғәжәйеп зиннәтле бизәктәр һырлап, ябай ағастарҙан күҙ яуын алырлыҡ матур йорттар һала белгәндәр! Һин дә оҫта ҡырмасы сифатында телебеҙҙәге матур һүҙҙәрҙе алып, уларҙы бер теҙмәгә һалып бараһың. Ләкин улар ябай һүҙ теҙмәләре генә түгел, уларға йән өргәнһең, уларҙы уҡығанда кеше битараф ҡала алмай».

«Ҡанатлы йырҙар»ҙың шауҡымы Г. Рәхимдең «Моңдар шағиры»на ла тейгәндәй. «Беҙ, – тип яҙа Ғәрәй Рәхим, – радио-телевидениенән һәм яратҡан артистарыбыҙ концерттарында Назар Нәжми шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы көтөп алабыҙ, яңғыҙ ҡалған моңһоу саҡтарыбыҙҙа һәм күңелле мәжлестәрҙә уларҙы йырлап йөрөйбөҙ. «Өфө йүкәләре», «Юҡҡа түгелдер», «Һиңә тағы мин бер киләм әле» кеүек йырҙар беҙҙең күңелдәргә халҡыбыҙ йырҙары кеүек үк тәрән кереп урынлашты».

Йыйып ҡына әйткәндә, Назар Нәжмиҙең татар донъяһы менән аралашыу формалары күп төрлө һәм күп яҡлы булған. Ләкин бында, башлыса асыҡ матбуғат биттәрендә баҫылып сыҡҡан ҡайһы бер материалдарға ғына таянып яҙылған мәҡәләлә, күп ҡырлы әҙәби һәм мәҙәни бәйләнештәрҙең өҫтәрәк ятҡан өлөшө генә яҡтыртылды. Киләсәктә был мәсьәләгә киңерәк ҡараш ташларға кәрәктер. Быныңөсөн Назар Нәжмиҙең һәм ул элемтәгә ингән татар әһелдәренең архивтарын ентекләп тикшереү һәм өйрәнеү талап ителә. Ошо эштәрҙе башҡарып сыҡҡанда, туғандаш ике әҙәбиәт араһындағы бәйләнештәрҙе асыҡлаусы һәм артабан да байытыусы күп кенә яңы факттар табылыр

ине һымаҡ. Был теманы өйрәнгәндә килеп тыуған ҡайһы бер һорауҙарға төплө һәм нигеҙле яуап та ҡайтарылыр ине.

Шундай һорауҙарҙың береһен әле үк ҡуйырға була. Әйтәйек, Назар Нәжмиҙең ике төрлө исем менән аталып йөрөтөлгән бер поэмаһы бар. 1988 йылда Ҡазанда сығҡан «Һиңә барам» тигән китапта ул «Татар ҡаны» тип исемләнгән, ә 1994 йылда Өфөлә сығҡан «Яҡынайыу» тигән китапта шул уҡ әҫәр «Тере ҡан» тип аталған. 1997 йылда Өфөлә татар телендә баҫылып сығҡан шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығына был «серле» әҫәрҙең баштағы атамаһы яңынан әйләнеп ҡайтҡан. Бындай метаморфозаның төп сәбәбен нисегерәк аңлатырға мөмкин икән? «Тере ҡан» төшөнсәһенең мәғәнәһе һәм йөкмәткеһе, «Татар ҡаны»ныҡына ҡарағанда, күпкә тәрәнерәк һәм киңерәктер бит. Назар Нәжми быны ғына шәйләмәҫлек шәхес түгел ине дабаһа. Әллә башҡа сәбәптәр булды микән? Назар Нәжми үҙе тормошта ла, ижадта ла ғәҙеллекте, хаҡлыҡты алғы планға ҡуйырға яратҡан икән, уның әҙәби мираҫын тикшергәндә лә ошо принциптарҙың хөкөм һөрөүе хәйерлерәктер.

2012, сентябрь

БАШҠОРТ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ
БАШКИРСКАЯ ЭНЦИКЛОПЕДИЯ

НАЗАР НӘЖМИҘЕҢ ЭСТЕТИК ҡАРАШТАРЫ

Боронғо грек теленән таралған «эстетика» тигән һүҙ беҙҙеңсә тойомлау, һиҙемләү тигәнде аңлата. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа уны матурлыҡ, гүзәллек тураһындағы ғилем, тип раҫлайҙар. Бәғзеләрендә иһә эстетиканы философияның бер өлөшө, тип ҡараусандар һәм, шунан сығып, уның үҙ методтары, үҙ закондары, үҙ категориялары бар, тип дәлилләйҙәр. Башҡа бик күп ҡараштарҙы ла иҫкә төшөрөргә һәм һанап китергә булыр ине. Ләкин, ниндәй генә раҫлауҙарҙы, ниндәй генә дәлилләүҙәрҙе алып ҡараһаң да, ахыр сиктә был һүҙҙең төп мәғәнәһе барыбер ҙә шул тойомлауға, һиҙемләүгә ҡайтып ҡала.

Әгәр эстетика – матурлыҡ, гүзәллек тураһындағы тәғлимәт, тип кенә иҫәпләнһә, уның танып белеү мөмкинлектәре яһалма рәүештә сикләтелеп, шул рәүешсә дайрәһе лә һиҙелерлек тарайтылыр ине. Сөнки донъя, ҡызғанысҡа ҡаршы, тел матурлыҡтан, гүзәллектән генә тормай бит. Өҫтәүенә, берәүгә матур булып тойолған күренеш, хәл-ваҡиға икенсе берәүгә йәмһеҙ, шыҡһыҙ, килбәтһеҙ булып тойолорға мөмкин. Бындай төрлөлөк һәр кемдең үҙенсә тойомлау, үҙенсә һиҙемләү һәләтенә һәм үҙенсә фекерләү ҡеүәһенә бәйлелер, күрәһең. Әгәр шулай була ҡалһа, эстетика, ысынлап та, философияның бер өлөшө булып сыға түгелме һуң? Был фән дә бит, донъяла абсолют хәҡиҡәт юҡ, бөтәһе лә – сағыштырмаса, бөтәһе лә – яҡынса ғына, тигән фекерҙе алға һөрә.

Эстетика өлкәһендә күп һәм әүҙем эшләгән ҡайһы бер белгестәр уға әҙәбиәтте, театрҙы, музыканы, графиканы, рәсемде, скульптураны, хореографияны, архитектураны, ҡулланма – декоратив биҙәүҙе, циркты, художестволы фотографияны, киноны,телевидениены ғына түгел, бәлки ҡала төҙөлөшөн, пластик хирургияны, косметиканы, парфюмерияны, кулинарияны, шарап етештереүҙе, гастрономияны, кейем һайлай белеүҙе, причёсканы һәм башҡаларҙы индерәләр икән, һис тә ғәжәп түгел. Сөнки, ҡарамаҡҡа бер-береһенән шаҡтай алыҫ торналар ҙа, был төшөнсәләрҙең һәм күренештәрҙең бөтәһе лә беҙҙең тойомлауыбыҙ, һиҙемләүебеҙ аша ҡабул ителә һәм шуға күрә уларҙың бөтәһендә лә, теләйһеңме-теләмәйһеңме, эстетика закондары үҙенең сағылышын тапмай ҡалмай. Сит илдең бер ғалимы донъяны эстетик яҡтан үҙләштереүҙең дүрт йөҙләп төрөн иҫәпләп сығарған, тиҙәр.

Арҙаҡлы фекер эйәһе Н.Г. Чернышевский ҙа «Сәнғәттең ысынбарлыҡҡа эстетик мөнәсәбәттәре» тигән киң билдәле хеҙмәтендә юҡҡа ғына «гүзәллек ул – тормош үҙе», тип әйтмәгәндер. Хәҙер беҙҙең лексиконда эстетик аң, эстетик идеал, эстетик зауыҡ, эстетик теүәллек һәм башҡа шуның кеүек төшөнсәләр йыш ҡына яңғырай икән, был да осраҡлы түгел.

Ошо уйланыуҙарҙан һәм факттарҙан сығып фекер йөрөтһәк (еңелелпесәрәк ҡараш ташлағанда, улар, бәлки, ҡаршылыҡлыраҡ та тойолор), талантлы шағир, танылған драматург, йор һүҙле публицист, үткер күҙле тәнҡитсе, ижад майҙанында тиҫтәләгән йылдар буйына бергә ҡайнаған ҡәләмдәштәренең, артистарҙың, композиторҙарҙың йәнле образдарын тыуҙырған оҫта мемуарсы Назар Нәжмиҙең дә эстетикаһы, башлыса сәнғәт төрҙәре менән бәйле булһа ла,тик уларға ғына ҡайтып ҡалмай. Быға ышаныу өсөн, уның «Кем уйлаған…» (1974) тип аталған автобиографик яҙмаларына күҙ ташлау ҙа етә.

Әйтәйек, дүрт-биш йәшлек Хәбибназарҙы улар ауылынан алыҫ булмаған Ағиҙел буйлап үтеп-һүтеп йөрөүсе «аҡ парахут» әсир итеүен һәм был «парахут»тың уға һыу өҫтөнән шыуышып барғандай тойолоуын нисек аңлатырға? Йәиһә, нишләп әле бер аҙ үҫә төшкән ошо малайға мотлаҡ имән ағасынан бөгөлгән киң табанлы бәләкәй сана нығыраҡ оҡшаған? Йәнә килеп, ауылға ҡаланан эшкә ебәрелгән йәп-йәш кенә уҡытыусы ҡыҙҙың асыҡ йөҙөнә лә, мөләйем ҡарашына ла, кейемһалымына ла, төҫ-ҡиәфәтенә лә һоҡланыуыҙың сере нимәлә? Ни өсөн хатта сабатаның нисек үрелеүе (ҡупшы итепме, әллә ашыҡ-бошоҡ, тиҙерәк аҡса эшләү ниәтенән, сүбектәрен дә ҡырҡмайынса, минән киткәнсе – эйәһенә еткәнсе, тип кенәме) үҫмер малайҙың иғтибарынан ситтә ҡалмаған?

Автобиографик яҙмаларҙы диҡҡәт менән уҡығанда, ошондай һорауҙар йыш тыуа. Мәҫәлән, уртансы ағаһы Ғиләжетдингә эйәреп, Хәбибназарҙың бик иртә гармунда һәм скрипкала уйнарға өйрәнеүе лә юҡтан ғына бар булмағандыр ҙа инде? Йылдан артыҡ Бөрөлә уҡып ҡайтҡас, ул осорҙа ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ауылда һәм ҡалала уҡыууҡытыу кимәленең төрлөсәрәк булыуын самалауы, йәштәр менән ауыл клубында спектаклдәр ҡуйып йөрөүе, шул заманда тәүге тапҡыр ғишыҡ утында янып алыуы һәм башҡалар, һәм башҡалар – былар бөтәһе лә уның зирәклегенән, хистәргә, уй-кисерештәргә бирелеүсәнлегенән, тирә-йүнде, кешеләрҙе, уларҙың шатлыҡтарын да, ҡайғы-хәсрәттәрен дә нисектер үҙенсәрәк, нескәрәк тойомлауҙан килгәндер, моғайын.

Назар Нәжми үҙе тураһында, үҙенең балалыҡ һәм үҫмер саҡтары, мәктәп һәм рабфак йылдары, һуғыш һәм һуғыштан һуңғы осор, әҙәбиәт юлында ҡурҡа-ҡурҡа ғына яһаған тәүге аҙымдары, был юлда уға тап булған ҡәләмдәштәре тураһында ҡыҙыҡ та, ҡайһы берҙә ҡыҙғаныс та итеп һөйләһә лә, «Кем уйлаған…» – автобиографик повесть түгел. Шағир үҙе лә быға дәғүә итмәне,шикелле. Дөрөҫ, автор был жанрға хас талаптарҙы яҡшы күҙаллай һәм шуға күрә уларҙан бөтөнләй ситкә лә тайпылмай. Ижадта ла, тормошта ла бай тәжрибә туплаған шағир һәм драматург үҙенең балалыҡ һәм үҫмер йылдарын һүрәтләгәндә, күпмелер кимәлдә, бәлки, нәфис әҙәбиәт алымдарын да ҡулланғандыр. Ләкин, ни генә тиһәң дә, Хәбибназар образы аша буласаҡ әҙиптең бәләкәйҙән үк матурлыҡты һиҙемләүен, йәштән үк гүзәллеккә тартылыуын шәйләмәй мөмкин түгел.

Әлбиттә, Назар Нәжмиҙең эстетикаһын һәм эстетик ҡараштарын уның художестволы ижадынан – шиғырҙарынан, поэмаларынан, сәхнә әҫәрҙәренән, тәнҡит һәм публицистик мәҡәләләренән, теге йәки был айҡанлы юғары трибуналарҙан тороп яһаған төплө сығыштарынан, мемуарҙарынан эҙләргә һәм бөртөклəп йыйырға кәрәк. Татарстандың халыҡ шағиры Сибғәт Хәким тураһындағы бер мәҡәләһен ул «Шағир нисек тыуа?» тип атағайны. Ишетер ҡолаҡҡа сәйерерәк яңғыраған ошо һорауға мәҡәләнең авторы яуапты ла көтөлмәгәнсәрәк ҡайтара. «Шағирҙы, – тиелә унда, – үҙе тыуҙырған иң яҡшы шиғырҙары тыуҙыра. Ул бер генә лә тыумай, ә шиғыр һайын тыуа. Бына ошо «тыуа барыуҙар» шағирҙы шағир итәләр, уны үҫтерәләр, ололайҙар».

Иғтибарҙы үҙенә тартҡан (бәлки, көтөлмәгәнсәрәк яңғыраған күрәләлер) ошо фекерҙе дауам итеп, әҙиптәрҙең эстетик ҡараштары ла бына шулайыраҡ формалаша – ҡапыл ғына, бер төн эсендә генә түгел, ә йылдан-йыл, әҫәрҙән-әҫәргә үҫә һәм нығый бара. Өҫтә Назар Нәжмиҙең балалыҡ һәм үҫмер йылдарынан килтерелгән ҡайһы бер миҫалдар инһә – уның матурлыҡты тойомлау һәләтенең тамырҙары тәрәндәрәк ятҡанлығына һәм был сифаттың бөтә кешегә лә бер тигеҙ бирелмәгәнлегенә бер ишара ғына.

Назар Нәжмиҙең матурлыҡты интуитив кимәлдә һиҙемләүҙән ысынбарлыҡты аңлы рәүештә эстетик үҙләштереүгә күсеү осоро, Миңештелә ете йыллыҡ мәктәпте тамамлап, Өфөләге «Востоксталь» рабфагына уҡырға ингәс башлана. Ун етеһен тултырып, ун һигеҙе менән барған, йырға, музыкаға һәүәҫ, моңға бай егеткә баш ҡалала киң мөмкинлектәр асыла. Уның үҙ һүҙҙәренә ҡарағанда, бер бүлмәлә

ҡырҡлап кеше йәшәгән рабфактың дөйөм ятағы кинотеатрҙарҙан, республика китапханаһынан, шуның кеүек башҡа мәҙәни-ағартыу үҙәктәренән алыҫ булмаған. Тирә-йүндә хөкөм һөргән ошондай мөхит Хәбибназарға тыумыштан бирелгән тойомлау сифаттарының аҡрынлап ҡына эске бер талапҡа әйләнә барыуында үҙенең ыңғай ролен уйнамай ҡалмағандыр, моғайын.

Мөмкинлектәр асылыу, яңы шарттар тыуыу, һис шикһеҙ, һәйбәт күренеш. Ләкин уларҙан тулы файҙаланыу өсөн теләк тә, тырышлыҡ та, түземлек тә кәрәк бит әле. Уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарында, белемгә һыуһап, ауылдан ҡалаға килгән йәштәргә бындай теләкте лә, тырышлыҡты ла, түземлекте лә үтескә алаһы булмаған. Быға Хәбибназар уҡыған шул уҡ рабфак миҫалында ла ышанырға мөмкин. Унда техник йүнәлеш өҫтөнлөк итһә лә, арала әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, сәнғәткә тартылған уҡыусылар ҙа байтаҡ ҡына булған. Улар әҙәби түңәрәктәргә йөрөгәндәр, шағирҙар, яҙыусылар менән өсрашҡандар, ҡайһы берәүҙәре үҙҙәре лә ҡәләм тибрәтеп ҡараған. Шул ҡәләм тибрәтеүселәр араһында Миңеште егете Хәбибназар ҙа булған.

Рабфакты тамамлағас, Хәбибназар Нәжметдинов, «блюмингтар төҙөүсе» инженерҙар әҙерләй торған техник вузға түгел, ә Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетына йүнәлә. Ғәжәпләнерлек бер нимә лә юҡ бында. Сөнки мәктәптә уҡыған саҡта уҡ уның мотлаҡ әҙәбиәт юлынан китәсәге көн кеүек асыҡ булған – уҡытыусылары уға тап ошо юлды юраған. Һуғыш алды йылдарында Назар Нәжмигә әйләнгән Хәбибназарҙың республика баҫмаларында тәүге шиғырҙары һәм хикәйәләре күренә башлауы ла әллә ни ғәжәпһенеү уятмай. Ә бына пединститутта уҡығанда уға тормошто эстетик яҡтан танып белеүҙең яңы серҙәре асыла барыуы – бәхәсһеҙ. Тик, шуныһы йәл, һуғыш ғәрәсәте был серҙәргә төшөнөүҙе бер аҙға тотҡарлап тора – өсөнсө курс өсөн имтихандарҙы биреп бөтөргәс, уны армияға алып китәләр. Һуңыраҡ, үҙенең автобиографик яҙмаларында, ул былай тип хәтерләр:«Һуғыш алды…Һуғыш ваҡыты… Һуғыштан һуң… Беҙҙең быуын кешеләренең ғүмерен һуғыш ҡайһылай төрлө-төрлө дәүерҙәргә бүлде».

Эйе, ҡан ҡойғос ҡәһәрле һуғыш Назар Нәжмиҙең ижадын бер аҙға, бәлки, тотҡарлап та торғандыр, ләкин туҡтата алмаған. Улай ғына ла түгел, һуғыш ваҡытында уның ысынбарлыҡты тойомлау ҡеүәһе уғата ла арта һәм уғата ла киңәйә. Башта үҙәк гәзит биттәренән көн һайын тип әйтерлек ағылып торған йән өҙгөс рәсми хәбәрҙәр аша, һуңыраҡ иһә үҙ

күҙҙәре менән күреп, донъяның ал да гөл булмағанлығына, унда батырлыҡ менән ҡурҡаҡлыҡтың, гүзәллек менән әшәкелектең, дуҫлыҡ менән дошманлыҡтың, әхлаҡлылыҡ менән әхлаҡһыҙлыҡтың,дөрөҫлөк менән ялғанлыҡтың, азатлыҡ менән тоҡонлоҡтоң, төҙөү менән емереүҙең һәм шундай башҡа бик күп ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың йәнәш йөрөүенә төшөнә ул.

Һуғыштың тәүге йылында йәш шағирҙы бөтә йөрәктән тетрәткәне – Зоя Космодемьянскаяның фашистар тарафынан дар ағасына аҫып үлтерелеүе хаҡында бөтә ил буйлап йәшен тиҙлегендә таралған хәбәр булғандыр, моғайын. Ун һигеҙ йәшлек был партизанканың батырлығын данлап, шығыр яҙыу теләге тыуа шағирҙа. Ләкин ул әлегә тормошҡа ашмай ҡала – күңел түрендә бөрөлөнгән шығырҙы тыуҙырыу өсөн «оҫконваҡиға» (Назар Нәжмиҙең билдәле татар шағиры Хәсән Туфан ижадына бәйле әйтелгән һүҙбәйләнеш) етеңкерәмәгәндер, күрәһең. Тик Зояның ҡаһарманлығы ғүмер буйы тынғылыҡ бирмәй уға. Ниһайәт, ҡырҡ ике йылдан һуң, был ҡаһарманлыҡ «Ғүмерлек йыр» тип аталған поэмала кәүҙәләнеш табаҫаҡ.

Һуғыштың тәүге йылдарында Назар Нәжмиҙе ситләберәк осоп йөрөгән илһам ҡошо уның инбашына һуғыштың һуңғы осоронда – Көнбайыш Европа илдәре буйлап атлағанда килеп ҡуна. Һанаулы ғына ваҡыт арауығында ул егермеләп шығыр яҙа. Күләмдәре буйынса улар ифрат йыйнаҡтар, яңғырашҡары менән һуғышҡа тиклем яҙылғандарҙан күпкә айырылалар. Бында уларҙың береһенә генә – «Ҡанатлы кыҙ» тигәненә генә туҡталып китәйек. Был шығырҙы уҡығанда беҙҙең күҙ алдына оло юл сатында иге-сиге күренмәгән хәрби техника хәрәкәтен яйға һалып тороусы йәш кенә бер һылыуҙың мөләйем образы килеп баҫа. Ул ҡайһы бер кинофильмдарҙа кәүҙәләндерелгән шундай уҡ һылыуҙың һынын хәтергә төшөрөп ҡуя. Һылыуҙың башында – пилотка, өҫтөндә – һалдат гимнастёркаһы һәм юбка, аяғында – кирза итек, билендә – ҡыҫып быуылған ҡайыш, ике ҡулында – ал һәм һары төҫлө ике флаг. Юл хәүефһеҙлеген тәьмин итеүсе ошо ҡыҙҙың ҡул хәрәкәттәрен автор ҡанат ҡаҡҡан ҡошҡа оҡшата. Шулай итеп, тирә-йүнде һуғыштың ҡара һөрөмө баҫып алғанда ла, шағир төшөнкөлөккә бирелмәҫкә тырыша, гүзәллектең бөтә нәмәһен дә көслөрәк булыуын иҫбатлай.

Назар Нәжмиҙең ысынбарлыҡты эстетик үҙләштереү юлында яһаған иң ырамлы аҙымы һуғыштан һуңғы йылдарға тура килә, әлбиттә. Үҙ теләге менән хәрби хеҙмәттән бушатылғас, ул, ашҡынып, алыҫ ерҙәрҙән туған Өфөһөнә ҡайтып төшә һәм пединститутта өҙөлөп ҡалған

уҡыуын дауам итә. Уҡыу йортон уңышлы тамамлағас, башта «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә, унан һуң «Әҙәби Башҡортостан» журналында эшләй.Ошо мәлдә башлап яҙыусыларҙың редакцияға килгән, гәзит-журналдарҙа баҫылып сыҡҡан шиғырҙарына тәнҡиди күҙәтеүҙәр яһай, экрандарға сыҡҡан яңы кинофильмдарға, баш ҡала сәхнәләрендә барған спектаклдәргә, Башҡортостандың һәм күрше Татарстандың арҙаҡлы артистары ҡатнашлығында Өфөлә күрһәтелгән концерттарға рецензиялар яҙып баҫтыра. Илленсе йылдар башында Башҡорт дәүләт академия драма театрының директоры вазифаһын да үтәп ала. Һуғыш ваҡытында ябылып торған «Һәнәк» журналын яңынан тергеҙеүҙә әүҙем генә ҡатнаша һәм бер нисә йыл дауамында уның мөхәррире булып тора. Шулай ҙа был осорҙа Назар Нәжми башҡарған вазифаларҙың иң ҙурыһы, иң яуаплылыһы һәм бик тә ҡатмарлыһы – Башҡортостандың яҙыусылар берлеген етәкләү булғандыр, моғайын. Ошо һынауҙарҙы намыҫына тап төшөрмәйсә үтеп,алтмышынсы йылдар ахырында шағир күпте күргән, күпте белгән, киң ҡарашлы шәхес дәрәжәһенә күтәрелде. Донъяға киң ҡарашлы ижад кешеһенең эстетик аңы ла торған һайын киңәйә барҙы.

Назар Нәжмиҙең эстетикаһын, эстетик ҡараштарын (әлегә шартлы рәүештә генә) тематик төрҙәргә бүлеп өйрәнеү маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр. Шундай темаларҙың иң көслөһө һәм иң тәрәне – үҙеңде йәнең-тәнең, бөтә йөрәгең һәм ҡан тамырҙарың менән тыуған ереңдең, тыуған төйәгеңдең, тыуған илеңдең, йәшәгән урыныңдың айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тойоу һәм улар менән сикһеҙ ғорурланыу. Был тойғо шағирҙы йәштән үк биләп ала ла ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем оҙата бара. Ҡырҡынсы йылда, мәҫәлән, ул «Ауыл эскиздары» тип аталған шәлкем яҙып баҫтыра. Шәлкемгә ингән шиғырҙарҙың бөтәһе лә тип әйтерлек йәшлек романтикаһы менән һуғарылған. Шулар араһында «Һаумы, ауылым!» тигәне айырылыбыраҡ тора. «Һәр һуҡмағың һинең, һәр боролмаң, һәр мөйөшөң таныш, тыуған ер!» тигән юлдар менән асыла ул. Туҡһан бишенсе йылда яҙылған «Миңеште шыршылары» тигән шиғыр иһә бындай юлдар менән ябыла:

Дим буйында, өй артымда
Миңеште шыршылары.
Улар менән күңелем дә,
Донъям да йырлы әле.

«Һаумы, ауылым!» менән «Миңеште шыршылары» араһында – ярты быуаттан ашыу ижади ғүмер. Ошо дәүерҙә Назар Нәжми үҙенең тыуып-үҫкән ере, оло һәм кесе Ватаны менән ғорурланыу тойғоларын белдергән бик күп шиғырҙар ижад итте. Бында уларҙың ҡайһы берҙәрен һанап китһәк, һис тә яҙыҡ булмаҫ:«Йөрәгемә яҡын бары ла» (1947), «Тыуған ҡалама йыр» (1949), «Уйланыуҙар» (1955), «Тыуған ил тураһында һүҙ» (1957), «Мин китмәксе булдым…» (1959), «Тыуған ауылыма» (1965), «Ожмах икән…» (1968), «Әпәй, ҡояш» (1969), «Мин дә ҡалам…» (1970), «Тыуған ауылыма тағы бер һүҙ» (1970), «Ватан» (1971), «Батша ауылым» (1973), «Һинең ниндәй улыңмын мин?» (1975), «Атай йорто» (1977), «Башҡортостан» (1978), «Ярай әле ерҙә һағыныу бар» (1983), «Бер ғүмер етмәй икән» (1984), «Тыуған төйәгемә» (1985), «Тыуған яғыма йыр» (1985), «Ауыл көйө» (1986), «Туған ярҙар» (1989), «Милли йәнем» (1989), «Йөрөү» (1991), «Аҡ шишмә» (1994), «Арғымаҡ» (1994) һ.б.

«Ауыл эскиздары»нан һуң ете йыл үткәс, Назар Нәжми тағы бер шәлкем яҙасаҡ. Уныһы «Кайтыу» тип атала. Күләме яғынан ҙур түгел– ни бары өс кенә шиғырҙы берләштерә. Шуларҙың тәүгеһендә, «Теләк» тип аталғанында, «окоптарҙа аунап, тиргә батып, саңлы, ауыр һуғыш юлдарын» үткән, күңелендә «тыуыр йырҙар» йөрөткән, ә хәҙер инде, һуғыш тамамланғас, тыуған ерен, яҡын дуҫтарын ғына түгел, тыуыр йырҙарын да һағынып, тыуған иленә ҡайтыусы яугир шағирҙың һыны кәүҙәләндерелгән. «Һау бул, Веймар…» тигән икенсе шиғырҙа иһә шағирҙың эстетикаһы туранан-тура асып һалынған. Ижадтары донъя күләмендә танылыу тапҡан Гёте менән Шиллерҙың , ҡаланы бомбаға тотҡанда емерелмәй ҡалған һәйкәленә мөрәжәғәт итеп, автор, «неҙҙең һәйкәл иҫән ҡалған кеүек… исемегеҙ ғүмергә ҡалыр күңелендә минең халҡымдың!», тигән ышанысын белдерә һәм, шулай итеп, ысын сәнғәттең үлемһеҙ икәнлегенә ишара яһай. Шәлкемдәге «Йөрәгемә яҡын бары ла» тип аталған өсөнсө шиғырҙы тыуған ереңдең гүзәллеген, күркәмлеген тойоп, уның менән ихлас күңелдән ғорурлана белеүҙең матур бер өлгөһө, тиергә була:

Башҡа бәхет миңә кәрәк түгел –
Аяҡтарым баҫа был ергә!
Аҡҡош һыуһыҙ тора алмаған кеүек,
Мин зарығып йөрөнөм сит илдә.

Ҡырҙар –
Минең тәпәй баҫҡан ерҙәр –
Хыялдарҙан иркен киңлеге!
Ниндәй һуң көс,
Ғәйрәт һулай бында,
Ҡайҙан тыуған, ҡайҙан был тиклем?

Назар Нәжмиҙең һуғыштан һуңғы поэзияһында тыуған ергә, тыуған төйәккә тоғролоҡ һәм мөхәббәт тойғоһо уның ауыл темаһына бәйле шиғырҙарына ғына ҡайтып ҡалмай, әлбиттә. Был төшөнсәләрҙең мәғәнәһе һәм сиктәре шиғырҙан-шиғырға киңәйә һәм тәрәнәйә бара. Әйтәйек, утыҙ бишенсе йылда, арҡаһына юл тоҡсайы аҫып, белем серҙәренә төшөнөү ниәте менән ауылдан ҡалаға килгән егеткә, байтаҡ ғүмер үткәс, Өфө лә тыуған ҡалаһына әүерелә һәм ошо ҡалаға арнап яҙған йырында ул үҙенең йылы тойғоларын һәм йөрәк түренән сыҡҡан рәхмәт һүҙҙәрен бындай юлдар аша белдерә:

Тыуған әсә улын оҙатҡандай,
Киткән саҡта ҡарап ҡалаһың.
Ҡайтҡан саҡта, һин алыҫтан күреп,
Косағыңа тартып алаһың.

«Уйланыуҙар», «Тыуған ил тураһында һүҙ», «Башҡортостан», «Ватан» тигән шиғырҙарҙа шағирҙың тирә-йүнде тойомлауһиҙемләү даирәһе уғата ла киңәйә. «Уйланыуҙар»ҙа, мәҫәлән, тыуып-үҫкән һәм ғүмер иткән еренең матурлығына һоҡланып, ул былай ти:

Ер йөҙөндә – бары ла минең өсөн,
Тыуған ерҙең мин дә бер улы.
Ғәжәп бер ни ҙә юҡ, ләкин бәхет –
Шундай ерҙең улы булыуы.

«Тыуған ил тураһында һүҙ»ҙә был фекер артабан үҫтерелә. Ысынбарлыҡтың ифрат бай күренештәрен һүрәтләү аша тыуған иленә булған мөнәсәбәтен белдергәндә, шағирҙың эстетика ҡанундарына таянып эш иткәнлеге күҙгә бәрелеп тора:

Мин уныҡы йәнем-тәнем менән,
Уның өсөн ҡан да, һулыш та.
Һөйәм уны һәм төрлөсә һөйәм:
Йәйе, ҡышы, яҙы булып та.

«Ватан» тигән шиғырҙа иһә автор был төшөнсәнең анатомияһын ашыҡмайса ғына, еренә еткереп, энәһенән-ебенә тиклем тикшергән ғалим шикеллерәк күҙ алдына килеп баҫа. Һәм уның күҙәтеүҙәре, шул күҙәтеүҙәрҙән сығып яһалған һығымталары менән килешмәй сара юҡ:

Һүҙҙәр йөрөй, һорау бирәләр:
«Нимә Ватан? Ватан нимә?» – тип.
Бер ҡараһаң , һорай кеүектәр:
«Әсәй нимә? Атай нимә?» – тип.
Ватан, – тимен, – әсәм тыуған ер,
Ватан, – тимен, – атам тыуған ер,
Ғүмер буйы минең аңымдан
Һәм ҡанымдан сыҡмай торған ер.

Ә бына «Башҡортостан» – Назар Нәжмиҙең эстетик һиҙгерлеген дә, эстетик теүәллеген дә бөтә тулылығы менән сағылдырған шиғыр. Был әҫәрендә шағир тыуып-үҫкән һәм ғүмер иткән еренең матди һәм рухи байлыҡтарын да, тәбиғәтенең гүзәллеген дә иҫ киткес матур сағыштырыуҙар ярҙамында һүрәтләп, хәтерҙә оҙаҡ һаҡланырлыҡ йәнле образ тыуҙырған:

Башҡортостан! Һин икмәкле тупраҡ,
Йәшел урман, болон, тау, дала.
Йәнһеҙгә – йән, йәмһеҙгә йәм биргән
Һин ут һәм һыу, һауа һәм дауа.

Шиғырҙы ослап ҡуйған «Мин – ғүмергә һиңә табынған, ерем-һыуым, Башҡортостан!» тигән юлдарҙа ла бер ниндәй ҙә яһалмалыҡ һиҙелмәй.

Йә булмаһа, «Башҡортостан»дан егерме йыл элегерәк яҙылған «Мин китмәксе булдым…» тигән шиғырҙы алып ҡарайыҡ. Ул үҙенең төҙөлөшө менән үк иғтибарҙы тартып тора. Йәнәһе,ижадта иркенлек эҙләгән шағир, тыуып-үҫкән һәм ғүмер иткән ерҙәренән башын алып,

Кавказ яҡтарына күсергә булған. Шул саҡ ҡарт Урал телгә килә һәм шағир-улына дуҫтары йәшәгән ят ергә алып китер өсөн төрлө бүләктәр тәҡдим итә башлай. Бәхеткә күрә, ҡарт Уралдың аҡыллы һүҙҙәрен мейеһенә һеңдергән шағир үҙенең «еңел-елпе» уйынан кире ҡайта, сөнки уға тыуған ере бөтә нәмәнән дә ҡәҙерлерәк. Һәм ошо тойғоһон ул түбәндәге юлдар аша белдерә:

… Тыуған ерем, шундай йомартһың һин –
Мин күтәреп барын китә алмам.
Һин биргәнде ғүмерем буйына ла
Шиғыр итеп яҙып бөтә алмам.

Эй тыуған ер, ғүмер-ғүмергә
Үҙең илһам һәм йыр шағиргә.

Шулай ҙа Назар Нәжмиҙен гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған шиғырҙары араһында тыуған төйәгенә, тыуған яғына, тыуған ауылына арналғандары күберәк урын биләп тора. Уларҙың исемдәре өҫтә телгә алынғайны инде.Шуларҙың бер нисәһенә туҡталып китһәк, зыян итмәҫ. «Тыуған ауылыма» тигән шиғыр, мәҫәлән, тәү сиратта үҙенең тышҡы ябайлығы, ләкин шул уҡ ваҡытта йөкмәткеһенең тәрәнлеге менән айырылып тора. Заманында был шиғыр рус теленә лә бик матур итеп ауҙарылғайны һәм шағир уны шул телдә сыҡҡан йыйынтыҡтарына ла бик теләп индерҙе, шикелле. Ысынлап та, ҡайһы ғына яҡтан (шул иҫәптән, эстетик талаптарҙан сығып та) ҡараһаң да, шиғыр һис кенә лә һүҙ тейҙерерлек түгел. Унда бөтәһе лә ябай, бөтәһе лә тап Нәжмисә. Автор тыуған ауылының һәм уны уратып алған тирә-йүндең артыҡ ҙур маҡтауҙарға һәм маҡталыуҙарға дәғүә итмәгән ландшафтын тәфсилләп һүрәтләй ҙә, һүҙен, уға ғына хас тыйнаҡлыҡ менән, былай тип йомғаҡлап ҡуя:

Бөтәһе лә булғанынса ғына,
Ҙур даның да илгә сыҡмаған.
Ил-төйәгем, мин дә һинең кеүек,
Бар булғаным һиңә оҡшаған.

Биш йылдан һуң Назар Нәжми «Тыуған ауылыма тағы бер һүҙ» тигән шиғырын яҙасаҡ. Ә уға тиклем «Ожмах икән…», «Әпәй, ҡояш»,

«Мин дә ҡалам…» тигәндәре донъяға киләсәк. Уларҙың бөтәһендә лә шағирҙың ғүмере буйына тыуған еренә тоғролоҡ һаҡлауы, уның менән хаҡлы рәүештә ғорурланыуы күҙгә бәрелеп тора. Әгәр тәүгеһендә ул «Бәндә үҙе уйлап тапҡан ожмахын да, тамуғын да ‹…› Тыуған ерем ожмах түгел,ә шулай ҙа ожмах икән» тигән ҡарашы менән уртаҡлашһа, икенсеһендә иһә, үҙен тыуған еренең әпәйенән ҙур ҡуйһа, быныҡ өсөн уға ләғнәт төшәсәген таный.Өсөнсөһөндә инде,көҙ еткәс йылы яҡтарға осоп китмәйенсә,үҙебеҙҙә ҡышларға ҡалған ҡоштарға мөрәжәғәт итеп, шағир былай ти:

Ҡоштар, ҡоштар! Һеҙҙең менән бергә
Мин дә ҡалам – китер урыным юҡ.
Миңә лә бит тыуған ерем ғәзиз,
Төрлө ерҙә һайрар моңом юҡ.

«Тыуған ауылыма тағы бер һүҙ»гә килгәндә иһә, ул, Н. Нәжмигә хас булғанса, бик ыҡсым шиғыр: дүртәр юллы ике һәм ике юллы бер строфанан тора. Шиғырҙағы:

Һиңә ҡайтһам, кемлегемде онотоп,
Керәм алтын хыял-һарайға,
Әйләнәм дә куям әлеге шүл
Катыҡ ашап үҫкән малайға.

Һин йәшәгәс, мин дә ғүмерлемен,
Һин булғанда, көн дә шиғырлымын, –

тигән юлдарға төрөлгән мотив, Назар Нәжмиҙең бер нисә йылдан һуң ижад иткән «Батша ауылым» исемле шиғырында ла яңғырап китә:

Береһен дә батша төҙөтмәгән,
Бөтәһе лә бында улаһы.
Шағир булып тыумаһаң да, бында
Һин барыбер шағир булаһың!

Ләкин «Батша ауылым»дың йәлеп итеү көсө бында ғына түгел. Уны «Башҡортостан» тигән шиғырға инеш һүҙе тиергә була. Уларҙың икеһендә лә һүҙ бер-береһенә яҡын торған тема тураһында бара: беҙҙең

гүзәл тәбиғәтебеҙ, ата-бабаларҙан ҡалған ер-һыуыбыҙ, йәйрәп ятҡан йәшел урмандарыбыҙ, икһеҙ-сикһеҙ баҫыу-ҡырҙарыбыҙ, сәскәгә күмелгән болондарыбыҙ, намыҫлы хеҙмәттәре менән байлығыбыҙҙы арттырыусы алтын ҡуллы һәм алтын йәнле кешеләр. Айырма тик шунда: «Батша ауылым»да шағирҙың иғтибар үҙәгендә үҙенең Миңештеһе торһа, «Башҡортостан»да иһә бөтә республика күҙ уңында тотола.

Әйткәндәй, Назар Нәжми шиғриәтендә уның тыуған ауылының атамаһы йыш ҡына осрай. Ләкин ул тиктомалға, ирекһеҙҙән генә шиғырҙан-шиғырға күсеп йөрөүсе ябай атама түгел. Киреһенсә, был образ әҫәрҙән-әҫәргә тулылана, сағыулана бара, әкренләп хәтер төпкөлөндә хаҡлы рәүештә үҙ урынын яулаған географик төшөнсәгә әүерелә. Шуға күрә, исеме аталмаған осраҡта ла, ҡайһы ауыл тураһында һүҙ барғанлығы беҙҙә һорау тыуҙырмай башлай. Шундай шиғырҙарҙың икеһенә туҡталып китһәк, насар булмаҫ. Уларҙың береһе – «Миңеште», икенсеһе – «Нишләр инең?» тип атала. Етмешенсе йылдарҙың ахырында, һикһәненсенең баштарында яҙылған был шиғырҙарҙы алтмышынсы йылдар уртаһына ҡараған «Тыуған ауылыма» менән сағыштырһаҡ, шағирҙың эстетик аңында ниндәй үҫеш-үҙгәрештәр булып торғанлығы күҙгә асыҡ сағылыр.

Башта шул мәғлүм булһын: «Тыуған ауылыма»ны ослап ҡуйған «Бар булғаным һиңә өҡшаған…» тигән һүҙҙәр «Миңеште»гә эпиграф итеп алынған. Тимәк, «Миңеште»не «Тыуған ауылыма»ның үҙенсә бер дауамы шикеллерәк тә ҡабул итергә буласыр. Ләкин, дауамы булһа ла, улар араһындағы етди айырманы ла шәйләмәй мөмкин түгел. Мәҫәлән,«Тыуған ауылыма»ла шағир ниндәйҙер билдәлелеккә, ҙур дәрәжәләргә дәғүә итмәй, үҙенең хис-тойғолары, уй-фекерҙәре менән тыныс ҡына,асмандарға ашмайса ғына бүлешә. «Миңеште»лә иһә уның тауышы бер аҙ үҙгәрә, көрәйә төшә, талапсанираҡ яңғырай. Быныңүҙ сәбәптәре бар. Шуларҙың береһе – оло юлдан ситтәрәк ятҡан өсөн, килгән-киткән кешеләр шағирҙың тыуған ауылын, йәнәһе, тиҫкәре яҡ тип атағандар икән. Холҡо-фиғеле, ғөрөф-ғәҙәте, бөтә тәбиғәте менән үҙен Миңештенән, миңештеле итеп тойған шағир был баһа менән килешә алмай, әлбиттә. Шуға күрә яуапты ла ҡаты ғына итеп ҡайтара:

Бар донъямды минең күргә,
Үтеп кенә китеү мөмкин түгел,

Кәрәк миңә боролоп керергә
Йә булмаһа төбәп килергә.

Сәбәптәрҙең икенсеһе төпкөлдәрәк ята. Уны шиғырға төрөп бирелгән күсмә мәғәнәнән эҙләргә кәрәк. Өҫтә килтерелгән юлдарҙан күренеүенсә, Миңеште хәҙер – ябай бер ауыл ғына түгел, ә күренекле шағир тыуып үҫкән төйәк. Шуға күрә, шағирҙың ижадына өҫтән-мөҫтән генә ҡарарға ярамаған шикелле, уның тыуған ауылына ла үткәндә-һүткәндә түгел, ә ҙур юлдан боролоп, төбәп килергә кәрәк.

«Нишләр инең?»дә был идея артабан үҫтерелә.Шиғырҙың өҫтәмә атамаһы ла (йәйәләр эсендә «Тыуған ауылыма тағы бер һүҙ» тиелгән) шуға ишара.Тыуған ауылының статусын уғата ла күтәреү өсөн шағир бик уңайлы һәм ҡыҙыҡлы алым уйлап тапҡан. Тәүге строфала уҡ «Әгәр һиндә Пушкин тыуған булһа, нишләр инең икән,Миңеште?»тигән һорау ҡуя ла, шиғырҙың аҙағына яҡынлашҡанда үҙенә-үҙе яуап та ҡайтара:

О һин, хыял! Әй, мин – ярты аҡыл!
Нигеҙһеҙ һуң хыял буламы?!
Манаранан аҙан әйткән ерҙә
Пушкин тиклем Пушкин тыуамы?!

«Нигеҙһеҙ һуң хыял буламы?!» тигән һөйләм һорау тыуҙырмай ҡалмай, әлбиттә. Нигеҙһеҙ хыял булмағас, шиғырҙың авторы, ваҡыты еткәс, Миңештенең дә «Шиғыр Мәккәһе»нә әйләнеп китеренә өмөтөн өҙмәгәндер, бәлки? Туҡайҙы, Ғафуриҙе, Таҡташты биргән ауылдарҙың исемдәре лә юҡҡа ғына телгә алынмағандыр. Әлегә шуны әйтергә була: Н. Нәжмиҙең тыуған ауылына, тыуған яғына арнап яҙған шиғырҙары араһында «Нишләр инең?» үҙенең йөкмәткеһе менән айырылып тора.. Күрер күҙгә юмористик шиғыр кеүек тойолһа ла, унда бик күп ер-һыу атамалары килтерелгән. Ләкин был атамалар уҡыусыны һис тә битараф ҡалдырмаҫ, сөнки улар эстетик зауыҡ менән тасуирланған. Ошо атамаларға таянып, шағир тыуып-үҫкән төйәктең топонимик картаһын да төҙөргә булыр ине, хатта.

Был уйланыуҙарҙың инеш өлөшөндә әйткәнебеҙсә, эстетика гел гүзәллекте, гел матурлыҡты һүрәтләүҙән генә тормай – уның ҡапма-ҡаршылыҡлы хис-тойғоларҙы белдергән категориялары ла бар. Был үҙенсәлек Назар Нәжми поэзияһында ла сағылыш тапмай ҡалмай. Ошо йәһәттән «Тыуған төйәгемә» тигән шиғыр айырыуса көслө яңғырай. Һикһәненсе йылдар уртаһынан һиҙелеп ҡәҙере китә башлаған тыуған төйәгенең аяныслы яҙмышын һүрәтләү өсөн шағир буяуҙарҙы мул ғына ҡулланған. «Ҡайҙа баҡма урман, болондарың көйә төшкән келәм

шикелле», тигән борсолоуын белдерә ул, тыуған төйәгенә мөрәжәғәт итеп. Тыуған төйәккә ата-бабаларҙан ҡалған мөхәббәтте ҡайтарыуҙы талап итеп, бындай фекере менән дә уртаҡлаша: «Ҡайҙа булдығыҙ һеҙ, тыуған ерҙең ҡәҙерен белгәндәр? Кем һуң хужа хәҙер? Үҙегеҙме, әллә хужа килгән-киткәндәр?».

Ләкин Н. Нәжмиҙең тыуған ауылына,тыуған төйәгенә бағышланған шиғырҙарында ыңғай эмоция – яҡты уйҙар, матурлыҡ, гүзәллек хистәре өҫтөнлөк итә. Әгәр «Ярай әле ерҙә һағыныу бар»ҙа ул «Күреп кенә туя алырлыҡмы тыуған ерҙе, тыуған ҡырҙарҙы » тип һоҡланһа, «Бер ғүмер етмәй икән»дә шул һоҡланыу арҡаһында килеп тыуған үкенесен дә йәшермәй:

Тыуған ерем, ят матурлыҡ
Ҡаныңа һеңмәй икән.
Ҡанға һеңгәнде йырларға
Бер ғүмер етмәй икән.

Назар Нәжми өсөн тыуған ер, тыуған төйәк – матурлыҡҡа, гүзәллеккә табыныу ҡағбәһе генә түгел, бәлки илһам сығанағы булып та хеҙмәт итә, уға йәшәү дәрте һәм көс өҫтәй, ижадҡа ҡанатландыра. «Капҡалар» (1960) поэмаһының инеш өлөшөндә, мәҫәлән, ул «Йыр алырға ҡайтам ауылыма, уңған йомарт ер ҙә юҡ кеүек» тигән уйын асыҡтан-асыҡ ярып һала ла, әҫәрҙең аҙағына яҡынлашҡанда иһә «Тыуған яғым, ниндәй булһам да мин, мин барыбер һиңә бурыслы» тип танырға мәжбүр. «Дуҫ тураһында ун бер йыр» (1966–1970) поэмаһында ла ошондайыраҡ идея яңғырап китә. Әҫәрҙең экспозицияһы бындай юлдар менән асыла:

Ауылымдың егерме бер,
Егерме бер шишмәһе бар.
Бөгөн минең егерме бер
Шишмәнән йыр эсәһем бар,
Шул йырҙарҙы күңелдәрҙән
Күңелдәргә һибәһем бар.

Поэманың геройҙары менән хушлашыр ваҡыт еткәс, «Йырҙарымдың һәр саҡ бер осо тыуған ергә ҡалды бәйләнеп» тигән уй-хистәре менән уртаҡлаша автор. Был хистәр бер аҙ моңһоуыраҡ та яңғырағандай,

ләкин барыбер ҙә шағирҙың күңел көҙгөһөнән бөркөлөп торған яҡтылыҡты шәйләмәй мөмкин түгел.«Донъя матур, матур йәшәргә тик һоҡлана белгән кешегә» тигән юлдар иһә Назар Нәжми эстетикаһына тағы бер нур өҫтәй.

Назар Нәжми эстетикаһының асылын гуманлы идея тәшкил итә. Шартлы рәүештә бынығын шағир эстетикаһының икенсе үҙенсәлеге йә икенсе төрө, тиһәк тә була. Гуманлыҡ идеяһы башлыса уның поэмаларында асығыраҡ сағыла. «Баҫып торам дар ҡуйылған ерҙә – ә бит ниндәй ғүмер өҙөлгән? Ә ул ғүмер елдән килмәгән бит…» тигән әрнеүле хистәре менән уртаҡлаша шағир «Ғүмерлек йыр» (1982–1983) поэмаһында, Зоя Космодемьянскаяның аяныслы яҙмышы хаҡында уйланып. Зояның батырлығын да, исемен дә онотҡан ҡайһы берәүҙәргә үпкәһен дә йәшермәй ул. Ләкин шуныһы мөһим: кешелеклек рухын һәр саҡ алға һөргән мәрхәмәтле шағир, ни рәүешлелер хәтерҙәре юйылған бәндәләр алдында юғалып ҡалмай – тәбиғәттән бирелгән әсәлек бурысын үтәргә өлгөрмәгән Зояға һәм уның шикелле йәшләй һуғыш яландарында баштарын һалған ҡыҙҙарға мәдхиә йырлай:

Әсәлектән мәхрүм ителгән ҡыҙ –
Заман нуры – йәш нур, һүнмәҫ нур.
Ер-әсәнән тыуған – Йыр-әсә ул,
Ул – Йыр-Әсә, тынмаҫ, ҡурмәҫ йыр.

Гуманлыҡтың антонимы – гуманһыҙлыҡ, вәхшилек. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәне аңлатҡан был ике төшөнсә әлегә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәнәш йөрөй, береһе икенсеһенән айырым йәшәй алмай. Назар Нәжми эстетикаһында гуманлыҡтың нигеҙен бер-береңде ихтирам итеү, бер-береңә иғтибарлы булыу һәм шуның кеүек башҡа бик күп ыңғай сифаттар тәшкил итһә, гуманһыҙлыҡтың тамырҙарын иһә кешенең ҡәҙерен белмәү, уның ғүмере менән иҫәпләшмәү, ерҙәге урынына һәм тәғәйенләшенә битарафлыҡ күрһәтеү кеүек тиҫкәре күренештәрҙән эҙләргә кәрәк.

Ошо һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында йә тегендә, йә бында илдәр һәм халыҡтар араһында ҡан ҡойошло бәрелештәр ҡабатланып ҡына тора, дөрөҫөрәге – уларҙың йүнләп тынғаны ла юҡ. Һуғыш-ҡан ҡойош, Н. Нәжми күҙәтеүенсә, гуманһыҙлыҡтың иң ҡәһәрле күренеше. Шуға ла «Ғүмерлек йыр»ҙа уны әсәлектән мәхрүм ителгән Зоя яҙмышы, ә «Тере ҡан»(1986) поэмаһында ҡаланы дошман самолёттары утҡа тотҡанда

күкрәк балаһын юғалтҡан Зифа яҙмышы тетрәндергән икән, һис тә ғәжәп түгел. Йәш әсәнең һөтө, яңы тыуған балаһына тәғәм булаһы урынға, ҡан булып ағыуы – ер йөҙөндәге гуманһыҙлыҡтың уғата ла юғарыраҡ нөктәһелер ул:

Беркөнлөктәр, өскөнлөктәргә лә
Һуғыш – һуғыш ине… Ҡанһыҙлыҡ…
Зифа – әсә, үҙе әсә түгел,
Күкрәк һөтө аҡты ҡан булып.

Гуманһыҙлыҡ–кешелекһеҙлек, шәфҡәтһеҙлек, миһырбанһыҙлыҡ тигәнде аңлата. Назар Нәжмиҙең әле телгә алынған ике поэмаһы ла шул хаҡта. Уларҙың икеһендә лә донъяны сүп үләне шикелле баҫып барған кешелекһеҙлеккә, битарафлыҡҡа, рәхимһеҙлеккә, ҡанһыҙлыҡҡа ләғнәт уҡыла, ә кешелеклеккә дан йырлана. «Ғүмерлек йыр»ҙа кеше тураһында, уның асылы, кешелек сифаттары, яҙмышы, туған халҡы, туған иле, тыуған ере алдында яуаплылығы хаҡында уйланыуҙарға айырым юлдар ғына түгел, тотош строфалар бағышланған. Үҙҙәренең йөкмәткеһе, уҡыусыға тәьҫир итеү көсө менән улар Горькийҙың «Кеше – ул ғорур яңғырай!» тигән ҡанатлы һүҙҙәрен хәтергә төшөрөп ҡуя.

«Ике Зөләйха» (1984–1985) поэмаһында ла гуманлыҡ менән гуманһыҙлыҡ алыша. Бер яҡтан, илде дошмандан һаҡлау өсөн барған һуғыш Ибраһимды – аяҡһыҙ-ҡулһыҙ, Мөҙәрристе – күҙһеҙ ҡалдыра, икенсе яҡтан инһә – уларҙың Зөләйхалары иң юғары дәрәжәләге гуманлыҡ өлгөһө күрһәтәләр:

Икәүһегеҙ… Ике Зөләйха, тип
Ҡабатлайым һеҙҙең исемде.
Икегеҙ ҙә – балаларға әсә,
Миллионлаған әсә шикелле.
Ә һеҙ бына әсә генәме һуң?
Башҡасараҡ һеҙҙең әсәлек.
Тағы кемдең елкәһенә төшкән
Һеҙгә төшкән шундай хәстәрлек.

Назар Нәжми поэмаларының күпселегендә һуғыштың бына шулай ҙур афат икәнлеге, уның үҙе артынан һәр ваҡыт яуызлыҡ һәм яманлыҡ, бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәлә-ҡаза эйәртеп йөрөүе күңелде тетрәндererлек

итеп һүрәтләнә. Партизандар отрядында көрәшеп йөрөгән ун ете йәшлек берҙән-бер улының яҙ еткәс ҡар аҫтынан сыҡҡан кәүҙәһен ҡосаҡлап илаған әсәнең әсе күҙ йәшен («Әсә», 1948), партизандар хәрәкәт иткән ерҙәрҙән бик алыҫта йәшәһәләр ҙә, Ҡәюм исемле улдарының үле хәбәрен алған ата-әсәнең ҡара ҡайғыһын («Ҡайындар», 1959) ниндәй бизмәнгә һалып үлсәргә була икән? Ҙур өмөттәр бағлаған, ләкин таланты йүнләп асылып та өлгөрмәгән шағирҙың ғүмере яу яланында өҙөлөп ҡалыуы («Йыр тураһында баллада», 1962) – был нимә: гуманлыҡмы, әллә гуманһыҙлыҡмы? Хатта биш йәшлек Ансафҡа ла («Күлдәк», 1970) яғып китә бит ул үҙенең ҡара һөрөмөн һуғыш тип аталған ғәҙелһеҙлек – тап уның күлдәк туйын байрам итергә әҙерләнеп йөрөгән көндө килтереп тапшыра уларға почтальон ҡыҙ сабыйҙың атаһы яуҙа һәләк булыуы тураһындағы ҡара ҡағыҙҙы.

Әлбиттә, гуманлыҡ-гуманһыҙлыҡ проблемаһын Назар Нәжми гел һуғыш темаһына ғына таянып хәл иткән икән, тип уйлаһаҡ, бигүк дөрөҫ булмаҫ ине. «Шағир һәм шаһ» (1969–1970) тигән поэмала, мәҫәлән, бер ниндәй аҫыш-киҫеш тә юҡ, тирә-йүндә снарядтар ҙа шартламай, пулялар ҙа һыҙғырмай, бомбалар ҙа ярылмай, әммә гуманһыҙлыҡтың оятһыҙлыҡ тип аталған түбәндәрҙән дә түбәнерәк бер төрө – аҡыл яғы ла, һәләт ҡеүәһе лә самалыраҡ түрәләрҙең нисек итеп талантлы, һәләтле кешеләрҙе изеп (хатта ҡол хәленә төшөрөп) көн күреүҙәре уңышлы файҙаланылған художество саралары ярҙамында бик асыҡ һәм көслө итеп кәүҙәләндерелгән. «О ул әҙәм!.. Үҙе алла, үҙе ҡол ул» тигән һүҙҙәргә ҡайһылай тәрән мәғәнә төрөлгәнлеге хаҡында һөйләп тороуҙың әллә ни хәжәте юҡтыр бында.

«Иблес» (1973–1976) тигән поэмала иһә гуманһыҙлыҡтың башҡа төрө һүрәтләнгән. Үҙ ваҡытында проф. Ғ. Хөсәйенов был поэманы романға торорлоҡ әҫәр тип баһалағайны. Һәм ул хаҡлы. Ысынлап та, поэмала бик ҡатмарлы фәлсәфәүи ҙә, психологик та һорауҙар ҡуйылған. Кем ул кеше? Нимә ул изгелек һәм яуызлыҡ? Ни өсөн берәүҙәр изгелекте йәшәйештең бер ниндәй ҙә үлсәүгә һалып булмай торған ғәҙәти күренеше шикелле ҡабул итә, ә икенселәр яуызлыҡтан арына алмай? Быныҡ сәбәптәре нимәлә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуапты шағир бер ғаиләнең трагик яҙмышы аша табырға тырыша. Ләкин бөтә кешеләрҙе лә берҙәй ҡәнәғәтләндерерлек яуапты табыуы еңелдән түгел. Бәлки, мөмкин дә түгелдер.Сөнки кеше бөтә булмышы, айырыуса эске донъяһы менән ифрат ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы йән эйәһе. Байтаҡ сифаттар уға тыумыштан бирелә, ғаилә тәрбиәһенән килә, ә күбеһен иһә

мотлаҡ үҙен сорнап алған ысынбарлыҡтан йыя. Ул сифаттарҙың бөтәһе лә – тыумыштан бирелгәненең дә, ғаилә тәрбиәһенән килгәненең дә, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡтан йыйылғанының да – әйтеп бөткөһөҙ күп төрлө булыуын тормош үҙе дәлилләп тора. Ошо төрлөлөк «Иблес»тә лә раҫлана. Атаһы менән әсәһе тыуып үҫкән ерҙе күргә теләп, шул ил телендә шул ерҙең моңло йырҙарын ауыҙ эсенән көйләп йөрөгән өсөн генә улын сәнсеп үлтергән атаның ҡылығын башҡаса аңлатыуы ҡыйын. Был эпизод – конфликттың сиселеше генә. Конфликт үҙе иһә ғәйәт тәрәндәрәк ята: элек-электән яҡшылыҡ менән яманлыҡ, изгелек менән яуызлыҡ йәнәш йөрөйҙәр.

Назар Нәжмиҙең ун биш поэмаһы араһында «Ағым» (1983) тигәне – иң гуманлыһы һәм нур бөркөп торғаны, күңелдәрҙә яҡты хистәр, изге теләктәр уятҡаны. Тәүге юлдарынан алып, ахырына тиклем ул еңелсә юмор менән һуғарылған. Ләкин әлеге осраҡта юмор – ауыҙ тултырып, юҡ-барға көлөп ултырыу, тигән һүҙ түгел. Н. Нәжмиҙең юморы артында зур тормош хәҡиҡәте ята. Гипербола ҡоролған күренештәр ҙә осрай бында. Әммә улары ла артыҡ түгел – һәр ҡайһыһы үҙ урынында. Поэманың сюжетын тышҡы яҡтан ябай ғына күренгән, ләкин көслө рухлы, баҫалҡы хәлоҡло, тормошто сикһеҙ яратҡан, йырға ла, һүҙгә лә оста Йомағол атлы бер эшһөйәрҙең ғүмер юлы тәшкил итә. Алдына ҡуйған ижади бурысты атҡарыу өсөн, шағир бик отошло композицион алым уйлап тапҡан: бөтә хәлваҡиға бер кис эсендә, өй хужаһы менән хужабикәнең алтын туйы айҡанлы ойоштороlған мәжлес өҫтәле артында күҙ алдына килтереп баҫтырыла. Н. Нәжми был поэмаһында ла кеше проблемаһын ситләтеп үтмәгән. Ләкин, «Иблес»тән айырмалы булараҡ, «Ағым»да уны яҡшылыҡҡа ҡарағанда яуызлыҡты өҫтөн ҡуйыусы, төҙөгәнде емереүсе кеше түгел, ә изге йәнле, емергәнде аяҡҡа баҫтырыусы кеше күберәк ҡыҙыҡһындыра, уның ыңғай яҡтарын күргә һәм күрһәтергә тырыша:

Юҡ, барыбер мәрхәмәтлек көслө –
Яманлыҡтан көслө яҡшылыҡ!
Кеше көслө булмаҫ ине ерҙә,
Көсһөҙ булһа әгәр ҡаршылыҡ.

Был юлдар – эстетиканың философияға килеп ялғанышын күрһәтеп тороусы асыҡ миҫал, юғиһә: сәнғәттә ысынбарлыҡ, ул ниндәй булыуға

ҡарамаҫтан, бөтә ҡапма-ҡаршылыҡтары менән бергә, дөрөҫ һәм тулы сағылыш табырға тейеш.

Назар Нәжмиҙең ижади мираҫында сәнғәт тураһында, уның асылы һәм тәғәйенләнеше, тәрбиәүи роле, кешегә йоғонто яһау көсө хаҡында уйланыуҙар байтаҡ ҡына урын алып тора. Бынығын шағир эстетикаһындағы өсөнсө төр, тиһәк тә ярар. Иң тәүҙә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: шағир сәнғәттең бөтә төрҙәрен дә үҙ итте, уларҙың береһенә лә ситләтеп, кәмһетеп ҡараманы. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа, мәҫәлән, ул илебеҙ экрандарына сыҡҡан кинофильмдарға рецензиялар яҙыу менән мауығып алды. Артабан Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә ҡуйылған яңы спектаклдәргә ҡарата үҙ фекере менән уртаҡлашып торҙо. Музыка, һынлы сәнғәт тә уның иғтибарынан ситтә ҡалманы. Йыр тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде. «Сәнғәттең милли тәбиғилеге» (1972) тигән киң билдәле мәҡәләһендә хатта бейеүҙе лә ифрат тәрән аңлауы, ундағы һәр хәрәкәтте, аяҡ баҫыуҙы юғары талаптарҙан сығып баһалауы күренеп тора. Мәҡәлә башлыса ҡурайсы, йырсы һәм йыр сығарыусы (өҫләүсе) Ишмулла Дилмөхәмәтовҡа арналған булһа ла, унда сәнғәттең кеше тормошонда тотҡан урынына шаҡтай киң ҡараш ташланған. Мәҡәлә яҙылып дүрт йыл үткәс, Ишмулла Дилмөхәмәтовтың «Урал» (1976) поэмаһындағы төп геройҙың прототибы булып китеүе лә юҡтан ғына түгелдер.

Назар Нәжмиҙең Заһир Исмәғилев, Фәриҙә Ҡудашева, Нариман Сабитов, Арыҫлан Мөбәрәков, Роберт Заһретдинов тураһындағы мәҡәләләре лә уның шиғриәткә генә түгел, сәнғәттең башҡа төрҙәренә лә битараф булмағанлығын раҫлап торалар. Шулар араһында Роберт Заһретдиновҡа арналғаны айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә. Унда һүҙ быға тиклем сәнғәтебеҙҙең артҡы планындараҡ ҡалып килгән уйын ҡоралы – ҡубыҙ хаҡында бара. Роберт Заһретдиновты ҡумыҙсы, ҡурайсы, йырсы, өҫләүсе, гармунсы итеп күҙ алдына баҫтырыу менән бер ҡатарҙан, мәҡәләнең авторы был уйын ҡоралына, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хатта сәнғәт кешеләре араһында ла кәмһетеп ҡарау йәшәп килгәнлегенә үҙенең борсолоуын белдерә. «Үлемгә дусар ителгән ҡумыҙҙы аяҡҡа баҫтырыусы, уны халыҡ-ара сәхнәгә сығарыусы» тип атай Роберт Заһретдиновты Н. Нәжми. «Юҡ, улай ғына түгел,– тип дауам итә һүҙен шағир,– ҡумыҙҙы камиллаштырыусы ла, үҙе уйлап тапҡан төрлө ҡулайлаштырыу арҡаһында яңы, ҡатмарлаштырылған ҡумыҙ барлыҡҡа килде. Был осраҡта ул конструктор сифатында күҙ алдына баҫа. Бындай оҫта республикабыҙҙа башҡа юҡ. Ул хәҙергә – берәү».

Назар Нәжми сәнғәтте алла урынына күргән, ғүмере буйына уға йәне-тәне менән бирелгән һәм табынған ижадсы. Уның уйынса, сәнғәт – кешене бөтә яҡлап та юғары күтәреүсе, яҡшылыҡҡа рухландырыусы һәм дәртләндереүсе, яманлыҡты фашлаусы илаһи бер көс; ысын сәнғәт әҫәрҙәре – мәңгелек, улар бер ваҡытта ла ҡартаймайҙар ҙа, үлмәй ҙә, быуындан-быуынға күсеп ғүмер итәләр. «Әгәр ҙә сәнғәт кеше күңеленә ҡағылмай икән, уны тулҡынландырмай икән, тимәк, уның кәрәге юҡ, ул үлергә тейеш», тип яҙҙы Н. Нәжми Татарстандың халыҡ шағиры, Ғ. Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Илдар Юзеевҡа адресланған асыҡ хатында.

Ошондайраҡ фекерҙе Н. Нәжмизең Татарстандың тағы бер халыҡ шағиры һәм шулай уҡ Ғ. Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Ғамил Афзалға яҙған хатында ла осратабыҙ: «…художниктың иң башта үҙ-үҙенә ышаныуы, үҙенең эҫке инаныуы булырға тейеш, унһыҙ художниктың художник булыуы мөмкин түгел һәм шул уҡ ваҡытта ул үҙ инаныуына башҡаларҙы ышандыра алырға… тейеш». «Гармунсы дуҫ» пьесаһына ҡағылышлы тәнҡит тураһында уйланып, хаттың авторы «геройымдың үлемен ысын шиғриәт дәрәжәһенә күтәрә алманым», тип таный. «Ана шундай күтәрелә алмау… арҡаһында беҙҙең әҫәрҙәрҙә, бигерәк тә сәхнә әҫәрҙәре араһында, драмалар, трагедиялар бик аҙ. Тормоштағы драмалар, трагедияларҙы (улар бик күп!) сәнғәт дәрәжәһенә күтәрә алмайбыҙ», тигән уфтаныуын да йәшермәй ысын сәнғәт тураһында янып-көйөп йәшәгән Назар Нәжми.

Сәнғәткә табыныу, уның алдында үҙеңде айырыуса яуаплы итеп тойоу хисе Нәжмизең тәнҡит мәҡәләләрендә, әҙәбиәт мәсьәләләренә бәйле сығыштарында, ҡәләмдәштәренә адресланған асыҡ хаттарында ғына түгел, йыш ҡына уның әҙәби әҫәрҙәрендә лә – шиғырҙарында, поэмаларында, пьесаларында – үҙенең сағылышын таба. Ошо йәһәттән «Алёнушка» (1959) һәм «Алтмыш бер» (1979) тип аталған шиғырҙар айырылыбыраҡ тора. «Алёнушка»ның яҙылыу тарихы һәм ул әҫәре менән нимә әйтергә теләгәнлеге хаҡында шағир билдәле тәнҡитсе һәм әҙәбиәт белгесе Ким Әхмәтйәнов менән булған әңгәмәһендә бик асыҡ һәм аңлайышлы итеп һөйләп биргәйне. Алты строфанан торған был шиғырҙың һуңғыһына ниндәй мәғәнә төрөлгәнлеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтелгәйне унда. Бына ул строфа:

Уртаҡ тел юҡ беҙҙең арабыҙҙа,
Шуға, ахыры, беҙгә күңелһеҙ.

Мин китермен бер саҡ, һин ҡалырһың,
Һин ҡалырһың – һин бит үлемһеҙ…

Белеүебеҙсә һәм күреүебеҙсә, һүҙ бында XIX быуаттың икенсе – XX быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән һәм ижад иткән билдәле рус рәссамы В.М. Васнецовтың «Алёнушка» тигән картинаһы тураһында бара. Тәү ҡарамаҡҡа, шиғырҙа авторҙың күңел торошо, кәйеф-сафаһы ғына сағылдырыған кеүек. Һүрәттәге Алёнушка менән һөйләшкәндә бер аҙ шаяртып та алған төҫлө. Ләкин былар бөтәһе лә – фон, төп фекерҙе әйтергә йыйынғанда яһалған үҙенсә бер аҙым. Ә төп фекер инә, ысынлап та, һуңғы строфала әйтеп бирелгән: сәнғәт – үлемһеҙ.

«Алёнушка»нан айырмалы булараҡ, «Алтмыш бер»ҙә шиғырҙың «тоҙо» тәүге строфала уҡ һиҙелә башлай: «ер йөҙөнә ҡорьән ҡалдырып», алтмыш бер йәшендә донъя ҡуйған пәйғәмбәр телгә алына. Артабан һүҙ инаныу, аң, аҡыл, йән аҙығы кеүек төшөнсәләр тирәһендә бара, алла һүҙе менән шағир һүҙе араһында йәнәшәлек уҡкәрелә. Һәр замандың үҙ иманы булғанлығын иҫтә тотоп, шағир «Бар иманым шиғыр юлында – шиғыр менән минең яҙмыш бер» тигән һығымта яһап ҡуя. Әгәр шиғыр ошонда тамамланһа, аштың тоҙо енелерәк, бәлки тоҙһоҙ ҙа булыр ине. Юҡ шул! Шағир үҙенең дә пәйғәмбәр йәшенә еткәнлеген уҡыусы хәтеренә төшөрә лә, шиғриәттең дә ҡорьән шикелле үлемһеҙ икәнлегенә ишара яһай.

Назар Нәжми әҙәбиәт һәм сәнғәттең поэзия тип йөрөтөлгән төрө алдына ғәйәт ҙур,ғәҙәттән тыш ҡурыстар ҡуйҙы, ғүмере буйы шул бурыстарҙы тойоп йәшәне һәм ижад итте. «Шиғыр» (1965) тигән әҫәрен ул «вазифалар, дәрәжәләр менән сыбарланып бөткән донъяла» «һин бит үҙең әллә ҡасан алла, юҡ бит һине алла итәһе», тип башлап ебәрә лә, түбәндәге юлдар менән тамамлап ҡуя:

Юғарынан баҡҡан ҡай берәүгә
Кәрәгең дә юҡтыр, кем белә.
Ләкин һин бит йөрәк өсөн кәрәк,
Һин барыбер түгел кешегә.

Һәм барыбер түгел һинең өсөн
Был донъяның дуҫы, дошманы.
Донъяны бит аҡыл, йөрәк тота,
Дәрәжәләр тотмай донъяны.

Н. Нәжмиҙең эстетик зауығы, эстетик талаптары «Тик аҡҡоштар ҡайтмай…» (1966) тигән шиғырында үтә лә аныҡыраҡ итеп асып бирелгән. Шиғыр үҙенең формаһы йәһәтенән дә отошло. Ул шағирҙың гүр эйәһенә әүерелгән ҡәҙерле әҫәһе менән һөйләшеү шикелле итеп яҙылған. Һәм ошо бер яҡлы ғына һөйләшеү ваҡытында шағирҙың бөтә тормош һәм ижад юлы,уның бөтә ҡаршылыҡтары, юғалтыу-табыштары менән бергә, ус төбөндәгеләй һымаҡ итеп күҙ алдына баҫтырылған. Үҙ хеҙмәтенең ысын мәғәнәһен һәм әһәмиәтен автор түбәндәге юлдарға һыйҙырған:

Беләм, ижад нескә һөнәр эше,
Йөрәккә ул ялҡын илтеүсе.
Иң ҙур бәлә, иң ҙур бәхетһеҙлек –
Булһаң унда кәсеп итеүсе.

Назар Нәжми шиғриәткә табынып ҡына ҡалманы – бер үк ваҡытта шиғриәт алдында ҙур яуаплылыҡ та тойоп йәшәне, ҡәләмдәштәрен дә шуға саҡырҙы һәм өндәне. Форма менән йөкмәткә мәсьәләләре лә шағир иғтибарынан ситтә торманы. Башҡортостан яҙыусыларының алтынсы съезында (1968) һөйләгән докладында, мәҫәлән, ул былай тине: «… төрлө поэтик экспериментаторлыҡ, минеңсә, үҙеңдең йүнһеҙ булыуыңды йәшерер өсөн бер сара ғына. Әйтәйек, Пушкинды, Туҡайҙы Ер шары итеп ҡараһаң, төрлө «новаторҙар», поэтик шарадалар – Ер тирәһендә әйләнеп йөрөгән яһалма юлдаштар ғына». Был һүҙҙәр бик киҫкен яңғырай, әлбиттә, әммә уларҙа дөрөҫлөк тә юҡ түгелдер.

Назар Нәжмиҙең шиғриәт тураһында, сәнғәттең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәте хаҡында уйланыуҙарында ул кисергән эволюцияны ла шәйләмәй булмай. Шиғырҙың эске серҙәренә тәрәнерәк төшөнөп, уның «тәмен» нығыраҡ һәм нескәрәк татыған һайын, шиғриәт һәм шағирҙар алдына ҡуйған талаптары ла артҡандан-артты. Ҡырҡынсы йылда яҙылған «Ауырһынма…» һәм утыҙ бер йылдан һуң ижад ителгән «Үҙенең шиғыр китабын…» тип аталған ике шиғырҙы сағыштырып ҡараһаҡ,быға һис бер икеләнеүһеҙ ышанырға мөмкин. «Ауырһынма…»ла беҙҙең алда – «әҙәбиәттә тәпәй баҫырға» яңы өйрәнеп килгән йәш шағир. Ул бик тыйнаҡ кешегә оҡшаған, уҡытыусыһының маҡтау һүҙҙәрен ҡабул итә алмай, сөнки, шағир булып китергә теләһә лә, уға ирешер өсөн ваҡыт та, көс тә, талант та кәрәклеген яҡшы аңлай. Ә бына «Үҙенең шиғыр китабын…»да иһә

ул инде бөтөнләй башҡа амплуала – поэзия өлкәһендә шаҡтай бай тәжрибә туплап өлгөргән, шиғриәткә яҡты өмөттәр, саф хистәр бағлап йәшәгән, шуға күрә сейле-бешле шиғырҙарҙы үҙ итмәгән талапсан ижадсы булып күҙ алдына килеп баҫа:

Үҙенең шиғыр китабын
Бүләк итте бер дуҫ.
«Бүләк иткән ат тешенә
Ҡарамайҙар», ти рус.
Нишләйем һуң, түҙә алманым.
(Мин дә шул бер йүнһеҙ).
Толпарҙың тешен ҡараным,
Ә ул ине тешһеҙ.

«Бер ҡәләмдәшкә» (1976), «Һөйөү тураһындағы шиғырҙарыңды уҡығас…» (1978) тигән шиғырҙар ҙа ошондайыраҡ юҫыҡтағылар. «Бер ҡәләмдәшкә»лә, мәҫәлән, автор, ҙәғүә һәм итәғәтлек һаҡлап (Таҡташ авторитетына һылтанып), шиғыр яҙыусы берәүгә, яҙыуға ҡарағанда яҙмай тороу хәйерлерәк булмаҫ ине микән, тигән кәңәш бирә. «Һөйөү тураһындағы шиғырҙарыңды уҡығас…» та ул, һөйөү хаҡында һөйөүһеҙ тыуған шиғырҙарҙа аҡыл аңҡып торһа ла, елдәр иҫә тойғоларҙан, тигән ризаһыҙлығын белдерә.

«Туған шиғриәткә» (1981), «Шулдыр инде, шулдыр инде үҙе…» (1988), «Шиғыр» (1995) тигән әҫәрҙәр башҡасараҡ яңғырай. «Туған шиғриәткә» – тәрән хистәр менән һуғарылған юғары пафослы шиғыр. Назар Нәжми өсөн поэзия – илаһилыҡ та, өҙөлөп һөйгән йәне лә, тормошо ла, яҙмышы ла, шатлыҡ менән хәсрәте лә. Поэзия – шағирҙың бөтә булмышы, шуға күрә, үҙ-үҙеңдән ҡасып булмаған шикелле, хатта бик теләгән саҡта ла унан ҡасыу мөмкин түгел. Поэзияның асылы түбәндәге юлдарҙа мөлдөрәмә итеп асып һалынған:

Поэзия! Ихлас йәндәр иле,
Азат фекер, намыҫ, дан иле –
Пушкиндар һәм Лермонтовтар иле,
Туҡай кеүек изге йән иле.

«Шулдыр инде, шулдыр инде үҙе…»не оҙайлы тормош һәм ижад юлы үткән шағирҙың эске монологы тиергә була. Ғүмер аҙағы хаҡында

уйланып, әкренләп һүнеү ғазабы ауыр икәнлеген тойһа ла, ул барыбер ҙә үҙ иманына тоғролоҡ һаҡлай:

Сыҡма, йырым, йөрәк юлынан һин –
Ни булһа ла булыр аҙағы.
Ян, йөрәгем, аҡылың менән ян!
Мең йәшә һин, яныу ғазабы.

Алтмыш бишенсе йылда яҙылған «Шиғыр» тигән әҫәренән һуң теүәл утыҙ йыл үткәс, Назар Нәжми шул уҡ исемле йәнә бер шиғыр ижад итте. Был юлы ул Марат Кәримовҡа арнап яҙылғайны. Бер үк исемле ике шиғырҙың тәүгеһендә автор, шиғриәткә мәдхиә йырлап, «Донъяны бит аҡыл, йөрәк тота, дәрәжәләр тотмай донъяны», тигән һөҙөмтәгә килгән булһа, бынығында инһә ул һуңғы ваҡытта шиғырҙың ҡәҙере китеүенә борсолоуын белдерә. Шуныһы ҡыуаныслы: талантлы ҡәләмдәшенең яңы шиғырҙарын уҡығас, күңелен биләгән күңелһеҙ уйҙар юҡҡа сыҡҡандай тойола.

Илде үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, Н. Нәжми ҡәләме аҫтынан, ҡызғанысҡа күрә, ҡаршылыҡлыраҡ хис-тойғолар уятҡан шиғырҙар ҙа күренгеләп киткеләне. Шуларҙың билдәле драматург Ғабдулла Әхмәтшин иҫтәлегенә арнап яҙылған «Икенсе һулыш» (1988) тигәнендә, мәҫәлән, шағир, үҙгәрештәрҙең нимәгә алып килерен ахырына тиклем уйлап бөтөрмәҫтән, «шатлыҡ икән дә ул иҫке, ялған ҡоролмалар килеп ҡаҡшаһа», тип яҙҙы. Шунда уҡ бындай юлдарҙы ла уҡырға мөмкин:

Шатлыҡ икән дә ул, әммә ауыр
Йәнең аша барын кисереү.
Ауыр икән йөрәгеңдә ятҡан
Үткәнеңде быуыу, үлтереү.

«Буш йөрәк емештәре» (1991) лә шундайыраҡ шиғыр. Ул, шиғыр – «йөрәктә үҫкән емеш» тигән мәңгелек хәҡиҡәттән башлана ла:

Йырҙарға кергәс заманың
Маҡтансыҡ үҫештәре.
Хәҙер улар елгә киткән
Буш йөрәк емештәре! –

тигән юлдар менән тамамлана. Ирешелгән үрҙәр, яуланған уңыштар ысынлап та маҡтансыҡлыҡ ҡына булды микән? Ниндәй булыуҙарына ҡарамаҫтан, әгәр улар йырҙарға кергән икән, был да ғәжәп түгел. Ҡайһы ғына халыҡтың, ҡайһы ғына быуаттың әҙәбиәтен, сәнғәтен (шул иҫәптән – шиғриәтен дә!) алып ҡарама, улар бөтәһе лә – заман һулышы, заман көҙгөһө. Әгәр шулай булмаһа, уларҙың ни хәжәте бар?

Назар Нәжми эстетикаһында шағирҙың уҡыусы алдында яуаплылығы, йәмғиәттәге матди һәм рухи ҡиммәттәр, улар араһындағы оҡшашлыҡтар һәм айырмалыҡтар, был ҡиммәттәрҙе тыуҙырыусылар араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр хаҡында уйланыуҙар ҙа ҙур урын алып тора. «Әпәй, ҡояш» (1969), «“Йоматау” санаторийында яҙылған оҙон шиғыр» (1980), «Халҡым арбаһы» (1987), «Игенсе менән шағир» (1993) кеүек әҫәрҙәр тап ана шул уйланыуҙарҙан үҫеп сыҡҡандар.

«Әпәй, ҡояш» – халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтенән ауыҙ-тел ижадына күскән традицияларҙың береһенә таянып яҙылған шиғыр. (Йәйәләр эсендә иҫкә төшөрөп китәйек: Назар Нәжми шиғриәтендә ауыҙ-тел ижадынан килеп ингән әйтемдәрҙе, мәҡәлдәрҙе, ҡанатлы фразаларҙы йыш осратырға мөмкин. Был – үҙенә башҡа ҙур тема һәм ул айырым тикшереүҙе көтә.) Билдәле булыуынса, борон-борондан намыҫың сафлығына, бер кем алдында ла ғәйебең юҡлығына ышандырырға тырышҡанда, алла исеме менән генә түгел, «әпәй, ҡояш!» тип тә ант иткәндәр. Был антты, уның мәғәнәһен аңлар-аңламаҫтан, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, бала-саға ла йыш ҡабатлар булған. Назар Нәжми иһә уны әпәйҙән дә ҙур, әпәйҙән дә ҡәҙерле нәмә юҡлығын һәм үҙенең шул әпәй үҫкән ергә береккәнлеген, уның алдында һәр саҡ яуаплылыҡ тойоп йәшәүен асып һалыр өсөн бик оҫта файҙаланған:

Ләғнәт төшһөн миңә, әгәр ерем,
Әпәйеңә
Тир түкмәгән ҡоро ҡул һуҙһам.
Шиғырҙарым ҡарғап, ташлап китһен,
Мин үҙемде
Шул әпәйҙән әгәр ҙур ҡуйһам.

«“Йоматау” санаторийында яҙылған оҙон шиғыр» – ысынлап та оҙон, ләкин еләткес түгел. Күпмелер кимәлдә уны «Әпәй, ҡояш» менән ауаздаш тип тә әйтергә була. Сөнки һүҙ бында ла әпәй хаҡында бара, тик

был юлы фекер ағышы тәрәнгәрәк юлланған. Авторҙың эстетик ҡарашы ла бында туранан-тура асып һалынған. Йәнәһе, шағир менән игенсе араһында барған бәхәстә Назар Нәжми, ҙур әҙәплелек һаҡлап, әҙәм балаһы әпәй алдында баш эйһә лә, уның башҡа ҡиммәттәргә лә мохтаж икәнлеген иҫбат итә:

Рәхмәт һиңә – икмәк ашатаһың,
Һүҙҙәрең дә һинең хаҡтыр ул.
Тик өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ, тип кенә
Йәшәүе лә хәҙер – яттыр ул.

Шағир хеҙмәтенең игенсе хеҙмәтенән айырылғыһыҙлығы «Халҡым арбаһы»нда ла һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәтелгән:

Маҡтаныу юҡ – ғүмер буйы
Мин хеҙмәт юлы үттем.
Еремә һәм милләтемә,
Халҡыма хеҙмәт иттем.

«Игенсе менән шағир»ҙа тормош айышына, йәшәү серҙәренә уғата ла киңерәк ҡараш ташланған. Ерҙә тереклек иткән кемде генә алып ҡарама, уның яҙмышы һәм булмышы ахыр сиктә «игенсенең хәләл хеҙмәтенә – икмәгенә килеп тоташҡан», тигән фекер үткәрелә унда. Шуға күрә, сәсеү йәки ураҡ өҫтөндә игенсенең башҡа һөнәр эйәләре шикелле эш ташлауын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын:

Эй, игенсем! Һинекенә оҡшаш
Ғүмеремдең бөтә шөғөлө.
Мин дә иген игәм, тик баҫыуым,
Тупрағым тик кеше күңеле.

Күңелдәргә кергән йөрәк мин,
Эш ташлаһам, кемгә кәрәк мин?

Назар Нәжми ижадҡа, бигерәк тә – шиғриәткә, уның кимәленә ифрат талапсан булды. Быны шағир эстетикаһындағы үҙенә башҡа айырым бер күренеш, тип тә атарға мөмкиндер. Уның әҙәбиәтебеҙ торошо тураһындағы үткер байҡауҙарында, әҙәби әҫәрҙәрҙең идея-

художество йөкмәткеһе хаҡында фекер йөрөткән мәҡәләләрендә, ижади оҫталыҡ, шиғриәт тураһындағы уйланыуҙарында, әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәренә бағышланған иҫтәлек-хәтирәләрендә, ижади портреттарында, ҡәләмдәштәренә яҙған асыҡ хаттарында йыш ҡына «шағирлыҡ», «ысын шағир», «шиғырҙың ҡаны, йәне» һәм башҡа шуның кеүек төшөнсәләрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе осратырға мөмкин. Үҙенә оҡшаған ҡайһы бер шиғырҙарға оҙағыраҡ туҡталып, уларҙың елегенә төшөп етергә тырышҡан саҡтары ла булғыланы. Йыйып ҡына әйткәндә, Назар Нәжми шиғырға, шиғриәткә ысын мәғәнәһендә мөкиббән киткән, шағир статусын юғарыраҡ күтәреү теләге менән янып йәшәгән, ижадта шағирҙарҙы үҙаллылыҡҡа өндәгән шәхестәрҙең береһе булып ҡалыр әҙәбиәтебеҙ тарихында.

Шиғриәттең Назар Нәжми өсөн ысынлап та йәшәү мәғәнәһенә әүерелгәнлеген иҫбатларҙай бик күп фактттар килтерергә мөмкин. Бына шуларҙың береһе – «Был нисәнсе шиғыр юлы икән?..» (1957):

Был нисәнсе шиғыр юлы икән?..
Ғүмерем бит ошо юлдарҙа.
Донъяның бар рәхәттәрен бит мин
Алмаштырҙым, буғай, йырҙарға.

«Әллә ниндәй уйҙар солғап алған…» да иһә ижадсының һүҙ иреклеге, фекер азатлығы яҡланғанлығы бер ниндәй асыҡлауһыҙ ҙа аңлашылып тора:

Әйтәсәктәр: «Шиғыр артыҡ бойоҡ,
Был беҙгә ят – кәрәк тыйырға!»
Кешенең бит төрлө сағы була,
Ни өсөн һуң әле шиғырға
Гел бер төрлө генә булырға?!
(1957).

Шиғыр һәм шағир статусы хаҡында уйланыуҙарҙы «Бөгөн һинең тыуған көнөң ине…» (1965), «Ял көнөндә» (1965), «Сиратта» (1967) тигән шиғырҙарҙа ла тойомларға мөмкин.Һуңғыһы айырыуса көслө һәм уҫал яңғырай. Яңы ғына ижад иткән шиғырҙарының донъя күрер өсөн сиратҡа ҡуйылғанлығын ишеткәс, шағирҙың асыуы ҡабара, ул сикһеҙ ғәрләнә, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй:

Сират көтөп киләме ни илһам,
Һөйөү, нәфрәт, дауыл һәм йәшен?!

Шиғырҙарым, һеҙ бит йөрәк ҡаным,
Һеҙ иманым минең, күҙ йәшем.
. . . . . .
Сират… Сират! Ә бит ысын шағыр
Шиғыр өсөн күпме ут эсә.
Тимәк, һеҙҙә ут юҡ, һеҙ таланттыҡ,
Һеҙ кешесә түгел, кешесә!
Туйҙым, буғай, һеҙҙән, үҙемдән, –
Юғалығыҙ минең күҙемдән!

Назар Нәжмиҙең яңғыраштары менән бер-береһенә бик яҡын торған ике шиғыры бар: «Ижад» (1974) һәм «Ижадсы» (1986). Аралары – ун ике йыл. Исемдәренән үк күренеп тороуынса, улар икеһе лә аҡыл хеҙмәтенең һәләт тә, талант та, күп көс һалыуҙы ла талап иткән бер төрө тураһында: тәүгеһендә шағир ижадтың үтә серле сығанаҡтарын, тәрәндә ятҡан тамырҙарын юллаһа, икенсеһендә иһә шиғыр ижад итеүсенең бары тик уға ғына хас булған үҙенсәлектәрен һәм ҡайһы бер өҫтөнлөктәрен яҡлап сыға:

Мин ижадсы. Кеше аҙы менән
Яҙыҡ миңә кеше ныйларға.
Мин бит артист түгел, бер үк йырҙы
Ҡат-ҡат сығып «бис»ҡа йырларға,
Йә ижадсы булып уйнарға,
Йырларға.

Шағир һәм шиғриәт, уларҙың тәғәйенләнеше, йәмғиәттә тотҡан урыны хаҡында йәштән үк уйлана башлаған Назар Нәжми олоғая төшкәс тә был темаға хыянат итмәне. Юғарыла телгә алынғандарға өҫтәп, шағир һәм шиғриәт яҙмышына бәйле «Мин үлгәс тә ҙур юғалтыу, тиеп…» (1987), «Мин бер Дон-Кихотмын» (1987) тигән шиғырҙарҙы ла атарға мөмкин. «Мин үлгәс тә ҙур юғалтыу, тиеп…» күләме яғынан ҙур түгел, әммә йөкмәткеһе тәрән. Ул шаян тулҡындарҙа башлана ла, шағир ғүмере – халыҡ күңелендә, тигән йәһәт оригиналь һығымта менән тамамлана. «Мин бер Дон – Кихотмын» уғата ла

фәһемлерәк һәм йөкмәткелерәк шиғыр. Шиғырҙың елегенә төшөргә теләгән кешегә рухи азыҡ етерлек унда. Тәржемә, дәүләт теле кеүек мәңгелек проблемалар хаҡында уйланып, автор «поэзия – дәүләт үҙе, хазина һәм милли бер храм» тигән һөҙөмтәгә килә, уҡыусыны ла шуға ышандыра.

Назар Нәжмиҙең шиғриәтендә лә, драма әҫәрҙәрендә лә, шулай уҡ публицистикаһында ла тойғолар ихласлығы, хистәр тәрәнлеге күҙгә бәрелеп тора. Ялғанлыҡ һәм яһалмалыҡ, ғәҙелһеҙлек һәм тыштан ялтырау кеүек сифаттар уның ҡан дошманы булды. Был сифаттар шағирҙың эстетикаһында ла сағылыш тапмай ҡалманы, әлбиттә. Тик уларҙы иркенләп өйрәнергә, бөртөкләп йыйырға ғына кәрәк. Ошо урында уның «Ысын шиғриәт – ул ғүмер буйына асыла барған сер», тигән һүҙҙәре хәтергә төшә. Тимәк, шағирҙың эстетик ҡараштары ла әлегә асылып бөтмәгән (дөрөҫөрәге – асыла ғына башлаған) сер булып ҡала килә.

2012, декабрь

БАШҠОРТ ЭНЦИКЛОПЕДИЯҺЫ
БАШКИРСКАЯ ЭНЦИКЛОПЕДИЯ

«Ҡабул итсе, тормош, Ҡосағыңа…»

Әлфиә Әсәҙуллинаның сирек быуатлыҡ ижадын еңелсә генә булһа ла күҙаллау ниәтенән сығып яҙылған был мәҡәләмде лә авторҙың үҙ һүҙҙәре менән атарға булдым. Сөнки йөрәк төпкөлөнән сыҡҡан һәм эскерһеҙ ялбарыу һымағыраҡ яңғыраған ошо һөйләм нимәһе менәндер башҡаларҙан айырылыбыраҡ торғандай тойолдо. Эсемдән генә, шағирәнең поэтик табышы түгелме һуң был, әгәр уны һыҙыҡ өҫтөнә алһам, бәлки, бүтәндәргә лә оҡшап ҡуйыр һәм ҡанатлы фразаға әйләнеп китеүе лә ихтимал, тип уйланым. Һөйләмде иһә, күнегелгән ҡалыпҡа һалып, бер ниндәй ҙә ҡылансыҡланыуһыҙ яҙылған «Ҡабул ит» тигән шиғырҙан алдым. Ә шиғыр Әлфиәнең бынан тап егерме йыл элек донъя күргән «Сайҡала сауҡалар» исемле тәүге йыйынтығын асып ебәргәйне.

Дөрөҫ, «Сайҡала сауҡалар» ҙурлы китап түгел, ә «Шарлама» тип аталған һәм үҙ эсенә ун бер авторҙы һыйҙырған китап эсендәге китап. Эй, булды бит заманалар! Совет осоронда, башлап яҙыусы өмөтлө йәштәрҙе дәртләндереү өсөн, нисәмә йылдар буйы «Йәш көстәр» тип аталған альманах сығарылып килһә, илде үҙгәртеп ҡороруға тотонғас, кисәге йәш көстәрҙең шиғырҙарын, хикәйәләрен йоҡа-йоҡа ғына булһа ла айырым китаптар итеп баҫтырып сығараһы урынға (әйтәйек, Тимер Йосоповтоң «Икмәк еҫе» тигән йыйынтығы һымаҡ), бына шулай, «Шарлама» шикелле итеп сығарырға мәжбүр булдылар ул йылдарҙа нәшриәт хеҙмәткәрҙәре.

«Шарлама» – ярай инде шунда. Күпмелер кимәлдә, уның менән килешергә лә, ғәфү лә итергә була. Сөнки, ни генә тиһәң дә, ул өлгөрөп еткән йәш шағирҙарҙың берәм-һәрәм, тегендә-бында сәселеп ятҡан шиғырҙары түгел, ә шул шиғырҙарҙы туплаған тәүге йыйынтыҡтарынан тора. (Әгәр яңылышмаһам, «Шарлама» тибындағы китаптар, башҡа атамалар менән, әлбиттә, артабан да сыҡҡылап торҙо, шикелле.) Ә бына шул уҡ осорҙа, йәки туҡһанынсы йылдарҙа, башлап яҙыусыларҙы түгел, бәлки шаҡтай тәжрибә туплап, танылып өлгөргән шағирҙарҙы парлап, бер тышлыҡ эсенә ҡыҫырыҡлап тигәндәй индереүҙе аңлауы ла, аңлатыуы ла ҡыйын. Типография буяуы еҫенән арынып та бөтмәгән яңы китапты ҡулыңа

алғас, башта уның авторына һәм исеменә иғтибар итәһең, унан һуң, бының хаҡы күпме икән тип, китапты әйләндереп ҡараһаң, һушың китеп йығылырлыҡ: һинең күҙ алдыңда тағы бер китап пәйҙә була. Тик уның авторы ла бүтән, исеме лә башҡа. Әйтерһең дә, һинең ҡулыңда күптән көтөп алынған китап түгел, ә сфинкс башы тора. Үҙенән-үҙе, халыҡ телендә киң таралған «өйҙәш ҡатын» тигән әйтем иҫкә килеп төшә. Сөнки, ике авторҙы бер китапҡа бикләп, уларҙы өйҙәш иткәндәр ҙә баһа. «Өйҙәш ҡатындар»ға иһә ғүмер баҡый бер-береһенән көнләшеп йәшәгән еҙнәләр һәм бажалар өҫтәлә. Йә Хоҙа, тағы ниҙәр күрәһе бар икән? Бындай хәл хатта ауыр һуғыш мәлендә лә булмаған, тиҙәр.

Үҙе яҙ айында тыуғанға күрәлер инде, «Ҡабул ит» шиғырында Әлфиә Әсәҙуллина һүрәтләү объекты итеп йылдың тап ошо мәлен һайлаған, әйтергә теләгән төп фекере лә ошо фонда яңғыраған:

Эй йәмле яҙ! Ниңә был ҡәҙәре
Яратамдыр ошо мәленде.
Умырзая кеүек тәрән асып
Арттырғанда тағы йәмеңде.

Минең күңел йәнә йырға тула
Ағастарҙа бүрткән бөрөләй.
Ярҙарынан ашҡан йылға кеүек,
Йырҙар тайҙып, ағыр юл эҙләй.

Әлфиәнең үҙ һүҙҙәренә ҡарағанда, ул Башҡортостаныбыҙҙың иң матур төбәгендә – өҫкә ауырға торған урмандар, гәлсәр һыулы шишмәләр, сәскәләргә күмелгән болондар, тыйнаҡ ғорурлыҡ һаҡлаған тауҙар иленде тыуып үҫкән. Тирә-йүндәге ошо гүзәллек, ғаиләлә хөкөм һөргән ирәүән тормош менән бергә үрелеп, ун йәшендә сағында уҡ әле Әлфиәнең тәүге шиғырҙары шытып сыға башлауға сәбәпсе булғандыр ҙа, бәлки. Артабан ул былай тип дауам итә үҙе тураһында: «Мәктәптә, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында ситтән тороп уҡығанда ла шиғриәт минең айырылмаҫ юлдашыма әйләнде. Газета-журналдарҙа, «Йәш көстәр»ҙә исемем урыҡ-һурыҡ ташҡа баҫылғылаһа ла, китап итеп төйнәргә баҙмайыраҡ йөрөнөм. Мәгәр, хәҙер тәүәккәлләйем – ыҡсым ғына ижад емешемде, усыма йөрәгемде һалғандай күреп, һеҙгә һонам. Хоҙайҙан булып, «Сайҡала сауҡалар»

зауыҡлы уҡыусыларымды саҡ-саҡ ҡына уйландыра, хисләндерә икән – мин бәхетле». Бына шулай тип яҙғайны Ә. Әсәҙуллина бынан ике тиҫтә йыл элек.

Өҫтә килтерелгән шиғри юлдарҙың да, тәүге йыйынтығына үҙе яҙған кескәй генә инеш һүҙҙең дә авторы хистәргә бай, сабыр холоҡло, тыйнаҡ һәм түҙем шәхескә оҡшап тора. Тәүге тәьҫораттың дөрөҫмөтүгелме икәнлеген асыҡлау өсөн, әйҙәгеҙ, уның шиғриәт донъяһына күҙ һалайыҡ. «Сайҡала сауҡалар»ҙан тыш, беҙ унда тағы бер нисә йыйынтыҡҡа юлығырбыҙ. Шул да мәғлүм булһын: яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, Әлфиә Әсәҙуллина «Ағиҙел» биттәрендә лә күренгеләп тора башланы. Ниһайәт, «Хәтер күпере» тигән күләмле генә поэмаһын тамамлап, уҙған йылда уны уҡыусы ҡарамағына тапшырҙы.

«Сайҡала сауҡалар»ҙағы шиғырҙарҙың байтағында тиерлек авторҙың уй-фекерҙәре, донъяға ҡараштары тәбиғәт күренештәре аша тасуирланған. Арала саф пейзаж лирикаһына дәғүә итерҙәйҙәре лә осраштырып ҡуя. Башта бер аҙ шуларға тукталып китһәк, маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр. Сөнки лириканың был төрө шағирҙан үҙенә башҡа әҙерлекте, тойомлау-һиҙемләү ҡеүәһен, күҙәтеүсәнлекте, тойғаныңды-күргәнеңде юғары кимәлдә һүрәтләү маһирлығын талап итә.Шуға күрә пейзаж лирикаһында ысын мәғәнәһендә уныш ҡазанғандарҙы хатта рус шиғриәтендә лә (тамырҙарының төптәрәк ятыуына һәм донъя күләмендә ҡеүәтле генә шиғриәттәрҙең береһе тип иҫәпләнеүенә ҡарамаҫтан) бармаҡ менән генә һанарлыҡ: А. Пушкин, Ф. Тютчев, А. Фет, И. Бунин, С. Есенин.

Әлфиә Әсәҙуллина иһә йәшләй үк лириканың ошо иҫ киткес ҡатмарлы төрөндә үзенең көсөн һынап ҡарарға баҙнат иткән. Уның «Урманда» тигән шиғыры – быға асыҡ миҫал булып тороролоҡ. Егерме юллыҡ ошо әҫәрендә ул йәйге урманды, урман ситендәге аҡланды, аҡланда сыңда сың килгән сиңерткеләр моңон, аҡлан ярып атлағанда күҙгә ҡараған сәскәләрҙе, үлән аралап, эҙгә һикерешкән еләктәрҙе, миләш менән сәтләүекте ғәжәп йәнле һәм сағыу итеп һүрәтләүгә ирешкән. Тыштан ҡарап торғанда, шиғырҙы ослап ҡуйған һуңғы ике строфаға ла һүҙ тейҙерерлек түгел:

Тыңлайым да иҫем китә,
Япраҡ шыбырлауын.
Был бит ағастар көй-моңо,
Был урмандың йырлауы.

Урман ситенә юлланам.
Һау булып тор, аҡланым.
Гүзәллегең ғүмерлеккә
Күңелемдә һаҡланыр.

Ләкин, нисек кенә матур яңғырамаһын, урманды, ундағы ағастар көй-моңон, урман ситендәге йомро аҡланды автор ни ҡәҙәр генә бәҙәғайтмаһын, был шиғырҙы тулы килеш пейзаж лирикаһы тип атап булмайҙыр. Өҫтәрәк әйтелгәнсә, ул әлегә пейзаж лирикаһына дәғүә итеп кенә ҡалалыр. Билдәле классиктарҙың ысын мәғәнәһендә пейзаж лирикаһына ҡараған шиғырҙарын иғтибар менән уҡыған, шул һиҙелә: уларҙа авторҙың «мин»е юҡ. Һәр хәлдә, ул күҙгә ташланмай. Шуға күрә, пейзаж лирикаһы өлкәһендә әүҙем һәм уңышлы эшләүсе шағирҙы, минең уйымса, рәссам менән сағыштырырға мөмкин. Әгәр рәссам тәбиғәттең үҙенә оҡшаған берәй мөйөшөн ҡыл-ҡәләм һәм төрлө төҫтәге буяуҙар ярҙамында мәңгеләштерһә, шағир иһә, үҙенең уй-хистәрен, эске кисерештәрен тышҡа сығармайынса, улар менән асыҡтан-асыҡ уртаҡлашмайынса ғына, тәбиғәттең шул уҡ күренешен һүҙ ярҙамында күҙ алдына килтереп баҫтыра.

Минең был уйланыуҙарымда, бәлки, әллә ни яңылыҡ та юҡтыр. Шулай ҙа, фекерҙе ҡеүәтләү өсөн, әҙәбиәт донъяһына мөрәжәғәт итеп алһаҡ, яҙыҡ булмаҫ. Бынан йөҙ йылдан ашыу элек (1900 йылдың йәйе менән көҙөндә) Иван Бунин үҙенең «Япраҡ ҡойолоу» («Листопад») тип аталған кескәй генә поэмаһын (йөҙ ҙә алтмыш алты юлдан тора) яҙып баҫтырған. Юлдар һаны әллә ни күп булмағанғалырмы, шағирҙың ҡайһы бер замандаштары араһында (мәҫәлән, Блок) «Япраҡ ҡойолоу»ҙы шиғыр тип атаусылар ҙа табылған. Ләкин әле һүҙ әҫәрҙең ниндәй жанрға ҡарауы хаҡында түгел, ә шағирҙың көҙгө урманды, ғөмүмән, көҙгө осорҙо, тәбиғәттең көҙгө мәлен тасуирлау өсөн ниндәй матур һүҙҙәр (сағыштырыуҙар, эпитеттар, метафоралар һәм башҡа шуның кеүек һүрәтләү саралары) табыуы һәм уларҙы ни тиклем оҫта итеп ҡулланыуы хаҡында. Йылдың көҙ тип аталған миҙгеле яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китеүендә лә хикмәт юҡ түгелдер. Шуныһы мөһим: поэмала көҙгө тәбиғәт бөтә күркәмлеге менән һүрәтләнһә лә, Бунин үҙе күренмәй, үҙе тураһында ул бер һүҙ ҙә ҡатмай. Әйтерһең дә уңайлы ғына бер урынды һайлап алған да, шунан атлаған һайын үҙгәреп торған бөтә тирә-йүнде күҙәтеп тик ултыра.

Йәиһә, тағы бер шиғырҙы – С. Есениндың мәктәп йылдарынан уҡ киң билдәле «Ҡайын»ын хәтергә төшөрәйек. Ул бынан тап йөҙ йыл элек яҙылған һәм шағирҙың ташҡа баҫылған тәүге әҫәре тип иҫәпләнә. Шиғыр ни бары ун алты юлдан тора. Ә ниндәй юлдар бит! «Минең тәҙрәм алдында» тигәнен иҫкә алмағанда, пейзаж лирикаһының матур бер өлгөһө лә инде!

Буниндың да, Есениндың да ижад мираҫында бындай шиғырҙар бихисап. Мин иһә уларҙың уҡыусыға танышыраҡ, ҡолаҡҡа йәтешерәк тойолғандарын ғына иҫкә алдым. Ә. Әсәҙуллинаның да «Урманда»һы пейзаж лирикаһына яҡын торған берҙән-бер шиғыртүгел.«Саҡырмасы, ҡайын…»да, мәҫәлән, йылдың башҡа миҙгеле һүрәтләнһә лә, ул нимәһе менәндер Есениндың ҡышҡы ҡайынына оҡшап торғандай:

Һыҡтай-һыҡтай тышта ямғыр яуа,
Тәҙрәләр илай йәш ҡойоп.
Тәҙрә аша моңһоу йәш ҡайынҡай
Ҡарап тора миңә, бойоғоп.

Япрағынан уның йәштәр тама.
Хәлдәреңде һинең аңлайым,
Һин дә яңғыҙ, мин дә яңғыҙ, ҡайын,
Һис бер ярҙам итә алмайым.

Әлбиттә, бында оҡшашлыҡҡа ҡарағанда айырмалыҡ күберәк. Есенин үҙенең «Ҡайын»ында тәбиғәттең иҫ киткес матур бер мәлен рәссамдарса тотоп алған булһа,Әлфиә Әсәҙуллинаның «Саҡырмасы, ҡайын…»ында иһә (айырыуса шиғырҙың һуңғы ике строфаһында) авторҙың күңел торошо асып һалынған. Ә бына «Йәйге иртә», әгәр уның һуңғы дүрт юлына иғтибар итмәһәң, пейзаж лирикаһынан һис тә ҡайтыш түгел, минеңсә:

Ҡояш нуры үрелеп тау артынан
Йондоҙҙарҙы баҫып һүндерҙе.
Тымыҡ ҡына ятҡан күл өҫтәрен
Шаҙралатып елдәр йүгерҙе.
Һандуғастар моңо нағышланы
Ысыҡ емелдәгән үләнде.
Ошо хозурлыҡҡа таңдар ҡалып,
Тамам хыялыйға әйләндем.

Тура килһә, килә бит ул. Буниндың 1993 йылда ижад ителгән «Поезда» («В поезде») исемле шиғырына оҡшаған әҫәр Әлфиәлә лә бар. Уныҡы ла «Поезда» тип атала. Дөрөҫ, күләмдәре яғынан улар бер-береһенән бер аҙ айырыла: рус шағирыныҡы – дүртәр юллы алты строфа, башҡорт шағирәһенеке – дүртәр юллы өс строфа. Әммә һүрәтләү алымдары йәһәтенән – яҡындар: шиғырҙарҙың икеһендә лә поезда барғанда күҙгә салынған пейзаж күренештәре тасуирлана. Бунин был күренештәргә киңерәк ҡараш ташлаһа, Әсәҙуллинаны иһә башлыса юл буйындағы ағастар ҡыҙыҡһындыра:

Юл буйындағы ағастар
Кемдәрҙе оҙатмаған.
Ниндәй елгә бөгөлмәгән,
Кемдәргә баш ҡакмаған.

Бөгөн беҙгә күл болғайҙар,
Яулыҡтар – йәшел, һары.
Йүгереп-йүгереп еталмайҙар,
Һағыш һалалар бары.

Һеҙҙең яҙмыш – киткән-кайтҡан
Йөрәккә һағыш һалыу.
Тыуған ер бизәге булып,
Ғүмергә иҫтә ҡалыу.

«Әсәҙуллинаны иһә башлыса юл буйындағы ағастар ҡыҙыҡһындыра», тип, мин һис кенә лә уның абруйын төшөрөргә, ул яҙған шиғырҙың бәҫен ебәрергә йыйынмайым. Уға Бунин шиғыры, бәлки, таныш та түгелдер һәм ике «Поезда»ның оҡшашлығы осраҡлы ғына хәл булыуы ла бик ихтимал. Әгәр Бунин шиғыры Әлфиәгә таныш булһа, уны, бәлки, өлгө итеп алғандыр. Һүҙ бында атаҡлы рус шағирының ысын мәғәнәһендә һәм бик оҫта пейзажсы булыуы, Әлфиәнең иһә пейзаж күренештәренә кешенең эске кисерештәрен, уй-тойғоларын һүрәтләү өсөн мөрәжәғәт итеүе хаҡында бара. Буниндың «Поезда» тигән шиғыры тураһында һүҙ сыҡҡас, бер ыңғайҙан уға Горький биргән баһаны иҫкә төшөрөп китеү ҙә зыян итмәҫ: «Һөйөклөм минең, – тип яҙған ул Бунинға адресланған бер хатында, – был – иң саф поэзия».

Пейзаж күренештәре үҙҙәренең тура мәғәнәһендә һүрәтләнгән шиғырҙар ҙа юҡ түгел Әлфиәнең «Сайҡала сауҡалар»ында. Был осраҡта инде уларҙың авторы тәбиғәт һаҡсыһы, уның быуаттар буйына тупланған байлыҡтарын әрәм-шәрәм итеүселәрҙе фашлаусы булып күҙ алдына килеп баҫа. Йыйынтыҡҡа исем биргән шиғырҙа, мәҫәлән, бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:

Ары ла ҡарандым,
Бире лә ҡарандым.
Ҡырғандар урманды –
Йөрәгем ҡуҙғалды.
Ҡырғандар бер уйһыҙ.
Ҡырғандар аяуһыҙ.
Калырбыҙ бер мәлде
Таяҡһыҙ, таяуһыҙ.

«Ер йәмдәре бара юғалып…»та ла, бер ҡатлыраҡ тойолған саҡырыуҙар, минор тондағы ялбарыуҙар осраштырһа ла, шағирәнең борсоулы уйҙары бик урынлы яңғырай:

Урманыбыҙ – бер ҡат юрғаныбыҙ,
Һин бит ҡәлгә ҡыуан елдәрҙән.
Һине ҡырған өсөн беҙ яуапты
Алырға һуң тейешһең кемдәрҙән?!

«Ҡайтам», «Ҡайындар ҡәберлегендә…» тигән шиғырҙарҙа иһә авторҙың борсоулы хистәре реаль тормоштан алынған факттар менән үрелеп бирелгән.

Шулай ҙа, Ә. Әсәҙуллинаның тәбиғәткә, тирә-йүн мөхиткә ҡарата күрһәтелгән битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ хаҡындағы уйланыуҙарында көнүҙәк мәсьәләләр күтәрелһә лә, уның пейзаж күренештәре аша кеше күңелен сағылдырған шиғырҙары уңышлыраҡ та, отошлораҡ та. Бына шундай шиғырҙарҙың береһе:

Шау сәскәлә генә бөтә донъя,
Күңелдәрҙә яҙҙың дауамы –
Йөрәктәрҙә әллә илһам артҡан,
Әллә күктән шатлыҡ яуамы?

Һис аңламай инем был донъяны,
Яуап алдым тышҡа ҡарағас.
Йәшәү матурлығын йырға һалып,
Моң өләшә икән һандуғас.
(«Һандуғас»).

Тәбиғәт ҡосағында үҫкән һәм уның бөтә нескәлектәрен тойоп йәшәргә күнеккән Әлфиә йәшел үләнде матур келәмгә тиңләй икән, һис тә ғәжәп түгел. Ләкин «Оҡшашлыҡ» тигән шиғырҙың (әле һүҙ тап ошо шиғыр хаҡында бара) арбау көсө был метафораға ғына ҡайтып ҡалмай. Авторҙың уҡыусы менән бүлешергә теләгән төп фекере әҫәрҙең тәүге строфаһында бөрөләнә башлай:

Морон төрткән үләндәрҙе
Тапап үтеү бер ни тормай.
Тик үҫмәҫлек итеп уны
Йолҡоп ташлап бөтөп булмай.

Ни өсөн һуң үләнде яңынан үҫмәҫлек итеп йолҡоп ташлап бөтөп булмай? Был һорауға яуапты өсөнсө строфала шәйләргә мөмкин: баҡһаң, үләндең өҙөлөп ҡалған тамырҙары ифрат күп көс сарыф итеп, ерҙән йәшәү һуты алыуҙарын дауам итәләр икән. Һуңғы, дүртенсе строфала иһә, үлән яҙмышы менән кеше яҙмышы араһында күпмелер оҡшашлыҡ барлығына ишара яһала: йәне-тәне, ҡаны-тамыры менән ергә береккән кеше бер ҡасан да йәшәүҙән туймаҫ һәм атлаған һайын тыуып торған ҡаршылыҡтарҙы һәр ваҡыт еңеп сығыр. Бында үҙенә күрә бер фәлсәфә – тормош фәлсәфәһе лә юҡ түгелдер, моғайын.

«Хикмәт барҙыр» тигән шиғыр ҙа шундайыраҡ тәьҫир ҡалдыра:

Ҡарҙар ҙа илап китәләр,
Ямғыр ҙа илап яуа.
Әйтерһең дә, ер йөҙөнә
Күҙ йәшен түгә һауа.

Ҡарҙар ағарта донъяны,
Гөл-сәскә итә ямғыр.
Тәбиғәттең был көсөндә
Моғайын хикмәт барҙыр.

Ә бына «Йәшәүе шуға ла ҡыҙыҡлы» – фәлсәфәүиме ул,түгелме тигән икеләнеү тойғоһо уятмаҫ, сөнки унда бөтәһе лә күҙ алдында. Башта шағирә:

Йәшәйеш асылы нимәлә?
Ошо уй күңелдә тирбәлә.
Ни өсөн тыуғанбыҙ донъяға,
Ни өсөн тынмайса һыу аға?
Ҡояш та офоҡтан күренеп,
Күҙәтә түгелме үрелеп? –

тигәнерәк һорауҙар яуҙыра ла, артабан, тәбиғәттең ғүмергә туя алмаҫлыҡ гүзәллектәренә һоҡланып, бындайыраҡ һығымта яһап ҡуя:

Эй, тормош! Һин серле ҡылыҡлы,
Шуға ла йәшәүе ҡыҙыҡлы.

Тормош үҙ юлына ниндәй генә һынауҙарын сығарып ҡуймаһын, Әсәҙуллинаның лирик героиняһы ерҙә йәшәүҙән бына шулай үҙенсә йәм табырға, «кескәй генә шатлыҡты ла оло күреп» ҡыуанырға, «осҡон ғына өмөттән дә йылы алып» йыуанырға тырыша. Бәхетен офоҡ артында боҫоп торғандай итеп тойоуын да йәшермәй ул. Был – «Өмөт» тигән шиғырҙа. «Һаман әйтәм…» менән «Шуғалыр»ҙа лирик героиняның булмышы уғата ла асығыраҡ сағылыш тапҡан. «Һаман әйтәм…»дең лирик героиняһы өсөн, мәҫәлән, аҡ, тигәне, йыш ҡына ҡара, хаҡ, тигәне, яла булып сыҡһа ла, ул барыбер ҙә аҡҡа табына:

Был тормошҡа мөхәббәт ҙур:
Һаман әйтәм, йәшәү матур!

«Шуғалыр»ҙың лирик героиняһы башта үҙенең күңел торошо, хәл-әхүәле менән уртаҡлашҡандай итә лә, һуңынан бындай һығымта яһап ҡуя:

Бөтәһе лә миндә сират менән:
Янам-көйәм, һөйәм, уйланам.
Шулай булғанға ла тормош йәмен
Татып йәшәйемдер, моғайын.

«Янам-көйәм, һөйәм, уйланам» тигәндән, Әлфиәнең мөхәббәт лирикаһы ла үҙенсәлекле генә. Был темаға ул күп яҙмай яҙыуын, әммә булған тиклеме иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмай. «Хазина» тигән шиғырҙың лирик геройняһы, әйтәйек, үҙенең бөтә булмышын, аңын, ҡанын мөхәббәткә бәйләй, уны хазина тип атай һәм тормош ҡуйған һынауҙарҙы еңеп сығырға ярҙам итеүсе көс, ышаныслы таяныс, тип иҫәпләй. Ул юҡҡа ғына:

Теремен, һөйөү хаҡының
Баһаһын белгәнгәме,
Уттарҙан һыуҙарға төшөп
Өҙөлөп һөйгәнгәме, –

тигән һорау бирмәйҙер үҙ-үҙенә. Ләкин, донъя гел аллы-гөллө биҙәктәрҙән генә тормаған шикелле, мөхәббәт тойғоһо ла ваҡыт-ваҡыт үҙгәреүсән була, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Әлфиәнең лирик геройняһы шундай үҙгәрештәргә ифрат һиҙгер. Башта ул һөйгәненең «иренендә һүнеп барған» йылмайыуҙың ҡатып ҡалыуын шәйләһә, бер аҙҙан һуң шул уҡ иренда «йылмайыуҙың һуңғы сағҡыһы» һүнеүен күрә. Әммә ул бер ниндәй ҙә үпкә белдермәй, бөтәһен дә яҙмышҡа һылтай.

Лирик поэзияла Әлфиәнең мөхәббәт темаһына айырыуса һаҡсыл булыуы, уны ғәйәт нескә һәм тәрән тойомлауы «Үткәндәргә ҡайтам…» тигән шиғырында ла ярылып ята. Шиғырҙың лирик геройняһы, йылы алыр өсөн уйҙарында ғына булһа ла үткәндәргә ҡайтып, йөрәгендәге һағыш ҡылын һаҡларға тырышыуын белдерә:

Һөйөүем бит үҙем менән бергә,
Үткәндәрҙә түгел ул, белһәң.
Нимә ҡалыр миңә, йөрәгемдең
Һиңә тоташ ҡылы өҙөлһә…

Билдәле булыуынса, лирик герой образында авторҙың характер үҙенсәлектәре, уй-фекерҙәре, эске кисерештәре, донъя хәлдәренә ҡараштары барыбер ҙә сағылыш тапмай ҡалмай. Ә. Әсәҙуллинаның «Затым», «Сәм», «Тел тураһында һүҙ», «Яман һүҙҙең көсө», «Алыш», «Ауырыуҙан һуң…», «Нахаҡ һүҙ ишеткәс…», «Һөйлә әле…», «Милләттәшкә өндәшеү», «Бер ҡатлы сәп», «Йөрәк» тигән шиғырҙары шундайҙар иҫәбендә тимәксемен. Ошо һәм ошоға тартым башҡа

шиғырҙарға таянып, шағирәнең психологик портретын төҫмөрләргә булыр ине.

«Затым» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул үҙенең иле-ере, тарихы, ата-бабалары менән ғорурланһа, «Сәм»дә иһә «көтөлмәгән ҡайғы уғы» йөрәгенә зыңлап ҡаҙалһа ла, «тамған ҡандан өмөтһөҙлөк түгел, тик тормошҡа һөйөү ярала», тип ышандыра уҡыусыһын. Әгәр «Алыш»та шағирә:

Насарлыҡ менән бәрелеп
Тойғолар тупаҫлана.
Йөрәккә ҡандар һауа ла
Күңелдә тутыҡ ҡала, –

тигән зары менән уртаҡлашһа, «Нахаҡ һүҙ ишеткәс…»тә иһә ул:

Йөрәгемде ярып инрәү тыуҙы –
Нахаҡ һүҙҙән ҡалдым «аһ» ороп, –
Үҙем аяп бер һүҙ ҡаталмауҙан
Йәнем өҙгөләнеү, ахыры, –

тигән үкенесен белдерә.

Ә. Әсәҙуллинаның ижад серҙәре,тәү сиратта – шиғриәт хаҡында уйланыуҙарҙан торған әҫәрҙәрендә лә осраштыра. Ундай әҫәрҙәрҙә шағирәнең үҙе менән лирик геройыныһы араһында айырма юҡ хәлендә тиерлек, бөтөнләйе менән юҡ тиһәк тә әллә ни хата булмаҫ, сөнки лирик героиняның әйткәне тулы килеш автор позицияһы шикелле ҡабул ителә. «Көлөп торған шиғыр һорамағыҙ – тормош тормай уйын-көлкөнән. Аптырама юҡҡа, уҡығанда заман зары ғына бөркөлһә. Донъя нисек, мин үҙем дә шулай…» тип, мәҫәлән, шиғыр авторынан башҡа кем генә әйтергә мөмкин? Заман зары бөркөлгән шиғырҙар ысынлап та йыш ҡына күҙгә салына Ә. Әсәҙуллина ижадында.

«Үҙгәрмәм», «Таптар хаҡында шиғыр», «Япраҡһыҙ сағы ағастың…», «Айлы төндә зәңгәр нурҙар…», «Үҙәгенән ҡара янған ағас…», «Мин Пушкин да түгелмен…» тигән шиғырҙарҙың да лирик героинялары авторға бик яҡын торалар, уның уй-кисерештәрен һүҙмә-һүҙ ҡабатлайҙар һымаҡ. Шуларҙан ҡайһы бер миҫалдар килтереп китһәк, яҙыҡ булмаҫ.

Һай, дөрөҫөн әйтеп киҫәтәләр
Нисә тапҡыр, нисә мәртәбә!
Ҡала бирәм һаман үҙгәрмәйсә,
Керә белмәм, ахыры, «тәртәгә».
(«Үҙгәрмәм»).

Шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына көтмәй,
Үпкәләһәм, тимәк, бар хаҡым.
Холҡом менән ғәфү итә белгән,
Яныҫ һөйә белгән бер затмын.
(«Таптар хаҡында шиғыр»).

Күңеле яралы берәү
Уҡып, алалһа йылы,
Ошо булыр шифриәттең
Шифалы тылсым-ҡулы.
(«Мин Пушкин да түгелмен…»).

Дөйөм алғанда, «Сайҡала сауҡалар»ҙа күтәрелгән темалар һәм идеялар Әлфиә Әсәҙуллинаның быуат башындағы ижадына ла хас. Әүәлгесә минор тонда яңғыраған һәм өгөт-нәсихәт уҡыуға ҡайтып ҡалған шиғырҙар ҙа осраштыра («Саҡырыу», «Өндәшеү»). Мөхәббәт темаһы ла иғтибарҙан ситтә ҡалмай («Һөйөүем», «Йөрәгемдә – һин», «Йәшлегемдең наҙы, таты булдың…»). Донъя хәлдәре, уның ҡоролошо һәм асылы хаҡында уйланыуҙар ҙа тынғылыҡ бирмәй шағирәгә («Йөк аты», «Замана»,«Йәнем дау күтәрә», «Кемгә – нисек», «Алмаш – тилмәш», «Һаҙлыҡ»,«Тау»).Үҙенең уй-тойғолары, хәл-әхүәле менән уртаҡлашҡан шиғырҙар ҙа байтаҡ ҡына («Тыуған йортта», «Яуап», «Нимә был?», «Йәшен ҡайтарғыс», «Ярай әле», «Шағирға», «Көтөү», «Сер йомоп йөрөй йөрәгем…», «Теләгеңде ҡабатласы…», «Минең яҙым», «Әсәйемә»). Гражданлыҡ пафосы ла ят күренеш түгел Әлфиә өсөн («Дуҫлыҡҡа мәҙхиә», «Журналистҡа», «Бал кәрәҙе – Башҡортостан»). Әйткәндәр буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китмәй ярамаҫ.

Тәү ҡарамаҡҡа «Саҡырыу» менән «Өндәшеү»ҙә («Ағизел», 2002, 3-се һан) һүҙ тормоштан тотоп алынған төрлө күренештәр хаҡында барған һымаҡ. Ләкин шиғырҙарҙы сағыштырып, уларҙың йөкмәткеһенә ныҡлабыраҡ инә башлаһаң, был күренештәрҙең төбөндә бер үк сәбәп

ятҡанлығына төшөнәһең. «Саҡырыу» тигәнендә, мәҫәлән, автор, милләттәштәрен һаҡ булырға, аң булырға өндәп: «Ер һатмаҫҡа, ҡол булмаҫҡа, кәрәк бары йоҡламаҫҡа, йоҡламаҫҡа!!!», ти. «Өндәшеү» иһә эскелеккә ҡаршы йүнәлтелгән. Ул бындай юлдар менән тамамлана:

Эй, башҡортом, эскәйҙәрҙе өҙә
Араҡыға сумған бөгөнгөң.
Тыуыр йәндәр, атыр таңдарыңды
Быуып ырғытаһың һин үҙең.

Был йәмһеҙ, тиҫкәре күренештәрҙең айырыуса ҡайһы осорҙа ифрат киң таралыуы, хатта сәскә атыуы хаҡында уҡыусыға ентекләп аңлатыуҙың хәжәте юҡ, әлбиттә.

«Ағиҙел»дең шул уҡ йылғы, шул уҡ һанында баҫылып сыҡҡан «Һөйөүем», «Йөрәгемдә – һин» тигән шиғырҙар иң башта үҙҙәренең ыҡсымлығы менән иғтибарҙы йәлеп итәләр һәм күңелгә йәтеш фекер әйтеү өсөн юлдар, строфалар һанының күплеге һис тә төп шарт булып тормауын тағы бер тапҡыр раҫлайҙар. Атамаларынан уҡ күренеүенсә, шиғырҙарҙың икеһе лә мөхәббәт темаһына арналған, ләкин Әлфиә был темаға был юлы ла, өҫтәрәк әйткәнемсә, үҙенсәрәк килә: уның лирик героиняһы мөхәббәт тураһында енел-елпе генә, нисек етте шулай ғына фекер йөрөтөүселәрҙән түгел.Кешегә ғүмер баҡый юлдаш булып, уны һәр ваҡыт оҙата барыусы был тойғоға ул бик етди һәм яуаплы ҡарай. Ошо тойғоноң тәбиғәт күренештәренә бәйләп һүрәтләнеүе Әлфиәнең мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙарын уғата ла отошлораҡ һәм уҡымлыраҡ итә. Традицион дүртәр юллы өс кенә строфанан торған «Һөйөүем»дә, мәҫәлән, шағирә, йыл миҙгелдәре менән сағыштырыу аша, һөйөү хистәренең ни тиклем тәрән дә, көслө лә булыуын иҫ киткес матур итеп тасуирлаған:

Сәскәләрҙе ҡырау аяманы…
Көҙ ҙә китте ҡышҡа тоташып,
Тик һөйөүем генә миҙгел белмәй,
Күңел күктәренә олғашып.

Шундай уҡ традицион ике строфанан торған «Йөрәгемдә – һин»гә лә нескә һәм тәрән мәғәнә төрөлгән. Ул «Һөйөүем»дең дауамы һымағыраҡ яңғырай:

Ҡарҙар ғына яуған ҡышҡы кистең
Һалҡынлығын хатта үҙ итәм, –
Булмышыма йылы биреп торған
Йөрәгемдә һине йөрөтәм.

Ә. Әсәҙуллинаның поэзияһы үҙенең тормошсанлығы менән дә отошло. Әҫәрҙәре өсөн тема һәм материал эҙләп, шағирә күккә ашмай – күпселек осраҡта уларҙы ерҙән, беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡтан эҙләп таба һәм образлы фекерләү ярҙамында шиғриәт кимәленә күтәрә. Ошо йәһәттән «Йөк аты» («Ағизел»,2002, 3-се һан), «Кемгә – нисек», «Алмаш – тилмәш» («Ағизел», 2005, 8-се һан) тигән шиғырҙар айырылыбыраҡ тора. «Йөк аты»нда автор, ни генә тиһәң дә, «ҡорос» ат менән «тимер» арба тере атты алмаштыра алмай, тигән идеяны үткәрә. Шиғыр йөк атына ҡарата уҡыусыла ҡыҙғаныу тойғоһо уята, сөнки, ауыр йөктө тарта алмаһа, уның һыртына ҡамсы тарталар, ә аттың өндәшергә теле юҡ.

«Кемгә – нисек», «Алмаш – тилмәш» тигән шиғырҙарҙа авторҙың күҙәтеүсәнлеге, күргән-белгәндәренән көтөлмәгәнерәк һығымта яһап ҡуйыу оҫталығы күҙгә оторо ла нығыраҡ ташлана. Ауыл кешеһенең, мәҫәлән, һандуғастар моңона иркәләнеп, тирә-йүндәге гүзәллекте тойоп, һоҡланып йәшәргә ваҡыты юклығын башҡалар ауыҙынан ишетеп түгел, ә үҙ күҙҙәре менән күреп белгән шағирә бындай һөҙөмтәгә килергә мәжбүр:

Ни әйтәһең быға...
Һәммә затлың
Үҙ мөнбәре үҙенә юғары.
Күләүектә берәү йондоҙ күрә,
Берәүгә ул быҫраҡ һыу бары.
(«Кемгә – нисек»).

Йәшәйештәге ябай ғына бер күренештән (автобуста барғанда йә ҡояшлы, йә күләгәле яҡҡа тура киләһең) автор йәнә бер метафора тыуҙыра:

Тормош үҙе лә шулай бит,
Яҡтылыҡ – ҡараңғылыҡ
Ғүмер буйына оҙата
Алмаш та тилмәш булып.
(«Алмаш – тилмәш»).

«Замана» ла («Ағизел», 2002, 3-се һан) – ошо юҫыҡтағы шиғыр, тиер инем:

Донъялыҡта ялған, мәкер
Яғанан алып тора;
Яҙа-йоҙа әйткән һүҙҙән
Хәтерҙәр ҡалып тора.
Хәүеф һағалап тора.

«Сайҡала сауҡалар»ҙағы шикелле, Әлфиә Әсәҙуллина быуат башындағы ижадында ла үҙенең эске донъяһын, күңел торошон, уй-хистәрен уҡыусынан йәшермәй. «Тыуған йортта» («Ағизел», 2002, 3-се һан) тигән шиғырында ул бына нимә тип яҙа:

Атам-әсәм эргәһендә генә
Сабыйлыҡҡа ҡайта йәнгенәм,
Ығы-зығыларҙан арынам да
Ысыҡ тамсыһына әйләнәм.

«Теләгеңде ҡабатласы…»ла ла («Ағизел», 2009, 3-се һан) һүҙ тыуған йорт, ата-әсә тәрбиәһе хаҡында бара. Шуғалалыр, бәлки, ул автобиографик характерҙағы һыҙаттарҙан да азат түгел. Шиғырҙың төп мәғәнәһен аңларға, уның елегенә төшөргә тәүге һәм һуңғы строфалар ярҙам итә:

Үҙең үкһеҙ етем үҫкәнгәме,
Теләгеңдең, әсәй, иң ҙуры:
«Балаларым етем ҡалмаһындар,
Ғүмеребеҙ оҙон булғыры!»
. . . . . .
Тыуған йортта…
… Сүгеп кенә бара атай, әсәй,
Болоҡһоуҙар йәнде ҡаната.
Һеҙҙән башҡа йәшәп өйрәнмәнек,
Теләгеңде, әсәй, ҡабатла!
Теләгеңде, зинһар, ҡабатла…

Атаһы менән әсәһе образын Әлфиәнең башҡа шиғырҙарында ла осратырға мөмкин. Әммә ләкин, улар бөтәһе лә тәрән тойғолар, нескә

хистәр менән һуғарылған булһалар ҙа, «Сайҡала сауҡалар»ҙағылары – уңышлыраҡ та, күңелгә лә йәтешлерәк.Ҡыҫҡалығында – оҫталыҡ, тип һис тә юҡҡа ғына әйтмәгәндәр шул.

«Яманлыҡтар ҡылып торғанда ла, изгелектәр ҡылып аш һонам», ти «Йәнем дау күтәрә» исемле шиғырҙың йәшертен генә заман заңдары хаҡында уйланып, баш ватҡан лирик героиняһы. Ә бына«Нимә был?», «Йәшен ҡайтарғыс», «Ярай әле» («Ағиҙел», 2005, 8-се һан) тигән шиғырҙарҙа, заман заңына ҡарағанда, лирик героиняның шәхсән тормошона бәйле ҡайһы бер фрагменттарҙы һүрәтләүгә өҫтөнлөк бирелгәндәй. Һәм ошо урында тағы бер тапҡыр Әлфиәнең лирик героиняһы менән уның үҙе араһында сиктәр юҡ хәлендә, тимәксемен. Илһамы килгән бер мәлде ул бына нисек тасуирлай:

Минең бит бындай саҡ бик һирәк,
Ваҡытһыҙ саҡтарым күберәк.
Өҙөлөп-йолконоп йәшәйем,
Әйтегеҙ, ҡасан һуң йәшнәйем?

«Йәшен ҡайтарғыс» – психологик характерҙағы кисерештәрҙән туҡылған шиғыр . Лирик героиня, шул иҫәптән шағирәләләр инде, үҙен йәшен ҡайтарғысҡа тиңләй, сөнки уға ишеткән ауыр һүҙҙәр уның йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалһа ла, уларҙы ҡуҡәреп ебәрергә тырыша. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ваҡыт тигәнең рәнйөште уңалтып, йөрәкте йүнәлтһә лә, Назар Нәжмиҙең бер шиғырындағыса, ҡабат ялғанған ҡылдарҙа барыбер ҙә төйөн ҡала.

«Ярай әле»не темаһы һәм идеяһы яғынан «Йәшен үткәргес»тең дауамы тиергә була. Улар күләмдәре менән дә бер тигеҙҙәр: икеһе лә дүртәр юллы бишәр строфанан тора. «Ярай әле»нең идея-художество ҡиммәте өсөнсө һәм бишенсе строфаларҙа асығыраҡ сағыла, минеңсә:

Инандым гел мәрхәмәткә,
Йөҙөмдән алғанда ла;
Баштан-аяҡ бысраҡҡа
Ҡойоноп ҡалғанда ла.

. . . . . .

Йәшем менән йыуындым да
Мәкерҙән таҙарындым.
Йөрәгем шат, йөҙөм яҡты –
Яңынан әҙәм булдым!

Һуңғы ваҡытта Ә. Әсәҙуллина бер строфанан ғына торған ҡыҫҡа шиғырҙар ижад итеү өлкәһендә лә көсөн һынап ҡарай башланы. Күләмдәре йәһәтенән улар төрлө: өс, дүрт, биш, алты юллыҡтар. Билдәле булыуынса, шиғриәттең был төрө авторҙан ҙур оҫталыҡ та, айырым әҙерлек тә талап итә, сөнки һанаулы ғына юлдар ярҙамында төплө һәм тәрән фекер әйтеү еңел эш түгел. Шуға күрә Әлфиә ҡәләме аҫтынан сыҡҡан ҡыҫҡа шиғырҙарҙың бөтәһе лә уңышҡа тарыған тиһәк, дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине. Әммә уңышлылары ла юҡ түгел. Ике генә миҫал:

Күңел күҙе – күҙлекһеҙ,
Күрә алмай өҙлөкһөҙ.
Күңел күҙе тотоп алыр
Күрмәгәнде ябай күҙ.
. . . . . .
Күтәрелеп күҙҙәремә ҡара –
Йәшәү көсө унда, дәрт, илһам.
Йәндәреңдә имләп торғоҙорлоҡ,
Һиҡәлтәлә абынып йығылһаң.

Быуат башында Әлфиә Әсәҙуллинаның поэзия өлкәһендә яулаған иң ҙур ҡаҙанышы – әлбиттә, уның «Хәтер күпере» («Ағизел», 2012, 5-се һан) тип аталған поэмаһы. Инеш һүҙҙән дә,шулай уҡ әҫәрҙең йөкмәткеһенән дә күренеүенсә, ул автобиографик һәм документаль факттарға бай. Ләкин был һис кенә лә поэманың бәҫен төшөрмәй,сөнки унда бөтә-хәл ваҡиғалар ҙа ярайһы уҡ юғары художество кимәлендә һүрәтләнгән. «Хәтер күпере»н бирелеп уҡығанда, өҫтә тикшерелгән шиғырҙарҙың авторы Әлфиә Әсәҙуллина яңынан беҙҙең күҙ алдына килеп баҫҡандай була: шул уҡ ҡат-ҡат уҡыуҙы талап итә торған стиль, шул уҡ һығылмалы тел, матур һәм сағыу итеп тасуирланған шул уҡ бай пейзаж күренештәре, ҡартатаһы рухы менән осрашҡандан һуң яһап ҡуйған аҡыллы һығымталар һ.б., һ.б. Сюжет ағышында авторҙың өләсәһе образы менән атаһының бала сағы ла күренеп китә. Йыйып ҡына әйткәндә, ҡартатаһы яу ҡайтарған ерҙәрҙә турист сифатында үткәргән һанаулы ғына көндәрҙә автор үҙенең хәтер экранында бик күп ваҡиғаларҙы тергеҙеп һәм һүрәтләп өлгөрә.

Әлбиттә, шағирә был ваҡиғаларҙы (быны ул үҙе лә йәшермәй!) китаптарҙан уҡып, кинофильмдарҙан күреп, атаһы менән әсәһенән

ишетеп белә. Әммә маһир булһаң, уҡып-ишетеп белгәндәрҙән дә бынамын тигән йәнле образдар һәм картиналар тыуҙырырға мөмкин икән. Иң мөһиме, Бөйөк Ватан һуғышы йомғаҡтары хаҡында төрлө уйҙырмалар сәскә атҡан бер заманда, Әлфиә Әсәҙуллина тыуҙырған образдарҙың һәм картиналарҙың ифрат ваҡытлы булыуында һәм көн үҙәгендә торған быуындар күсәгилешлеге проблемаһын ыңғай хәл итешеүгә үҙенең өлөшөн индереүҙә. Бөгөнгө башҡорт поэмаһын бөтә нескәлегендә өйрәнеп, уны ғилми нигеҙҙә тикшереүселәр иғтибарынан «Хәтер күпере» лә ситтә ҡалмаҫ, тип уйлайым. Был поэма Әсәҙуллина ижадында тәүгеһе булһа ла, һуңғыһы булмаҫ әле, тип юрайыҡ.

Әлфиә Әсәҙуллина тураһындағы был күҙәтеүҙәремдең ахырына еткәндә, яҙылыу ваҡыттары менән бер-береһенән шаҡтай алыҫ торған ике шиғырға – «Мин – юлда» һәм «Минең яҙым» тигән шиғырҙарға мөнәсәбәтемде белдерергә бүлдым. «Минең яҙым» («Ағиҙел», 2009, 3-сө һан) шағирәнең тәүге түңәрәк юбилейына арнабыраҡ яҙылғанға оҡшап тора. Ул әйтерһең дә зауыҡлы һәм талапсан уҡыусылары алдында хисап тота. Дүртәр юллы һигеҙ строфаның бына бынаһы матурыраҡ яңғырай, минеңсә:

Бөтәһе лә бында үҙемдеке:
Һалҡын ҡышы, яҙ, йәй, көҙ мәле.
Миҙгел һайын алышынып тора
Тәбиғәттең затлы күлдәге

Хәҙер «Мин – юлда» тигән шиғырға әйләнеп ҡайтайыҡ. Ни өсөн «әйләнеп ҡайтайыҡ»? Сөнки ул «Минең яҙым»дан байтаҡ элегерәк яҙылған һәм «Сайҡала сауҡалар»ҙа үҙенең тейешле урынын биләгән. «Минең яҙым» шикелле, ул да дүртәр юллы строфаларҙан тора, тик строфалар һаны ике тапҡырға кәмерәк. Ғәжәп, шулай булыуға ҡарамаҫтан, яңғырашы менән шиғыр ифрат матур, бай йөкмәткеле. Ни бары ун алты юлға һыйған монологта лирик героиня бөтәһе түгел «хәбәр» һөйләп өлгөргән. («Хәбәр» был осраҡта шиғриәтте сәсмә әҫәргә тиңләү түгел.) Монологта оло юлға сыҡҡан йәш шағирәнең уй-тойғолары сағылған, уның тыйнаҡлығы ла һиҙелеп тора. Айырып алыуы ни тиклем генә ҡыйын булмаһын, бында шиғырҙың һуңғы строфаһын күсереү менән генә сикләнергә тура килә:

Оран һалып, тамаҡ ярып түгел,
Юртағымда елəм тын ҡалып.
Ил йөрəген тыңлап килə-килə,
Ҡуймаһын, тип, ҡапыл туҡталып.

Был мəҡəләгə исем табышҡан «Ҡабул ит» тигəн шиғыр ҙа шулай: дүртəр юллы дүрт кенə строфанан тора. Ə шиғыр матур. Был турала мəҡəләнең башында уҡ əйтелгəйне. Əгəр уға бигүк кəрəге булмаған яңы юлдар өҫтəй башлаһаң, шиғыр моғайын үҙенең төҫөн юғалта башлар ине. Өҫтəлгəн юлдар йөкмəткенең шыйыҡланыуына килтерəсəге тураһында һөйləп тə тораһы юҡ инде.

Беҙҙең алда бер авторҙың ике шиғыры: «Ҡабул ит» һəм «Мин – юлда». Шағирəнең сирек быуатлыҡ ижадын өҫтəн-мөҫтəн генə булһа ла күҙ уңынан уҙғарғас, был шиғырҙарға ҡарап, нимə əйтергə мөмкин? Яуап берəү генə: Əлфиə Əсəҙуллинаны тормош та, əҙəбиəт тə үҙ ҡосағына алды. Хəҙер ул байтаҡ йылдар инде шиғриəт юлында. Шул юлда уны яңы уңыштар, тынғыһыҙ ижад алып килгəн яңы шатлыҡтар оҙата барһын.

Бələкəй генə иҫкəрмə. Был мəҡəләгə ойотҡо бынан егерме йыл элек һалынғайны. Ləкин, тəүге тəьҫорат алдаҡҡыс булмаһын тип, мəҡəләгə тотонорға һəм фекерҙəремде асып һалырға ашыҡманым. Əлфиə Əсəҙуллинаның яңы шиғырҙарын көттөм. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар нишləптер көттөрөбөрəк килделəр. Ниһайəт, яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, шағирə, өҫтə əйткәнемсə, һирəкləберəк булһа ла, «Ағиҙел» биттəрендə күренə башланы. Улай ғына ла түгел, шиғырҙар менəн бергə тəүге поэма ла донъяға килде. Бер шиғырында шағирə үҙе əйткəнсəрəк килеп сыҡты: «Көткəн – еткəн…».

2013, февраль

БАШҠОРТ ТА УЛ, РОССИЯН ДА

Бынан күп йылдар элек Ирек Кинйәбулатовтың «Мин – башҡорт!» тигән шиғырын уҡып ултырғанда, Мостай Кәримдең «Россиянмын» тигән шиғыры хәтергә төшөп йөҙәткәне иҫтә ҡалған. Яҙылыу мәлдәре буйынса уларҙы бер-береһен дүрт тиҫтә йыл айырып тороһа ла, был шиғырҙарҙың мотивтарында ниндәйҙер яҡынлыҡ һәм уртаҡлыҡ бар һымаҡ тойолғайны. Шиғырҙарҙың икеһендә лә һүҙ милләт яҙмышы, уның үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында бара. Әгәр Мостай Кәрим ун бер строфанан торған шиғырының береһендә:

Күңелемдә минең көн сыуағы,
Күҙҙәремдә – ҡояш нурҙары,
Йөрәгемдә – мең йыл тотҡонлоҡто
Үтеп сыҡҡан өмөт йырҙары, –

тип яҙһа, Ирек Кинйәбулатов инә ун өс строфанан торған әҫәрен бындай юлдар менән тамамлап ҡуйғайны:

Мин – күптәнге,
Киләсәкке башҡорт –
Меңәр йыллыҡ юлым артымда.
Үткәндәре барҙың – киләһе бар,
Шуны белһен йәшем, ҡартым да.

Шулай ҙа, мотивтар уртаҡлығы менән бергә, был ике шиғыр араһында күпмелер айырмалыҡ та һиҙелә кеүек ине. Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы башлыса күтәренке рух менән һуғарылған һәм ул уҡыусыла һис шикһеҙ ыңғай эмоция уята. «Россиянмын» шиғыры,– тип билдәләгәйне үҙ ваҡытында Ғ. Хөсәйенов,– тамырҙары дүрт быуат элгәре бергә тоташҡан, яҙмыштарын иш иткән, юлда юлдаш, яуҙа яуҙаш, дандаш һәм ҡәберҙәш башҡорт менән рус халыҡтарының мәңгелек дуҫлығына алтын һүҙҙәрҙән ҡойолған поэтик һәйкәл дәрәжәһендә». Танылған ғалимдың был билдәләмәһенә байтаҡ йылдар үтеп китһә лә, ул әле лә үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған, минеңсә.

Әгәр Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы уҡыусыла ыңғай эмоция уята, тигәнмен икән, был һис кенә лә Ирек Кинйәбулатовтың «Мин – башҡорт!»о гел кире эмоцияға ғына ҡоролған икән, тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Дөрөҫ, унда кире эмоцияға ла урын юҡ түгел. Ләкин уның үҙ сәбәптәре булыуын да онотоп ташларға ярамайзыр. Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы дүрт йылға һуҙылған ҡаты һуғыштан һуң илде аяҡҡа баҫтырыу өсөн барған көрәш дәүерендә ижад ителгән булһа, Ирек Кинйәбулатовтың «Мин – башҡорт!»о быға тиклем донъя күләмендә дан тоҡған бөйөк державаны төрлө һылтауҙар менән юҡҡа сығарған осорға тура килә. Проф. Т. Килмөхәмәтов «Мин – башҡорт!»то күкрәк һуғыу түгел, ә «бөгөнгөсә тормошсанлыҡты көслө яңғыратҡан» әҫәр, тип атаны. Ғалимдың түбәндәге хаҡ һүҙҙәре менән дә килешмәй сара юҡ: был әҫәрендә, тип яҙҙы ул, шағир «башҡорттоң даланлы олуғ тарихын иҫенә төшөрөп, замандашта милли намыҫ, милли сәм, милли аң уятыуҙы маҡсат итеп ҡуя».

«Мин – башҡорт!» тигән шиғырына автор үҙе лә битараф түгел, шикелле. 1993 йылда донъя күргән бер китабына ул ошо исемде ҡушты. Юл ыңғайында шуны ла иҫкә төшөрөп үзайыҡ: быға тиклем Ирек Кинйәбулатов «Баҫыу юлы», «Сыйырсыҡтар бала осора», «Һөйөү иртәһе» тигән йыйынтыҡтарын бүләк иткәйне уҡыусыға. Артабан инһә, «Мин – башҡорт!»тан һуң, «Арғымаҡта», «Заман тауышы», «Ғүмер китабы» тигән йыйынтыҡтар донъяға килде. Уларға шағирзың рус телендә баҫылып сыҡҡан «Доброе утро!», «Слово» тигән китаптары килеп өҫтәлдде.

И. Кинйәбулатовтың поэзияһы менән яҡынданыраҡ танышҡанда, «Мин – башҡорт!» тигән һөйләмдең ысынлап та, тиктомалға күкрәк һуғыу түгеллегенә ышанаһың. Шаҡтай элегерәк яҙылған «Рәсәй» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:

Үҙ илеңде – илем, тиһәң,
Ирендәре уның кибә.
Үҙ телеңдә һөйләгәнде
Ул сит күрә, ситкә тибә.

Ләкин, заманында бик тә ҡыйыу һәм уҫал яңғыраған был юлдар хасил булғанда, ун-ун биш йылдан һуң беҙҙе ниҙәр көтәсәген шағир күҙ алдына ла килтермәгәндер. Әгәр килтерһә, Рәсәйҙе «Беҙ тыумыштан белмәгәнбеҙ: ул булған бит үгәй әсәй», тимәҫ тә ине, бәлки. Илде «үҙгәртеп ҡороу эпопеяһы» башланғас, ҡасандыр уның көньяҡ сиктәрен

һаҡлауға дүрт йыл ғүмерен сарыф иткән хәрби диңгеҙ флоты офицеры Ирек Кинйәбулатов был мәхшәргә күҙ йомоп ҡалалманы, әлбиттә. Сөнки быға тиклем үгәй әсәләй тойолған Рәсәйҙең хәле ни тиклем мөшкөл икәнлеген шағир яҡшы аңлай ине. Жанры буйынса эпитафияға оҡшап торған «Егерменсе быуат» тигән әҫәрендә ул үҙгәртеп ҡороу алып килгән «мөғжизәгә» үҙенең ҡараштарын бер ниндәй икеләнеүһеҙ, туранан-тура ярып һалды. Был шиғырҙың һәр строфаһы уты һүнеп өлгөрмәгән ҡуҙ һымаҡ өтөп ала:

Ярышып, сәмләнеп,
Булғанды таратып,
Һорайбыҙ хәйерҙәр,
Донъяны аптыратып.
. . . . . .
Егерменсе быуат,
Түгелме ни оят?
Тұңкәрелмәҫ әлек
Выжданыңды уят!

Тарих төпкөлөнә йүнәлгәндә үҙе артынан иҫәпһеҙ-хисапһыҙ сүп-сар, көтөлмәгән мәшәкәттәр, иңгә-башҡа һыймаҫлыҡ ҡайғы-хәсрәт ҡалдырып киткән быуат шағир йөрәгендә бик күп ҡатмарлы хистәр, бөтмәҫ-төкәнмәҫ һорауҙар уята: «Ҡайҙа баҫма – кәртә, ҡайҙа баҡма–упҡын»; «Ер өҫтөндә дөрләй күпме тамуҡ уты…»; «Юлдар алға түгел, бары артҡа илтә»; «Ирҙәре йомшаны, ҡатындар ҡаттылар»; «Арттары ал булып, алдары арт булды…»; «Аңларға һуң нисек, ҡор башында – иблис»; «Алтындың өҫтөндә ас беҙ, яланғас беҙ»; «Ғазаптың башымы быуаттың аҙағы?» һ.б. Был метафораларҙың бөтәһе лә беҙҙең шул осорҙағы ысынбарлығыбыҙҙан үҫеп сыҡҡан һәм уларҙа бер ниндәй ҙә арттырыу ҙа, күпертеү ҙә юҡ. «Ер өҫтөндә дөрләй күпме тамуҡ уты…», «Аңларға һуң нисек, ҡор башында – иблис», «Ғазаптың башымы быуаттың аҙағы?» тигәндәре айырыуса көслө яңғырай, минеңсә. Былай тип әйтергә образлы фекерләү маһирлығы ғына түгел, күпмелер кимәлдә ҡыйыулыҡ та кәрәктер.

Һорауҙар, уйланыуҙар, борсолоуҙар Ирек Кинйәбулатовтың «Иң мөһимен генә яҙ һин!..» тигән шиғырында ла тулып ята. Шиғыр үҙенең сюжет ҡоролошо менән иғтибарҙы йәлеп итә: иң мөһимен генә яҙырға ҡушыусыларға (улар, бәлки, ҡушыусылар, кәңәш итеүселәр генә түгел, ә бойороҡ биреүселәрҙәлер!) автор көтөлмәгән, ләкин бик урынлы һәм

тәғәйен генә яуабын ҡайтара. Шул яуапта шағирҙың үҙ һыны ла сағылып китә: заманыбызға хас булған баш-баштаҡлыҡтар, ғәмһеҙлек һәм битарафлыҡ арҡаһында тирә-йүн мөхитебеҙҙең күҙгә күренеп ярлылана һәм төҫһөҙләнә барыуын ул тыныс ҡына кисерә алмай. Үләндәргә ләйсән урынына көнө-төнө туҙан яуыуына, эсер һыуҙар буръяҡланып, һулар һауаның торған һайын ауырлана барыуына, һыуға сарсағанда йылғалар кәмеп, күлдәр ҡороуына нисек инде битараф ҡалһын үҙен шағирмын тигән шағир һәм нисек инде шулар тураһында әсенеп яҙмайынса түҙә алһын ул? Әҙәм балаһы өсөн был донъяла ер-һыуҙан да ҡәҙерлерәк нимә бар, тигән һығымтаға килтерә автор уҡыусыһын. Шағирҙың бына был борсолоуҙары менән тәнендә йәне булған кем генә килешмәҫ тә, кем генә уның менән бергә һыҙланмаҫ икән:

Һыҙланыу арта йөрәгемдә,
Төйәгемдән кейек китһә,
Етем торна ҡош ояһы,
Сәскә ҡоймай үлән киткәс.

Арта бара күҙ алдымда
Ҡыуаҡһыҙ ҡош, ҡошһоҙ ҡыуаҡ.
Ниңә кәмей ерем йәме,
Уның ҡотон кем һуң ҡыуа?

Ошо һыҙланыуҙарҙан бер аҙға ғына булһа ла арынып торор өсөн, үҙен-үҙе тынысландырырға тырышҡан саҡтары ла юҡ түгел шағирҙың. «Иркәләнер иртәләрем бар, тип…» исемле шиғырында, мәҫәлән:

Һәр кем ерҙә үҙе йүнен күрә,
Кемдә, тиһең, минең ҡайғым бар.
Әлдә барын берҙәй тигеҙ күргән
Ал ҡояшым, яҡты айым бар, –

тип йыуата ул үҙен. Ләкин, «ҡара төнөм аҡ өмөттән тора», «мин үҙемдең йәште үҙем һөртәм, мин үҙемде үҙем йыуатам» тиһә лә, уның кәйефе барыбер ҙә болоҡһоу, сөнки үҙеңде көсләп, яһалма рәүештә күңелде күтәреп булмы ни? Беренсе апрелгә бағышлап яҙылған «Көлкө килмәй» тигән шиғырҙа кеше психологияһындағы ошо ҡатмарлы күренеш ифрат асыҡ сағылған. Әлбиттә, әлеге осраҡта беренсе апрель – шағир өсөн бер һылтау ғына. Шиғырҙы баштан-аяҡ иғтибар менән уҡып сыҡҡас, был

һылтауҙың поэтик табышҡа – Ирек Кинйәбулатовтың табышына әүерелеп киткәнлегенә төшөнәһең. Быға тиклем, шаяртып, алдау көнө, көлкө көнө тип йөрөтөлгән көн, шағирҙың осҡор ҡәләме аҫтында, үҙ эсенә ғәйәт тәрән йөкмәткене һыйҙырған әҙәби сара дәрәжәһенә күтәрелгән. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, тигәндәй, ул бушҡа яңғырамаһын өсөн, шиғырҙан ике генә строфа килтерәйек:

Беҙ меҫкенгә, беҙ көлкөгә ҡалдыҡ,
Бөтә донъя эстән көлгәндә.
Көлөү ҡайғыһымы беҙҙә бөгөн,
Көләме ни бәндә бөлгәндә?

. . . . . .

Көн-төн көлә торғас көнбайыштан,
Тороп ҡалманыҡмы көлкөгә?
Уларға беҙ хәҙер һыйынабыҙ,
Тауыҡ барған һымаҡ төлкөгә.

Стиле буйынса Эзопсараҡ яңғыраған «Илде һағыныу» ҙа – ошо юҫыҡтағы шиғыр. Күләме йәһәтенән (24 строфа!) бер аҙ күңелде ҡырһа ла, нимәһе менәндер бәйеткә оҡшабыраҡ торған был әҫәр «баштарға һыймаҫлыҡ талаш, тартыш, һуғыш» мәлендә йәшәгән зирәк аҡыллы уҡыусыны һис кенә лә битараф ҡалдырмайҙыр. Әҫәр тамамланыр алдынаныраҡ килеп кергән «Гөрләп торған илдән нимә тороп ҡалды? Бындай тарҡалыуҙан халыҡ нимә алды?» тигән юлдарҙа ла дөрөҫлөк юҡ түгел, әлбиттә.

Шул уҡ буталсыҡ йылдарҙа ижад ителгән «Был үҙгәртеп ҡороуҙар…»ҙың стиле башҡасараҡ. Ул башҡалыҡ әҫәрҙең атамаһынан һуң ҡуйылған тыныш билдәһенән үк һиҙелеп тора: күп нөктәләр урынына «шул тиклем теңкәгә тейҙе» тип өҫтәйһе генә ҡала. Стиль үҙгәлеген шиғырҙан бөркөп торған юмор сатҡыһында ла күргә була. Ул сатҡы тәүге строфала уҡ ялтлай башлай:

Үҙәктәргә үтте тамам
Был үҙгәртеп ҡороуҙар…
Берәй нәмә үҙгәрерме
Уны уйлап тороуҙан?

Ләкин «Был үҙгәртеп ҡороуҙар…» – һис кенә лә юмористик әҫәр түгел. Икенсе строфала, әйтәйек, ниндәй юмор булһын? Унда юмор

түгел, ә асы хәҡиҡәтте асып һалған сағыу метафора – үтә көслө метафора:

Ыңғай түгел, тик киреҙә
Үҙгәртеүҙәр йышайҙы.
Өҫтә ҡыйыҡ саҡ-саҡ тора,
Аҫта нигеҙ ҡыйшайҙы.

Шиғыр артабан да шулай дауам итә: һиҡһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы автор юморист күҙлеге аша үткәрә, был ваҡиғаларға үҙенең ҡарашын да асыҡтан-асыҡ белдерә:

Үҙгәрҙәләр кешеләр ҙә,
Танымаҫһың ҡайһыһын;
Бөтәһен дә күреп тора,
Күрмәй илдең ҡайғыһын.
. . . . . .
Үҙгәрмәнем тик мин генә,
Сәбәптәр ҙур уға ла.
Көнгә лайыҡ һүҙ тапмайым,
Яҙам, гүйә, доғалар.

Элегерәк, нәфис әҙәбиәт тарихҡа иллюстрация булырға тейеш түгел, тигәнерәк фекер ишетергә тура килгеләй ине. Дөйөм алғанда, был фекерҙең нигеҙендә дөрөҫлөк юҡ түгелдер, әлбиттә. Ләкин әҙәбиәтте тарихтан, тарихи ваҡиғаларҙан бөтөнләй үк айырып ҡарарға ла ярамайҙыр. Сөнки әҙәби әҫәрҙәрҙә (айырыуса уларҙың юғары кимәллеләрендә) тормош дөрөҫлөгө, заман үҙенсәлектәре күпмелер дәрәжәлә үҙҙәренең сағылышын тапмай ҡалмай бит. Тарих булмаһа, тарихи ваҡиғалар бер-береһен алмаштырып тормаһа һәм шул рәүешсә тормош дауам итмәһә, әҙәбиәт үҙе лә булмаҫ ине.

Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, әҙәбиәт тарихҡа иллюстрация булырға тейеш түгел икән, уның көҙгөһө булып торорға хаҡлылыр. Шуға күрә, ваҡыт мәнфәғәттәренән сығып, тарихты, тарихи ваҡиғаларҙы «яңынан уҡырға» тырышҡанда (ә ул ғүмергә шулай булған!), әҙәбиәт тарих дөрөҫлөгөн, тормош дөрөҫлөгөн ҡулынан һәм көсөнән килгәнсә сағылдырған һәм ҡағыҙ битенә теркәп барған берҙән-бер сығанаҡҡа әүерелә түгелме һуң? Пушкин, Лермонтов, Гоголь, Некрасов, Толстой,

Достоевский әҫәрҙәренән башҡа рус дәүләтенең ун туғызынсы быуат тарихын бөтә нескәлектәрендә һәм ҡаршылыҡтарында күҙ алдына баҫтыра алыр инек микән?

Был уй-фекерҙәр И. Кинйәбулатовтың сәйәси лирикаһы менән иркенләберәк танышып ултырғанда тыуҙы. Ул да бит әле һүҙ барған шиғырҙарында (уларҙың һаны иһә өҫтә иҫкә алынғандар менән генә сикләнмәй) рәсми тел менән түгел, ә художество саралары ярҙамында үҙе йәшәгән дәүергә хас хәл-ваҡиғаларҙы теркәп ҡуйған. Шағир булараҡ, Ирек Кинйәбулатов әҙәбиәттең заман көҙгөһө икәнлеген ҡәләмдәштәре миҫалында ла иҫбатлай. «Мәжит Ғафури һәйкәле алдында» тигән шиғыр быға асыҡ миҫал булып тороролоҡ:

Һин аяҡҡа баҫтың, хаҡлыҡ өсөн
Үҙеңдә бер ғәжәп көс табып.
Ярлы, зарлыларҙы яҡлау өсөн,
Шашҡандарға тейеш үҫ табып.

Яҙғандарың – шул осорҙоң үҙе,
Йөрәгеңдән алғас күсереп.
Барыһына үҙең шаһит булып,
Үҙең күреп, үҙең кисереп.

Ошо урында И. Кинйәбулатовтың «Көлкө килмәй»тигән шиғырына яңынан әйләнеп ҡайтырға һәм унан бынауы строфаны күсерергә булдым:

Көлгән булдыҡ, ауыҙ ҡыйшаймаған,
Ҡушма Штаттарҙы мыҫҡыллап;
Беҙҙән улар нисек көлә икән,
Хәйер ебәргәндә мыҫҡаллап?

Шиғырҙың һуңғы юлы иғтибарымды йәлеп итте. Мин ишеткәнде Ирек тә ишетмәй булмаҫ:күп йылдар алдан төҙөп ҡуйған маҡсаттарына ирешеү өсөн илебеҙ нигеҙен көнө-төнө ҡаҡшата башлағас, көнбайыш «дуҫтар» беҙгә үҙҙәренең кейелгән, керләнеп-таушалып бөткән кейем-һалымдарын һалып ебәрә башланылар түгелме һуң? Шуға күрә, өҫтә килтерелгән строфаның һуңғы юлын «Хәйер ебәргәндә мыҫҡыллап» тип әйтеү дөрөҫөрәккә тура килмәҫ ине микән? Бер үк һүҙҙең дүртенсе юлда ла ҡабатланыуҙан шиғырҙың архитектоникаһына әллә ни зыян

килмәй, ә бына уның мәгәнәһе ҡырҡа үҙгәрә. Йыйып ҡына әйткәндә, И.Кинйәбулатовтың сәйәси лирикаһы – көслө лирика. «Юл сатында» исемле китабыма баш һүҙҙә «донъялар аҡтарылғанда юл сатына сығарып ташланһалар ҙа, шағирҙарыбыҙҙың күбеһе ҡойолоп төшмәне, ошо иҫ китмәле болғауыр һәм ҡатмарлы осорҙа ла үҙҙәре булып ҡалдылар һәм ҡала киләләр», тип яҙғайным. Ирек Кинйәбулатов ана шул ҡойолоп төшмәүселәр һәм үҙҙәре булып ҡалыусылар сафында.

Әҙәбиәт майҙанына И. Кинйәбулатов «Баҫыу юлы» тигән китабы менән килеп инде. Иллеләп шиғырҙы үҙ эсенә алған был йыйынтыҡ донъя күргәндә уның авторына утыҙ ике йәш ине. Бик иртә лә түгел, артыҡ һуңламаған да. «Май сүлмәге тышынан билдәле», тиҙәр халыҡ телендә. И. Кинйәбулатовтың тәүге китабына ингән шиғырҙар ҙа ана шул халыҡ әйтемен ҡеүәтләгәндәй. Тәүгеләрҙән һаналған «Ерем» тигән шиғырға ҡолаҡ һалайыҡ. Ун алты ғына юлдан торған ошо әҫәрҙә бала сағын сабый ҡолонға тиңләгән, хәҙер инде егет ҡорона ингән лирик герой образы килеп баҫа беҙҙең алға. Тыуған еренең урманына, тауҙарына, йәшел болонона ғашиҡ булған был егет хистәргә бирелергә һәләтле, шуға ла ул, теге бала сағындағы ҡолондай оса-елеп, барын күреп, донъяла «йәшәү серен» һүтергә иҫәп тота.

«Ерем» тигән шиғырҙы И. Кинйәбулатовтың бөтә ижадына инеш һүҙ ҙә, программа рәүешендәрәк яңғыраған лейтмотив һымаҡ та ҡабул итергә мөмкин, минеңсә. Сөнки был образ менән артабан да шаҡтай йыш осрашырға тура килә. «Игенсе ҡулдары» тигән шиғырҙа, әйтәйек, игендең яртыһы ерҙә, яртыһы ошо ҡулдарҙа үҫкәндәй тойола уға. «Ирәндектә иртә»лә таңдан алда торған игенселәр «бүлдерҙеләр ерҙең йоҡоһон» тип уфтанып ҡуя шағир, әҫәрҙең ахырында иһә «Ә ҡара ер таңда тиртеп тора, тәүге бала көткән әсәләй» тигән иҫ киткес матур сағыштырыуға тап булабыҙ. «Һағынып ҡайтам еремде»лә шағир «Баҫыуҙарым, туғайҙарым минең, һәр һулышым һеҙгә береккән. Күңелемә яңы йырҙар килә, йырҙарым да ергә ереккән…» тип, эске кисерештәрен, уй-тойғоларын асып һалыу менән генә сикләнмәй, «Баҫҡан көйө оҙағыраҡ торһам, тамыр йәйер һымаҡ аяҡтар…» тигән тәрән йөкмәткеле поэтик табышы менән дә уртаҡлаша.

Ер образы менән бергә, И. Кинйәбулатовтың тәүге китабына тупланған шиғырҙарында юл образы ла моронлай. Китапҡа исем ҡушҡан әҫәрҙә ул айырыуса көслө яңғырай һәм символ дәрәжәһенә күтәрелә хатта: «Баҫыу юлы – минең сабый сағым, йәшәүемдең тәүге аҙымы». Был шиғыр тураһында һүҙ сыҡҡанда, ғәҙәттә уның «Ҡамыллы

ҡыр шул саҡ атайымдың яңаҡтары төҫлө тойолдо» тигән һуңғы ике юлына баҫым яһап әйтеүсәндәр. Һүҙ юҡ, һуғыш яланында һәләк булған атай образы бында хәтергә мәңгегә һеңеп ҡалырлыҡ итеп һүрәтләнгән. Әммә әле һүҙ барған шиғырҙа бынан башҡа ла көслө яңғыраған юлдар бар. Бәлки, фекер тығыҙлығынан, бер нисә шиғырҙа әйтер һүҙҙе бер шиғырға һыйҙырыуҙан шулай килеп сыҡҡандыр. Мәҫәлән, «Юлдар миңә, мин юлдарға юлдаш, тик үткенсе булмам тормошта…» тигән һүҙҙәр Горькийса яңғырай ҙабаһа. Ул да бит Ер йөҙөндә йәшәүсе кешеләрҙе, уларҙың ҡылыҡтарынан, холоҡ-фиғылдәренән сығып, ике төргә бүлеп ҡараған: «үткенселәр» («прохожие») һәм «атлап үтеүселәр» («проходящие»). «Атлап үтеүселәр» иҫәбенә бөйөк рус яҙыусыһы донъяла йәшәү дәүерендә үҙҙәре артынан ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалдырыусыларҙы, «үткенселәр»гә иһә үҙ яйына, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртып йәшәгәндәрҙе индергән.

«Урам көйө», «Ғүмер», «Тыуған көнөм», «Зәңгәр юлдар», «Ауылымдың оло юлы», «Киткәнемдә» һәм тағы әллә күпме шиғыр юл стихияһы менән һуғарылған. Миңә бының сәбәбен тәғәйен генә, бәхәскә инеп тормаҫлыҡ итеп кенә аҫып һалыуы ҡыйын. Бәлки, әлегә кәрәге лә юҡтыр. Уны шағирҙың журналист булып эшләгән дәүерҙә республикабыҙҙы иңләп-буйлап йөрөүе менән аңлатырға тырышһаҡ, бер яҡлыраҡ килеп сығыр төҫлө. Иңләп-буйлап йөрөүселәр күп ул, ләкин нишләптер уларҙы юл мотивы оҙата барыуы ғына һиҙелмәй. Күрәһең, сәбәп ҡайҙалыр алыҫтараҡ, тәптәрәк яталыр. «Урам көйө» менән «Ғүмер» тигән шиғырҙар ҙа минеңсә шулайыраҡ уйларға мәжбүр итә. Әгәр «Урам көйө»ндә шағир, атаһын һуғышҡа оҙатҡан көндө хәтерләп, «Саңлы юлдан аттар китте, китте… Урам көйө күпкә баҫылды», тип көрһөнһә, әлегә йәш авторҙар исемлегендә йөрөтөлгән Иректең «Ғүмер» тигән шиғырынан иһә фәлсәфәүи фекер һирпелеп киткәндәй була: уҙған ғүмерҙе ағым һыу менән сағыштырып, шағир, һыу юлынан айырмалы булараҡ, кеше ғүмеренең урау-урау икәнлегенә иғтибарҙы йүнәлтә; шул уҡ ваҡытта,ғүмерҙең керпек ҡаҡҡансы үтеп китерен яҡшы аңлаған шағир, күберәк юлда булыуҙы хәйерлерәк күрә

Ошо урында ирекһеҙҙән «Ғүмер үтә, тибеҙ» исемле шиғыр иҫкә килеп төшә. Уның төбөндә лә фәлсәфә ята, тимәксемен. Һүҙҙе, һүҙ юҡтан – һүҙ булһын, тип уйнатыуҙан түгел, ә төптән уйлап, уның мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға тырышыуҙан килеп тыуған фәлсәфә. Ҡарап тороуға, шиғырҙың йөкмәткеһе ҡатмарлы түгел.Тик быға тиклем шул йөкмәткегә төрөлгән күренешкә иғтибар иткәнебеҙ булды микән? Һөҙөмтә

ябайларҙан ябай: донъяла бөтә нәмә лә хәрәкәттә. Шуға күрә ел – иҫергә, һыуҙар – ағырға, ҡар – яуырға, бөрө – тумалырға, сәскә – атырға тейеш. Улар менән бергә ғүмер ҙә үтә һәм үтергә тейеш. Әгәр үтмәһә, ул туҡтала. Шағирҙың «Ғүмер үткәненә үкенмәйем, бушҡа үтһә генә үкенәм» тигән һөҙөмтәгә килеүе лә тәбиғи.

Күләме йәһәтенән ҙурыраҡ булһа ла, «Ауылымдың оло юлы» ла ҡыҙыҡһыныу уятмаҫлыҡ түгел: әлегә ҡәҙәр имгәкләгән сабый,уға табан сабып килгән тайҙан ҡурҡып, ҡапыл ике аяғына баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Шиғырҙың һуңғы строфаһы ҙур мәғәнәгә эйә:

Әҙер юлдан юлға сыҡҡас,
Үҙем дә юл һалһам ине.
Һуңғы аҙымды баҫҡансы,
Оло юлда ҡалһам ине.

Ә бына ике генә строфанан торған «Киткәнемдә…» тигән шиғыр бер ниндәй ҙә комментарийға мохтаж түгел. Уны бында тулы килеш күсерһәк тә, яҙыҡ булмаҫ:

Алыҫтарға тағы юлға сығам,
Сәфәрҙәрҙе килмәй һанағым.
Күҙҙәремә ниңә моң һарыла,
Ниңә кибә әле тамағым?

Ынтыламын үҙем офоҡтарға,
Юлдарымдың юҡтай тамамы.
Барыр ерҙәремә етмәгәнмен,
Ҡайтырымды уйлап янамын…

Теге йәки был яҙыусының йәиһә шағирҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнгәндә, уны осорҙарға бүлеүсәндәр. Ирек Кинйәбулатовтың ижадына киңерәк ҡараш ташлаһаң, бындай мохтажлыҡ юҡ һымаҡ, сөнки ул үҙ ижадын үҙе осорҙарға бүлә бара. Өҫтә «Баҫыу юлы» тигән шиғырҙың да, шул исем аҫтында баҫылып сыҡҡан тәүге китаптың да символик мәғәнәгә эйә булыуы хаҡында һүҙ ҡуҙғатып ҡуйылғайны инде. Икенсе китаптың атамаһында ла («Сыйырсыҡтар бала осора») һәм уға ингән әҫәрҙәрҙә символика юҡ түгел: баҫыуҙы ауыл менән тоташтырған оло

юлда ҡурҡыуынан тәү тапҡыр аяҡтарына баҫып, үҙаллы атлап киткән сабыйға ҡанаттар үҫеп сығыр ваҡыт та еткән.

Иллеһе тулған йылда донъя күргән «Һөйөү иртәһе» тигән өсөнсө китабының атамаһына ла хикмәтле мәғәнә төрөлмәй ҡалмаған. «Мин – башҡорт!» тураһында һөйләп тә тораһы юҡ – дүртенсе китаптың исеме генә түгел, уға тупланған әҫәрҙәр ҙә авторҙың тамам өлгөрөп етеүен, үҙендә урғылып торған көс һиҙеүен, шуға күрә лә уны солғап алған ысынбарлыҡ менән аяҡ терәп һөйләшергә баҙнат итеүен раҫлап тора.

«Арғымаҡта» менән «Заман тауышы» (Ирек Кинйәбулатовтың бишенсе һәм алтынсы китаптары) – шағир ижадындағы артабанғы артылыш. «Мин – башҡорт!» менән сағыштырғанда, был китаптарында автор бер ни тиклем тыныслана төшһә лә, уның тауышы барыбер ҙә баҙыҡлығын юғалтмай һәм ул ижадтағы үҙ принциптарына тоғро ҡала. Ә бына етмеш биш йәше тулыу айҡанлы сығарылған «Ғүмер китабы» – ҙур тормош юлы үткән, күпте күргән, күпте белгән олпат шағирҙың уҡыусыһы алдында тотҡан сираттағы хисабы.

Ирек Кинйәбулатовтың һәр яңы китабы уға ҡәҙәр сыҡҡан китаптары менән тулыландырыла бара, йәғни бер тышлыҡ эсендә бер нисә китап хасил була. Әлбиттә, ҙур юбилейынды билдәләгәндә, әҫәрҙәреңде томлап та сығарып була торғандыр һәм ул саҡта бындай томдар күҙгә нығыраҡ та ташланалыр. Әммә Ирек Кинйәбулатов уйлап тапҡан һәм нәшриәт практикаһына индергән ысулдың үҙ өҫтөнлөктәре бар: шағирҙың бөтә ижады ус төбөндә ялтырап ятҡандай тойола.

Теге йәки был шағирҙың ижадын тикшергәндә ғәҙәткә ингән тағы бер үҙенсәлек йәшәп килә: башлап яҙыусының тәүге әҫәрҙәре мотлаҡ «өйрәнсеклек осоро» тип аталған барьер аша үтә. Бындай дәүерҙе Ирек Кинйәбулатов та кисергәндер, моғайын, кисермәй булмаҫ. Иллә мәгәр «Баҫыу юлы»на ингән шиғырҙарҙың күбеһе иғтибарҙы үҙенә тартмай ҡалмай. Уларҙың ҡайһы берҙәре тураһында һүҙ булды инде. Шуларға тағы «Яңы йылға аяҡ баҫҡанда», «Яҙын ҡар китһә…», «Киләсәк», «Борсаҡ ямғыр», «Ҡаяларҙа», «Уралда таң», «Иҫкән елдәр», «Ҡаҙҙар китә», «Бейеклектәр тартһын», «Рәхмәт, буран» тигәндәрен дә өҫтәр инем. Әгәр күңел биреп уҡыһаң, уларҙың һәр ҡайһыһында ла тапҡыр әйтемгә төрөлгән аҡыллы фекергә юлығаһың.

«Яңы йылға аяҡ баҫҡанда»ның ваҡыт алдында яуаплылыҡ тойоп йәшәргә күнеккән лирик геройы,мәҫәлән, үҙған йылда ахырына тиклем эшләп бөтөрәлмәгән эштәре өсөн көйөнһә, «Ҡаяларҙа»ның лирик геройы иһә ерҙә йәшәү йәме хаҡында уйлана һәм уның ҡәҙерен ғүмерең

ҡыл өҫтөндә ҡалған саҡта нығыраҡ та, тәрәнерәк тә аңлайһың икән, тигән һөҙөмтәгә килә. Шағирҙың «Яуһын, әйҙә, борсаҡ ямғыр, ҡоймаһын тик ҡурғаш ямғыр», «Эй, йәшәһен ерҙә ҡар бураны, булмаһын тик тормош бураны», тигән уй-теләктәре лә аңлашыла.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған күренештәрҙән көтөлмәгән һығымта яһап ҡуйған осраҡтар ҙа бар: яҙын ҡар китә икән, уны яңынан әйләнеп ҡайтмаҫ, тимә; ерҙе ҡар ҡаплай икән, яҙ килмәҫ, тимә; дуҫың алдаһа, хаҡлыҡ юҡ, тимә; «Ҡул ҡаушырып әгәр көтөп ятһаҡ, килерме икән беҙгә киләсәк?». Тәбиғәт күренештәренә һылтанып, лирик геройҙың үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап эҙләгән мәлдәре лә булғылай: «Иҫкән елдәр, ҡайҙа һеҙҙең илдәр, ҡайҙан сығып, ҡайҙа киттегеҙ? ‹…› Илай-илай ары елдегеҙ ҙә, өйөрөлөп, кире килдегеҙ»; «Йәшлегенә ерем йыл да ҡайта, ә беҙ ниңә икән – бер генә?» һ.б. Был һорауҙар авторҙың ихлас ҡыҙыҡһыныусанлығын да, күҙәтеүсәнлеген дә иҫбатлап торалар.

И. Кинйәбулатовтың «өйрәнсеклек осоро»на (шартлы рәүештә, әлбиттә) ҡараған тағы ике шиғырына – «Тәүге ямғыр» һәм «Сығырыу» тигәндәренә туҡталырға булдым. «Кайтһам, иң тәү тимерлеккә киләм», тигән юлдан башлана «Сығырыу». Һис йәшермәйем, «тимерлеккә» тигән һүҙҙе күреү менән, хәтер төпкөлөндә уҙған быуаттың егерменсе йылдар башында ижад ителгән ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәр ҡыбырлап ҡуйҙы. Түҙемлек һаҡлап, Иректен әле һүҙ барған шиғырын ахырына тиклем уҡып сыҡҡас, унда сағыу образ тыуҙырылғанлығын һәм теге йылдарҙағы шиғриәттән байтаҡҡа айырылып торғанлығын тойғандай булдым. Үҙенең замандаштарын-быуындаштарын күҙ уңында тотоп, «Тормош икән беҙгә тимерлек, шуның өсөндөр ҙә тормоштоң беҙ уты, һыуына ла инерлек», тигән юлдар менән тамамлап ҡуя шағир әҫәрен.

«Тәүге ямғыр»ҙың жанрын автор йәйәләр эсендә «этюд» тип билдәләгән. Тышҡы формаһы менән ул Иректең башҡа шиғырҙарынан күпкә айырыла: аралаш рифмаларға ҡоролған һигеҙ һәм дүрт ижекле юлдарҙан тора. Ләкин әҫәр, минең уйымса, формаһына ҡарағанда, йөкмәткеһе менән иғтибарҙы йәлеп итә. Уны мин пейзаж лирикаһының һөйөп кенә уҡыла торған матур бер үрнәге, тиер инем. Тәбиғәттең әкренләп йәйгә табан ауышыуын шағир бына нисек һүрәтләгән:

Бөтә донъя шыпырт ҡына
Алмашына,
Ямғыр теле бөтәһенә
Аңлашыла.

Форма тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы шул да мәғлүм булһын: Ирек Кинйәбулатовтың тәүге йыйынтығында традицион дүртәр юллы строфа менән яҙылған шиғырҙар бик һирәк осрай, уларҙы хатта бармаҡ менән дә һанарға була («Яңы йылға аяҡ баҫҡанда», «Йондоҙло ер», «Һыу-һүл сағы етте тағы…», «Рәхмәт, буран», «Туҡай урамы»). Был йыйынтыҡҡа хас икенсе үҙенсәлек: унда шағирҙың артабанғы ижадында төп урындарҙың береһен алып торасаҡ «арнау» жанры моронлай башлай («Яҡшы атың ҡалған», «Һабантурғай»). Арнауҙы «жанр» тип атауым бәгзеләргә, бәлки, мәҙәгерәк тә тойолор, оҡшап та бөтмәҫ, саманан тыш ҡыйыулыҡ күрһәтеү булып та күренер. Ләкин, уйлай китһәң, арнау-бағышлауҙарҙың, башҡа жанрҙарға хас булған шикелле, үҙ ҡанундары, үҙ талаптары, үҙ ауырлыҡтары һәм ҡатмарлыҡтары, эске закондары бар түгелме һуң? Дөрөҫөн генә әйткәндә, был жанр бөтә әҙипкә лә бигүк буйһоноп та бармай кеүек. «Ирек Кинйәбулатов, – тип яҙа акад. Ғ. Хөсәйенов ошо айҡанлы, – кешеләргә, күренекле шәхестәребеҙгә бына тигән арнау-бағышлау шиғырҙары бүләк иткән киң күңелле, шәфҡәтле шағир».

«Тормошсан шиғриәт» тигән мәҡәләһендә проф. Т. Килмөхәмәтов «Бағышлау әҫәре – шәхесте шиғыр итеү тигән һүҙ», тигәйне. Ирек Кинйәбулатовтың арнау-бағышлауҙарына «биографик лирика», тип ҡараусыларҙың булыуы хаҡында ла искә төшөрөп уҙғайны мәҡәләнең авторы. «Биографик лирика»ға ҡарағанда, «бағышлау жанры», тигән атама был типтағы әҫәрҙәрҙең асылын тулыраҡ яҡтыртып, тәбиғәтен тулыраҡ асыҡламай микән? Ни кәҙәр генә ҡырыҫ холоҡло кеше булһа ла, заманында Назар Нәжми ҙә ошо жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙе күп яҙҙы. Уның ижадын өйрәнеүгә бағышланған бер китабымда уларҙы бергә туплап, «Арнау шиғырҙары – үҙенсәлекле мини-портреттар галереяһы» тип атағайным. Ирек Кинйәбулатов иһә Назар Нәжмиҙән уҙҙырып та ебәрҙе. Ҡайһы бер шәхестәргә бер генә түгел, бер нисә шиғыр бағышланған осраҡтар ҙа бар.

Назар Нәжмиҙән айырмалы булараҡ, Ирек Кинйәбулатов был жанрҙа мини-портреттар ғына түгел, поэмалар менән балладалар ҙа ижад итә. Шундайҙарҙың иң тәүгеһе – шағирҙың икенсе китабына исем биргән «Сыйырсыҡтар бала осора» тигәне. Әҙәһенә бағышланған был әҫәрен автор «лирик поэма» тип атаған.Артабан уға Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы Зәйнәп Биишеваға бағышланған «Йөрәктәге һәйкәлдәр», башҡорт халҡының легендар улы генерал Таһир Күсимовҡа арналған «Арғымаҡта», Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты яҙыусы Динис Бүләковҡа бағышланған «Ғаләм һаҡсыһы» (һуңыраҡ

уның атамаһы «Ир яҡшыһы илгә ярай» тип үҙгәртелде), «Бородино», Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмигә арналған «Йыр яҡтыһы» исемле күләмле әҫәрҙәр килеп өҫтәлде. Был поэмаларҙың һәм балладаларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында тәнҡит мәҡәләләрендә һүҙ булғыланы булыуын,ләкин әлегә береһе лә ныҡлап тикшерелмәгән.

«Йыр яҡтыһы» тигән поэма – өр-яңыларҙан. Уға ойотҡоно бынан элегерәк яҙылған «Уты һүнде ҡапыл күршемдең» исемле шиғыр һалған, тиһәк тә хата булмаҫтыр. Дүртәр юллы алты, ике юллы бер строфанан торған был әҫәрендә Ирек Кинйәбулатов үҙе ихтирам иткән шағирҙың образын пунктир менән билдәләп ҡуйғандай:

Өмөт менән гел ашҡынып барҙыҡ,
Һүнеп барһа көндөң ҡоттары.
Йә ул көндөң утын тоҡандырҙы,
Йә уттарҙан алды ҡотҡарып.

«Йыр яҡтыһы»н автор хәтер-поэма, тип атаған. Әҫәрҙең жанрын былай тип билдәләүҙең үҙ сәбәбе бар, әлбиттә: ул башлыса поэманың төп геройы хаҡындағы хәтерләүҙәргә ҡоролған. Поэма бер-береһенән рим һандары менән айырылған алты бүлектән тора. Улар, үҙ сиратында, юлдар һәм строфалар һаны менән бер-береһенән айырыла. Әйтәйек, инеш һүҙ һымағыраҡ яңғыраған тәүге бүлек утыҙ биш юлдан, икенсеһе – туҡһан биш, өсөнсөһө – етмеш алты, дүртенсеһе – йөҙ ҙә ете, бишенсеһе – йөҙ ҙә ун туғыҙ, һуңғыһы етмеш дүрт юлдан тора. Әҫәрҙең строфикаһы ла бер төрлө генә түгел: өсөнсө бүлек традицион дүртәр юллы строфа менән яҙылған булһа,ҡалғандары, Ким Әхмәтйәнов әйтеүенә ҡарағанда, башҡорт халыҡ ижадында ла, яҙма поэзияла ла һирәк осрай торған биш юллы строфа менән яҙылған.

Поэма геройы тураһындағы тәүге мәғлүмәт (уның холоҡ-фиғеле, характер үҙенсәлеге, әҙәбиәт майҙанында хаҡлы рәүештә яулаған урыны) төш формаһында килтерелгән инеш һүҙҙә үк бирелә. Ошонда уҡ авторҙың үҙ геройына ҡарата булған мөнәсәбәте лә, төштә генә булһа ла уның менән осрашыу ниәтенең сәбәбе лә асыҡлана:

Ҡай сағыңда,
Беләм, һөйләп тормай,
Етә ине тик бер ҡарауың.

Еңел түгел ине оҡшауҙары,
Еңел түгел ине ярауы.

Мин ярарға,
Оҡшарға ла түгел,
Килдем йөрәк һүҙен әйтергә.
Кешеләрҙең бөтмәҫ мөхәббәтен
Төшөрөргә һинең хәтергә.

Инеш һүҙҙә ҡулланылған автор менән герой араһындағы диалог иһә уҡыусыға әҫәрҙең идея-художество концепцияһын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итерҙәй бер сара булып тора:

…Уҡып бөттөм. Ағай:
– Рәхмәт, – тине.
Күп кәрәкмәй минең ишегә.
Шәплегемде мин үҙем дә беләм,
Һин ишәп булһаң – уҡы кешегә…

«Йыр яҡтыһы»нда Назар Нәжмиҙең тормошон һәм ижадын бөтә тулылығында һүрәтләү бурыс итеп ҡуйылмаған, әлбиттә. Сөнки поэма ғилми тикшеренеү хеҙмәте түгел, ә нәфис әҙәбиәт емеше. (Бағышлау-арнауҙарҙы «биографик лирика», тип атауҙың сикләнгәнерәк булыуын дәлилләп тороусы миҫал түгелме икән был?). Шағирҙың ҡабатланмаҫ образын тыуҙырыу һәм уны күҙ алдына килтереп баҫтырыу өсөн, автор герой шәхесенә хас айырым һыҙаттарҙы ғына иҫләй.

Экспозиция ла, бер үк ваҡытта инеш һүҙ ҙә ролен үтәгән беренсе бүлектә моронлап ҡуйған был һыҙаттар икенсе бүлектә инде киңерәк планда тасуирлана. Бында шуларҙың ҡайһы берҙәрен һанап китһәк, яҙыҡ булмаҫ. Әйтәйек, шағир тик йыр менән йәшәгән, уның һәр көнө тик йыр менән үткән.Бер ҡарағанда, ул авторға – йүкә һымаҡ йомшаҡ, икенсеһендә иһә – имән кеүек ҡаты тойолған. Шағирҙың хаҡ һүҙенән нахаҡтың юҡҡа сығыуы, ҙур таланты менән өрәктәрҙе өркөтөүе, һүҙ әйткәндә лә, һүҙһеҙ торғанда ла сал бөркөттө хәтерләтеүе һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Кәңәш ҡорғанда уның атайҙарса хәстәрлекле булыуы, кәңәшенең дә үҙенсә булыуы, берҙе һөйләп, икенсене эшләү уға ят нәмә булыуы ла автор иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Назар Нәжмиҙең хаҡһыҙлыҡта уҫал булыуы, баш эйеүҙе килештермәүе,

һөйләгәндә ут сәсрәтеп һөйләүе һәм шуның кеүек башҡа сифаттары ла иҫкә алына. Был бүлектең һуңғы строфаһында шағирҙың шағирға биргән баһаһы былайыраҡ яңғырай:

Ерҙә йырҙы
Мәңге йәшәтергә,
Тик йыр өсөн донъя ҡыуғайның.
Һин әсәнән генә түгел, ағай,
Һин бит ергә йырҙан тыуғайның.

Поэманың идея-художество структураһында иң мөһим урынды өсөнсө бүлек алып тора, тиһәм, хата булмаҫ. Әгәр рәсмиләштереберәк әйтһәк, был бүлектә автор поэма геройы менән уны тыуҙырып-үҫтергән йырлы-моңло ер-һыу араһында ниндәйҙер илаһи, күҙгә күренеп бармаҫ ептәр һуҙылғанлығына ишаралай. Хәйер, ишаралап ҡына ҡалмай, баҫым да яһай: «Дүртәйләнән дүрт тарафы – шиғыр иле, йыр иле»; «Тирә-йүнең йыр-моң булғас, шағир тыумай кем тыуһын». Артабан был фекер уғата ла көсәйтелә һәм аныҡыраҡ төҫ ала:

Һине бары йырҙан тыуған,
Тип әйтергә хаҡым бар.
Быны тотош раҫлай алған,
Һин яратҡан халҡың бар.

Уҡыусыны үҙенең ошо фараздарына тамам ышандырыр өсөн һәм «йырҙан тыуған» геройының сығанаҡтарын үҙ күҙҙәре менән күрергә ниәтләп, автор шиғыр Мәккәһенә тиңләнгән Миңеште яҡтарына юл тота. Ләкин, «шағир серен табам, тиеп», шағир тыуып-үҫкән ерҙәрҙе, урман-тауҙарҙы «арҡыры-буй йөрөп» сыҡһа ла, ахыр сиктә автор «тел асҡысын тапманым бит мин ер тигән ағайҙың», тип танырға мәжбүр була. Сөнки:

Ер һәм шағир мөхәббәтен
Түгел асып бирерлек;
Булһын күктәргә ашырлыҡ,
Булһын таштар ирерлек.

Поэманың тәүге бүлектәрендә Назар Нәжми образы башлыса автор баһаламалары ярҙамында тыуҙырылһа, дүртенсе һәм бишенсе бүлектәрҙә иһә шағирҙың һынын кәүҙәләндергәндә йәнле тормоштан алынған хәл-

ваҡиғалар ҙа уңышлы ғына ҡулланыла. Дүртенсе бүлектә, мәҫәлән, «Йыр тураһында баллада»ға бәйле күренеш хәтерғә һеңеп ҡалырлыҡ. Назар Нәжмиҙең яңы ғына яҙылып бөткән ошо поэмаһын авторҙың үҙе уҡыуында Ирек Кинйәбулатов менән Вафа Әхмәҙиевҡа тәүгеләрҙән булып ишетеү бәхете тейә. Уйламаған-нитмәгән ерҙән осрашыуҙа алған тәьҫораттарын «Йыр яҡтыһы»ның авторы бындай юлдарға һалған:

...Беҙҙең өсөн
Был осрашыу булды
Иң тәүге ҙур шиғыр байрамы.
Нисек яҙыуҙар бер, нисек уҡыу –
Беҙҙең өсөн иң ныҡ хайраны.

Ул яҙа ла,
Ул уҡый ҙа белде,
Хатта артистарҙан үҙҙырып.
Уҡыу нимә, яҙа белмәгәнде,
Ташланы ул байтаҡ туҙҙырып.

Поэма геройының характер үҙенсәлектәре, уға ғына хас кешелек сифаттары, уның ғәжәп ябайлығы һәм алсаҡлығы Яҡутстан сәфәренә бәйле бишенсе бүлектә ифрат матур һәм сағыу итеп һүрәтләнгән. Юмор сатҡылары ла ялтлап киткәндәй була бында. Колыма ярына «баҫып өнһөҙ ҡалғанда», болоҡһоу уйҙар ҙа ситләп үтмәй һымаҡ уны. Был бүлектәрҙең икеһендә лә Назар Нәжмиҙең тағы бер һәләтенә иғтибар ителә: «Шунда тәүге белеп, иҫтәр китте йырсы икәнен дә ағайҙың. Ә һуңынан күрҙем, ул булғанда күп йырсылар унан һағайҙы». Был – дүртенсе бүлектә. Бишенсе бүлектә автор йәнә йыр темаһына әйләнеп ҡайта һәм һүҙен бындай юлдар менән тамамлап ҡуя:

Яҡут ерҙәрендә
Башҡорт йыры
Яңғыраны күпкән бурандай.
Тороп ҡалды шулай «Сәлимәкәй»,
Тороп ҡалды шулай «Буранбай».

Әҫәрҙең һуңғы, алтынсы бүлегендә автор беҙҙе бөгөнгө көндәргә алып ҡайта. Формаһы йәһәтенән был бүлек инеш бүлектә хәтерләтә:

тегеһендә автор үҙ геройы менән диалогты төшөндә ҡорһа, бынығында ул тыуған төйәгендә геройға ҡуйылған мәрмәр һәйкәл менән һөйләшә. Һөйләшеү – киҫкен:

Һәйкәл телгә килеп һорай һымаҡ:
– Нисегерәк бөгөн хәлегеҙ?
Ҙурларығызмы әллә хурларығызмы,
Әле ниндәйерәк мәлегеҙ?

– Шундай көндәр,
Төндәр килә, ағай,
Кешелә юҡ шиғыр ҡайғыһы.
Эшһеҙ ҡалған илдең егеттәре
Себерҙәргә килә тайғыһы.
. . . . . .
Ғәфү үтенергә
Килдем бында
Кәпәсемде сисеп алдым да.
Оят бөгөн, ағай, һинең алда,
Оят бөгөн Хоҙай алдында.

Поэма – роман түгел, әлбиттә. Роман менән сағыштырғанда, уның һүрәтләү мөмкинлектәре күпкә сикләнгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ирек Кинйәбулатовтың документтарға, хәтерләүҙәргә таянып яҙылған «Йыр яҡтыһы» исемле поэмаһында халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең художестволы образы шәхес булараҡ та,ижадсы булараҡ та ярайһы уҡ ышандырырлыҡ итеп күҙ алдына баҫтырылған. Поэмала тасуирланған айырым күренештәр һәм хәл-ваҡиғалар шағирҙың «Кем уйлаған…» тигән автобиографик яҙмаларын, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрен, мемуар әҫәрҙәрен, дөйөм алғанда – уның бөтә ижади мираҫын өр-яңынан йәнләндереп, уға нур өҫтәп ебәргәндәй була.Кем белә, ваҡыты еткәс, оло шағырыбыҙ хаҡында «Арҙаҡлы кешеләр тормошо» тигән серияла китап яҙылыуы һәм баҫылып сығыуы ла бик ихтимал.

Совет заманында беҙҙең оло быуын шағирҙарыбыҙ, тәү сиратта ҡанлы һуғыш юлдары буйлап үткәндәре, әҙәбиәттәр һәм сәнғәттәр араһында дуҫлыҡ ептәре урынлаштырыу һәм уларҙы әленән-әле яңыртып тороу маҡсатында, яҡын һәм алыҫ илдәргә сәйәхәткә сығып, сәфәр ҡылып ҡайта торғайнылар. Сәфәрҙән һуң мотлаҡ шиғырҙар

шәлкеме (ҡайһы саҡта – күләмлерәк әҫәр ҙә) тыуыр ине. Хәҙер ундай мөмкинселектәр юҡ. Күп тигәндә, ҡайһы бер ҡәләмдәштәребеҙ күрше Татарстанға, Яҡутстанға, Ҡаҙағстанға, һирәк-мирәк Төркиәгә барып ҡайтҡылайҙар. Шуға күрә лә һуңғы егерме биш – утыҙ йыл дәүерендә әҙәбиәтебеҙ майҙанында республикабыҙҙың теге йәки был төйәгенә арналған шиғырҙар шәлкеме күренгеләп ҡала икән, һис тә ғәжәп түгел. Сөнки сит илдәргә, сит ерҙәргә барыуға ҡарағанда,Әбйәлил, Хәйбулла яҡтарынан урап ҡайтыу күпкә арзанираҡ та, еңелерәк тә. Ләкин ғиллә арзанлыҡта һәм еңеллектә генә түгел. Беҙҙең тыуып-үҫкән йорт-илебеҙ башҡаларҙан һис кенә лә кәм түгел. Тик ундағы матурлыҡты ла, байлыҡты ла күрә белергә генә кәрәк.

Республикабыҙҙың төрлө төйәктәренә, ауыл-ҡасабаларына, иң мөһиме – унда йәшәгән билдәле кешеләргә арнап яҙылған шиғырҙар һәм шиғри шәлкемдәр Ирек Кинйәбулатов ижадында йыш ҡына осрай. Шуларҙың иң тәүгеһе һәм иң берәгәйлеһе – «Бөрйән – минең менән бер йән», тигәнелер, моғайын. Ул туҡһанынсы йылдар башында уҡ әле «Мин–башҡорт!» исемле йыйынтыҡта донъя күргәйне. Утыҙлап шиғырҙы эсенә алған был шәлкем Бөрйән яҡтарында булмаған кешене лә битараф ҡалдырмаҫ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ни сәбәптәндер, уға автор үҙе битарафлыҡ күрһәтә. Сөнки артабанғы китаптарында шәлкемдең хатта исеме лә аталмай – «Был юлдан, тим, кемдәр йөрөмәгән…» тигән шиғырҙан башланып китә. Һуңыраҡ, «Бөрйән – минең менән бер йән»гә, «Ҡырмыҫҡалы дәфтәренән», «Хәйбулла дәфтәре», «Бәләбәй ҡалҡыулығы»,«Туймазы дәфтәренән» тигән шәлкемдәр килеп өҫтәлде. Ә инде үҙ эсенә егерменән ашыу шиғырҙы туплаған һәм республика күләмендә билдәлелек яулаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға бағышланған шәлкем тураһында һөйләп тороуҙың кәрәге лә юҡтыр. Быға тиклем бындай күренештең башҡорт шиғриәтендә булғанлығын хәтерләмәйем.

Ирек Кинйәбулатов шиғырҙарының абсолют күпселеге – исемле шиғырҙар. Был үҙенсәлеккә иғтибар итеп, уны һыҙыҡ өҫтөнә алыуыма йылмайыбыраҡ ҡараусылар ҙа табылыр, бәлки. Әммә, уйлай китһәң, шиғырға лайыҡлы, тәғәйен исем ҡушыу – еңел эш түгел. Сөнки исем – әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын сағылдырыусы, уға асыҡлыҡ индереүсе компонент. Исемһеҙ шиғыр – үкһеҙ бала шикелле ул.

Ижад өлкәһендә шаҡтай тәжрибә туплаған Ирек Кинйәбулатов, туҡһанынсы йылдар ахырында айырым шиғырҙарының ғына түгел, тотош китабының да төп йүнәлешен билдәләргә тырыша башланы.

Иң тәүҙә был үҙенсәлек «Арғымаҡта» кәүҙәләнеш тапты. Китапҡа аҫҡыс ролен үтәүсе курсив менән йыйылған шиғырҙы бында тулы килеш күсермәй булдыра алмамдыр:

Бер уйлаһаң – тағы ниндәй ирек,
Кәрәк тағы ниндәй иркенлек.
Айырылып яңғыҙ тороп ҡалһаң,
Тотош донъя, гүйә, бер тинлек.

Бәлки, шунан оло бәхет юҡтыр,
Торалыр, тим, нисек бүлеүҙән.
Халҡың араһында көндәр күреп,
Халҡың араһында үлеүҙән.

Йөрәгемдә ни барлығын әйтәм –
Эсемдәге тышта – серем юҡ.
Арҡа терәр башҡа халҡым да юҡ,
Барып үлер башҡа ерем юҡ.

«Замана тауышы» тигән китаптың «аҫҡысы» уғата ла матурыраҡ, уғата ла зауыҡлыраҡ тойола һымаҡ. Уҡыусынан ғәфү үтенеп, уны ла тулыһынса килтерергә булдым:

Эй, кешеләр, һеҙгә ашығамын,
Бармы икән миндә эшегеҙ?
Мин бит һеҙһеҙ бер кем түгел ерҙә,
Мин бит кеше түгел кешеһеҙ.

Күҙҙәремдә – һеҙҙең ҡыуаныстар,
Хәсрәтегеҙ – минең алҡымда.
Барыр юлым – һеҙ бараһы юлдар,
Йөрәгемдә – һеҙҙең ялҡындар.

Бар шатлығым һеҙҙең менән бергә,
Бергә булһам – ҡайғым тарала.
Һәр саҡ сарсап осрашыуҙар көтәм,
Ҡалғым килә һеҙҙең арала,
Ҡалғым килә һеҙҙең арала.

Ирек Кинйәбулатовтың «Ғүмер китабы», тип аталған яңы йыйынтығы – шулай уҡ «асҡыслы» китап. Ете строфанан торған был шиғри асҡыс та уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ, тип уйлайым. Сөнки унда шағирҙың бөтә булмышы сағылыш тапҡан һәм күҙ алдына баҫтырылған. Әйҙәгеҙ, был юлы асҡысты яртылаш ҡына бороп, шиғырҙан ике генә строфа (тәүгеһен һәм һуңғыһын) килтереү менән сикләнәйек:

Күргән-кисергән –
Йәнде өтөрлөк;
Түгелдәр улар
Һөйләп бөтөрлөк.

. . . . . .

Күпте юғалтып,
Ләкин тиң табып,
Алдашмай яҙҙым
Ғүмер китабын.

Һүҙ эйәрә һүҙ сыҡҡанда, И. Кинйәбулатов ижадына бәйле тағын бер үҙенсәлеккә иғтибарҙы йүнәлтһәк, яҙыҡ булмаҫ: уның рус теленә тәржемә ителгән поэтик әҫәрҙәре лә, ҡәләмдәштәре хаҡындағы мәҡәләләре лә ыңғай тәьҫир ҡалдыра. Бында шағир менән тығыҙ элемтәлә торған Ю. Андрианов, Ғ. Шафиҡов, А. Филиппов, В. Денисов, Р. Паль, Д. Даминов, А. Кривощеев, Ф. Ғөбәйҙуллина, А. Хөсәйенов кеүек тәржемәселәрҙең хеҙмәтен айырыуса билдәләп үтергә кәрәктер. Уларҙың тырышлығы менән Ирек Кинйәбулатовтың байтаҡ шиғырҙары, күпселек поэмалары, ижади портреттары рус телле уҡыусының уртаҡ хазинаһына әүерелде. Был әҫәрҙәрҙе ул юғары зауыҡ менән нәшер ителгән «Доброе утро» (2004) һәм «Слово» (2011) тигән китаптарҙа таба ала.

Ирек Кинйәбулатов үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәүселәрҙән түгел. «Баҫыу юлы» тип аталған тәүге китабында уҡ әле ул рус шағирҙары Майя Борисоваға һәм Всеволод Азаровҡа эйәреп яҙылған «Үлән һүҙе» һәм «Диңгеҙ» исемле шиғырҙары менән уртаҡлашҡайны. Шул уҡ китапта татар халҡының бөйөк улы Ғабдулла Туҡайға арналған шиғыр ҙа И. Кинйәбулатовтың тәрән фекер йөрөтөүсе әҙип икәнлеген кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫлап тора. Был тәрәнлек «Мин – башҡорт!» тигән китаптағы «Аттарға атланайыҡ» исемле шиғырҙа

оторо ла көслөрәк сағылған. Бында, күрәһең, әҫәргә эпиграф итеп алынған «Ике туған талаша, атҡа меңһә – яраша», тигән халыҡ мәҡәле лә үҙ ролен уйнамай ҡалмағандыр. Рус шағиры Р. Рождественскийға эйәреп яҙылған һәм ошо уҡ китапҡа ингән «Һорау», үҙебеҙҙең Александр Филипповҡа арналған «Башҡортомдан былайыраҡ», тажик яҙыусыһы Асҡар Хәкимовҡа адресланған һәм «Һөйөү иртәһе» тигән китапҡа ингән «Йөрәктәрҙә ҡалыр һүҙ», күренекле сыуаш шағирәһе Рәйсә Сәрбигә бағышланған һәм «Замана тауышы» тип аталған китап биттәрендә үҙенең маҡтаулы урынын биләгән «Бик килешә» тигән шиғырҙар ҙа Ирек Кинйәбулатовтың ижад офоҡтарын билдәләүсе күренекле сығанаҡтар. Ә инде «Ғүмер китабы»ндағы «Алыҫтағы йондоҙ һымаҡ» (күренекле татар шағиры Харрас Әйүп иҫтәлегенә бағышланған), «Мәңге кәрәк шағир аҡылы» (Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллинға асыҡ хат), «Бына шулай» (Рәдиф Ғаташҡа), «Туфандар бар», «Туҡай һүҙе» тигән шиғырҙар был офоҡтарҙы уғата ла киңәйтеп, төрлө милләттәрҙе бергә тупларға саҡырылған әҙәбиәт һәм сәнғәт көмбәҙен артабан да балҡытып ебәрә.

Ирек Кинйәбулатовтың ижады – үҙенсәлекле ижад. Ул үҙенсәлек әҙиптең шиғырҙарында ла, поэма менән балладаларында ла, арнау-бағышлауҙарында ла, хатта китаптарының баҫылып сығыу тарихында ла (мәҫәлән, «Сыйырсыҡтар бала осора» менән «Һөйөү иртәһе» тигәндәре араһында ун биш йыллыҡ бушлыҡ ята) сағыла. Бер мәҡәлә сиктәрендә уларҙың бөтәһен дә ҡаҙмаҡлап күҙаллау мөмкин түгел, әлбиттә. Дөйөмләштереберәк әйткәндә, И. Кинйәбулатовтың әҫәрҙәре шағирҙың тамам формалашҡан үҙ стиле, үҙ темаһы, шул темаға үҙ ҡарашы бар, тип раҫларға хоҡуҡ бирә. Уның әҫәрҙәренә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға, уларҙы күңел биреп уҡырға, идея-художество үҙенсәлектәрен тәрәнерәк аңларға тырышырға кәрәк. Әлбиттә, был ижадта ҡытыршылыҡтар ҙа (хәйер, кемдә ҙә юҡ ул!), ҡабатлауҙар ҙа күҙгә һирпелеп киткеләй. Ләкин шағирҙың ысын поэтик йөҙөн был ҡытыршылыҡтар һәм ҡабатлауҙар түгел, ә оҙайлы ижад дәүерендә ирешкән уңыштары билдәләй.

Ирек Кинйәбулатовтың «Заман тауышы» тигән китабын битләп ултырғанда, иғтибарымды «Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре» исемле шиғыр йәлеп итте. Миңә ул был мәҡәләнең башындараҡ телгә алынған «Рәсәй» тигән шиғырҙың ҡапма-ҡаршыһы һымағыраҡ тойолдо. Быға ышаныу өсөн, миҫал итеп, шиғырҙан бер строфа килтерәйек:

Якшылыкҡа, яктылыкҡа булды
Рәсәй менән беҙҙең бергәлек.
Беҙ атлайбыҙ ҡулдар тотоношоп,
Иңдәребеҙ иңгә терәлеп.

Күрәһең, ваҡыт һынауы аша үткәндә, шағир тормошонда һәм ижадында ана шундай метаморфозалар булыуы ла ихтималдыр. Бәлки, Ирек Кинйәбулатов кисергән метаморфозаның сәбәптәре уның бына был юлдарында яталыр:

Мин төрлөсә, мин мең төрлө,
Мин ҡай саҡта – көслө дауыл.
Гүйә үҙем – шаулы ҡала,
Ә ҡай саҡта – һүнгән ауыл.

Мин ҡай саҡта – көслө ялҡын,
Бер ҡарағаң – әсе төтөн.
Бер минутта – мин хәйерсе,
Бер ҡарағаң – донъям бөтөн.

Баш ватып, ошо һорауҙарға һәм икеләнеүҙәргә яуап табырға тырышып ултырғанда,«Мин – башҡорт!» тигән шиғырға яңынан әйләнеп ҡайтмай сарам ҡалманы. Был шиғырҙы ла, Ирек Кинйәбулатовтың башҡа шиғырҙарын да, уларҙың идея-эстетик асылдарына мөмкин тиклем тәрәнерәк төшөргә теләп, диҡҡәт менән уҡып сыҡҡас, шундай һөҙөмтәгә килдем: «Юҡ, Ирек, һин–башҡорт ҡына түгел, бер үк ваҡытта һин – россиян да!». Әгәр беҙҙең көнитмешебеҙҙә көтөлмәгән бәлә-ҡазалар, ҡытыршылыҡтар, уңайһыҙлыҡтар осрап тора икән, бында Рәсәйҙең ни ғәйебе? Рәсәй – беҙҙең оло илебеҙ. Ул ни күрә, беҙгә лә шуны күрергә насип иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бының ни өсөн шулай икәнлеген әле бер кем дә (образлы фекер йөрөтөүсе әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре генә түгел, хатта тарихи фактҡарға таянып эш итүсе сәйәсмәндәр ҙә) аңлата алмаған. Бәлки, аңларға һәм аңлатырға теләмәйҙәрҙер. Рустың тынғыһыҙ бөйөк шағиры Александр Блок та юҡтан ғына 1916 йылдың мартында «Ҡарсыға» тип аталған ҡыҫҡа, әммә уйға ҡалдыра торған шиғырын яҙырға мәжбүр булмағандыр, күрәһең.

2013, апрель.

«БАР МАТУРЛЫҠ МИНЕҢ ҠОСАҠТА…»

Әҙәбиәт донъяһына Муса Сиражи уҙған быуаттың алтмыш алтынсы йылында баҫылып сыҡҡан «Осрашыу» тигән йыйынтығы менән килеп инде. Йыйынтыҡтың атамаһына ҡарағанда, унда һүҙ йәш авторҙың тормош менән, әҙәбиәт донъяһы менән осрашыуы хаҡында баралыр һымаҡ. Ләкин йыйынтыҡҡа тупланған әҫәрҙәр менән яҡындан тороп таныша башлағас, «Осрашыу» тигән шиғырҙың бөтөнләй башҡа нәмә тураһында икәнлегенә төшөнәһең. Китаптың йөҙөк ҡашы, минең ҡарашымса,– «Осрашыу» тигән шиғыр түгел, ә уны асып ебәргән «Был күңелде аңламаҫһың инде…», тигәне. (Йәйәләр эсендә әйтеп үтәйем: шағирҙың артабанғы йыйынтыҡтарында был шиғыр «Ашҡыныу» тигән баш аҫтында бирелә.) Дүрт строфанан торған ошо шиғырҙан икеһен бында күсерһәм, минең менән, бәлки, уҡыусы ла ризалашмай булдыра алмаҫ:

Был күңелде аңламаҫһың инде,
Ашҡына ла тора гел генә.
Бер үренә меңһәң тормоштоң,
Икенсеһе инде күренә.
. . . . . .
Был күңелде аңламаҫһың инде,
Ул ҡайҙалыр һәр саҡ ашҡына.
Шуға күрә ваҡыт үткәне лә
Һиҙелмәйсә ҡала йыш ҡына.

«Осрашыу» тигән китап, ерҙә йәшәү фәлсәфәһен сағылдырған ошо иҫ киткес матур поэтик юлдар менән генә түгел, үҙенең тышҡы биҙәлеше менән дә күҙҙең яуын алып тора. Был китап донъя күргәндә, уның авторына егерме ете йәш ине. «Осрашыу»ҙан һуң, оҙайлы һәм емешле ғүмер дәүерендә, шағир, төрлө йәштәге уҡыусыһына төрлө форматтағы, төрлө күләмле һәм төрлө жанрға ҡараған ундан артыҡ китап бүләк итте. Шулар араһында иң ҡәҙерлеһе һәм иң йөкмәткелеһе – үҙенә етмеш йәш тулыу айҡанлы әҙерләп сығарған «Беҙ – улдары Башҡортостандың», тигәнелер моғайын. Кем белә, был мәҡәлә яҙылғанда, шағирҙың етмеш биш йәшенә арналған китап та моронлап яталыр, бәлки.

Муса Сиражи тураһында мәҡәләләр әлегә бик күп түгел. Ләкин был һис кенә лә шағир иғтибарҙан ситтәрәк тора икән, тигәнде аңлатмай. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева, ғалим һәм тәнҡитсе, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Ким Әхмәтйәнов, Татарстандың Ғабдулла Туҡай исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Хәсән Туфан, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, Ҡалмыҡ халыҡ шағиры Давид Кугультинов, танылған шағир һәм прозаик, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Хәким Ғиләжев, билддәле татар шағиры Мәхмүт Хөсәйен, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Әхәт Нигмәтуллин, яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре Таһир Таһиров (Таһир Ахунзянов), Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов кеүек күренекле шәхестәр Муса Сиражиҙың ижады һәм ҡайһы бер кешелек сифаттары хаҡында байтаҡ йылы һүҙҙәр әйткәндәр. «Беҙ – улдары Башҡортостандың» тигән китапҡа ошо шәхестәрҙең баһаламалары инеш һүҙ итеп файҙаланылыуы һис тә осраҡлы түгелдер.

Ике мең дүртенсе йылда Өфөлә татар телендә баҫылып сыҡҡан «Мәңгелек моңом минең» тигән китапҡа Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Динә Морзаҡаева яҙған «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт йырсыһы» тип аталған баш һүҙ ҙә Муса Сиражиҙың поэтик йөҙөнә йәм өҫтәй. Марат Кәримов биргән баһаламала иһә шағирҙың мини-портреты һүрәтләнгән, тиергә була. «Муса Сиражиҙың ижады, – ти ул, – киң ҡоласлы һәм күп яҡлы. Ул йынамын тигән балалар шағиры ла, етди тәржемәсе лә, халыҡ яратҡан байтаҡ йырҙар авторы ла, сатира һәм юмор оҫтаһы ла. Республикабыҙҙа уны әүҙем йәмәғәт эшмәкәре булараҡ та яҡшы беләләр. Уҡыусылары менән дә йыш осрашып тора. Миңә уның менән күп райондарҙа сығыш яһарға тура килде. Һәр ерҙә уның шиғырҙарын тамашасылар үҙ итеп ҡабул итә. Әйтергә кәрәк, ул шиғырҙарын күңелгә үтерлек итеп уҡый ҙа белә. Бына шундай күп ҡырлы талант эйәһе ул беҙҙең Мусабыҙ».

Әйтерһең дә М. Кәримов, үҙенән йәшерәк ҡәләмдәшенең ижад баҡсаһына күҙ һирпеп алған да, шул баҡсала үҫеп ултырған еләк-емеш төрҙәрен бәйнә-бәйнә һанап сыҡҡан. Быны ул, бәлки, уҡыусыны ҡәләмдәш ҡустыһы менән яҡынданыраҡ таныштырыу ниәтенән сығып эшләгәндер. Әгәр «емештәрҙе» бергә туплап, улар тураһында фекер төйнәй башлаһаң, мотлаҡ М. Сиражиҙың тормошо һәм ижады хаҡында очерк китабы хасил булыр ине. Ләкин әлеге осраҡта уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был мәҡәләлә шағирҙың киң ҡоласлы ижадын бер юлы

һәм һәр яҡлап өйрәнеү бурысы ҡуйылмай. Һәм ундай ҙур бурысты бер мәҡәлә сиктәрендә тормошҡа ашырыу мөмкин түгеллеген аңлатып тороуҙың хәжәте юҡтыр бында.

Муса Сиражи – «һуғыш осоро балалары» тип йөрөтөлгән быуын вәкиле. Уҙған быуаттың алтмышынсы йылдарында әҙәбиәткә килгән ошо быуын вәкилдәре үҙҙәренең ижадында йыш ҡына һуғыш темаһына мөрәжәғәт итеүсәндәр. Һәм был һис тә ғәжәп түгел. Сөнки һуғыш йылдарында ла, һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла уларҙың ҡанына-йәненә һеңеп ҡалған ҡытлыҡ-яланғаслыҡ шауҡымын тиҙ генә оноторлоҡ та, юйып ташларлыҡ та түгел ине.

Һуғыш темаһы Муса Сиражиҙы ла урап үтмәне. Уның өҫтә телгә алып кителгән тәүге йыйынтығындағы «Май елдәре», «Тынлыҡ», «Окоп өҫтөндәге сәскәләр», «Күңелдәрҙә йәшәй», «Әсәй көтә» тигән шиғырҙар шуға асыҡ дәлил булырлыҡ. Һуғыш темаһына ҡағылышлы әҫәрҙәрҙе авторҙың артабанғы китаптарында ла осратырға мөмкин: «Батырлыҡ һәйкәле», «Күрҙе инде, күрҙе», «Яу яраһы», «Тау йыры», «Дуҫлыҡ тураһында йыр», «Билдәһеҙ һалдатҡа», «Һалдат ҡәберендәге яҙыу», «Еңеү булып ҡайттың…», «Ер ҡояшы», «Маңлай күҙе күрмәһә лә…», «Ғәзинур», «Ер шаһит», «Үлемһеҙлек», «Тәрән юлдар», «Уҙған һуғыш һөжүме», «Илем өсөн – көнөм өсөн».

Әлбиттә, был шиғырҙар йөкмәткеләре, яңғыраштары, телдәре-стилдәре буйынса, меңәр саҡырымға һуҙылған фронт юлдарын үтеп, уның бөтә михнәттәрен үҙ елкәһендә татыған Әкрәм Вәли, Хәниф Кәрим, Ғәйнан Әмири, Ҡадир Даян, Сәләх Кулибай, Тимер Арслан, Мәлих Харис, Назар Нәжми, Мостай Кәрим, Яҡуп Ҡолмой, Ғилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев, Шәриф Бикҡол, Муса Ғәли кеүек өлкән быуын шағирҙарыбыҙҙың әҫәрҙәренән айырылыбыраҡ торалар. Һәм ул шулай булырға тейеш тә. Сөнки һуғышты үҙ күҙҙәре менән күреү генә түгел, уның уты-ялҡынында янып көйөргә дусар ителгән әҙиптәргә был мәхшәрҙе һүрәтләгәндә моғайын да буяуҙар эҙләп интегергә тура килмәгәндер. Ә бына илде ҡулына ҡорал тотоп яҡлаусылар сафына баҫырға өлгөрмәгән, ләкин ижадтарында һуғыш темаһына тотоноро баҙнат иткән (баҙнат итеп, бик дөрөҫ эшләйҙәр!) быуын вәкилдәренә ысын шағирлыҡ сифатыңды асып һалыу ай-һай еңелдән түгелдер. Әгәр һуғыш темаһын сағылдырыу ниәтенән сығып, пулялар һыҙғырыуын, туптар шартлауын, самолёттар гөжләүен тасуирлау менән мауыға башлаһаң, быға бер уҡыусы ла ышанмаҫ ине.Һуғышта ҡатнашмайынса, уның тураһында фекер

йөрөтөп, мотлаҡ үҙ һүҙеңде әйтер өсөн башҡа алымдар һәм поэтик саралар кәрәктер.

Мусаның «Май елдәре» һәм «Тынлыҡ» тигән шиғырҙарына ҡолаҡ һалайыҡ. Дүрт строфанан торған «Май елдәре» (уның һуңғы строфаһын иҫкә алмағанда) – һөйөп кенә уҡырыҡ шиғыр. Ул Еңеү көнөн егерменсе тапҡыр билдәләгәндә яҙылған. Был көндө лирик герой һәр нәмәлә: иҫкән елдәрҙә лә, ярҙарынан ташҡан йылғаларҙа ла, керпек ҡаҡҡан сәскә-гөлдәрҙә лә, һәр бер күҙәнәктә, һәр бер күңелдә яңы һулыш тоя. «Ер өҫтөндә нурҙар уйнатып», хатта сал тәбиғәт тә байрам итә һымаҡ уға. Иң мөһиме иһә:

Май елдәре, киң ҡоласын йәйеп,
Ҡитғаларҙы йөрөй уятып.

«Тынлыҡ» та Еңеү байрамына бағышлап яҙылған шиғыр Уның хатта йәйәләр эсендә килтерелгән «9 Май төнөндә уйланыу» тигән асыҡламаһы ла бар. Тик фекер ағышы, уйҙар, хистәр йүнәлеше йәһәтенән ул «Май елдәре»нән күпкә айырыла. Уның лирик геройы бөйөк Еңеүҙең ниндәй юғалтыуҙар аша яуланғанлығын яҡшы аңлай һәм ошо айҡанлы үҙенең уй-хистәре менән уртаҡлаша:

Төнгө тынлыҡ. Сәйер тынлыҡ. Ауыр тынлыҡ.
Күңел ерҙе ҡапшап үтә: кем бар, кем юҡ…

Шатлыҡ та бар, ҡайғы ла бар был тынлыҡта,
Сабый йоҡлай, гөлдәр йоҡлай был минутта.

Йоҡлай тауҙар, йоҡлай урман, йоҡлай ялан,
Сәскә, үлән араһында йоҡлай йылан.

«Күңелдәрҙә йәшәй» менән «Әсәй көтә» тигән шиғырҙарҙың нигеҙендә асылда бер үк, ләкин төрлө күҙлектән сығып яҡтыртылған тормош материалы ята. Тәүгеһен шағир Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған ағаһының яҡты иҫтәлегенә бағышлаған. Шиғыр бындай юлдар менән тамамлана:

Эҙләһәм дә нисә йылдар буйы
Утлы ҡурғаш яуған ерҙәрҙән,

Һорашһам да,
һәйкәл ташын һыйпап,
Көнбайыштан иҫкән елдәрҙән,
Ҡәберен уның эҙләп табалманым.
Баҫтымы икән әллә үләндәр?
Уның урыны ҡара гүрҙә түгел,
Күңелдәрҙә йәшәй үлгәндәр.

«Әсәй көтә» башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра. Дөрөҫ, «Йырым һинең хаҡта», тип аталған икенсе йыйынтығына индергәндә, автор уны бер аҙ үҙгәрткән үҙгәртеүен (исемен дә, ҡайһы бер һүҙҙәрҙе һәм юлдарҙы ла), ләкин, бәхеткә күрә, шиғыр үҙенең тәүге тартыу көсөн һәм нәфислеген юғалтмаған: «ҡәләм төртөп», әсә образын дөйөмләштереп бирергә тырышһа ла, ул барыбер ҙә «Күңелдәрҙә йәшәй»ҙәге конкрет геройҙың әсәһе шикелле ҡабул ителә һәм шулай күҙ алдына баҫа. Шиғырҙың уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн ундағы психологизм һиҙелерлек арттыра. Быға ышаныу өсөн үҙеңде әҙгә генә булһа ла әсә урынына ҡуйып ҡарарға кәрәк: ниһайәт, ҡәһәр һуҡҡан һуғыш тамам; дошманды еңеп, иҫән ҡалғандар тыуған яҡтарына, тыуған ауылдарына әйләнеп ҡайталар; халыҡ уларҙы шатланып ҡаршы ала; шағирҙың әсәһе лә, яу яланында ятып ҡалған улын тыны менән тартып алырҙай булып, урамға сыға, улы ҡайтһа, шатлыҡ һыймаҫ тиеп, урам капҡаһын киреп асып ҡуя. Ләкин иҫән ҡайтҡандар араһында уның ҡапҡаһына табан йүнәлгән бер генә һалдат та күренмәй. Шиғырҙа һүрәтләнгән драматизм һуңғы строфала үҙенең иң юғары нөктәһенә етә:

... Әсәй улын көтә,
ҡайтмауына
Егерме йыл инде үтһә лә.
Ул һиҫкәнеп китә, таң елдәре
Тәҙрәгә килеп сиртһә лә…

Йәл,йөкмәткеһе менән дә,формаһы йәһәтенән дә бәхәс тыуҙырмаҫлыҡ ошо әҫәргә шағирҙың һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан ҡалын-ҡалын китаптарында нишләптер урын табылмаған.

Һуғыш темаһына бәйле шиғырҙарының бөтәһендә лә тиерлек Муса Сиражи илебеҙгә ысын мәғәнәһендә май ҡояшын – Еңеү яҙын алып килгән

ватандаштарыбыҙ алдында баш эйә, улар менән хаҡлы рәүештә ғорурлана, Еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн ғәзиз ғүмерҙәрен биргәндәрҙең рухына иһә дан йырлай, улар тураһындағы иҫтәлекте һәр ваҡыт хәтер түрендә һаҡларға саҡыра. Арала конкрет шәхестәргә арналғандары ла осрай, мәҫәлән, «Ер шаһит» менән «Еңеү булып ҡайттың…», тигәндәре. Уларҙың тәүгеһендә Рейхстагҡа Еңеү байрағын беренселәрҙән булып ҡаҙаған Мишкә егете Ғәҙетдин Заһитов образы кәүҙәләндерелгән, икенсеһендә һуғыштағы һуңғы батырлығы өсөн үлгәндән һуң Беренсе дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнгән мәшһүр татар шағиры, беҙҙең яҡташыбыҙ Фәтих Кәримдең үлемһеҙ һыны күҙ алдына баҫтырылған:

Ҡайтты бары һүнмәҫ даның һинең
Өҙөлөп һөйгән Тыуған илеңә.
Урап ҡайттың Бөйөк Еңеү булып
Йырлап туймаҫ ғәзиз ереңә.

Ил ғүмерен озонайтам тиеп,
Тоғро булдың һәр саҡ антыңа.
Үҙең һаман ҡайтып етәлмәнең,
Тик булғаең ҡайтты халҡыңа.

«Маңлай күҙе күрмәһә лә…» менән «Уҙған һуғыш һөжүме» тип аталған шиғырҙарҙы ла тыныс ҡына уҡырлыҡ түгел. Уларҙың икеһендә лә афатлы һуғыш эҙҙәренең күңелдәрҙән әле булһа юйылып бөтмәүе, һулҡылдаған яраларҙы атлаған һайын яңыртып тороуы йөрәк тетрәткес итеп һүрәтләнгән.

Ҡараштары ҡатып ҡалһалар ҙа,
Ғорур атлай ерҙән аяғы.
Юлдар ярыр тоғро юлдаш уға
Уң ҡулына тотҡан таяғы.
Тук-тук… Тук-тук…
Төртөп уятҡандай
Үткән яуҙың шомло шаңдауын.
Тук-тук… Тук-тук…
Кеше эҙләй һымаҡ
Окоптарҙан һүнгән таңдарын.
(«Маңлай күҙе күрмәһә лә…).

Өçтә һаналған шиғырҙар араһында яңғыраштары буйынса бер-береһенә бик яҡын торғандары ла күренгеләп китә. Был, әлбиттә, уларҙың бәҙен ебәрмәй ҡалмай, сөнки тора-бара уҡыусының ҡолаҡ төбөндә гел бер көй ҡабатланып торғандай тойола башлай. (Был сирҙән беҙҙең башҡа шағирҙарыбыҙ ҙа бөтөнләй үк азат түгел.) Ошо уңайҙан Мусаға ҡағылышлы бер миҫал килтереп китһәк, зыян итмәҫ. Йәш саҡта уҡ әле, әҙәбиәткә табан тәүге аҙымдарын яһағанда, ул «Күңелдәрҙә йәшәй» тигән шиғырын тәҡдим иткәйне уҡыусыһына. (Был шиғыр хаҡында өçтәрәк һүҙ сығып ҡуйғайны инде.) Йылдар үткәс, ошо шиғырҙағы темаға автор «Тәрән юлдар» исемле шиғырында яңынан әйләнеп ҡайтты. Улар икеһе лә шағирҙың яу яланында ятып ҡалған ағаһына бағышланған. «Тәрән юлдар»ҙың һуңғы строфаһы былай яңғырай:

Эҙләһәм дә, аҡай кәберен мин
Ер йөҙөнән һис тә тапманым.
Беләм, уның һуғыш юлдарының
Упҡыныһына төшөп батҡанын,
Юҡ, упҡынға түгел, һағыш булып
Беҙҙең йәнгә кереп ятҡанын…

Ошо ике шиғырҙы бер-береһе менән сағыштырып ултырғанда, араға өсөнсөһө – «Яу яраһы» тип аталғаны, дөрөçөрәге, ундағы «Яуҙы күргән инекме ни беҙ бына – бала саға», тигән юлдар килеп инде. Эйе шул, яуҙы күрмәйенсә генә яу тураһында яҙылған шиғырҙың ҡайһы саҡта фараз ҡылыуға ғына оҡшап китеүе ихтимал. Әммә, нисек кенә булмаһын, «Күңелдәрҙә йәшәй» отошлораҡ шикелле, сөнки ундағы фараздар ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ торғандай.

М. Сиражи ижадын еңелсә генә булһа ла күҙаллауға ҡоролған мәҡәләне уның һуғыш темаһына бәйле шиғырҙарын тикшереүҙән башлап ебәреү көтөлмәгәнсәрәк тә тойолорға мөмкин. Ләкин был юҡтан түгел. Һуңғы егерме-утыҙ йыл дауамында Бөйөк Ватан һуғышына тап төшөрөүселәр, уның йомғаҡтарына «яңыса» ҡараш ташларға яратыусылар күбәйеп китте. Хәтерегеҙҙәлер, һикһәненсе йылдар уртаһында, «билдәлелек», «яңыса фекер йөрөтөү», «илде үҙгәртеп ҡороу» тигән уйҙырмалар ҡанат йәйә башлағас, киң күләм матбуғат биттәрендә дошманды үҙ ояһында дөмөктөргәнгә үкенестәрен белдергән әҙәм аҡтыҡтары ла күренгеләп ҡалды. Йәнәһе, әгәр фашист илбаçарҙары Уралға ҡәҙәр килеп еткән булһа, беҙ күптән инде Бавария һыраһы эсеп

йәшәр инек. Бөгөн иһә, Баварияныҡы урынына Балтика һыраһын эсеп «ләззәтләнгәндәр» уғата ҡыйыуланып, ирәйеп киттеләр: фашизмды, йәнәһе лә, беҙҙең ил түгел, ә башҡа дәүләттәр ҡолатҡан.Бынан да артыҡ,бынан да ғәйре вайымһыҙлыҡтың, выжданһыҙлыҡтың булыуы мөмкин микән? Бөйөк Ватан һуғышы тураһында Совет заманында байтаҡ романдар, поэмалар, повестәр яҙылһа ла, Л. Толстойҙың «Һуғыш һәм солох»она торорлоҡ әҫәр әле булһа тыумаған, ҡыҙғаныска ҡаршы. Ошо бушлыҡтан файҙаланып, Василий Гроссмандың «Тормош һәм яҙмыш» тигән яҙмаһын Л. Толстой эпопеяһы менән бер үлсәүгә һалырға маташыусылар табылып тора икән, һис тә ғәжәп түгел.

Муса Сиражи хаҡындағы һүҙҙе дауам итеп, шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтке килә: ниндәй темаға арналған булыуҙарына ҡарамаҫтан, уның шиғырҙары күпселек осраҡта үҙҙәренең йыйнаҡлығы менән иғтибарҙы тартып торалар. Шағир «һүҙҙәргә – ҡыҫынҡылыҡ, фекергә – иркенлек» тигән талаптан сығып эш итә, тиһәк тә хата булмаҫ. Шул да мәғлүм булһын: ҡыҫҡалыҡ, фекер тослого Мусаны йәшерәк сағынан уҡ оҙата килгән характерлы үҙенсәлектәрҙең береһе. Өс кенә строфанан торған «Ғорурлыҡ» тигән шиғырға күҙ һалайыҡ. Тәүге ике строфала автор тауҙарҙың, диңгеҙҙең, йылғаның, тургай менән бөркөттөң нилектән ғорур булыуҙарын иҫбатлай ҙа, һуңғы строфала «Кеше ғорур – күңеле менән ынтылһа бөйөклөккә», тигән оптимистик һығымта яһап ҡуя. «Үткән көн»дәге:

Ғүмер йомғағын көндәр һүтһә лә,
Үкенесле түгел, әгәр ҙә
Һин үҙеңдең йәшәү һулышыңды
Биреп барһаң үткән көндәргә,

«Яҡынайыу»ҙағы:

Ҡояш алһыулығы – таңдарҙа,
Йөрәк ярһыулығы – ҡандарҙа.
Шуға ярһып йөрөйөм юлдарҙа
Ҡанатланып хыял-уйҙарҙа,–

тигән юлдарҙы уҡып, кемдәр генә тулҡынландырғыс хистәр кисереп алмаҫ икән? Ун алты юлдан торған «Баҡсасы» ла күп кенә ассоциатив уйҙар тыуҙыра һәм шуға күрә үҙенә айырым иғтибарҙы талап итә. Шиғырҙың башында килтерелгән бағышламаға ҡарағанда, ул символик

йәнәшәлеккә ҡоролған: һәр көҙөн мул емеш менән ҡаршылаусы баҡсасы ҡарт образында Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаш күҙ алдына баҫтырылған. Һуңғы строфала символика айырыуса көслө яңғырай:

Ел алмағас япрағын
Ҡоя ла ҡоя.
Бабай тормош ағасынан
Йылдарын йыя…

Баҡсасы образы бында күсмә мәғәнәлә ҡулланылған, әлбиттә. Әммә уның тура мәғәнәһен дә хәтергә төшөрөп китергә мөмкин. Олпат шағирҙың баҡса һүҙенә йыш ҡына мөрәжәғәт итеүе, бәлки, юҡтан ғына булмағандыр. Ғүмеренең байтаҡ өлөшөн ул йәшеллеккә күмелеп ултырған ағас йортта (ә ул йорт Гоголь урамында урынлашҡайны) йәшәп үткәрҙе һәм ижад итте. 1964 йылда Өфөлә «Минең баҡсамда» тип аталған шиғырҙар китабы баҫтырып сығарҙы. Ике йылдан һуң Мәскәүҙә «В моём саду» тигән йыйынтығы донъя күрҙе. Етмешенсе йылдар башында,Назар Нәжмиҙең «Ҡарҙар яуа» тигән китабы Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына тәҡдим ителгәс, «Шағир баҡсаһында» («Ҡыҙыл таң», 1972, 6 февраль), тип аталған күләмле мәҡәлә менән сығыш яһаны. Муса Сиражиҙың да «Баҡсасы» тигән шиғыры Сәйфи Ҡудаш йоғонтоһо аҫтында яҙылманы микән, тип уйлап ҡуяһың ҡайһы саҡта.

Тик, шуныһы ҡыҙғаныс, йылдар үткәс был шиғыр, ни сәбәптәндер, һиҙелерлек үҙгәртеүҙәргә дусар ителде.Башта уның исеме алышынды: «Баҡсасы»нан «Беҙҙең замандаш»ҡа әйләнде. Унан һуң бағышламаһы алып ташланды. Ахыр сиктә, шиғырға яңы (бишенсе) строфа ла өҫтәп ҡуйылды. Хәҙер был әҫәрҙе уҡығанда, Сәйфи Ҡудашты ғына түгел, шиғриәтебеҙҙең башҡа аҡһаҡалдарын да күҙ уңында тоторға була.

Әлбиттә, һәр ижадсы – үҙе тыуҙырған әҫәрҙең хужаһы. Үҙе баш, үҙе түш, тигәндәй. Ләкин әҫәр ташҡа баҫылғанға тиклем генә шулай. Уҡыусы ҡарамағына тапшырылғас иһә теләһә ниндәй әҙәби әҫәр ҙә ояһынан осоп киткән ҡошҡа тиң. Ул ҡошто һин яңынан тотоп ҡара! Уны күҙәтеп торорға ғына ҡала: ҡаяға (әйткәндәй, был һүҙ Муса Сиражи ижадында – шиғырҙарында ла, поэмаларында ла – йыш ҡына күҙгә салына) талпынамы,әллә өй ҡыйығы менән тәҙрә башын ғына үҙ итәме. Нисек кенә булмаһын, уртаҡ хазинаға әйләнгән әҙәби байлыҡты «ботарламау» хәйерлерәк түгел микән?

М. Сиражиға йәштән үк бирелгән икенсе бер сифат – тәбиғәт күренештәренә, унда барған өҙлөкһөҙ хәрәкәткә һиҙгер булыу һәм шул күренештәрҙе сағыу буяуҙар ярҙамында йәнле итеп һынландыра белеү. Кеше менән тәбиғәт араһындағы бәйләнештәр һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҙә шағирҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай. «Офоҡта – ҡоштар, ҡоштар…» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, ул, балаларға хас бер ҡатлылыҡ күрһәтеп, «Беҙ көткәнде яҙ белмәйҙер – килмәй ҙә килмәй һаман» тип, бер аҙ түҙемһеҙләнеп алһа ла, ахыр сиктә яҙҙың барыбер яҙлығын иткәнен танырға мәжбүр була:

Ә бер көндө ни күрәбеҙ:
Офоҡта – ҡоштар, ҡоштар…
Урман, ҡырҙар сәләмләйҙәр:
«Әйҙәгеҙ, әйҙә, дуҫтар!»

Теҙелешеп ҡоштар ҡайта,
Моңдары дәртле, наҙлы.
Умырзая ҡарһы алды
Күтәреп шул саҡ яҙҙы!

Тәбиғәттә, уның ифрат бай күренештәрен һәр кем үҙенсә аңлай, үҙенсә ҡабул итә. Хатта бер үк күренеш төрлө уй-хистәр уятырға, төрлө ассоциация тыуҙырырға мөмкин. Ошо йәһәттән М. Сиражиҙың «Күк йөҙө бит аяҙ ине…» һәм «Дауыллы ямғыр» тигән шиғырҙары ҡыҙыҡлы. Тәүгеһендә, ни бары ун ике юлдан торған шиғырҙа, тыныс ҡына, йәшенһеҙ-күкрәүһеҙ, елһеҙ-дауылһыҙ, көтмәгәндә-нитмәгәндә яуып киткән йәйге ямғырҙы тасуирлау өсөн, автор бөтәһе түгел поэтик саралар тапҡан: шул арала күк биленә йәйғор һарылып алған; ҡояш көлөп торғанға күрә, ямғыр ҙа нурға төрөнөп яуғандай тойола уға;тиҙ башланған ямғыр тиҙ генә үтеп тә китә, ләкин барыбер ҙә ер йәшәреп, донъя яҡтырып ҡала, һауанан хуш еҫ бөркөлөп тора. «Әйтерһең, тәбиғәт шулай шатлыҡ йәштәрен түкте», тигән өр-яңы метафора менән тамамлап ҡуя шағир үҙенең күҙәтеүҙәрен.

«Дауыллы ямғыр» тигән шиғырҙа иһә хәл башҡасараҡ. Һәм ул башҡалыҡ әҫәрҙең исеменән үк күренеп тора. Мусаның был шиғыры Назар Нәжмиҙең «Бер ҡыҙ хикәйәһе» тигән һылтау аҫтында 1959 йылда яҙылған «Көтөлмәгән ямғыр»ын хәтерләтеп ҡуйһа ла, күсермә түгел. Бындай осраҡтар әҙәбиәт донъяһында булғылай торған хәлдер.

Пушкиндың да ҡайһы бер әҫәрҙәре Байрондыҡына оҡшаған, тиҙәр бит. Әммә шуныһы мөһим: Н. Нәжмиҙең лирик героиняһы өсөн көтөлмәгән ямғыр татлы ла, ләззәтле лә минуттар кисереп алырға сәбәпсе булһа, М. Сиражиҙың лирик геройын иһә дауыллы-йәшенле ямғыр һөйгәне менән ҡауыштыра:

Бәхеткә ҡаршы ямғыры
Ҡойҙо ла, ҡойҙо,
Ә йөрәктә яңы тойғо
Тыуҙы ла ҡуйҙы.

Ел-ямғыр осраштырыр, тип
Кем һуң уйлаған?!
Шуға, ахыры, ел-ямғырҙар
Үтмәй аранан.
Ә беҙгә ни, ғашиҡтарға,
Шул да яраған…

Йылдың ҡайһы ғына миҙгеле тураһында һүҙ бармаһын, тәбиғәттең шул миҙгелгә хас үҙенсәлектәрен тасуирлағанда М. Сиражи буяуҙарҙы мул, әммә ҙур һаҡсыллыҡ менән ҡулана. Ул ике генә юлдан торған «Иртә килгән көҙ тураһында» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ул башта йәйҙе оҙатмаҫ борон ҡырыҫ елдәр иҫә башлауын хәбәр итә лә,артабан тәбиғәттәге ошо көтөлмәгәнерәк үҙгәреште аныҡ миҫалдар менән нығытып ҡуя: ҡырҙар шау-шыуы ла, баҡсалағы ҡыуаҡтарҙа ҡоштар сыр-сыуы ла тынып ҡала; йылға буйҙарында ла сәйер тынлыҡ урынлаша; күктә һоро болоттар күренгеләй башлауы ла, төндәрҙең йонсоуланыуы ла шағирҙың иғтибарынан ситтә ҡалмай. Ләкин ул тәбиғәттә барған был үҙгәрештәрҙе ҡоро регистрациялаусы түгел – уның әйтер һүҙе бар: «…Иртә килгән яҙҙар күңелле, көҙ иртәләп килһә – моңһоуыраҡ».

Ә бына «Тәүге ҡар» тигән шиғырҙы өҫтә телгә алынған «Күк йөҙө бит аяҙ ине…»нең ғәйәт үҙенсәлекле дауамы һымағыраҡ ҡабул итергә мөмкин. «Күк йөҙө бит аяҙ ине…»лә шағирҙың иғтибарын тиҙ генә үтеп киткән йәйге йылы ямғыр биләгән булһа, «Тәүге ҡар»ҙа иһә ул ҡыштың да алыҫ түгеллеген иҫкәрткән күренеш тураһында хәбәр һала. Әйтергә кәрәк, тәүге ҡарға һоҡланыуын һәм ошо уңайҙан тыуған яңы уй-хистәрен автор иҫ киткес матур итеп һүрәтләп биргән:«Ер өҫтө ап-аҡ.

Донъя яп-яҡты. Күңел пак, күңел яҡты. Ерҙән аңҡый ҡар еҫе. Ерҙән ҡабат килмәҫ кеүек дары еҫе, ҡан еҫе» һ.б.

Миҙгелдәр алышынғанда тәбиғәт кисерә торған үҙгәрештәр ҙә бик оҫта тотоп алына Муса Сиражи әҫәрҙәрендә. «Һиҙҙереүе шулдыр» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, ҡыштың һуңғы мәле йәнле итеп күҙ алдына баҫтырылған. Көнъяҡтан иҫкән йылы елдәр урамдарҙы епшеткән. «Түбәләрҙән тып-тып тамсы тама». Ағастарҙа бөрөләр бүртеп тора. «Ойоп ятҡан ап-аҡ баҫыуҙарҙа күренгеләй ҡара тимгелдәр». Ләкин, «һис һиҙелмәй бөгөн ҡыш миҙгеле» тип шатланһа ла, «ә шулай ҙа был яҙ түгел…», тип киҫәтә шағир:

Был яҙ түгел… Бары тәбиғәттең,
Ахыры, сираттағы шуҡлығы,
Юҡһа ул да әллә үҙенең
Кисерәмен бер-бер шатлығын?

Муса Сиражи – хистәргә бай шағир. Хистәр, үҙ сиратында, уға сағыу эпитеттар, йәнле сағыштырыуҙар, көтөлмәгән метафоралар һәм метонимиялар бүләк итә. Шуға күрә, һәр тарафы офоҡтарға барып тоташҡан дала киңлектәре («Дала»), диңгеҙ өҫтөн иңләп буйлаған тулҡындар («Һин генә»), тәбиғәттән йәм табып һәм көс алып йәшәүсе шағирҙа саф тойғолар уятып ебәрә икән, һис тә ғәжәп түгел. Йәш саҡта яр буйында ҡабыҙып ҡалдырған усаҡтар, үҫеп еткәс, уны ал галстук болғап ҡаршылағандай тойола икән («Ҡаршылау»), бының менән дә килешмәй ярамаҫтыр. Ҡышҡы юлдан һалмаҡ ҡына юрға аты юртҡанда, тимер сана, һыҙҙырып, скрипка уйнатҡандай тойола икән («Ҡышҡы юл»), бынығы ла әллә ни ғәжәп түгел, шикелле. Ҡаялар өҫтөндә ғорур баҫып торған имәндәр шаулап ҡуйһа, ҡаялар телгә килгән кеүек булалар икән («Ҡаялағы имәндәр»), быға ла ышанмай сара юҡ. Күл өҫтөнән күтәрелгән аҡ томандың аҡҡошто хәтерләтеп ҡуйыуы ла («Күлдә – кәмә, күктә – турғай») уҡыусыла ризаһыҙлыҡ уятмаҫтыр, моғайын. «Йондоҙло төн» тип аталған шиғырҙа һүрәтләнгәнсә, ай, болоттарҙы аҡтарып, бураҙна һалып йөрөгәндәй тойола икән, бер һүҙ ҙә әйтеп булмай. Өҫтәүенә, болоттар араһынан ҡалҡып сыҡҡан йондоҙҙар, ем-ем итеп, бураҙнаға бөртөк булып һибелеп барған һымаҡтар икән дәбаһа. Бында килтерелгән миҫалдар, бәлки, күберәк тә булып киткәндер. Ләкин улар бер кемде лә телдән дә, аҡылдан да яҙҙырмаҫ. Киреһенсә, хистәр донъяһында ғына гиҙҙерер.

Өçтә иçкә алынған «Ҡаршылау» тигән шиғырҙың йәлеп итеү көсө ал галстукка бәйле метонимияға ҡарағанда, әçәрҙе ослап ҡуйған «Бар тәбиғәт мине ҡаршы ала, бар матурлыҡ минең ҡосаҡта!», тигән юлдарҙалыр. Ысынлап та, тәбиғәт күренештәре, тәбиғәт менән кеше араһындағы бәйләнеш Муса Сиражизың шиғырҙарында ғына түгел, поэмаларында ла байтаҡ урын алып тора. «Тауҙар саҡыра» тигән поэманың тәүге строфаһында уҡ, мәçәлән, шағир «Түбәһендә торам Ирәмәлдең, башым менән күкте терәтеп…», тип иҡрар итә. Шунда уҡ «Мин – Уралдың ябай бер улымын», тип тә өçтәп ҡуя. Романтик рух менән һуғарылған был поэмала (хәйер, Мусаның башҡа поэмаларына ла рух күтәренкелеге ят күренеш түгел!) сюжетты ойоштороусы, уны бер төйөнгә төйнәүсе әҙәби сара булып, быуаттар артылышында тарихтың аҡ та, ҡара ла яҡтарын үҙ хәтерендә һаҡлаған Урал тауы тора. Поэмала беҙҙең күҙ алдына баçтырылған бөтә хәл-ваҡиғалар тәбиғәттең тап бына ошо гүзәл дә, мәшһүр ҙә шаһитына –Урал тауына барып тоташа Шағир ҡәләме аçтында ул йәнле кеше образына ла инеп куйғылай: «Һин ҡарт инде, Урал, иңдәреңә таштар булып тарих өйөлгән». Лирик сигенеүгә оҡшабыраҡ торған өсөнсө бүлектә буяуҙар айырыуса сағыу. Был бүлектә Урал тауына йырланған мәҙхиә тиһәң дә хата булмаç . Фекерҙе ҡүәтләү өсөн, бер генә миçал:

Ҡайғыларым баштан ашһа әгәр,
Ауырлыҡтар алһа алҡымдан,
Халҡым кеүек, ярҙам ҡулын һуҙып,
Уралтауым тора артымда.
Мин – һинеке,
Һин минеке һәр саҡ,
Әй, Уралым – алтын һарайым.
Һиңә тау-таш итеп кенә түгел,
Яҙмыш тауы итеп ҡарайым.

Илебеҙ тарихын һәм халҡыбыҙ яҙмышын сағылдырған айырым эпизодтарҙы бер епкә теҙгәндә, шағир һәр ваҡыт Уралын күҙ уңында тота һәм уны даими рәүештә уҡыусының хәтеренә төшөрөп тора. Әгәр маҡсат итеп ҡуйһаң, был әçәр биттәренән авторҙың ҡуйын дәфтәрендә яралған бик күп ҡанатлы фразалар йыйып алырға булыр ине. Бында шуларҙың бер нисәһен генә – Урал тауына йырланған мәҙхиәне уғата ла көслөрәк яңғыратырҙайзарын ғына күрһәтеп үтеү ҙә етә: «Эй, Уралым, һинән айырылһам, миндә ниндәй йәм һәм йән ҡала?!»; «Күңелем ҡалай

ярлы булыр ине, йөрәгемдә Урал булмаһа»; «Йөрәгемдә, Урал, һинең менән Кавказ, Карпат, Памир ҡауышҡан» һ.б.

Поэмалар хаҡында һүҙ сыҡҡас, форсаттан файҙаланып, бер аҙ уларға туҡталып китмәй ярамаҫ.«Тауҙар саҡыра»нан һуң Муса Сиражи тағы дүрт поэма яҙҙы. «Заман тауышы», «Ҡояшлы бөртөктәр», «Әмер бирәм йөрәгемә», «Һалдат мөхәббәте», тип аталалар улар. Тик, нишләптер, биобиблиографик белешмәләрҙә лә, башҡа сығанаҡтарҙа ла был поэмаларҙың исемдәре телгә алынмай. Шуға күрә поэмалар үҙҙәре лә, уларҙың яҙылыу йылдары ла уҡыусы өсөн бер «сер» булып ҡала. (Ошо урында, йәйәләр эсендә генә булһа ла, шағирҙарыбыҙға, бигерәк тә йәштәре олоғайып барғандарға, мөрәжәғәт итке килә: ижадығыҙға, әҙәби хужалығығыҙға иғтибарлыраҡ булһағыҙ икән. Ана бит Александр Блок үҙ әҫәрҙәренең яҙылыу йылдарын ғына түгел, йыш ҡына хатта айҙарын-көндәрен дә күрһәтеп барған. Шуға күрә уның тормош юлын һәм ижадын өйрәнеүсе ғалимдарға һәм тәнҡитселәргә еңелерәккә тура килгәндер, тип уйлайым .)

Муса Сиражиҙың «Заман тауышы» тип аталған икенсе поэмаһы тәү ҡарамаҡҡа «Тауҙар саҡыра»ның дауамы шикеллерәк яңғырай һымаҡ. Ләкин улар араһындағы айырманы шәйләмәй булмай, әлбиттә. «Тауҙар саҡыра» – киң ҡоласлы әҫәр. Эскиз рәүешендә генә булһа ла, автор был әҫәрендә бер нисә быуатты эсенә алған осорҙо күҙ уңынан уҙғара. «Заман тауышы»нда иһә ул егерменсе быуат менән генә (уның да хәтергә нығыраҡ һеңеп ҡалған күренештәрен һүрәтләү менән генә) сикләнә. Күләме буйынса ла поэма артыҡ ҙур түгел. Әммә йөкмәткеһе менән иғтибарҙы йәлеп итмәй ҡалмай.

«Заман тауышы»ның авторы менән уның лирик геройы араһында күҙгә бәрелеп торған айырма юҡ тиерлек. Сюжет йомғағы һүтелгәндә шағирҙың үҙ тормошонан алынған автобиографик характерҙағы ҡайһы бер факттар шыма ғына дөйөм ағымға ҡушылып китәләр. Әҫәрҙең инеш бүлегендә үк, алда һүрәтләнәсәк хәл-ваҡиғаларға үҙ баһаһын биреп, автор егерменсе быуатты «шаулы, шомло быуат», тип атай. Шунда уҡ Ватан һуғышынан бирле әле һаман булһа наҡланған тән һәм йән йәрәхәттәрен иҫкә төшөрөп ала ла, яңы әҫәренең автобиографик һыҙаттарҙан азат түгеллегенә ишара яһап ҡуя: «Хәтәр йылдар, ҡанлы таңдар беҙҙең хәтерҙәргә ҡалған уйылып. Улар минең поэмаға бөгөн килеп инде изге моң булып…».

Йөкмәткеһе, автор позицияһы буйынса «Заман тауышы»н мин, әгәр мөмкин булһа, дидактик поэма, тип атар инем. Бәхет тураһында ҡупҡан

асыҡ бәхәс быға айырыуса уңышлы һәм урынлы миҫал булып тороролоҡ. Бәхетте еңел хеҙмәт менән донъяла еңел генә йәшәү, тип аңлаусы берәүгә яуапты шағир бына нисек ҡайтара:

Бәхет бик йыш «теләйем»дән бигерәк
«Кәрәк», «тейеш»тәрҙән тораlыр.
Ерҙә еңел бәхет эҙләүселәр
Үҙҙәре лә «еңел» булалыр.
Оҙон сәстәр, джинсылар ғына
Билдәләмәй әле заманды.
Эш күрһәт һин илгә игелекле –
Шул билдәләй йөҙөн Ватандың!

Шағирҙың дидактик принциптарын һәм ҡараштарын артабан да ҡеүәтләрҙәй башҡа миҫалдар за табырға була поэма биттәрендә. Бер уңайҙан шул да мәғлүм булһын: ҡайһы бер осраҡта Муса Сиражиҙың өгөт-нәсихәттәре нигеҙендә халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан килеп ингән әйтемдәр ятыуын да шәйләргә мөмкин. Енел йырланыр йыр яҙыуҙы, әйтәйек, автор энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиңләй. «Юлдар һала, тауҙар яра ала, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаға тырыштар», тигән фраза ла яртылаш Мусаныҡы, яртылаш – халыҡтыҡы. Ә бына былары – тик Мусаныҡы: «Йөрәк әрней бөгөн, йөрәк һыҡрай, хурланғанын күреп хеҙмәттең»; «Ниңә ҡай саҡ шундай вайымһыҙ беҙ, май баҫтымы әллә күңелде? Беҙ байыған һайын йөрәгебеҙ фәкирләнә бара түгелме?» Һуғыш осоро балалары, тип нарыҡланған тиҫтерҙәрен күҙ уңында тотоп, «Һалддат улы тигән исемдең беҙ бәҫен тоттоҡ һәр саҡ юғары!», тип белдерә ғорурланып автор менән йәнәш атлаған лирик герой.

Мусаның тәүге шиғырҙарында уҡ әле һиҙелерлек урын биләп торған әсә образы «Заман тауышы»на ла килеп ингән. Һәм бында ул уғата ла көслөрәк яңғыраш алған. Әлбиттә, әсә темаһына һәм әсә образына мөрәжәғәт итмәгән шағир юҡтыр ул башҡорт поэзияһында ла, шулай уҡ башҡа поэзияларҙа ла. Әммә М. Сиражи шиғриәтендә, минең тойомлауымса, ул айырыуса йыш телгә алына. Әле һүҙ барған поэмала ла әсә образы әҫәрҙең башынан алып аҙағына тиклем тиерлек күҙ алдында тора. Һуңғы бүлектә автор әсәһенең күңел бейеклегенә һоҡланып, былай ти: «Баш эйәмен беҙ һуңлап аңлаған уның изге бөйөкләүгенә». Бында инде дидактика ғына түгел, педагогика үҙе тулы килеш сағылыш таба, тиергә була.

«Заман тауышы»ның тағы бер тартыу көсө – авторҙың һуғыш ваҡытында ла, унан һуңғы йылдарҙа ла тормош ауырлыҡтарына объектив ҡараш ташларға һәм уларға объектив баһа бирергә тырышыуында. Ошо ҡарашын һәм баһаһын ул асыҡтан-асыҡ белдереү менән генә сикләнмәй – уларҙы яҡлау сараһын да эҙләй. Поэмалағы «етмәгәндәр» тигән төшөнсә тап ана шул сараларҙың бер сағылышы булып тора ла инде:

«Етмәгәнддәр» беҙҙән һынау алып
Сыҙамлыҡҡа иртә өлгөрттө.
Улар беҙҙе иркә итмәне,
Улар беҙҙе иртә ир итте.
Ҡай берәүҙәр кеүек, бик «фырт» булып,
Беҙ әҙергә бәҙер үҫмәнек.
Беҙ тормошта хеҙмәт дәрестәрен
«Биш»кә биреп үҫтек йәштән үк.

Стиле, яңғырашы буйынса (хатта күләме яғынан да) Сиражиҙың «Ҡояшлы бөртөктәр» тип аталған өсөнсө поэмаһы тәүгеләренән байтаҡҡа айырыла. «Тауҙар саҡыра» һәм «Заман тауышы»на, әйтәйек, ҡырыҫлыҡ, етдилек хас булһа, бынаһынан инһә, әҫәрҙең исеменән үк күренеүенсә, яҡтылыҡ, шатлыҡ нурҙары бөркөп тора. Уның сәбәбе, үҙ сиратында, автор теләге менән генә түгел, күберәк поэманың нигеҙ ташын тәшкил иткән тормош материалы менән аңлатыла. Был юлы әҫәрҙең сюжеты һуғыштан һуңғы йылдарҙа аҙмы-күпме аяҡҡа баҫтырылған ауыл күренештәрен һүрәтләүгә ҡоролған. Автор менән лирик герой араһындағы сиктәр ҙә ҡыҫыла төшкән: йыш ҡына ҡайҙа автор, ҡайҙа лирик герой хәрәкәт иткәнен өҙөп кенә әйтеүе лә ҡыйын булып ҡуя. Ләкин был әҫәрҙең дөйөм кимәленә һис кенә лә зыян килтермәй, минеңсә. Өҫтәүенә, кем булыуына ҡарамаҫтан – лирик героймы ул, әллә автормы – герой бер үҙе генә хәрәкәт итмәй: поэмала унан башҡа образдар ҙа етерлек. (Йәйәләр эсендә әйтәйем: биш бүлектән торған поэмаһына автор, строфалар тәртибен бер аҙ үҙгәртеп, элегерәк яҙылған «Ҡаршылау» тигән шиғырын инеш һүҙ формаһында файҙаланған. Ижад практикаһында бындай хәлдәр ҙә ғәфү ителәлер, күрәһең.)

Әлбиттә, егерме беренсе быуатта тыуып үҫкән йәштәргә Мусаның «Ҡояшлы бөртөктәр»е ятыраҡ күренеш булып тойолоуы ла ихтимал. Сөнки уның был поэмаһында кәүҙәләндерелгән тормош узған быуаттың

туҡһанынсы йылдарынан башлап ҡырҡа үҙгәрҙе. Шағирҙың бына был һүҙҙәрен хәҙер һағынып иҫкә алырға ғына ҡалды:

Донъяла бөтә изгелек
Тыуған ерҙән башлана.
Бында – хеҙмәт,
Бында – әҙәп,
Бында – минең баш ҡалам…

Муса Сиражи поэмалары халыҡсан, йүгерек теле менән йәлеп итәләр. Әле һүҙ барған әҫәрҙә лә был сифат күҙгә ташлана. Эҙләй башлаһаң, унда беҙҙең аңыбыҙҙы ла, һөйләү телебеҙҙе лә байытырҙай байтаҡ ҡына миҫалдар табырға була ине. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен бында һанап та китергә мөмкин: «Ергә ереккән кешеләр ерҙең серен беләләр»;«Һәр ҡайҙа ла хеҙмәттәләр ерҙә йәшәү хикмәте»; «Беҙҙе ерҙә әҙәм итте әҙәплеге ауылдың»; «…Ауыл әсәләрҙәй мәрхәмәтле, түземле. Тар тәҙрәнән киң донъяға аса күнел күҙенде…»; «Ни әйтһәң дә, беҙ бит әле тәбиғәт балаһыбыҙ…»; «Әгәр үҙең йылытмаһаң, кейем һине йылытмай»; «Ер шарына аяҡ терәп аттарып була әште!» һ.б. «Ҡояшлы бөртөктәр»ҙә ауыл тәбиғәтенең һәм күренештәренең ҡалай оҫта һәм матур итеп һүрәтләнеүе хаҡында һөйләп тораһы ла юҡ.

«Әмер бирәм йөрәгемә» тип аталған дүртенсе поэмаһында (2004 йылда шағирҙың Өфөлә татар телендә баҫылып сыҡҡан «Мәңгелек моңом минең» тигән китабында был поэма нишләптер «Йөрәгемә өндәшәм» тигән баш аҫтында бирелгән, йәйәләр эсендә «Публицистик поэма» тигән асыҡлама ла өҫтәлгән) Муса Сиражи йәнә тәүге ике поэмаһындағы шикелле ҡырыҫ холоҡло, етди ҡарашлы автор булып килеп баҫа беҙҙең ҡаршыға. («Йөрәгемә өндәшәм» матурыраҡ яңғырағандай тойолһа ла, 2009 йылда башҡорт телендә баҫылып сыҡҡан «Беҙ – улдары Башҡортостандың» исемле китапта поэманың тәүге атамаһы яңынан әйләнеп ҡайтҡан. «Публицистик поэма» тигән асыҡламаға килгәндә иһә, ул бик урынлы ҡулланылған, тиер инем. Сөнки әҫәр, ысынлап та, публицистик рух менән һуғарылған. Яңғырашы буйынса ул Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең һуғыш осоронда ижад иткән әҫәрҙәренә тартым. Рустың киң билдәле трибун шағиры В. Маяковскийҙы ла хәтергә төшөрөп ҡуя.)

М. Сиражҙың был поэмаһында ла автор менән лирик герой араһында айырма юҡ тиерлек: улар, әҫәрҙең башынан алып ахырына тиклем, бер-

береһен тулыландырып, бер юлдан атлайҙар. Форма йәһәтенән дә поэмалар бер-береһенә бик яҡын: «Тауҙар саҡыра» менән «Заман тауышы»ндағы шикелле, «Әмер бирәм йөрәгемә»лә лә текст строфаларға бүленмәгән. «Тауҙар саҡыра»лағы кеүек, «Әмер бирәм йөрәгемә» лә инеш һүҙгә оҡшаған уйланыу-киҫәтеүҙәр менән асып ебәрелә. Ундағы «Килде бер көн. Иҫте апрель еле таҙартырға беҙҙең донъяны», тигән тәүге өс юл, моғайын да, уҡыусыны һағайтмай ҡалмайҙыр. Ләкин автор үҙенең был әҫәрендә һүҙҙең нимә хаҡында барасағын туранан-тура асып һалырға бик ашыҡмай. Артабанғы «Яңы яҙғы һулыш туҡтап ҡалған ташҡындарҙы йырып ебәрҙе», тигән юлдар ҙа йомаҡ шикеллерәк яңғырай. Яңы һулыш алып килгән көнгә лә, кеше ғүмеренең бер аҙ ҡояшлыраҡ булырына өмөт уятҡан яңы дәүергә лә автор шатланып та, бер үк ваҡытта шомланып та ҡарағандай тойола. Һәр хәлдә, «Тауҙар саҡыра» менән «Заман тауышы»ндағы шикелле, ул бында ла, хәлваҡиғаларға үҙ баһаһын биргәндә, объективлыҡ күрһәтергә тырыша:

…Әмер бирәм бөгөн йөрәгемә
Заман пульсы булып,
Бары хаҡлыҡ булып тибергә.
Китә ала кеше киләсәккә,
Ғәҙәл баһалаһа үткәнен.
Мин дә шуға үҙгәндарға бағам,
Яҡты булһын өсөн көткәнем.

Инеш һүҙҙән тыш, поэма дүрт бүлектән тора. Уларҙың бөтәһе лә автор менән лирик геройҙың уртаҡ фекере һымағыраҡ ҡабул ителә. Һәм бөтә бүлектә лә һүҙ башлыса әхлаҡ нормалары, ерҙә йәшәү принциптары хаҡында бара. Тәүге бүлектә, мәҫәлән, был икәүҙең (шартлы рәүештә, әлбиттә) тормош ығы-зығыларына, дауылдарға, бурандарға, ғәрәсәтле ҡойондарға бирешеүселәрҙән түгеллеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Донъянан отторған саҡтары булыуын да йәшермәйҙәр улар. Ебәргән хаталарҙың йыш ҡына йөрәккә ҡан һауҙырғанын да таныйҙар. Шуларҙың бөтәһе өсөн дә ғәфү үтенәләр, әммә аҡланырға йыйынмайҙар, киреһенсә – уға әмер бирәләр: «Йәшәр булһаң, йәшнәп йәшә, балҡып ян да янып балҡы»; «Йәшәүҙең һуң ерҙә ни йәме бар, һиңә әгәр йәшнәү етмәһә?!» һ.б. Авторҙың бөгөнгө донъя хәлдәренә, заман шау-шыуына ҡарашы был бүлектә ослап ҡуйған ауыл аҡһаҡалы монологында уғата ла асығыраҡ сағылған. Монологтың һуңғы юлдары күптәрҙә яҡлау табыр

«…Әле һиҙелмәй тамаҡҡа,
Өҫ-башҡа үтә юҡлыҡ,
Әммә намыҫҡа, иманға,
Әхлаҡҡа бөгөн – ҡытлыҡ!
Әгәр ошо ҡытлыҡтарҙан
Ҡотҡарһаҡ үҙебеҙҙе,
Сафландыра аласаҡбыҙ
Беҙ тотош илебеҙҙе…»

Заман менән ҡәтғиән һөйләшеү, бөгөнгө тормошобоҙҙа хөкөм һөргән тәртиптәрҙе фашлау поэманың башҡа бүлектәрендә лә дауам итә. Икенсе бүлектә, мәҫәлән, автор, ел-ямғырһыҙ алтын урталыҡты һайлаусыларҙы күҙ уңында тотоп, йөрәгенә былай тип өндәшә: «Һин шундайын урталыҡта икән, минең өсөн юҡ һин һәм булма! Йөрәк булмай күкрәк уртаһында, халыҡ, хаҡлыҡ ҡайҙа – һин шунда!». Өсөнсө һәм дүртенсе бүлектәрҙә лә бик мөһим мәсьәләләр (шул иҫәптән ижадҡа ҡағылышлылары ла) күтәрелә. Был бүлектәрҙе уҡып ултырғанда, Муса Сиражиҙың юмор һәм сатира өлкәһендә лә әүҙем эшләүе әрәмгә китмәгән икән, тип уйлап ҡуяһың. Ә шулай ҙа «Әмер бирәм йөрәгемә»нең идея-художество әһәмиәте һәм уҡыусыға тәьҫир итеү көсө шағирҙың бына был сағырыуындалыр:

Яманлыҡтың юлы ҡыҫҡа булһын,
Ә игелек – ҙәүер ғүмерле.
Һыйҙыр, йәнем, үҙеңә кешеләрҙең
Ҡайғылы һәм шат күҙ йәштәрен.
Ҡитғаларҙың күкрәү-тетрәүҙәрен,
Өмөттәрен,
Хәсрәт-хәстәрен.

Хистәргә йомарт Муса Сиражиҙың ижад баҡсаһында мөхәббәт лирикаһы ла үҙенең лайыҡлы урынын биләп тора. Уның был темаға арналған шиғырҙарынан тыш, «Һалдат мөхәббәте» тигән поэмаһы ла бар хатта. Туҡһанынсы йылдар ахырында нәшер ителгән бер китабын да ошо исем менән атағайны ул. Стиле һәм структураһы буйынса был поэма «Ҡояшлы бөртөктәр»гә тартым: шул уҡ традицион (дүртәр юллыҡ) строфалар; бер-береһенә йәбешеп торған теүәл һәм аһәңдәш рифмалар; оҫта итеп һүрәтләнгән йәнле һәм бай тәбиғәт күренештәре; урынлы файҙаланылған сағыштырыуҙар һәм метафоралар; ара-тирә күҙгә салынып киткән ассонанс менән аллитерациялар һ.б.

Поэманың атамаһынан уҡ һиҙелеп тороуынса, автор был әҫәрендә яңынан һуғыш темаһына әйләнеп ҡайтҡан кеүек. Ләкин «Һалдат мөхәббәте» һуғыш тураһында ғына түгел. Унда һуғышҡа тиклемге тыныс тормош та күпмелер кимәлдә сағылыш тапҡан. Әммә поэманың идея-эстетик асылын, бесән өмәһе һәм танкылар бәрелеше һүрәтләнгән эпизодтарҙан да бигерәк,көслө рухлы ике йәш йөрәктең – Самат менән Диләнең – тормоштоң ҡәһәрле аяуһыҙлығына каршы баҫып, үҙҙәренең бер-береһенә булған тәрән һөйөү тойғоларын һаҡлап ҡала алыуҙары тәшкил итәлер, тип уйлайым мин. Әҫәрҙә ғәҙәттән тыш киҫкен һәм көсөргәнешле хәл-ваҡиғалар тасуирлана. Әйтергә кәрәк, ысынбарлыҡта тиңе һирәк осрай торған мөхәббәтте автор психологик яҡтан ышандырырлыҡ итеп кәүҙәләндһреүгә ирешкән.

М. Сиражизың мөхәббәт лирикаһына тойғолар сафлығы, фекер тәрәнлеге, ихласлыҡ хас. «Бына бер саҡ, – ти ул «Заман тауышы» поэмаһында, – ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һөйөү килде беҙҙең быуынға. Танышһаҡ та төрлө уйындарҙа, мөхәббәттә – изге мөхәббәттә әйләндермәнек беҙ уйынға». Уның мөхәббәт темаһына бағышланған шиғырҙары ла (уларҙың ҡайһы берҙәрен бында һанап та китергә мөмкин: «Мөхәббәтһеҙ – кеше күңеле…», «Үҙе, бәлки, белмәйҙер ҙә…», «Тойғолар төҫлө икән», «Һин генә», «Һағыныуҙарым шулдыр,күрәһең», «Күлдә – кәмә, күктә – турғай», «Ер тартмаһа…», «Шатлыҡтарың иретер», «Һин әллә кемгә…», «Пар эҙ», «Бары һиңә баш эйәм», «Йөрәкле һүҙ», «Һинән башҡа йырым юҡ», «Дуҫым хикәйәте», «Әллә нисек, зәңгәр төҫтө күрһәм…», «Йылмай таңдай түгелеп…»,«Кәмәлә», «Әсирлек», «Һин») ошондай уҡ яҡты хистәр, тәрән уй-тойғолар менән һуғарылған.

Йәшерәк саҡта уҡ әле М. Сиражиға, мөхәббәт булмағанда, кеше күңеле – күҙһеҙ, хисһеҙ; урман, ҡырҙар – йәмһеҙ, төҫһөҙ; һайрар ҡоштар – ғәмһеҙ, телһеҙ; тәбиғәт тә – көсһөҙ, өнһөҙ тойолған. («Мөхәббәтһеҙ – кеше күңеле…»). Шул уҡ мәлдә яҙылған икенсе бер шиғырҙы – «Һағыныуҙарым шулдыр, күрәһең»де – бында тулы килеш күсерергә булдым. Ул шундай нәфис, күсергәнем өсөн мине бер генә уҡыусы ла ғәйепләмәҫ әле:

Ниндәй хәл был: шишмә йырлаһа ла,
Шаулаһа ла Изел ҡамышы,
Ишетелә кеүек тауышың,
Һулҡылдатып йөрәк һағышын.
Ниндәй хәл был: зәңгәр күккә баҡһам,

Йондоҙ булып ҡарай күҙҙәрең,
Тулған айҙа балҡый йөҙҙәрең,
Елдәр менән килә һүҙҙәрең.

Ниндәй хәл был: күрәм төштәремдә,
Һин йылмайып ҡаршы киләһең,
Иркәләйһең мине, һөйһең –
Һағыныуҙарым шулдыр, күрәһең…

Уҡыусы иғтибарын шиғырҙың йөкмәткеһенән дә бигерәк, уның яңғырашына–айырыуса икенсе строфалағы «зәңгәр» һүҙенә йүнәлткем килә. Һәм был һис тә юҡтан түгел. «Зәңгәр» тигән сифатты М. Сиражи тәү тапҡыр «Бөйөклөк» тигән шиғырында ҡулланған. Шиғыр иһә уның «Осрашыу» тигән тәүге йыйынтығында тәүге урындарҙың береһен биләп тора. Патриотик рух менән һуғарылған әҫәр. «Замандашым бөгөн – теләһә ҡайһы планетаға осоп ҡанатлы», – ти ул, фән өлкәһендә илебеҙ ирешкән ҡаҙаныштар менән ғорурланып. Һәм, артабан да замандашын күҙ уңында тотоп, өҫтәй: «Алып менде ғаләм бушлығына тыуған илдең зәңгәр яҙҙарын». Был шиғыр донъяға килеп, баҫылып сыҡҡандан һуң күп йылдар үтте, күп һыуҙар аҡты. Ә бына «зәңгәр» һүҙе шағирҙың ғүмер һәм ижад юлдашына әйләнде. Мөхәббәт лирикаһында ла осрамай ҡалмай ул. Шундай шиғырҙарҙың береһен генә – «Әллә нисек, зәңгәр төҫтә күрһәм…» тигәнен генә – хәтергә төшөрөп үтеү ҙә етә. Ун тапҡыр ҡулланылған был шиғырҙа «зәңгәр» һүҙе һәм уларҙың береһе лә урынһыҙға түгел. Ышаныслы булһын өсөн, шиғырҙан бер нисә юл килтерәйек:

Әллә нисек,
зәңгәр төҫтө күрһәм,
Үлеп китәм.
Кискә керһәм –
Зәңгәр иртәләрҙе көтәм.
Иртә менән
зәңгәр сәскәләрҙе
Һөйөп-һыйпап үтәм.
Диңгеҙ ярына килһәм,
зәңгәр киңлектәрҙе
Ҡомһоҙланып йотам.

Уның ҡарауы, шағир ҡара төҫтө үҙһенмәй. Хатта Ҡара диңгеҙҙе лә ҡара итеп күргеһе килмәй уның:

Ҡара диңгеҙ –
түгел ҡара.
Ҡолас йәйеп йөҙөп ҡара,
Зәңгәр киңлек ҡосоп ала.
Кешеләр күп кергән һайын,
Эскә нығыраҡ ингән һайын
Ул ағара-асыла бара.
Ҡара диңгеҙ – түгел ҡара.
(«Ҡара диңгеҙ – ҡара түгел»).

Һуңыраҡ яҙылған бер шиғырында иһә шағир «Төҫтәрҙән мин ҡараны яратмайым…» тип, асыҡтан-асыҡ ярып һалды. Үҙенсә уның сәбәбен дә аңлатты:

Тормош – сыбар,
көҙгө урмандай.
Ә ҡара төҫ – кара йыландай.

Шуға күрә һөйгәнен ҡурсалауы һис тә ғәжәп түгел:

Теләһә ниндәй төҫтө ярат, иркәм,
Каршы түгеллекте беләһең.
Ләкин бер төҫ –
ҡара кейемдә тик
Килмәй һине, килмәй күрәһем!

Асылда М. Сиражиҙың мөхәббәт лирикаһы формаһы менән дә, йөкмәткеһе йәһәтенән дә бик етди булһа ла, ара-тирә шаяртып алыу ҙа ят күренеш түгел уның өсөн. «Әсирлек» тигән шиғырҙан килтерелгән бынауы ике строфа әйткәнде аҡларҙай дәлил булырлыҡ:

Әсир итте мине йырға ингән,
Ирәмәлдә ятҡан аҡ таштар.
Булды бер саҡ: әсир итте мине
Ҡара ҡаштар менән «аҡбаштар».
Ярай әле, әллә нисек шунда
Һуңғыларын, мәйтәм, ташланым.

Тәүгеһенән ләкин… тәүбә-тәүбә!
Арынмаһын берүк баштарым.

Өçтәрәк, «Һалдат мөхәббәте» тигән поэмала төп геройҙарҙың характер үҙенсәлектәре һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәре психологик яҡтан ышандырырлыҡ итеп асылған, тигәйнем. Иғтибар менәнерәк күҙәтә башлаһаң, психологик ағымды Муса Сиражиҙың шиғырҙарында ла төçмөрләргә мөмкин. Айырыуса уның тыуған төйәге, тыуған ауылы, әсәһе, бала сағы тураһында һүҙ барғанда. Һуғышҡа бәйле теманы яҡтыртҡанда ла шағир күңел ҡылдарын сирттермәй ҡалмай. Ә бына һуғыш йылдарына ла, балалыҡ осорона ла бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте булмаған «Йылы эҙләп китмәйем…» тигән шиғырҙы кешенең эске донъяһына үтеп ингән көслө әсәрҙәрҙең береһе, тиер инем. Был шиғырҙа һүрәтләнгән кескәй генә эпизод нигеҙендә психологик яҡтан шундай уҡ тетрәткес сәсмә әҫәр ҙә яҙырға булыр ине, тип уйлайым.

Муса Сиражи – лирик шағир. Әҫәрҙәренең күпселеге аша ул беҙҙең алға барынан да элек нескә тәбиғәтле, киң күңелле, бай телле, йор һүҙле шағир булып килеп баҫа. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тормош ал да гөл булмаған шикелле, шағир күңеле лә гел яҡты уй-тойғоларҙан һәм наҙлы хистәрҙән генә тора алмай шул. Сиражиҙың да донъяны зәңгәр күҙлек аша күрергә тырышып яҙған шиғырҙары менән бер рәттән, намыҫһыҙлыҡты, ғәҙелһеҙлекте, ғәмһеҙлекте, ялғанлыҡты һәм шуның кеүек башҡа бик күп тиҫкәре сифаттарҙы фашлағандары ла осрап китә икән – ни хәл итәһең? Бында тик шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәктер: тормоштоң яҡты яҡтарын тасуирлағанда йәнгә йәтешле гүзәл һүҙҙәр менән эш иткән М. Сиражи ысынбарлығыбыҙҙы томалап торған кире күренештәрҙе һүрәтләү өсөн дә тейешле баһаламаһын (ҡайһы саҡта – үтә киҫкенен дә) таба белә. Был да уның бер ҡаҙанышылыр.

Шағир тураһында һүҙҙе артабан да дауам итергә булыр ине. Һәм киләсәктә ул, моғайын да, дауам ителер. Әле иһә һүҙемде уның «Тауға үрләгәндә» тигән шиғырынан алынған һуңғы юлдар менән тамамларға булдым:

Бейеклекте тойоу рәхәт,
Уға лайыҡ булыу ҡыйын.
Ниңә кәрәк тауҙай буйың –
Ҙур булмаһа хисең-уйың?!

2013, сентябрь

«АҠ КӨНДӘРҘӘН ГЕНӘ ТОРМАЙ ДОНЪЯ…»

Бынан ун алты йыл элек Фәнил Күзбәковтың «Өмөт шәмдәлдәре» исемле йыйынтығын баһалауға арналған мәҡәләмде уның «Шифриәткә мин инәмен, аяҡ сисеп, баш һалып. ‹…› Шифриәткә мин инәмен ғибәҙәтхана күреп», тигән юлдары менән тамамлағайным. Сөнки был юлдарҙа авторҙың тыйнаҡлығы ла, ҡәләмгә ҙур яуаплылыҡ тойоп тотонғанлығы ла күренеп тора ине. Күңеле түрендә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә ҡыбырлап ҡуйған шиген дә йәшермәгәйне ул:

Бында миңә ни ҡалған һуң?
Доғалар ятланмаған.
Ололарҙан отҡанды ла
Хәтерем һаҡламаған.

Әммә шифриәттең тылсымлы таяғы һәр төрлө шик-шөбһәләрҙән көслөрәк булып сыға:

Ярай, тимен, белгәнемсә
Тәҡбирҙәрҙе әйтәйем.
Күңелемдәген сисәйем,
Гонаһтарҙы һүтәйем.

Фәнил Күзбәковтың «Шифриәт» тигән әҫәренә яңынан әйләнеп ҡайтыуым юҡтан ғына түгел, әлбиттә. Баҡһаң, белгәненсә тәҡбирҙәрҙе әйтә-әйтә, күңелендәген сисә-сисә,гонаһтарҙы һүтә-һүтә байтаҡ ҡына ғүмер үтеп киткән икән дәбаһа. Шифриәткә аяҡ сисеп, баш һалып, ғибәҙәтхана күреп ингән Ф. Күзбәков хәҙер билдәле шағир ҙа («Өмөт шәмдәлдәре»нән һуң ул «Һағыш» һәм «Йәшәйеш ҡанундары» тигән поэтик китаптар баҫтырып сығарҙы), тарих һәм филология фәндәре өлкәһендә үҙ урынын яулаған күренекле ғалим да. Әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнергә лә ваҡыт таба. «Рухиәт ҡотҡарыр» (Өфө, 2011) исемле китабына ингән мәҡәләләре һәм һуңғы йылдарҙа «Ағиҙел» биттәрендә ул ойошторған әңгәмәләр быға асыҡ дәлил булып

торорлоҡ. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, һәр яҡлап та өлгөр һәм үтә тынғыһыҙ кеше ул Фәнил Күзбәков.

Бер юлы бер нисә кәмә ҡойроғон тотоу еңелдән түгелдер, әлбиттә. Өҫтәүенә, йыш ҡына эш урындарын да алыштырып торһаң . Фәнилдең был ҡылығын ҡайһы берәүҙәр өнәп тә еткермәй, шикелле. Быны ул үҙе лә һиҙенгәндәй. «Һағыш» тигән китабына яҙған баш һүҙҙә бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:«Фән менән шиғриәт – булмыш арбамдың пар юртағы. Мин уларҙы ҡамсыламайым, әммә дилбегәне лә бөтөнләй ташлап уҡ ҡуйған юҡ. Уны ваҡыты-ваҡыты менән ҡаҡҡылап алыу ҙа етә һымаҡ. Хәйер, киттән күҙ һалыусыларға, бәлки, икенсерәк тә күренә торғандыр». Шул икенсерәк күреүселәрҙең хәтеренә халыҡ телендәге «йөрөгән таш – шымарыр, йөрөмәгәне – мүкләнер», тигән әйтемде төшөрөп китеү урынлы булыр, тип уйлайым.

Тынғыһыҙ, эш урындарын алыштырып тороуға артыҡ иҫе китмәгән «сәмсел, башэймәҫ» Ф. Күзбәковты идеялар сығанағы (генератор) тип атарға булыр ине. Әлбиттә, уның шиғриәт, рухиәт, милләт хаҡындағы уйланыуҙарын төрлөсә ҡабул итергә мөмкин. Әҙәбиәт, әҙәби тәнҡит мәсьәләләренә ҡағылышлылары ла уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ. Әммә уларҙың бөтә ҡиммәте лә шунда түгелме ни? Төрлөсә ҡабул ителә икән, тимәк, улар бәхәс тә уятырға мөмкин. Битараф ҡалдырмай икән, тимәк, унда иғтибарҙы йәлеп итерлек фекергә юлығаһың. Тик теләһә ниндәй бәхәстең дә төбөндә үс ҡаныу түгел, ә изге ниәт ятһын.

«Кеше булып ҡалыу өсөн,– тип яҙа Фәнил «Рухиәт ҡотҡарыр» тигән китабын асып ебәргән баш һүҙҙә,– аң-белемгә, матди байлыҡҡа эйә булыу ғына етмәй… Рухи фәҡирлек, рухи һуҡырлыҡ бөлдөрә, яуызлыҡҡа этәрә, түбәнлеккә төшөрә әҙәм балаһын». Авторҙың был фекере менән кем генә килешмәҫ икән? Ә бына «бөгөнгө заман талаптарына яуап бирмәгән ҡанундарҙан арынмайынса» тороп, әҙәби тәнҡиттә алға китеш мөмкин түгел, тигән тезисты нисегерәк аңларға? Тотош ил күләмендә милли идея, милли идеология булмаған саҡта, нисегерәк итеп яңыса фекерләргә мөмкин икән? Бөгөнгө заман талаптары ниҙән ғибәрәт һуң? Урлашыуҙан, мутлашыуҙан, эшһөйәр намыҫлы кешеләрҙе яңынан ҡоллоҡҡа төшөрөүҙән, ҡан ҡойоштанмы?

Әлеге осраҡта был һорауҙарға яуап эҙләү күҙ уңында тотолмай. Сөнки иғтибар үҙәгендә – ғалим һәм тәнҡитсе Күзбәков түгел, ә шағир Күзбәков. Мәҡәләнең атамаһы итеп Фәнилдең теге быуатҡа ҡараған

шиғри юлы алынһа ла, һүҙ унда шағирҙың башлыса яңы быуат башындағы ижады хаҡында барасаҡ. Яңы быуат башында иһә ул әүҙем ижад иткән һәм исемдәре «Ағиҙел» биттәрендә йыш ҡына күренеп торған Рауил Шаммас, Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Риф Мифтахов, Нәжибә Әминева, Әфтәх Әхмәҙин, Гөлнур Яҡупова, Мөхәммәт Закиров, Тамара Ғәниева, Рәмил Йәнбәк, Гөлназ Ҡотоевалар менән бергә атланы. Улай ғына ла түгел, ошо дәүер арауығында Фәнил Күзбәков ике тапҡыр түңәрәк юбилейын да билдәләргә өлгөрҙө. Ун икенсе йылдың декабрендәгеһенән һуң шағир үҙенең алтын көҙөнә юл алды, тиһәк тә хата булмаҫ. Был артылыш уның ижадында ла сағылыш тапмай ҡалмай, әлбиттә.

Олоғайған һайын
йылдары ла
Ҡатылана бара,
ҡатылана.
Балалыктың йылы мизгелдәрен
Һағынып та күңел сабыйлана,–

тип яҙғайны ул иллеһе тулғанда ижад ителгән бер шиғырында. Ләкин авторҙың әйтер төп һүҙе балалыҡ йылдарын һағынып иҫкә алыуҙа ғына түгел (уныһы ла бик кәрәк, сөнки ул бөтә кешегә лә тиерлек хас сифаттарҙың береһе), ә ерҙә йәшәүҙең асылына һәм йәшерен серҙәренә төшөнөргә ярҙам итерҙәй түбәндәге юлдарҙалыр, моғайын:

Әммә көтөп алған яҙ-йәйҙәре
Йәнә үтеп китер былтырғылай.
. . . . . .
Талпынып та, өҙгәләнә әҙәм
Ситлектәрҙә –
ваҡыт ҡыҫаһында.

Йәшең олоғая төшкәндә, фәлсәфәүи юҫыҡтағы уйланыуҙарға һағышлылары ла килеп өҫтәлергә мөмкиндер, күрәһең. «Саҡырһын таныш тауыш»тағыса, мәҫәлән. Шиғыр:

Көнөмдөң сыуағы китһә,
Күңелде баҫһа һағыш, –

Тыуған ҡырҙарым яғына
Саҡыра таныш тауыш, –

тигән строфанан башлана ла, ҡалған дүртеһендә иһә «таныш тауыш» һүҙбәйләнешенең мәғәнәһе асып бирелә: ул сал тарих зыңдары; әсәй-өләсәйҙәрҙең өҙөлмәҫ моңдары; балалыҡ иленән һаҡланып ҡалған хыялдар һәм йылдар саңы һ.б. Минеңсә, фәлсәфә лә, хикмәт тә, һағыш та етерлек бында. Әгәр таныш тауыш саҡырһа, автор ҙа, уның лирик геройы ла быуаттарҙы артылырға әҙер.

Ә бына ауылдаштарыңды «ҡандай ҡәрҙәштәрем», тип атар өсөн күпмелер әҙерлек, хатта, әйтер инем, намыҫлы хеҙмәтең менән яулап алынған хоҡуҡ кәрәктер. Ғилем өлкәһендә лә, шиғриәттә лә байтаҡ юл үткән һәм шаҡтай тәжрибә туплап өлгөргән Фәнил үҙен хаҡлы рәүештә шул хоҡуҡҡа эйә итеп тоя. «Ауылдаштар – ҡандай ҡәрҙәштәрем», тигән шиғыр тап ана ошо тойғо менән һуғарылған да инде:

Ҡайһы ғына йортҡа һуғылһам да,
Ирҙәр сығыр, тирәр иңгә-иң.
Еңгәләрем күтәрмәләп алыр:
«Әйҙә-әйҙә түрҙән, беҙгә ин!»

Шөкөр, тимен, ауылыма ҡайтам,
Тыуған йортом күреп, талпынып,
Ауылдаштар ҡулдарын йәйә,
Таллы тауым тора ҡалҡынып!

Шулай ҙа Ф. Күзбәковтың тамам өлгөрөп еткән шәхес икәнлеге уның «Бала сағым» исемле шиғырында сағыуыраҡ һүрәтләнгән төҫлө. Шиғыр формаһы менән дә ғәйәт үҙенсәлекле. Унда ҡайһы бер сәсмә әҫәрҙәргә (әйтәйек, Максим Горькийҙың «Клим Самгин тормошо» эпопеяһына, Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романына) хас әҙәби алым ҡулланылған. Айырма тик шунда: Горький ҙа, Дәүләтшина ла был алымды персонаждарҙың кире ҡылыҡтарын үтә лә ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтеү өсөн файҙаланған булһалар, Күзбәков иһә шул уҡ алымды кешеләге ыңғай сифатҡа баҫым яһап әйтеү өсөн ҡулланған. Бала сағында, тиҙерәк үҫеп, офоҡтарға атлығып, донъя серҙәрен асырға хыялланған, күңеле күктә тулаған лирик герой, үҫеп еткәс, көтмәгәндә үҙенең төҫтәше (двойнигы)

менән осраша. «Һине ҡурсалайым, тиеп, йылдар аша юл ярам», тип йыуата төҫтәшен «Бала сағым»дың авторы ике арала бәйләнеп киткән диалог барышында.

«Ҡырыҫлығым – ҡалҡаным» тигән шиғыр ҙа автопортретҡа оҡшап тора. Лирик геройҙың ҡырыҫлығы уның һәр эштә лә, һәр ерҙә лә ғәҙеллеккә, тоғролоҡҡа ынтылыуы менән аңлатыла:

Ҡырыҫлығым – ҡалҡаным ул!
Әй алғыр бит заманы…
Бер генә ҡабып бер йота
Бишкә бүлер алманы.

Кикереп кенә ҡуя ла
Һыйпап ҡаптай ҡорһағын…
Бындайҙарға мин ҡырыҫмын –
Ярып әйтәм тураһын.

Фәнил Күзбәков ҡәләмә тыуҙырған лирик геройҙарҙың (шул иҫәптән уның үҙенекенең дә) характер үҙенсәлеге «Йыуатмағыҙ…», «Мина яландарында», «Кем ул?», «Иблислек», «Еңеү-еңелеү», «Өстән үрелгәнмен», «Ышыҡлама», «Сират күпере алдында» тигән шиғырҙарҙа ла ярылып ята. Уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә лә мөмкин. «Йыуатмағыҙ…»ҙың лирик геройы, мәҫәлән, уны «Һин хаҡлы!», «Һин көслө!», «Һиндә аҡыл…», «Ғүмер алда…» тип йыуатыусыларға яңғырашы менән киҫкен, йөкмәткеһе менән тәрән мәғәнәле яуабын ҡайтара:

Йыуатмағыҙ мине: «Һиндә аҡыл…»
Аҡыл тота микән донъяны?!
Аҡыл тота икән был донъяны –
Ниңә яуаптан күп һорауы?
Йыуатмағыҙ мине: «Ғүмер алда…»
Алдағыһы бик йыш алдата.
Нәжәғәйен күктә уйната ла
Төп йортоңа илтеп йоҡлата.

«Мина яландарында» тигән шиғырын автор Бөйөк Ватан һуғышын минёр булып үткән атаһының яҡты иҫтәлегенә арнаған һәм бер юлы ике

ҡуянды тотҡан – атаһының исемен мәңгеләштереү менән бер ҡатарҙан, символик йәнәшәлек алымын оҫта файҙаланып, үҙенең образына ла яңы һыҙат өҫтәгән: «Һәр саҡ һинең кеүек, атай, мин дә үтәм… мина яландарын ғүмерҙең». Шиғырҙың идея-эстетик асылы уның һуңғы строфаһында айырыуса сағыу итеп асып бирелгән:

Тәүәкәлләйем дә алға сығам.
Приказ түгел – йөрәк эше был.
Һәм ишетәм, атай, тауышыңды:
«Еңеүсе бул! Йәнә кеше бул!»

(Юл ыңғайында, йәйәләр эсендә генә булһа ла, әйәтәйем: атаһынан ҡалған вәғәзгә шағир йәнә әйләнеп ҡайтыр һәм «Кеше булып ҡалыр кәрәк нисек тә – һыймаһаң да ҡайһылыр бер ишеккә», тип әйтер ике юлдан ғына торған бер шиғырында. Ә «Еңеү-еңелеү» тигән икенсе бер шиғырҙың лирик геройы үҙен «Еңелеү ҙә еңеүгә тиң ирмен тигән ирҙәргә» тип йыуатыр ҙа, һуңғы строфала фекерен былай тип йомғаҡлап ҡуйыр:

Еңелһә лә, еңгәндә лә
Үҙе булып ҡалыр ул.
Бил быуып, йөрәген ҫлап,
Үҙ юлынан барыр ул,
Ил-көн тиеп яныр ул.

«Кем ул?» менән «Иблислек» тигән шиғырҙарында Ф. Күзбәков «заман талаптары»на бик тиҙ генә яйлашып-ҡулайлашып алғандарға үҙенең ҡарашын белдереп кенә ҡалмай, уларҙы утлы табаға баҫтырып, көйҙөрөп ала:

Кешеме был, әүермәнме?
Һис кенә лә белмәҫһең.
Шәм яндырып текләһәң дә,
Ысын йөҙөн күрмәҫһең.

Эй, һин, Әҙәм!
Йәнә кемдең
Ҡылығын алыр инең?

Иң ҙур теләгең үтәлһә,
Кем булып ҡалыр инең?!

Кем булып ҡалыр инең…
(«Кем ул?»).

Түрәләрҙең ҡашҡа тәкәһе тип
Иҫәпләйһең һин үҙеңде күптән.
Көнләшерлек түгел һинең яҙмыш:
Һиндәйҙәрҙе Иблис үҙе үпкән.
Иблис үҙе үпкән…
Ҡарашыңда,
Күҙ ҡараңда уның мөһөрҙәре.
Теклəп ҡарауҫылар унда күрер
Бейегәнең шайтан өйөрҙәре.
(«Иблислек»).

(Һүҙ темалары һәм идеялары йәһәтенән бер-береһенә бик яҡын торған ике шиғыр тураһында барғанлыҡтан, уларҙан килтерелгән өҙөктәр оҙонораҡ тойолһа, уҡыусынан ғәфү үтенәм.)

«Үҙемә нәсихәттәр» исемле шәлкемгә ингән шиғырҙарҙа ла фәһемле юлдар тулып ята. Арала зәһәр уҫал яңғырағандары ла бар: «Берәү үлмәй – берәүҙәр көн күрмәй…»; «Кояш ҡапларҙай булһаң да – кешеләргә уны ышыҡлама!»; «Бәҫең булһа, артыр. Башҡаларға үлмәҫ элек көн күрһәтһәң әгәр…»; «Ахмаҡ менән дуҫ булыуың – ахмаҡлыҡ бит торғаны».«Сират күпере алдында» тигәнендә автор ҙур аҡыл эйәһе сифатында сығыш яһай. Ул биргән кәңәштәр бөтә кешенең дә әхлаҡи ҡағиҙәһенә әйләнһә, ерҙә йәшәү нисек күңелле һәм хәүефһеҙ булыр ине! Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: «Ғәйеп эҙләү гонаһлыраҡ ғәйепле булыуҙарҙан»; «Хәмер эскән – үҙ гонаһын күрә белмәҫ, һөйләгәнен әҙәм түгел, эт тә еймәҫ»; «Хата баҫһаң, башҡаларға ғәйеп таҡма. Сәбәпте һин тик үҙеңдән эҙлә башта»; «Хаҡлы баһа бирә алһаң хатаңа – яуҙа улар әйләнерҙәр ҡалҡанға»; «Һәр кемдең бар был донъяла үҙ өлөшө – өлөшөнә төшә торған үҙ көмөшө !»

Шағирҙың үҙенә биргән был нәсихәттәрендә уның тормош позицияһы ла сағылыш тапмай ҡалмағандыр, моғайын. Хәйер, ҡәләм оҫталарының әҫәрҙәрендә уларҙың тормошҡа ҡараштары (хатта ки пейзаж лирикаһында ла) сағылыш тапмай ҡалған ошраҡ буламы икән?

Айырма, бәлки, тик шундалыр: ҡайһылыр әҫәрҙә ул ярылып ятыусан, ә бәғзеһендә – һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә. Ф. Күзбәковтың быуат башында ижад иткән «Йәшәйештең ҡанундары ябай» исемле шәлкемендә, мәҫәлән, авторҙың уй-фекерҙәре, өгөт-нәсихәттәре күҙгә бәрелеп тора, тиерлек. Төрлө строфалы алты шиғырҙы берләштергән был шәлкемдәге бынауы юлдар үҙ ваҡытында уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмағандыр, тип уйлайым: «Кәрәк мәлдә аҡты аҡ тип әйтеү – кемдер өсөн етмәҫ бейеклек!»; «Илдәр, сәйәсәттәр түңкәрелә… Онталмаҫмы намыҫ ҡәлғәһе?!»; «Аҡты аҡ итеп кенә тынысланмай, кәрәк икән – ҡылыс һурылыр»; «Дауға сығыр сәсән бөтмәгәндәй, яу сабырлыҡ ирҙәр табылыр»; «Аҡты аҡ тип әйтеү – бер егетлек, хаҡлыҡ, тиеп, ҡалҡыу – бөркөтлөк!»; «Хаҡлыҡ өсөн яуҙа күкрәгеңде дошман уғы тишһә – дан ҡалыр!»; «Берәү ялған менән йәшәй, берәү хаҡлыҡ тип үлә…». Шағирҙың бынан биш-алты йыл самаһы элек нәшер ителгән шиғырҙар китабының «Йәшәйеш ҡанундары» тип аталыуы ла һис тә юҡтан булмағандыр, күрәһең.

Фәнил Күзбәковтың иллеһе быуат башынараҡ тура килгәйне. Юбилей айҡанлы уның «Ағизел»дә (2002, 12-се һан) баҫылған шиғырҙары араһында «Милләт Мәккәһе», «Урал һырттары күренер», «Шүлгән йылғаһы» тигәндәре лә бар. Шиғырҙарҙың өсөһөнән дә тыуған төйәк менән ғорурланыу хистәре бөркөп тора. Шүлгәнде автор «кешелектең тәүге ауаздарын» һаҡлаған шаһиткә тиңләй һәм шуға күрә уны тулы хоҡуҡ менән башҡорттоң Мәккәһе тип атай, яңы мең йыллыҡҡа ошо тойғо менән аяҡ баҫыуына ҡыуана.

«Урал һырттары күренер», тигән шиғыр иһә төрлө сәбәптәр арҡаһында күрше Силәбе яҡтарында көн күргән ҡан-ҡәрҙәштәребеҙгә арналған. Аңлашылыуынса, тәүге строфалар моңһоуыраҡ уй-хистәр уята, сөнки сит ерҙә тороп ҡалған милләттәштәр айырған күстәрҙе хәтерләтә. Бәхеткә күрә, һуңғы строфала моңһоулыҡ юғала: бында «һүнмәгән башҡорт рухы», тип иҡрар итә автор һәм «Урал һырттары күренер эйәргә үрелгәндә», тигән пафослы һүҙҙәр менәнг тамамлап ҡуя шиғырын.

«Шүлгән йылғаһы» – бөтә яҡлап та килгән шиғыр, тиер инем: формаһы йәһәтенән дә, йөкмәткеһе менән дә. Тәү ҡарамаҡҡа, бында һүҙ Шүлгән йылғаһына бәйле мөғжизә – уның ҡындағы ҡылыс һымаҡ ялтлап юғалыуы хаҡында ғына барған кеүек. Әммә һуңғы строфала яңғыраған фекер тәбиғәт күренештәренән бер аҙ изрәп киткән лирик геройҙы һиҫкәндереп ебәрә:

Теш ҡамашыр һалҡыныңдан –
Йөрәктә ялҡын.
Тауҙы ярып тапҡанһыңдыр
Хәкикәт хаҡын.

Тимәк, хәкиҡәт бер ҡасан да үҙенән-үҙе, әҙергә мәҙер генә тыумай – уның өсөн һәр ваҡытта ла көс сарыф итергә кәрәк.

Фәнил Күзбәковтың һуңғы ун йыл арауығында ижад иткән «Башҡортостан тиһәм…», «Нөгөш менән Изел араһы», «Көнгәк байрамы», «Ҡайтыр Урал батыр», «Башҡорт урманында кемдер үкһей» тигән шиғырҙарында тыуған төйәк менән, уның үткәне һәм бөгөнгөһө менән берсә ғорурланыу, берсә һыҙланыу тойғоһо үҙен уғата ла нығыраҡ һиҙҙерә, шикелле.

Башҡортостаныбыҙ хаҡында шиғыр яҙмаған шағир бар микән? Булһа ла, бик һирәктер. Фәнил Күзбәков ана берҙе түгел, икене яҙған. (Тәүгеһе уның 1996 йылда донъя күргән «Өмөт шәмдәлдәре» исемле йыйынтығын асып ебәргәйне.) Кем белә, киләсәктә, бәлки, тағы ла яҙыр әле. Сөнки был темаһын иге-сиге юҡ. «Башҡортостан тиһәм…»дә ул, шарт һөйкәлешен ҡулланып, республикабыҙҙы башҡа төйәктәрҙән айырып торған сифаттарға үҙенсә ҡараш ташлаған. Башҡортостан тиһә, тәү сиратта уның күҙ алдына мәшһүр Урал тауы килеп баҫа; унан һуң бөркөттәр саңҡыуы һәм ҡурай моңо ишетелгәндәй була; артабан ҡымыҙ еҫе танауға килеп бәрелә; йүкә балы менән ҡорттар күсе иҫенә килеп төшә; яугир Салауат һәм асылырға ғына торған сей яралар хәтер төпкөлөндә ҡыбырлап ҡуя; ниһайәт, билен биштән быуып һәм әсе тирен түгеп донъя көткән сәмле халҡының яҙмышы борсоп ҡуя. Шулай ҙа әҫәр шағирҙың эске бер ғорурлығын сағылдырған һәм уға дәрт өҫтәгән юлдар менән тамамлана:

Башҡортостан тигән ил-йорт барҙа
Йотлоҡтарҙан йолор сара бар,
Башҡортостан йәнде дауалар!..

«Нөгөш менән Изел араһы» һәм «Көнгәк байрамы» тип аталған шиғырҙар «Башҡортостан тиһәм…»дең үҙенсә бер дауамы шикеллерәк яңғыраған төҫлө. Уларҙың икеһендә лә автор тыуып-үҫкән яҡтарының гүзәллегенә дан йырлай. Шул уҡ ваҡытта тарих биттәре лә ҡыштырлап

ҡуя. Әйтәйек, 1812 йылғы Ватан һуғышы һәм уға тиклемге ҡайһы бер ваҡиғаларҙың шауҡымы:

Сал ҡылғанлы Көнгәк битләүенән
Ил тип сапҡан Кинйә Арыҫлан.
Яугир рухы менән хеҙмәт сәме
Мәңгелеккә бында ҡауышҡан.

«Көнгәк байрамы» – йыр. Унда үткән заман менән бөгөнгө тормош бергә үреп бирелгән. Был үҙенсәлек йырҙың ҡушымтаһында ла сағылыш тапҡан. Әгәр бер осраҡта «Ҡан да тамған, тир ҙә тамған ҡәҙерлебеҙ – изге ер!» тиелһә, икенсеһендә «Башҡорттарым туйҙар туйлай, моң тарата йор ҡурай», тиелә.

Бөгөнгөнө үткәндәр яҡтылығында һүрәтләү алымы «Ҡайтыр Урал батыр» тигән шиғырға ла хас. Ҡарап тороуға, һүҙ унда «Урал батыр» эпосын башҡарыу буйынса ойоштороулған йәш сәсәндәр бәйгеһе тураһында ғына барған кеүек. Асылда инһә шағир тормош ағышына аҡыл эйәһеләй ҡараш ташлаған. Урал менән Ағиҙел урындарында булһа ла, донъя хәлдәре үҙгәрмәй тормай:

Әммә көрәш-тартыш һис тынмаған,
Ҡәһкәһәләр Ерҙән юғалмаған.
Әйләнгәндәр бары әүермәнгә –
Үтеп инер өсөн һәр бер йәнгә!

Йәндәр өсөн бара хәҙер алыш –
Асмандарҙан килә кеүек тауыш:
«Булығыҙ ныҡ, Урал вариҫтары,
Ҡағылмаһын ваҡыт ағыштары»…

Йөкмәткеһе, йөкмәткегә төрөлгән идеяһы менән «Башҡорт урманында кемдер үкһей» тип аталған саманан тыш оҙон (илле юлдан тора!) шиғыр поэма яҙырлыҡ тормош материалын эсенә алған. Лирик герой беҙҙе башта үҙенең сығышы һәм тамырҙары менән таныштыра, исемдәре тарих биттәрендә һаҡланған һәм халыҡ теленән төшмәгән шәхестәр менән ғорурланыуын белдерә. Артабан, кинәйәләп-кинәйәләп кенә, хәҙерге заманда киң таралған күренештәргә һәм хәл-ваҡиғаларға күсә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәл-ваҡиғалар уны һис кенә лә әүрәтерлек түгел. Шунлыҡтан ул үҙен яраланған бүрегә тиңләй. Сөнки, ти ул:

Ишетеүҙән уҙғанбыҙ шул:
Башта башҡа ҡайғылар.
Ул «ҡайғы»ларҙан, бер килеп,
Айныуын да айнырҙар,
Тик һуң булыр…
Уянырҙар
Ер-һыуһыҙ маңҡорт булып…

Кинәйәләү алымы (Чехов әҫәрҙәренә хас «һыу аҫты ағымы» тиергә лә була) Фәнил Күзбәковтың «Ҡаялағы ҡурай», «Иҙел бит ул…», «Гел генә былай булмаҫ», тигән шиғырҙарында ла һиҙелә. «Ҡаялағы ҡурай»ға башҡорт халыҡ йыры «Илсе Ғайса»лағы «…Тарих яҙыр инем ташына», тигән һүҙҙәр эпиграф итеп алынған. Күләме менән шиғыр ҙур түгел – ни бары дүрт строфанан тора. Йөкмәткеһе иһә уйландыра: уялар араһынан һыҙылған ҡурай моңон шағир сараһыҙҙан һыҙланыу-һағышты баҫыр әмәлдәр, тип фаразлай.

«Иҙел бит ул…» – дүртәр һәм һигеҙәр юлдан торған исемһеҙ шиғырҙар шәлкеме. Шәлкемдең атамаһы «Иҙел бит ул – киң бит ул», тигән халыҡ йырын хәтерләтеп куя. Шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәре өгөт-нәсихәт һымаҡ, бәғзеләре иһә мәкәл-әйтем шикеллерәк яңғырай. Нисек кенә яңғырамаһындар, уларҙың һәр ҡайһыһында ла төптәрәк ятҡан фекерҙе шәйләйһең. Ике генә миҫал:

Илдең көйһеҙ булғаны –
Илгә яттар тулғаны.
Илдең өнһеҙ булғаны –
Телһеҙ заттар тыуғаны…

* * *

Шаҡшы ҡулын үпмәгән,
Түр башына етмәгән;
Бер ҡатлы сабый тиерһең –
Йөҙөнә тап төшмәгән.

«Гел генә былай булмаҫ»та ла кинәйә тәрәндә ята. Күләме яғынан шиғыр ярайһы ғына оҙон (илленән ашыу юлдан тора) тойолһа ла, формаһы менән мауыҡтырғыс булғанға күрә микән, артыҡ еләткес түгел.Яҙылышы-яңғырашы буйынса ул, ысынлап та, отошло. Әҫәрҙең

йөкмәткеһен Әҙәм менән Хоҙай араһындағы диалог тәшкил итә. Ярлылыҡта хөкөм һөрөүҙән тамам еләгән Әҙәм, Күктәргә алыуын үтенеп, Хоҙайға мөрәжәғәт итә. Хатта тамуҡта янырға ла ризалығын белдерә. Хоҙай уға «Гел генә былай булмаҫ!», тип яҙылған аят биреп ҡайтара. Хоҙайҙың киң ҡөҙрәте менән Әҙәмдең эштәре тиҙ арала яйланып китә: «Даны ла бар, малы ла, ҡунаҡ йыйыр яйы ла». Тик ишектә эленеп торған «Гел генә былай булмаҫ!», тигән яҙыу ғына эсен бошора уның. Сөнки яйға һалынған тормош яңынан элекке шәйенә ҡайтырға мөмкин бит. Был инде кинәйә генә түгел, үҙе бер фәлсәфә.

Шуныһы мөһим, донъяның гел аҡ төҫтән һәм аҡ көндәрҙән генә тормағанлығын яҡшы аңлаған шағир Күзбәков үҙенең поэтик ижады менән уҡыусыһына мөмкин тиклем күберәк аҡ төҫ һәм аҡ көндәр бүләк итергә тырыша. Бик шатлыҡлы хистәр кисереп, күңелендә еҙ ҡыңғырау моңо ағылған мәлдә тыуған һәм «Ҡанатлана бел икән», тип аталған бер шиғырында, мәҫәлән,ул үткәнеңде лә, бөгөнөңдө лә бейеклектән тороп күрергә һәм тағы ла юғарыраҡҡа ынтылырға саҡыра. Һуңғы йылдарҙа байтаҡ дуҫтарын, ил ағаларын һәм ил инәләрен юғалтыу тәьҫире аҫтында яралған «Сабырлыҡ бир» тигән шиғыр моңһоуыраҡ темаға арналған булһа ла, унда барыбер ҙә объективлыҡ өҫтөнлөк итә. Шиғыр «Тыуымынан ҡалмағастын, ҡалмайбыҙҙыр үлемдән…» тип башлана ла, «Сабырлыҡ бир…» тигән үтенес менән тамамлана. Таяҡтың ике остан торғанлығы ҡайһылай ябай ҙа, үтемле лә итеп әйтеп бирелгән!

«Яу ҙа сабыр, усағын да яғыр», «Инәйҙәрем», «Хаҡ яҙғаны», «Аҡлыҡ ҡына, сафлыҡ ҡына…», «Үҙеңдән һуң килгәндәргә», «Эңер төшә…», «Тумыртҡа ҡаға ҡаҙағын…», «Миҙгелдәр менән ярышып…», «Йыһан үлсәмдәре», «Офоҡтарым янғанда», «Тормош сикһеҙ диңгеҙгә тиң…» тигән шиғырҙар ҙа яҡты уйҙар, тәрән хистәр һәм изге теләктәр менән һуғарылған.

«Яу ҙа сабыр, усағын да яғыр»ға Н.А. Некрасовтың «Ярһыу атты баштарынан алыр, янған утҡа уҡтай уҡталыр…», тигән юлдары эпиграф итеп алынған. Шиғыр конкрет шәхескә – Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры Вәсилә Шәрифйән ҡыҙы Баһаповаға (юл ыңғайында әйтәйем: ете йылдан һуң, «Ағиҙел»дең 2011 йылғы беренсе һанында, Ф. Күзбәков, был шәхескә арнап, «Табип» тип аталған тағы бер шиғыр яҙып баҫтырҙы, тик уныһы, минеңсә, тәүгеһенә ҡарағанда, күпкә бирешә)–бағышланған булһа ла, ул дөйөмләштерелгән образ кимәленә күтәрелгән. Сөнки автор үҙе һайлап алған героиняһын

ялтырауыҡлы һүҙҙәр теҙмәһе менән түгел, бәлки образлы сағыштырыуҙар ярҙамында күккә күтәрә. Ир-арыҫландарға тиң ҡатын-ҡыҙҙар «халыҡ ҡарынында тыуғандар», тигән метафора ла ифрат көслө яңғырай. Уны шағирҙың табышы, тиһәк тә хата булмаҫ. Әйткәндәр буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, шиғырҙың һуңғы строфаһын бында күсерәйек:

Ил азаматына торорлоҡ шул –
Булғас Әминәләр затынан:
Бергә яуҙар сабыр, усаҡ яғыр,
Бала бағып, йондоҙ-һырға тағыр
Алып етенсе күк ҡатынан.
Бындай ҡыҙҙар башҡорт затынан!

Яҡтылыҡ нуры, уйҙар паклығы, күңел аҡлығы «Инәйҙәрем» һәм «Хаҡ яҙғаны» тигән шиғырҙарҙан да һирпелеп тора. Тәүгеһендә, күпте күргән, күпте белгән, инәй йәшенә ингән ҡатын-ҡыҙҙарға мәҙхиә йырлана:

Ойотоп әйтәләр һүҙен –
Туҡталып фекер төйнә:
Инәйҙәрем менән бергә
Яҡтылыҡ инә өйгә,
Яҡтылыҡ инә өйгә!

«Хаҡ яҙғаны» тигәнендә автор бергә йыйылған дуҫтарын ултырҙаштар, моңдаштар тип атай, уларҙы тиҫбеләй теҙелеп аҡҡан йылдар дауамында күңелдәрен бөтәйтергә, зарланмаҫҡа, яҙғанына риза булырға өндәй. Шиғырҙағы:

Һағынышып осрашыуҙар
Йән өргәндәй тормошҡа.
Килгәнбеҙ хәл белешергә,
Килмәгәнбеҙ йомошҡа, –

тигән юлдар айырыуса матур һәм урынлы яңғырай.

Әгәр өмөт шәмдәлдәре ҡабыҙып ҡаршылаһаң,традицион Яңы йыл байрамында ла тәрән мәғәнә ятҡанлығын тойорға мөмкин икән:

Яңы йыл ул – байрамдарҙың
Иң яҡтыһы, сағыуы:
Ер өҫкәйе, аҡ ҡағыҙҙай,
Көтә яңы яҙыуҙы.
(«Аҡлыҡ ҡына, сафлыҡ ҡына…»).

Аҡлыҡ һәм сафлыҡ, изгелек һәм шәфҡәтлелек тураһында уйланғанда, шағир ҡайһы саҡта тәбиғәт күренештәренән дә оҫта файҙалана. Ошо йәһәттән «Үҙеңдән һуң килгәндәргә» тигән шиғыр иғтибарға лайыҡ. Тәү башта унда һүҙ «урман өйө» хаҡында ғына барған һымаҡ. Артабан иһә тормошта ла үҙеңдән һуңғы быуындар хаҡында уйлап, ҡайғыртып, хәстәрләп йәшәргә кәрәк, тигән һығымтаға киләһең. «Эңгер төшә…» тигән шиғырҙа һүрәтләнгән көндөң – төнгә, төндөң – көнгә ауышыу мәленән дә зур мәғәнә таба шағир:

Кемдер: «Биҙгәк ҡара!» – тип
Төндө яманламаһын.
Белмәй бит ул
Яман күҙҙән
Беҙҙе аралағанын…

Саф пейзаж лирикаһына дәғүә итмәһәләр ҙә, тәбиғәт күренештәре сағыу тасуирланған юлдарҙы Ф. Күзбәков шиғырҙарында йыш ҡына осратырға мөмкин. Шундайҙар иҫәбендә «Көҙгө имән», «Йәшел ҡайын алтын алҡа элгән…», «Ялан тулы сәскә…», «Йондоҙ яуа, йондоҙ яна…», «Йәшәргәндә ерем», «Ыжғыр ҡыштың тынын ҡыҫты…», «Йыр сыңлар», «Ҡыу япраҡтар» тигәндәре, мәҫәлән. Ун бер генә юлдан торған «Йәшел ҡайын алтын алҡа элгән…» тигән шиғырҙа тәбиғәттең үҙ шәйенә йәшәгәнлеге ярайһы ғына матур итеп һүрәтләнгән. Ҡупшы көҙ килерен алдан белгәндәй, йәшел ҡайын алтын алҡа элгән. Беҙҙең яҡтарҙа йәйҙең ҡыҫҡа булыуы ла образлы тасуирланған: «Ҡотоп яҡтарынан көҙ елә̆лер. ‹…› Йәйҙәр татлы төштәй мәл генәлер». «Ялан тулы сәскә…»ләге «Сал ҡылғандар, биттән, ҡулдан һыйпап, ни әйтәләр икән – белмәйем…» дә уҡыусы иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ. «Ыжғыр ҡыштың тынын ҡыҫты…»лағы һоро турғай образы ла шундай: үҙенең моңо менән ул ыжғыр ҡыштың тынын ҡыҫҡан. Тәбиғәттә өҙлөкһөҙ дауам иткән хәрәкәт бына нисек матур итеп һүрәтләнгән:

Ә бит әле яҙға иртә –
Февраль генә…
Улай тимә, –
ана моңдан
Ҡар эйелә…
Ер өҫтөндә яҙ сәләме –
Йыр һибелә.

Дүртәр юллы өс кенә строфанан торған «Ҡыу япраҡтар»ҙа иһә беҙҙең алға тәбиғәттең Бунин шиғриәтенә хас иҫ киткес йәнле һүрәте килеп баҫа. Шиғыр метафораларға бай: йондоҙҙар өшөгәндәр; уларҙың балҡыштары һалҡын; япраҡтарҙы ҡырау ҡурған; тирә-йүнгә алтын һибелгәндәй тойолһа ла, көҙгө урман барыбер ҙә көҙгө урман инде ул – моңһоу; дөрләп янған усаҡта япраҡтар көлгә әйләнә. Шул саҡ:

Кинәт ҡайһыһылыр һулҡылданы:
«Кайҙа калды йәшел йәш саҡтарым?!» –

тигән тауыш ишетелгәндәй була лирик геройға. Ни тиклем бай һәм тәрән ассоциатив фекер тупланғанлығы хаҡында һөйләп тороуҙың хәжәте юҡтыр бында.

Тәбиғәттән ҡала, аҡ көндәрҙән, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙан ғына тормаған донъяның ҡараңғы яҡтарын яҡтыртырҙай һәм уның һәр төрлө бысраҡлыҡтарына ҡаршы торорҙай тағы бер көс бар. Ул көс мөхәббәт, тип атала. Фәнил Күзбәковтың «Йәшәргәндә ерем» исемле шиғырында был ике көс бер бөтөн итеп һүрәтләнә, хатта: «Һары талдар таҡһа һырғаларын, ярҙарынан сыға йылғаларым. ‹…› Йәшәү дәрте аңҡый һәр тарафта, һөйөү уты балҡый һәр ҡарашта». Тәбиғәт уянғанда кеше лә йоҡлап ятмай – ыңғай эмоцияларға бирелә, тигән фекер үткәрә автор был шиғырында.

Әйткәндәй, мөхәббәт темаһы Ф. Күзбәков ижадында һиҙелерлек урын биләп тора. Был темаға арнап яҙылған шиғырҙарын автор үҙенең йыйынтыҡтарына айырым бүлектәр итеп индерә. «Өмөт шәмдәлдәре» тигәнендә, мәҫәлән, ул бүлек «Әгәр ғашиҡтары булмаһа, утһыҙ ҡалыр ине был донъя…», тип аталғайны. «Һағыш»та – «Һөйөүҙән яралған был донъя, һөйөүҙән!», тип атала. «Йәшәйеш ҡанундары»нда – «Хоҙай һине – фәрештәһен…», тигән ҡанатлы фраза берләштерә бер төркөмгә шағирҙың мөхәббәт лирикаһын.

Ф. Күзбәков шиғриәтендә мөхәббәт сатҡылары төрлөсә ялтлап китә. «Наҙға сарсағанда һөйөү – көтөп алынған ҡунаҡ!» шикелле лә тойолорға мөмкин. Айҙан төшкән көйәнтәле һылыу ҡыҙ шаян холоҡло лирик герой эргәһенән үтеп киткәндәй тойолған икән, ни тиәһең инде? Ҡайһы берҙә үтә нескә хистәр менән һуғарылған шиғырҙарға ла тап булаһың. («Йылмайыу», «Изрәнең…»). «Теге усаҡ әле яна» һымаҡ шаяныраҡ яңғырағаны ла осрап ҡуя:

Иҫкән елдәр ишек ҡаҡмаҫ, тимә,
Аҡҡан һыуҙар кире аҡмаҫ, тимә,
Баҡсабыҙға ҡырау һуғылмаған, –
Гөлдәребеҙ сәскә атмаҫ, тимә!
Елдәр әле ишек ҡаҡмаҫ, тимә.

Шиғыр лирик геройҙың «Бергә булып танһыҡ һис ҡанмаған, – ҡарашыңдан һөйөү, наҙҙар тама. Теге усаҡ әле яна. Яна…» тигән өмөт тә, ышаныс та белдергән һүҙҙәре менән тамамлана.

«Ҡараның бер һирпелеп» тигән шиғырҙағы шикелле, һөйгәнеңдең һирпелеп бер ҡарауы ла мөғжизә тыуҙырырҙай көскә эйә булыуы ихтимал: шул саҡта тауҙар һикереп торғандай, күк ҡабағы асылғандай тойолор; хыял донъяһында йөҙгән лирик геройҙың йөрәгендә ут ҡапҡандай булыр. «Хушлашыуға булмай күнегеп» тигән шиғырҙа лирик герой хыялдарға ғына түгел, хистәргә лә ифрат бай шәхес булып күҙ алдына баҫа. «Яңғыҙ ҡалған тәүге минутта уҡ юлға сығам һине һағынып…», «Хушлашыуҙар ҡыйырсыҡ ай икән – осрашыуҙар – яныр ҡояштыр» тигән уй-хистәре менән асыҡтан-асыҡ уртаҡлаша ул. «Һиңә» тигән шиғырҙың лирик геройы иһә һөйгәненә был донъяның барса тылсымын бүләк итергә әҙер. (Шул да мәғлүм булһын: «Ҡараның бер һирпелеп» тә, «Хушлашыуға булмай күнегеп» тә, «Һиңә» лә теге быуатта яҙылған шиғырҙарҙың был быуатта йырға әйләнгән һәм бер аҙ үҙгәртелгән икенсе вариванттары.)

Мөхәббәт темаһына бәйле әле һүҙ барған шиғырҙарға «Хоҙай һине – фәрештәһен…», «Һөйөү-һөйөлөү», «Бит алмаң соҡорҙарында», «Эй-й, Илаһым! Әгәр һин булмаһаң…», «Етегәнем», «Һағынасаҡһың», «Тынлыҡ», «Бәүелсәктә» тигәндәрен дә өҫтәргә мөмкин. Уларҙың һәр ҡайһыһы ла күңелгә йәтеш һәм иғтибарға лайыҡ. «Һөйөү-һөйөлөү»ҙең төбөндә, мәҫәлән, «Йәшәүҙәрҙең мәғәнәһе – һөйөп-һөйөлөүҙәлер, берҙән-берең, йәрең өсөн үлеп терелеүҙәлер»,

тигән бик матур һәм бик мөһим, тормоштоң асылын тәшкил итергә тейешле идея ята. Ни әйттең ине лә бит, әгәр ысынбарлыҡта гел шулай булһа! Аҡ көндәр күбәйеп, ҡаралары һирәлеп кәмер ине. Был шиғырҙың һүҙҙәренә көй яҙылыуы ла юҡтан ғына түгелдер.

Өҫтәрәк Ф. Күзбәков шиғриәтенә хас метафоралар хаҡында һүҙ сығып ҡуйғайны инде. Сағыштырыуҙарға, метафораларға бай тағы бер шиғыр: «Бит алмаң соҡорҙарында». Традицион ҡалыпҡа һалынған был шиғырҙың һуңғы строфаһы бына нисек яңғырай:

Бит алмаң соҡорҙарында
Таптым йондоҙ балҡышын.
Һайлап алған яҙмышым һин,
Хыялдағы табышым.

Ләкин Фәнил Күзбәковтың лирик геройы өсөн ысын мөхәббәт–биттәрҙән йондоҙ балҡып тороуҙа ғына түгел – бер-береңә ышаныслы таяныс булыуҙа ла. Бының, бәлки, мөһимерәктер ҙә әле:

Э-й, Илаһым!
Әгәр һин булмаһаң,
Кемгә генә,
кемгә һығынырмын?!
Бәғерҙәрҙе ғәмрегөштәр суҡығанда,
Бары һиңә,
һиңә генә
Һыйынырмын…

«Бәүелсәктә» тигән шәлкемгә ингән дүрт һәм биш юллыҡтар ҙа ошо фекерҙе ҡеүәтләй:

Һинең сихри ҡарашыңдан
Бер тереләм, бер үләм.
Таңғы ысыҡ булып тамам,
Гөлдәр булып үреләм, –
Үтәм ҡылыс йөҙөнән.
* * *
Һинең менән булғанымда
Болоттарым тарала.

Көҙҙәрем әйләнә яҙға,
Яңы бер йыр ярала –
Балҡый йәйғор арала.

Алтмышына аяҡ баҫҡанда, Ф. Күзбәков уҡыусыһына «Торналар сыңы» тип аталған күләмле әҫәрен бүләк итте. («Ағиҙел», 2012, 6-сы һан). Мең ярымдан ашыу юлдан торған был әҫәрен автор дастан, тип атаған. Әҫәрҙең жанрын былай тип билдәләү бер ни ҡәҙәр һорау тыуҙырмай ҡалмай, әлбиттә. Сөнки әлегә тиклем әҙәбиәт теорияһында һәм практикаһында дастан жанрына тарихи шәхестәргә арналған һәм иртәккә тартым эпик әҫәрҙәрҙе индерәләр ине һымаҡ. Ф. Күзбәковтың «Торналар сыңы»нда иһә беҙҙең тормоштан алынған ябай һәм реаль күренештәр тасуирланған. Әҫәр автобиографик һыҙаттарҙан да мәхрүм түгел, шикелле. Һәр хәлдә, сюжет тәҙгенен үҙ ҡулында тотҡан автор менән уның әҫәрҙә төп урынды биләп торған геройы Фәнзил араһында айырмаға ҡарағанда оҡшашлыҡ күберәктер.

«Торналар сыңы» пролог менән эпилогтан һәм төрлө күләмле егерме бүлектән тора. Һәр бүлектең үҙ атамаһы бар. «Исем туйы» тип аталған тәүге бүлектә үк лирик геройҙың ҡаршылыҡлы яҙмышына ишара яһалғандай: ҡолаҡҡа ҡаты мулла уға Сәми тигән исемде ҡуша, сабыйҙың туғандары иһә мулла менән килешмәйҙәр – Фәнзил тип үҙгәртәләр. Хәйер, мәғәнәләре буйынса исемдәрҙең икеһе лә бер-береһенә бик яҡындар: Сәми – юғары дәрәжәле, бөйөк тигәнде, ә Фәнзил – фәнле, ғилемле тигәнде аңлата. (Исемдәре, исемгә һалынған мәғәнәләре буйынса «Торналар сыңы»ның авторы менән уның төп геройы ла бер-береһенән алыҫ түгелдәр, тиергә була.) Исем тураһында мулла менән һүҙ көрәштергән мәлде автор бик оҫта һәм хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп теркәп ҡуйған:

Илап ебәрҙе сабый ҙа:
Уйнайҙар яҙмыш менән –
Күп тә үтмәҫ, был аталмыш
Бәйләнер һалмыш менән.

«Олатай», «Атай», «Әсәй» тип аталған икенсе, өсөнсө, дүртенсе бүлектәрҙе бергә туплаһаң, ул кескенә бер шәжәрәгә оҡшап ҡуйыр. (Әйткәндәй, «Йәшәйеш ҡанундары» тигән китабында Ф.Күзбәков үҙенең унынсы быуынына барып еткән шәжәрәһен төҙөп баҫтырғайны инде.) Ә бына «Бесән өмәһе» һәм «Киске табын» тигән бишенсе һәм

алтынсы бүлектәр күңелде үҙҙәренең яңғыраштары менән арбайҙар. Сабылған бесәнде йыйып, эҫкерт ҡуйырға арналған өмәлә ҡул араһына керә башлаған Фәнзил дә ҡатнаша. «Дәррәү ҡубып бесән эшләү – боронғо йола ла ул»; «Ике тышауҙай артылған – ҡояш ҡарай үҙ яйын»; «Ҡыҙҙарҙың еңел тырмаһы ер сәсен тырмаймы ни?!»; «Ас түгел дә… Ит тигәнең өйҙә эләгеп бармай»; «Төшлөгөнә тиклем ҡояш менә, ти, үгеҙ менән. Ҡалған яртыһы кәм түгел ҡуян етеҙлегенән» һәм башҡа шуның кеүек һүҙбәйләнештәр был бүлекте (әҫәрҙәге иң зур бүлектә!) халыҡсан итәләр, тиер инем.

Күләме яғынан артыҡ зур булмаһа ла, йөкмәткеһе йәһәтенән «Киске табын» да «Бесән өмәһе»нән ҡайтыш түгел. Бейем менән килендең серләшеп алыуы ла, өләсәйҙең торналар сыңрауы хаҡындағы риүәйәте лә бик мәслихәт! Әҫәрҙең жанрын дастан тип билдәләргә ошо риүәйәт сәбәпсе булманы микән, тип тә уйлап ҡуяһың. Уға тағы «Бүреләр» тип аталған һигеҙенсе бүлек тә ҡот өҫтәгәндер, бәлки.Бына шулай: һорау артынан һорау тыуып ҡына тора.

Уфтаныу ҡатыш көрһенөү хистәре менән тулы «Аҡ көндәрҙән генә тормай донъя…» тигән мотив (әгәр уны шулай тип атарға мөмкин булһа) «Торналар сыңы»нда ла үҙен һиҙҙермәй ҡалмаған, әлбиттә. «Хыялды ҡотҡарыу», «Ҡышҡы еләктәр», «Айбарлыҡ», «Университет», «Йәнде бөтәйтеү», «Ҡанат киргәндә», «Инешкә ҡайтыу», «Әмир», «Тормош асылдары» тигән бүлектәрҙә ул мотив айырыуса көслө яңғыраған кеүек. «Ҡышҡы еләктәр»ҙәге ҡанһыҙ бригадир образы, мәҫәлән, кемде генә битараф ҡалдырыр икән? Авторҙың үҙ алдына ҡуйған «Кеше бүренән дә яуыз нисек булала икән?» тигән һорауы ла бик урынлы яңғырай. Бигерәк тә беҙҙең заманда! «Университет», «Йәнде бөтәйтеү», «Ҡанат киргәндә», «Тормош асылдары» тигән бүлектәрҙә иһә шағир беҙҙең әҙәбиәттә лә, башҡа әҙәбиәттәрҙә лә һирәк осрай торған теманы – вуздарза уҡыу-уҡытыу мәсьәләләренә ҡағылышлы теманы күтәргән. Бәхәсләшер моменттар осраштырғалаһа ла, дөйөм алғанда, был бүлектәр уҡыусыла ҡыҙыҡһыныу уятмай ҡалмаҫ, тип уйлайым.

«Торналар сыңы»ның авторы сығышы менән ауыл кешеһе булғас, тәбиғи инде, әҫәрҙә күберәк урын ауыл темаһына бирелгән. Төп геройҙың бала сағын, мәктәп йылдарын сағылдырған бүлектәргә «Инешкә ҡайтыу» тигәне лә килеп өҫтәлә. Был бүлектә лә һүҙ ауыл тормошо хаҡында бара. Тик, тегеләренән айырмалы булараҡ, «Инешкә ҡайтыу»ҙа күҙ алдына (Фәнзилдең «килен» ҡушаматы алған өлкән ағаһы Ғәле миҫалында) бөгөнгө ауыл баҫтырылған. Бөгөнгө ауылдың

мөшкөл хәлгә төшөп барыуын Миңлебай исемле персонаж үтә һиҙгер тотоп алған , юғиһә:

– Сит-яттар ҡалъя һонһа ла,
Бәйләп ҡаптырмаҫ тимә!
Үҙебеҙҙең ҡулдар барҙа
Ҡайҙандыр ярҙам ниңә?!

«Торналар сыңы»нда әҙәп, әхлаҡ, этика, эстетика мәсьәләләре лә ситләп үтелмәгән. Ситләп үтеү генә түгел, бөтә әҫәр әхлаҡи-этик талаптар юғарылығынан сығып яҙылған, тиһәк, һис тә хата булмаҫ. «Университет», «Йәнде бөтәйтеү», «Ҡанат киргәндә», «Тормош асылдары», тигән бүлектәр телгә алынғайны инде. Ошо йәһәттән «Мәктәп юлында» тигән бүлек тә иғтибарҙы йәлеп итерлек. Алты саҡрым алыҫлыҡҡа йөрөп уҡыған егермеләп ҡыҙ-малайҙың «ҡош тубылай ойошоп, ҡышҡы селлә»нең зәһәрлеге хаҡында уйлап та бирмәйенсә, көлөшөп, йомаҡ әйтешеп барыуҙары үҙе генә лә ни тора! Төп геройҙың хәтер төпкөлөндә әҙәбиәт уҡытыусыһы ҡалдырған әҙ ҙә юйылмаҫлыҡ: «Һиҙмәйһең дә ваҡыт барын, – бар дәрестәргә дәрес: йылт итеп ҡала… Тап шулай эшләнһен ине һәр эш».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әҙәп, әхлаҡ, этика өлкәһендә лә бөтәһе лә аҡ төҫтән генә тормай икән шул. «Һынау» тип аталған иң бәләкәй бүлектә һүҙ тап ана шул турала:

Аҡрын-аҡрын тамыр йәйҙе
Юҡтан да ҡупырайыу,
Танау буйҙарынан ҡарау,
Ҡояштан һуҡырайыу.

Ҡайһылай шәп әйтелгән! Был киҫәтеү беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һағайтырға тейеш: шағирҙарҙы ла, ғалимдарҙы ла, тәнҡитселәрҙе лә, журналистарҙы ла, дәүләт эшмәкәрҙәрен дә… Һәммәбеҙҙе лә!

Халыҡ телендә «Ике ҡулыңа – бер эш», тигән бик матур һәм тәрән йөкмәткеле әйтем бар. Хәҙер тынғыһыҙ Фәнил Күзбәков та ошо мәленә инде. Уҡыусы шағирҙан уғата ла юғарыраҡ эстетик талаптарға яуап бирерлек яңы поэтик әҫәрҙәр тыуҙырыуҙы ла, «Ағиҙел»дең мотлаҡ һәр һанын тәнҡит мәҡәләһе менән тәьмин итеп тороуҙы ла (үҙ ваҡытында тынғыһыҙ Белинский «Отечественные записки» журналын тәьмин иткән шикелле) көтөргө хаҡлы.

2013, ноябрь

«БАР КҮҢЕЛЕМ – ЙЫРҘАРЫМДА…»

(Тимер Йосоповтың быуат башындағы шиғриәтенә байҡау)

Халыҡ шағиры, халыҡ яҙыусыһы, тигән маҡтаулы һәм дәрәжәле исемдәрҙе яулаған ҡәләмдәштәребеҙҙең һаны күбәйеберәк китте инде әллә, һуңғы ваҡытта уларҙың юбилейҙары тауышһыҙ-тынһыҙ ғына үтә башланы. Әллә заман башҡа – заң башҡа, тигән йәшәү рәүеше үҙенең әрһеҙ тамырҙарын торған һайын тәрәнгәрәк ебәрә барғанға күрә шулай микән?

Әлбиттә, юғары исемгә лайыҡ булған ҡәләм эйәһенең оло һәм күркәм юбилейын шаулатып-гөрләтеп үткәреү өсөн мотлаҡ башлап йөрөүсе, ойоштороусы кәрәктер. Мәртәбәле яҙыусы йәиһә шағир тормошондағы бындайҙың да мөһим ваҡиғанан киң күләм матбуғат саралары ла ситтә ҡалмаҫҡа тейештер.

Ошондайыраҡ уйҙар халыҡ шағиры Тимер Йосоповҡа етмеш биш йәш тулып үҙғас күңелде бер ни тиклем тынысһыҙландырып ҡуйҙы. Шағирҙың түңәрәк юбилейынан һуң байтаҡ ҡына ваҡыт үтеп китһә лә, уға арналған был мәҡәләне яҙыу теләгең миндә Рим тарихсыһы Ливий Титтың руссаға «Лучше поздно, чем никогда», тип тәржемә ителгән аҡыллы афоризмы уятты. Ысынлап та, бөтөнләй ҙә өндәшмәй ҡалғансы, һуңлабыраҡ булһа ла өндәшеүең яҡшыраҡтыр.

Тимер Йосопов ижады минең өсөн ят күренеш түгел. Һәр хәлдә, уның «Икмәк еҫе», «Ҡая өҫтөндә уйланыу», «Килде заманалары», «Ауырая аҙымдар», «Беште ер еләккәйҙәре», тигән китаптары менән яҡшы танышмын. Ошо китаптарға ингән шиғырҙар һәм поэмалар мине үҙ ваҡытында Т. Йосоповтың ижади портретын төҫмөрләп ҡарарға дәртләндергәйне. «Йөрәгендә – ил ҡайғыһы», тип аталған был портрет башта «Ағизел» (1999, 1-се һан) журналында, унан һуң «Шиғриәт илендә» (Өфө, 2006), тигән китабымда баҫылып сыҡҡайны. Шағирҙың туҡһанынсы йылдарҙа «Ағизел» биттәрендә донъя күргән яңы шиғырҙары иһә йыллыҡ күҙәтеүҙәремдә күпмелер кимәлдә үҙ баһаһын ала барҙылар. Шуға күрә, үҙемде үҙем ҡабатлау сиренә юлыҡмаҫ өсөн, был мәҡәләмдә Тимер Йосоповтың фәҡәт быуат башындағы ижадына ғына күҙ ташламаҡсымын.

Иң тәүҙә шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк: быуаттар ҡауышҡан мәл Т. Йосопов тормошонда ифрат көҙрәтле һәм шөһрәтле мәл булды. Башта, 1998 йылда, уға Республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, тигән маҡтаулы исем бирелде.

Биш йылдан һуң, 2003 йылда, ул Башҡортостандың халыҡ шағиры, тигән юғары дәрәжәгә эйә булды. 2002 йылда әҙип, теге быуаттың ахырында – быныһының тәүге йылында ижад иткән өр-яңы шиғырҙарын туплап, «Ваҡыт карауаны», тигән китабын баҫтырып сығарҙы. 2006, 2007, 2009 йылдарҙа иһә уның һайланма әҫәрҙәрҙән торған өс томлығы донъя күрҙе. Шулай итеп, яңы быуаттың тәүге ун йылын Тимер Йосоповҡа ғәйәт ҙур шатлыҡтар алып килгән ун йыллыҡ, тип атаһаҡ та була. Тик ошо урында Т. Йосоповҡа ғына түгел, башҡаларға ла ҡағылған бер дәғүәмде белдермәй үтә алмайым. Хаҡһыҙ дәғүә, принципиаль булмаған орошоу, тип ҡараусылар ҙа табылыр, бәлки, ләкин ундайҙар күп булмаҫ, тип уйлайым.

Ижад үрҙәрен яулаған әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен томлап-томлап сығарыу – автор өсөн генә түгел, дөйөм алғанда бөтә әҙәбиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙ тормошонда ла һис шикһеҙ ҡыуаныслы хәл. Сөнки улар, ошо күп томлыҡтар, полиграфия сәнәғәтенең үҫеш кимәлен күрһәтеү менән бер ҡатарҙан, беҙҙең рухи донъябыҙҙың көҙгөһө лә булып тораҙар. Киләсәк быуын беҙ йәшәгән осор хаҡында архитектура ҡомартҡыларына ғына түгел, шул томдарға ҡарап та (бәлки, фәҡәт шул томдарға ҡарап ҡына ла!) фекер йөрөтәсәк. Тимәк, уларҙы баҫмаға әҙерләгәндә һәм нәшер иткәндә үҙ-үҙенә талапсанлыҡ та, яуаплылыҡ та бермә-бер арта.

Һүҙ юҡ, шағирҙарыбыҙҙың һуңғы йылдарҙа донъя күргән күп томлыҡтары тышҡы яҡтан күҙҙең яуын алырлыҡ. Әммә уларҙың эсенә керә башлаһаң, тиҙ генә йырып сығырмын тимә. Сөнки унда шиғырҙар тыңҡыслап тултырылған. Береһен уҡып бөткәс, ләззәтләнеп, уйҙарға бирелеп ултыраһы урынға, һине шул уҡ биттәге икенсеһе, ҡайһы саҡта хатта өсөнсөһө лә «һағалап» тора. Үҙенән-үҙе һорау тыуа: был томдар уҡыусының эстетик зауығын ҡәнәғәтләндереү өсөн, уны артабан да юғарыраҡ кимәлгә күтәреү, камиллаштырыу ниәтенән сығып нәшер ителмәйҙәр микән ни?

Минең ҡарашымса, авторҙар үҙҙәре әҙерләп баҫтырған томдар күпмелер кимәлдә академизм рухы менән дә һуғарылған булырға тейештер. Иң тәүҙә, титул битендә үк, Һайланма әҫәрҙәрҙең нисә томдан тороуын күрһәтеү фарыз. Беренсе томдың шағир ижадына яһалған

байҡау менән асылыуы шарт.Юғиһә, ҡайһы бер һайланмалар баш һүҙһеҙ генә, бәғзеләренең иһә һәр томы мәҡәлә менән асыла. Артабан килеп, һәр бер поэтик әҫәрҙең (шиғырмы ул, поэмамы) яңы биттән башланыуы хәйерле. Ниһайәт, томдарға ингән бөтә әҫәрҙәрҙең дә яҙылыу йылын күрһәтә барыу мөһим. Бына шул саҡта шағирҙың ижад юлы, уның эволюцияһы ус төбөндөге ынйы бөртөгө шикелле ялтырап ятыр.

Был талаптарҙы мин уйлап сығармаған. Уларҙы әле хәтерҙә яңыртҡаным өсөн, ҡалай ваҡсыл кеше икән был, тип, тетмәңде тетеп алыусыларҙың да табылып ҡуйыуы ихтимал. Ләкин, әҙәбиәт донъяһына киңерәк ҡараш ташлаһаҡ, һайланма әҫәрҙәр, тигән гриф аҫтында баҫылып сыҡҡан китаптарҙың күбеһендә тап бына ошо талаптарҙың асыҡ кәүҙәләнешен тойорбоҙ. Тимер Йосоповтың өс томлығына (ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның нисә томдан торғанлығы күрһәтелмәгән; һайланмаларҙы асып ебәреүсе баш һүҙ зә юҡ; әҫәрҙәрҙең яҙылыу йылдары ла ара-тирә генә билдәләнгән) килгәндә иһә, шуны әйтергә мөмкин: шиғырҙарҙың яҙылыу хроникаһын һаҡлап һәм йылдарын күрһәтеп, улар иркенерәк тын алһын өсөн һәр ҡайһыһын китап биттәрендә айырым-айырым урынлаштыра барһаң, өҫтәүенә «Ҡоштар тубы» поэмаһын өҙөп-йыртып түгел, ә тулы килеш баҫтырһаң, бынамын тигән дүрт йә биш том килеп сығыр ине.

«Ваҡыт карауаны» менән һайланма әҫәрҙәрҙең икенсе һәм өсөнсө томдарында Т. Йосоповтың яңы быуат башында ижад иткән шиғырҙары осраштырып ҡуйһа ла, был китаптар барыбер зә уның башлыса теге быуат алдында тотҡан хисабы һымағыраҡ ҡабул ителә. Әммә шағирҙың ижад ҡомары был быуатта ла кәмемәй, киреһенсә – артҡандан арта ғына бара. Бөгөн «Ағизел» журналын уның йыл һайын баҫылып торған яңы шиғырҙарынан башҡа күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Тимерҙең «Мине үҙһенмәгәндәргә», тип аталған бер шиғыры бар. Уның ҡасан яҙылғанлығы хаҡында өҙөп кенә әйтә алмайым – тәү тапҡыр мин уға «Ваҡыт карауаны», тигән йыйынтыҡта юлыҡтым. Артабан ул Һайланмаларҙың өсөнсө томына ла инеп китте. Шиғыр туғыҙ юлдан тора. Бына ул юлдар:

Йөҙҙәрегеҙ ҡара көйөп,
Көнсөллөктән күбенмәгеҙ.
Һеҙгә минең бер һүҙем юҡ,
Йырлайым мин,
Күпһенмәгеҙ.

– Тәүбә! – тиеп суҡынмағыҙ,
– Тәүбә, – тиеп уҡынмағыҙ.
Бар күңелем – йырҙарымда,
Күңелемдә соҡонмағыҙ.

Әйтелеүен шәп әйтелгән, әлбиттә. Тик, шиғырҙарҙа соҡонмайса ғына, нисек итеп тәнҡит мәҡәләһе яҙырға икән? Һүҙ ҙә юҡ, Тимер иҫ киткес әүҙем эшләй. Хәҙер уның ижад баҫыуы – оҫоҙ-ҡырыйһыҙ, тип әйтһәк тә әллә ни арттырыу булмаҫ. Миндә, мәҫәлән, ул көнсөллөк, күпһенеү түгел, һоҡланыу уята. Ләкин, ул үҙе әйткәнсә, бар күңеле – йырҙарында булһа ла, ни эшләмәк кәрәк: теләйһеңме-теләмәйһеңме, шағирҙың күңелендә лә «соҡонорға» тура килерҙер.

Бер нисә шиғырҙың ике тапҡыр баҫылып сығыуын иҫәпкә алмағанда, Тимер Йосоповтың был бығаттa «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән яңы шиғырҙарының һаны йөҙ иллегә яҡынлаша. Уларҙы эстетик талаптарға яуап бирерлек итеп бергә тупланһаң, ҡалын ғына китап хасил булыр. Был иһә, үҙ сиратында, шиғриәтебеҙҙең бөгөнгө торошо менән ҡыҙыҡһынып йәшәүселәрҙең хәлен күпкә еңеләйтер.

Егерме беренсе быуатҡа Т. Йосопов алтмышын тултырып аяҡ баҫты. Шуға күрә уның ижад манераһында ниндәйҙер ҙур үҙгәрештәр, киҫкен боролоштар эҙләү урынһыҙ булыр ине. Быға тиклем ул нисек яҙған, бөгөн дә шулай яҙыуын дауам итә. Әйтәйек, ул нишләптер шиғырҙарын традицион строфаларға һалыуҙы үҙһенмәй. Уның һуңғы йылдарҙа ижад иткән шиғырҙары араһында «күҙ өйрәнгән, күңел күнеккән» строфалар менән яҙылғандары инде бөтөнләй күренмәй башланы тиһәк тә дөрөҫкә тура килер.

Һәр хәлдә, яңы быуаттың тәүге йылына ҡараған «Йәшәрер туғайҙарым» һәм ун икенсе йылда баҫылып сыҡҡан «Ҡурҡып ҡына ҡулға ҡәләм алам…», «Ҡышҡа яңы ҡалҡҡайныҡ та…», тигән шиғырҙарҙан башҡаны осратманым мин бында. Дүртәр һәм бишәр юллы строфаларҙан торған «Йәшәрер туғайҙарым», йөкмәткеһе йәһәтенән бер аҙ моңһоуыраҡ тойолһа ла, яҙылышы менән матур яңғырай. Унда,«Күктә йөҙә туң айҙары, йылдай оҙон айҙары», тигән омонимия аша, һағыштан түземлеге юғала башлаған лирик геройҙың борсоулы уй-хистәре ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнгән. «Нисек кенә баҫайым һуң ташҡан күңелдәремде?», тигән риторик һорау иһә был хистәрҙе уғата ла ҡуйыртып ебәргән. «Ҡурҡып ҡына ҡулға ҡәләм алам…»да шағир ижадҡа ҡайһылай ҙур яуаплылыҡ тойоп ҡарауы менән

уртаҡлаша. Түбәндәге юлдар, минеңсә, бөтә шағирҙарҙы ла уйландырырлыҡ:

Ҡурҡып ҡына ҡулға ҡәләм алам,
Кағылғандай изге әйбергә.
Хаҡым бармы һиңә тотоноргә,
Һүҙем бармы икән әйтергә?..

Беренсе һәм икенсе юлдарҙағы аллитерация күренеше шиғырға айырым бер йәм өҫтәй, уны уғата ла баҙығайта.

Строфаларға һалынған шиғырҙарҙың эстетик мөмкинлектәре, уларҙың уҡыусыға тәьҫир итеү көсө күптән мәғлүм булһа ла, Тимерҙең ғәҙәти строфаларға бүлгеләмәйсә генә яҙылған шиғырҙары үҙҙәренең интонацияһы, синтаксик төҙөлөшө, рифмаларҙың аралашыу тәртибе менән иғтибарҙы йәлеп итмәҫлек түгел, әлбиттә. Унда йыш ҡына бер генә һүҙҙән торған юлдар ҙа осрай. Бындай алым, минең ҡарашымса, ритмик һәм логик баҫым яһап, уҡыусы иғтибарын бер нөктәгә туплауһәм шул рәүешсә авторҙың уға еткерергә теләгән төп уйын асыраҡ күҙаллау өсөн ҡулланылалыр. Күрер күҙгә мәҙәгерәк тойолһа ла, быныңүҙ өҫтөнлөктәре лә юҡ түгел һымаҡ. Күпселек шиғырҙарҙың таҡ юлдарҙан тороуы ла, моғайын да, шунан киләлер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, артыҡ мауығып китеүҙән микән, саманы онотоп ташлаған һәм шул сәбәпле шағирҙың ни әйтергә теләгәнлеге асылып бөтмәй ҡалған саҡтар ҙа осрап ҡуйғылай һирәк-мирәк кеңә булһа ла.

(Йәйәләр эсендә шул «һирәк-мирәктәр»ҙең ҡайһы берҙәрен атап китһәк, яҙыҡ булмаҫ. «Һөйөүемде эҙләп юлға сыҡтым…», тигән шиғыр, мәҫәлән, абстракт фекерләүгә ҡоролған шикелле. Яҙылышы-яңғырашы буйынса уға һүҙ тейҙерерлек түгел, ләкин лирик геройҙың ниндәй һөйөүҙе эҙләүе йомаҡ һымағыраҡ яңғырай, шуға күрә лә уның уй-фекере шиғырҙың һуңғы ике юлындағысараҡ тәьҫир ҡалдыра: «Һөйөүемә ҡарай китеп барам, томан ҡаплай тауҙар итәген». «Аттар бара юртып…», «Боҙҙар аға», «Тыны килеп бәрелдеме…», тигән шиғырҙар ҙа миңә, нишләптер, шулайыраҡ тойолдо.)

Әле һүҙ башлыса Т. Йосопов шиғриәтенең формаһы тирәһендә, ундағы ҡайһы бер үҙенсәлектәр хаҡында барҙы. Формаға бәйле был күҙәтеүҙәрҙе артабан да дауам итергә булыр ине. Ләкин йөкмәткемәсьәләһе лә күңелгә тынғылыҡ бирмәй. Сөнки яңы быуатҡа сыҡҡас етмеше менән етмеш бишен туйлаған шағирҙың булмышы бөтөнләй үк

үҙгәрешһеҙ ҡалмағандыр ҙаһа. Ысынлап та, Т. Йосоповтың яңыларҙан иҫәпләнгән шиғырҙарын диҡҡәт менән уҡыһаң, уларҙың байтағында авторҙың үткән ғүмер тураһында уйланыуҙарына тап булаһың.

Дөрөҫ, шағир быға тиклем дә вайымһыҙ тормош кисермәне, һис тә бошмаҫ йән эйәһе булып йәшәмәне. Уның ижадтағы әүҙемлеге әҫәрҙәрендә лә сағылмай ҡалманы. Иллеһенә аяҡ баҫҡанда донъяға килгән «Аҙымым ауырая», тигән шиғыр, мәҫәлән, үтелгән ғүмерҙең үҙенсә бер кәүҙәләнеше шикеллерәк ҡабул ителә, минеңсә. 1994 йылда был шиғыр, бер аҙ үҙгәртелеп, Тимер Йосоповтың «Ауырая аҙымдар», тип аталған китабына йән өрҙө. (Йәйәләр эсендә әйтәйем: йән өрөүен өрҙө, тик, нишләптер, китапҡа инмәй ҡалды.) Бында ошо шиғырҙың һуңғы дүрт юлын килтерәм:

Бойоҡ ҡүҙгәлам яҙҙаң,
Һин – һуңлап килгән яҙым.
Ҡайырылам юлыма,
Ауырая һәр аҙым…

Шуныһы мөһим– шағирҙың да, уның лирик геройҙарының да аҙымдары ауырая барһа ла, улар, тормош мәшәкәттәре алдында баш эймәйсә, һаман да үҙҙәре булып ҡалырға, йән тыныслығын һәм күңел бөтөнлөгөн һаҡлап йәшәргә тырышалар. «Кеҫе түгел кеселәре…», тип аталған шиғырҙа, мәҫәлән, шағирҙың хәл-әхүәле, кәйеф-сафаһы тап шундай юҫыҡта һүрәтләнгән, тиер инем:

Минең һымаҡ,
Ҡояшым да
Олоғая, ахыры.
Болоттарға йәшеренә,
Артыҡ тормай иркәләп.
Минең һымаҡ һуңлап ҡалҡа,
Бата хәҙер иртәрәк…

«Олоғаям…», тигән шиғырҙың да лирик геройы үҙенең эске кисерештәре менән тәбиғәт күренештәре аша уртаҡлаша. Шиғырҙан күренеүенсә, олоғайып барһа ла, уның кәйефе бигүк насар түгел: «Тулап туймаҫлыҡ был донъя, һулап туймаҫлыҡ һауа…», ти ул. Шундай бай һәм яҡты хистәр тулҡынында йөҙгән лирик геройҙың күңел торошо

шиғырҙың гиперболалаштырылған һуңғы ике юлында айырыуса сағыу һәм үтемле итеп кәүҙәләндерелгән: «Шатлығымдан һикергәйнем, – түбәм тейҙе күктәргә…».

Йәш олоғайыу – донъянан ваз кисеү, тигән һүҙ түгел әле. Быға Т. Йосоповтың «Ҡоштар сырлай…», тигән шиғырын уҡып та ышанырға мөмкин. Унда лирик геройҙың иҫ киткес нескә хистәре йөрәгенә үтеп инерлек итеп тасуирланған. Шағир ҙа, уның лирик геройы ла һис кенә лә мыжыҡ кешегә оҡшамағандар. Киреһенсә, улар яҡты донъяның бөтә гүзәллеген һәм йәмен туйғансы татып ҡалырға тырышалар.Һигеҙ генә юлдан торған «Яҡты яҙ килә…» тигән шиғырҙың да лирик геройын мыжыҡтар иҫәбенә индереп булмай. Сөнки ул ерҙә йәшәү асылына ҡалтыранып түгел, ә айыҡ аҡыл менән ҡарай: «Юлым тарая, киңәйә тыным»; «Көндәр оҙая, ҡыҫҡара ғүмер», ти ул.

«Сығып киттем ҡышҡы урмандарға…» тигән шиғырҙың лирик геройы иһә йылдың ҡарлы-бураҡлы, һалҡын миҙгеленән дә үҙенсә бер ләззәт таба – ҡышҡы урмандағы ҡош-ҡорт һәм хайуандар донъяһы уға ыңғай тәьҫир яһай. «Һағыштарым әллә боҫтомо ни күңелемдең алыҫ мөйөшөнә», тип ҡыуана ул. Лирик геройҙың бында кисергән уй-хистәре «Әй яңырҙы инде күңелдәрем, яңырманы, ярар, ҡайғыларым…», тигән юлдарға һыйған. «Ҡарҙар ауыр, ана, ҡайындарҙың иңе һалынып төшкән», тигән метафорик сағыштырыу, ҡышҡы тәбиғәттең дөйөм фонына йәм өҫтәү менән бергә, кеше иңен дә хәтерләтеп ҡуйғандай.

Кисерештәргә бай шағир өсөн ғүмерҙең бер туҡтауһыҙ үтеп тороуы – ваҡыт ҡарамағына, ваҡыт үлсәмәнә буйһонған ябай бер күренеш кенә түгел, әлбиттә. Уның өсөн иң мөһиме – ғүмерҙең ни рәүешлерәк үтеүе: йөкмәткелеме, әллә нисек етте – шулай ғынамы; янып-көйөпмө, әллә – быҫҡып ҡынамы. Т. Йосоповтың ошо тәңгәлдәгеуйланыуҙары «Ямғыр менән йәшен…», тигән шәлкемендә ифрат матур, күңелгә йәтешле итеп тасуирланған. (Дөрөҫ, журнал вариантында автор уны шәлкем тип атамаған. Ярай әле, һуңлабыраҡ булһа ла, Һайланма әҫәрҙәрҙең өсөнсө томында был хата төҙәтелгән – әҫәргә уның жанр атамаһы ҡайтарылған.)

Шәлкем бер-береһенән Рим һандары менән айырылған биш бүлектән, йәғни биш шиғырҙан тора. Күләмдәре яғынан улар әллә ни ҙур түгелдәр. Тыштан ҡарағанда, бүлектәр бер-береһенән яһалма рәүештә айырылған һымаҡ тойолһа ла, эске яҡтан был шиғырҙарҙы автор үҙ алдына ҡуйған уртаҡ маҡсат берләштерә: уларҙың бөтәһендә лә ижадта үткән ғүмер тәбиғәт күренештәре менән йәнәш ҡуйып

кәүҙәләндерелә. Тәүге бүлектә, мәҫәлән, күк күкрәп йәшен йәшнәһә лә, ямғыр яумауы хаҡында бәйән ителә лә, «Тыуған ерҙән күпме үткәнмен мин, йәшнәмәйсә яуған ямғырҙай», тип, уҡыусы күңеленә бер ни тиклем шом һалып ҡуйыла. Артабан (икенсе бүлектә) шағир үҙ яҙмышын «Тыуған еркәйемдә тулышҡанмын ултырып та яуыр яуындай», тип, уҡыусыны бер аҙ тыныслandыра. Өсөнсө бүлектән күренеүенсә, үҙен борсоған уй-хистәрен дә йәшермәй ул:

Уҙҙы инде яҡты яландарҙан
Тулап ҡына торған йәш мәлем.
Тик яуынһыҙ ғына күкрәнем дә
Яумай ғына әллә йәшнәнем.

Дүртенсе бүлектә шағирҙың борсоулы уйҙары, икеләнеүҙәре уғата ла көсәйә: «Йәшнәмәйсә генә күкрәнем дә тик яуынһыҙ әллә ялтланым». Һуңғы шиғырҙа ул, ниһайәт, үҙ шәйеһенә ҡайтырҙай көс таба: «Тыныһам ине йәшнәмәйсә генә ергә һеңгән йылы ямғырҙай». Был шиғырға, минең уйымса, шағир үҙе лә битараф түгелдер.

Ғүмер тураһында Т. Йосопов ысынлап та күп уйлана һәм күп яҙа. Ғүмерҙең үткәне лә, хәҙергеһе лә уға берҙәй тынғы бирмәй. Шағир кисергән хис-тойғолар уҡыусыны ла тыныс ҡына ҡалдырмай торғандыр, тип уйлайым. Шуға күрә Тимер Йосоповтың ошо темаға арналған шиғырҙарын күҙаллауҙы артабан да дауам итһәк, яҙыҡ булмаҫ. Ә бындай шиғырҙар уның ижад багажында бихисап. Шулар араһында тәүге уҡыуҙа уҡ күңел түрендә үҙ урынын алырҙайы – «Ваҡыт аға…» тигәнелер, моғайын.

Ғәжәп, тағы ла шул Рим һандары менән бүленгән алты киҫәктән торһа ла, автор был шиғырын да шәлкем тип атамаған. Күләмдәре яғынан бүлектәр төрлө: иң ҡыҫҡаһы–туғыҙ, иң оҙоно–утыҙ ике юллыҡ. Күләмдәре менән генә түгел, йөкмәткеләре, яңғыраштары буйынса ла улар бер-береһенән һиҙелеп айырыла. Тәүге өс бүлектә лирик герой башлыса үҙенең эске кисерештәре менән уртаҡлаша, донъя хәлдәренә еңелсә генә байҡау яһап ала, уларға шәхсән ҡарашын белдерә. Бишенсе шиғырҙа ул фәлсәфәүи пландараҡ фекер йөрөтә: «Ваҡыт аға. Ә үҙебеҙ инде – ғүмер үре тигән һырттабыҙ»; «Ваҡыт аға, шуны уйламай ҡайсаҡ кешеләрҙең битен йыртабыҙ?..»; «Ғүмер ҡыҫҡа, ығы-зығы менән ҡоротабыҙ Кеше теңкәһен». Һуңғы шиғыр башкөлләй кеше тураһында, уның булмышы һәм яҙмышы хаҡында уйланыуҙарға ҡоролған: «Был

донъяла Кеше шундай ҙур ул, бер уйлаһаң, үҙе кескенә»; «Кеше оло ине, яҙмыштарҙың шырлығына инеп яҙлыҡты». Кешенең үҙ яҙығын күрә һәм таный белмәүе фашлана. Ғәйепте әҙәмдәрҙән түгел, бәлки үҙеңдән эҙләргә кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Т. Йосоповтың ун ике генә юлдан торған «Ваҡыт» тип аталған шиғыры ла бар. Бынығы инде фәлсәфәүи планда ғына түгел, тотошо менән бер фәлсәфә – Ваҡыт төшөнсәһе бында үҙаллы йәнле образ кимәленә күтәрелгән. Автор билдәләүенсә, Ваҡыт – аяуһыҙ, бағерһеҙ, уның өсөн әҙәм бар ни ҙә, юҡ ни; Ваҡыт – үлемһеҙ, шуға күрә уның ҡәбере лә юҡ. Ваҡыттың ошондай ҙа аяуһыҙлығы һәм бағерһеҙлеге шағир яҙмышында ла үҙенең сағылышын тапмай ҡалмаған:

Ат эҙләгән малай инем,
Бабай иттә
Ни арала ғына шулай ҡәҙерһеҙе.

Бына бер ҡыҙыҡ, Т. Йосоповтың «Ни арала» тигән шиғыры ла бар ҙаһа. Уның да лирик геройы «Ни арала йылдар үтеп киткән», тип аптырай. «Бойоҡмаймы был саҡ күңелем?» тигән һорау ҡуя ул үҙ алдына. Юлы ырап, бөтәһе лә уң килеп торһа ла, бойоғоу ғына түгел, башын ташҡа бәрә-бәрә иларҙай хәлдә икәнлеген дә йәшермәй лирик герой. Сәбәбе – ғүмерҙең шулай һиҙҙермәй ҙә үтеп китеүе. «Ни арала» тигән шиғырҙағы һымаҡ, «Әле генә яҙҙар ине…» тигәнендә лә лирик герой ваҡыттың тиҙ үтеүенә зарлана: «Нисек кенә тотонайым был ваҡыттың ялына», «Алтын ғына йылдарым, тим, неҙ ҡайҙарға остоғоҙ?», тип үрһәләнә ул. «Ваҡыт ялы» тигән метафора ла иғтибарҙы йәлеп итмәҫлек түгел. «Ни арала» менән «Әле генә яҙҙар ине…»не «Уҙа айҙар, уҙа йылдар…» дауам итә, тиһәк тә була. Уларҙы бер-береһенә айырыуса «Офоҡ уты һүнә бара, ҡуҙы ҡайтҡан ялҡындай» тигән образлы сағыштырыу яҡынайта. Ошо урында традицион ҡалыпҡа һалып яҙылған «Ҡышҡа яңы ҡалҡҡайныҡ та…» тигән шиғыр килеп ҡушыла. Уның һуңғы ике юлына шаҡтай ҙур мәғәнә төрөлгән, минеңсә:

Тик иҫәрҙең иҫе китмәй
Ғүмерҙең үтеүенә.

Исеменә ҡарағанда, «Быйылғы көҙ» тигән шиғырҙа тәбиғәт күренештәре һүрәтләнер һымаҡ. Асылда иһә, унда һүҙ – йылдың «көҙ»

тип аталған бер миҙгеле һәм шул миҙгелгә бәйле лирик геройҙы сорнап алған уй-кисерештәр хаҡында. Ергә муллыҡ, бәрәкәт алып килә торған мәл булһа ла, көҙ кеше күңеленә лә тәьҫир итмәй ҡалмай: «Үҙ урынын тапҡан бөтәһе лә ‹…› Хәҙер ҡалмағанмы бер кемде лә инде көтәһе…», тип бойоға лирик герой. Ошо урында ирекһеҙҙән «Ваҡыт аға…» тигән шәлкемдәге бынауы строфа иҫкә килеп төшә:

Яндарымда бары йәрем ҡалған,–
Күҙҙәремде күҙгә төбәрлек.
Ҡайҙа улар – ҡайҙа йән дуҫтарым,–
Иңдәремде иңгә терәрлек?

Уҡыусы һиҙеп тора, Тимерҙең һуңғы йылдарҙағы лирикаһында «Ғүмер» төшөнсәһе «Ваҡыт» төшөнсәһе менән йәнәш атлай. Ләкин улар бер-береһенә тиңдәш түгелдәр: ғүмер – сикле, ваҡыт – сикһеҙ. Ошо йәһәттән «Яҡынаям ҡояшҡа…» тигән шиғыр ҡыҙыҡлы. Унда лирик геройҙың бөтә булмышы асып һалынған. «Үҙ һүҙемде бирмәйем һис еткәндә лә етмешкә» ти ул һәм үҙен «еңмеш» тип атауҙан да сирҡанып тормай. «Яҙмышымдан уңдым мин», тиһә лә уның тормош юлы ал да гөл генә булмаған. («Юлым булды ураулы, ат булды ҡыңғыраулы, ә һуҡмағым ҡыраулы»).Былар бөтәһе лә аңлашыла.«Донъя һыя ҡоласҡа» тигән метафора ла матур яңғырай. Әммә лирик геройҙың әйтергә теләгән төп уйы Ваҡыт төшөнсәһе тирәһендә бөтөрөлә, сөнки Ваҡыт уны «үҙ утында көйрәткән». Был осраҡта «Ваҡыт» төшөнсәһе «Заман» төшөнсәһенең синонимы шикелле яңғыраһа ла, ул барыбер ҙә үҙаллы әҙәби образ кимәлендә ҡала, минеңсә.

Ҡарап тороуға ябай ғына күренгән «Ниңә шулай һиҙҙермәйсә генә …» тигән шиғыр башынан алып ахырына тиклем фәлсәфәүи юҫыҡтағы фекер менән һуғарылған. «Ниңә шулай һиҙҙермәйсә генә Ваҡыт аға икән, һыу кеүек» тигән юлдарҙан башлана ул. Артабан автор «Әҙәм баштарынан саба Ваҡыт, ҡоторона, ул таш бәғерле…» тигән ҡәтғи ҡарарын сығарып ҡуя. Баш хәреф менән яҙылған Ваҡыт һүҙе был юлы ла үҙаллы образ юғарылығына күтәрелгән. Ваҡыттың аяуһыҙлығы лирик геройҙың «Япраҡтарым инде ҡойола бит, еттем инде ғүмер көҙөмә» тигән һүҙҙәре менән нығытып ҡуйылған.

Ваҡыт образына шағир «Машиналар йылт-йылт итеп ҡала…» тигән шиғырҙа яңынан әйләнеп ҡайта. Был юлы ул йәнлерәк тә тойола.

Бәлки, лирик герой Ваҡыт менән бер яҡлы ғына булһа ла диалог ҡороп ебәргәнгә шулайҙыр:

Ваҡыт,– арғымаҡ һин,
Теҙгенеңдән
Ысҡындыраһым юҡ ҡулымды.
– Тояҡтарым минең саҡма саға,
Ай-йондоҙҙар арттан эйәргән.
Эйәреңдә генә тыуғанмын да
Ауырмын мин бары эйәрҙән…

Әйткәндәй, шағир хыялында Ваҡыт ҡына түгел, Ғүмер ҙә арғымаҡҡа тиңләнә. Шундай шиғырҙарҙың береһе «Ғүмер генә тигән арғымағың…», тип атала. Күләме яғынан ул ҙур түгел – һөйөп кенә уҡырлыҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, шағир үҙенең күңел торошон шаҡтай тулы итеп асып биреүгә ирешкән:

Ғүмерҙәр, тим, ниңә бик тиҙ үтә,
Янып ҡына бара эстәрем.
Бер йәнемә урын тапмайым һис,
Якынлаша тағы кистәрем.

Шиғырҙы ослап ҡуйған түбәндәге ике юл хатта моңһоҙҙарҙы ла һиҫкәндереп ебәрер:

Ғүмер кисе генә кисекмәй.
Әйтелмәйсә һуңлай әйтер һүҙҙәр.

«Ваҡыт – арғымаҡ», «Ғүмер – арғымаҡ» тигән метафоралар хаҡында һүҙ барғанда, «Йылы елдәр ҡалҡып наҙлап үтте…» исемле шиғырҙы иғтибарһыҙ ҡалдырһаҡ, яҙыҡ булыр. Лирик герой башта «Мәңгелектең керпек ҡаҡҡанындай, шундай ҡыҫҡа ғүмер тигәне», ти ҙә, артабан һүҙен былай дауам итә:

Ни арала көҙҙәр еткән икән,
Еркәйемде баҫа һарылыҡ.
Әллә ниңә инде һары һағыш
Йәнгенәмә тейә һарылып.

Уҡыусынан ғәфү үтенеп, был шиғырҙан уның иғтибарына тағы бер нисә юлды тәҡдим итмәй булдыра алмайым:

Ваҡыт елә,
Гүйә, арғымаҡ, тим,
Эҫе тынын бөркөп сапҡандай.
Ғүмер тигәндәре шундай ҡыҫҡа,
Ишегеңде асып япҡандай.

«Бер генә ҡолас ташлағас…» тигән шиғырҙа ла һүҙ башлыса ғүмерҙең үтеүенә ҡайтып ҡала. Шиғыр күп тапҡырҙар ҡабатланған теманың яңысараҡ, көтөлмәгәнсәрәк хәл ителеүе менән отошло. Тәбиғәт күренештәренән йәм табып, ҡот алып йәшәгән лирик герой үҙе өсөн асыш яһағандай итә:

Иҫем китеп
Туҡтап ҡалдым
Бейек тауҙар һыртында.
Әллә инде ғүмеремде
Үттем микән бер тында?

Әйтергә кәрәк, Тимерҙең Ғүмер һәм Ваҡыт темаһына арналған шиғырҙарында ниндәйҙер кимәлдә уның үҙ портреты ла төҫмөрләнмәй ҡалмай (лирик геройҙың күп осраҡта авторға тиңдәш булыуын күҙ уңында тотҡан саҡта, әлбиттә). Бының ысынлап та шулай икәнлегенә юғарыла тикшерелгән шиғырҙар дәлил булырлыҡ. Уларға яңыларын да күпләп өҫтәргә мөмкин. «Ҡуҙғалмай ҡыш…» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, автор, символик йәнәшәлеккә тартым поэтик алым ҡулланып (тиҙ генә ҡуҙғалырға йыйынмаған ҡышты ҡыуалаған булып), үҙ характерына хас ҡайһы бер сифаттарҙы асып һала кеүек. «Йырылырмын, йырылырмын, көслө ташҡын булырмын. Аҫтыртын ятҡан бәләнең килер юлын быуырмын», ти ул, ҡышты ҡыуалаусы образына инеп. «Боҫоп килгән хәйләкәрҙең» юлын бүлергә әҙер тороуын да белдерә ул. Шулай итеп, тәү ҡарамаҡҡа һүҙ йыл миҙгеле тураһында ғына барған һымаҡ тойолһа ла, асылда иһә шағир донъяла аҫтыртынлыҡтың да, хәйләкәрлектең дә йәшәп ятыуына ишара яһай. Дөрөҫөрәге, ишара яһап ҡына ҡалмай, уларға киҫкен ҡаршы сыға.

Шағирҙың характер үҙенсәлеге «Кешеләр» тигән шәлкемдә лә сағылыш тапмай ҡалмағандыр, моғайын. Был шәлкем үҙ эсенә йөкмәткеләре буйынса бер-береһенә ылыҡып торған биш шиғырҙы һыйҙырған. Уларҙың тәүгеһендә үк лирик геройҙың (шул иҫәптән, авторҙыңдалыр!) һәр саҡ кешеләргә күҙ төбәп, тик әҙәм араһында ғына әҙәм булып йәшәүе һыҙыҡ өҫтөнә алынған:

Йүгереп тә барҙым кешеләргә,
Түбәләрем күккә тейгәндә,
Мин уларға ғына һыйындым бит,
Хәүеф килеп
Ҡашын төйгәндә,
Хатта юҡҡа йәнем көйгәндә…

Шуныһы мөһим: шәлкемгә ингән шиғырҙарҙың мәғәнәһе кешегәргә дифирамб йырлауға ғына ҡайтып ҡалмай. Шаян ағайҙары лирик геройҙы кәкре ҡайынға һөйәп, ә күркәм яҡташтары уны төп башына ултыртып киткән саҡтары ла булғылаған. Ни ҡылаһың инде, донъя бындай хәлдәрҙән дә азат түгел шул. Әммә, нисек кенә булмаһын, яңғыҙлыҡтан йәне телгеләнгән лирик герой, кешеләргә мөрәжәғәт итеп, «Һеҙһеҙ донъя һанһыҙ, алдығыҙҙа шәм филтәһе булып янайым…», тип ялбарыуҙан да баш тартмай.

«Мине тормош артыҡ наҙламаны…», «1941 йылдың 22 июне», «Яланда», «Ҡырҙа», «Һыуһағанда шишмәләргә ятып…», «Бесән сапҡанда», «Ер тырматтыҡ…», «Һис бер ваҡыт онотмайым…» тигән шиғырҙарҙың автобиографик факттарға нигеҙләнгәнлектәрен фараз итеп тораһы ла юҡ. Уларҙың бөтәһендә лә шағирҙың балалыҡ һәм үҫмер йылдары сағылыш тапҡан, тиергә була. «Мине тормош артыҡ наҙламаны…»ла, әйтәйек, автор ғүмер юлын кешесә үтеүе менән ҡәнәғәт булыуын белдерә: «Ҡаты ҡуллы булды ла ул үҙе, иҙмәмде лә артыҡ иҙмәне…»; «Һөйөү килде, мәлен белеп килде, ҡалай күркәм икән йәшәүҙәрем…». «1941 йылдың 22 июне»ндә һуғыш башланған көн лирик геройҙың балалыҡ аңы аша күҙ алдына баҫтырылһа, «Яланда» тигән шиғырҙа иһә уның үҫмер сағынан хәтерендә һаҡланып ҡалған күренеш аяҡҡа баҫтырыла: «Халыҡ йүнәлде яланға ярым туҡ та ярым ас»; «Ярты – өмөт, ярты – бәхет, бөтәһе лә ярты лаш. Бөтәһе лә ярты лаш шул, ҡайҙа икән бөтөнө?». Йәйге баҫыуҙы матур итеп һүрәтләгән «Ҡырҙа» тигән шиғырҙа лирик геройҙың тыумыштан ер кешеһе икәнлеге иҫбатланған:

Ҡырға ҡайтһам,
Күҙ асыла,
Күҙ асыла, терелəм.
Бəхетемдəн һөйөнəм дə
Аҡ нурҙарға төрөнəм.

«Һыуһағанда шишмəләргə ятып…» тигән шиғырҙың лирик геройына хас сифаттар авторға ла ят түгелдер, тип уйлайым:

Бер тотондом иһə
Енем ҡубып,
Эшлəй инем һəр саҡ емереп.
Балҡып шатлыҡ килһə,
Ҡыуаныстың
Яҡты тауҙарына айтым мин.
Мөхəббəтем баҡһа,
Башҡайымды
Юғалтырҙай булып шаштым мин.

«Бесəн сапҡанда» менəн «Ер тырматтыҡ…» тигән шиғырҙарҙың лирик геройҙары ла шағирҙың портретына үҙенсə бер һыҙат өҫтəйҙəр, тиер инем. «Бесəн сапҡанда»ла ул:

Эй, кирелеп бесəн сабам,
Ялан баҫа яр һымаҡ,
Һыуҙай алдырған салғыма
Киң яландар тар һымаҡ, –

тигән ҡыуанысы менəн бүлешһə,«Ер тырматтыҡ…»та иһə, үҫмер мəлен хəтеренə төшөрөп, «Бала сағым үтеп киткəн бураҙнанан сыҡмайса…», тип көрһөнөп ҡуя. «Һис бер ваҡыт онотмайым…» тигəн шиғырҙа ла реаль тормоштан алынған хəл-ваҡиға һүрəтлəнгəн: «Иҫтə һаман, иҫтə һаман башаҡ сүпləп йөрөгəнем». Тимер Йосопов шиғриəтендə йыш ҡына осрай торған «дауыл», «ел» образдары («Йылғыр тəкə төҫлө…» тигəн шиғырҙа, мəҫəлəн, ел – йылғыр тəкə шəйенə индерелгəн) тағы ҡабатланһа ла, был юлы улар артыҡ түгелдəр – һəр ҡайһыһы үҙ урынында. Шиғырҙың һуңғы өс юлындағыса, авторҙың бала сағында уҡ күңеленə һеңеп ҡалған хистəре уның быуындаштарына бик тə таныш:

Башаҡ күрһәм,
Тапҡандаймын
Ат башындай алтынды.

Хәйер, шағирҙың холоҡ-фиғелен, характерын сағылдырырҙай ҡайһы бер сифаттарҙы уның «Көнсөллөк», «Ирҙәр һау булһын», «Бер йомош», «Эттеләр ҙә киттеләр», «Бала саҡтарымдан, кәрәк мәлдә…», «Туғарылдым инде, туғарылдым…», «Хәтер», « – Үҙгәргәнһең, – тиҙәр миңә…», «Тупаҫлыҡтан баш тубалдай…», «Үттәй әсе йәшем…», «Күкрәкте терәйем…», «Талған саҡта таянамын…», «Хыялдарым елдә еленләне…», «Асыҡ булдым, дауылдарға…», «Тауҙарымда ҡанат кирәм…», «Эй, ғүмерҙәр…» тигән шиғырҙарында ла тойомлана. Уларҙың бөтәһенә лә ентекләп туҡталып тормаҫтан, «Көнсөллөк», «Үттәй әсе йәшем…», «Тауҙарымда ҡанат кирәм…», «Эй, ғүмерҙәр…» тигәндәре хаҡында ғына бер-ике һүҙ әйткем килә. Күләме йәһәтенән артыҡ ҙур булһа ла (етмеш юл!), «Көнсөллөк» тигән шиғыр иғтибарҙы үҙенең йөкмәткеһе менән тарта. Әгәр лирик герой артында автор үҙе баҫып тора, тип фараз ҡылһаҡ, уның кинәйәләп кенә «Шиғриәттә – һәр кемдең үҙ урыны» тигән фекерҙе алға һөрөүен тойорбоҙ. Шул тиклем дә озон шиғырҙан бынауы юлдарҙы күсерһәм, уҡыусы үпкәләмәҫ әле:

Әй көнсөлдәр,
Мин бәхетле кеше,
Шундай бейек икән Йыһаным.
Халҡым менән бергә көлдөм дә мин,
Үҙем генә ҡалһам, иланым...

. . . . . .

Әй көнсөлдәр,
Яман тарсыллыҡтан
Тындарығыҙ һеҙҙең йышая.
Әллә ниңә йүнле шиғыр яҙһам,
Ауыҙығыҙ һеҙҙең ҡыйшая.

. . . . . .

Был донъяла үтә бер ҡатлымын,
Ҡайғыларҙан инде илерәм.
Әҙәм бәхетенә һөйөнәм дә
Шатлығынан ташам, тилерәм.

«Үттәй әсе йәшем…» тигән шиғыр ҙа бик ҡыҫҡаларҙан түгел. Бынығында шағир йәнә үткән ғүмерен барлауға әйләнеп ҡайта. «Ғүмер үтмәй, тиеп йөрөгәнмен, бөгөн генә һиҙҙем алданғанды…», тип әсенә ул. Лирик герой үҙенең тормош юлын күҙ уңынан уҙғарып, уға объектив баһа бирергә тырыша. Уны йыуатыусыларға ҡайтарған яуабы ла ифрат киҫкен яңғырай: «Ялҡтым инде даулы табындарҙан, биҙҙем инде шаулы туйҙарынан»; «Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам, иҫтәремә килдем көҙ мәлендә»; «Нисә йылдар үҙ-үҙемдән ҡасып, әй, яңырып ҡайтам үҙ-үҙемә». «Яҙыҡтарҙы үҙ өҫтөмә алам» тигәндән, ошоға тартым фекер Тимерҙең һуңғы йылдарға ҡараған шиғриәтендә күҙгә йышыраҡ салына.

«Тауҙарымда ҡанат кирәм…»дә ғүмерҙең үтеүе бик матур поэтик саралар ярҙамында кәүҙәләндерелгән. Йәшлек йылдарын, көслө һәм ғәйрәтле саҡтарын иҫенә төшөрөп, болонда бесән сабыу процесын иркенләп һүрәтләгәндән һуң, автор, бер кем алдында ла аҡланып тормайса, бындай һығымта яһап куя:

Йылдар уҙған,
Шул уҡ тауҙар.
Елдәре әсе үттәй.
Сал бөркөттәй,
Канат кирәм,
Тик салғым ғына үтмәй,
Уттар сығармай күгем дә,
Уттар сығармай күҙем.
Салғыма һис тел тейҙермәм,
Үтмәҫләнгәнмен үҙем.

Ә бына «Эй, ғүмерҙәр…» тигән шиғыр уҡыусыла башҡасараҡ тәьҫир ҡалдырыр, моғайын. Сөнки бында оло йәшкә еткән шағирҙың күңелһеҙерәк, моңһоуыраҡ уй-хистәре сағылдырылған:

Күкте йондоҙҙай тултырып,
Балҡып булмаҫтыр инде.
Ғаләмдәге йәш ай төҫлө
Ҡалҡып булмаҫтыр инде.
Курғаш һымаҡ болоттарҙан
Талды инде ҡулбашым.

Өшөйөм,
Ниңә йылытмай
Ҡояш тигән ҡорҙашым?

Тимер Йосоповтың быуат башындағы ижадында тыуған ер, тыуған төйәк, тыуған республика, тыуған ил темаһы ла әүәлгесә һиҙелерлек урын алып тора. Был темаға арналған шиғырҙарҙы атап та китергә мөмкин: «Күңел тула», «Бормаланып һығылып киткән…», «Тынып ҡалған шишмә…», «Ҡайҙа баҡма…», «Күңел бойоҡто», «Тыуған яҡтар ҡырыҫ…», «Олатайҙай күреп Күкһел тауҙы…», «Иләү», «Баш осомда – ҡояш», «Хушлашырға сығам», «Беҙгә көндәр гел тиҫкәре инде…», «Тыуған ерем шундай тыйнаҡ…», «Иренеп тә уҫҡа ҡарҙар ҡуна…», «Күҙ генәйем терәр яҡындар юҡ…», «Яҙым таша, үргә ҡалҡынамын…», «Ҙур кәүҙәһен һөйрәп төн ҡуҙғала…», «Бағам әле ҡайырылып…», «Һағынғанмын тыуған еркәйемде…». Әлбиттә, был тиклем күп шиғырҙың бөтәһен дә бер мәҡәлә сиктәрендә күҙ уңынан үткәреү ауырға тура килер. Шулай за уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китмәй ярамаҫ.

Ҡарап тороуға, «Түбәм тейҙе күктәргә…», тип аталған шәлкемде асып ебәргән «Күңел тула» тигән шиғыр – ябайҙарҙан да ябай. Унда, алап һалып ат өркөтмәйҫә генә, сит яҡтарҙыҡына ҡарағанда, күберәк үҙ илеңдең, үҙ халҡыңдың мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу мөһимерәк түгел микән, тигән идея үткәрелә. Йөкмәткеһе йәһәтенән шиғыр сәйәси лириканы хәтерләтһә лә, яңғырашы менән ул пейзаж лирикаһынан да әллә ни алыҫ түгел. Был инде талант төшөнсәһенә бәйле күренештер.

Ошо шәлкемдәге «Бормаланып һығылып киткән…» тигән шиғырҙың башындараҡ «Ҡырҙарыма сит-яттарҙың күҙе һәр саҡ ҡыҙа бит», тиелә лә, «Күҙ теймәһен башҡортомдоң тыуып үҫкән еренә!..» тигән юлдар менән ослап ҡуйыла. «Тынып ҡалған шишмә…» тигән шиғырҙа тыуып-үҫкән ер-һыуыңдың ят ер-һыуҙарға ҡарағанда күпкә ҡәҙерлерәк булыуы ябай ғына миҫалда иҫбат ителгән: «Сит илдәрҙең һыуын күп татыным, баҫылманы һис тә сарсауым». Ят йылғаларҙың һыуы ла башҡасараҡ икән: «Баштарымды … сыңҡытманы, ҡайнап өлгөрмәгән буҙалай». «Ҡайҙа баҡма…» тигән бәләкәй генә шиғырында иһә автор «Ҡыуанысым – Башҡортостан, яҡты илдә йәшәйбеҙ» тигән шатлығы менән уртаҡлаша.

«Быуаттарҙы иңдәремә йөкмәп…», тип аталған шәлкемде асып ебәргән «Күңел бойоҡто» тигән шиғырҙа ла, яңғырауыҡлы һүҙҙәрһеҙ

генә, тыуған-үскән ерҙән дә матурыраҡ һәм ҡәҙерлерәк ер юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел, тигән фекер алға һөрөлә. Был фекер, үҙ сиратында, ике бүлектән торған «Олатайҙай күреп Күкһел тауҙы…» тигән шиғырҙа уғата ла ҡеүәтләп ебәрелә. Шиғырҙың тәүге бүлегендә лирик герой «Был тауҙарым минең сәсәнле лә, был тауҙарым минең шағирлы», тип ғорурлана. Икенсе бүлекте «Йырлата ла һине, илата ла, йыуата ла һине тыуған ер» тигән юлдар ослап ҡуя.

Шулай ҙа тыуған ил, тыуған ер темаһы Т. Йосоповтың «Иләү» исемле поэтик әҫәрендә киңерәк һәм тәрәнерәк асылғандыр. Алты киҫәктән, шул киҫәктәрҙе хасил итеүсе йөҙ иллегә яҡын юлдан торған был әҫәрен дә автор нишләптер шәлкем тип атамаған. Беренсе бүлектә бик матур итеп шағирҙың тыуған төйәге тасуирланған. Ғәҙәттә, ҡышҡы көндө һүрәтләгәндә, күҙ асҡыһыҙ буран, тиһәләр ҙә, Тимер өсөн донъя аҡлығының да, яҡты ҡырҙарҙы тыныс ҡына ойотҡан нурҙың да күҙ асҡыһыҙ булыуы мөмкин икән. Шәлкемдең һуңғы ике бүлеге айырыуса көслө яңғырай, тиһәм, зур хата булмаҫ. Быға уҡыусыны ла ышандырыу өсөн шул бүлектәрҙән түбәндәге юлдарҙы килтермәк булдым:

Йоко ҡасҡан минән,
Уйҙар менән
Сикһеҙ киңлектәрҙе инләүем.
Имен генә атһын таңдарыбыҙ,
Рәсәй генә тигән иләүем.
. . . . . .
Яҡты көндө әле ҡаршылайбыҙ,
Килеп баҫып Урал ташына.
Был иләүгә берәү таяҡ тыҡһа,
Үҙ таяғы төшөр башына.

Яҙылыу һәм баҫылыу ваҡыттарын ике йыл айырып торһа ла, «Баш осомда – ҡояш» тип аталған шиғырҙы «Иләү»ҙең үҙенсә бер дауамы, тиергә була. Шиғыр Башҡортостанға бағышланған. Күләме яғынан еләткес түгел. Яҙылышы-яңғырашы йәһәтенән дә бик матур – урынһыҙға әйтелгән бер генә һүҙ ҙә күҙгә салынмай. Бына уның һуңғы юлдары:

Башҡортостан,
Баш осомда – ҡояш,
Көйрәйемсе эңер еткәнсе.

Ғүмер тигәндәрең бигерәк ҡыҫҡа,
Һөйәйемсе янып бөткәнсе.

Шағирҙың ғүмер баҡый тыуған ере, тыуған төйәге менән айырылғыһыҙ булыуын, улар менән ғорурланып та, ҡайһы саҡта бер аҙ моңһоуыраҡ хистәр кисереп тә йәшәүен һүрәтләгән шиғырҙар ҙа осрай бында. «Хушлашырға сығам»да, мәҫәлән, ул ҡышҡылыҡҡа тыуған яҡтарын ваҡытлыса ташлап китер алдынан күңелен сорнап алған һағышы менән уртаҡлашһа, «Беҙгә көндәр гел тиҫкәре инде…» тигәнендә иһә холҡо-фиғеле менән үҙен тыуған яғына оҡшата һәм тыуған төйәге ҡалай ғына булһа ла, уға тел тейҙермәҫкә һүҙ бирә. «Тыуған ерем шундай тыйнаҡ…» тигән шиғырҙың уҡыусыла айырыуса ҡыҙыҡһыныу уятыуы ихтимал. Сөнки был шиғырҙағы «Тауҙарыма оҡшағанмын: ашмағанмын бейеккә» тигән юлдар Назар Нәжмиҙең «Тыуған ауылыма» (1965) исемле шиғырын хәтерләтеп ҡуя: «Тауҙарың бар – улар тәпәш кенә…» (Н. Нәжми); «Тыуған ерем шундай тыйнаҡ, тауҙары уның тәпәш» (Т. Йосопов).

«Иренеп тә усҡа ҡарҙар ҡуна…» тигән шиғырҙың лирик геройы тыуған төйәгенең күркәмлеге менән хозурланып ҡына ҡалмай, ундағы ҡышҡы тәбиғәт күренешенән үҙенә шифа һәм йән тыныслығы ла таба:

Тауҙарымда йылы ҡарҙар яуа,
Балҡып ята тыуған төйәгем.
Нурлы донъя,
Онотола ғәйбәт,
Онотола фәлән-төгәнең.

Шиғырҙың «Ғәйбәттәрҙән мине араларға күктәремә ашҡан үрҙәр бар» тигән һуңғы ике юлы юғарыла әйтелгән фекергә өҫтәмә асыҡлыҡ индереп ҡуйғандай. Ике киҫәктән торған һәм «Яҙым таша, үргә ҡалҡынамын…», тип аталған шиғырҙа лирик геройҙың тыуған ерендә ләззәтле минуттар кисереүе уғата ла сағыуыраҡ итеп һүрәтләнгән. Ҡала шау-шыуынан арынып, тыуған төйәгенә аяҡ баҫҡан шағирҙың күңеле тыныс, һағыш уны ташлап киткән, бар шиктәре тайған яныңдан. «Ә түбәндә ятҡан ауылдарҙа яҡташтарым йәшәй һәүтемсә» тип, ҡәнәғәтләнеү тойғоларын да йәшермәй ул. Яңғыраштары буйынса шиғырҙарҙың ике киҫәге лә бер кимәлдә: сағыштырыуҙарға бай, йөкмәткеләре менән дә иғтибарҙы йәлеп итерлек. Тыуған төйәгенә

ҡайтып, тау башына күтәрелгәс, шағир үҙен был донъяға ҡабаттан тыуғандай хис итә:

Тауҙа торам.
Шундай тып-тын донъя,
Көнө әле кискә ауышҡан.
Донъя камил һымаҡ,
Ваҡыт менән
Тынлыҡ ҡына бында ҡауышҡан.

«Күҙ генәйем терәр яҡындар юҡ…» тигән шиғырҙа тыуған ер темаһы киңерәк планда яҡтыртылған. Ауылда күҙ терәр яҡындары булмаһа ла, «Күҙ-йәштәрем тамған ерем ҡалған даһа таянырға», тип йыуата үҙен лирик герой. Тарихҡа ла күҙ һирпеп ала шағир: «Аһылдап та башҡорт ҡан төкөргән, ерҙе бирмәйем, тип, яттарына». Шиғыр – теләк тә, бер үк ваҡытта саҡырыу һәм өндәү ҙә булып яңғыраған түбәндәге юлдар менән тамамлана:

Косағыңда ҡалһын урмандарың,
Косағыңда ҡалһын болондарың.

Әйтергә кәрәк, «Күҙ генәйем терәр яҡындар юҡ…» – күләме яғынан бәләкәй генә булһа ла, йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө менән шаҡтай үҙенсәлекле шиғыр. Кинәйәләү ысулын оҫта файҙаланып, тыуған төйәк темаһын шағир, һиҙгерҙәрҙән генә, ижтимағи-сәйәси юҫыҡтағы мәсьәләләргә килтереп бәйләгән. Дөрөҫ, сәйәси лирика Тимер Йосопов өсөн теге быуатта ла ят күренеш булманы, бигерәк тә һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа. Әле лә күренгеләп ҡала уның заман һулышы менән һуғарылған шиғырҙары. «Магнаттарҙы төрмәгә ябалар…», «Яҙҙар килә…», «Ниңә әле йөҙө ҡасҡан…», «Быуаттарҙы иңдәремә йөкмәп…», «Төш», «Ҡунаҡмын», «Йә ҡаш төйөп…», «Илдә ҡалҡҡан хәтәр дауылдарҙан…» тигәндәре – тап шундайҙар иҫәбендә. «Магнаттарҙы төрмәгә ябалар…» тип аталған шиғырҙы Маяковскийҙар заманынан ҡалған сәйәси сатираның башҡорт ерлегендә тергеҙелгән бер өлгөһө, тиһәң дә була. Был шиғырҙың темаһын һәм идеяһын эҙләп баш ватаһы юҡ, сөнки ул ярылып ята: дәүләт ҡаҙнаһына ҡул һонған магнаттарҙы төрмәгә ябалар ҙа, яйын табып, кире сығаралар.«Ниңә әле йөҙө ҡасҡан…» – мәғәнәһе тәрәндәрәк яткан бик үткер сатирик шиғыр.

«Игенсенең донъя теүәл: һөргән ере тигеҙ. Үҙе шундай ябыҡ та ул, бәрәңгеһе һимеҙ». «Ҡаҡ һөйәккә ҡалып барған бурҙар илеме һин?..» тигән һорау ҡуя автор. Һәм шунда уҡ яуабын да ҡайтара: зарлылар иле, шарҡылдаған байҙар иле, ярлылар иле. Шиғыр авторҙың беҙ йәшәгән заманға биргән баһаһы менән тамамлана: «Хәлдәре, тим, – ер менән күк ярлы менән байҙың». «Быуаттарҙы иңдәремә йөкмәп…» тигән шиғырҙағы «Байлыҡ тигәндәре батша булғас, кем аңлаһын хәҙер шағирҙы» тигән юлдар менән дә килешмәй булмай. «Илдә ҡалҡҡан хәтәр дауылдарҙан…»дағы «Замандарҙың ипһеҙ һулышы» тигән метафора ла һәм лирик геройҙың «Көстө түктек, үтеп киткән дәһә бар ғүмерҙәр тамаҡ хаҡына», тип, асыҡтан-асыҡ таныуы ла уҡыусыны уйландырмай ҡалмаҫ.

«Замандарҙың ипһеҙ һулышы» тигән метафораны һыҙыҡ өҫтөнә алып күрһәткәс, был ассоциатив һүрәтләү сараһының Тимер Йосопов шиғриәтендә ниндәйерәк урын биләп тороуы хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китеү кәрәктер. Сөнки сағыу ҙа, йөкмәткеле лә метафора эҙләп табыу еңел эш түгел. Өҫтә, Тимерҙең яңы шиғырҙарын күҙ уңынан уҙғарғанда, метафора төшөнсәһе йыш ҡына телгә алынды. Ысынлап та, шағир был тропҡа йыш мөрәжәғәт итә. Ҡайһы саҡта, бәлки, әҙерәк арттырыбыраҡ та ебәргеләйҙер. Әммә ләкин урынлы файҙаланылған метафораның шиғырҙы ысын мәғәнәһендә шиғыр итә торған мөһим сараларҙың береһе икәнлеген инҡар ҡылыусы табылмаҫ.

Әйтелгән фекер бушҡа яңғырамаһын өсөн, «Ҡоролоҡ» тигән шиғырға (дөрөҫөрәге – шәлкемғәлер) туҡталырға мөмкин. Ул дүрт киҫәктән (йөҙҙән ашыу юл!) тора. Өсөнсө киҫәктә лирик герой, беренсе һәм икенсе киҫәктәрҙәге кеүек, үҙенең күңел торошо менән уртаҡлашыуын дауам итеп һәм ҡоролоҡ арҡаһында тәбиғәттә ниндәй үҙгәрештәр булғанын һүрәтләп, былай ти: «Йондоҙҙар ҙа, ана, ниҡерешә, табаларҙа ҡызған ҡурмаҫтай». Йәиһә «Ҙур кәүҙәһен һөйрәп төн ҡуҙғала…» тигән шиғырҙағы «Йөрәк итем – минең тыуған тупраҡ» тигән юлдарға күҙ һалайыҡ. Хәйер, шиғырҙың атамаһы ла торғаны бер метафора. Тағы бер миҫал. «Таш йорттан атылам…» тигән шиғырҙа таш йорт заман ҡабы тип аталған. Шиғыр артабан да ошондайраҡ тонда дауам ителә лә, тамамланыр алдынан «Һыҙылып таң ата, таң нурын ябынам» тигән йәнә бер метафора пәйҙә була. «Күҙем йыртып, таңға морон төртәм…» – ҡалай сәйер яңғырағандай тойола тәү башта. Диҡҡәт менән уҡый башлаһаң, уның оптимистик рух менән һуғарылған һәм йылы нур бөркөп торған

лирик шиғыр икәнлегенә төшөнәһең. Лирик герой өсөн яңы тыуған һәр көн – ҡосаҡ йәйеп, керпек ҡаҡмай ҡаршы алынған шатлыҡ һәм бәхет икән дәбаһа. Йыйып ҡына әйткәндә, ассоциатив фекерләү ысулы Т. Йосопов поэтикаһында киң урын алып торғандарҙың береһе, тиергә мөмкин. Ул бөтә осраҡта ла уңышлымы-түгелме – бынығы икенсе мәсьәлә.

Шағирҙың метафорик стиле башлыса тәбиғәт күренештәренә нигеҙләнгән. Уның шиғырҙарында йылдың бөтә миҙгелдәре менән дә осрашырға мөмкин. Ә шулай ҙа Тимерҙең күңелен яҙғы мәл үҙенә нығыраҡ тарта. Мәкәләнең башындараҡ телгә алынған өс томлыҡта ошо миҙгелгә бәйле иллеләп шиғыр табырға мөмкин. Уларға «Яҙ моңдары»» тип аталған поэма ла килеп өҫтәлә. Яңы быуатҡа сыҡҡас та шағир был яратҡан темаһынан ситләшмәй. Әгәр уның бөтә ижады дәүерендә йылдың тик яҙғы мәле сағылыш тапҡан әҫәрҙәрен бергә туплаһаң, Мостай Кәримдең «Мөхәббәттең дүрт миҙгеле» тибындараҡ яңы китап хасил булыр ине.

Шул да мәғлүм булһын: Тимер Йосоповтың теге быуатта ла, бынығында ла йылдың төрлө миҙгелдәрен һүрәтләгән шиғырҙары араһында саф пейзаж лирикаһына дәғүә итерҙәйҙәре лә осраштырып ҡуя. Шундайҙарҙың береһе – «Йондоҙҙарҙы икәү күҙәтәбеҙ…» тигәне. Унда йәйҙең «һыуҙай яҡты» аяҙ бер төнө ифрат матур итеп тасуирланған: «Йәйҙең йылы еле бер иҫкәйне, ҡабыҙҙы бит йондоҙ усағын»; «Йыһан тып-тын, елдәр ҡуҙғалыр ҙа йондоҙҙарҙың ҡуҙын таратыр ‹…› Ғаләм гөжләй, оҙаҡламай инде таң атыр». «Елдәренә ни булған һуң…» да пейзаж лирикаһына тартым бик матур шиғыр.

Пейзаж күренешенән сығып, шиғырҙың һуңғы юлында автор тәрән мәғәнәгә эйә булған фекер әйтеп ҡуя:

Талдарға ел киҙәнә лә
Тартҡылай ҙа һуҡҡылай.
Донъя ниңә матурлыҡты
Өҙгөләй ҙә йолҡколай…

Теге йәки был шағирҙың ижадын өйрәнгәндә улар араһындағы ҡайһы бер оҡшашлыҡтарға ла тап булаһың. Әлбиттә, оҡшашлыҡтарға тап булыу үҙ алдыңа ниндәйҙер маҡсат ҡуйып, махсус рәүештә эҙләнеп ултырыуҙың нәтижәһе түгел. Ул үҙенән-үҙе шулай килеп сыға. Бында кеше психологияһындағы хәтер тип йөрөтөлгән категория үҙ ролен

уйнай торғадыр, күрәһең. Ләкин, оҡшашлыҡтар булған хәлдә лә, иң мөһиме – үҙеңдекен әйтеү, үҙеңсә әйтеү. Өҫтәрәк Т. Йосопов менән Н. Нәжми араһында килеп сыҡҡан бер уртаҡлыҡ тураһында әйткәйнек инде.Шундай уҡ уртаҡлыҡты һәм яҡынлыҡты Т. Йосоповтың «Яндарыма ниңә һуңлап килдең…» менән М. Ғәлиҙең «Йылдар елә» тигән шиғырҙары араһында ла һиҙемләргә мөмкин. Т. Йосопов шиғырындағы мәлдең эңгерҙәргә ауышыуы, ғүмерҙең күҙе бәйләнеп, көн менән төндөң ҡауышыуы, миҙгелдәрҙең үрҙәренә ашыу һәм башҡа шуның кеүек метафорик сағыштырыуҙар бер кемде лә уйландырмай ҡалмаҫ, моғайын. Муса Ғәли шиғырында ла һүҙ башлыса ошо тирәлә бара: ғүмерҙең ахырына яҡынлашыуын ул күк менән ер араһының торған һайын ҡыҫыла барыуына тиңләй. Был күренеште күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын хатта.

Шиғырҙар, поэтик алымдар оҡшашлығына тағы бер миҫал. Етмеш бишен билдәләгән йылда Т. Йосопов «Эй, ғүмерҙәр!..» тигән баш аҫтында шиғырҙар шәлкеме баҫтырып сығарҙы («Ағиҙел», 2013, 5-се һан). Шулар араһында «Яр буйлап…» тигәне хәтерем төпкөлөнән Фәнил Күзбәковтың «Бала сағым» исемле шиғырын тартып сығарҙы. (Ҡыҙғанысҡа күрә тейәйем микән, ул «Ағиҙел» биттәрендә ике тапҡыр баҫылды: башта – 2003 йылдың 11-се һанында, унан һуң – 2007 йылдың 12-се һанында.) Тимер менән Фәнилдең был шиғырҙарын бер-береһенә әҙәбиәт практикаһында һирәгерәк ҡулланыла торған алым яҡынайтҡан – шиғырҙарҙың икеһендә лә лирик геройҙар үҙҙәренең төҫтәштәре (двойниктары) менән осрашалар.

«Яр буйлап…» ике киҫәктән тора. Тәүгеһендә сал уҙаманға (йәше олоғайған шағирға) «ҡаршы ярҙа, күҙен ҡыҫып, ҡап-ҡара бер малай» баҫып торғандай тойолһа, икенсеһендә инһә ул, «әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан ‹…› егет», «арғы ярға баҫҡан да», «кемгә икән ҡулын болғай?», тип аптырай. Яҙылышы-яңғырашы менән шиғыр бик матур. «Яҙ етһә лә һис иремәҫ ҡарҙар ҡунған башҡайына» тигән метафора үҙе генә лә ни тора! Яр буйында баҫып торған уҙамандың үҙ алдына һөйләнеүе хәтерем төпкөлөндә һаҡланып ҡалған икенсе бер иҫтәлекте яңыртып ҡуйҙы. Ҡайһылыр бер съезда сираттағы тәнәфестән һуң урындарыбыҙ Тимер менән йәнәш тура килгәйне. Шунда мин сығыш яһаусыларҙы мөкиббән китеп тыңлап ултырғанда, Тимер ауыҙ эсенән генә гел нимәлер һөйләп ултырҙы. Күрәһең, уға яңы шиғыр юлдары килгәндер һәм шул юлдарҙы сарлап, яйға һалып ултырғандыр. «Яр буйлап…» инһә түбәндәге юлдар менән тамамлана:

Ә бер малай
Туғай буйлап
Арғымаҡта бара елеп.
– Һау бул,– тиеп

Кулын болғай
Арғы ярҙа ҡара егет…

Т. Йосоповтың «Бар күңелем – йырҙарымда» тигән һүҙҙәрендә тәрән мәғәнә ята. Ысынлап та, шағирҙың күңел донъяһы уҡыусыға һәр саҡ асыҡ булды: теге быуатта ла, быныһында ла. Уның лирикаһының бер үҙенсәлеге генә түгел, бәлки, көсө лә шунда түгел микән әле? Дөрөҫ, шағирҙың эске донъяһы, күңел торошо, кәйеф-сафаһы бер төрлө генә түгел. «Иләү» шәлкемен асып ебәргән «Илгә ҡайттым, күҙҙең яуын ала…» тигән шиғырҙағыса раҡ:

Кыш көндәре инде әллә нисек,
Тиҙ үҙгәрә,
Кыҙыҡ холоҡло.
Аңламаҫһың:
Эскә донъяларым
Берсә аяҙ,
Берсә болотло.

Һәм ул шулай булырға тейештер ҙә. Сөнки тәбиғәт күренештәре атлаған һайын алышынып торған кеүек, кеше лә, тәбиғәт балаһы булараҡ, уның ҡылыҡтарын ҡабатлай: яҙы менән көҙөн дә, ҡышы менән йәйен дә, көнө менән төнөн дә кисереп йәшәргә дусар ителгән. Бер нисә йылдан һуң яҙылған «Ҡағылырға ҡурҡам» тигән шиғыр шуға дәлил булырлыҡ – лирик герой, әйтерһең дә, йөҙ һикһән градусҡа боролған:

Күгем аяҙ.
Тик торғанда
Киң ғаләмгә һыймайым.
Донъяның был аҡлығына
Ҡағылырға ҡыймайым.

Шағирҙың алҡынып сайҡалған күңеле уның «Хыялдарым елдә еленләне…» тигән шиғырында ла асыҡ сағылған :

Бер аҙ ғына арып талдым кеүек
Еткән саҡта ғүмер кисемә.
Әллә нисек инде:
Шатлығым да,
Һағышым да һыймай эсемә…

Тимер Йосопов – ысын мәғәнәһендә халыҡ шағиры. Уның был дәрәжәһе халҡымды һөйәм, халҡым өсөн утҡа керергә лә әҙермен, тип оран һалыуға, буш вәғәҙә биреүгә ҡайтып ҡалмай. Халҡы алдындағы яуаплылығын белдереү өсөн ул башҡасараҡ юлдар эҙләй. Ошо йәһәттән уның бер үк исемде йөрөткән ике шиғыры иғтибарға лайыҡ. Улар «Хәтер» тип аталалар. Бер үк шиғырҙың ике варианты түгелдәр – тулыһынса үҙаллы шиғырҙар. Тәүгеһендә («Ағиҙел», 2004, 7-се һан) бындай юлдарҙы уҡырға була:

Замандарҙың күҙҙәренә баҡып,
Әйтелгәнме икән әйтерем?
Бер үйлаһаң,
Иҫке байраҡ төҫлө,
Теткеләнеп бөткән хәтерем…

«Хәтер»ҙәрҙең икенсеһендә («Ағиҙел», 2009, 7-се һан) шағир үҙен борсоған һорауҙарға яуап эҙләүен дауам итә, ләкин яуап, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тыныслandырырлыҡ түгел:

Әйтелмәйсә ҡалды минең
Ярып әйтеүҙәрем.
Быуылдым мин
Һаҡлайым тип
Әҙәм хәтерҙәрен…

Интонацияһы, эске тыны менән был юлдар Назар Нәжмиҙең «Ҡарҙар яуа» тигән шиғырын иҫкә төшөрһә лә, артыҡ зыян юҡ: халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исемде йөрөткән ике шағирыбыҙ ҙа бер үк теманы (ҡатмарлы теманы!) үҙҙәренсә поэтиклаштырып, үҙҙәренсә хәл итергә тырышҡан.

2014, июль

«ЯНЫР ИНЕМ АРТЫШ БУЛЫП…»

Бынан байтаҡ йылдар элек, «Ағиҙел» журналы редакцияһы Аксаков урамындағы 62-се һанлы йорттоң 7-се ҡатында өйҙәш ҡатын хәлендә көн күргән заманда, журналдың ул саҡтағы баш мөхәррире Булат Рафиҡов бүлмәһендә икәүҙән-икәү генә әҙәбиәткә, айырыуса әҙәби тәнҡиткә,уның торошона бәйле мәсьәләләр хаҡында һөйләшеп ултырғаныбыҙ хәтергә һеңеп ҡалған. Әңгәмәнең был тема тирәһендә барыуы юҡтан ғына булмағандыр, күрәһең. Сөнки тап шул осорҙа, янып-бешеп илде үҙгәртеп ҡороруға керешкән мәлдә, әҙәби тәнҡиттең кәрәклеге-кәрәкмәгәнлегенә, уның артабан да йәшәргә хоҡуғы бармы-юҡмы икәнлегенә шикләнеберәк ҡараусылар ҙа күренгеләп ҡуйҙы.

Тәнҡиткә, уның теләһә ниндәй ижтимағи-сәйәси шарттарҙа ла мотлаҡ йәшәргә тейешлегенә Булат Заһрый улының ҡарашы ап-асыҡ һәм ярайһы уҡ ҡәтғи кеүек тойолдо миңә. Башҡортостанда ғына түгел, бөтә ил күләмендә абруй яулаған журналды етәкләүсенең фекеренсә, әҫәр ташҡа баҫылған икән, уның авторы тәнҡит һүҙе ишетергә хаҡлы, хаҡлы ғына түгел – уға мохтаж да.Әңгәмәләшемдең «тәнҡит» һүҙен дә, уның йөкмәткеһен дә шаҡтай киңерәк планда, тәрәнерәк мәғәнәлә аңлауы һиҙелеп тора ине. Грәкътарҙан килеп ингән был төшөнсәгә ул авторҙың (прозаикмы ул, шағирмы, йәки һ драматургмы) тетмәһен тетеү ҡоралы итеп түгел, бәлки, әҫәрҙең яҡшы яҡтарын да, шулай уҡ уның етешһеҙлектәрен дә күреп, шул етешһеҙлектәрҙән арыныу сараһы итеп ҡарау яғындараҡ торҙо шикелле.

Минең был хәтирәләрем һәм уйланыуҙарым юҡтан ғына түгел. Быйылғы март һанында (ҡатын-ҡыҙҙар айында) «Ағиҙел» журналы исемдәре уҡыусыға инде күптән таныш өс шағирәнең өс шәлкемен баҫтырып сығарҙы: «Ҡанат кәрәкмәй һис ҡолау өсөн…» (Таңһылыу Ҡарамышева), «Күкрәгемә ҡыҫам яңы айҙы…» (Гүзәл Ситдикова) һәм «Беҙ ҙә әле, йәбешкәндәй, ошо ерҙә ҡалабыҙ…» (Мәрйәм Күсмәева). Был шағирәләрҙең тәүге икеһе, атлаған һайын булмаһа ла, юҡ-юҡ та тәнҡитселәр теленә эләккеләп тора. Ә бына өсөнсөһө хаҡында быға тиклем (уның шиғырҙарын тәҡдим иткәндә «Ағиҙел» журналы биргән ҡыҫҡаса белешмәләрҙән башҡа), ниндәйҙер баһалама ишетергә тура килмәне миңә. Әгәр яңылышһам (Мәрйәм тураһында ҡайҙалыр мәҡәлә

баҫылып, күрмәй ҡалған булһам), бик шат булыр инем, һәм үҙемдең иғтибарһыҙлығым өсөн уҡыусы алдында ғәфү үтенергә лә әҙермен.

«Ағиҙел»гә юлды Мәрйәм Күсмәева бынан теүәл егерме йыл элек – 1995 йылдың мартында – «Балан» тигән шиғыры менән асып ебәрҙе. «Балан»ға журналдың был һанында йәнә биш шиғыр терәк булып тора ине: «“Ҡасып китһәң дә һин, сәсеп кит”, – тип…», «Һин уйлама, артыҡ ғорур, тиеп…», «Эй, ҡатын-ҡыҙ – шундай гүзәл зат һин!», «Мираҫ», «Ҡайтып йығылырлыҡ урыным бар…». Журнал биттәрендә тәүге аҙымын яһаусы шағирәгә редакция хеҙмәткәрҙәре һис тә битараф ҡалмаған. Өҫтә – «Таныш булығыҙ!» тигән саҡырыу-өндәмә, аҙтараҡ – автор тураһында ҡыҫҡа ғына белешмә. «Мәрйәм Күсмәеваның балалыҡ һәм йәшлек йылдары, – тиелә унда,– Мәләүез районы Ерек ауылында үтә. Ошо яҡтарҙың матур тәбиғәте шағирәнең ижадына ҙур йоғонто яһай. Уның тәүге шиғырҙары ла ошонда тыуа. Бөтә ижады тыуған яҡҡа, уның киң күңелле, алсаҡ, ябай кешеләренә оло һөйөү менән һуғарылған. Һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарында тормоштоң төрлө яҡтары тураһында уйланыуҙар, борсолоуҙар күҙгә ташлана».

Беләм, «Ағиҙел»гә юл ярыу – еңелдән түгел: унда ваҡ иләк аша һөҙөп кенә үткәрәләр. Шуға күрә лә, Мәрйәм Күсмәеваны тәү тапҡыр уҡыусыға тәҡдим иткәндә әйтелгән һүҙҙәр (матур тәбиғәт шағирәнең ижадына ҙур йоғонто яһай; уның бөтә ижады тыуған яҡҡа оло һөйөү менән һуғарылған) – һис тә нигеҙһеҙ түгел, тип уйлайым. Исемдәре өҫтә аталған шиғырҙар быға дәлил булырлыҡ. Рифма ҡытыршылыҡтары һиҙелеп киткеләһә лә, дөйөм алғанда улар йылы тәьҫир ҡалдыра.

Бына халыҡ мәҡәленә таянып яҙылған «“Ҡасып китһәң дә һин, сәсеп кит”, – тип…» исемле шиғыр. Ул ҙур түгел – традицион (дүртәр юллы) өс строфанан тора. Ошо бәләкәй генә әҫәрҙә лә үҙаллы, ләкин бер-береһенә бик яҡын ике тема төҫмөрләнә: тыуған төйәккә тоғролоҡ һәм быуындар күсәгилешлеге. «Мираҫ» тигән шиғырҙа был темалар артабан дауам иттерелә һәм киңерәк планда яҡтыртыла. Күләме яғынан дә күпкә айырыла был шиғыр – строфаларға бүленмәгән илле ике юлдан тора. Йөкмәткеһе йәһәтенән хатта поэмаға оҡшап китә. Ата-бабаларынан быуаттар буйына һаҡланып килгән мираҫ менән ихлас ғорурланып, шиғырҙың авторы тыуған төйәгенең ландшафтын бөтә тулылығы һәм күркәмлеге менән күҙ алдына баҫтыра ла, иң һуңынан иһә, ер-һыуға һаҡһыҙ, йыртҡыстарса ҡараш хөкөм һөргән бер замнда, уның тыуған төйәген ниҙәр көтөүе хаҡындағы борсоулы уйҙары менән уртаҡлаша:

Ата-бабай төйәк иткән ерҙе
Ташлап китерме икән яҡшы бала?
Кем һуң йәшәү биргән ғәзиз ерен
Гөлгә күммәй, һалҡын һыуға һала?!

Шулай ҙа был шәлкемдә, йәнең-тәнең, бөтә ҡан тамырҙарың менән тыуған ереңә, тыуған төйәгеңә береккәнлекте сағылдырған шиғырҙар араһында иң уңышлыһы – «Ҡайтып йығылырлыҡ урыным бар…» тигәнелер. Исеменән үк күренеп тороуынса, әҫәр үҙенең ябайлығы, халыҡсанлығы менән айырылып тора. Унда яһалма ҡупшылыҡҡа, ялтырауыҡлы һүҙҙәргә урын юҡ. «Мираҫ»тағы шикелле, шағирә тыуған төйәгенең матурлығына һоҡланып, унда ышаныслы дуҫтары булыуға шатлығын белдерә лә, әйтер һүҙен тулҡындәге юлдар менән тамамлап ҡуя:

Әсәм ҡосағылай күреп, тауға
Һыйынырмын, һыйыныр минең балам.
Үҙ еремдә йәшәп ятам әле,
Һис юғалмам бында,
Яңғыҙ калмам.

«Балан», «Һин уйлама, артыҡ ғорур, тиеп…» исемле шиғырҙарҙың да нигеҙендә тәбиғәт күренештәре ята. Тәүгеһендә автор уҡыусы иғтибарын аҡландағы ҡыуаҡта ҡыҙарып ултырған баланға йүнәлтһә, икенсеһендә ул күккә ашҡан тауҙарҙы үҙенең таянысына, аҙашҡанда юл күрһәтеп тороусы маяҡҡа тиңләй. Ләкин был шиғырҙарҙың асылы тәбиғәттә шулай матур итеп һүрәтләүгә генә ҡайтып ҡалмай. Шиғырҙарҙың икеһе лә образлы ассоциацияларға ҡоролған, шуға күрә уларҙың мәғәнәһе лә тәрәндәрәк ята, тиер инем.

Ә бына «Эй, ҡатын-ҡыҙ – шундай гүзәл зат һин!» тигән шиғыр бер ниндәй ҙә ассоциацияға мохтаж түгел – бында бөтәһе лә ап-асыҡ, бөтәһе лә аңлайышлы. Эпиграф урынына файҙаланылған «Йәшлеге Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына тура килгән апайҙарға арнала» тигән асыҡлама ла үҙенең ыңғай ролен уйнамай ҡалмаған. Ассоциатив фекерләү булмағанлыҡтан ғына шиғырҙың бәҫе китмәгән – ул башҡа һүрәтләү сараларына бай. Рефренға әйләнеп киткән тәүге юл да әҫәргә йәм өҫтәй, уның йөкмәткеһен уғата ла фәһемлерәк итә. Үҙ-үҙеңдән ҡасып ҡотола алмаған шикелле, шиғырҙың һуңғы юлдарын да, һыҙлана-һыҙлана булһа ла, ҡабул итмәй сара юҡ:

Яу ҡырҙары тынып ҡалғанда ла,
Ҡулдан төшмәй, көрәк-кәйләһе.
Затлы кейем һаман ситтә тора –
Хәйләле лә донъя, хәйләле…

Икенсе тапҡыр Мәрйәм Күсмәева «Ағиҙел» биттәрендә нишләптер биш йылдан һуң ғына (2000 йылдың авғусында) күренде. Уҡыусыны шағирә менән яҡынданыраҡ таныштырыуын дауам итеп, редакция был юлы Мәрйәм Күсмәеваның шиғырҙары республика гәзит-журналдарында баҫылып килә, йыйынтыҡтарҙа донъя күрә, тигән мәғлүмәт тә бирҙе. Әммә шағирә тураһындағы тулыраҡ мәғлүмәт – журналдың 2002 йылғы 12-се һанындалыр. Унда иғтибарҙы бындай юлдар йәлеп итә: «Тирә-яҡты уратып алған мөһабәт тауҙар, ярһыу холоҡло Нөгөш, хуш еҫле сәскәләргә бай болондар, шифалы ямғырҙар мөхитендә тирә-йүндә дан алған һунарсы олатаһы Яҡуп ҡарттың мажараларын тыңлап үҫеү буласаҡ шағирәнең күңел донъяһын байыта, айырата хисле итә. Ул бәләкәй саҡтан тәбиғәт балаһы булып үҫә, хыялға бай була. Шағирәнең “Айҙың тулған мәле” исемле шиғырҙар йыйынтығы Башҡортостан “Китап” нәшриәтендә донъя күрҙе».

Ошо мәлдән башлап, Мәрйәм Күсмәева «Ағиҙел»дең даими авторҙарынан береһе булып китте, тиһәк тә була. Яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, ул журнал биттәрендә шаҡтай йышыраҡ күренә башланы. Быуаттар ҡауышҡанда баҫылып сыҡҡан шиғырҙарын да («Ағиҙел», 2000 йыл, 8-се һан) иҫкә алғанда, уларҙың һаны хәҙер алтмыштан артып китә.

Редакция биргән белешмәләрҙә Мәрйәм Күсмәеваның тәбиғәт балаһы булып үҫеүе, уның ижадына тәбиғәттең ҙур йоғонто яһауы осраҡлы рәүештә генә һыҙыҡ өҫтөнә алынмаған, әлбиттә. Ысынлап та, туранан-тура тәбиғәт күренештәрен һүрәтләүгә арналмаған хәлдә лә, Мәрйәмдең күп кенә әҫәрҙәрендә тәбиғәт һулышын, уның көсөн дә, гүзәллеген дә тояһың. Шағирәнең күңел төпкөлөндә һаҡланған бала саҡ хәтирәләре уянып китеп, шул хәтирәләргә таянып яҙылған «Башҡорт йыры» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, һал ағыҙыусы Бөрйән егеттәре образы аша йыр менән ер бергә ҡушыла, айырылғыһыҙ бер бөтөнгә әйләнә. Теләге булған кеше бында тәбиғәт һулышын ғына түгел, тарихты ла, тарихты тыуҙырған халыҡты ла һәм шуларҙың бөтәһе менән дә ихлас ғорурланыуҙы ла, бер үк ваҡытта тәрән һыҙланыуҙы ла тойомламай

ҡалмаҫ, моғайын. Әйткәндәрем буш һүҙ булып яһғырамаһын өсөн, алты строфанан торған ошо шиғырҙан өсөһөн бында күсерергә булдым:

Юҡ, был ябай табын түгел ине –
Йырҙар ҡунаҡланы түренә.
Һалсы ағайҙар –
Бөрйән егеттәре
Моңдар һалып китте күңелгә.

Был һағышлы йырҙар тәүге тапҡыр
Сиртте минең күңел ҡылдарын,
Шул көндө мин моңло
башҡорт йырын
Күҙ йәштәре аша тыңланым.

Кескәй йөрәгемә шул көндәрҙән
Һағыш инде, инде әрнетеп,
Бармы икән тағы бер халыҡта
Дала иңрәтерлек моңло көй?:

«Башҡорт йыры»нда тәбиғәт һулышы, кеше менән тәбиғәт араһындағы күҙгә күренмәҫ бәйләнеш йыр аша кәүҙәләндерелһә, «Күстәнәс», «Ҡарт алмағас яныңда», «Бөрйән туғайы», «Кеше ғүмере» тигән шиғырҙарҙа ул башҡасараҡ хәл ителә. Лирик героиняның атаһы күстәнәскә алып килгән төрлө үләндән, йәйге аҡланды хәтерләтеп, бүлмәләргә хуш еҫ тулыуы ниндәй матур итеп һүрәтләнгән! Биографик белешмәләргә ҡарағанда, лирик героиня артында шағирә үҙе баҫып торғанлығы һиҙелһә лә, поэзия талаптарына буйһоноп, уны барыбер ҙә лирик героиня тип атарға тура килә. Әммә, кем булһа ла булыр, шағирә үҙеме, әллә уның лирик героиняһымы, улар яһаған һөҙөмтә фәһемле:

Сит ер сәйҙәре кәрәкмәй,
Эсәйем үлән сәйен,
Ыжғыр буранлы ҡышта ла
Ташламаҫ мине йәйем.

«Бөрйән туғайы» ла ошондайыраҡ сүрәттәге шиғыр. Ул күләме йәһәтенән дә «Күстәнәс»кә тиң. Был шиғырҙы мин кешене тәбиғәт фо-

нында ғына түгел, бәлки, тәбиғәт ҡосағында һүрәтләгән уңышлы әҫәрҙәрҙең береһе, тиер инем. Башҡорт шиғриәте хаҡында һүҙ алып барғанда, йыш ҡына рус поэзияһына һылтанма яһауым бәғзеләргә бик оҡшап та бөтмәүе ихтимал, ләкин «Бөрйән туғайы»н Бунин, Есенин кимәлендә яҙылған әҫәр тиһәм, артыҡ ҙур хата булмаҫ. Һүҙҙәр, тере организм шикелле, бер-береһенә ылығып торған шиғырҙан юлдар йәиһә строфалар һурып алыу еңел булмағанлыҡтан, Мәрйәмдең «Бөрйән туғайы»н, уҡыусынан ғәфү үтенеп, бында тулы килеш, түкмәй-сәсмәй килтерергә булдым:

Бөрйән туғайында муйыл тирәм,
Була икән шундай хозурлыҡ!
Күк йөҙөндә болот әҫәре юҡ,
Тирә-йүндә – тынлыҡ, бер кем юҡ.
Уйҙар тыныс. Юҡ һис хәүеф-маҙар,
Булмаһа ла һис кем янымда.
Рәхәтләнеп бөгөн муйыл тирәм
Мин Бөрйәндә, Изге ярында.
Муйыл бәлешенән ауыҙ итеп
Сәй эскәндә ҡышын, моғайын,
Йөҙәр саҡрымдарҙан өй түренә
Килеп инер Бөрйән туғайы.

«Күстәнәс» менән «Бөрйән туғайы»нан айырмалы булараҡ, «Ҡарт алмағас янында» менән «Кеше ғүмере»ндә моңһоуыраҡ хистәр һәм уй-фекерҙәр өҫтөнлөк итә. Шиғырҙарҙың икеһе лә метафорик сағыштырыуҙарға бай. «Ҡарт алмағас янында»ның лирик героиняһы, мәҫәлән, күҙ алдында йылдан-йыл ҡартайған атаһын иҫләп, уны, ботаҡтарын дауыл-ел аҡтарғас, татлы емештәре йыраҡ-йыраҡтарға тәгәрләгән ҡарт алмағасҡа тиңләй. Атаһын-әсәһен юҡһынып һәм улар иҫән саҡта гөрләп торған ғаилә тормошон хәтерләп, лирик героиня, уның менән бергә, бәлки, шағирә үҙеләлер, былай ти:

Алма ымһындырмай – һеҙҙе күреп,
Бергәләшеп бер ултырғы килә;
Сирендәрҙең хуш еҫенә иҫереп,
Бер аҙ бала саҡҡа ҡайтҡы килә.
Әсәй килһен ине көлә-көлә,

Атай бер һыйпаһын ине баштан.
Бушатыр ҙа инек самауырҙы,
Ауыҙ итеп тел йотмалы аштан…

«Кеше ғүмере»ндә моңһоу хистәр һәм уй-фекерҙәр уғата ла көсәйгәндәй һәм тәрәнәйгәндәй шикелле. Метафорик сағыштырыуҙар тора-бара фәлсәфәүи төҫ ала. Әҙәм балаһы ерҙә йәшәү өсөн күпме тир, көс түкмәһен, донъя ҡыуып, күпме ут-һыу кисмәһен, бер мәл уға барыбер бөтәһен дә ташлап китергә тура килә, ә тормош үҙгәрешһеҙ дауам итәсәк. Мәрйәмдең лирик героиняһына айырыуса бейек тауҙарҙы, гөл-сәскәле болондарҙы, һыуһындарҙы баҫҡан инештәрҙе, зәңгәр күкте, яҡты ҡояшты ташлап китеү йәл тойола икән, һис тә ғәжәп түгел – ул бит тәбиғәт балаһы. (Йәйәләр эсендә әйтәйем: ғүмерҙең тиҙ, һиҙҙермәйсә үтеүе хаҡында яҙылған шиғырҙарҙы күп уҡыным, әммә Мәрйәм шиғырындағыса боролош яһалғанды хәтерләмәйем.)

«Ашыҡма, ҡыш!», «Миҙгелдәр», «Ҡунаҡ йыя август» тигән шиғырҙарында автор йәнә яҡты хистәргә бирелә. Шунлыҡтан был юлы уның лирик героиняһы ла үҙенең күтәренке, көр тауышы менән айырылып тора һәм мотлаҡ уҡыусы күңелен яулай. «Ашыҡма, ҡыш!»та, мәҫәлән, ул көҙҙөң ҡырыҫ елен үгәй атай тип атай ҙа, тамамланмаған эштәре барлығына һылтанып, бураҙлы ҡыштың ҡабаланмауын үтенә. Дүртәр юллы ике строфанан төрған был шиғыр ифрат матур яңғырай. Икенсе строфала һүҙ, әбейҙәр сығыуғында иркәләнеп, япраҡ ялҡынына күмелгән лирик героинянының ҡулдарын миләш ҡуҙы йылытыуы хаҡында бара. Шиғыр «Бирешмәнем ҡыштың һалҡынына» тигән юл менән тамамлана.Тик, ҡыш, килмәҫ борон, үтеп тә киткәнме ни? «Бирешмәмен ҡыштың һалҡынына» тип тамамлағанда, логик яҡтан дөрөҫөрәк булмаҫ ине микән, тип уйлап ҡуйҙым.

Йыл миҙгелдәре хаҡында ла беҙҙә шиғырҙар яҙылмай тормай, яҙыла. Ә бына М. Күсмәеваның «Миҙгелдәр»е йылдың дүрт мәленә бирелгән характеристиканың (шиғырҙың дүрт строфанан тороуы ла юҡтан ғына түгел, әлбиттә!) аныҡлығы, теүәллеге һәм шул уҡ ваҡытта образлығы менән күңелде биләй. Яҙ, уныңса, – «ун һигеҙе яңы тулған ҡыҙый – шатлыҡтарын ихлас өләшә. Көйһөҙләнеп ала – йәш бит әле! Нишләһә лә уға килешә». «Йәй – еремдең бигерәк иркә ҡыҙы, алын-гөлөн кейеп күлдәктең, йәйғор-ҡаш һикертеп, айҙай балҡып, һылыулана бара көндән-көн». «Көҙ – йәшлеге менән һаубуллашып, берсә көлөп,

берсә моңһоулап, сабыр ғына ғүмер иткән ҡатын». «Ҡыш – сал сәсле әбей» һ. б.

«Ҡунаҡ йыя август» тигән шиғырҙы «Миҙгелдәр»ҙең үҙенсә бер дауамы, тиергә мөмкин. Был шиғырында автор йәйге миҙгелдең һуңғы айын айырып алған да, бөтә иғтибарын уға йүнәлткән. Һөҙөмтәлә матур ҙа, фәһемле лә әҫәр тыуған. «Алтын һалам эҫкерттәре, таралған икмәк еҫтәре», «Уңған август ҡымыҙ бешә, еләктәрҙән ҡаҡтар ҡоя», «Алһыу йөҙлө алмалары, өлгөрөп тә еткән ҡыҙҙай…», «Күгелйем күҙ – бөрлөгәндәр туғай ситләп теҙелгәндәр. Муйыл, балан, гөлйемеше ваҡытында өлгөргәндәр», «Үрелеп һаман үргә үрләй еңел-елпе ҡомалағы», «Гәрәбәләй баҙрай миләш, тәлгәштәрен һоноп тора» кеүек сағыу һәм бай йөкмәткеле сағыштырыуҙар ауылды яҡшы белгән, уны үҙ иткән ҡәләм аҫтынан ғына сыға ала торғандыр ул. Ошо шиғырҙы хозурланып уҡып ултырғанда, мәктәптәрҙә балаларға хеҙмәт тәрбиәһе биреп, политехник белем нигеҙҙәренә өйрәткән осор хәтергә төшөп ҡуйҙы. «Ҡунаҡ йыя август» тигән шиғырҙы мәктәп программаһына индереп, уны башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә лә, кластан тыш үткәрелә торған тәрбиәүи сараларҙа ла файҙаланырға булыр ине. Минеңсә, балаларҙа тәбиғәтте аңлау һәм уны тойоу хисе тәрбиәләүҙә, уларға эстетик аң нигеҙҙәрен һеңдереүҙә был шиғырҙың потенциалы әйтеп бөтөргөһөҙ зур. Шиғырҙың һуңғы строфаһы уҡыусыла, август айы ғына түгел, йылдың бөтә миҙгелдәре лә берҙәй ҡәҙерле, тигәнерәк фекер уята:

Һәр бер мәлдең – үҙ зауығы,
Инанысы, ҡанундары.

Август бөгөн ҡунаҡ йыя,
Ҡотло булһын табындары.

Тәбиғәт күренештәре аша лирик героиняның күңел торошон сағылдырған һәм уның характер үҙенсәлектәрен яҡтыртҡан шиғырҙары ла юҡ түгел Мәрйәмдең.. Шундайҙарҙың ҡайһы берҙәре («Балан», «Һин уйлама, артыҡ ғорур, тиеп…», «Ашыҡма, ҡыш!») өҫтәрәк телгә алынғайны инде. Уларға яңыларын да өҫтәргә мөмкин. Бында «Үҙ һуҡмағымды ярам», «Йәйҙәр хәҙер миңә йәнәш түгел», «Йәй ғүмере ҡыҫҡа», «Иртә әле» тигәндәренә бер аҙ туҡталып китһәк, яҙыҡ булмаҫ, тип уйлайым.

«Үҙ һуҡмағымды ярам» тигән шиғырҙы, мәҫәлән, үҙ фекереңде уҡыусыға кинәйә менән еткереүҙең матур бер өлгөһө, тиер инем. Дүрт кенә строфанан торған был шиғырҙың тәүге яртыһында ҡыштың йәш ҡар яуған мәле һүрәтләнә. Артабан иһә, әҫәрҙең икенсе яртыһында, көтөлмәгән боролош яһала – лирик героиняның ҡайһы бер кешелек сифаттары һыҙыҡ өҫтөнә алына. Был сифаттарға авторҙың ижад принцибы йәшерелгәнлеген аңлауы ҡыйын түгел, әлбиттә:

Атлауы һәләк күңелле
Шығырҙап торған ҡарҙан.
Тапалған юлдан барыу юҡ –
Үҙ һуҡмағымды ярам.

Һис тә еңел түгел икән
Яңғыҙың көрт ярыуы.
Күңелгә бирә йыуаныс
Үҙең булып ҡалыуы.

Бер тирәлә ижад ителгән «Йәйҙәр хәҙер миңә йәнәш түгел», «Йәй ғүмере ҡыҫҡа», «Иртә әле» тигән шиғырҙар яңғыраштары менән дә, йөкмәткеләре йәһәтенән дә бер-береһенә бик яҡындар. Хатта күләмдәре буйынса ла бер тигеҙ. Уларҙың өсөһө лә аллегорик алымға ҡоролған – өсөһөндә лә һүҙ лирик героиняларҙың йәйе (тимәк, йәшлеге) үтеп китеүе һәм көҙгә (тимәк,ҡартлыҡҡа таба) аяҡ баҫыуҙары хаҡында бара.

Йәйҙәр инде миңә йәнәш түгел,
Тоғро юлдаш – илаҡ көҙ генә.
Күңелемдә көләкәс ҡыҙ йәшәй.
Кырау сәсле ханым – көҙгөлә.
(«Йәйҙәр хәҙер миңә йәнәш түгел»).

Көҙҙәремдең торам тупһаһында,
Тырышығыҙ мине аңларға.
Йәйҙәрҙә бит озаҡ ҡалып булмай,
Көҙ тоташа йомшаҡ ҡарҙарға.
(«Йәй ғүмере ҡыҫҡа»).

«Иртә әле»нең лирик героиняһы, дөйөм алғанда бер үк ҡалыптан һуғылған булһа ла, өҫтә килтерелгән шиғырҙарҙың героняларынан үҙенең сәме, ярһыу холҡо менән айырылып тора. Ул тиҙ генә ваҡыт ҡарамағына буйһонорға йыйынмай:

Йәп-йәш кенә ҡалыр кеүек инек,
Ярһыу аттай янып йәшәлде.
Инде беҙ йөрөгән һуҡмаҡтарға
Көҙ һары келәмен түшәне.
. . . . . .
Йомшаҡ, хәтфә һуҡмаҡ һайламайым,
Юлдарым да ауыр, кәртәле.
Ҡосағына инәм дауылдарҙың –
Тыныслануға, тим, иртә әле.

М. Күсмәева шиғриәтендә мөхәббәт темаһы ла ситләп үтелмәй. Тик уның был темаға арналған шиғырҙары күп осраҡта моңло-зарлы, болоҡһоу хистәр менән һуғарылған шикелле. (Бәлки, миңә генә шулай тойолалыр.) Нимә һуң ул мөхәббәт? Уның асылы ниҙән ғибәрәт? Ни өсөн йыш ҡына уның ғүмере ҡыҫҡа? Һигеҙ юлдан торған «Һөйөү-һөйөлөү бәхетен…» тигән шиғырҙы уҡып сыҡҡас, шундайыраҡ һорауҙар тыуыуы мөмкин. Әммә әлегә уларға яуап юҡ. «Күпме усаҡ янған гөлтләп мөхәббәттең яҙҙарында. Ә ниңә һуң ҡайнар хистәр һүнә йылдар ҡарҙарынан?» тигән уйланыуҙары менән генә сикләнергә мәжбүр автор. (Юл ыңғайында әйтеп үтәйем: «йылдар ҡары» тигән метафорик образ, мөхәббәт тойғоһона ҡарағанда, ғүмерлерәк булып сыҡты. Башта уны Назар Нәжми «Ҡарҙар яуа» исемле шиғырында файҙаланғайны. Һуңыраҡ Марис Нәзиров үҙенең шиғырҙар китабын «Йылдар ҡары» тип атаны. Матур, образлы сағыштырыу Мәрйәмдең дә иғтибарын йәлеп иткән. Эҙләй китһәң, был метафораның башҡа шағирҙарыбыҙҙа ла осрап ҡуйыуы ихтимал.)

М. Күсмәеваның мөхәббәт лирикаһы үҙенең эскерһеҙлеге, лирик героиняның күңел түрендә яралған тойғоларҙың ихласлығы менән айырылып тора, тиһәм, хаталанмамдыр кеүек. Быға байтаҡ шиғырҙар миҫалында ышанырға мөмкин. Әйтәйек, «Тик бер ҡараш» тигәненең лирик героиняһы мөхәббәткә сарсаған («Ҡоро елдәр, түлһеҙ болот йөҙә, ә күңелем ямғыр һағына. Бәғерҙәрем – телгеләнгән дала шифалы ла ҡараш көтөүҙән») ханым шикеллерәк күҙ алдына баҫтырылһа, «Хәтирә»

исемле шиғырҙың лирик героиняһы иһә «Их, бар ине инде, их, бар ине… Туҡылғайны донъя һөйөүҙән» тигән уфтаныуҙары менән уртаҡлашырға мәжбүр.

«Онотолған хат» шиғырындағы лирик героиняның – күңелдәре ҡылдан нескә сая ҡатындың – хәл-әхүәле уғата ла ҡыҙғанысыраҡ. Оҙаҡ йылдар дәфтәр араһында ятып, һарғайып бөткән хат табылғас, уның бынан күп йылдар элек кисергән уй-хистәре уянып киткәндәй була һәм ул күңел тыныслығын юғалта:

Онотоп та бөткән кеүек инем,
Йәшәй алмам хәҙер мин тыныс.
Яңғыҙлыҡҡа өйрәнелгән инде,
Мөхәббәтһеҙ йәшәү – ҡурҡыныс.

Үҙ-үҙемде мин йыуатҡан булам:
Ғүмер алда әле, бул түҙем!
Балауыҙын һыға тышта ямғыр.
Мин шайым өйҙә… бер үҙем.

Мәрйәмдең был шиғырын уҡыусы «Аҡиҙел» журналының 2004 йылғы 7-се һанында таба ала. Ул шағирәнең «Ҡаршылайыҡ таңды…» тип аталған шәлкемен асып ебәргән. Шәлкем туғыҙ шиғырҙан тора. Уларҙың бөтәһенә лә тип әйтерлек «мөхәббәт еле» ҡағылған. Ләкин был «ел», минеңсә, еңел-елпе бөҙрә һүҙҙәргә урын ҡалдырмаған – бында гел тормршта була торған хәл-ваҡиғалар ғына тасуирланған. Түбәндәге дүрт юллыҡ шиғыр (уның исеме юҡ) туранан-тура «Онотолған хат»тың дауамы шикелле яңғырай:

Нисек былай йәшәй алдым икән? –
Һынһеҙ үткән күпме сылбыр-йылдар.
Мөхәббәтһеҙ йылдар, – әйтерһең дә,
Һыуы ҡороп, тынып ҡалған йылға.

Шәлкемгә ингән «Икәү генә», «Һағынырһың әле», «Алданырға ине…», «Яғайыҡсы усаҡ…», «Көтәм әле» тигән шиғырҙар ҙа уйсан уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ. Сөнки был шиғырҙарҙың лирик героинялары кисергән борсолоуҙар һәм юҡһыныуҙар уға ла таныш булыуы ихтимал. Әйтәйек, һөйгәне менән икәүҙән-икәү генә ҡалғанда

лирик героиняға күк күкрәп йәшен йәшнәгәндәй һәм шул мәлдә донъялыҡтың бөтә тиҫкәрелектәре онотолоп торғандай булған икән – быға нисек ышанмайһың инде? Еңел генә килгән мөхәббәткә табынмауын да, бәғерен тырнап, алсаҡ хистәрен сатнатырҙай хыянатты ғәфү итә алмауын да йәшермәй ул.

Әммә «мөхәббәт еле»нең ниндәйе генә арҡаһынан һыйпап уҙмаһын һәм үҙ юлында ниндәйе менән генә осрашырға яҙмаһын, лирик героиня барыбер ҙә үҙе булып ҡала. Шуға ла уның асыҡтан-асыҡ «Һөйөү һуты менән һуғарылған һәр тамырым, һәр бер күҙәнәк» һәм «Тағы ла бер алданырға ине, үтмәҫ элек ярһыу бурандар» тип иҡрар итеүендә бер ниндәй ҙә арттырыу йә кәметеү юҡ һымаҡ. Алтын вәғәҙәләргә алданып, гәлсәр хыялдары ватылһа ла, «үткән йылдар йөгө – еүеш утын»ды хәтерләтһә лә, «аҙаҡ ни булһа ла, шул булыр» тип, юлдары ике яры айырылған йәре менән ярҙа усаҡ яғып, таңды бергә ҡаршыларға теләүен дә бер ниндәй икеләнеүһеҙ, ҡуранан-тура ярып һала ул. Шулай ҙа был шәлкемдә иң көслө яңғыраған, күләме яғынан әллә ни зур булмаһа ла, хис-тойғоларға ифрат бай шиғыр – «Көтәм әле»лер. Лирик героиня болоҡһоу уйҙар диңгеҙендә йөҙһә лә, ул күңел төшөнкөлөгөнә бирелергә йыйынмай :

Көтәм әле, көтәм! Көтөүҙәрҙән
Балҡып китә һүнгән өмөттәр.

Мин бәхетле әле, сөнки алда
Һөйөү таңы атыр минут бар.

Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеү урынлы булыр: М. Күсмәеваның әле күҙ уңынан уҙғарылған мөхәббәт лирикаһында йыш ҡына тәбиғәт күренештәре лә сағылып китә. Улар, һис шикһеҙ, лирик героиняның образын тулыраҡ төҫмөрләргә ярҙам итә. Ә бына «Ағиҙел» биттәрендә уның һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан шиғырҙарында, һөйөү һәм һөйөлөү тойғоһоноң ҡылдан да нескә эске, йәшерен серҙәре хаҡында һүҙ барғанда,тәбиғәт күренештәренә ҡарағанда, психологизмға тартым алым өҫтөнлөк итә, тиер инем. Был өҫтөнлөктө «Хискә тулған», «Булмай яраштырып», «Ә мин көтәм әле», «Табынмайым» тигән шиғырҙар миҫалында шәйләргә мөмкин.

Ун ике генә юлдан торған «Хискә тулған» исемле шиғырҙа, мәҫәлән, шаулап үҫкән урман да, хуш еҫле сәскәләргә күмелгән

болон да, гөрләп аҡҡан шишмә лә, ярҙарына һыймай урғылған йылға ла юҡ – бары тик лирик героиняның күңел донъяһы ғына бар. Ошо ун ике юлға уның бөтә булмышы һыйған. Шиғырҙың аҙағы шатлыҡлы уйҙар уятмаһа ла, лирик героиняның сабырлығын тоймау мөмкин түгел:

Тоғролоғом һаҡлап оло хискә,
Килеп еттем инде ғүмер-кискә.
Көтөүҙәрем, ахыры, бушҡа булған…
Тик күңелем һаман хискә тулған.

Әйткәндәй, ғәме, күңел күге мөхәббәткә тулы лирик героиняның ғүмере ни сәбәптән былай бушҡа үтеүе «Булмай яраштырып» тигән шиғырҙа ярайһы уҡ ышандырырлыҡ итеп асып бирелгән:

Албырғатып, йәнә аҙаштырҙың…
Өйөрөлтөп, йәнә аҙаштырҙың.
Беҙ, моғайын, һөйөү донъяһында –
Ут менән һыу – булмай яраштырып.

Мәрйәм Күсмәеваның мөхәббәт лирикаһында ҡолаҡҡа йыш ҡына салынған мотивты түбәндәге юлдар ҙа раҫлап тора:

Ҡасан булһа ла бит бер килерһең,
Мин көтөргә әҙер тағы ла.
Өйөрөлөп, йәнә буран көҫәп,
Сәстәремә ҡарҙар һарыла.
(«Ә мин көтәм әле»).

Йөрәгемдә һиңә, бары һиңә
Иң ҙур урынды мин бүлгәнмен.
Һыйынғанмын һалҡын вулкандарға,
Күрмәйенсә уның һүнгәнен…
(«Табынмайым»).

Тәбиғәт ҡосағында тәбиғәт балаһы булып үҫкән шағирәнең лирик героиняһы – патриотик рухта тәрбиәләнгән шәхес. «Башҡорт йыры» тигән шиғырҙағы шикелле (был шиғыр тураһында өҫтәрәк һүҙ

булғайны инде), ул тыуған төйәген генә түгел, тыуған республикаһын һәм тыуған илен дә башҡа бер төйәккә лә, ер-һыуға ла алмаштырырға риза түгел. Ябайлаштырып әйткәндә, Мәрйәм Күсмәева шиғриәтендә патриотизм идеяһы нимәгәлер өндәү, ҡайҙалыр саҡырыу юлы менән түгел, ә тормоштоң үҙенән тотоп алынған ғәҙәти күренештәр аша үткәрелә. Исемһеҙ яҡташына адресланған «Йәнтөйәктә сыңлар һуңғы саз» тигән шиғыр, ҡарап тороуға артыҡ ҙур иғтибарға дәғүә итмәгәндәй тойолһа ла, уның йомғаҡлаусы строфаһы был тойғоно юҡҡа сығара ла ҡуя:

Алтындарға күмелеп йәшәһәң дә,
Тыуған ерҙән яҡшы ер булмаҫ.
Әллә ҡайҙа бәхет эҙләһәң дә,
Йәнтөйәктә сыңлар һуңғы саз.

«Сит яҙ күңелемә ситен булды…» тигән шиғырҙа ла ошондай уҡ мотив яңғырай. Ҡара дингеҙ ярҙарында ни тиклем генә күңелле булмаһын, «йөрәгем ҡалған Нөгөштә» тип танырға мәжбүр лирик геройиня. Тыуған яғын сикһеҙ һөйөүен һәм уның менән ғорурланыуын ул түбәндәге юлдарҙа белдергән:

Мин һағындым һандуғастар моңон,
Кымыҙынан килде исергем,
Муйыл сәскәһенән айный алмай,
Туғайҙарҙы килде бер гиҙгем…
. . . . . .
Быйылғы яҙ һиндә булмағанға,
Тыуған яғым, шундай үкенәм.
Сит ерҙәрҙә һинең ҡәҙереңде
Нығыраҡ аңланым мин, бергенәм.

Төркиәнең ҡасандыр Памуккале тип аталған боронғо ҡалаһына арнап яҙылған шиғырҙа был мотив уғата ла көслөрәк яңғырай:

Памуккале – мамыҡ ҡала,
Ташҡарың да мамыҡтай.
Сит ерҙәрҙә тороп ҡалһам,
Көнөм булыр тамуҡтай.

Һуңғы ваҡытта телебеҙгә һәм бөтә булмышыбыҙға инеп киткән «йәнтөйәк» төшөнсәһенең тәрәндә ятҡан тамырҙарын һәм уның ысын мәғәнәһен «Иҫке йорт», «Күперленең гәлсәр шарлауығы», «Мәскәү йүкәләре», «Ҡырлы ҡурай», «Арҡайым ҡосағында», «Бөргәнәктәр йыры» тигән шиғырҙарҙа ла һиҙемләргә мөмкин. Шуларҙың «Мәскәү йүкәләре» тигәненә туҡталып китһәк, яҙыҡ булмаҫ.

Әйткәндәй, М. Күсмәеваның «Мәскәү йүкәләре» үҙенең атамаһы менән келт итеп Н. Нәжмиҙең киң билдәле «Өфө йүкәләре» исемле шиғырын (һуңға табан ул сәхнә түрҙәренән, телевизор экрандарынан һәм радио тулҡындары аша йыш ҡына ишетелеп торған йырға әйләнеп китте) иҫкә төшөрә. Ләкин был – атамалар яҡынлығы ғына. Асылда иһә, үҙҙәренең идея-эстетик йөкмәткеләре йәһәтенән, уларҙың араһы ер менән күк араһы шикелле. Әгәр «Өфө йүкәләре»ндә йыл миҙгелдәре аша кеше ғүмеренең төрлө осоро (яҙы, йәйе, көҙө) сағылдырылған булһа, «Мәскәү йүкәләре»ндә тәбиғәттең кескәй генә бер күренеше аша әлеге лә баяғы шул йәнтөйәк образы алға килтереп баҫтырыла. Дөрөҫ, күрер күҙгә Мәскәү йүкәләре менән Өфө йәкәләре араһында әллә ни айырма ла юҡ һымаҡ. Тик, баш ҡала урамдарында йөрөгән лирик героиняға Мәскәү йүкәләре яңалмараҡ төҫлө тойола, сөнки уларға бал ҡорттары һарылып бал йыймай, сәскәһе лә хуш еҫ һипмәй генә ҡойола. Шуға күрә героинаның да, авторҙың да тыуған ере, уның бай тәбиғәте менән ихлас ғорурланыуы уҡыусыла бер ниндәй ҙә аңлашылмаусанлыҡ тыуҙырмай:

Иҫкә төштө тыуған еремдәге
Йүкәләрҙең сәскә атҡаны.
Атайымдың йәп-йәш бал айыртып,
Оло тәпән менән ҡайтҡаны.

Үҙ ереңдең ябай ағасы ла
Әсәң кеүек ғәзиз сит ерҙә.
Хуш еҫтәрең, йүкә, тоймаһам да,
Дауыл уяттың һин күңелдә.

М. Күсмәева ижадында тәбиғәт күренештәре башлыса лирик героинаның патриотик хистәрен, мөхәббәт ялҡыны менән тулы эске донъяһын сағылдырғанда файҙаланылһа ла, арала пейзаж лирикаһына тартым шиғырҙар ҙа осрап ҡуя. «Төнгө этюд» менән «Диңгеҙ»

тигәндәрен шундайҙар иҫәбендә, тиер инем. Уларҙың икеһендә лә авторҙың күҙәтеүсәнлеге, образлы фекерләү үҙенсәһе ярылып ята. Шиғырҙарҙың икеһе лә троптарға бай: метафора менән метонимия ла, сағыштырыуҙар менән эпитеттар ҙа етерлек унда. Әйткәндәрем буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, «Төнгө этюд»тың тәүге һәм һуңғы строфаларын уҡыусыға тәҡдим итмәксе булдым:

Ғаләмдәрҙән үрелеп йондоҙ тирәм –
Еләкле лә аҡлан күк йөҙө.
Төн күлендә алтын балыҡ уйнай,
Йәһәт кенә үҙен ал һөҙөп.

. . . . . .

Төнө буйы Ер-табаҡҡа тама
Саҡматаштай сағыу йондоҙҙар.
Ҡояш сыҡҡас, табаҡ өтемһерәр, –
Ҡасып бөтөр таңда шуҡ нурҙар.

Тыуған төйәгенә, уның бай тәбиғәтенә мөкиббән киткән шағирә Мәрйәм Күсмәева тирә-йүндә барған иҗтимағи-сәйәси ваҡиғаларға ла битараф түгел. Дөрөҫ, был темаға арналған әҫәрҙәре әлегә күп түгел, әммә булған тиклеме лә авторҙың донъяға ҡарашын, кәйеф-сафаһын, күңел торошон самаларға ярҙам итерҙәй. «Өшөгәндә» тигән шиғырҙың лирик геройняһы ауыҙынан сыҡҡан бына был һүҙҙәр, мәҫәлән, кемдәрҙе генә уйға һалмаҫ икән:

Был тормоштоң һалҡындары һеңә,
Ҡырыҫлығы үтә үҙәккә.
Золомдарҙан ерем шартлар хәлдә,
Мәкер ҡора көн дә тоҙаҡты.

Мәкер ҡорған тоҙаҡтың аяныслы бер күренеше «Ҙур ҡалала, йылыныр урын тапмай…» тигән шиғырҙа бик асыҡ кәүҙәләндерелгән, юғиһә. Йылыныр урын тапмаған берәҙәк ирҙе күҙ уңында тотоп, автор бер-бер артлы «Мәхлүк бесәй, йортһоҙ эт хәленә нисек төштөң, кеше?», «Емтек ейгән ҡозғон көндәренә нисек төштөң, кеше?» тигән һорауҙар яуҙыра.

«Башҡорт иле» тигән шиғырҙағы борсолоуҙарға, бошоноуҙарға ла ҡолаҡ һалмай үтеү мөмкин түгел:

Тере ҡалырмы, тим, урмандарың,
Теле булырмы, тим, халҡымдың,
Үтә ябайлығың, йомартлығың
Алмаҫмы, тим, бер саҡ алҡымдан?

Башҡортостандың үткәндәре «ҡанлы-йәшле тарих» булғанлығын яҡшы үҙләштергән шағирә был теманы «Ағиҙел»дең быйылғы март һанында донъя күргән «Диңгеҙ менән һөйләшеү», «Темәстә бирелгән ант», «Иң тыңғыһыҙ мәлдә дилбегәне…» тигән әҫәрҙәрендә артабан дауам итә. Йөкмәткеһе йәһәтенән дә, эшләнеше буйынса ла был әҫәрҙәргә һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә. «Темәстә бирелгән ант» тигәне поэманан килтерелгән өҙөккә оҡшап тора хатта.

«Ағиҙел» журналының төрлө йылдарҙағы төрлө һандарында баҫылып сыҡҡан «Туңған донъяла», «Шәфәктәргә манып шаршау элдем…», «Һүҙ ҡәҙере», «Әйләнеш», «Шағирәләр», «Әбей сыуаҡтары балҡып үтте…», «Аҡыл алдан йөрөһә, ер йөҙөндә…», «Тәүге ҡар ул – тәүге һөйөү кеүек…», «Бала күңелдәре», «Алтындан ҡиммәт ирек», «Йөрәктең уртаһында», «Ябай икән», «Оҙон юлда» тигән шиғырҙар ҙа үҙҙәренең авторына ҡыҙыллыҡ килтермәҫ, тип уйлайым. Ә бына «Тәҙрә йыуа ҡыҙҙар», «Мейес», «Мунса» тигәндәре минең хәтерем төпкөлөндә йәнә Назар Нәжмиҙең «Һәр нәмәлә шиғыр ята, әгәр күрә, тоя белһәң, күргәнеңде йөрәгеңдә шиғыр итеп ҡоя белһәң» тигән шиғри юлдарын ҡыбырлатып ҡуйҙы. (Ҡанатлы һүҙҙәргә әйләнеп барған был юлдарға тағы мөрәжәғәт итеп, үҙемде үҙем ҡабатлағаным өсөн уҡыусынан ғәфү үтенәм.) Ысынлап та, тәү ҡарамаҡҡа, тәҙрә йыуыусы ҡыҙҙар хаҡында ниндәй шиғыр яҙырға мөмкин инде? Ябай нәмәләрҙән дә поэзия таба белеү маһирлығын булһа, мөмкин икән шул! Тәҙрә йыуыусы ҡыҙҙарҙың «көмөш шөңгөрҙәй» сыңлап торған тауыштарын ишетеп, «Был көлөүҙә күпме наҙ, йылылыҡ! Ҡотоп халҡындарын еңерҙәй», тип һоҡлана автор. Мин иһә, авторҙан рөхсәт-маҙар һорап тормайынса ғына уның һүҙҙәрен файҙаланып, «күпме наҙ, йылылыҡ» бөркөп тора был шиғырҙан, тиер инем. Күпме йәнле сағыштырыуҙар һәм сағыу эпитеттар бында! Иң мөһиме, ниндәй тәрән мәғәнә төрөлгән шиғырҙың һуңғы ике юлына! Әлегә быялалай бер ҡатлыраҡ героиняларын ҡурсалап, бына нимә ти шағирә:

Күңелдәре хас быяла инде –
Вата күрмә, һаҡһыҙ ҡағылып.

Ниһайәт, «Артыш» тигән шиғыр. Яңы быуаттың тәүге йылдарында донъя күргән («Ағизел» журналы, 2002 йыл, 12-се һан). Строфаларға бүленмәгән ун алты юл. Шиғырҙың исеме бер аҙ һағайта-һағайтыуын. Миләш, балан, муйыл, ҡарағат, бөрлөгән… ҡолаҡҡа йәтеш. Ә бында ниндәйҙер артыш! Нишләп һуң әле ул Мәрйәмдең иғтибарын йәлеп иткән? Сөнки, тәбиғәт балаһы булараҡ, ул белә: башлыса таулы ерҙә үҫә торған артышты борон-борондан им-том итеп, өйҙән уҫал рухты ҡыуалап сығарыу өсөн ҡулланғандар. Шағирә булараҡ иһә, Мәрйәм Күсмәева, халыҡ аңына һеңеп ҡалған ошо юрауҙан оҫта файҙаланып, ғәйәт ҙур дөйөмләштереүгә ирешкән:

Сырхауҙарҙың ябырылған мәле.
Күңелем дә – ярыҡ сынаяҡ.
Яндырайым артыш. Китһен һағыш,
Торған ерем булһын сын-яһау.
Алып кит һин, артыш, бәләләрҙе,
Былай ҙа бит донъя тыныслыҙ.
Китһен өсөн афәт ил өҫтөнән
Яныр инем артыш булып мин.

Шағирәнең ошондай ҙа изге теләгә ҡабул булһын, тиеүҙән башҡа, нимә әйтәһең инде?

2015, май

ӘНИСӘ СОНЕТТАРЫ

Шағирәләребеҙҙең быуат башындағы ижадына яһаған «Аҫыл икән затың – һүҙең булһын алтын» тигән күҙәтеүҙәремдә («Ағизел», 2011 йыл, 8–9-сы һандар), Әнисә Таһирова хаҡында һүҙ барғанда, «аллитерация һымағыраҡ яңғыраған «Әнисә сонеттары» тигән баш аҫтында киң күләмле һәм тәрән йөкмәткеле үҙаллы мәҡәлә яҙырға ла ваҡыттыр инде хәҙер» тигән уйҙарым менән уртаҡлашҡайным. Был бурысты йәшерәк быуын тәнҡитселәренә йөкмәү хәйерлерәк булыр, тигән теләгемде лә йәшермәгәйнем.

Әйткәндәй, элегерәк, аллитерацияға тартым был һүҙбәйләнеш танылған ғалимыбыҙ Ғ. Хөсәйеновтың да иғтибарын йәлеп иткәйне. Шағирәнең 2001 йылда баҫылып сыҡҡан «Йыһан гөлө» исемле китабына яҙған баш һүҙен ул «Әнисә сонеттары» тип атаны. Ғалим, уҡыусыға мөрәжәғәт итеп, һүҙен былай тип тамамлаған: «Шиғриәт һөйөүсе, мин һине Әнисә шиғриәте, Әнисә сонеттары тигән гүзәл донъяның ҡапҡаһы алдына ғына юлыҡтырҙым. Уның гөлбаҡсаһында гиҙеү, зауығыңа ятышлы емештәренән ауыҙ итеү – һинең өлөшөң».

Ысынлап та, күләме яғынан әллә ни зур булмаған баш һүҙҙә автор үҙ алдына Әнисә Таһированың сонеттар баҡсаһында гиҙеү бурысын ҡуймаған. Уҡыусы өсөн ятыраҡ тойолған был жанр тураһында иң кәрәкле, иң мөһим мәғлүмәтте биргән дә (Нимә ул сонет? Ул ҡасан һәм ҡайҙа барлыҡҡа килгән? Беҙҙеңсә нисегерәк яңғырай? Уның төп үҙенсәлектәре, эске структураһы низәнғибәрәт? Рәсәйгә ҡасан килеп ингән ул? Европа илдәрендә лә, беҙҙә лә был жанрҙың күренекле вәкилдәре кемдәр?), Әнисә сонеттары тигән гүзәл донъяның ҡапҡаһын асып, шиғриәт һөйөүсене шунда оҙатҡан.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, Ғайса Хөсәйеновтың баш һүҙенән һәм минең күҙәтеүҙәремдән һуң байтаҡ ҡына ваҡыт үтеп китһә лә, Әнисә сонеттарына ныҡлап тотоноусы әле һаман күренмәй. Шуға күрә үҙем тәҡдим иткән идеяны үҙем тормошҡа ашырып ҡарарға булдым. Ул «киң күләмле һәм тәрән йөкмәткеле» була алырмы, уныһын инде талапсан уҡыусы әйтер.

Әнисә Таһированың әҙәбиәттәге юлы традицион шиғриәттән башланды. Үҙған быуаттың етмешенсе-һикһәненсе йылдарында ул башҡорт

һәм рус телендә, Өфөлә һәм Мәскәүҙә, бер-бер артлы ете шиғри китап («Ҡоралай», «Аҡсарлағым минең», «Барһын һиңә яҡты уйҙарым», «Яҙҙың ҡыҙыҡ ғәҙәттәре», «Мөғжизәгә килә ышанғым» һ. б.) баҫтырып сығарҙы. Һигеҙенсеһендә, 1986 йылда донъя күргән «Яҙҙар бүләк итәм» тигәнендә, шиғырҙар менән бергә, тәүге сонеттар ҙа урын алды. Ике йылдан һуң, сонеттар менән поэмаларҙан торған «Әсә һүҡмағы», тағы өс йылдан һуң авторҙың шиғырҙарын, сонеттарын һәм поэмаларын туплаған «Ырыуым йолаһы» тигән китабы баҫылып сыҡты. Бына шулай,төклө аяғы,ышаныслы аҙымдары менән килеп инде Әнисә Таһирова сонеттар донъяһына. Артабан был донъя киңәйгәндән-киңәйә, байығандан-байый барҙы. Шағирәнең «Йөрәк йәдкәре» (1996), «Йыһан гөлө» (2001), «Алтын буран» (2011) исемле күләмле китаптары шулай уйларға форсат бирә. Уларҙың һәр ҡайһыһында сонеттарҙың элегерәк яҙылғандарына яңылары өҫтәлеп кенә тора. Китаптары башлыса туған Өфөһөндә сыҡһа ла, Мәскәү менән Ҡазан да сит итмәй Әнисә Таһированы.

Мәҡәләнең атамаһына сығарылған төп бурысты атҡарырға туранан-тура керешерҙән алда, кескенә бер иҫкәрмә яһап китеүҙе урынлы һанайым. Ижад өлкәһендә күпмелер тәжрибә туплағас, сонеттар яҙырға тотоноу – традицион шиғриәткә хыянат итеү, уны һанға һуҡмау, тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Әнисә Таһирова ижадтың был ике өлкәһендә лә берҙәй әүҙем, ҡанатланып, эҫке бер күтәренкелек менән эшләй. Ул – бер нисә поэма («Ағиҙел аманаты», «Ҡоһор», «Ҡуш беләҙек») һәм «Афәт» тигән баллада авторы ла. Дөрөҫ, был әҫәрҙәр телгә бик йыш алынмай. Ләкин, донъяға килгәндәр икән, шағирәнең ижад багажында улар бары-бер ҙә үҙ урындарын алырға тейештәр.

Юл ыңғайында шул да мәғлүм булһын: Әнисә Таһирова, ҡулына ҡәләм алғандан бирле, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт өлкәһендәге үҙебеҙҙең ҡаҙаныштарға, бигерәк тә халыҡ ижады традицияларына таяныу менән бер ҡатарҙан, тиҫтерҙәренән айырмалы булараҡ, рус поэзияһын, ә рус поэзияһы аша донъя классиктары үрнәген дә үҙ итте.Уның сонеттар менән мауығып китеүе лә ошоға бәйле булманы микән, тип уйлап ҡуяһың ҡайһы саҡта.

Рус һәм донъя классиктары менән мауығыу, минең ҡарашымса, бер-береһенә йәнәш ике юҫыҡта барҙы. Башта, классик шиғырҙарға һәм сонеттарға мөкиббән киткән шағирә, уларҙы башҡортсаға тәржемә итеү менән мәшғүл булды. Унан һуң классиктарҙың үҙҙәре тураһында әҫәрҙәр ижад итә башланы. Артабан инде классиктарға эйәреп яҙылған

әҫәрҙәр донъяға килде. Хәҙер ундай әҫәрҙәр ҙә байтаҡ ҡына булып китте. Шуға күрә шағирәнең ижад баҫыуында беҙ йыш ҡына Франческо Петрарка, Уильям Шекспир, Александр Пушкин, Николай Некрасов, Иван Бунин, Валерий Брюсов, Александр Блок, Анна Ахматова, Марина Цветаева, Леся Украинка, Сильва Капутикян, Людмила Татьяничева, Ольга Берггольц, Юлия Друнина, Зөлфиә, Саломея Нерис, Сароджини Найду, Новелла Матвеева исемдәре менән осрашабыҙ икән, һис тә ғәжәп түгел.

Өҙөп кенә әйткәндә, Әнисә Таһированың тере әҙәби портретын тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу өсөн ҡыҙыҡлы һәм фәһемле материал етерлек, тип уйлайым. Тикшерергә, соҡсонорға теләүсе генә булһын. Әйтәйек, тәржемәсе Таһированың ижад лабораторияһы ниҙән ғибәрәт? Йәшерәк сағында ул кумирҙарҙы ниндәйерәк принциптан сығып һайлаған? Тәү сиратта уларҙың ниндәй сифаттары йәлеп иткән шағирәнең иғтибарын? Хәй Мөхәмәтйәров менән Яҡуп Ҡолмойҙан һуң, башҡорт поэзияһының сонет формаһын артабан да үҫтереүгә, уның структураһын төрләндереүгә, тематикаһын байытыуға ул ниндәй өлөш индергән? Рус поэзияһы традицияларын (айырыуса А. Пушкин, А. Блок, В. Брюсов, А. Ахматова, М. Цветаева әҫәрҙәре) башҡорт шағирәһенә ниндәйерәк йоғонто яһаған? Балалар әҙәбиәтенә ниндәй елдәр алып килгән шағирәне һ.б., һ.б. Касан да булһа был һорауҙар менән ихлас ҡыҙыҡһыныусы һәм уларға тәпләп яуап эҙләүсе берәй тәүәккәл кеше табылыр, табылмай ҡалмаҫ.

Ә. Таһированың сонеттар донъяһын гиҙгәндә юлдан яҙлыҡмаҫ өсөн, уларҙы айырым осорҙарға (әйтәйек, ун йыллыҡтарға) бүлеп тикшереү ҡулайыраҡ булыр. Әлегә шундай өс осорҙо төҫмөрләргә мөмкин: һикһәненсе йылдар; туҡһанынсы йылдар; яңы быуаттың тәүге йылдары. Һикһәненсе йылдарҙа шағирә ҡырҡлап сонетҡа һәм «Әсә һуҡмағы» (1976–1983), «Мөхәббәтте сикләр ара юҡ» (1983), «Зәлиә-Зара» (1985), «Һикәҙе шаршылары» (1985), «Икмәк – ер ҡояшы» (1986), «Бытырый» (1987–1988) тип аталған сонеттар тажына йән өрҙө. Әгәр быларға авторҙың традицион шиғырҙары менән поэмаларын (ғәләмәт күп көс һалыуҙы талап иткән сонеттар тажы, минеңсә, үҙенең ҡатмарлылығы менән поэманан һис тә кәм түгел) һәм балладаһын да өҫтәһәк, уның ни тиклем әүҙем һәм һөҙөмтәле эшләүен күҙ алдына баҫтырыуы ҡыйын түгел.

Башҡаларҙан айырмалы булараҡ, Ә. Таһирова күпселек осраҡта әҫәрҙәренең донъяға яралыу йылын күрһәтә бара. Был иһә, үҙ сиратын-

да, уның ижадын өйрәнеүҙе байтаҡҡа еңеләйтә. Һикһән икенсе йылда, мәҫәлән, ул «Йөрәк һүҙе», «Әсә», «Күҙҙәремдә ҡалды күҙ нурҙарың…» тип аталған өс сонет бүләк итә уҡыусыһына. Етмешенсе йылдар уртаһында яҙыла башлаған «Әсә һуҡмағы» тигән сонеттар тажын иҫкә алмағанда, был өс сонетты шағирәнең сонет формаһын үҙләштерә башлауҙағы тәүге өлгөләре, тип атарға булалыр. Әммә, тәүгеләрҙән булһа ла, йөкмәткеләре менән дә, яңғыраштары йәһәтенән дә уларға һүҙ тейҙерерлек түгел. Эске төҙөлөштәре яғынан да бер-береһенә яҡындар – һәр ҡайһыһы дүртәр юллы өс һәм сонетты бикләп ҡуйыусы икешәр юллы бер строфанан тора.

Хәтерләүемсә, быға тиклем уҡырға тура килгән ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәрҙә уларҙың авторҙары йөрәктәренә бойороҡ бирә торғайнылар. Ә бына Ә. Таһирова сонетында йөрәк телгә килә лә, уны үҙенең күкрәк ситлегендә йөрөтөүсе хужаһына аҡыллы кәңәштәр бирә: моңдарын – ярһып ашҡынмаҫҡа саҡыра, сөнки донъяла ул тыңлаған башҡа моңдар ҙа бар: ҡулдарын – теләһә кемгә тартылмаҫҡа саҡыра, сөнки уны наҙлар башҡа ҡулдар ҙа бар: ҡараштарын – моңһоп уҡталмаҫҡа саҡыра, сөнки уға бағыр башҡа күҙҙәр ҙә бар: аяҡтарын – ят һуҡмаҡҡа баҫмаҫҡа саҡыра, сөнки унда йәнәш эҙҙәр ҙә бар. Ябай ғына итеп әйткәндә, бер туҡтауһыҙ тибеп торған йөрәк – лирик героиняның тоғро юлдашы ла, наҡсыһы ла. «Тик шым ғына әйтте йөрәгем: барыбер уны ғына һәйәмен», – тигән һуңғы ике юл лирик героиня менән уның йөрәге араһындағы гармонияны уғата ла көсәйтеп ебәрә һәм был бәйләнеште уғата ла ышаныслыраҡ итә.

Атамалары менән «Әсә» сонеты һәм «Әсә һуҡмағы» тигән сонеттар тажы бер-береһенә яҡындар кеүек. Ләкин был яҡынлыҡ – атамаларҙа ғына. Һүҙ икеһендә лә әсә тураһында барһа ла, асылда улар бөтөнләй үҙаллы әҫәрҙәр. «Әсә һуҡмағы»нда кеше ғүмере һағында торған фельдшер образы кәүҙәләндерелгән. Ауыр, ҡәһәрле һуғыш йылдарында ул «көҙөн, ҡышын, елдә, яуында, һары таңда, ҡара төндәрҙә» ете ауылды хеҙмәтләндергән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла күп кешене үлем тырнағынан алып ҡалған – «һүнеп барған усаҡтарға тере ҡүҙҙар өҫтәп киткән». Халыҡ телендә уның «врач апай», «духтыр-фәрештә» тип йөрөтөлөүе лә юҡтан ғына түгел.

«Әсә» сонетында иһә әсәлек тойғоһоноң ҡайһылай көслө, мәле менән хатта тау емерерлек булыуы бәйән ителә. Дөрөҫөрәге, был тойғо тормошта һирәк осрай торған тетрәткес хәл-ваҡиға аша образлы итеп тасуирлана: үлем түшәгендә ятҡан әсә, ситтә йәшәүсе

улының сирле икәнлеге хаҡында хәбәр алғас, һуңға ҡалмайса, уның янына барып етергә йыйына башлай. Ғөмүмән, әсә образы Ә. Таһирова ижадында ифрат ҙур урын биләп тора. Бер аҙ алғараҡ китеп, әйтәйем: «Йөрәк йәдкәре» тигән китабында ул был образға «Һинең рухың беҙҙең менән бергә…» тигән бик ҙур шәлкем (шиғырҙар шәлкеме) һәм «Өҫтәгеҙсе тере ялҡындарҙы!» тигән сонеттар тажы бағышланы.

Һуҡһәненсе йылдар башында сонеттар берәм-һәрәм генә күренгеләһә («Алыҫайҙы инде һинең төйәк…», 1983: «Юҡҡа ғына, онотайым, тиеп…», 1983: «Көмөш даға булам…», 1984: «Караптарың кирә елкәндәрен…», 1984), был ун йыллыҡтың уртаһынан башлап улар һиҙелеп ишәйҙе. Шағирә өсөн сонет өлкәһендә иң уңдырышлыһы – һуҡһән алтынсы йыл булды, тип, ауыҙ тултырып әйтергә мөмкин. Төрлө сығанаҡтарҙан (тәү сиратта – шағирәнең китаптарынан) күренеүенсә, был йылды ул ун биш сонет һәм «Йүкмәк – ер ҡояшы» тигән сонеттар тажы ижад итте .

Һуҡһәненсе йылдарға ҡараған сонеттарҙың күбеһендә авторҙың төп иғтибары лирик геройняларҙың күңел донъяһын яҡтыртыуға, эске кисерештәрен сағылдырыуға, уларҙың хлоҡ-фиғеленә хас ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе һүрәтләүгә йүнәлтелгән. Ошо йәһәттән «Көмөш даға булам…» тигән сонет айырылыбыраҡ тора. Традицион шиғырҙар менән сағыштырғанда, сонеттан үҙенә өлгешле юлдарҙы һәм строфаларҙы айырып алыуы еңел булмағанға күрә, бында уны тулы килеш күсерергә мәжбүрмен:

Көмөш даға булам толпарыңа,
Яуға сыҡһаң, ерең-йортоң һаҡлап.
Илһам уты булам моңдарыңа,
Яңғыраһа илең ҡотон яҡлап.

Аһаҡ биҙәк булам билбауыңа,
Хаҡ эш өсөн билдәреңә быуһаң.
Йәнәш ебәк булам ҡул бауыңа,
Хәсрәтленең күҙ йәштәрен йыуһаң.

Көн яҡтыһы булам һуҡмағыңа,
Ҡарт әсәңә ҡайтып башың эйһәң.
Һүнмәҫ ялҡын булам усағыңа,

Тоғролоҡло йөрәк менән һөйһәң.
Ләкин һис ҡасан да юлдаш булмам,
Мүк ҡаплаған һалҡын бер таш булһаң.

Строфаларҙағы юлдар һанына ҡарағанда (4–4–4–2), был – ғилми әҙәбиәттә сонеттың Шекспир формаһы тип йөрөтөлгән төрө. Әйтергә кәрәк, сонет өлкәһендәге эҙләнеүҙәрен Ә. Таһирова тап ошо төрҙән башланы. Сонеттың тыуған илендәгесә (ә уның тыуған иле тип Италияның көньяғында ятҡан Сицилия утрауы иҫәпләнә) катрендарҙан һәм терцеттан (4–4–3–3) торған төрөнә иһә һуңыраҡ мөрәжәғәт итәсәк. Уларҙың тәүге үрнәктәрен бында һанап та китергә мөмкин: «Диңгеҙ ярында мин һиңһеҙ генә…», «Килдем әле диңгеҙ буйҙарына…», «Сик-самаһыҙ диңгеҙ ярһыуҙары…», «Һинең менән бары бер күрештем…», «Бармаҡтарың еләҫ ел шикелле…». Быларҙың бөтәһе лә һикһән бишенсе йылда яҙылған. Шағирәнең артабанғы ижадында сонеттың ошо төрө торған һайын киңерәк урын ала бара. Сонеттар таждары өсөн дә («Мөхәббәтте сикләр ара юҡ» тигәненән башҡаһына) автор ошо формаға өҫтөнлөк бирә. Ләкин был Шекспир сонеты тибынан бөтөнләй үк баш тартыу тигән һүҙ түгел. Һирәкләберәк булһа ла, Ә. Таһирова ҡәләме аҫтынан Шекспир традицияларына таянып яҙылған сонеттар ҙа сыҡҡылап тора. «Хистәренден аҡ ебәге инем…», «Ынйы сәскә», «Осрашырбыҙ әле»,«Ҡарашындың тәрән күлдәренә…»,«Йәшәй өмөт», «Һин килгәйнең миңә әкиәт булып…», «Йән өшөгәндә» тигән сонеттар шундайҙар иҫәбендә.

Өҫтә «Көмөш даға булам…» тигән сонет юҡтан ғына тулы килеш килтерелмәне. Кемгә нисектер, миңә Әнисә Таһированың бөйөк инглиз шағиры һәм драматургы традицияларына таянып яҙылған сонеттары ҡатыраҡ, талапсыраҡ тонда яңғыраған төҫлө. Ә бына катрен менән терцеттарҙан торғандары башҡасараҡ ҡабул ителә: уларҙа, башлыса, лирик героиняларҙың ифрат нескә хис-тойғолары һәм уй-фекерҙәре сағылыш таба. Борон заманда, катрен менән терцет донъяға килгән төйәктә, сицилиана тип аталған һигеҙ юллыҡ строфа булған, ти. Ә ул, үҙ сиратында, халыҡ йырҙарынан яралған, имеш. Шуға күрә лә, ҡайһы бер авторҙарҙың сонет тигән һүҙҙе итальянсанан руссаға ябай ғына – йыр, тип тәржемә итеүҙәрендә дөрөҫлөк, бәлки, күберәктер ҙә. Ысынлап та, «йөҙө килгән» сонет йырлап тороргә тейештер ҙабаһа. Бында Әнисә Таһированың тағы бер сонетын, был юлы – катрен менән терцеттарҙан торғанын – тулы килеш күсермәй сара юҡ:

Бармаҡтарың елəҫ ел шикелле,
Сəстəремə минең ҡағыла.
Ҡарашыңдан нурҙар ағыла,
Һүҙһеҙ аңлашыла һөйөү теле.

Бармаҡтарың иркə гөл тажындай
Йөҙҙəремə минең ҡағыла.
Ебəк тулҡын булып ағыла,
Йəки наҙлай таңғы уйсан моңдай.

Бармаҡтарың йəнле шиғыр кеүек,
Аралайҙар һағыш ҡарынан.
Тартыныулы бер хис менəн һөйөп,

Өнһөҙ мөхəббəткə табынам,
Һинең тоғролоҡҡа башым эйеп,
Иңдəреңə килеп һарылам.

Бер-береһенəн эске структуралары менəн айырылған ике сонет: «Көмөш даға булам…» һəм «Бармаҡтарың елəҫ ел шикелле…». Улар үҙҙəренең төрҙəре, формалары буйынса ғына түгел, героиняларының характер үҙенсəлектəре йəһəтенəн дə бер-береһенəн айырыла. Тəүгеһенеке, мəҫəлəн, күҙ атҡан кешеһе «мүк ҡаплаған һалҡын бер таш» икəн, уға бер ҡасан да «юлдаш» булмаясағын өҙөп, ҡырт киҫеп əйтə. Икенсеһенеке иһə, һөйгəненең тоғролоғона башын эйеп, уның иңдəренə һарылырға əҙерлеген белдерə.

Бында төп сəбəп, бəлки, форма төрлөлөгөндə генə лə түгелдер, ə автор позицияһы ла, ул үткəргəн идея ла үҙ ролен уйнай торғандыр. Ни тиһəң дə, əҙəбиəт теорияһында форма менəн йөкмəткене берҙəмлеге, уларҙың ярашлылығы тигəн төшөнсə лə йəшəп килə бит əле.Əммə, нисек кенə булмаһын, тамырҙары сицилианаға барып тоташҡан сонеттар барыбер ҙə йомшағыраҡ яңғырағандай. Быға «Барыһы ла үтте, бөттө, тимə…», «Йəшлегемдə килгəн йəшел хаттар…», «Яҙын аҡ ҡайындар буй еткергəн…», «Эҙҙəремдə инде ялҡындар юҡ…», «Мин, яҙмышым, һиңə рəхмəтлемен…», «Тормош һуҡмағында һаҡла, яҙмыш…», «Ижад», «Əгəр күктə ҡабынһа бер йондоҙ…», «Уйлайһың һин мине ынйы тиеп…», «Алтын шарҙай, ҡояш ҡалҡа балҡып…», «Һин йөрөгəн һуҡмаҡтарҙа матурлыҡ күп…», «Аҡта-

рылды баш осонда болот…» тигән сонеттар миҫалында ла ышанырға мөмкин.

«Аҡтарылды баш осонда болот...» тигән юлдан башланған сонет (катрен менән терцеттарҙан торған был сонет Ялтала яҙылған) тәүҙә күңелдә ниндәйҙер шом уята. Артабанғы юлдарҙа һүрәтләнгән тәбиғәт күренеше был шомдо уғата ла көсәйтеп ебәрә: тирә-яҡты ҡара сатыр ҡаплап алған; диңгеҙ өҫтөн ҡуйы томан япҡан; тәбиғәттең ошолай көйһөҙләнеүе хатта аҡсарлаҡтарҙы ла һағайтҡан – улар кинәт тынып ҡалған. Икенсе строфала – көтөлмәгән үҙгәреш: күҙ асып йомған арала ҡуйы болот араһынан, «бер һылыуҙың сәсе ҡараһынан емелдәгән сағыу алҡа һымаҡ», яҡты һыҙат балҡып китә. Өсәр юллы һуңғы ике строфала иһә (терцеттарҙа) тәбиғәт күренешенән кеше күңеленә һикереш яһала. Һәм әҫәр лирик геройыняның күтәренке рухын сағылдырған юлдар менән тамамлана: «Ҡаплаһа ла болот – һүнмәй шәфәҡ ‹...› Алда әле балҡыр нурҙар бар ‹...› Һуҡмағымды әйҙәр ҡырҙар бар».

Бер үк осорҙа ижад ителһә лә, структураһы буйынса Шекспир тибындағы (4–4–4–2) «Карашыңдың тәрән күлдәренә...» тигән сонет күңелдә башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра.Бында, ҡырыҫлығының аръяғына сыҡҡан лирик героиня, яҙмышына буйһонмайынса, үҙ бәхетенә үҙе ҡаршы төшкән кеше һымағыраҡ ҡәүҙәләндерелгән. «Арабыҙға ҡорос ҡойма ҡойҙом, ситкә юллатырға эҙәндә» тип маһайһа ла, ахыр сиктә ул «Һин үтәнең минең теләктә: киттең... Алып киттең йөрәкте» тигән һыҙланыуҙары менән бүлешергә мәжбүр. Беҙҙең алда – йәнә ике типтағы ике сонет: «Аҡтарылды баш осонда болот...» һәм «Ҡарашыңдың тәрән күлдәренә...». Улар ҙа төҙөлөштәре менән генә түгел, мотивтары менән дә бер-береһенән айырыла. Күрәһең, ҡайһы осраҡта сонеттың ҡайһы төрөн һайлауҙың серен автор үҙе генә белә торғандыр Был инде – шағирәнең ижад лабораторияһына бәйле мәсьәлә.

Ижад лабораторияһына һылтаныуҙың, бәлки, хәжәте лә булмаҫ ине, әгәр формалары менән төрлө, ә мотивтары менән бер-береһенә яҡын торған сонеттар ҙа осрап ҡуймаһа. Итальян Франческо Петрарка өлгөһөн башҡорт ерлегендә күҙ алдына баҫтырған «Мин, яҙмышым, һиңә рәхмәтлемен...», «Тормош һуҡмағында һаҡла, яҙмыш...», «Ижад», «Алтын шарҙай, ҡояш ҡалҡа балҡып...» тигән сонеттарҙың лирик героинялары, мәҫәлән, үҙҙәренең уй-хистәре, донъяға ҡараштары, эске кисерештәре менән Шекспир тибындағы «Йәшәй өмөт», «Ниңә әле был күңелем...», «Йән өшөгәндә» тигән сонеттарҙыҡынан әллә ни айырылмайҙар шикелле. Уларҙың бөтәһендә лә тиерлек һүҙ көндәлек

тормошта ла, ижадта ла намыҫлылыҡ, вырҙанлылыҡ, изгелеклелек, хаҡлыҡ һәм шуның кеүек башҡа әхлаҡи сифаттар тураһында бара. Тәбиғи, сонеттарҙың авторы ла, уның героинялары ла ошо ыңғай принциптарҙы алға һөрәләр. Ләкин донъя, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һин тигәнсә генә бармай шул – кешене бөтә яҡлап та кеше юғарылығына күтәрә торған сифаттар йыш ҡына артҡы планға күсәләр, йәиһә бөтөнләй үк юғалып ҡуялар.

Әйткәндәрҙе йөпләү өсөн, был сонеттарҙа яңғыраған ҡайһы бер фекерҙәрҙе уҡыусы иғтибарына ла тәҡдим итергә мөмкин. «Мин, яҙмышым, һиңә рәхмәтлемен...»дең лирик героиняһы «Ҡылдай күперҙәрҙе үткән мәлдә, йырым менән аштым күктәргә...»; «Мин тормоштоң түгел бер иркәһе, ләкин бүләк иттең саф иртәне...» тип, рәхмәтен белдерә яҙмышына. «Тормош һуҡмағында һаҡла, яҙмыш...» – та иһә ул «Яғалашып өлөш даулауҙан, намыҫ юйып «уңыш» аулауҙан» һаҡ булырға саҡыра яҙмышын. «Вырҙанымды, яҙмыш, таплатма» тип тә өҫтәй. Сонеттың һуңғы терцеты айырыуса көслө яңғырай: «Ҡурсалай күр ғәйбәт-уҡтарҙан, барыһынан нығыраҡ һаҡла, яҙмыш, битлек кейгән ялған дуҫтарҙан». «Алтын шарҙай, ҡояш ҡалҡа балҡып...»та (был сонет та Ялтала яҙылған), «ярһыу һәм мөһабәт» диңгеҙ ҡосағынан яр буйҙарына эркелгән сүп-сар өсөн талашыусы аҡсарлаҡтарҙы – ҡасандыр уның йырҙарына илһам биргән заттарҙы – күҙәтеп торған лирик героиня көтөлмәгән һығымта яһап ҡуя:

Эй, был тормош! Иланлыҡ менән
Түбәнлектәр ҡай саҡ йәнәш килгән
Әрнеткес һәм бөйөк тамаша!

Шекспир өлгөһөндәге өҫтә аталған сонеттарға айырым-айырым туҡталып тормаҫтан, бында «Ниңә әле был күңелем...» тигәнен тулы килеш килтереү маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр:

Ниңә әле был күңелем,
Гүйә, сиселмәгән йомаҡ.
Йөрөйөм мин гел болоҡһоп,
Осоп төшкән бала һымаҡ.

Ҡайҙа ҡояш, ҡайҙа айым,
Ҡайҙа миңә килер бәхет?

Яҙмышыма яҙылғанмы
Һыҙландырғыс ҡара тәхет?

– Юҡ та, юҡ, юҡ! – тигән кеүек
Кемдер тауыш биреп ҡуя.
Йәнемә йылы йүгерә, –
Йырым тыуа, йырым тыуа!

Һауалағы ҡош кеүекмен,
Йырым барҙа йәнем бөтөн!

Сонеттар донъяһында Ә.Таһирова яһаған ырамлы аҙымдарҙың икенсеһе туҡһанынсы йылдарға тура килә.Был ун йыллыҡта ул илленән ашыу сонет, «Өҫтәгеҙсе тере ялҡындарҙы!» (1990–1991), «Салауаттың ҡаны беҙҙә ҡайнай» (1992), «Дилбәр» (1990–1991) тигән сонеттар таждары ижад итә һәм баҫтырып сығара. Туҡһан беренсе, туҡһан дүртенсе, туҡһан туғызынсы йылдар – уның өсөн иң илһамлы йылдар булды, тиергә мөмкин Һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтәйек: был осорҙа Ә.Таһирова сонеттарының мотивтары ла бер аҙ үҙгәрә төшә – улар уҫалыраҡ та, талапсаныраҡ та яңғырай төҫлө. Быныңсәбәбе шул заманға хас хәл-ваҡиғаларҙың ни тиклем дә киҫкен һәм көсөргәнешле, ни тиклем дә ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы булыуына бәйле икәнлеген бында аңлатып тороуҙың бер кемгә лә кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Һүҙ ҙә юҡ, үткер фекер төрөлгән йөкмәткесонеттарҙың формаһына ла үҙенең йоғонтоһон яһамай ҡалмай. Тәүге осор менән сағыштырғанда, быныһында Ә. Таһированың ижад багажына Шекспир үрнәгендәге сонеттарҙың күберәк өҫтәлгәнлеге күҙгә бәрелеп тора.

Бына 4–4–4–2-шәр юллы строфаларҙан торған «Әгәр миндә тиңһеҙ ҡөҙрәт булһа...» тигән сонет. Уның лирик героиняһы, әгәр ҡулынан килһә, ерҙә идеаль тәртип урынлаштырыр ине. Ул Ер шарын ҡырып йыуырға, уның сүп-сарҙарын, ҡыйҙарын йыйып, йәһәннәмгә олаҡтырырға әҙер; көнсөллөктө, залимлыҡты, нәфсене, уғрылыҡты ла шунда табан олаҡтырмаҡсы. Әгәр уның ошо теләктәре, уй-фекерҙәре бойомға ашһа, «ҡайһылай ҙа балҡып торор ине ‹...› ерҙең һәр мөйөшө! Ҡот, бәрәкәт ҡайтыр ине ергә, миһырбанлы булыр ине кеше. Етемдәр ҙә күҙ-йәш түкмәҫ ине...» тигән татлы хыялдар донъяһында йөҙә был сонеттың лирик героиняһы.

Шул уҡ 4–4–4–2 үлсәме менән яҙылған «Яманлыҡҡа хеҙмәт итеүселәр...» тигән сонет та уҫал ғына яңғырай. Бында яманлыҡҡа хеҙмәт итеүсе түбән йәнле кешеләрҙең дөйөмләштерелгән образы тыуҙырылған. Улар саманан тыш хәйләкәрҙәр, «үҙҙәрендә булған түбәнлекте» намыҫлыға тағыр өсөн, аҡты күрәләтә – ҡара, тип танырға һәм, яҡшылыҡтың юлына арҡыры төшөп, иблес шәйенә инергә лә һәләтлеләр. Әммә шуныһы ҡыуаныслы, сонеттың икенсе яртыһы уҡыусыла барыбер ҙә яҡты уй-өмөт уятмай ҡалмай:

Керһеҙ йәндәр ҡара көйгән саҡта,
Әрнеүҙәрҙән, ҡан-йәш ағыуҙан,
Уты һүнгән күңел усаҡтарын
Шиғри ялҡын менән ҡабыҙам.

Һүрелмәһә йәндә саф күҙҙар,
Баш осонда һүнмәҫ йондоҙҙар.

Ошо уҡ мотивты «Таш һуҡмаҡтан аҡһаҡ ҡайтып киләм...» тигән сонетта ла һиҙемләргә мөмкин. Тегеһенән бер аҙ айырмалы булараҡ, был сонетта, дөйөмләштереү менән бер ҡатарҙан, конкретлаштырыуға ла иғтибар ителгән. Лирик героиняны талап ҡасҡан һәм, ыржайышып, уны ситтән күҙәтеп торған туҡ бүреләр образы айырыуса көслө яңғырай. Бында ла, бүреләр менән йәнәш йәшәргә тура килһә лә, сонеттың икенсе яртыһы оптимистик рух менән һуғарылған:

Таш һуҡмаҡтан аҡһаҡ ҡайтып киләм,
Кеҫәлә юҡ һуҡыр бер тинем,
Бар булмышым матурлыҡты тоя,
Йыр-шиғырҙы юллай күңелем.

Тағы юҡҡа сыҡты, тип иҫәп,
Туҡ бүреләр олой,ҡан көҫәп.

Ә бына «Аҡтарылды, ҡутарылды баҡса...», « Казино», «Һатылған ҡот» тигән сонеттарҙа оптимизмдың әҫәре лә юҡ. Был сонеттарҙың нигеҙенә һалынған тормош материалына ҡарағанда, уның булыуы ла мөмкин түгел. Әйткәнем буш һүҙгә әйләнмәһен өсөн, «Казино» тигән

сонеттан икенсе һәм дүртенсе (йомғаҡлаусы) строфаларҙы бында күсерергә ниәтләнем:

Беҙ тик уҡып, нәфрәтләнеп белгән
Ҙур йорт, ана, «балҡып» ултыра!
Кемдер унда ғүмер ҡыҫҡарталыр,
Кемдер кеҫәләрен тултыра.
. . . . . .
Ҡала уртаһында – казино,
Кемгә – упҡын, кемгә хазина!

Анафора алымын ҡулланып яҙылған «Минең хыял» тигән сонетта ла оптимистик рух шағирәнең хыялында ғына сағылып китә. Быға ышаныу өсөн, сонеттың икенсе яртыһына күҙ ташлау ҙа етә:

Хыялымда минең – алсаҡ йөҙҙәр,
Хеҙмәт сәме, шатлыҡ һәр йөрттә.
Онотолоп, мин ишғырҙар яҙам
Киңәнесле, сихри тынлыҡта.

Ә илемдә – афәт, ҡыйралыш,
Дүрт мөйөштән керә ҡырҡ тауыш.

Ошо һәм ошоға тартым башҡа сәгнеттарҙы уҡығанда, уларҙың авторы шәхес булараҡ күҙ алдына килеп баҫа. Дөрөҫ, поэтик әҫәрҙәрҙең лирик геройҙары йәиһә героинялары менән уларҙың авторҙары араһында тулы мәғәнәһендә тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмағанлығы күптән билдәле. Әммә уларҙың бер-береһенән бик алыҫ тормауҙары ла инҡар ителмәй. Әнисә Таһированың да сонеттарында уның булмышы, характер үҙенсәлектәре, күңел донъяһы күпмелер кимәлдә сағылыш тапмай ҡалмай торғандыр, моғайын. Бына нисек инде «Әгәр миндә тиңһеҙ ҡөҙрәт булһа...», «Яманлыҡҡа хеҙмәт итеүселәр...», «Таш һуҡмаҡтан аҡһап ҡайтып киләм...», «Аҡтарылды, ҡутарылды баҡса...», «Казино», «Һатылған ҡот», «Минең хыял» тигән сонеттарҙың артында автор үҙе лә баҫып тора тимәйһең? «Мөлдөрәмә тулы силәктәрем...», «Көндәрҙең гел моңһоу, ҡараларын...», «Көслөләргә ҡойроҡ болғаманым...» тигәндәренең лирик героинялары менән автор араһында айырма, бәлки, юҡ хәлендәлер?

Кинәйәгә ҡоролған «Мөлдөрәмә тулы силәктәрем...» тигән сонет күптәрҙең иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмағандыр. Унда образлылыҡ та, фекер тәрәнлеге лә етерлек. Әҫәрҙең тәүге юлдарында бер ниндәй ҙә кинәйә юҡ һымаҡ. Артабанғы юлдарҙа иһә автор көндәлек тормошта һирәк-мирәк була торған ябай ғына күренештән бик фәһемле һығымта яһап ҡуя: лирик героиняның эштәре яй барғанда, уға сәләм биреүселәр ҙә, шатлыҡтарын уртаҡлашыусылар ҙа, хәсрәттәрен бүлешеүселәр ҙә күп булған. Көтмәгәндә, силәктәре ысҡынып китеп, һирпеп алған һыуҙары түгелгәс (кинәйә бына ошонда йәшерелгән дә инде!), уны бер кем дә иҫләмәй. Хатта яҡын күреп йөрөгән дуҫының да, ҡапҡаһын шарт итеп ябып, ихатаһына кереп юғалыуын танырға мәжбүр лирик героиня. Сонет «Мул табында дуҫтар иҫәпһеҙ, береһе юҡ – ҡалһаң силәкһеҙ» тигән юлдар менән бикләп ҡуйыла.

«Нишана» тигән һүҙҙе иҫкә алмағанда, «Көндәрҙең гел моңһоу, ҡараларын...» тигән сонетта шағирә әйтер һүҙен уҡыусыға кинәйәләп тормайса ғына, туранан-тура илтеп еткергән. «Тормош тирмәне» тигән метафора оригиналь яңғырай. «Мәкер ауын» «мөйөштәге үрмәксе» менән сағыштырыу ҙа уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәҫлек түгел. Әҙәм балаһына хас әлеге шул көнсөллөк, тар эслелек, намыҫһыҙлыҡ кеүек тиҫкәре сифаттарҙы фашлауға йүнәлтелгән был сонет «Яман ниәт илтмәй яҡшыға, баш ҡаҙығы була шаҡшыға» тигән юлдар менән ябып ҡуйыла. Ошондай ҙа ҡаты киҫәтеүҙән һуң өс йыл үткәс яҙылған «Көслөләргә ҡойроҡ болғаманым...» тигән сонетта лирик героиня (уның артынса – авторҙалыр!) үҙенең холоҡ-фиғелен һәм ижадта табынған иманын (кредоһын) үтә лә аңлайышлы итеп асып бирә:

Саф күңелгә ҡара яғыусыны
Йырым менән күккә сөймәнем.
Кәйеф-сафа ҡоло булманым һис,
Тик хеҙмәттән дауа эҙләнем.

Әйткәндәй, Ә. Таһирова ижады менән яҡынданыраҡ танышҡанда, шул күҙгә ташлана: шиғриәткә, бигерәк тә уның сонет формаһына ул ҙур яуаплылыҡ тойоп ҡарай һәм яҙғандарының уҡыусыға ыңғай тәьҫир яһап, уны яҡшылыҡҡа өндәүҙә бер сара булып торор әле тигән өмөттәр баҒлап йәшәй. Һикһәненсе йылдар уртаһында донъяға килгән «Ижад» тигән сонетта, йәшлеге артта ҡалған лирик героиняға «тыныс күктән

ҡояш» көлөп ҡарағандай тойолһа ла, уның «күңел төпкөлөндә тынғы бирмәй ‹...› шаралауыҡтар шашып уғыла»; «Таштар ярып үтә кескәй инеш, – кешеләргә ҡайта йыр ғына». Шиғриәткә, ғөмүмән, ижадҡа бәйле темаға шағирә артабан да мөрәжәғәт итәсәк. Туҡһанынсы йылдар башына ҡараған «Йорттар һалған кеүек төҙөүсе...» тигән сонетты шундайҙар араһында иң уңышлыһы, тиер инем. Сонеттың тәүге строфаһында автор ижад кешеһен йорттар һалған төҙөүсегә, кәрәҙ ҡойған бал ҡортона, тирен түгеп, ергә бар ҡотто биргән тырыш игенсегә тиңләй ҙә, икенсе строфала былай ти:

Мин дә шулай сонет яҙамын
Йәйге селләләрҙә, буранда.
Өйҙә, ҡырҙа, юлда, урамда
Тоям уның ғәмен, ғазабын.

Ә. Таһирова сонеттар ижад итеүсе генә түгел, уларҙы ихлас, йәнә-тәне менән пропагандалаусы ла. Уның «Сонетҡа бағышлау» тигән шәлкеме – шуға асыҡ дәлил. Был шәлкем төрлө йылдарҙа яҙылған биш сонеттан тора: «Сонет менән беҙ табышҡан юлдар...», «Шиғырҙарҙың да шиғыры...», «Сонет сере», «Гәлсәр күпер», «Йыһан гөлө». Шәлкемгә ингән сонеттарҙы иғтибар менән, ҡат-ҡат уҡығанда, уларҙың градация тип аталған стилистик фигураға тап килеүҙәрен тояһың. Әҙәбиәт теорияһынан билдәле булыуынса, градацияны ике төргә бүлеп йөрөтәләр: климакс (юғарыға күтәрелеү) һәм антиклимакс (түбәнгә тәгәрләү). Әле һүҙ барған шәлкемдә градацияның климакс тигән төрө өҫтөнлөк итә, сөнки уға ингән сонеттарҙың бөтәһендә лә тиерлек сағыштырыуҙар, образдар, эпитеттар, метафоралар һәм башҡа художество саралары башлыса түбәндән юғарыға табан күтәрелеүҙе кәүҙәләндереү өсөн хеҙмәт итәләр.

«Сонет менән беҙ табышҡан юлдар...»ҙа (ул Петраркаса яҙылған), әйтәйек, автор үҙенең нисек итеп сонет донъяһына юл ярыуын һүрәтләгән. Ул юл еңелдән булмаған, әлбиттә. Хәйер, уның нисек булғанлығын автор үҙе лә, йәшермәй-нитмәй, асып һалған: «Булды ауыр, булды бик оҙон. Йылдар сылбырына йылды ялғап, ҡабыҙҙыҡ беҙ һөйөү йондоҙон». «Шиғырҙарҙың да шиғыры...» тигән икенсе сонетта (бынығы Шекспирса яҙылған), был жанрҙың тәмен татып өлгөргән шағирә уға ода йырлай: «Шиғыр – моңдоң аҫыл ташы, сонет – аҫыл таштар шаһы». «Сонет сере» (бынығы – йәнә бөйөк Петраркаса) тип

аталған өсөнсө әҫәрҙә жанрға ода йырлау дауам ителә, ләкин был юлы уның даирәһе шаҡтай киңерәк күҙаллана: шағирә фекеренсә, сонет үҙ эсенә сихри яҙ айҙарын да, нурлы йәйҙең шифалы дауаһын да, көҙҙөң йәнгә яҡын йомартлығын да, ҡыштың саф һәм тымыҡ һауаһын да һыйҙыра. Сонет, шағирә уйынса, сыңрап торған тәүге һөйөү ҙә, йән һөйгәнең менән ҡауышыу ҙа, көтмәгәндә генә айырылышыу ҙа, шулай уҡ көтмәгәндә генә табышыу ҙа икән. «Гәлсәр күпер», «Йыһан гөлө» тигән дүртенсе һәм бишенсе сонеттарҙа (уларҙың тәүгеһе – Шекспир, икенсеһе – Петрарка өлгөһөндә яҙылған) жанрҙың баһаһы уғата ла юғарыраҡ күтәрелгән. «Гәлсәр күпер»ҙә, мәҫәлән, сонет, декларатив юл менән түгел, ә образлы фекерләү аша, ике ярҙы – Көнбайыш һәм Көнсығыш мәҙәниәттәрен тоташтырыусы ғәжәп үҙенсәлекле бер күренеш итеп кәүҙәләндерелгән: «Ғәҙәл, сонет – шиғриәттә гәлсәр күпер, талантлылар, ҡанатлылар унан үтер». Шәлкемде ябып ҡуйыусы һуңғы әҫәрҙә иһә, уның исеменән үк күренеп тороуынса, сонет Йыһан гөлөнә тиңләнгән. «Ул гөлдәрҙе таба ала өҙөлөп һөйгәндәр. Берҙәнберен күҙ ҡараһы күреп, ихлас күңел менән килгәндәр», тип, сонеттың бәҫен артабан да арттырып ҡуя шағирә.

Ә. Таһированың был осорҙа (туҡһанынсы йылдарҙа) тулышҡан ижад емештәренән иң һүтлыһы «Бер раҫларбыҙ ерҙә үҙебеҙҙе» тигән сонеттар тажы булды, тиергә мөмкин. (Һуңыраҡ шағирә уның исемен «Салауаттың ҡаны беҙҙә ҡайнай» тип үҙгәртте һәм әҫәрҙең яңғырашын уғата ла көсәйтеп ебәрҙе). Эпиграфта әйтелгәнсә, әҫәр Р. Ғариповтың яҡты иҫтәлегенә арналған. Автор уны үҙенең остазы тип атаған. Һәм сонеттар тажының буйынан-буйына ошо идея ҡыҙыл еп булып үтә – ике шағирҙың уртаҡ фекерҙәре, донъяға ҡараштары һыҙыҡ өҫтөнә алына. Таждың асҡысы итеп, Рәми Ғариповтың «Шиғриәт ул – ғәзиз ер бүләге» тигән ҡанатлы фразаһы һайлап алынған һәм сонеттарҙың күбеһендә һүҙ ошо тирәлә бара. Формаһы һәм төҙөлөшө буйынса «Салауаттың ҡаны беҙҙә ҡайнай» ябайҙарҙан түгел. Сюжет ағышында таждың лирик героиняһы йә Ә. Таһирова, йә Р. Ғарипов шәйенә инә. Шуға күрә, уларҙың образын мөмкин тиклем тулыраҡ күҙаллау өсөн, әҫәрҙе бик диҡҡәт менән уҡыу талап ителә. Өҫтәүенә, был ике шағирҙың ижады менән аҙмы-күпме таныш булыу ҙа мөһим.

«Мин эҙләйем күңел дәфтәренән үткән йылдарымдың эҙҙәрен» (ҡайһылай матур, йөкмәткеле метафора!), – тип башлай һүҙен шағирә шәйенә ингән лирик героиня, һәм шунда уҡ (тәүге сонетта уҡ) остазының ижад майҙанындағы урынын билдәләй:

Таланттарҙың һин терәге инең,
Курсалап йыр-моңло күңел гөлөн,
Һаҡта торҙоң һынмай, һүрелмәй.

Йырҙа ине йөрәгеңдең ғәме,
Әйтә килдең: «Шиғыр – ер бүләге,
Тик ул һәр кешегә бирелмәй».

Икенсе сонетта лирик героиня, шағирә образына инеп, йәш сағында уға остазы биргән һабаҡтарҙы хәтере аша үткәрә башлай:

Бел, ҡыҙыҡай: һәр бирелгән талант
Ул – илдеке. Халыҡ байлығы.
Үҙ күңелеңде гел иркәләмә,
Сәмле итһең халҡың кайғыһы.

Ил милкенә, халыҡ байлығына
Һаҡсыл карау кәрәк – онотма!
Барған сакта тормош һуҡмағында

Ябай нәмәләрҙән шиғырҙар тап,
Йәнәш барғандарға ҡуй һин ҡанат,
Талант – рух таяуы ил алдында.

Артабанғы сонеттарҙа остаз биргән һабаҡтарҙың йөкмәткеһе тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә бара. Сиктәре лә киңәйгәндән-киңәйә. Башта уларҙың мәғәнәһе өлкән шағирҙың үҙенән йәшерәк шағирәгә биргән ғәмәли, ғәҙәти кәңәштәренә генә ҡайтып ҡалһа, тора-бара остаз, тарих биттәренә күҙ ташлап, шаҡтай ҡатмарлыраҡ мәсьәләләрҙе лә күтәрә. Уны шиғриәттең генә түгел, тыуған төйәгенең һәм туған теленең дә киләсәге борсой. Үҙенең ижадына, шәхсән тормошона бәйле ҡайһы бер сетерекле хәлдәрҙе лә ситләп үтмәй ул. Ләкин, ниндәй генә ҡаршылыҡтар менән осрашырға тура килмәһен, ул һис кенә лә яҙмыш ҡолона әүерелергә теләмәй. Остаздың «Тик теҙләнмәм, башымды ла эймәм, ергә ныҡ ерегеп үҫкән имән – бик тиҙ ауа торғандарҙан түгел» тигән һүҙҙәрендә бер аҙ һауаланыу, ҡупрайыу сире һиҙелеп ҡалһа ла, асылда ул ысынбарлыҡтан бик алыҫ тормайҙыр. Шул да мәғлүм булһын: һүҙ ил, тел кеүек етди төшөнсәләр хаҡында барғанда ла, остаз уҡыусыһын күҙ

уңынан ысҡындырмай, уға һабаҡ уҡыуын дауам итә. Унынсы, ун беренсе, ун икенсе сонеттарҙа был һабаҡтар күҙгә.бәрелеп үк тора хатта.

Ун беренсе сонеттағы «Хеҙмәт – сикһеҙ. Бик маһайып китмә. Биргән кәңәштәргә ҡолаҡ һал да, маҡтауҙарҙы ҡуйып тор һин ситкә»; «Дан ул – аҙғын. Йә – бар. Йә юҡ була, күндәм тартыу кәрәк шиғыр йөгөн» тигән саҡырыу-өндәү, мәҫәлән, бөтә әҙәбиәтселәргә лә киҫәтеү булырлыҡ. Ун икенсе сонеттағы «Һары гәрәбәләй тос орлоҡто яҙғы сәсеү өсөн һаҡлағандай, беҙ һаҡларбыҙ туған телебеҙҙе» тигән юлдар ҙа уҡыусыны битараф ҡалдырмаҫ. Ошо уҡ сонетта таждың «Бер раҫларбыҙ ерҙә үҙебеҙҙе» тигән тәүге исеменә лә тап булабыҙ. Йыйып ҡына әйткәндә, Рәми Ғариповтың лирик героиня артында баҫып торған шағирә хәтирәләрендә тыуҙырылған һыны аша уҡыусы байтаҡ ҡына мәғлүмәт ала. Һуңғы, ун бишенсе сонетта, авторҙың уй-фекерҙәре, уҡыусы менән уртаҡлашырға теләгән идеяһы бер төйөнгә төйнәп бирелгән. Бына ул сонет:

Шиғриәт ул – ғәзиз ер бүләге,
Тик ул һәр кешегә бирелмәй.
Талант – рух таяуы ил алдында,
Тоғро хеҙмәт ит һин, иренмәй.

Беҙҙең йөрәк ярған моноҙоҙо
Ишетһендәр башҡа ҡалыҡтар.
Еңел түгел беҙҙең юл-һуҡмаҡтар,
Еңел түгел беҙҙең яҙмыштар.

Үкенескә тулы үтелгән юл,
Болоҡһой ҙа тора зиндан-күңел,
Әйтелмәгән һүҙҙәр өтә, ялмай.

Ләкин бер әйтербеҙ һүҙебеҙҙе,
Бер раҫларбыҙ ерҙә үҙебеҙҙе,
Салауаттың ҡаны беҙҙә ҡайнай.

Яңы быуатты (уны әлегә шартлы рәүештә шағирәнең сонеттар ижад итеү өлкәһендәге өсөнсө осоро тип атайыҡ) Әнисә Таһирова «Ағизел» журналының 2001 йылғы 1-се һанында баҫылып сыҡҡан «Сонеттар» исемле шәлкеме менән башлап ебәрҙе. Дөрөҫ, бында тупланған

сонеттар башлыса теге быуатҡа ҡарай. Шәлкемдәге ун биш сонеттың «Сонет яҙыу килешәме икән...», «Йырҙарыма өндәшеү», «Селтербей» тигәндәре быуаттар ҡауышҡанда, ә ҡалғандары иһә һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа яҙылған. Шәлкемгә шулай уҡ «Йырым менән донъя яҡты» (1988) тигән шиғырҙың ике меңенсе йылда сонет итеп үҙгәртелгән «Ниңә әле был күңелем...» тигән варианты ла индерелгән. Автор ҡәләме төртөлгән башҡа әҫәрҙәр ҙә осрай бында.

Быуатты ҡаршылағанда донъяға килгән «Сонет яҙыу килешәме икән...» һәм «Йырҙарыма өндәшеү» тигән сонеттарҙың (улар икеһе лә – Шекспир тибындағылар) шул дәүергә хас хәл-ваҡиғалар йоғонтоһо аҫтында яҙылғанлыҡтары әллә ҡайҙан күренеп тора. «Сонет яҙыу килешәме икән...»дә шағирә «Эшһөйәрҙәр түгел, кәсепселәр илде ҡамап алып буйлайҙар. Бер ниҙән дә улар тайшанмайҙар: аңдый, йолҡа, тапай, урлайҙар», тип, тураһын ярып һалһа, «Йырҙарыма өндәшеү»ҙә иһә «Кисерегеҙ, ғәзиз шиғырҙарым, йөҙ ямаулы йортта тыуҙығыҙ. Күпме шау-шыуҙарҙан шаңҡынығыҙ, һемерҙегеҙ күпме ыуҙы һеҙ» тип уртаҡлаша ул үҙенең һыҙланыуҙары менән. Шағирәнең шул дәүерҙәге кәйеф-сафаһы уның әле иҫкә алынған сонеттарында ғына түгел, бөтә шәлкемгә инеш һүҙ һымаҡ яңғыраған автор аңлатмаһында ла асыҡ сағылған. «Донъяны, – тиелгән унда, – кәсепселәр баҫып алды. Әҙәбиәт, сәнғәт донъяһында ла ялған матурлыҡ күҙҙе сағылдыра, китап кәштәләрендә ялтыр тышлы, йөкмәткеһеҙ яҙмалар тупланған китап ишараттары тулып ята. Ләкин, минең уйымса, былар үтер, ысын сәнғәт, юғары зауыҡ менән яҙылған әҫәрҙәр үҙ урынын алыр».

Ошо йылдың аҙағында Әнисә Таһирова үҙенең сираттағы түңәрәк юбилейын билдәләне. «Ағиҙел» журналы (2001 йыл, 12-се һан) был юлы шағирәгә уғата ла зур ихтирам күрһәтте. Юбилярға бағышланған биттәрҙе филология фәндәре кандидаты Әнисә Муллағолованың шағирәгә арнап, ихлас күңелдән яҙылған «Ер күкрәген биҙәр гөл кеүек...» тигән мәҡәләһе асып ебәрҙе. Мәҡәләгә ныҡлы терәк итеп, юбилярҙың «Баш эйәм тик шиғыр ҡаршында» тигән баш аҫтында ун бишләгән поэтик әҫәре урынлаштырылды. Артабан өлкән быуын башҡорт һәм татар шағирҙарының Әнисә Таһироваға бағышланған шиғырҙары урын алды. Юбилей материалдарын Рәми Ғарипов, Ғайса Хөсәйенов, Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазанов, Муса Ғәли, Сергей Поликарпов баһаламаларынан килтерелгән өҙөктәр ослап ҡуйҙы. Ун бишләгән поэтик әҫәр араһында, ике йондоҙ һымаҡ, «Йыһан гөлө» һәм «Юҡһынырмын һеҙҙе, йәшел тауҙар...» тигән ике сонет та балҡып тора.

Уларҙың береһе 2001 йылдың апрелендә, икенсеһе – шул уҡ йылдың майында яҙылған. Был инде сонетсы Әнисә Таһированың ысын мәғәнәһендә яңы быуатҡа аяҡ баҫыуын раҫлап тороусы факт булды.

«Йыһан гөлө»н шағирәнең сонет жанрына туҡһанынсы йылдарҙа йырлай башлаған мәҙхиәһенең үҙенсәлекле бер дауамы тиергә була. Әгәр тегеләрендә сонет «шиғырҙарҙың да шиғыры, моңдарҙың да моңо», серлеләрҙән дә серле жанр һәм шиғриәттә төрлө ҡитғаларҙы тоташтырыусы гәлсәр күпер, тип аталһа, бынығында ул Йыһан гөлөнә тиңләнә һәм образлы сағыштырыуҙар, уңышлы метафоралар аша уның бәҫе уғата ла юғарыраҡ күтәрелә. Был сонетына автор үҙе лә битараф түгел шикелле: быуат башында донъяға килгән яңы китабына ул ошо исемде ҡушты.

«Юҡһынырмын һеҙҙе, йәшел тауҙар...» тигән сонет шағирәнең юбилей йылына аяҡ баҫҡандағы кисерештәрен сағылдырғанға оҡшап тора. Итальянса яҙылған был сонеттың тәүге ике строфаһында, ғүмер йомғағын һүтеп бөткәс, үҙен фәрештәләр, изге йәндәр донъяһында хис иткән лирик героиня, һуңғы ике строфала фанилыҡтың барыбер ҙә баҡыйлыҡтан өҫтөн дә, ҡәҙерлерәк тә икәнлеген танырға мәжбүр:

Ләкин ошо тиңһеҙ хозурлыҡта,
Нурҙар булып яуған саҡта наҙҙар,
Сорнағанда мине сихри моңдар,

Юҡһынырмын һеҙҙе, йәшел тауҙар,
Аҡ йылғалар, ҡарлығаслы ярҙар,
Һеҙҙе һағыныуҙан йәнем илар.

Әҙәбиәт тормошо менән яҡындан һәм даими ҡыҙыҡһынып тороусы зирәк уҡыусы моғайын да һиҙенгәндер: яңы быуатта Әнисә Таһирова ижадында, сонеттарға ҡарағанда, традицион шиғырҙар өҫтөнлөк итә башланы. Ләкин бының өсөн ул шағирәне битәрләмәҫ, уны нимәлә булһа ла ғәйепләргә ашыҡмаҫ. Сөнки ул белә: ижадтың ҡасан, ҡайһы төрөн һайлау, ҡайһы жанрға күберәк иғтибар бүлеү – ижадсының шәхсән эше, шәхсән хоҡуғы. Унан һуң, был эш ижадсының күңел торошона, илһам ҡошоноң ниндәйерәк тиҙлек менән һәм шулай уҡ ниндәйерәк юғарылыҡта осоуына бәйле икәнлеген дә оноторға ярамай. Дөйөм алғанда иһә, Ә. Таһирова яңы быуатта ла ифрат әүҙем ижад итә. Ун биш йыл дәүерендә уның «Ағизел» биттәрендә баҫылып сыҡҡан

яңы әҫәрҙәре һәр хәлдә шулай уйларға форсат бирә. Был әҫәрҙәрҙең байтағы шағирәнең «Алтын буран» исемле китабының «Йөҙ шиғыр» һәм «Йөҙ сонет» тигән бүлектәрен йәмләне.

Ике мең беренсе йылда «Йыһан гөлө» менән «Юҡһынырмын һеҙҙе, йәшел тауҙар...»ға береһенән-береһе күркәмерәк тағы өс сонет өҫтәлде: «Йылдар үткәс...», «Яҡты күңеләндә һинең булған...» һәм «Петрарканы күрҙем төшөмдә...». Тәүгеһенең лирик героиняһы, йылдар үткәс, уны ниҙәр көтәсәге хаҡында уйланып, күҙ нурҙарын түгеп яҙған шиғырҙарының эҙһеҙ юғалмаҫына өмөт бағлай. Икенсеһе башҡорт поэзияһында тәүгеләрҙән булып сонет формаһына юл ярған шағир Хәй Мөхәмәтйәровҡа арналған. Автор, ҡәләмдәш ағаһының талантына һоҡланып, уның был донъянан, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик иртә киткәнлегенә үкенеүен белдергән һәм шул үкенесен «Өлгөрөп тә еткәс моң-йырҙарың, өҙөлөп тә ҡалған ғүмеркәйең. Яҙылмайса ҡалған сонеттарың, һөйөлмәйсә ҡалған һөйгән йәрең» тигән юлдарға һалған. Өсөнсөһө лә – арнау. Тик был юлы ул атаҡлы Петраркаға арналған. Итальян Франческо Петрарка сонеттарының ҡанунын үҙ күңеленә һеңдергән башҡорт шағирәһе, шул сонеттарҙың авторын «сафлыҡтың иң сағыу көҙгөһө», «тоғролоҡтоң бөйөк өлгөһө», «бар донъяға маһир сонетсы» тип атай. Ошо урында Әнисә Таһироваңың тыйнаҡлығын да һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтергә кәрәк. Бынамын тигән йөҙҙән ашыу сонет, унлап сонеттар тажы авторы була тороп та, ул үҙен Петрарканың уҡыусыһы итеп түгел, ә бары тик уның өлгөһөнә табыныусы тип кенә иҫәпләй :

Рәхмәт, ҡабыҙғанға сонет утын,
Мин бит һин төҙөгән сонет-йорттоң
Ишектәрен генә асыусы.

«Ағиҙел»дең артабанғы йылғы һандарында, һирәкләберәк булһа ла, Әнисәнең «Ғәрәсәтле, шөбһәле бер көндә...», «Серле сонет-ҡош», «Төш», «Аҡ елкәнем булып ҡалырһың», «Күпме таштар ырғыттылар миңә...» (төҙәтелгән варианты) , «Асылыкүл» тигән сонеттары донъя күрҙе.

«Ғәрәсәтле, шөбһәле бер көндә...» (2006) В. Брюсов һәм А. Блоктың символизм менән мауыҡҡан саҡтарында ижад ителгән ҡайһы бер шиғырҙарын хәтерләтеп ҡуя. Ғәзәттә ундай шиғырҙар һүрәтләү саралары-рына ифрат бай булыусан, шуға күрә яңғыраштары менән дә айырылып

торалар. Ләкин күп осраҡта авторҙың ни әйтергә теләгәнлеге уларҙың үҙҙәренә генә билдәле булып ҡала. Әнисәнең дә был сонеты шундайыраҡ тәьҫир ҡалдыра, тиер инем. Һүҙ юҡ, яҙылышы, яңғырашы менән ул бик матур, тик бына йөкмәткеһе генә һорауҙар тыуҙыра. «Һын-торошо менән» алиһәгә тиң шәрә ҡатын һыуҙан пәйҙә булғас, ни өсөн ярҙа торған «халыҡ» уны геү килеп ҡыҙғана? Әгәр сонетта тасуирланған хәл-ваҡиға пляжда барһа, ни өсөн әле был ҡатын алғы планға сығарыла? «Алиһәгә тиңдәш һылыу» булғанға күрәме? Әллә «йөҙө – айҙай» булғанғамы? Ҡараштары уның күңел ғазаптарын һөйләгән өсөнмө? Ә уның күңел ғазаптары ниҙән ғибәрәт һуң? Был ғазаптарҙы кем күргән дә, кем белгән? Күңел ғазаптарын бер ул ғына кисерәме ни? Сонетты бикләп ҡуйған «Халыҡ геүләй. Үкһей бер диуана, ҡайнар йәше бер туҡтауһыҙ тама» тигән юлдарҙы нисек аңларға?

Шулай ҙа реаль тормошҡа тап килерҙәй ике юлға иғтибар итмәй үтеү килешмәҫ: «Һис ҡымшанмай», «таш һын һымаҡ» баҫып торған һылыу ҡатынға йотлоғоп ҡарап торған «туҡ йөҙлөләр яна нәфсе менән, шул һылыуҙың ҡараштарын аулай». Был юлдарҙы һыҙыҡ өҫтөнә алыуҙың, бәлки, хәжәте лә булмаҫ ине, әгәр ике йылдан һуң (2008) «Төш» тигән зәһәр уҫал сонет донъяға килмәһә. Шекспирса яҙылған был сонеттың тәүге ике строфаһында автор баҡый догъяларҙа хөкөм һөргән хәл-әхүәлдәрҙе ентекләп һүрәтләй ҙә, өсөнсө һәм дүртенсе строфаларҙа инһә «ялҡын-йәшек эргәһендә» баҫып торған иблистең хөкөмөн тасуирлаған:

Ерҙә ҡара машинала ғына елгән
Уғры берәүҙе ул йәһәт эҙләп тапты.
Утлы һәнәгенә элеп, болғай-болғай,
Тамуғының уртаһына алып атты.

Шыбырланы шул саҡ арыҡ, байғош әҙәм:
Балда, майҙа ныҡ йөҙгәйне – булды әрәм!

Өҫтә әйткәнемсә, һуңғы йылдарҙа Әнисә Таһирова сонетҡа һирәгерәк мөрәжәғәт итһә лә, «Серле сонет-ҡош» исемле әҫәрендә уның был жанрҙы ысын күңелдән үҙ иткәнлеге тағы бер тапҡыр раҫланды. Әҫәргә Пушкиндан эпиграф итеп алынған «Низағтарҙы онотһа, халыҡтар берҙәм ғаилә булып йәшәр ине» тигән һүҙҙәр ойотҡо һалған, тиергә була. Сөнки әҫәрҙең башынан алып аҙағына тиклем, Ер йөҙөндә

быуаттарҙан килгән низағ тынһа, сонетҡа ла киң юл асыласағы хаҡында фараз ҡылына. Автор фекеренсә, әгәр шундай ваҡыт етһә, «Ерҙе йыһан менән тоташтырыр сонет тылсымының моң-уты. Күктәр серен асыр сонет сыңы, ҡыуандырыр яҙҙар, йәйҙәр моңо, ҡырыҫ булмаҫ көҙҙәр, килгән ҡыш» һ. б., һ.б.

Әнисә сонеттары... Әҙәбиәтебеҙҙәге үҙаллы бер күренеш, шағирәнең сонет жанрына бүленгән ҡырҡ йылға яҡын ғүмере. Быны ысын мәғәнәһендә физаҡәрлек тип атарға мөмкин. Әлбиттә, йөҙҙән ашыу сонет араһында, бик уңышлылары менән бергә, уңышһыҙыраҡтары ла осрарға мөмкин. Аҡһағыраҡ рифмалар ҙа, ҡытыршыраҡ һүҙбәйләнештәр ҙә күҙгә салынып китеүе ихтимал. Әммә, дөйөм алғанда, ни генә тиһәң дә, Әнисә сонеттары барыбер ҙә Әнисә сонеттары булып ҡала. Сөнки әлегә башҡа сонеттар юҡ беҙҙә.

Уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был мәҡәлә – ошо күренештең һәм физаҡәрлектең әлегә хронологияһын ғына булһа ла тергеҙеү ниәтенән сығып яһалған тәүге азым. Киләсәктә Әнисә сонеттарының тематикаһы ла, тел-стиль сараларына бәйле художество үҙенсәлектәре лә ныҡлап өйрәнелер. Тикшеренеүселәр, бәлки, мөхәббәт лирикаһын беренсе планға ҡуйырҙар. Сөнки был тема шағирәнең теге быуаттағы ижадында айырым урын алып тора һәм бик үҙенсәлекле хәл ителә. Күп осраҡта уның был лирикаһы монһоуыраҡ яңғырай, һыҙланыуҙар өҫтөнлөк итә, ләкин унда бер ниндәй ҙә уҫаллыҡ, хөсөтлөк тойғоларын һиҙмәҫһең. Быға ышаныу өсөн яңы быуатта яҙылған «Аҡ елкәнем булып ҡалырһың» тигән сонеттан өҙөк:

Тиҫкәрегә иҫкән елдәр илтте
Карабыңды сит-ят илдәргә.
Миңә тигән алһыу бәхет шәлен
Һалдың күптән башҡа иңдәргә.

Үтһәләр ҙә юлдар айырым,
Аҡ елкәнем булып ҡалырһың.

Сонеттың тәүге ике строфаһы анафора алымына бай. Был иһә әҫәргә музыкаллек өҫтәй, уны уғата ла уҡымлыраҡ итә.

Киләсәк быуын тикшеренеүселәрендә Әнисә Таһированың лирик героинялары ла ҡыҙыҡһыныу уятмай ҡалмаҫ, моғайын. Минең уйымса, Әнисәнең лирик героинялары, уларға таш менән атҡанда аш менән

атмаһалар ҙа, йәштән үк формалашҡан ҡараштарына хыянат итмәйенсә, тормошта йыш ҡына осраштырып торған ҡаршылыҡтарға юлыҡҡанда ла үҙ дәрәжәләрен һаҡлап ҡала алыусы шәхестәр. Әлбиттә, намыҫыңды, абруйыңды һаҡлап ҡалыу бер кемгә лә еңел бирелмәй. Бындай осраҡта Әнисә Таһированың лирик героиняларына ла, уның үҙенә лә сонеттары ярҙамға килә. «Күпме таштар ырғыттылар миңә...» тигән сонеттың һуңғы строфаһындағыса:

Моң-алыһәм, янға керәһең...
Илһам уты гөлтләп ҡабына,
Һәм бүленгән йырым яҙыла...

Ниһайәт, Әнисә Таһирова һәм тәбиғәт. Тәбиғәттә ул ифрат нескә тойомлай һәм уның бай күренештәре күп кенә сонеттарҙа ла, сонеттар таждарында ла сағыу буяуҙар ярҙамында һүрәтләнә. Урал итәгендә йәшәһә лә, диңгеҙ стихияһы ла ят түгел уға. Тыуған төйәгебеҙҙең сағыштырғыһыҙ матурлыҡтары иһә шағирәне һоҡландырып ҡына ҡалмай, ғорурлыҡ тойғолары ла уята. Миҫал итеп, иң яңыларҙан иҫәпләнгән «Асылыҡүл» (2012) шәлкемен атап китергә мөмкин. Был шәлкемгә йән өргән традицион шиғырҙар араһында шундай уҡ исемле бер сонет та бар. Минең ҡарашымса, был сонет шәлкемгә ингән бөтә шиғырҙарҙы ла үҙ тирәһенә туплаған. Һәм ошо урында ирекһеҙҙән Әнисә үҙе әйткән һүҙҙәр иҫкә төшә: сонет ул – шиғырҙарҙың да шиғыры.

Әнисә Таһирова – егерме өҫ китап авторы. Улар төрлө йылдарҙа, төрлө телдәрҙә, төрлө ҡалаларҙа нәшер ителгән. Был быуатта Өфөлә баҫылып сыҡҡан «Йыһан гөлө» һәм «Алтын буран» тигәндәре айырыуса иғтибарҙы йәлеп итә: йөкмәткеләре менән дә, полиграфик башҡарылыштары йәһәтенән дә. Шағирә үҙенең сираттағы күркәм юбилейына юл алды. Ул күркәм дә, етди ҙә. Уның ошо ваҡиғаға арнап сығарылған яңы китабын көтә шиғыр яратҡан уҡыусы.

2015, авғуст

ШАҒИРҘАР ДУЭТЫ

Мәҡәләнең атамаһы мәғрифәтле һәм зауыҡлы уҡыусыны бер аҙ көрһөндөрөп ҡуйыуы ла ихтимал. Сөнки ул белә: сит телдән килеп ингән был һүҙ «ике» тигәнде аңлата һәм башлыса йыр һәм музыка сәнғәте өлкәһендә ҡулланыла. Әйтәйек, ике тауыш йәиһә ике инструмент өсөн яҙылған вокаль йәиһә инструменталь пьесаны шулай атайҙар. Музыкаль әҫәрҙе ике йырсы йәиһә ике инструмент менән башҡарғанда ла ошо һүҙ ярҙамға килә. Донъя мәҙәниәтенән дә, үҙебеҙҙекенән дә быға бихисап миҫалдар килтерергә булыр ине. Ә бына әҙәбиәт, бигерәк тә уның шиғриәт тип йөрөтөлгән өлкәһендә һирәгерәк осрай торған хәл.

Бында шиғырҙарының тематикаһы, тел-стиль һәм башҡа шуның кеүек художество саралары менән бер-береһенә яҡын торған ике шағир түгел, ә, барынан да элек, ғаилә короп, ирле-ҡатынлы ғүмер иткән һәм шиғриәт донъяһында йөҙгән пар – Хисмәтулла Юлдашев менән Тамара Юлдашева күҙ уңында тотола. Был парҙың береһе Ҡаҙағстанда тыуып, Ырымбур далаларында ҡанат йәйгән булһа, икенсеһе иһә башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәҙәниәтенә байтаҡ ҡына таланттар биргән Ишембай яҡтарында тыуып үҫкән. Тура килһә – килә бит ул: был ике пар исем-фамилиялары менән генә түгел, тормошта ла, ижадта ла юлдаштар, бер-береһенә даими рәүештә илһам ялҡыны өҫтәп тороусылар булып киткәндәр.

Хисмәтулла менән Тамараның утыҙ йылдан ашыу ижадына күҙ һалһаң, уларҙы ошо юлдан ҡулға-ҡул тотошоп атлағандай итеп тояһың. Сөнки икеһенең дә шиғырҙары, тупланған китаптары бер-бер артлы – башлыса бер тирәлә тиерлек донъяға киләләр. Әйтәйек, Хисмәттең «Көмөш йүгән» тигән тәүге йыйынтығы 1983 йылда баҫылып сыҡһа, дүрт йылдан һуң Тамараның да тәүге китабы («Тояҡтар йыры», 1987) донъя күрә. 1989 йылда Хисмәттең «Убаларҙа – ҡылған» тигән икенсе йыйынтығы баҫылып сыҡһа, өс йылдан һуң Тамараның да икенсе китабы («Ер менән Күк араһында», 1992) донъя күрә.

Ошо урында кескенә бер сигенеш яһап китмәй ярамаҫтыр. Шағир булараҡ та, ғалим булараҡ та, башҡорт әҙәби процесын, бигерәк тә уның шиғриәтен даими иғтибар үҙәгендә тотоусы Рауил Бикбаев был пар ҡанаттар тураһында тәүгеләрҙән булып һүҙ ҡатты. «Заман ағышы,

шиғри быуындар яҙмышы» (1992) тип аталған күләмле күҙәтеүҙәрендә ул бына нимә тип яҙҙы: «Хисмәт Юлдашев «Көмөш йүгән» (1983), «Убаларҙа – ҡылған» (1989) исемле китаптары менән хәҙерге башҡорт шиғриәтенә үҙ моңон, үҙ һүҙен алып килде. Был йыйынтыҡтар ҡалын түгел, әммә тос, һәлмәк. Баҫылып сығыу йылдарына ҡарағанда ла, уларҙың авторының бик үк ҡабаланып бармауы күренә».

Р. Бикбаевтың был күҙәтеүҙәрендә Тамараға ла «өлөш» сыҡҡайны. «Тамара Юлдашеваның тормошсан, шул уҡ ваҡытта романтик ашҡынылы шиғырҙары хәтерҙә ҡала», тиелгән унда. Күҙәтеүҙәрҙең авторы шағирәнең «Тыумаған балаға» исемле шиғырына (һуңыраҡ, был шиғырҙың исеме автор тарафынан бер аҙ үҙгәртелде) айырым туҡталып, уға хаҡлы баһаһын биргән: «Шиғырҙағы һәр юл Тамараның бәғерен телеп донъяға тыуған. Шағирәнең тормошҡа протесына әйләнгән».

Был сигенеш юҡтан ғына, һүҙ эйәрә һүҙ сығып ҡына, йәиһә арҙаҡлы шәхес күләгәһенә йәшеренеп һүҙ һөйләү ниәтенән яһалманы, әлбиттә. Һикһәненсе йылдарҙа бер-береһенә һыйынып,килешле генә яңғыраған дуэт, туҡһанынсы йылдарҙа ниндәйҙер дисгармония кисереп алғандай тойолдо. 1999 йылда, иҫке быуатты осларға һаҙаулы ғына айҙар һәм көндәр ҡалып барғанда, Тамара үҙенең өсөнсө китабын ҡулына алыу бәхетенә иреште. Автор уны «Ете дарьям» тип атаған. Элеккеләре менән сағыштырғанда, быныһы шаҡтай ҡалыныраҡ ине.

Яңы китабын шағирә «Ин мөкәддәс теләк» тигән баш һүҙ менән асып ебәрҙе. Күләме яғынан бик зур булмаһа ла, йөкмәткеһе йәһәтенән ул үткер ҙә, образлы ла, фәлсәфәүи ҙә. Ул саҡта яңы ғына ҡырҡы тулып уҙған шағирәнең ҡәләме аҫтынан сыҡҡан баш һүҙҙә бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин: «... Яҡты донъяла бөтә нәмә тулҡын ҡанунына буйһона. Ер, Күк, Һауа, Һыу, хатта Ут та. Ваҡыт һәм ара төшөнсәләре лә. Тарихи дәүерҙәр, быуындар алмашыныуы, сыуалыштар, илһамлы мәлдәр... Халыҡтарҙың рухи үҫеше лә, айырым кешенең күңел эҙләнеүҙәре лә – бөтәһе лә ҡотолғоһоҙ шул ағымда өйөрөлә. ‹...› Ә тулҡындар, хәтирәт һымаҡ, аяуһыҙ... Китабымдағы ил-көн, заман, кеше булмышы, шиғриәт һәм, әлбиттә, мөхәббәт тураһындағы уй-тойғоларым тулҡындары уҡыусы күңелендә изге яңғыраш тапһа, иң мөкәддәс теләк ҡабул булыр ине».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, был ун йыллыҡта (туҡһанынсы йылдарҙа) Хисмәтулланың яңы китабы күҙгә салынманы. Сәбәп нимәлә икән? Дуэттың гүзәл яртыһы сосораҡ, өлгөрөрәк булып сыҡтымы? Ошолай уйланып ултырғанда, күңелде шайтан ҡотҡоһо елкендереп ҡуйҙы. Уны Рауил Бикбаев күҙәтеүҙәрендәге бынау юлдар уятты: «Хис-

мәт Юлдашев һүҙ эсенә уй йома белә торған шағирҙарҙан. Уның яҙғандары бер уҡыуҙа ғына тулыһынса асылып, аңлашылып бөтмәҫкә лә мөмкин, сөнки шиғырҙар ҡысҡырып тормай йәки ҡапыл шаңҡытмай. Уларҙа моң эскә йәшерелгән, подтекст көслө, улар ярым тондарға, нюанстарға, образлы ым-ишараға ҡоролған. Шағир нескә буяуҙар менән, тапҡыр деталдәр менән белеп эш итә».

Арҙаҡлы яҡташының был маҡтау һүҙҙәрен (законлы һүҙҙәрҙе!) ишеткәс, ул саҡта утыҙ бише менән генә барған Хисмәтулланың башы әйләнеп китмәне микән, тимен. Булыр, һис тә булмаҫ тимә. Башҡа сәбәптәрҙең дә табылыуы ихтимал. Донъя бит! Ярай әле яңы быуатҡа аяҡ баҫҡас, дуэт яңынан көйләнеп киткәндәй булды. Башта «Ағиҙел» биттәрендә, артабан иһә – береһенән-береһе күркәмерәк китаптарҙа (Хисмәтулла – «Сәнскеле йондоҙ», 2007; «Себер еле», 2012; Тамара – «Көн менән төн сиге», 2008; «Моң-тәлғәш», 2013) ул яңы һулыш алды, тиергә мөмкин. Китаптарҙың баҫылып сығыу йылдарынан күренеүенсә, Хисмәтулла менән Тамара әүәлгесә, үҙған быуаттың һикһәненсе йылдарындағыса, ижадта ла, тап тормоштағы шикелле, йәнәш атлай башланылар. Инициатива ла яңынан Хисмәтуллаға күсте. «Ағиҙел»дең 2003 йылғы 5-се һәм 2004 йылғы 12-се һандарында ул өҫ тиҫтәгә яҡын яңы шиғырын баҫтырып сығарҙы. Тамара ла унан ҡалышманы: журналдың 2004 йылғы 11-се һанын үҙенең ундан ашыу яңы әҫәрҙәре менән биҙәне. Арта-банғы йылдарҙа ла шулай дауам итте: Хисмәтулла – төп әҙәби журналыбыҙҙың 2007, 2008, 2011, 2014 йылғы һандарында үҙ урынын тапһа, Тамара иһә шул уҡ журналдың 2008, 2010, 2013, 2014, 2015 йылғы һандарында ҡунаҡта булды. Ҡыҫҡаһы, яңы быуаттың тәүге ун биш йылында был «поэтик дуэт»тың поэтик тауышы ярайһы ғына көр яңғыраны һәм әле лә яңғырап тора. Быға ышаныу өсөн, уларҙың ошо дәүерҙә донъя күргән әҫәрҙәренә еңелсә ҡараш ташлап алыу ҙа етә, тип уйлайым.

Рустарҙа «Рыбак рыбака видит издалека» тигән мәҡәл бар. Күп кенә сығанаҡтарҙан эҙләп ҡараһам да, нишләптер уның башҡортса вариантын табалманым. Калькалаштырып, үҙебеҙсәгә һүҙмә-һүҙ ауҙарғанда, ул «Балыҡсы балыҡсыны алыҫтан күрә» тип яңғырай торғандыр. Шиғриәт кеүек затлы материя хаҡында һүҙ йөрөткәндә, был һөйләм эстетик яҡтан, бәлки, урынһыҙыраҡ та тойолалыр. Шуға күрә мин уны әҙәбиәт, мәҙәниәт, сәнғәт юҫығына күсереп, «Талант талантҡа тартыла» тигәнерәк мәғәнәлә файҙаланырға булдым. Был ҡарарға бынан бер нисә йыл элек Хисмәт Юлдашевтың «Себер еле»

исемле китабына Хәсән Назар яҙған баш һүҙ менән танышып ултырғанда уҡ килгәйнем. Бигерәк тә ундағы: «Көтөлмәгәнлектәр, Назар Нәжмиҙәгесә парадоксаль мәғәнәләр, ыҡсымлыҡтар, тәбиғи аһаң – бына шулар Хисмәтулланың оҫталыҡ хазиналары» тигән юлдар иғтибарҙы йәлеп иткәйне.

Тыйнаҡһыҙлыҡ тип ҡабул ителмәһен: элегерәк, Хисмәт Юлдашев шиғырҙарын уҡығанда, минең дә шундайыраҡ хистәр кисергәнем булғыланы. Тик ул хистәрҙе, уй-фекерҙәремде ҡағыҙға төшөрөргә ашыҡманым. Хәсән өлгөрөрәк булып сыҡты. Ләкин бер зыян да юҡ. Бер үк күренеш тураһында ике авторҙың уй-фекерҙәре тап килгән икән, тимәк, уларҙың был күренешкә үҙаллы биргән баһаламаларында объективлыҡ күберәк. Хәсән Назарҙың баш һүҙенә килгәндә иһә, ул йыйнаҡ ҡына мәҡәләләр лә шағирға, уның ижадына ҡас иң мөһим һыҙаттарҙы асып бирә белеү өлгөһө булып тороролоҡ. «Шиғырҙарына оҡшап, – тиелә унда, – кеше булараҡ та Хисмәтулла алға һоноләп, эшмәкәрләнеп, көслөгә тағылып йөрөмәй. Аҡландарҙа еләктең иң шәбе, ғәҙәттә, аҫтараҡ күмелеп ятыусан шул». Бының инде минә, Хисмәтулла Юлдашев менән осрашып-аралашып йөрөмәгән кешегә, үҙе бер асыш ине.

«Көтөлмәгәнлектәр», «парадоксаль мәғәнәләр» Хисмәт Юлдашев шиғриәтендә, ысынлап та, йыш осрай. Шундайҙар иҫәбенә, тәү сиратта, «Балыҡ», «Кесерткән», «Тамыр», «Ете ятҡа димләп беҙҙе...», «Һуңғы тарпан», «Ҡышҡы иртә», «Өсөп төшөү», «Балсыҡ», «Кирза итек», «Саман», «Аҡ тап», «Ҡасҡалаҡ ҡар», «Әлүмин – әле мин», «Ҡар яуҙы, йылға ҡарайҙы...», «Батҡаҡ юлда», «Бөлөт», «Күктә һәм ерҙә», «Махсус кейем», «Йылға буйлап», «Себерҙә тотһаң ғишыҡ», «Һуҡмаҡ» тигән шиғырҙарҙы индерер инем. Был шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китһәк, яҙыҡ булмаҫ.

Яңы быуат үрҙәрен Х.Юлдашев «Ағиҙел»дә (2003) баҫылып сыҡҡан «Балыҡ», «Кесерткән», «Тамыр», «Ете ятҡа димләп беҙҙе...», «Һуңғы тарпан» исемле шиғырҙары менән яулай башланы, тиергә була. Х. Назар әйткәнсә, улар бөтәһе лә ыҡсымдар, ләкин ыҡсымлыҡ һис кенә лә йөкмәткегә зыян итмәгән. «Балыҡ» тигән шиғыр, мәҫәлән, строфаларға бүленмәгән ун ике юлдан тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «Сәнскеле йондоҙ» һәм «Себер еле» тигән йыйынтыҡтарға ингәс, ул, нишләптер, формаһын үҙгәртеп ҡуйған. Ошо бәләкәй генә шиғырҙың хәҙер өс варианты бар. Ә шулай ҙа яңғырашы менән журнал варианты уңышлыраҡ, минеңсә: беренсенән, уҡырға еңелерәк; икенсенән, еңел уҡылғас, фекер ҙә еңелерәк төйнәлә. «Вариациялар» хаҡында һүҙ

ҡуҙғатып тороу минең өсөн бик уңайлы күренеш түгел, әлбиттә. Ләкин ҡуҙғатмай ҙа булмай. Сөнки Хисмәтулланың төрлө баҫмаларҙа донъя күргән шиғырҙарын ентекләберәк тикшерә башлаһаң, уҡыусы хазинаһына әйләнгән әҫәргә «ҡәләм төртөү» осрағының берҙән-бер түгеллегенә ышанаһың.

Яңынан «Балыҡ» тигән шиғырға әйләнеп ҡайтайыҡ. Ул төрлөсәрәк тәьҫир ҡалдыра. Башта, тәү тапҡыр уҡып сыҡҡас, был шиғыры менән автор нимә әйтергә теләне икән, тигәнерәк һорау тыуа. Артабан, әҫәрҙе бер нисә ҡат уҡығандан һуң, авторҙың күҙәтеүсәнлеге иғтибарҙы йәлеп итә: ағым һыуға ҡаршы үрләгән балыҡтың таштар араһында бәрелеп-һуғылып, алтын тәңкәләрен ҡойоуы шағирҙан башҡа кемдең-берәүҙең генә күҙенә салыныр икән? Көтмәгәндә уй килеп төшә: бәй-бәй, был шиғыр символик йәнәшәлеккә ҡоролған түгелме һуң? Йәшәйешебеҙҙә йыш ҡына осрай торған ғәҙәлһеҙлектәрҙе үҙ итмәүселәрҙең яҙмышы ла Хисмәтулла Юлдашев шиғырында һүрәтләнгән балыҡ хәленә оҡшап ҡуймай микән? Дөрөҫ, был күренешкә зур наҡлыҡ һәм айыҡ аң менән ҡарарға кәрәк. Юғиһә, баҫыуҙа тос башаҡлы иген араһында ҡый үләне лә үҫкән шикелле, ысын мәғәнәһендә хаҡлыҡ яғында тороусылар менән бергә, йәнәһе лә ағым һыуға ҡаршы йөҙөүсе, асылда иһә дыуамал характерлы, мин-минлек сире менән ауырыусылар ҙа булыуы ихтимал да баһа. Ошондай уйҙарға (ҡаршылыҡлыраҡ та, шул уҡ ваҡытта – файҙалы ла, сөнки унда тормош диалектикаһы сағылған, ә тормош – ул ҡаршылыҡтар көрәше, көрәшһеҙ үҫеш тә юҡ) һалды мине Хисмәтулла Юлдашевтың бәләкәй генә бер шиғыры.

«Тамыр», «Ете ятҡа димләп беҙҙе...», «Һуңғы тарпан» тигән шиғырҙар ҙа кинәйәгә ҡоролған. Тик, «Балыҡ» тигәненән айырмалы булараҡ, быларында тотош ил, халыҡ яҙмышы символлаштырылған. «Тәрән тамырлы ағаста һәр бер япраҡ – йәшел байраҡ, һәр бер ботаҡ – уҡ-һаҙаҡ», «Ете ятҡа димләп беҙҙе, аңды ағыулағандар» кеүек юлдар уҡыусыны уйға һалмай ҡалмаҫ, моғайын. Йәиһә бына беҙҙең көндәргә килеп етәлмәйенсә, тарих төпкөлөндә исеме генә ҡалған тарпан тоҡомло ат һүрәте аша шағирҙың ниндәй көслө образ-картина тыуҙырғанлығын кем генә инҡар итер икән? Бәләкәй-бәләкәй генә ике киҫәктән торған был шиғырҙың тәүге киҫәгендә тарпан образы бына нисек итеп күҙ алдына баҫтырылған:

Кол итергә уны тырыштылар,
Тик йырламай ялдар ҡоллоҡта.

Затлы йорт-ҡураң да хурлыҡ уға,
Яттыр уға күндәм хол(о)ҡ та.

Тимер ҡоршау – ҡороҡ
ырғыттылар,
Башын сайҡап алып һелтәне.
Буй-буй төшкән ҡамсы эҙҙәренән
Йырғыланды заман, ил тәне.

Алты ғына юлдан торһа ла, йөкмәткеһе менән хәтерҙә тарих биттәрен яңыртып ҡуйған икенсе киҫәктә тарпан образы авторға ифрат ҡулай килгән:

Атай йөҙөндәге һырҙар –
Улар шундай тәрән яткан.
Ҡамсы эҙе булып яткан,
Йүгән эҙе булып баткан.
Әйтерһең дә, баш бирмәйсә
Өҙгәләнгән һуңғы тарпан.

«Кесерткән» тигән шиғыр ҙа кинәйәһеҙ түгел. Был юлы ул лирик геройҙың холоҡ-фиғелен, уның характер үҙенсәлеген асыу сараһы итеп файҙаланылған: кесерткән саҡҡан саҡта зәһәр әрнеүгә түҙгән кеүек, лирик герой тормош ҡаршылыҡтарын да еңергә өйрәнгән.

Кинәйәгә ҡоролған тағы бер нисә шиғырға туҡталып китергә мөмкин. Парадоксаль мәғәнәле «Ҡар яуҙы, йылға ҡарайҙы...» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, автор үҙ алдына «Ҡарайып күренә урман... Намыҫым түгелме ҡара?» тигән һорау ҡуйһа, «Батҡаҡ юлда» тип аталған шиғырында иһә ул, ыҙа сикһә лә, кеше арбаһына ултырмайынса, үҙе булып ҡалыуҙы, үҙ йырын йырлауҙы хуп күрә.

«Күктә һәм ерҙә» тигән шиғыр ҙа фәһемле. Ике сәғәт самолетта осоп, ергә төшкәс, лирик герой бына ниндәй хистәр кисерә:

Ергә төшкәс башым булды
Күккә тейгәндәй.
Ниндәй рәхәт икән ерҙә,
Ерҙә – түбәндә.
Еркәйеңә ҡара ла һин,

Ҡара күгеңә.
Ерем ерҙә генә матур,
Күркәм күренә.

Күләме яғынан «Йылға буйлап» тигән шиғыр ярайһы уҡ оҙон тойолһа ла, яҙылышы-яңғырашы менән артыҡ еләткес түгел, сөнки автор әйтергә теләгән фекер матур ҙа, төплө лә, яңы ла:

Бормалы ла, боролошло,
Киләмен йылға буйлап.
Кешеләрҙең дә яҙмышы
Шулай икәнен уйлап.

«Йылға ҡоя йылғаға: береһенең исемен юйып, тегеһе алға аға» тигән юлдарҙан, минеңсә, тәрән мәғәнәле метафора еҫе аңҡып тора. Үҙ маҡсатына ирешер өсөн, башҡаларҙы һанға һуҡмаған намыҫһыҙ бәндәләр әҙ түгел бит был донъяла. Иғтибарҙы йәлеп иткән тағы бер строфа:

Йылғаларҙың боролошо,
Йылғаларҙың яры бар.
Кешеләрҙең яҙмышында
Шатлығы бар, зары бар.

Тамыры ергә тоташҡан, хыялы күккә ашҡан лирик герой кешеләр яҙмышына, ғүмер ағышына оҡшаш йылғаларға ғашиҡ.

Эске аһәңе менән «Һуҡмаҡ» тигән шиғырҙы «Йылға буйлап»тың дауамы тиергә мөмкин. Күләме яғынан да шулай. Юҡтан ғына бар булған шиғыр һымаҡ тойолһа ла, хикмәтле генә мәғәнә төрөлгән уға. Көтмәгәндә юлға килеп ҡушылған һуҡмаҡ, зур ҡалаларға барып, йыр булырға ашҡынған юлдың шау-шыуҙарынан арып, ҡыуаҡлыҡҡа инеп юғала. Артабан, бик матур һәм ышандырырлыҡ итеп, һуҡмаҡтың бөтә булмышы һүрәтләнә. Кинәйә көслө лә, тормошсан да яңғырай.

Хисмәтулла Юлдашевтың кинәйәле шиғырҙарында, һирәк-мирәк булһа ла, ҡанатлы фразалар ҙа осрап ҡуя. Шуларҙың күҙгә нығыраҡ ташланғандарын бында күрһәтеп тә китергә мөмкин: «Күптән яҡтырыр донъяны ҡар яуып ҡараңғылай» («Ҡышҡы иртә»); «Хәйерсе хәленә төшһә, халыҡталыр ул ғәйеп» («Халыҡ һәм хаким»); «Үрҙә күреп күнегелгән – ерҙә ятһа ятыраҡ»; «Түбәнгә тәгәрләнеңме – бер

кемгә юҡ кәрәгең»; «Эйелеп алғандан бигерәк, үрелеп алғаның әһем – һин алма түгелдәһең» («Осоп төшөү»); «Яҡтылыҡҡа әсир төшкән – еңелгән ҡараңғылыҡ» («Күләгә»); «Хаҡ булһа ла, бары аҡ булып тарих биттәрендә тап ҡалған» («Аҡ тап»); «Һайланған һаҙға батҡан» («Ҡасҡалаҡ ҡар»); «Йә һынып, йә сыныҡып, һынарһың һин дошманлыҡтың, дуҫлыҡтың ысынлығын» («Яҙылмаған ҡанун»); «... Ямғыр булып яуалмаған ҡар булып яуа болот» («Болот»); «Уҙған ғүмер – туҙған кейем»; «Махсус кейемдәр туҙзырып ғүмерҙәрем уҙзы бит» («Махсус кейем»); «Шағирҙары шағир булһа, халыҡ һис туҡтамаҫ халыҡ булыуҙан» («Тегеләй-былай»).

Х. Юлдашевтың «Себер еле» исемле китабына яҙған баш һүҙендә Хәсән Назар юҡтан ғына Назар Нәжмиҙе телгә алмаған. Өлкән ағаһының традицияларын Хисмәтулла яҡшы үҙләштергәнгә оҡшап тора. Назар Нәжмиҙең киң билдәле «Һәр нәмәлә шифыр ята, әгәр күрә, тоя белһең, күргәненде йөрәгендә шифыр итеп ҡоя белһең» тигән һүҙҙәре лә ят түгелдер уға. Бер уйлаһаң, балсыҡ, кирза итек, саман, әлүмин, махсус кейем тигән һүҙ-төшөнсәләрҙең уҡыусыла юғары зауыҡ тәрбиәләргә сақырылған шифриәткә ниндәй ҡыҫылышы бар инде? Ошо һорауға Х. Юлдашев үҙ яуабын тапҡан һәм уны шифыр юлдарына һалған. Бындай шифырҙарға, бәлки, гел уңыштар ғына ла юлдаш булмайҙыр. Ә шулай за балсыҡтың, кирза итектең, самандың, әлүминдең поэтик образдар юғарылығына күтәрелеүе ҡыҙыҡлы.

Эҙләй китһәң, Х. Юлдашевтан Н. Нәжмигә туранан-тура һуҙылған ептәрҙе лә табырға була. Әйтәйек, «Тамсылар» тип аталған шифыр Н. Нәжмиҙә лә, Х. Юлдашевта ла бар. Н. Нәжмиҙең «Тамсылар»ы заманында уның тәүге китабына йән өргән ине. Н. Нәжмиҙең 1980 йылда яҙылған бер шифыры «Аңламаҫһың был донъяны» тип атала. Ошоға тартым шифыр Х. Юлдашевта ла бар. «Был донъя» тип атала ул. Унда бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин: «Йыйырсыҡланып сатнай маңлайым – мин был донъяны аңлай алмайым». Х. Юлдашевтың «Ишек алды кәҫләнмәне...» шифырындағы:

Һалам башлы, һалам ҡашлы
Мин тыуып үҫкән өйҙөң, –

тигән юлдар Н. Нәжмиҙең «Батша ауылы» исемле шифырын хәтергә төшөрөп ҡуя. Шуныһы мөһим: һалам башлы өйҙә тыуып үҫһә лә, лирик

герой төшөнкөләккә бирелмәй, «иҙелгәндә лә иңдәрем, был тормоштан һис биҙмәнем», тип, йәшәп ята ул.

Өлкән быуын шағирҙарыбыҙҙың традицияларына таяныу, уларҙы дауам итеү һәм яңы дәүерҙә, яңы шарттарҙа артабан үҫтереү (әгәр ул саманы белеп эшләнһә) – һис шикһеҙ хуплауға һәм яҡлауға лайыҡ. Әле бына Х. Юлдашев менән Н. Нәжми тураһында һүҙ барғанда, теманы уғата ла киңәйтеп ебәрергә мөмкин. Бының өсөн Н. Нәжмиҙең «Алыҫ тарафтарҙа» тигән шиғырҙар шәлкемен хәтергә төшөрөү ҙә етә. Шәлкемгә инеш һүҙ итеп (уны эпиграф тиһәң дә була торғандыр), шағир «Ғүр-меремдең һәр бер тарафы – Яҡын менән Йыраҡ араһы» тигән юлдарҙы файҙаланған. Ниндәй матур, тәрән йөкмәткеле һүҙҙәр ҡанаты аҫтына алған автор Себер һәм Алыҫ Көнсығыш яҡтарында йөрөп ҡайтҡас ижад ителгән шиғырҙарын!

Хәлбуки, Себер темаһы Х. Юлдашев ижадында ла торған һайын киңерәк урын ала бара. «Сәнскеле йондоҙ» китабына ингән бер шәлкемен ул «Себер дәфтәренән» тип атаған хатта. Йәшәйештең тағы бер парадоксы килеп баҫа түгелме һуң беҙҙең алға? Ун туғызынсы быуат башында, илдәге ғәҙелһеҙлектәрҙе фашлап, ризаһыҙлыҡтарын белдергән декабристарҙы батша хөкүмәте Себергә һөргән. Егерменсе быуаттың икенсе яртыһында башҡорт шағиры, алыҫ тарафтарҙағы тормошто һәм тәбиғәт байлыҡтарын үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтыр өсөн, шул төбәккә ижад сәфәре ҡылған. Егерме беренсе быуат башында, икенсе бер башҡорт шағиры, балаларым астан үлмәһен, тип, Себер яҡтарына эшкә сығып китергә мәжбүр булған.

Хисмәтулланың Себер темаһына арналған шиғырҙарында кинәйә юҡ хәлендә,тиерлек.Сөнки уларҙа реаль тормош нисек бар – шулай яҡтыртыла. Миҫал өсөн, «Себер» тип аталған шиғырға туҡталып китергә мөмкин. Ул «Ағиҙел»дең 2003 йылғы 5-се һанында донъя күргәйне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, китап биттәренә күҫкәс, шиғырҙың исеме «Ҡырыҫ яҡта» тип үҙгәртелгән; уныһы ғына етмәгән, строфалар ҙа ботарланған, ҡайһы бер һүҙҙәр ҙә алмаштырылған. Шиғырҙың ике вариантына ла (журнал һәм китап вариантары күҙ уңында тотола) Рәйес Түләковтың «Себергә хат» шиғырынан «Башҡорт һарҡындыһы менән тулған Себер» тигән юл эпиграф итеп алынған. Минең ҡарашымса, шиғырҙың идея-эстетик йөкмәткеһен аңлау өсөн был эпиграф принципиаль роль уйнай. Рәйес Түләков шиғырынан алынған юлды ҡулланып, Хисмәт Юлдашев, бәлки, ҡәләмдәш дуҫы менән бәхәскә кергәндер: Рәйес шиғырында «һарҡынды» тигән төшөнсә

«ҡалдыҡ-боҫтоҡ» мәғәнәһенә яҡыныраҡ тора һымаҡ; Хисмәтулла ихә, заман темаһына әйләнеп киткән көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһен күтәреп, бынамын тигән ир-егеттәрҙең эшһеҙ интегеүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алған:

Тыуған ерҙә арып йөрөгәнде
Тамаҡ ялына ла эш тапмай,
Атайлығын ирҙең, ирлеген дә
Себерҙәрҙә түккән тир һаҡлай,
Себерҙәрҙә түккән тир яҡлай.

Алыҫ тарафтарҙа эшләп йөрөргә мәжбүр ителгән яҡташтарыбыҙҙың һарҡындыҡ түгеллеген бына был юлдар ҙа раҫлай:

Тыштан ғына һалҡын күренә ул,
Себер ере эстән ут-ялҡын.
Һағыҙлыҡтарға батып, туңып-катып
Йөрөһәң дә, Себер – үҙ, яҡын.

(Кемдер берәү, Ер барыбер ҙә Ҡояш тирәһендә әйләнә, тип әйткән шикелле, мин дә бында шиғырҙың журнал вариантын файҙаланырға булдым, сөнки ул матурырыҡ та, мәғәнәлерәк тә яңғырай төҫлө.)

Х. Юлдашевтың Себер темаһына бағышланған шиғырҙары араһында еңелсә юмор ҡалыбына төрөлгәндәре лә бар. Шундайҙарҙың береһе – «Себер еле». Күләме яғынан ул ҙур түгел – бында тулы килеш күсерһәк тә була:

Иҫә генә, киҫә генә,
Иҫкә алдым кисә генә:
Кем ҡәберҙә, кем Себерҙә,
Кем һыйынған бисәһенә,
Кем – башҡалар иҫәбенә...

Себер еле иҫә генә,
Иҫә генә, киҫә генә.
Йөрө, тине, иҫән генә,
Йән киҫәгем – бисәм генә.

Себер еле иҫә генә,
Иҫә генә – киҫә генә.
Йөрәкәйен киҫеп йөрөр,
Йөрәкәйен киҫеп бирер
Минең кеүек иҫәр генә.

«Себерҙә тотһаң ғишыҡ» тигән шиғыр ҙа йылы тәьҫир ҡалдыра. Дүрт кенә строфанан торған был шиғырҙың композицияһы бик үҙенсәлекле: анафора алымы ярҙамында Себерҙең ҡырыҫ тәбиғәте менән лирик герой араһындағы психологик алышты һүрәтләүгә ҡоролған. Анафора строфаларҙың тәүге юлдарына ғына түгел, һуңғыларына ла хас: «Шулай ул – тотһаң ғишыҡ» тигән юлдар менән тамамлана строфаларҙың өсөһө, ә дүртенсеһендә, автор, бер аҙ үҙгәртеп, һөҙөмтә яһап ҡуя: «Шулай ул, ғашиҡ булһаң». Дөйөм алғанда, шиғырҙан болоҡһоу уй-фекер, үкенес тойғоһо түгел, ә эскерһеҙ йылмайыу ялтлап тора. Ғәҙәти тормошта, теге йәки был күренеште тикшергәндә, башта уның сәбәбен эҙләйҙәр, унан һуң ғына ниндәй ҙә булһа һөҙөмтәгә киләләр. Хисмәтулланың был шиғырында иһә улар урындарын алмашҡандар, шикелле. Бындай шаяртыу, минеңсә, һис кенә лә әҫәрҙең бәҫен ебәрмәгән – киреһенсә, уны уғата ла уҡымлы ғына иткән.

Себер темаһына бәйле «Уйлап ҡуям» тигән шиғырҙан да юмор еҫе аңҡып тора. Ә бына «Себер болото» менән «Хушлашыу» тигән шиғырҙар башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра. «Себер болото»н Х. Юлдашевтың һуңғы йылдарҙа ижад иткән иң матур, иң уңышлы һәм фәһемле шиғыры, тиер инем. Уға татарҙың трагик яҙмышлы мәшһүр шағиры Хәсән Туфандың киң билдәле «Ағыла ла болот ағыла...» тигән моңһоу һәм һағышлы һүҙҙәре эпиграф итеп алынғаны өсөн генә түгел, ә, барынан да элек, шиғырҙың бөтә яҡлап та камил, килешле булғаны өсөн. Аллитерацияға бай был шиғырҙа болот образы йәнле кеше образы шикелле ҡабул ителә. Ул төрлө төҫкә һәм ҡиәфәткә (ҡара, ҡуйы, ямғырлы, шомло, йәшенле) инергә, төрлөсә хәрәкәт итергә, йыл миҙгеленә ҡарап, характерын да үҙгәртергә мөмкин икән. Ерҙәге бөтә хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булыуы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ инде. Автор «Туфан болото» тигән яңы һүҙбәйләнеш уйлап сығарған һәм уны «йырлы» болот тип атаған. Бөтә ғүмерен тотҡонлоҡта, ҡоллоҡта үткәргән Буранбай сәсән болото уға «шомло» булып тойолған. Метафораға ҡоролған был сағыштырыуҙар «Себер болото»ның идея-эстетик әһәмиәтен һәм художество кимәлен

бермә-бер арттыралар. Һуңғы ике строфаны бында күсерһәк, бөтәһе лә асыҡланыр, бөтәһе лә аңлашылыр:

Яҙғы күкрәү дәрте булһа,
Ергенәмде уятыр.
Йәйге күкрәүҙәре уның
Күк кенәмде уйнатыр.
Килер ул болот йәшенләп,
Булмаҫ көс ҡаршы торор.
Һағыш һығып ҡатҡан йәнде
Күктәргә олғаштырыр.

Яңғырашы менән йырға тартым «Хушлашыу» исемле шиғырҙа лирик геройҙың (шул иҫәптән – авторҙыңдалыр) шәхсән хистәре урын алған. Ихласлығы, йылылығы менән уға «Беҙ» тигән шиғыр килеп ялғана. Йомаҡҡа оҡшабыраҡ торған был шиғырҙа ла лирик геройҙың (шул иҫәптән – авторҙыңдалыр) бик тәрәндә ятҡан, күптән инде асыҡтан-асыҡ, туранан-тура әйтелергә тейешле шәхсән тойғолары, уй-хистәре сағылыш тапҡан. Дүрт строфанан торған был йыйнаҡ (Х. Юлдашевтың шиғырҙары үҙҙәренең йыйнаҡлығы менән айырылып торалар ҙа инде) шиғырҙың һуңғы строфаһы шулай фараз ҡылырға форсат бирә:

Һинең алда булды минең
Ҙурлығым, хурлығым да.
Көнсөлдәр йәшәп ҡараһын
Беҙҙең һымаҡ юғында.

Ошо урында нисек инде Тамараның «Һиңә – юлға» («Ағизел», 2008 йыл, 6-сы һан) тигән шиғырын иҫкә алмай үтәһең? Формаһы менән традицион ҡалыпҡа буйһонмаһа ла, йөкмәткеһе менән ни тиклем тормошсан ул! Шуныһы шатлыҡлы, йөрәк өҙгөс юлдарға һалынған ҡылдай нескә тойғо юғары зауыҡҡа буйһондоролған:

Ирҙәр була ҡырыҫ.
Йөрәктәре – ҡорос.
Һиңә – юлға...

Шул саҡта мин ҡапыл аңлап алам:
Һин китәһең, йәнем, мин бит ҡалам!

Булмыштарың, гүйә, ҡаты тоҙ.
Ә һуң мин бит, мин бит – ҡатын-ҡыҙ!

Тыйыламын.
Тыйыламын.
Сәскә таждарылай
Ҡойоламын...

Һиңә – юлға.

Әлегә тиклем һүҙ дуэттың бер яртыһы – ғаилә башлығы хаҡында барҙы. Һүҙ барышында ваҡ-төйәк дәғүәләр ҙә белдерелде. Иғтибарҙы дуэттың икенсе яртыһына – ғаилә тоткаһына йүнәлтер алдынан, Хисмәт Юлдашев шиғриәтенә бәйле тағы бер фекерем менән уртаҡлашыуҙы урынлы һанайым. Ул фекер мәҡәләне яҙырға ултырғас уҡ, Рауил Бикбаевтың өҫтә телгә алынған мәҡәләһен хәтерҙә яңыртҡандан һуң уҡ, атап әйткәндә, Хисмәт Юлдашевтың «яҙғандары бер уҡыуҙа ғына тулыһынса асылып, аңлашылып бөтмәҫкә лә мөмкин...» тигән һүҙҙәренән һуң тыуған ине.

Әлбиттә, күп осраҡта теге йәки был шиғырҙың (әгәр ул кинәйәгә ҡоролған булһа – бигерәк тә) төбөнә төшөп етер өсөн, байтаҡ ҡына уйланып, баш ватып ултырырға тура килә. Күпме генә ултырһаң да, авторҙың ни әйтергә теләгәне асыҡланып бөтмәгән саҡтар ҙа була. Ундай шиғырҙарҙы, ғәҙәттә, символистар яҙған. Пушкин менән Лермонтовтың, мәҫәлән, аңлайышһыҙ йөкмәткеле шиғырҙары барлығын һис тә хәтерләмәйем. Бәлки, улар заманында символистар булмағанға күрә шулайҙыр. Ә бына Хисмәтуллала, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундай шиғырҙар осрай. «Ике һөңгө»нө («Ағиҙел», 2008 йыл, 4-се һан), мәҫәлән, бер түгел – биш ҡат уҡыһаң да, автор әйтергә теләгән фекер минең өсөн йомаҡ булып ҡала. «Ике әтәс» тә шулай уҡ. Образлы, йәнле сағыштырыуҙарға бай «Туп» («Ағиҙел», 2011 йыл, 7-се һан) тигән шиғыр ҙа авторҙың үҙе өсөн генә яҙылғанға оҡшап тора. Символистар ҙа шиғырҙарын шулай матур, ләкин үҙҙәре генә аңларлыҡ итеп яҙғандар бит. Хикмәтле Хисмәткә (Хисмәтулла Юлдашевты уның ҡәләмдәш ағаһы Хәсән Назар шулай тип атаны) мин дә үҙемсә хикмәтле бер фекер

әйтмәксе булдым (әгәр ул ҡабул ителһә): «Талантты талантлы файҙалана белеү – үҙе ҙур талант». Хисмәтулла өсөн был фекер хикмәтлелерме, түгелдерме – уныһын ул үҙе әйтер.

Яңы быуатты Тамара Юлдашева (Тамара Искәндәриә), Хисмәтулла Юлдашевтан бер йылға һуңлабыраҡ, «Баҡ-ана» тигән шиғырҙар шәлкеме менән башлап ебәрҙе. Төрлө белешмәләрҙән билдәле булыуынса, Тамара – республикабыҙҙың төрлө матбуғат сараларында эшләп, әҙәбиәт өлкәһендә шаҡтай ҙур тәжрибә туплап өлгөргән шағирә. Бер тапҡыр уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән әҫәрҙең авторҙыҡы ғына булыуҙан туҡтауын ул яҡшы белә. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, нишләптер үҙенең ижад емештәре менән ул саманан тыш иркен һәм ирекле мөғәмәлә итә. «Баҡ-ана» тигән шәлкем, мәҫәлән, «Ағиҙел» журналынан «Көн менән төн сиге» тип аталған китапҡа күскәс, «Бағ-дадҡа бағыу» тигән поэмаға әйләнеп киткән. «Моң-тәлгәш» китабында ул яңынан айырым шиғырҙарға тарҡалған һәм «Бағдад» тигән шәлкем итеп бирелгән. «Самурай» тигән әҫәр менән дә шундай хәл килеп сыҡҡан: «Көн менән төн сиге»ндә ул – шәлкем, ә «Моң-тәлгәш»тә – поэма.

Бынан күп йылдар элек, Мостай Кәримдең «Европа – Азия» тип аталған шиғырҙар шәлкемен поэмаға тиңләүселәр ҙә булғыланы. Ләкин автор уларға ҡолаҡ һалманы, шикелле. Шәлкемгә ингән шиғырҙарын үҙенә оҡшағанса һәм үҙе теләгәнсә айырып алып, уларҙы төрлө йыйынтыҡтарында ҡабат-ҡабат баҫтырып сығарҙы. Сөнки ул белгән: тулыһы менән жанр талаптарына яуап биргән поэманы үҙаллы шиғырҙарҙан әтмәләп булмаған кеүек, тулыһы менән жанр талаптарына яуап биргән поэманан үҙаллы шиғырҙар ҙа яһап булмай. Поэманан тик өҙөктәр генә килтерергә мөмкин.

Дуэттың икенсе яртыһына арналған бүлектә ошондай дәғүәнән башлап ебәреү миңә еңел түгел, әлбиттә. Ләкин ни ҡылаһың? Йылдар бара тора, ғүмер үтә тора. Ҡасан да булһа бер Т. Искәндәриәгә лә артта ҡалған йылдарға һәм юлдарға боролоп ҡарарға тура килер. Шуға күрә, уға үҙенең ижад хужалығына иғтибарлыраҡ та, талапсаныраҡ та булып, унда хәҙерҙән үк әҫәрҙәрҙе тематик яҡтанмы, әллә хронологик яҡтанмы, әллә икеһен дә бергә иҫкә алыпмы, тәртипкә һалып ҡуйыу маҡсатҡа ярашлыраҡ түгел микән, тип уйлайым. Шул да мәғлүм булһын, «Көн менән төн сиге» һәм «Моң-тәлгәш» китаптары аша шағирәнең ижады менән яҡынданыраҡ танышҡанда, үҙем өсөн бер асыш яһаным: Тамара менән Хисмәтулла шиғриәтендә форма йәһәтенән дә, йөкмәткә йәһә-

тенән дә байтаҡ ҡына уртаҡлыҡтар ҙа бар икән дәбаһа. Ләкин бында һүҙ Тамара Искәндәриәнең бөтә ижады хаҡында түгел, бары тик «Ағизел» журналының был быуаттағы һандарында баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәре тирәһендә генә барасаҡ.

Һорау ҙа, дәғүә лә тыуҙырған «Баҡ-ана» тигән шәлкемде һигеҙ строфанан торған «Бағдад» тигән шиғыр асып ебәргән. Жанры буйынса мин уны публицистик лирика иҫәбенә индерер инем. Шағирәне мең йылдан ашыу тарихы булған һәм бөтә донъя күләмендә юғары мәҙәниәтле ҡалаларҙан һаналған Бағдадтың яҙмышы борсой, сөнки уның күген ҡара болот («ҡара болот» метафораһы бында Америка илбаҫарҙарын һүрәтләү сараһы итеп файҙаланылған) ҡаплап алған:

Әҙәм балаһының йәнен,
Ҡапламаҡсы Ерҙең тәнен.
Нимә уға аң-белемең,
Нимә уға төлөң, фәнең?

Шәлкемдәге «Шәһрезада түгелмен дә...», «Үткер хәнйәр ҡынымы ул?..» тигән шиғырҙар ҙа иғтибарҙы йәлеп итмәҫлек түгел. Дүрт кенә строфанан торған «Шәһрезада түгелмен дә...»не Хисмәтулланың «Тормош китабы» һәм «Иманһыҙ милләт – ҡолаҡһыҙ...» исемле шиғырҙарына ауаздаш, тиергә мөмкин. «Тормош китабы»нда шағир хаҡлыҡ һәм ялғанлыҡ, ғәҙеллек һәм наһаҡлыҡ, саф күңеллелек һәм ялағайлыҡ кеүек төшөнсәләрҙең йәшәп килеүе хаҡында уйлана һәм уларҙың ыңғайҙары ғына тормошто йәмләүенә иманы камиллығын белдерә. «Иманһыҙ милләт – ҡолаҡһыҙ...»ҙа иһә ул «Аңыбыҙҙа иман булһа, аңыбыҙ булыр уяу» тигән ҡәтғи һөҙөмтәгә килә. Тамараның «Шәһрезада түгелмен дә...»һендә лә һүҙ ошо тирәлә бара. Шәһрезада, Шәйехзада булмаһа ла, рухының азатлығын, уйының таҙалығын баҫым яһап әйтә лирик героиня (уның менән бергә – шағирә лә, әлбиттә) һәм милләттәштәрен моңһоҙлоҡ, аңһыҙлыҡ, башһыҙлыҡ, ҡомһоҙлоҡ кеүек тиҫкәре сифаттарҙы үҙ итмәҫкә саҡыра.

Ошоға тартым идеяны Тамара Искәндәриәнең «Уландарым, тыңлап тороғоҙ...» һәм «Миһырбан» тип аталған шиғырҙарында ла шәйләргә мөмкин. Был әҫәрҙәрҙе шиғриәт аша халыҡ педагогикаһы принциптарын уҡыусыға еткереүҙең матур бер өлгөһө, тиер инем. «Уландарым, тыңлап тороғоҙ...»ҙоң лирик героиняһы күпте күргән, күпте белгән, донъяның әсенә дә, сөсөнөн дә берҙәй татыған ил инәһе

һымағыраҡ килеп баҫа беҙҙең алға. Уландарына мөрәжәғәт итеп, ул сит икмәккә баш эймәҫкә өндәй, усаҡ утын һүндермәҫкә, бизмәне ҡыйыҡ тартһа ла, донъянан биҙмәҫкә саҡыра. Был өндәүҙәр, саҡырыуҙар һәм кәңәштәр ике юлдан торған һуңғы строфала бер төйөнгә уҡмашҡан:

Уландарым, иҫтә тотоғоҙ:
Иман һәм Рух – ғүмер ҡотоғоҙ.

«Миһырбан» тигән шиғырҙағы «Миһырбан ул телем икмәк түгел, теләнселәп һорап алырға» тигән юлдар кемдә генә икеләнеү тойғоһо уятыр икән? Ҡарап тороуға ябай ғына күренһә лә, ғәйәт тәрән мәғәнә төрөлгән бит уға.

Йәл, шағирә үҙенең әҫәрҙәрендә ошондай ҙа матур һәм изге теләктәрен алға һөрһә лә, ысынбарлыҡта иһә уның был уй-фекерҙәре бумерангты хәтерләтеп ҡуйған саҡтар ҙа булғылай. «Бағана. Бағанаға бағып...», «Күперҙә», «Һин саҡырма мине, шаулы донъя...» тигән шиғырҙар шулай уйларға мәжбүр итә. Уларҙың тәүге икеһендә илебеҙҙә киң ҡолас алған эшһеҙлек, шуның арҡаһында донъяла йәшәүҙең ҡыҙығы китә башлауы кәүҙәләндерелгән булһа, өсөнсөһөндә иһә шағирәнең ошо күренешкә мөнәсәбәте сағылыш тапҡан.

«Һин саҡырма мине, шаулы донъя...»ның тәүге строфаһында уҡ (ә ул ни бары өс строфанан тора) «Ҡоролғанһың бары алдаҡҡа» тигән зәһәр уҫал һәм көслө ғәйепләү ташлана донъяға. Икенсе строфала был мотив уғата ла көсәйтелә:

Алданмайым нурлы киләсәккә,
Ымһынмайым алтын тоҙаҡҡа.

Йомғаҡлаусы строфала, лирик героиня ролендә сығыш яһаусы шағирә бер аҙ «йомшара» төшә һәм, «Уландарым, тыңлап тороғоҙ...»ҙағы шикелле, үҙенең теләктәре менән уртаҡлаша:

Йыраҡ йөрөһөндәр саф йәнемдән
Буш хәбәрең, затлы «күләгәң».
Сабыйҙарҙың селтер көлөүенән,
Инәйҙәрҙең серле көйләүенән
Яңғырап торһон минең биләмәм.

Өҫтәрәк публицистик лирика хаҡында һүҙ сығып ҡуйғайны инде. Минең ҡарашымса, публицистик лирика менән сәйәси лирика араһында тулыһынса тигеҙлек билдәһе ҡуйып булмаһа ла, улар бер-береһенән әллә ни алыҫ та тормайҙар. Әйтергә кәрәк,ҡатын-ҡыҙ затынан булһа ла, Тамара Искәндәриә өсөн лириканың был төрө һис тә ят күренеш түгел. Киреһенсә, уға йыш ҡына мөрәжәғәт итә һәм был теманы ҙур яуаплылыҡ тойоп яҡтырта. Шуныһы ҡыҙыҡлы: сәйәси темаға тотонғанда, үҙ һүҙен, донъяға ҡараштарын, уй-фекерҙәрен уҡыусыға түкмәй-сәсмәй еткереү өсөн, ул төрлө алымдарҙы файҙалана. Ҡайһы берҙә кинәйәне үҙ итә һәм был осраҡта Хисмәтуллаға яҡыная, хатта һулышты ла икеһе бергә алғандай тойола Ҡайһы берҙә, әйтер һүҙен, кинәйәләп-нитеп тормайса, туранан-тура ярып һала. Сәйәси теманы яҡтыртҡанда фәлсәфәүи пландағы уйланыуҙарға төшөп киткән саҡтары ла булғылай. Тамараның шиғриәтенә хас был үҙенсәлектәрҙе аныҡ миҫалдар ярҙамында дәлилләргә мөмкин.

Бына уның «Ҡурай» тигән шиғыры. Шиғыр традицион формала яҙылыуы менән үк күңелде арбай. Әлбиттә, ҡурай тураһында шиғырҙар беҙҙә әҙ түгел. Әммә Тамараның әле һүҙ барған шиғырын мин ысын мәғәнәһендә ошо ябай ғына музыҡа ҡоралына бронзанан ҡуйылған һәйкәл, тиер инем. Был һығымтаға мине биш кенә строфанан торған шиғырҙың һуңғы ике строфаһы килтерҙе:

Тарих һынауҙарын үткән башҡорт,
Һинең моңға һыйынып, уралып,
Яуҙар аша илен, телен яҡлап,
Һаҡлап ҡалған мәшһүр Уралын.

Хоҙурланып ғорур Уралыңды,
Донъяларҙың тоймай тарлығын,
Үҫәһең һин башҡорт йыры өсөн,
Ирек йыры өсөн барлығы.

Йәиһә «Тарих юлы» тигән шиғырҙы алып ҡарайыҡ. Темаһы, йөкмәткеһе, күтәрелгән проблемаһы буйынса ул ифрат ҡыйыу шиғыр. Ундағы «...Тарих күҙ буяуға ҡоролған», «...Тарих юлы түгел хәҡиҡәт юлы», «...Тарих юлы түгел ғәҙеллек юлы» тигән фразалар айырыуса уҫал яңғырай. Ә шулай ҙа «Тарихтарға баш булырға сиктәрҙән аша иблис!», тип танырға мәжбүр автор, һәм үҙен «Ҡағыҙҙарға яҙылмаған

тарихтарҙың ахыры!» тип тыныслandыра. «Эй, тарих?! Бөйөктәреңдең ҡайһының ҡанһыҙ ҡулы?» тигән һорау ҙа уйландырмай ҡалмай. Шуныһы бер аҙ ҡыуандыра, һорауҙар ни тиклем генә күп һәм киҫкен булмаһын, автор «Рух юлы» табылырына ла өмөтөн өҙмәй.

«Тарих юлы»ның дауамы булып, «Ваҡыт даръяһы» исемле шиғыр тора, тиһәк, хаталанмабыҙҙыр. Сөнки был шиғыр ҙа тәрән фәлсәфәүи уйланыуҙарға ҡоролған. Шуныһы мөһим, шағирәнең уйланыуҙары – абстракт фекер йөрөтөү түгел, улар – беҙҙең ысынбарлығыбыҙҙан үҫеп сыҡҡан һәм фәлсәфәүи аң юғарылығына күтәрелгән күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһе.

«Шиғриәт һәм сәйәсәт» тигән шиғырҙың исеме үк уның есеме тураһында һөйләп тора. Тәрән мәғәнә төрөлгән хәйләкәр шиғыр, тиер инем уны. Башта автор: «Сәйәси уйында шағирҙың эше юҡ. Шиғриәт – илаһи сер иле, был серҙең асылы теше юҡ», ти. Һуңға таба иһә бындай ҡарарға килә:

Саф алтын бөртөгө бит – халҡым!
Мин уның телендә яҙам бит.
Сәйәсәт – сит, тиеп тәйшанһам,
Мин ошо телемдән яҙам бит!

Автор әйтергә теләгән төп фекер шиғырҙы йомғаҡлап ҡуйыусы строфала уғата ла асыҡлана төшә: шиғриәт – юғары тойғолар илсеһе, тиелә унда, ә был тәғәйенләнешкә тап килер өсөн, «шағирға сәйәси көс кәрәк!», тигән һығымта яһала.

Шиғриәттең тәғәйенләнеше, сәйәсәткә мөнәсәбәте хаҡында һүҙ сыҡҡас, юл ыңғайында «Шағир ҡатыны», «Һунар», «Шағир! Һин кисер донъяны...», «Тағы бер ҡат уйҙар ҡосағына...», «Ап-аҡ бите дәфтәремдең...» тигән шиғырҙарҙы ла иҫкә алып китһәк, яҙыҡ булмаҫ. «Һунар» тигән шиғыр, мәҫәлән, кинәйәгә, метафорик сағыштырыуҙарға ҡоролоуы йәһәтенән генә түгел, формаһы менән дә айырылып тора. Уның авторы, шиғырҙың геройына (Шағирға!) мөрәжәғәт итеп, бына нимә ти:

Һунар бара, һунар!
Ерең, иркең,
Телең, динең –
Барыһы бизмәндә.

Меңйыллыҡтар үҫкән үҙлегеңде
Ҡыйып үтмәкселәр бер мәлдә.

Шулай уҡмы заман суҡмарынан
Һиңә телһеҙ, өнһөҙ ауаһы!
Китә ҡалһаң, шағир, Ерең иңрәр,
Йән тетрәтер күктәр ауазы!

Күләме яғынан бәләкәй генә «Шағир! Һин кисер донъяны...» ла –заман заңы менән һуғарылған әҫәр:

Донъяға барыбер:
Шағирмы, бүреме.
Берәүҙең эше юҡ –
Бармы һин, тереме?

Шағир, һин кисер...

Тамара Искәндәриәнең фәлсәфәүи-сәйәси лирикаһына ҡараған «Аждаһа» һәм «Бысҡы вағы» тигән шиғырҙары хаҡында ла бер-ике һүҙ әйтмәй ярамаҫ. Тәүгеһенең лирик геройыныһы, аҡ ҡағыҙға балаһы төшөргән аждаһа һүрәтенә һылтанып, ғәжәп тәрән, ләкин бик күңелһеҙ һөҙөмтә яһап ҡуя:

Бер уйлаһаң, тотош ғүмер –
Алһыу ғына аждаһа...

Ике генә строфанан (ун һәм биш юллыҡтар) торған «Бысҡы вағы»н образлы фекерләүҙең матур бер күренеше, тиергә була. Шиғырҙың төбөндә символик мәғәнә ята. Әгәр «тарих» тигән һүҙ булмаһа (беренсе строфала), авторҙың нимә әйтергә теләгәнлеге, бәлки, аңлашылмаҫ та ине. Икенсе строфалағы «империя» тигән һүҙ ҙә символик мәғәнәне асыҡларға булышлыҡ итә:

Империя имәндәрен турап,
Бура бурай кемдер. Кемдер тағы
Сират көтә, аяҡ аҫтарында
Булып ятыр өсөн
Бысҡы вағы.

Тамараның «Һиңә – юлға» тигән шиғырында (был шиғыр өҫтә бер тапҡыр телгә алынғайны инде) бындай юлдар бар:

Капыл мине күргән һымаҡ, осоп
Яндарыма киләһең дә, тешең ҡыҫып,
Тыйылаһың.
Тыйылаһың.

Белеп торам:
Йылы һүҙҙәр тел осоңда.

Ләкин булмаҫ
Эсеңдәге үй тышыңда.

Ҡайһылай матур, ҡылдан да нескә хистәрҙе һәм күңел төпкөлөнә йәшерелгән уй-фекерҙәрҙе еңелсә һүлыш менән белдергән һүҙҙәр! Бында мөхәббәт тойғоһо ҡырыҫ тормош дөрөҫлөгө менән бергә үрелгән. Шуға күрә шиғыр көслө лә, бер үк ваҡытта моңһоу ҙа яңғырай.

Әйтергә кәрәк, Тамара Искәндәриә шиғриәтендә мөхәббәт лирикаһы үҙенә башҡа урынды биләп тора. Был мәкәләләә иҫкә алынған «Баҡ-ана» шәлкемендә үк әле ул «Матурлыҡ илде ҡотҡарыр, һөйөү ерҙе ҡурсалар!», «Мөхәббәт ул – ҡотҡарыусы тәғлимәт, мөхәббәт ул – Йыһан үҙе, тәбиғәт. ‹...› Мөхәббәт ул – изгелекле баҡ-ана, мөхәббәт ул – саф алтындан бағана», тип иҡрар иткәйне.

Килтерелгән өҙөктәрҙән күренеүенсә, Тамара өсөн матурлыҡ менән мөхәббәт – тиңдәш төшөнсәләр тиһәк тә ярай: мөхәббәт булмаған ерҙә матурлыҡтың, матурлыҡ булмаған ерҙә мөхәббәттең булыуы мөмкин түгелдер ул. «Баҡ-ана» шәлкеменән һуң бер нисә йыл үткәс, шағирәнең мөхәббәт – матурлыҡ темаһына яңынан әйләнеп ҡайтыуы ла юҡтан ғына булмағандыр. Мин бында уның «Матурлыҡ» тигән шиғырын күҙ уңында тотам. Шиғырға эпиграф итеп, IV–V быуаттарҙа йәшәгән һәм ижад иткән Августин Блаженный атлы христиан яҙыусыһы һәм дин әһеленең «Тәүбәгә килеү» тип аталған автобиографик китабынан алынған һүҙҙең килтерелеүе лә осраҡлы түгелдер. Был дин әһеленең тәғлимәттәрен Тамара яҡшы үҙләштергәнгә оҡшап тора. Сөнки уның күпселек шиғырҙары изгелек, миһырбанлыҡ, намыҫлылыҡ, ярҙамсыллыҡ һәм шуның кеүек башҡа ыңғай хис-тойғолар менән һуғарылған. «Матурлыҡ» шиғырына килгәндә иһә, уның төбөндә үҙенсә

бер фәлсәфә – тормош фәлсәфәһе ята: «Эй, матурлыҡ! Йөрәгемдә ояла һин. Һайра, әйҙә, һөйөп ҡауыш, балала һин». Матурлыҡҡа мөрәжәғәт итеп, автор бына нимә ти: «Уратҡан тирә-йүнеңде тупаҫ һүҙ, әр. Ҡаныҡҡандыр һиңә йоҙроҡ, бөтмәҫ битәр». Достоевскийҙың киң билдәле һүҙҙәре лә шыма ғына инеп киткән шиғырға.

Т. Искәндәриә мөхәббәткә лә матурлыҡҡа табынған шикелле табына. Ошо йәһәттән уның «Бишенсе миҙгел» исемле шиғыры айырылып тора. Бишенсе миҙгел, тип, шағирә мөхәббәтте атаған һәм уға үҙенсәлекле генә мәдхиә йырлаған:

Йәшәйештең асылдары
Асыла был миҙгелдә.
Донъя ҡапыл аңлайышлы,
Аңлайышлы түгел дә.

Авторҙың ҡәтғи фекеренсә, мөхәббәт, әгәр ул ысын икән, йылдың бөтә миҙгелдәрен дә үҙенә һыйҙыра:

Ҡыш сафлығы,
Яҙ шаҡымы,
Йәй монары,
Көҙ йәме
Сағыла ошо мәлендә...

Мөхәббәт темаһы Тамараның шиғриәтен элек тә (теге быуатта ла, тип әйтеүем) ситләп йөрөмәне, әле лә (яңы быуатҡа сыҡҡас та) шулай. Уның был темаға арналған шиғырҙары хистәрҙең нескәлеге һәм ихласлығы менән иғтибарҙы йәлеп итә. «Янар туп» шиғырындағы лирик героиня менән ғүмер араһындағы бынауы диалогка нисек ышанмайһың инде:

Ни ҡылайым, әйт тиҙерәк,
Ҡояш бата һалғансы?
– Һөйөүеңде
Әйт
Йәреңә,
Үкенескә
Ҡалғансы...

Йә булмаһа, «Минең мәңгелегем сиктәрендә...»гә күҙ һалайыҡ. (Ҡызғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, әллә бәхеткә күрәме, «Моңтәлгәш» китабына ул хатта танымаҫлыҡ хәлгә еткереп индерелгән.) Журнал вариантында шиғыр йомаҡ шикеллерәк яңғыраһа ла, авторҙың уй-фекерҙәре изге икәнлеге һиҙелеп тора. Телгә килгән тейен балаһынан ул бындай һүҙҙәр әйттерә: «Был донъяла һин бар. Мин дә бар». Артабан «Абай булсы, ябай тойғоларға был заманда бәндә күңеле тар» тигән киҫәтеү һүҙҙәре яңғырай. Иң аҙаҡтан шиғырҙың төп идеяһы ла асылғандай була: «Мөхәббәттә ваҡыт үлсәмдәре – һөйөп баҡҡан ҡараш иң элек».

Туранан-тура мөхәббәт темаһы күтәрелмәһә лә, Тамараның һуңғы йылдарҙа донъя күргән «Ила – иләнмә тик...», «Күңелдәге төйөн...», «Мин кеше», «Күбәләк», «Ҡарағыҙсы, ҡыҙыл балан...» тигән шиғырҙары ла күңелгә йәтеш. Уларҙың лирик геройынлары үҙҙәренең алсаҡлығы, намыҫсанлығы, эскерһеҙлеге менән айырылып торалар. Әйткәндәрем буш һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, ике генә миҫал:

Яҡты йөҙлө оҫтар
Килһен уңдан, һулдан.
Наҡыҫланма, Намыҫ.
Ташлап китмә, Выждан.
(«Ила – иләнмә тик...»).

Бөтәһе лә аңлайышлы хәҙер.
Берәүгә юҡ дәғүәм, үпкәм дә,
Ниңә һуҙманың, тип, ярҙам ҡулы
Уңышһыҙлыҡ юлын үткәндә.

Онотола, шөкөр, хыянаттар,
Түгел инде улар аяныс.
Солғап алған мәлдә хәүеф-хәтәр,
Иман нуры миңә таяныс.
(«Мин кеше»).

Туранан-тура мөхәббәт темаһын яҡтыртҡан шиғырҙар ҙа яҙылып тора. «Һырғанаҡ», «Талдарҙан балдар тама», «Күбәләктәй леп-леп килеп...», «Йыһан – доға», «Ҡош юлының саңы», «Яратыуҙан, һоҡланыуҙан...», «Ике донъя», «Ебәр, йәнем, минең һөйөүемде...», «Бәпкә

үлән» исемле шиғырҙар шундайҙар иҫәбендә, тимәксемен. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә кинәйә лә юҡ түгел. Метафорик сағыштырыуҙарҙан да мәхрүм түгелдәр улар. Һәр хәлдә, был шиғырҙарҙы бирелеп, бөтә күңелеңде һалып уҡыһаң, мөхәббәт тойғоһоноң «леп-леп килгән күбәләктәй»ҙән бигерәк, иҫ киткес ҡатмарлы, хатта ябай һүҙҙәр менән генә аңлатып та бирә алмаҫлыҡ психологик күренеш икәнлегенә тағы бер тапҡыр ышанырһың. Тап «Һырғанаҡ» шиғырындағыса:

Емештәре татлы ла һуң,
Сәнскеле – һабағы.
Әрнеүҙәрһеҙ генә булмай
Саф мәхәббәт һабағы.

«Һырғанаҡ» ҡына түгел, өҫтә исемдәре аталған шиғырҙарҙың һәр ҡайһыһы айырым иғтибарға лайыҡ. Яҙылыштары-яңғыраштары йәһәтенән дә, йөкмәткеләре менән дә. Шағирәнең ваҡыт һынауын үткән традицион формаға тоғролоҡ һаҡларға тырышыуы ла ҡыуандыра. Минеңсә, Тамара Искәндәриәнең мөхәббәт лирикаһы үҙенең сәскә атҡан осорон кисерә.

Т. Искәндәриә – үҙ көсөн һәм талантын зурыраҡ поэтик жанрҙарҙа ла һынап ҡараған шағирә. Ун дүртенсе йылда ул «Тимер быуат» тигән яңы поэмаһын тәҡдим итте уҡыусыһына. Был әҫәр махсус иғтибарҙы талап итә.

Поэзия өлкәһендә дуэт – һирәк осрай торған күренеш, тип әйтелгәйне инде мәҡәләнең башында. Осраған хәлдә лә, уны шартлы рәүештә генә, метафора һымағыраҡ ҡына ҡулланырға мөмкиндер. Тамара менән Хисмәтуллаға килгәндә иһә, был – уларҙың өлөштәренә төшкән көмөш, тиер инем. Шуға күрә уны («дуэтлыҡты») күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға, поэзиябыҙҙы яңы әҫәрҙәр менән байытырға ла әле байытырға. Был уларҙың ҡулынан да, көсөнән дә килерлек.

2015, декабрь

КҮП НӘМӘЛӘР УНДА – ТӘБИҒӘТТӘН...

(Хәсән Назарға – 75 йәш)

Әҙәбиәтебеҙ күгендә өс Назар балҡый. Шуларҙың береһе – Хәсән атлыһы – үҙенең етмеш бишен туйларға йыйына.

Ҡарап тороуға, «назар» тигән исем менән «балҡый» тигән ҡылым араһында бер нидәй ҙә бәйләнеш һәм мәғәнәүи ярашлыҡ юҡ төҫлө. Сөнки ғилми хеҙмәттәрҙә лә, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә лә, гәзит-журнал биттәрендә лә беҙҙең күҙгә ғәҙәттә «йондоҙ балҡый», «йондоҙ һымаҡ балҡый», «йондоҙ булып балҡый» кеүегерәк һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр салына.

Ләкин был тәү ҡрамаҡҡа ғына шулай. Ғәрәптәрҙән килеп ингән «назар» тигән һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлай башлаһаң, ҡыҙыҡ ҡына хәлгә тарыйһың. Дөрөҫ, был һүҙҙе башҡортсаға, ҡыҙғанысҡа ҡаршы тиәйем микән, төрлә автор төрлөсәрәк ауҙара. Назар Нәжми, мәҫәлән, үҙенең «Ағым» исемле поэмаһында уны «балта оҫтаһы» мәғәнәһендә файҙалана. (Назар Нәжми. Атай йорто. Шиғырҙар һәм поэмалар. Өфө, 1988, 269-сы бит). Ғалимә Таңһылыу Кусимова иһә «Назар» тигән исемде «уй, ҡараш, иғтибар» тип аңлата. (Т. Кусимова. Башҡорт исемдәре. Өфө, 1982, 61-се бит)

Тәржемәнең был ике вариантҡы араһында башкөллө уртаҡлыҡ һәм яҡынлыҡ юҡ һымаҡ тойолһа ла, улар, минеңсә, бер-береһенән бик алыҫ та тормайҙар: үҙ уйы, донъяға үҙ ҡарашы булған кеше генә балҡып торған йондоҙ юғарылығына күтәрелә алалыр ҙа баһа. Өҫтәүенә, «балта оҫтаһы» шикелле, ул «шиғыр оҫтаһы» ла булһа. Шуға күрә «өс Назар балҡый» һөйләмендә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ тип уйлайым – уны бары тик метафора рәүешендә ҡабул итергә кәрәк.

Һәр шағирҙың үҙ юлы, үҙ иманы, үҙ яҙмышы булған кеүек, Хәсән Назар ҙа әҙәбиәт донъяһына үҙенсә килеп инде һәм унда әле лә үҙенсә хәрәкәт итә. Беҙҙең күпселек әҙиптәребеҙ, Хәсән Назар шикелле, ауылда тыуып, ауыл һауаһын һулап үҫһәләр ҙә, ижад юлына башлыса Башҡорт дәүләт университетында эшләп килгән «Шоңҡар» түңәрәгенең иләгендә байтаҡ иләнгәндән һуң аяҡ баҫҡан шәхестәр. Хәсән Назарҙың юлы иһә башҡасараҡ. Әҙәби түңәрәккә йөрөйһө урынға, уға йәштән үк тормош ҡазанында ҡайнарға тура килә. Ауыл

ете йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, колхозда эшләй. Бөрө кооператив училищеһендә махсус белем алғас, үҙен сәүҙә өлкәһендә һынап ҡарай. Әрме хеҙмәте лә урап уҙмай уны. Әммә тыумыштан бирелгән сәсәнлек ҡомары тора-бара барыбер үҙенекен итә – журналистика аша уны әҙәбиәт майҙанына алып сыға. Быға, моғайын, Мәскәүҙең А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында алған белем дә булышлыҡ иткәндер

Ләкин, әҙәбиәт майҙанына юл табылһа ла, Хәсән өсөн ул шыма ғына, һикәлтәһеҙ, соҡор-саҡырһыҙ ғына булманы, шикелле. 1971 йылда «Бөркөттәр төйәге» исемле тәүге йыйынтығын ҡулына алғас, ул, нишләптер, бик озаҡҡа тынып ҡалды: «Шоңҡар сөйәм» тигән икенсе китабы егерме бер йылдан һуң ғына пәйҙә булды.Әҙәбиәт донъяһында бындай хәл осраштырғалай, ләкин йыш түгел. Хәсән Назар миҫалына килгәндә иһә, бының бер сәбәбе, бәлки, тамаҡ ялына гәзит-журнал редакцияларында эшләп йөрөү булғандыр. Сөнки журналистиканың, бөтә булмышында үҙенә йәлеп итеп, ғүмереңде һиҙҙермәйсә генә кимергәнлеген яҡшы беләм. Башҡа сәбәптәрҙең дә булыуы ихтимал. Әммә, «бик озаҡҡа тынып ҡалһа» ла, шиғырҙар яҙылмай торманы, әлбиттә.

Тәүге йыйынтығы баҫылып сыҡҡас, Хәсәндең озаҡҡа тынып ҡалыуына уның кумиры Назар Нәжми ҙә иғтибар иткәйне. «Шиғриәт һәм яҙмыш» тигән күләмле мәҡәләһендә (Назар Нәжми. Күңел сәхифәләре. Өфө, 1999, 118–140 биттәр) ул был хәлде үҙенсәрәк аңлатырға тырышҡайны. Йәйәләр эсендәге «Хәсән Назар ижадына бәйле уйланыуҙар» тигән өҫтәмә исем мәҡәләлә һүҙ бер Хәсән тураһында ғына бармаясағына ишара булып тора ине. Ысынлап та, авторҙың ҡарашы киң. Үҙенең ҡарашын раҫлау өсөн, уға, башҡорт әҙәбиәте менән генә сикләнмәйенсә, рус, татар һәм башҡа халыҡтарҙың да танылған яҙыусыларын һәм шағирҙарын телгә алырға тура килә.

Мәҡәлә авторының ҡайһы бер фекерҙәре менән килешеп тә бөтмәҫкә мөмкин. Үҙенең шиғырҙарында ла, шиғриәткә арналған мәҡәләләрендә лә, теге йәки был шағирҙың йә яҙыусының йөҙөн һәм ижадын һүрәтләгән әҙәби портреттарҙа ла ул ҡайһы бер саҡта саманан тыш һәүәҫләнеп, нескә хистәргә бирелеп китеүсән булды. Дөйөм алғанда, был – насар сифат түгел, әлбиттә. Ул бөтә кешегә лә тәтемәй. Был сифаттарға эйә булыу – шағирлыҡтың күҙгә бәрелеп торған бер билдәһелер ул. Ләкин кәрәгенән артыбыраҡ китмәһен. Юғиһә, шағирға зыян итеп ҡуйыуы ла ихтимал.

Назар Нәжмиҙең әле һүҙ барған мәҡәләһендә (был мәҡәләнең Хәсән Назар тураһындағы башҡа мәҡәләләр араһында иң йөкмәткелеһе булыуы хаҡында һүҙ ҙә юҡ!), мәҫәлән, тормоштағы һәм әҙәбиәт донъяһындағы күп кенә етешһеҙлектәр һәм аңлашылмаусанлыҡтар беҙҙе сорнап алған ысынбарлыҡҡа япһарыла. Пушкин менән Лермонтов та, Толстой менән Достоевский ҙа, юғиһә, улар заманына хас булған ысынбарлыҡта йәшәгәндәр. Чехов менән Горький ҙа шулай. Беҙ ҙә әлеге ысынбарлыҡтан ситтә йәшәмәйбеҙ. Ул беҙҙән һуң да ҡаласаҡ. Ләкин бөтә бәләне лә тик ысынбарлыҡҡа ғына япһарыу дөрөҫлөккә тап килә микән? Уларҙың ҡайһы берҙәрен, бәлки, үҙебеҙҙән дә эҙләргә кәрәктер? «Атта ла була, тәртәлә лә», тип, халыҡ, моғайын, юҡҡа ғына әйтмәгәндер.

Назар Нәжми ғүмере буйына шиғриәтебеҙҙең бәҫе һәм кимәле тураһында уйланып, уның алдына ҙур талаптар ҡуйып йәшәне. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа уҡ әле үзенең бер дүрт юллығында «Шиғыр яҙған һәр кем шағир түгел – һәр өсҡан ҡош түгел ыласын» тип киҫәткәйне. «Шиғриәт һәм яҙмыш» мәкәләһендә лә ул ошо принцибына тоғро ҡала һәм «Шиғыр яҙам – әйтерһең дә сигеү сигәм», «Ҡамыр йәйәм, әйтерһең дә шиғыр яҙам» кеүек юлдарҙың авторҙарын, уларҙың исемдәрен атамайса ғына, ҡаты шелтәләй. Бындай юлдар менән ысын шиғриәт араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡлығын һәм уның булыуы ла мөмкин түгеллеген баҫым яһап әйтә. Ә бына үзенән егерме дүрт йәшкә кәсерәк Хәсәнгә мәкәлә авторының ҡарашы башҡасараҡ. Хәсән Назар, тиелә әле һүҙ барған мәкәләлә, тәүге шиғырҙарында уҡ: «Миндә шағирлыҡ бар»,– тип ҡыҫҡырып торҙо.

Олуғ шағирҙың үзенән күпкә йәшерәк ҡәләмдәшенә биргән был баһаһы менән килешмәй булмай, әлбиттә. Тик сигеү сигеү, ҡамыр йәйеү кеүек һүҙбәйләнештәрҙе лә бөтөнләй үк инҡар итергә ярамайҙыр. Сөнки уларҙа ғәҙәти тормоштан алынған ғәҙәти күренеш сағылыш тапҡан. Назар Нәжми үҙе әйткән дә баһа «Һәр нимәлә шиғыр ята, әгәр күрә, тоя белһәң, күргәнеңде йөрәгеңдә шиғыр итеп ҡоя белһәң», тип. Бөтә ғиллә лә бына шундалыр: сигеү сигеү, ҡамыр йәйеү кеүек һүҙбәйләнештәрҙе метафора рәүешендә файҙаланырға булғанһың икән, улар ысын мәғәнәһендә поэтик һүрәтләү сараһына әүерелә алғанмы һәм хәтерҙә ҡалырлыҡ образ тыуҙырыуға булышлыҡ иткәнме – быныһы инде талантҡа бәйле

Хәсән Назарҙың туҡһанынсы йылдар ахырына ҡараған һәм ике генә строфанан торған исемһеҙ бер шиғырында бындай юлдар бар: «Күп нәмәләр миндә – тәбиғәттән. Күп нәмәләр миндә – мөхиттән».

Рифмалашыуҙары менән генә түгел, мәғәнәләре йәһәтенән дә бер-береһенә берегеп торған ике һүҙ иғтибарҙы йәлеп итә был ике юлда: «тәбиғәттән» һәм «мөхиттән». Улар, минең ҡарашымса, шағирҙың ижад ҡапҡаһын асып инергә рөхсәт итеүсе пароль һымаҡ яңғырай. Шуныһы ҡыҙыҡлы, пароль «Бөркөттәр төйәге»ндә үк – Хәсән әрме сафында хеҙмәт итеп йөрөгән саҡта уҡ төҫмөрләнә башлаған.

Йыйынтыҡҡа тупланған ҡырҡтан ашыу шиғырҙың байтағында автор тәбиғәт күренештәренә һоҡлана, шул күренештәрҙе һүрәтләү өсөн килешле һүҙҙәр таба, кешене тәбиғәт менән тоташтырыусы күҙгә күренмәҫ ептәрҙе эҙләй. Шиғырҙар үҙҙәренең ыҡсымлығы менән дә (башлыса – дүртәр юллы традицион строфалар) айырылып торалар. Уларҙың ҡайһы берҙәрен атап та китергә мөмкин: «Ауылымда»,«Таң ата, таң!..», «Әсәйем», «Усаҡ яны...», «Туғайҙа», «Таң ҡыйылып, һирпелгәндә ерҙән...», «Күгүләңгә күмелә түмәләстәр...», «Көҙгө көн...», «Һыҙыла күк көмбәҙендә...» һ.б.

«Ауылымда»ны шиғри тел менән яҙылған кескенә хикәйә тиергә була. Уның лирик геройы үҙен туған ауылының һәр ҡыуаҡлығында, һәр таллығында һайрар ҡош итеп тоя; «Күкһел түбәтәйле тауҙар» уны таһыллыҡҡа өйрәткән; «Кырҙарын бишек итеп», унан моңдар алған бүләккә; ерҙе һиңкетеп, тайҙар өйрәткән ул меңгегә; сауҡалыҡтарҙа «саң-саң иткән салғы сыңы» ла (ҡарағыҙ әле – ниндәй матур аллитерация!) лирик геройҙың хәтерендә һаҡланған; ауылының хәтфә кеүек аҡланында «сапсан ҡолонсаҡтар» уйнауы ла уның күҙ алдында. Ун алты юллыҡ шиғырҙың һуңғы строфаһында автор ауылдаштарының дөйөмләштерелгән портретын һүрәтләп ҡуя:

Һәр кем, ҡан ҡәрҙәше күреп,
Йөрәк дарыуы бирә.
Татлы һүҙ, асыҡ йөҙ менән
Эс-бауырыңа керә.

«Таң ата, таң!..» да поэтик биҙәктәргә бай. Иртәнге тәбиғәт күренеше унда, рәссамдарға ғына хас булғанса, иҫ киткес матур итеп тасуирланған. Таңғы нурға, таңғы сафлыҡҡа һоҡланған лирик геройҙың иғтибарынан бер генә нимә лә ситтә ҡалмай. «Төн, оялған һылыу һымаҡ»,ҡыуаҡҡа йәшеренгәндәй тойола уға. Тирә-яҡта хөкөм һөргән тынлыҡта үлән менән ысыҡ серләшкәнен дә ишетә ул. «Осоп-ҡунып, түгелеп-түгелеп, сыңратып» һайраған ҡошсоҡ та иртәнге тынлыҡҡа үҙенсә бер йәм өҫтәй.

Төндөң әкренләп көнгә юл биреүе лә шиғриәтсә һүрәтләнгән: тау түбәһенән «уйһыуға күсә күк томан...».

«Таң ҡыйылып, һирпелгәндә ерҙән...» тигән шиғыр «Таң ата, таң!..»дың дауамы шикеллерәк яңғырай. Уның йөкмәткеһен, төҙөлөшөн, ундағы эпитеттарҙы, метафораларҙы барлай башлаһаҡ, «уҡаһы» ҡойолор төҫлө. Шуға күрә, ике генә строфанан торған был шиғырҙы бында түкмәй-сәсмәй килтереү хәйерлерәк булыр:

Таң ҡыйылып, һирпелгәндә ерҙән
Томандарҙың һөттәй аҡлығы,
Эй шатланып һайрай һары түшкәй,
Нурҙар донъяһына атлығып.

Ғәжәпләнеп ҡуя оло тынлыҡ, –
Аҫыл ҡошом иңләй һауаны.
Бәләкәс кеңә йөрәккәйе менән
Уятмаҡсы була донъяны.

«Күгүләнгә күмелә түмәләстәр...» тип аталған шиғырҙа тәбиғәт – матурлыҡ сығанағы ғына түгел, бәлки, кешене үҙ йортона һыйындырып, уны төрлө бәлә-ҡазаларҙан ҡурсалаусы ҡунаҡсыл хужа итеп тә һүрәтләнгән. Асылда ул йомарт, ҡунаҡсыл хужа булһа ла, һуғыш осорондағы һәм унан һуңғы ҡытлыҡ йылдарҙа, үҙәк ялғатыу өсөн генә булһа ла, әтмәкәйенән дә, йыуаһынан да, кәзә һаҡалынан да ауыҙ иттергән. Шул осорҙа ерҙән һут алып аяҡҡа баҫҡан лирик герой ғәзиз ерҙең изгелеген әле һаман онота алмай, һәм уға мөрәжәғәт итеп; «Һин ҡарайһың кеүек күҙҙәремә, ҡулым һуҙған һайын икмәккә», ти. «Ә йыһан ул – Ерҙең бөйөклөгөн сағылдыра торған бер көҙгө» тигән метафорик сағыштырыу ҙа яңыса яңғырай.

Ҡайһы ғына телдә ижад ителгән әҙәбиәткә күҙ һалма, унда мотлаҡ әсә образы тыуҙырылған әҫәргә юлыҡмай ҡалмайһың. Ул поэзияға ғына түгел, прозаға ла хас. Бик алыҫҡа китмәйенсә, Александр Фадеевтың «Йәш гвардия» романына ғына туҡталыу ҙа етә. Ундағы «Әсә ҡулдары» тип башланған монологты кем генә хәтерләмәй икән! Әсәһе образын Хәсән дә һынландырған: йәш шағирҙар исемлегендә йөрөгән саҡта уҡ әле ул «Әсәйем» тигән шиғырын яҙған. Шиғыр ҙур түгел – ни бары дүртәр юллы өс строфа. Әммә әсәһенең юйылмаҫ портретын һүрәтләү өсөн авторға шул юлдар ҙа еткән:

Таң һарыһы һибелгәндә ергә
Әсәй инде аяҡ өҫтөндә:
Икмәк еҫе һеңгән ҡулдарына,
Таң нурҙары ҡунған төҫөнә.

Исеме йыйынтыҡҡа атама итеп алынған шиғыр айырым иғтибарҙы талап итә. Башта, шиғырҙы уҡымаҫ борон, унда һүҙ шағирҙың тыуып-үҫкән төбәге хаҡында ғына баралыр, тип уйлайһың. Баҡһаң, уның ҡарашы, фекерләү даирәһе күпкә киңерәк икән: бай тәбиғәтле, тауҙары-урмандары менән дан тоҡкан Ейәнсура-Бөрйән тарафтары ғына түгел, бөтә Башҡортостан бөркөттәр төйәгенә тиңләнгән. Был сағыштырыу ҙа, минеңсә, яңыса яңғырай. Сөнки беҙҙә Башҡортостанға арналған шиғырҙар күп булһа ла, бындай символикаға ҡоролған шиғыр, нишләптер, хәтергә төшмәй. Башҡортостанға бағышланған шиғырҙарҙы Хәсән артабан да яҙасаҡ. Әммә уның йәш сағында ижад иткән «Бөркөттәр төйәге» үҙенең йәкмәткеһе менән дә, эшләнеше йәһәтенән дә өҫтөнөрәк тора, тип әйтергә баҙнат итмәксемен: традицион һигеҙ строфанан торған шиғырҙа автор образлы тел менән Башҡортостандың үткәне һәм бөгөнгөһө хаҡында бик күп мәғлүмәт биреп өлгөргән. Һәм ул бындай юлдар менән нығытып ҡуйылған:

Башҡортостан!
Һинән гүзәл яҡты
Осратманым, күпме ер үтеп.
Һин үҙең дә –
Ватан киңлегенең
Ғорурлығы, сая бөркөтө!

Ә шулай ҙа Хәсән Назарға билдәлелекте, «Бөркөттәр төйәге» менән «Шоңҡар сөйәм»гә ҡарағанда, «Заман заңы» (1995) тип аталған өсөнсө китабы алып килде. «Асманға ашыу» (2000) тип аталған дүртенсе китап инә билдәлелекте уғата ла ҡеүәтләп кенә ҡалманы, уның авторын Республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты ла итте. Унан һуң «Ғүмер һәм дәүер» (2008) ... Бына шулай һуҙылды Хәсәндең «Бөркөттәр төйәге»нән башланған юлы: китаптар, аҡмаһа ла, тамып тора.

Хәсән Назарға «Заман заңы» килтергән билдәлелектең бер сәбәбе – китапты асып ебәргән инеш һүҙҙер, тип уйлайым. Ул «Ғәмәлдә

мин бер китапты яҙам...» тип атала. Күләме яғынан ҙур түгел, әммә авторҙың тормош һәм ижад юлын күпмелер кимәлдә күҙ алдына баҫтырырға, уның ҡайһы бер характер үҙенсәлектәрен аңларға ярҙам итеүсе сығанаҡ булып тора, тиер инем. Инеш һүҙҙе уҡығанда, тағы шул күҙгә ташлана: Хәсән һүҙҙәр менән һатыу итмәй, уның һәр һүҙе – үлсәүле, һәр һүҙе – үҙ урынында, һәр һүҙен ул теш араһынан һығып ҡына сығара. Ошо йәһәттән ул Шәриф Бикҡолдоң һуңғы йылдарҙағы ижадын хәтерләтеп ҡуя.

«Заман заңы»ның авторына билдәлелек һәм танылыу килтергән сәбәптәрҙең иң ҙурыһы һәм кире ҡаҡҡыҡһыҙы – китапҡа ингән шиғырҙар һәм поэмалар, әлбиттә. Уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек – яңылар, башлыса туҡһанынсы йылдарҙың тәүге яртыһына ҡараған әҫәрҙәр.

Хәсән Назарҙың исемен популярлаштырған һәм уны әҙәбиәт майҙанына алып сығыуҙа үҙенең ынғай ролен уйнамай ҡалмаған тағы бер сәбәп – башҡа халыҡтарҙан башҡортсаға тәржемә ителгән шиғырҙарҙыр. Юл ыңғайында шул да мәғлүм булһын: «Бөркөттәр төйәге»ндә ундай шиғыр берәү генә ине – XIX быуатта йәшәгән румын һәм молдаван шағиры Эминескуҙан алынған «Осрашыу» тигән шиғыр. «Заман заңы»нда инһә тәржемә ителгән шиғырҙарҙың һаны утыҙға яҡын. Улар «Ҡәләмдәшлек миңә – ҡәрҙәшлек» тигән баш аҫтында бирелгән. Шул шиғырҙар менән Х.Назар үҙен оҫта тәржемәсе итеп раҫланы, тиергә була. Уның иғтибарын йәлеп иткән билдәле шағирҙарҙан бында Бодлерҙы, Леся Украинканы, Брюсовты, Максим Геттуевты атап китергә кәрәк. Үҙебеҙҙең Александр Филиппов та был исемлектә ҙур ғына урын биләп тора.

Тәржемәләр хаҡында һүҙ барғанда, күҙгә бәрелеп торған тағы бер үҙгәлекте һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтмәй үтеү мөмкин түгел: уларҙың күбеһендә тәбиғәт күренештәре һүрәтләнгән. Был да юҡтан ғына түгелдер. Өҫтәрәк Хәсәндең «Күп нәмәләр миндә – тәбиғәттән. Күп нәмәләр миндә – мөхиттән» тигән юлдары хаҡында һүҙ сығып ҡуйғайны инде. Шағирҙың был фекере уның «Заман заңы»на яҙған инеш һүҙендә лә яңғырап киткәйне. Унда, мәҫәлән, бындай һүҙҙәрҙе уҡырға мөмкин: «Хоҙай тәғәлә бирмәһә, юҡты бар итеп булмай. Күп яҙаммы, аҙ яҙаммы – яҙылғаны тәбиғәттән булһын, тәбиғәттән».

Әлбиттә, «тәбиғәттән булһын, тәбиғәттән» тигәнде тәбиғәт күренештәрен һүрәтләгән шиғырҙар яҙыуға ғына ҡайтарып ҡалдырһаҡ, мәсьәләгә бер яҡлы ғына килеү булыр ине. Яңғырашы буйынса был һүҙгә яҡын торған «тәбиғи» тигән һүҙ ҙә бар бит әле. Мәғәнәләре буйынса ла улар бер-береһенән бик алыҫ тормайҙар шикелле. Тәбиғәт

донъяһындағы бөтә күренештәр ҙә, бөтә хәл-ваҡиғалар ҙа тәбиғи бит. Беҙ уларҙы күҙәтеүселәр генә. Ҡайһы саҡта шул тәбиғилеккә тупаҫ ҡулдарыбыҙҙы һонабыҙ. Йыш ҡына тәбиғи матурлыҡты емереүселәр ҙә булып киткеләйбеҙ.

Тәбиғәт күренештәрен шиғыр юлына һалыу еңел түгелдер. Юғиһә пейзаж лирикаһы өлкәһендә уңыш ҡазанған шағирҙарҙың һаны бармаҡ менән генә иҫәпләрлек булмаҫ ине. Был өлкәлә әҙме-күпме уңышҡа ирешеү өсөн, иң тәүҙә тәбиғәтте йәнең-тәнең менән ҡабул итергә кәрәктер, уның бөтә нескәлектәрен һәм серҙәрен күрә һәм аңлай белеү фарыздыр. Унан һуң инде шағир өсөн иң ауыр һәм иң яуаплы мәл – күргәндәреңде уҡыусыға еткереү өсөн уның бөтә иғтибарын йәлеп итерҙәй һәм күңелен арбарҙай һүҙҙәр эҙләү мәле башланалыр.

Йәнгә рәхәтлек тә, ара-тирә төңөлөү ҙә килтергән был ғазаплы эҙләнеүҙәрҙән Хәсән дә азат түгелдер, тип уйлайым. Уның шиғриәтенә яһалмалыҡ түгел, ә тәбиғәттән бирелгән тәбиғилек хас булыуы ла, бәлки, шуға бәйлелер. «Заман заңы» ана шул тәбиғилектең бер сағылышы булып тора ла инде. Был китабына автор үҙе лә битараф булманы, уны эске бер ҡәнәғәтләнеү тойғоһо киҫереп телгә алғыланы. «Бала сағым, йәшлегем төйәгендә, шулай уҡ үҫәргәндәр ҡорон тотҡан район үҙәге Иҫәнғолда, – тип яҙҙы ул яңы китабын ҡулына алғас, – яҡташтарым менән күрешеп һөйләшер, ижади хисап тотор өсөн ошо ай аҙаҡтарында ҡайтып әйләнергә иҫәбем. Буш ҡул менән түгел – әле генә сыҡҡан «Заман заңы» тигән китабымды алып» («Башҡортостан» гәзите, 1995 йыл, 19-сы октябрь).

Ҡайһы ғына шағир тураһында һүҙ барһа ла, уның ижадын иң яҡшы белгән кеше – ул үҙе. Ошо аксиомаға таянып фекер йөрөтһәк, Хәсән Назарҙың шиғриәтен тулыраҡ итеп күҙ алдына баҫтырған сығанаҡ – әлегә уның «Асманға ашыу» тигән китабы, тиер инем.Унда шағирҙың теге быуатта ижад ителгән иң яҡшы әҫәрҙәре тупланған. Өҫтәүенә, автор уларҙы темаларға бүлеп урынлаштырған һәм уның ижады менән төптәнерәк ҡыҙыҡһыныусыларҙың хәлен күпкә еңеләйткән. Тик бына шуныһы ҡыҙғаныс – шиғырҙарҙың яҙылыу йылдары күрһәтелмәгән. (Өлкән буын шағирҙарыбыҙ был тәңгәлдән ыңғай үрнәк күрһәтеп киткән булһалар ҙа).

«Асманға ашыу»ға ингән әҫәрҙәр (шиғырҙар, поэмалар, «Иманға инаныу» тигән мәҙхиә һәм «Хәкимлыкта» тигән монолог) туғыҙ темаға бүлеп бирелгән. Был бүлектәрҙең һәр ҡайһыһына айырым-айырым туҡталып, шағирҙың бөтә булмышын асып бирерҙәй мәҡәләләр яҙырға булыр ине. Тик бында ундай зур бурыс ҡуйылмай – күҙгә ташланып

торған бер сағыштырыу менән генә сикләнергә иҫәп: күләмдәре яғынан ҡайһы бер бүлектәр (мәҫәлән, «Фани донъя», «Мөхит», «Ижад», «Ил–ҡәүемдә» тигәндәре) Хәсән Назарҙың «Бөркөттәр төйәге» тигән тәүге йыйынтығына тиңдәр. Был бүлектәргә лә, башҡаларына ла ингән шиғырҙар уҡыусыға күптән таныш булһалар ҙа, уларҙың ҡайһы берҙәрен хәтерҙә яңыртып китеү зыян итмәҫ.

Китапты ла, китаптағы «Фани донъя» тип аталған тәүге бүлекте лә асып ебәргән «Өй алдында уйнай балалар» тигән шиғырҙы башта балалар әҙәбиәтенә ҡараған әҫәрҙәр, тип уйлайһың. Сөнки уның яртыһынан күберәк өлөшө өй алдында сыр-сыу килеп уйнаған балаларҙың ҡыланышын һүрәтләүгә арналған: «Ҡыҙ балалар усаҡ янында, саҡырыша улар ҡунаҡҡа»; «Хәжәт төшһә – хәс тә ололар – көтәсәккә улар алалар»; «Тигеҙ генә бармай донъялар, ҡыйышып та ҡай саҡ ҡуялар»; «Араларҙан ел дә үткеләй, тұзғып китә гүйә сәскәләр»; «Кемгә ҡыҙыҡ, кемгә ҡыҙғаныс – үпкәләшеү, яңау, көнләшеү...» һ.б. Авторҙың был шиғыры менән ни әйтергә теләгәне һуңғы строфаларҙа ғына асыҡлана. Баҡһаң, ерҙә йәшәүҙең яҙылмаған ҡанундары кешелә бала саҡтан уҡ тамыр йәйә башлай икән дәбаһа.

Ошо урында арҙаҡлы ғалимыбыҙ Ким Әхмәтйәнов иҫкә төшөп ҡуйҙы. Хәтерем яңылышмаһа, Назар Нәжмиҙең ҡайһы бер шиғырҙары уҡыусыны ымһындырыуға ҡоролған, тип яҙғайны ул. Хәсәндең дә әле һүҙ барған шиғыры шундайыраҡҡа оҡшап тора: автор ҙа, уның менән бер шәйҙән лирик герой ҙа, бер нимәгә лә иҫтәре китмәйенсә, мәж килеп уйнаған балаларҙы күҙәтеп тора ла, һис көтмәгән ерҙән тәрән мәғәнәле һығымта яһап ҡуя:

Бәхет тигеҙ булмай. Бер кемде
Тормайынса әрләп, битәрләп,
Ғәзиздәрен ҡурсып, Ер-әсә
Ҡуйынына ала берәмләп.

Н. Нәжми хаҡында ҡабаттан һүҙ сыҡҡас, Х. Назарҙы уның шәхесенә табынған уҡыусы итеп кенә түгел, талант эйәһенең традицияларына таянып, уларҙы артабан дауам итеүсе, тип тә атарға мөмкин. Диалектик берҙәмлекте тәшкил иткән традиция һәм новаторлыҡ төшөнсәләре әҙәбиәттә лә, ябай тормошта ла бик үҙенсәлекле, үтә ҡатмарлы күренеш икәнлеге бер кемдә лә шик тыуҙырмай торғандыр. Ҡайҙа традиция тамамланып, ҡайҙа новаторлыҡ башланыуын өҙөп кенә әйтеү еңелдән

түгел. Быға ышаныу өсөн, Х. Назарҙың «Ваҡытлы», Н. Нәжмиҙең «Өфө йүкәләре» тигән шиғырҙарын сағыштырып ҡарарға мөмкин.

«Өфө йүкәләре»н Назар Нәжми 1974 йылда яҙған. Ул алтышар юллы өс строфанан тора. Һуңыраҡ был шиғыр сәхнә түренән дә, радио тулҡындары һәм телевизор экраны аша ла бик йыш яңғыраған һәм халыҡ яратып тыңлаған йырға әйләнеп китте. Н. Нәжми үҙенең бер хатында был шиғырҙың һәм йырҙың мәғәнәһен аңлатып биргәне хәтерҙә. Әйтергә кәрәк, мәғәнә бигүк тәрәндә лә ятмай: шиғырҙа ла, тәбиғи, йырҙа ла кеше ғүмере йыл миҙгелдәренә тиңләнгән.

Хәсән Назарҙың да «Ваҡытлы» тигән шиғырында һүҙ йыл, тәбиғәт миҙгелдәре хаҡында бара һәм улар кеше ғүмере менән йәнәш ҡуйыла. Н. Нәжмиҙекенән айырмалы булараҡ, бында – октаваға тартым һигеҙәр юллы дүрт строфа. Н. Нәжми шиғырында йылдың өс миҙгеле генә (яҙ, йәй, көҙ) күҙ уңында тотолһа, Х. Назарҙыҡында йыл миҙгелдәренең дүртеһе лә авторҙың иғтибар үҙәгендә. Н. Нәжми һәр строфаны «Өфө йүкәләре беҙҙең хаҡта ла әле яңраҡ яра-яра һөйләрҙәр», «Өфө йүкәләре беҙҙең хаҡта ла әле сәскә ата-ата һөйләрҙәр», «Өфө йүкәләре онотмаҫтар әле – яңраҡ ҡоя-ҡоя һөйләрҙәр» тигән юлдар менән тамамланһа, Х. Назар иһә строфаларҙы «Фани донъя!.. Барыһы үтә, яҙ тылсымы ваҡытлы», «Фани донъя!.. Барыһы үтә, йәй хозуры ваҡытлы», «Фани донъя!.. Барыһы үтә, көҙ салтлығы ваҡытлы», «Фани донъя!.. Һиндә бары өмөт түгел ваҡытлы» тигән юлдар менән тамамлай. Бына хәҙер новаторлыҡты традициянан айырып ҡарағыҙ инде!?

Х. Назар менән Н. Нәжмиҙең хатта исемдәре лә бер төрлөрәк яңғыраған «Яуа ҡарҙар...» һәм «Ҡарҙар яуа» тигән шиғырҙарын да сағыштырып ҡарарға мөмкин. «Ҡарҙар яуа»ны Н. Нәжми 1967 йылды оҙатҡанда яҙған. Бер нисә йылдан һуң ул шағирҙың сираттағы яңы китабына йән өрҙә һәм авторға Башҡортостан республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты тигән маҡтаулы исем алып килде. «Ҡарҙар яуа» шиғырына эпиграф итеп Ғ. Туҡайҙың «Осто донъя ситлегенән...» тигән киң билдәле һүҙҙәре алынған. Был эпиграф шиғырҙың идеяһын аңларға ярҙам итеүсе бер факт булып хеҙмәт итә. Шиғыр, йомшаҡ ҡына әйтеп, ҡатыға ултырта торған формала яҙылған:

Күп йырҙарым – миндә шытмай
Ҡалған орлоҡ-бөртөк кеүек.
Миндә моңдар – ояһынан
Осалмаған бөркөт кеүек.

Донъямдың тар ситлегендә
Остоң бары, күңелем ҡошо.
Шундай булып тыуҙым микән,
Тормош микән шулай ҡушты?

Х. Назарҙың да «Яуа ҡарҙар...»ы Яңы йылды ҡаршылағанда яҙылған. Тик ҡайһы йыл икәнлеге генә күрһәтелмәгән. Был шиғыр ҙа, Н. Нәжмиҙеке шикелле, эске һыҙланыуҙарҙан, көрһөнөүҙәрҙән азат түгел. «Ойоҡһотоп, болоҡһотоп» ҡарҙар яуғанда, «ҡанһыҙлыҡтың, ҡомһоҙлоҡтоң» әҫәре лә юҡ кеүек тойола лирик геройға. Яңы йылды ул «изге теләк, өмөт менән» ҡаршылай. Шул уҡ ваҡытта «ҡанлы, шаңлы тарихтарҙы» ла онотмай: «Йөрәгемдә ҡайнай барыһы – ил күргән, ил кисергәндәр», ти ул. Хәсәндең лирик геройы, әйтерһең дә Н. Нәжмиҙең борсоулы уйҙар кисереп йәшәгән лирик геройын әҙгә генә булһа ла тынысландырып, йыл яңырғанда сабырыраҡ булып күренергә тырыша:

Сыуалтмайым уйҙарын мин,
Күҙғатмайым йәрәхәтте –
Кешеләргә байрам таңһыҡ,
Татытмайҙар гел рәхәтте.

Х. Назарҙың «Ғайын ҡайғылы, тиһәләр...», «Кәпәс», «Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын...» тигән шиғырҙарында ла Н. Нәжми һулышы һиҙелеп киткәндәй. Йыйнаҡ ҡына биш строфанан торған «Ғайын ҡайғылы, тиһәләр...», мәҫәлән, кемдең генә хәтерендә Н. Нәжмиҙең «Ғайындар» балладаһындағы «Ғайынлы өй – ҡайғылы өй...» тигән һөйләмде яңыртып ҡуймаҫ икән? Халыҡтың ауыҙ-тел ижадынан килеп ингән был әйтемде ике шағир ҙа үҙ алдарына ҡуйған бурысты хәл итеү өсөн бик оҫта файҙаланған.

Йөкмәткеләре, мәғәнәләре менән бер-береһенән алыҫыраҡ торһалар ҙа, Х. Назарҙың «Кәпәс»е Н. Нәжмиҙең «Түбәтәй төштө»һөн иҫкә төшөрмәй ҡалмай, барыбер ҙә. «Көҙгө көн. Болотло. Һалҡын...» иһә яңғырашы менән Н. Нәжмиҙең «Көҙ. Төн. Ямғыр...» тигән шиғырын хәтерҙә яңырта. Н. Нәжмиҙең лирик геройы көҙгө миҙгелдән тотоп алынған бәләкәй генә бер күренеш аша үҙенең күңел торошон сағылдырған булһа, Х. Назар иһә көҙгө тәбиғәтте иҫ киткес матур итеп тасуирлап, үҙенең «Күп нәмәләр миндә – тәбиғәттән» тигән таныуын тағы бер тапҡыр раҫлап ҡуйған. Биш строфанан торған был шиғырҙан бында икеһен генә булһа ла килтермәй сарам юҡ:

Иҫтәлектәргә бирелеп,
Йылға әкрен, тын аға.
Ул йоҡа боҙ-күҙлек аша
Ҡарай хәҙер донъяға.

Бәҫ, һарылып, һырғаларын
Таға шыйтыҡ талдарға.
Ҡар елдәре, өйөрөлөп,
Һуҡлығалар туң ярға.

Хәсән Назар Мостай Кәрим традицияларына ла һаҡсыл. Маҡсат итеп ҡуйһаң, уның шиғриәтендә әҙәбиәтебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе донъя күләменә алып сыҡҡан ил ағаһының эҙҙәрен байтаҡ ҡына табырға булыр ине. Күҙгә бәрелеп торған «Аға һыуҙар...» һәм «Мостай Кәримгә» тигән шиғырҙар хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ.

«Мостай Кәримгә» – күләмле шиғыр. Унда Хәсән Назар стиленә хас бер үҙенсәлек – һанаулы, бик урынлы ҡулланылған һүҙҙәргә тос фекер төрөп биреү маһирлығы – күҙгә айырыуса ныҡ ташлана. Уҡыусыға еткерергә теләгән фекерен тәфсирләп тормайынса, һүҙен ҡырт итеп киҫеп тә ҡуйырға мөмкин, сөнки былай за бөтәһе лә аңлашыла. Мостай Кәрим ижады менән әҙме-күпме таныш кешелә был шиғыр заманыбыҙҙың аҡыл эйәһе менән ғорурланыу тойғоһо уятмай ҡалмайҙыр, моғайын. Шиғырҙы бикләп ҡуйған һуңғы строфала бер ҡасан да иҫкермәй торған тәрән мәғәнә ята:

Ябай итеп кенә әйтер инем:
Күңел бит ул – ҡайҙа тиклем осмай!
Шекспирҙы беләбеҙ беҙ,
Әммә
Ҡәҙерлерәк үҙебеҙҙең Мостай.

Хәсән Назарҙың «Назар Нәжмигә» тип аталған шиғыры ла бар. Күләме яғынан ул өҫтә һүҙ барған шиғырҙан ике тапҡырға бәләкәйерәк, әммә йөкмәткеһе, эшләнеше, уға һалынған йөрәк йылыһы менән – бер үк бейеклектә. Шағир тигән һүҙҙең уртаҡлыҡ исеменән яңғыҙлыҡ исеменә әйләнеп китеүе лә күп нәмә тураһында һөйләй. Был шиғырҙан бер генә строфаны ла, бер генә юлды ла, хатта бер генә һүҙҙе лә алып ташлармын тимә – бөтәһе лә үҙ урынында, үҙ ролен үтәй. Түбәндәге юлдар менән кем генә бәхәсләшә алыр икән:

Йыр тыумаһа, шиғыр яҙылмаһа,
Нишләр күңел? Таштай ул ҡатыр.
Шундай илаһи моң һиндә, Шағир,
Таштарҙы ла хатта илатыр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, Х. Назарҙың ижад багажында «Күкрәй күктәр...» исемле шиғыр ҙа һаҡлана. Ул ҙур түгел, бында тулы килеш күсерһәк тә була:

Аяҙ көндө күк күкрәтте улар...
Ни сәбәптәр ҡубарылыш өсөн?
Икеһе лә яҡын. Бүленеп булмай.
Яраштырыр инем, етмәй көсөм.

Икеһе гүйә күктең ике ҡыты.
Ҡаҡлығышты уттар... Тетрәй күктәр...
Күктәр килер ипкә, йәшене тик
Өсөнсөгә – кемгә тейеп үтер?

Кеше менән кеше араһын боҙоуға ҡарағанда, уны яйға һалыу ғәйәт ауырыраҡ, күп осраҡта хатта мөмкин булмаған хәл икәнлеген киҫәтеүсе шиғыр был. Бер үк ваҡытта, әгәр низағ арҙаҡлылар араһында тыуһа, уның айырыуса аяныслы һәм күңелһеҙ күренеш булыуына ишара ла.

«Асманға ашыу»ҙағы «Ил–кәүемдә», «Төйәгем», «Мөхит» тигән бүлектәр, әйтерһең дә, Хәсән Назарҙың тәүге ике йыйынтығынан үҫеп сыҡҡандар ҙа, уларҙы төрлө йылдарҙа яҙылған яңы шиғырҙар иҫәбенә һиҙелерлек байытҡандар. Ә бына «Ижад» һәм «Моң» тигәндәре башҡасараҡ тәьҫир ҡалдыра. Был бүлектәргә ингән шиғырҙарҙың ҡайһы берҙәрендә автор йәнә Назар Нәжмигә яҡыная. Әйткән һүҙ бушҡа яңғырамаһын өсөн, уларҙың бер нисәһенә туҡталып та китергә мөмкин.

Уларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып та китергә мөмкин, тинем дә, уйға ҡалдым:алтмышҡа яҡын шиғырҙы (ҡарағыҙ әле, үҙе бер йыйынтыҡ бит!) үҙ эсенә һыйҙырған был бүлектәрҙән ҡайһыһын ғына айырып алырға икән? «Ижад» тигән бүлектә һүҙ – башлыса шиғриәт һәм шағирҙар тураһында. Ундағы шиғырҙарҙың ҡайһыһына ғына күҙ ташлаһаң да – тапҡыр һүҙгә төрөп бирелгән үткер фекергә юлығаһың. «Шиғыр – дәрес түгел, йән һыуһыны, хирес түгел уға һәр кем дә», – тип башлай автор ике генә строфанан торған «Шиғыр» исемле әҫәрен. Үҙ-

үҙе менән һөйләшкәндәй итеп, «Ә нимә ул шиғыр?» тигән һорау ҡуя ла, «Рухты тотор аҡыл бит ул, моң ул, ‹...› барыһынан элек ул – яҙмыш», тип яуап ҡайтара.

Әҙәбиәт донъяһында үҙ баһаһын, үҙ урынын белеп йәшәгән һәм ижад иткән, яһиллыҡты, яһалмалыҡты, яйлашыуҙы ене һөймәгән шағирҙы күҙ уңында тотоп, «Йырлаһа, башлап йырлай ул...» тигән шиғырын автор бына ниндәй юлдар менән тамамлай:

Нишләйһең, шулай тыуған ул –
Урталыҡ юҡ, ваҡлыҡ юҡ.
Еңел түгел уға, әммә
Ике төрлө хаҡлыҡ юҡ.

«Шиғыр яҙҙым», «Ерҙә ҡала иман», «Йырлай төн», «Шиғриәтем», «Был һыналған инде...», «Рәхмәт, Ваҡыт!», «Өлөшсөләргә», «Һағайыу», «Мин – шағир, тип кенә...», «Көнө көтә», «Көслөгә ул һәр саҡ дәү эйәрсен...», «Бар ул беҙҙә...» тигән шиғырҙар үҙҙәренең үтә лириклығы менән айырылып торалар. Лирик герой артында шағир үҙе баҫып торғанлығы ап-асыҡ. Был шиғырҙарҙа, бер яҡтан, шағирҙың ижад лабораторияһы бер аҙ асылып ҡуйһа, икенсе яҡтан, уның эстетик талаптары сағылып китә. «Шиғыр яҙҙым»да, мәҫәлән, шиғриәт алдына ҡуйылған юғары талап шағирҙың ижад лабораторияһы аша кәүҙәләндерелә: яңы ғына донъяға килгән шиғырының әлегә бөтә яҡлап та камил түгеллеген күреп, ул: «Һүҙ сәнғәте! Камиллыҡты эҙләүҙәр – һиндер инде», тиергә мәжбүр.

«Шиғриәтем», «Был һыналған инде...», «Рәхмәт, Ваҡыт!» – «Шиғыр яҙҙым»дың дауамы шикеллерәк яңғырай. Тәүгеһендә автор «Шиғриәтем! Шыҡһыҙ тормошомда илһам үрҙәренә күтәрҙең» тигәнерәк ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерһә, икенсеһендә, һүҙ сәнғәтен күҙ уңында тотоп, «Һин донъяға асаһың үҙеңде, мин донъяны асам үҙемдә», тип белдерә. «Рәхмәт, Ваҡыт!»та авторҙың уй-теләктәре уғата ла асыҡлана төшкән һәм тәрәнгәрәк йүнәлгән: «Шиғриәтем минең – тормош моңо, йырҙарымда яҙмыш яҙғаны»; «Яҡшатланыу түгел, яҙҙым һәр кем яҡшы атҡа, тиеп, атланһын».

«Ерҙә ҡала иман», «Өлөшсөләргә», «Һағайыу» тигән шиғырҙар ҙа бер-береһенә ауаздаштар. Уларҙа хатта автобиографик һыҙаттар ҙа ярылып ятҡандай.«Ерҙә ҡала иман»дың лирик геройы, мәҫәлән, башта, «Малтабарлыҡ менән мас булманым, хас булманы миңә яранлыҡ»,

«Тән йәнселгән, йән сәнселгән саҡта халыҡ йырын тыңлап һауыҡтым», тип, үҙе менән таныштыра ла, һуңынан һүҙен бындай юлдар менән тамамлап ҡуя:

Олоһонан, кесеһенән ерҙә
Сер сисерҙәй дуҫтар бар әле.
Фани донъяларҙың табуттары
Мин һыйырлыҡ түгел, тар әле.

Ерҙә ҡала иман. Йырҙар ҡала.
Мин дә алып китмәм ҡәбергә.
Борсолмағыҙ, өлөш бүлеүселәр.
Борсолмағыҙ әле хәҙергә.

Өс кенә строфанан торған «Өлөшсөләргә» тигән шиғыр беҙҙе яңынан «Күп нәмәләр миндә – тәбиғәттән»гә алып ҡайта. «Юғары рух тәбиғәттән шағирҙа» тиелә бында. Өлөшсөләргә мөрәжәғәт итеп, автор бына нимә ти: «Көн күрмешем?.. Ил күргәнде күрермен, Хоҙай айырмаһын берүк милләттән».

«Һағайыу» тигән шиғырында автор «Шиғриәт бит уҙышыуҙар түгел» тип иҫкәртһә, «Һүҙ сәнғәте! Һин бер тылсымлы сер...» тип һоҡлана ул «Мин – шағир, тип кенә...» исемле шиғырында. Ләкин, күп нәмәләр тәбиғәттән булһа ла, «тылсымлы сер» тиҙ генә, еңел генә асылмай шул:

Нисек яҙыла тип һорамағыҙ,
Ысыны шул, һис тә көлмәйем:
Иҫкеләрҙең сере – үҙҙәрендә,
Нисек килер яңыһы – белмәйем.

Шуға ла, көслөгә эйәреп, уның күләгәһенә йәшеренеп йөрөүҙе һис кенә лә үҙ итмәй ул.

Н. Нәжми ижадында үҙ эҙҙәрен ҡалдырған А. Пушкин, М. Лермонтов, Ғ. Туҡай, Ш. Бабич, В. Маяковский, С. Есенин, Х. Туфан, А. Твардовский кеүек шағирҙарға Х. Назар за битараф түгел. Уның ижад багажында был шағирҙарға бағышланған шиғырҙарҙы йыш ҡына осратырға мөмкин. Шулар араһынан береһенә генә – «Рус тройкаһы» тигәненә генә – туҡталып китергә иҫәп. Уның исеме үк шиғырҙың оригиналлеге хаҡында һөйләп тора. Рус халҡының арҙаҡлы өс улын – Пушкинды, Не-

красовты һәм Есенинды – автор «рустың шиғриәт тройкаһы» тип атай һәм рус халҡының милли рухын уятыуҙа улар күрһәткән физаҡәрлек һыҙығ өҫтөнә алына. Образлы сағыштырыуҙар аша, шиғырҙа шаҡтай ҙур һәм ҡатмарлы мәсьәләләр күтәрелә. «Русь... Һин ҡалҡанмы, ҡапҡанмы?» тигән һорау ҡуйыла унда. Уға өҙөп кенә объектив яуап биреү еңел түгел, әлбиттә. Әммә авторҙың «Хакимдар түгел, шағирҙар Рәсәйҙе яраттыра» тигән һығымтаһы менән килешмәү мөмкин түгел.

Егерменсе быуатты Хәсән Назар «Шиғриәт – ризалыҡ донъяға» («Ағиҙел», 2000, 6-сы һан) тип аталған шиғри шәлкем менән оҙатып ҡуйҙы ла, яңы быуатты «Тарихтарҙан уҙыр антыбыҙ» («Ағиҙел», 2001, 11-се һан) тигән яңы шәлкем менән асып ебәрҙе. Быуат башында ул үҙенең 60 йәшен дә билдәләне. Был юбилей айырыуса «Ағиҙел» биттәрендә киң яҡтыртылды. Журналдың 2002 йылғы 1-се һанында «Талапсан талант» (Риф Әхмәҙиев), «Кәләмендә ҡөҙрәт бар» (Рим Исхаков), «Рух илсеһе» (Земфира Аҡбутина) тигән бик матур, авторҙарҙың йөрәк йылыһы һалып яҙылған мәҡәләләр, шағирҙың унлап шиғыры баҫылды. Хәсәндең шәхси тормошон яҡтыртҡан фотолар ҙа журналдың был биттәренә үҙенсә бер йәнлелек өҫтәне.

Юбилейҙан һуң да Х. Назар «Ағиҙел» биттәрендә күренгеләп торҙо. Бер-бер артлы «Ғүмер – иҫтәлектәр дәфтәре» (2003, 2-се һан), «Бурыс алдан бара» (2004, 11-се һан) тигән шиғри шәлкемдәрен тәҡдим итте уҡыусыға. Ләкин «Ғүмер һәм дәүер» тип аталған яңы китабы сыҡҡансы нишләптер тыныбыраҡ калды. «Ғүмер һәм дәүер»ҙән һуң тағы тынлыҡ урынлашты. Ҡаҙҙа 70 йәше лә шиғырһыҙ ғына, Рауил Бикбаевтың «Шағир яҙмышы» («Ағиҙел», 2012, 1-се һан) тигән мәҡәләһе менән генә билдәләп үтелде, буғай. Ниһайәт, күркәм юбилейына – 75 йәшенә – яҡынлашҡанда ул «Заң үҙгәрә, таң үҙгәрмәй» («Ағиҙел», 2016, 7-се һан) тигән шәлкеме менән үҙенең донъяла барлығын иҫкәртеп ҡуйҙы.

«Заң үҙгәрә, таң үҙгәрмәй»гә ингән бөтә шиғырҙар ҙа, әүәлгесә, мин Хәсәндеке, мин Назарҙыҡы, тип, ҡыҫҡырып торһалар ҙа, иғтибарымды нығыраҡ тартҡан «Кәҙерле» тигән шиғырға ғына туҡталып китәм. Минең ҡарашымса, шағир был әҫәрендә туҡһанынсы йылдар башында яҙылған «Күкрәй күктәр» тигән шиғырҙағы үҙен борсоған һорауҙарға яуап эҙләүен дауам итә. Назар Нәжмиҙең «Урал» поэмаһы тураһында уйланып, «Бар асылы менән башҡорт ҡына яҙа алыр ине «Урал»ды тиһә, Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә»һен күҙ уңында тотоп, «Яҙырҙармы тағы был ҡәҙәре башҡорт рухын биргән әҫәрҙе?» ти,

ғорурлыҡ тойғоһо кисереп. Шиғырҙың түбәндәге ике строфаһында әйтелгән фекер менән бер кем дә бәхәс ҡормаҫ, тип уйлайым:

Сикләнеүҙән әммә өҫтөн булды
Халҡымдың был аҫыл заттары.
Ҡолас йәйҙе Мәскәү урыҫы һәм
Ҡолас йәйҙе Ҡазан татары.

Остаздарҙың һүҙе был юҫыҡта
Аманатлы булды, нәҙерле:
Үҙ бәҫеңде үҙең белһәң генә,
Бүтәнгә лә һин бит ҡәҙерле.

Йылдар ҙа, йылдар менән бергә ғүмер ҙә үтә тора, шул мәлдә шиғырҙар ҙа тыуа. Ара-тирә тыныбыраҡ торған саҡтары ла булғылаһа ла, етмеш бишен туйлаған Хәсән Назар багажында ла улар хәҙер байтаҡ булып китте. Шағирҙың бөтә әҫәрҙәрен дә бергә туплаған китап сығарырға ваҡыт етмәне микән? Ул китап, әгәр унда Хәсәндең шиғырҙары менән поэмалары ғына түгел, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт мәсьәләләренә бәйле публицистик сығыштары һәм тәнҡит мәҡәләләре лә урын алһа, ҡалын ғына бер том, йәйһә йыйнаҡ ҡына форматлы ике том хасил булыр ине. Әгәр өшө хыял тормошҡа ашһа, публицистик сығыштарға ла, әҙәби тәнҡит мәҡәләләренә лә ҡәләм төртөлөргә тейеш түгел, тип иҫәпләйем. Сөнки уларҙың бөтәһе лә яҙылған һәм баҫылып сыҡҡан осорҙо сағылдырыуҙары менән ҡәҙерле.

Әйтергә теләгән һуңғы һүҙем: Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән дәрәжәле исем Хәсән Назарҙың ишеген ҡаға кеүек. Әйтерһең дә, ул был шағирҙағы күп нәмәләрҙең тәбиғәттән һәм халыҡтан икәнлеген һиҙенгән. Мәҡәләмде (Хәсәнгә оҡшармы ул, юҡмы) түбәндәге юлдар менән тамамлап ҡуйырға булдым:

Хәсәнһең һин, ләкин Туфан түгел.
Назарһың һин, тик Нәжми түгел.
Әммә иң мөһиме – Туфан менән
Нәжмиҙе берләштергән йән һин.

2016, ноябрь

Йөкмәткеһе

Назар Нәжми ижадын фәнни нигеҙҙә өйрәнеү
мәсьәләһенә ҡарата 3
Үҙенә тоғро шағир (Марат Кәримов) 16
«Беҙ бит әле һалдат улдары...» (Әхмәҙин Әфтәх) 42
«Ямаулы кейем кейһәк тә, ямауһыҙ ине йөрәк»
(Риф Мифтахов) 60
«Ғүмер юлымдан киләмен тик үҙемдең эҙ менән...»
(Сафуан Әлибай) 78
«Сабырлыҡтың төбө – һары алтын» (Гөлнур Яҡупова) 94
«Ә шулай ҙа йөрәк ниҙер көтә...» (Рәмил Йәнбәк).......................... 110
Халыҡ шағиры – хаҡлыҡ һағында (Рауил Бикбаев) 129
Аҫыл икән затың – һүҙең булһын алтын (Шағирәләребеҙҙең
быуат башындағы ижадына бер ҡараш) 152
Шағирҙың рухи донъяһы (Рауил Шаммас).................................... 229
«Донъя – нағыш, ә күңелдә – һағыш» (Мәүлит Ямалетдин) 245
Йылы һүҙ – йән аҙығы (Марис Нәзиров) 261
Назар Нәжми һәм татар әҙәбиәте 278
Назар Нәжмиҙең эстетик ҡараштары 299
«Ҡабул итсе, тормош, ҡосағыңа...»
(Әлфиә Әсәҙуллина).. 328
Башҡорт та ул, россиян да (Ирек Кинйәбулатов) 347
«Бар матурлыҡ минең ҡосаҡта...» (Муса Сиражи)........................ 370
«Аҡ көндәрҙән генә тормай донъя...» (Фәнил Күзбәков) 393
«Бар күңелем – йырҙарымда...» (Тимер Йосопов) 413
«Яныр инем артыш булып» (Мәрйәм Күсмәева) 438
Әнисә сонеттары 456
Шағирҙар дуэты (Х. Юлдашев һәм Т. Искәндәриә)....................... 479
Күп нәмәләр унда – тәбиғәттән (Хәсән Назар) 502

Литературно-художественное издание

Хабиров Ангам Хайбрахманович

НА СТЫКЕ ВЕКОВ

В 2 томах

Том 2
Статьи
(на башкирском языке)

Әҙәби-художестволы баҫма

Хәбиров Әнғәм Хәйбрахман улы

БЫУАТТАР ҠАУЫШҠАНДА

2 томда

2-се том

Мәҡәләләр

Редакторы *Р. Ә. Сиражитдинов*
Компьютерҙа верстҡаланы *Е. Т. Хомякова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 02.10.2018. Форматы 60x84 1/16.
«Снегурочка» офис ҡағыҙы. «TimesNewRoman» гарнитураһы.
Ризографта баҫылды. Шартлы баҫма таб. 30,23. Иҫәп-баҫма таб. 23,53.
Тиражы 100 дана. Заказ № 28.

ДАФУ «Башҡорт энциклопедияһы»
450006, Өфө ҡ., Революцион урамы, 55. Тел.: (347) 250-06-72.
http://www.bashenc.ru
E-mail: gilem@bashenc.ru

ЯСЙ «“БашАкадемКнига” мәғлүмәт-ағартыу үҙәге» типографияһында баҫылды.
450006, Өфө ҡ., Революцион урамы, 55.